с(баш к)
б83

МӘРЙӘМ БУРАҠАЕВА



АРЕБЫМАҠ

ЛИСТОК СРОКА ВОЗВРАТА

КНИГА ДОЛЖНА БЫТЬ
ВОЗВРАЩЕНА НЕ ПОЗЖЕ
УКАЗАННОГО ЗДЕСЬ СРОКА

Колич. пред. выдач. .....

МӘРЙӘМ
БУРАҠАЕВА

АРҒЫМАҠ



МӘРЙӘМ
БУРАҠАЕВА

АРҒЫМАҠ

Әҙәби-публицистик әҫәр



Магнитогорск – 2015

УДК 82-43=512.141
ББК 84(2Рос=Баш)6-4
Б91

000018770

Буракаева, М. С. Аргамак. — Магнитогорск, 2015.

-168029-
ГБУК
Национальная библиотека
имени Ахмет-Заки Валиди
Республики Башкортостан

Яҙыусы, педагог һәм журналист Мәрйәм Бураҡаеваның мемуар-эссе жанрында яҙылған был китабы ете бүлектән тора. Автор аң, рух, ғәм, ырыҫ, моң, аҡыл һәм ҡот — бына ошо ете изге төшөнсәне йәшәүенең асылы итә алған кеше генә арғымаҡты — үткәндәр аманатына тоғролоҡто һәм яҡты киләсәккә ынтылышты кәүҙәләндереүсе мифологик йән эйәһен эйәрләй алыр, тигән фекер үткәрә.

ТП - 092/05

ISBN 978-5-7114-0507-8

© М. С. Буракаева, 2015

Баш һүҙ урынына

Туғаным! Минең йәштәшемме, әллә балам йәшендәһеңме, бәлки, ейәндәремдең тиңдәшеһеңдер! Нисә йәштә булһаң да, мин һине бик яратып, яҡын итеп, т у ғ а н ы м, тип өндәшәм.

Туғаным! Дауылдарҙа, бурандарҙа, юлдан яҙлығып аҙашҡан кеше кеүек, аптыранып, үҙеңә тыныслаңыр урын, күңел бушатыр серҙәш таба алмай йөрөгәнеңдә, минең ошо китабымды уҡып сыҡҡас, зиһенең яҡтырып, башыңда сыуалған уйҙарыңдың көйләнеп китеренә, күңелендә өмөт осҡоно ҡабынырына ышанғы килә.

Кешене күңел донъяһында барған аңлашылмаусанлыҡ аптырандыра. Күҙгә күренмәгән ошо донъяла аҡыл менән тойғо, үҙ теләгең менән башҡаларҙың кәңәше, ымһыныу менән мохтажлыҡ, тормош ихтыяжы менән хыялыңдағы ынтылыш араһында һәр саҡ алыш бара. Күңел донъяһы — бөтөн булмышты үҙенә буйһондорған ғәжәп үҙенсәлекле үҙ аллы донъя. Унда эҫе селләлә дауыл ҡубыуы ла, ете төн уртаһында ҡапыл ҡояш балҡып китеүе лә, ыжғыр елдәр ҡоторонған мәлдә, һандуғастар һайрап, кәкүк саҡырыуы ла ихтимал.

Күңел донъяһын аңлауы ла, яйға һалып ебәреүе лә ҡыйын. Әммә тормоштоң именлеге лә, тыныслығы ла тап уның көйләлөгөнә бәйләнгән. Кеше шуға ла ғүмере буйы ошо эске донъяһын яйға һалырға ынтыла. Бөтөнләй икенсе төрлө, хатаһыҙ, яңылышыуһыҙ, аҙаҡ үкенескә ҡалмаҫлыҡ итеп йәшәп китеү тураһында хыяллана, әҙерләнә, төҙәлә башлау сәғәтен билдәләй, көнөн тәғәйенләй. "Бына, — ти ул үҙенә үҙе, — фәләнсә йәшем генә тулһын, тыуған көнөмдө үткәрәм дә яңыса йәшәй башлайым. Үҙгәрәм. Юҡ, хатта йәшем тулғанды ла көтөп тормайым, ошо

дүшәмбенән башлайым," — тип маҡсат ҡуя. Был тәбиғи. Кеше үҙен аңларға, хаталарын төҙәтергә тырыша, камиллыҡҡа, йәғни әүлиәлеккә, ынтыла. "Үҙен белгән — әүлиә," — ти халыҡ. Уның фекеренсә, әүлиәлек – ул үҙеңде тотош белеү, күңел донъяһындағы үҙгәрештәрҙе аңлау, кәрәк саҡта үҙең теләгәнсә яйға һалып ебәрә алыу, бер ваҡытта ла яңылышмау, иң аҡыллы, иң камил кеше булыу. Әммә ҡайһы берәүҙәрҙең был теләге ҡоро хыял ғына булып юғала, улар, ғүмерҙәренең аҙағынаса, үҙҙәрен үҙҙәре эшкә егеп, ихтыяр көсөн туплай алмай яфалана. Икенселәре иһә, үҙҙәрен ҡулға алып, эске энергияларын уятып ебәреп, ғәжәйеп ҡеүәткә эйә булып алалар һәм еңеүҙәрҙән-еңеүҙәргә, уңыштан-уңышҡа өлгәшеп юғары күтәреләләр. Ундайҙар үҙҙәрен бар иткән Тәбиғәт һәм Кешелек донъяһы, тыуған ил һәм туған тел, моң һәм илһам биргән, төйәкле иткән һәм ҡанат үҫтергән Халҡы алдында бурысын үтәп, киләсәккә яҡты эҙ, нәҫелдәре дауамына саф йән ҡалдыралар.

Тимәк, үҙҙәренә яҙған ғүмерҙәрен Ысын Кеше булып йәшәп үткәрәләр.

Ә быға ирешер өсөн иң элек үҙеңде аңларға, белергә тырышырға кәрәк. Һәр кеше өсөн иң ауыр бурыс тап ошо ла инде.

Иң мөһиме лә шул.

Үҙеңде ни тиклем яҡшыраҡ белһәң, шул хәтлем маҡсатыңа тиҙерәк өлгәшерһең, аҙыраҡ хаталанырһың. Тәбиғәттән бирелгән һәләтеңде тотош асыу өсөн мотлаҡ булған ике шартты үтәүҙә – тормошоңда иш һәм һөнәр һайлауҙа яңылышмаҫһың. Һөнәреңде дөрөҫ һайлаһаң – алған белемең тәбиғәт тарафынан ҡаныңа һалынған оҫталығыңды артабан үҫтерә барасаҡ, туҡтауһыҙ тәжрибә тупларға, камиллашырға тура юл асасаҡ. Ғаилә ҡороу өсөн ишеңде дөрөҫ һайлаһаң – тормош юлдашың һинең тәбиғәттән килгән холоҡ-фиғеленде дөрөҫ аңлар, һине үҙенсә үҙгәртеп алырға маташмаҫ, ә нисек барһың – шулай ҡабул итер, һин һайлаған маҡсатты уртаҡлашыр; бер үк хыял менән яныраһығыҙ, бер-берегеҙҙең яҙмышына ыңғай йоғонто яһарһығыҙ, татыу ғаилә ҡорорһоғоҙ, тимәк, киләсәк өсөн бәхетле балалар тәрбиәләрһегеҙ.

Үҙеңде яҡшыраҡ аңлаған һайын, сәләмәтлегеңә ыңғай йоғонто яһарлыҡ тәьҫораттар күберәк булыр.

Үҙен аңлаған, үҙ асылын тапҡан кеше оло маҡсат менән йәшәй. Оло маҡсат менән йәшәгәндәр тормоштоң ығы-зығыһынан өҫтөн була. Ә был иһә йәшәйеш өсөн иң ҙур ҡаҙаныштарҙың береһе. Ығы-зығы кешене бөтөрә, сәләмәтлекте ҡаҡшата, ғүмерҙең иң матур минуттарын, хатта йәшәү мәғәнәһен, урлай. Халыҡ әйткәнсә, ат тауға һөрлөкмәй, түмгәккә һөрлөгә.

Һеҙгә тәҡдим иткән китабым йәшәү мәғәнәһен билдәләүҙә ярҙамсы булыр тип өмөтләнәм. Үҙ ғүмерем эсендә осраҡкан, аралашҡан зирәк, яҡты аңлы, аҡыллы кешеләрҙең кәңәштәренән, ғүмер ағымында юлыҡҡан фәһемле ваҡиғаларҙан, үҙем өлгәшкән уңыштар һәм башымдан үткән хаталарҙан, ошо хаталар менән көрәшер һәм төҙәтер өсөн уҡылған китаптарҙан, иң мөһиме – халҡыбыҙ аҡылы һалынған тормош һабаҡтарынан тупланды был китап.

Ете бүлектән торорға тейешле был әҫәрҙе АРҒЫМАҠ тип атауым осраҡлы түгел.

Арғымаҡ ат юл башлар,
Аҡыллы ир ил башлар, - ти халыҡ мәҡәле.

Ә нимә һуң ул АРҒЫМАҠ? Юл башлар атҡа бирелгән был атама берәй нәмә аңлатмаймы икән? Ни өсөн серле ете хәрефтән тора? Ни өсөн ул һүҙҙе әйтеү менән, күңел ҡанаты елпенеп ҡуя? Атаманың мәғәнәһенә ныҡлабыраҡ иғтибар итһәк, күңел күҙе менән байҡау яһаһаҡ, ысынлап та, ябай ғына һүҙ түгел АРҒЫМАҠ! Ул һиңә, миңә, халҡыбыҙға, киләсәккә юл башлаусы серле һүҙҙәрҙән хасил булған.

Аң
Рух
Ғәм
Ырыҫ
Моң
Аҡыл
Ҡот

Бына ошо ете төшөнсә беҙгә үҙебеҙҙе аңлауға юл башлар, сөнки ошо ете төшөнсә эсенә һыйған мәғәнәгә эйә булыу арҡаһында Кеше, Кешелек донъяһы, халыҡ, милләт барлыҡҡа килгән, һәм йәшәйеш хасил булған. Әммә бөгөнгө көндә ошо төшөнсәләрҙең бер аҙ ҡаҡшауы һиҙелә.

Халҡыбыҙҙың ғәжәп фәлсәфәүи эпостарының береһе "Заятүләк менән Һыуһылыу"ҙа Һыу батшаһы Заятүләккә былай ти:

— Бына һиңә бер АРҒЫМАҠ. Шуның ялына тотон. Иллә-мәгәр һыуҙан сыҡҡанда, артыңа әйләнеп ҡарама.

Бөгөн халҡыбыҙ, Заятүләктең һыуҙан сығып барған мәле кеүек, хәл иткес осор кисерә. Әммә туҡтауһыҙ артҡа боролоп ҡарау хәүеф

тыуҙыра. Әгәр беҙ халҡыбыҙҙың ниндәй мәл кисереүен аңлап, заманда ҡалышмай, алға ынтылһаҡ, үткәндәргә фәкәт аҡыл, фәһем һәм һабаҡ алыу, үткәндәрҙе бөгөнгөгә хеҙмәт иттереү өсөн ҡайырылып ҡараһаҡ, Арғымаҡтың ялынан эләктереп алып атланырбыҙ. Ул саҡта:

Аңыбыҙ яҡтырыр,
Рухыбыҙ ҡанатланыр,
Ғәмебеҙ уяуланыр,
Ырыҫыбыҙ ишәйер,
Моңобоҙ дәртләнер,
Аҡылыбыҙ зирәкләнер,
Ҡотобоҙ нурланыр.





АҢ

Халҡыбыҙҙа Аң тигән һүҙ ике төрлө мәғәнәне иңенә һалған. Әммә ике осраҡта ла Аң кешенең донъяны танып-белеү кимәленә, шул белемде йәшәйешкә ураҡлаштырып файҙалана алыуына, тәрбиәһенә, намыҫына һәм тоя белеү ҡеүәһенә бәйләнгән.

Беренсе мәғәнәһендә аң — ул аҡыл, зиһен, белем аша үткәнде, бөгөнгөнө, киләсәкте тоташтырыусы.

Икенсе мәғәнәһе күңел тойомо менән бәйле һәм Кешенең Эске донъяһын билдәләй.

АҢДАН ҠАНҒА, ҠАНДАН ЗАҢҒА, ти халыҡ. Аң үҙенән-үҙе бар булмай. Ул нәҫелдән нәҫелгә ҡан аша күсә килә. Аң һинең кемгә оҡшауыңа, ҡайһы нәҫелдән булыуыңа, ниндәй мөхиттә йәшәүеңә нығ бәйле.

Аң ҡан аша күсә килгәс, уны үҙгәртеп буламы һуң?

"Урал батыр" эпосында Урал батыр ағаһы Шүлгәнгә былай ти:

Тыумыштан уҡ юҡ булған
Һинең ыулы йөрәгең.
Таш ирер, ул иремәҫ,
Яҡшылыҡты тиңһенмәҫ,
Кешеләрҙе ишһенмәҫ.
Кешеләрҙе һөйһәң, һин
Бергә йәшәп, ил ҡороп,
Батыр булам, тиһәң һин,
Кешеләргә дошманды
Үҙеңә ҡаршы яу һана,
Дошман ҡанын күл итеп,
Битең йыуыр һыу һана.
Кешеләргә яу асып,

Буштан-бушка ҡан ҡойоп,
Яуызлыҡты дан һанап,
Яҡшылыҡты хур һанап,
Олпатланып, маһайып,
Кәперәйгән тәнеңдә
Рәхәтләнгән йәнеңде,
Карайып бөткән ҡаныңды,
Үткәнеңде уйлатып,
Йөрәгеңде һыҙлатып,
Тәнең һыҙлап ҡарайһын,
Йәнең һыҡтап агарһын,
Йөрәгеңдәге ҡара ҡан
Кибеп ҡабат ҡыҙарһын,
Шунда кеше булырһың,
Илдә бергә ҡалырһың,
Яуҙа батыр булырһың.

"Урал батыр" эпосында әйтелгән фекергә ҡарағанда, холоҡ-фиғелде үҙгәртеү өсөн, насар ҡанды тотош киптереп, яңынан ҡыҙартырға кәрәк. Ғәмәлдә ул мөмкин түгел. Ә үҙгәрергә, үҙенең хаталарын аңлап яңыса йәшәй башларға теләгән кеше ни эшләргә тейеш һуң? Аңды тәрбиә аша үҙгәртеп буламы?

Кешелек донъяһында һәр халыҡта быуындан быуынға күсә килгән, камиллашҡан ҡиммәтле һәм ғәйәт әһәмиәтле тәрбиә ҡанундары бар. Ошо ҡанундар нигеҙендә һәр халыҡ үҙенең киләсәген үҙ традицияларында тәрбиәләй. Шунлыҡтан, күп һанлы милләттәрҙән башлап, Филиппин утрауҙарында йәшәгән һәм 50-гә яҡын ғына кешенән торған иң аҙ һанлы тасадайҙарға тиклем үҙ традицияларын һаҡлап килә.

Традицияларҙы тәрбиә менән биреп булғас, бәлки, холоҡ-ғәҙәттәрҙе лә үҙгәртеп булалыр?

Ә холоҡ-ғәҙәттәрҙе тәрбиә менән үҙгәртеп булһа, ни өсөн бер үк ғаиләлә төрлө холоҡло балалар үҫә? Ни өсөн хатта игеҙәк балаларҙың да холоҡтары төрлө була? Уларҙы ҡайһылай ғына тәрбиәләмә – барыбер ҡандарына һалынған холоҡтары үҙ яғына ҡайыра. Ни өсөн бынамын тигән маҡтаулы атай-әсәйҙең балаһы уларҙың йөҙөнә оят килтерерлек холоҡло булып киткән йәки, киреһенсә, балаһының киләсәге хаҡында бөтөнләй борсолоп та бирмәгән атай-әсәй ғаиләһендә бынамын тигән үҙаллы кешеләр үҫеп сыҡҡан осраҡтар ҙа бар һуң?

Нимә һуң ул аң? Үзгәрә торған төшөнсәме? Үзгәрмәй торғанмы?

Тормоштағы миҫалдарға, хәл-ваҡиғаларға күҙ һалайыҡ. Иң элек "аңһыҙ" тип аталған хайуандар донъяһынан үҙем күргән һәм ишеткән бер-ике миҫалға тукталайым.

Балаларымдың атаһы, ирем — Бураҡаев Диҡҡәттең тыуған ауылы Үрге Мотал (Көйөргәҙе районы) "киләсәкһеҙ" – "перспективаһыҙ" ауылдар исемлегенә индерелеп, мәңгегә юҡ ителде. 1960-1970 йылдарҙа ауылдың һуңғы кешеләре тырым-тырағай таралышып бөттө. Бер аҙҙары, шул иҫәптән Диҡҡәттең ҡайһы бер туғандары, "Холодный ключ" тигән ҡатнаш милләтле ауылға күсеп йәшәй башланы. Уны хатта ауыл тип тә атаманылар, "Ферма" тип кенә йөрөттөләр. Беҙ йәйгеһен унда йәшәгән туғандарға барһаҡ, эсебеҙ бошоп ҡайта торғайныҡ. Үрге Моталдың бынамын тигән традицияһы, үҙенә генә хас ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, йыр-моңо, урам көйҙәре юҡҡа сыҡҡан. Балалар рус мәктәбендә уҡый, туған телдәрен аңламай, русса ла йүнләп өйрәнмәгәндәр, берәй ҡатмарлыраҡ һорау бирһәң, йә башҡортса, йә русса яуап бирә алмай "че", тип күҙгә текләй ҙә торалар. Үҙ әсәһе менән туған телендә аңлашмаған бөтә балаларға хас булғанса, уларҙың да ҡарашында йылылыҡ — күңел нуры сағылмай башлаған. Балалар уйындары, бәләкәйҙәрсә йырлау-бейеү, күңел асыуҙың әҫәре лә ҡалмаған. Тик айырым ғаиләләр генә, ауыл ғәҙәтен тотоп, моталса йәшәп маташалар.

Диҡҡәттең атаһының бер туған ҡустыһы Фәсхетдин Бураҡаев (*миңә ҡайнаға була*) менән Ғәлиә еңгәйҙәргә килеп, хәл белеп, ҡунаҡ булып киткеләй инек. Ғәлиә еңгәй ғәжәп уңған, эшсән хужабикә. Аш-һыуы мул, түшәк-ҡаралтыһы таҙа, биш балаһы ла бөхтә кейенә, үҙе совхозда алдынғы бығау ҡараусы.

Йорт алдында бик матур баҡсалары бар. Унда алма төбөнә урындыҡ һалғайнылар. Бер көн урындыҡта ял итеп һөйләшеп ултырабыҙ. Эңер төшөп килә. Көтөү ҡайтҡан мәл. Ҡайнаға балаларына:

— Йүгерегеҙ, ана ҡарағыҙ — һыйыр тағы Мотал яғына һыпыртты, – тип ҡысҡырҙы. (*Халыҡ Моталдан күсенә башлағас, ҡайнағалар унан һыйыр һатып алғандар икән.*)

Фәсхетдин ҡайнаға балаларына йомош ҡушып ебәрҙе лә башлаған һүҙен дауам итте:

— Малды аңһыҙ, тиҙәр. Итерһең уларҙы аңһыҙ! Тәки онотмайҙар Моталды. Бына мин ғүмер буйы мал араһында эшләйем, Ғәлиә егерме биш йылдан ашыу бығау ҡарай. Малдың

аңы тураһында әллә нисә китап яҙырлыҡ. Кеше һымаҡ бит улар. Бөтәһен дә аңлап торалар. Имеш, мал уйлай белмәй, уларҙа ғәҙәт кенә, тиҙәр. Уйлайҙар, ҡайһылайыраҡ уйлайҙар әле улар! Ҡайһы саҡта әҙәм һынлы әҙәм башым менән үҙем аптырап ҡуям уларҙың аңына. Бына ошо һыйырҙы алғаныбыҙға хәҙер өсөнсө йыл, тыуған яғын һағынып ҡайта ла китә. Хатта бер тапҡыр башмаҡ булып бөткән элекке быҙауын да, йәш быҙауын да эйәртеп алып, өсәүләшеп киткәндәр Үрге Моталға. Үҙебеҙҙең элекке йорт урынына барып, элек һарай торған урында ятҡан булалар көйшәп. "Ҡуңыр буға" йыры буштан сыҡмаған ул, – тип, малдарҙың ҡулдан таныуҙарын, кешенең кәйефен һиҙеүҙәрен, бер һыйырҙан тыуған быҙауҙарҙың төрлө холоҡта булыуҙарын, инәһенең дә, үҙ быҙауҙарының холоҡтарына ҡарап, уларға ҡарата төрлө мөнәсәбәттә булыуын иҫе китеп һөйләне. Хатта быҙауын имеҙмәй һауған һыйыр һөтөнөң тәме үҙгәреүен дә телгә алды. "Кәйнәм килһә, ферма һөтө һалмағыҙ сәйгә, имеҙмәй һауған һыйырҙың һөтө татһыҙ була ул", — тигәнгә ышанмай торғайным, олоғая килә үҙем тәм айыра башланым," – тип, беҙҙең өсөн яңылыҡ асты.

— Фәсхетдин ҡайнаға, һыйырығыҙ, бәлки, Моталға ҡайтып ғәҙәтләнгәнгә генә шул яҡҡа ыңғайлап китә лә баралыр? — тип һорау бирәм. Үҙемдең ниәтем — тағы берәй ҡыҙыҡлы фекер әйтмәҫме тип көтәм.

— Башта мин дә шулайҙыр тип уйлағайным. Юҡ икән. Ул бит ашҡынып, баҡыра-баҡыра, башын болғай-болғай ҡайта. Элекке өй урынына бара, һарай торған ергә килә лә үҙәктәргә үтерлек итеп баҡырып ебәрә... Эйәреп барып күҙәткәнем бар. Хәс тыуған ерен һағынып ҡайтҡан кеше һымаҡ. Уларҙы күҙәтеп күҙҙәргә йәш тула хатта.

Был һөйләшеүҙә Диҡҡәттең ҡартатаһы Зыяйетдин Бураҡаев та, беҙҙе күрергә тип килгән Әбделхай ҡайнаға ла бар ине. Әбделхай ҡайнаға уның һүҙен йөпләп дауам итеп алып китте:

— Кешенән башҡа бөтә йән эйәһе лә аңһыҙ тигәнгә мин дә ҡаршы ул. Һин, Фәсхетдин мырҙам, йорт малын әйтәһең, ә бына ҡырҙағы йән эйәләрен ҡара. Уларҙы ла аңра тип әйтеп булмай бит. Нисек тәрбиәләнәләр аң? Ғәжәпкә ҡалыр миҫалдар байтаҡ. Зыяйетдин ағай, иҫеңдәме, бер йылы ауылға айыу бейетә килгәйне берәү, — тине лә, беҙгә ҡарап, — килен, Диҡҡәт ҡустым, тыңларға форсатығыҙ булһа, һөйләйем? — тип өндәште. (*Һоҡланырлыҡ эске әҙәп бар ауыл халҡында!*)

— Һөйлә, ағай, һөйлә. Беҙ ундай хәлдәрҙе ҡыҙығып тыңлайбыҙ ул, — тип ҡеүәтләп ебәрҙе Диҡҡәт.

— Элек ауылдан ауылға йөрөп мәҙәк күрһәтеүселәр күп була торғайны. Хәҙер ундай мәҙәктәр ҙә бөттө, яңылары ла юҡ. Айыу етәкләп ауылдан ауылға йөрөүсе бер кеше бар ине беҙҙең яҡта. Үҙе ҡулға эйәләштереп өйрәтеп алғайнымы икән — уныһын һорашҡан кеше юҡ, иллә-мәгәр: "Айыу бейетеүсе килгән!" — тигән хәбәр ишетелеү менән, халыҡ эркелешеп үрге мәсет эргәһенә йыйыла торғайны. Иркен, һыу өҫтө һымаҡ тигеҙ майҙан бар ине унда.

Әбделхай ҡайнағаның, үрге мәсет, тип телгә алыуы булды — Зыяйетдин ҡайным тәрән көрһөнөп ҡуйҙы. Ике күҙе лә тома һуҡыр ҡалған, туҡһанды үткән ҡайным — Дикҡәттең ҡартатаһы — кинйә улы Фәсхетдин менән киленендә ине. Күберәк ғүмерен өлкән ҡыҙы Фәтхиә бикәмдә Ермолаевкала үткәрә. Йәй көндәре ауыл тип килеүелер, күрәһең. Зиһене яп-яҡты, хәтере иҫ китмәле яҡшы ҡарт ине ул. Мин тәү килгән саҡта уҡ: "Ҡайһы йылға буйында үҫтең, йәш килен?" — тип һорашып, тыуған ауылымды әйткәс, Иҫәнғолда ҙур мәсет, ҡәҙимге билдәле баҙар булыуын телгә алды. Дикҡәттең һөйләүе буйынса, уның йәш сағын оҙон һомғол буйлы, бөркөт ҡарашлы, тарамыштары бүртеп, тимер сым һымаҡ ҡаты, бөтә тирә-яҡта ғәҙеллек яҡлаусы булып даны таралған бәһлеүән итеп күҙ алдына килтерә инем. Ә хәҙергеһен – туҡһанды ҡыуған ҡартты бөршәйеп, бәләкәйләнеп кенә ҡалған бер бабайҙыр тип уйлағайным. Әммә йәш сағындағы ғәйрәте әле лә үҙен таныта ине. Бына-бына һикереп тороп, суҡмарын ҡулына алып: "Ни эшләп ташлап киттегеҙ тыуған төйәгегеҙҙе, мөртәттәр? Бураҡаевтар нәҫеленән Сурағол ҡарт менән улы Мотал тигән олатайҙарығыҙ нигеҙ һалған бит уға!" — тип ҡыҫҡырып ебәрер ҙә, атҡа атланып, һайтылдап, Моталын ҡурсаларға сабып та китер һымаҡ ине уның ҡиәфәте. Кем белә, күҙе күрһә, бәлки, әле лә сыҙап ултырмаҫ ине! "Туҡһан йәштә лә былай буй ташламағас, ҡырҡ йәштәрҙә ниндәй булды икән бәһлеүән ҡарт?" — тигән уй үтеп киткәйне, уның ҡиәфәтенә, текә маңлайына, тура һынына ҡарап. Заманында Көйөргәҙе буйҙарында уҫаллығы һәм ҡарунлығы менән яманатлы даны сыҡҡан Шотт баярын судҡа биреп, еңеүгә ирешкән ҡарт тураһында: "Рус теленда сатнатып һөйләшә ине ул!" — тиҙәр ауылдаштары. Баяр тиклем баярҙы еңгәс, ышанырға була. Шотт баяр, Ермолаевкала төҙөткән спирт етештереү заводы өсөн картуф сәсеүлеген киңәйтеү маҡсатында, Мотал ерҙәрен алмаҡсы булған. Зыяйетдин ҡайным Ырымбур судында судлашып ерҙәрҙе кире ҡайтарып алған.

Уның Японияндан ауыл старостаһына рус теленда яҙған хаты ла һаҡлана. Һуғышта ятып ҡалған йәки әсир төшкән ирҙәрҙең

ҡатындарына балаларын бағыуҙа ярҙам итергә, рәйетмәҫкә тип хат яҙған. "Беҙ әсирҙә мәңге булмабыҙ", — тип иҫкәртеп тә ҡуйған. Бураҡаевтар шәжәрәһен алып барған. Шәжәрә исем-шәрифтәрҙән генә тормай, ғаилә ағзаларының һәр береһенең холоҡ-ғәҙәте лә яҙылған. Граждандар һуғышы мәлендә ауылға аҡтарҙы ла, ҡыҙылдарҙы ла индертмәй, ауыл ирҙәрен туплап, ауылды һаҡларға тырышҡан. Күпме ваҡытҡа еткәндер уның был фиҙаҡәрлеге, әммә нисек кенә булмаһын — халыҡты үҙенсә ҡурсалап маташҡан. Ауылды аҡтар баҫып алғас, халыҡты рәйеткәне өсөн бер офицерҙы атып үлтергән. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ҡатындар бәләкәй сана һөйрәп урманға утынға барған саҡта, йәшерәк ҡатындарға урмансы бәйләнеп маташҡан. Быны ишетеп ҡалған Зыяйетдин ҡайным урмансыны өйөнә саҡырып алған, ишеген биклəп ҡуйған да утын ағасы алып "аҡылға ултыртып" сығарған. Бер саҡ Диҡҡәт балыҡ тоторға тип һалған мурҙаһын ҡарарға барһа, күрше урыҫ ауылы ирҙәре мурҙаны сығарып маташалар икән. Ун бер-ун ике йәшлек Диҡҡәт йүгереп барып бер ирҙең ҡулына йәбешкән. Уныһы Диҡҡәтте күтәреп алып һыуға ырғытырға торғанда, икенсеһе: "Не трогай! Он же Зияйкин внук! Всю деревню дотла сожжет!" — тип ҡысҡырып ебәргән. Ғүмере буйы ауылын яратып, ауылының именлеген һаҡлап, ҡулынан килгән тиклем ҡурсалап йәшәгән ҡайным бер етәксенең (ул етәксенең "ыңғай" ҡарашы арҡаһында башҡорт ауылдарына йүнле юл һалынманы, газ үткәрелмәне, хатта иң ҙур ауылдарҙың береһе тиерлек Яҡшымбәттә әлегәсә юл юҡ, өс Герой биргән Кинйә ауылы ла юҡ ителә яҙҙы) Үрге һәм Урта Мотал ауылдарын яратмауы арҡаһында ғына "перспективаһыҙ ауылдар" исемлегенә теркәп ебәргәне, ә үҙенең бер ни ҙә эшләй алмағанлығы, уландарының бирешеүе өсөн әсенеп тәрән көрһөнә ине.

— Эй-й-й, үрге мәсет, түбәнге мәсет тип һөйләүҙәр тарихҡа ғына ҡалды инде. Ике мәсетле Үрге Мотал бөгөнгө көндә юҡ ителһенсе! Ә илгә ул ниндәй батырҙар бирҙе. Беҙҙең ауылдан ғына ла йөҙгә яҡын кеше Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашты. Ниғмәтша Рыҫҡолов, Ғариф Ураҙбаевтар орден тағып ҡайттылар. Минең улым Насретдин батырҙарса һәләк булды. Бөгөн килеп уларҙың ауылы юҡ. Шуның өсөн ҡан ҡойҙолармы ни ул егеттәр? – тип тағы ауыр көрһөнөп һүҙгә ҡушылды Зыяйетдин ҡайным. — Диҡҡәт улым, Моталдың зыяратына булһа ла кәртә тотоп ҡуйырға кәрәк ине, исмаһам. Бигерәк мал аяғы аҫтында ҡалған, тиҙәр бит.

— Июль башында бөтә ауылдаштар йыйылышырға һөйләштек. Шул саҡта кәртәләп китербеҙ, олатай.

— Ярай, әләйһәң. Әруахтар тыныс ятһын, исмаһам.

— Атай, Әбделхай ағайым айыу бейетә башлағайны. Тамамлап ҡуйһын, — тине, атаһының үтә әсенеүенә күңеле тулып киткән Фәсхетдин ҡайнаға.

— Әйҙә, дауам ит. Тел берәй фекерҙе эләктереп ҡалған мәлдә әйтеп үтәйем, тип уйлауым. Өлкәнәйгәс, хәтер келт итеп кенә ҡала ул. Әле генә бер уй зиһенде ярып килеп инә лә, әйтә һалып ҡалмаһаң, тел осона етеп һүҙгә әйләнгеләгәнсе юҡ та була. Әбделхай, һин үҙең мәсетте телгә алып, йөрәкте иләҫләндереп ебәрҙең бит.

— Ҡуй инде, ҡайным, ни һөйләһәң дә, ни тотһаң да Мотал иҫкә төшөп тик тора шул. Әйҙә, ҡайнаға, мин аш әҙерләгәнсе айыуыңды бейетә тор, — тип, Ғәлиә еңгәй, ҡайныһының иҫтәлектәргә бирелеп китеүен аҡлағандай, йомғаҡ яһаны ла, оло кешенең һүҙен бүлдерергә ҡыймай ултырған Әбделхай ҡайнағаға һүҙ дилбегәһен тоттороп, ашъяулыҡ йәйә башланы. Ҡыҙҙары Люциә, Әлфиә өтәләнеп йөрөп ярҙам иттеләр.

Әбделхай ҡайнаға һүҙен дауам итте:

— ... Айыу бейетеүсе үҙ ҡәҙерен үҙе белеп кенә, текә баҫып, ҡайҡая биреп тора. Майҙанға халыҡ йыйылғанын көтә. Үрге Мотал халҡы тотош йыйыла. Сәңгелдәктәге сабыйҙарын йомарлап ҡуйындарына ҡыҫтырып, йәш килендәргә саҡлы килеп етә. Майҙан уратып, күпереп ятҡан үлән өҫтөнә лыпын ултырып тамаша көтәләр. Теге ир олпат ҡына ҡыланып айыуын сылбырынан ысҡындыра. Айыу халыҡҡа ҡарап баш эйә. Халыҡ гөж килә. Шунан хужаһы ҡурайҙа бейеү көйө уйнай башлай. Айыу көй ыңғайына ҡәҙимге һелкенеп торған була. Теге ирҙең мутлығының сиге юҡ. Бәлки, айыу һелкенеүенә тура килтереп тә уйнағандыр ҡурайын. Иллә-мәгәр халыҡты ышандыра ине. Бер аҙ бейетеп алғас, еңдәрен һыҙғанып тороп айыуы менән көрмәкләшә башлай. Эй айпашалар, эй айпашалар. Шунан айыу еңә тегене. Еңә лә артҡы аяҡтарына баҫып тағы баш эйә. Был юлы хужаһы шәкәр киҫәге һоғондороп ебәрә. Халыҡ тын да алмай ҡарап тора был тамашаны. Һуңғы килеүендә лә шулай, айыуҙан еңелеп, уныһы баш эйеп, инде китәбеҙ тип кенә торалар ине, күрше ауылдың данлыҡлы көрәшсеһе... теге... кем әле, Зыяйетдин ағай? — тип өндәште ҡайныма. Ҡайным һаҡалын һыйпап алды ла:

— Ҡуй, мырҙам, исемен әйтмәй генә һөйлә, көрәшеп дан ҡаҙанһа, атап әйтер инең. Быға са яулаған данын да шул саҡтағы дыуамаллығы менән юҡҡа сығарҙы бит. Артабан ни өсөндөр көрәштәрҙә лә ҡатнашманы ла ҡуйҙы ул. Хөртөн исемләмәй

һөйләп өйрән һин уның. Күңеленә артыҡ ҡара нур йыйма, — тине.

— Айыуҙы ебәрмәйерәк тотаһың, шикелле, ауылдан. Ни эшләтәһең хәҙер? — тип һораны Фәсхетдин ҡайнаға тағы.

Әбделхай ҡайнаға, мәҙәк һөйләүсе ҡиәфәте алып, үҙе лә ҡайҡайыбыраҡ ултырҙы ла һүҙен дауам итте:

— Теге көрәшсе сыҡты ла: "Ҡана, үҙем көрәшеп ҡарайым", — тип ең һыҙғана ла башланы. Ғәйрәт ташып тора инде! Тирә-яҡта һабантуйҙарҙа бер тапҡыр ҙа еңелмәгән кеше ине.

— Көрәшкең килһә, ҡаршылығым юҡ. Көрәш. Тик аслан айыуҙы еңеп ҡуйма. Алдан иҫкәртәм. Айыу үҙен еңгәнде яратмай. Һәр саҡ еңеүсе булырға тейеш! — тине айыу хужаһы. Көрәшсе өндәшмәне. "Ағайыңды белмәйһең икән әле!" тигәндәй, көлөмһөрәп ҡуйҙы ла майҙанға сығып, айыу менән айпаша башланы. Йөрәге етеп сығыуы үҙе батырлыҡ инде барыбер, Зыяйетдин ағай? Шулай бит?

Ҡайным бер килке өндәшмәй ултырҙы. Мин заманында батыр ҙа, тәүәккәл дә, үткер ҙә булған был ил ҡартының ни әйтерен түҙемһеҙләнеп көттөм.

— Белмәйем, уландар. **Мин маҡсатһыҙ батырлыҡты дыуамаллыҡҡа һанайым**, — тине ул. Был һүҙҙәр ғүмерлеккә зиһенемә уйылып ҡалды.

— Айыу холҡон белмәүҙәндер инде... — тип, үҙ фекерен ҡыҫтырып ебәрҙе Фәсхетдин ҡайнаға, көрәшсенең дыуамаллығын аҡлағандай.

Әбделхай ҡайнаға һүҙен дауам итте:

— Көрмәкләшә торғас, тәкей салҡан һалды бит айыуҙы! Майҙан бер юлы "Аһ!" тип, ғәжәпләнеүен йәшермәй тулҡынып ҡуйҙы. Әммә айыу күҙ асып йомған арала һикереп торҙо ла тегене һелтәп тә ебәрҙе. Ныҡ теймәне, ахыры. Тейһә, айыу һеңгәҙәтә һалыр ине. Көрәшсе көрәшселеген итте, йылғыр ҙа, сос та булып сыҡты, көрәш майҙанынан ситкәрәк барып усына ҡырсынлы тупраҡ йомарланы ла айыуҙың күҙенә һипте. Уныһы ул-был иткәнсе, еңеүсебеҙ урам буйлап йән-фарман ҡаса башланы. Тыңәрәкләп майҙан тирәләп ултырған кешеләр һә тигәнсе ситкә һибелде, ояһы туҙҙырылған һағыҙаҡ һымаҡ, гөжләп әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа ташланды ла өйҙәренә инеп бикләнде. Тамаша ҡайғыһы китте. Айыу елдерә генә тегенең артынан. Еңеүсе әллә осоп барҙы, әллә ҡоймалар аша һикерҙе, керпек ҡаҡҡан арала Зыяйетдин ағайҙың бейек ҡоймаһына барып та етте, даһырлап менеп тә китте. Айыу тегенең артынан үрмәләне. Уйланылмаған, аңғармаҫтан килеп сыҡҡан хәүефле бер тамаша булды халыҡҡа. Дауам ит әле, Зыяйетдин ағай, айыу һинең

ҡоймаңды туҡмай бит.

— Минең ҡойма аша һикерҙе шул дыуамал батыр, — тип һүҙҙе ялғап алып китте Зыяйетдин ҡайным. — Ул көнө өй беренсә саҡырып йөрөнөләр тамашаға, ашығыс эшем булғас, бармай ҡалғайным. Ырымбурҙан килеп тәғәрмәс алып китергә тейештәр ине. Туғын туғығайным. Безелдеге сығып, йәнгә тейгән серекәйҙәрҙе ҡыуырға ла ваҡыт тапмай баш баҫып эшләп йөрөһәм, бер саҡ нимәлер шатыр-шотор итә башланы. Аяҙ көндә ни эшләп күк дөһөрләй икән, тип, күтәрелеп ҡараһам, ҡойма аша берәү һикереп төшмәһенме, ҡобараһы осоп. Алан-йолан ҡаранды ла таш келәткә инеп бикләнде. Бәй-бәй, тинем дә ынтылып ҡойма яғына күҙ ташлаһам, аптырап киттем, айыу торасы алғы аяҡтары менән тотоноп. Ҡарап тора бирҙе лә, ҡойма аша төшә алмаҫын аңлап, ҡапҡа яғына китте. Унан да инә алманы. Эй, йөрөй бер заман ҡойма уратып үкереп. Ҡойманы биргеҫләп тә ала. Ҡойма тирелеп төшмәҫ тимә уның көсөнә – тик бирешмәне. Ә ҡапҡаны икәүләшеп терәп торабыҙ. Ана асыла-бына асыланан саҡ ҡала.

— Ярһытҡанһың бит йыртҡысты, шилма. Көрәшеп маташҡан булдыңмы әллә? Хәҙер һине ялпаштыра һуҡмайынса китмәй ул, — тинем.

Айыу ҡапҡаға емерә яҙып һуға. Айыу бейетеүсе йөрөй ни эшләргә белмәй аптырап. Байтаҡ ваҡыт үткәс, айыу аҙыраҡ тыныс-

ланды шикелле, хужа ир уның эргәһенә килеп башынан һыйпаны, тоҡсайынан ваҡланған шәкәр киҫәге алып ҡаптырҙы. Үҙенә генә билдәле тылсымы булғандыр инде, ярһыуын тамам баҫты. Тылсымы булмаһа, айыуҙың ярһыуын баҫырһың баҫмай ҙа.

— Тылсым тип, айыу бейетеүсенең күҙ ҡарашы зәһәр булған, тиҙәр. Ысынмы-бушмы, халыҡ бишкә түкмәстереп сурытып ебәрәме — өйләнгәс, бисәһенә үҙенең күҙе тейеп йонсота башлағас, уныһы ауырыуға әйләнеп китә яҙған да айырылып ҡаҫҡан, ти. Шунан башҡа өйләнмәгән дә ҡуйған, тиҙәр. Ярай, уныһы һүҙ араһында. Зыяйетдин ағай, тағы ни эшләп көрәшеп маташты һуң теге батыр? — тип һорау менән тамамланы һүҙен Әбделхай ҡайнаға.

— Өгөтләп сығарҙыҡ. Юғиһә, айыу ауылдан китмәҫ ине. Ул алдына алғанды ҡуймай. Әле еңмәһә лә, аңдып йөрөп, ҡасан булһа ла үлтерә һуғып китеүе лә ихтимал. Еңгәнгә тиклем күҙәтә йөрөй ти ул ҡорбанын. Еңелеп ҡуймаһаң, булмаҫ, — тинек. Минең бик хәтәр айыу бысағым бар ине. Ул-был була ҡалһа, әҙер торормон, тип, уның менән бергә сыҡтым.

Был юлы көрәш оҙаҡ барманы — еңеүсе алдан билдәле ине. Айыу тыныслады.

17 ГБУК
Национальная библиотека
имени Ахмет-Заки Валиди
Республики Башкортостан

Был вакиға мине уйландырҙы. Ысынлап та, һин һәр вакыт еңеүсе булырға тейешһең, тигән аң ҡайҙан килә айыуҙарҙа? Айыу еңмешлеге тәрбиәнән түгел, ә ҡанға һалынған аң.

Белорет районының Йөйәк ауылында йәшәгән сакта булған бер вакиға иҫтә һаҡлана.

Колон

Бер саҡ, яҙғы ташҡын ваҡытында, йылға аҫтындағы суйыр таштарға ла, бер-береһенә лә ҡаҡлығып, әллә ниндәй сәйер тауыштар сығарып боҙ китә башлаған мәлдә, өс-дүрт аҙналыҡ ҡына ҡолон Инйәргә төшөп киткән. Ҡолондоң төшөүе булған, артынан бейә ырғыған. Халыҡ шаулашып яр буйына йыйыла башлағанда, мин мәктәптән эштән ҡайтып килә инем. Яр текә. Ағым көслө. Эре-эре боҙҙар бер яҡтан кешеләрҙе, икенсе яҡтан ҡолон менән бейәне ярға яҡын ебәрмәй. Яр ҙа ишелеп төшөрҙәй генә. Бейә үҙе һыуҙың ташҡын яғынан йөҙә, ҡолонон томшоғо менән ярға табан этәргән була. Ҡолонҡайҙың башы саҡ-саҡ күренеп ҡала, алыҫтан тырпайып ике ҡолаҡ ҡына күҙгә салына. Яр буйлап тағы бер ат ярһып сабып үтеп китте. Ни эшләп ҡотҡарышмайһығыҙ, тигән кеүек тойолдо уның ҡарашы. Ат күҙендә йәш күргәнем юҡ ине. Әле уның күҙендә йәш сағылып ҡалғандай булды. Шаулашҡан-сыулашҡан халыҡты ярға яҡын ебәрмәйҙәр, ҡолондо ҡурҡытып ҡуймағыҙ, тиҙәр. Ә егеттәр Инйәрҙең һөҙәк яры яғына йүгерҙе. Ҡатындар, ҡолондо йәлләй, иҫән ҡалырына ышанмай ҙа башланылар. Бына бер саҡ, байтаҡ араны үтеп, бейә менән ҡолон ярҙың һөҙәк еренә килеп етте. Егеттәр боҙҙан боҙға һикереп, ҡолонҡайҙың ҡолағынан эләктереп өлгөрҙөләр ҙә, ҡулға-ҡул тотоношоп, бер-береһен һәм ҡолондо тартып та сығарҙылар. Ирҙәр ҡолон менән бейә өҫтөнә толоп ябындыра һалдылар, ашыҡтырып ҡаршылағы ихатаға алып инеп киттеләр. Бейәһен – һарайҙа, ҡолонон – өйҙә араҡы менән ыуып, йылындырып ҡотҡарып ҡалғандар. Яр буйынан улар өсөн көйөп-янып сабыулап йөрөгән бейә тегеләрен сығарғанды ҡапҡа төбөнән китмәй көтөп алған.

Әсәйлек тойғоһо ниндәй ғәжәп! Балаһы өсөн утҡа ла инә, һыуға ла ташлана. "Үҙ бауырым" тигән тойғо аңға тәбиғәттән үк һалына. Ҡолонон ҡотҡарырға тип боҙло һыуға ташланған инә бейә... Уның хәүефен аңлап, кешеләрҙән ярҙам һорағандай, яр буйлап сабыулап йөрөгән икенсе бейә... Мин башта айғыр шулай сабып йөрөймө икән, тип уйлағайным, ул күршеләренең бейәһе булып сыҡҡан.

Ҡанға һалынған әсәйлек тойғоһо ниндәй көслө! Ҡан аша күскән башҡа холоҡ-фиғел дә, ҡылыҡ-ғәҙәт тә шулай көслө буламы икән?

* * *

"Тормош һабаҡтары" бөтөн башҡорт мәктәптәрендә лә уҡытыла башлағас, байтаҡ ҡына лекцияларға йөрөргә, дәрестәр бирергә, телевидение аша дәрестәр күрһәтергә тура килде. Лекциялар, ғәҙәттә, район үҙәгендә уҡыла. Тирә-яҡ ауыл мәктәптәренән уҡытыусылар иртәнге автобус менән киләләр ҙә, кискеһе менән ҡайтып китәләр. Иртәгеһен тағы киләләр. Ошо ваҡытҡа ҡулайлаштырып, уҡытыусыларҙың һорауҙарына, теләк-кәңәштәренә ваҡыт ҡалдыра инем. Яҡынданыраҡ аралашырға, эс серҙәрен һөйләргә теләүселәрҙең ҡараштарынан уҡ тойоп була. Ошондай лекцияларҙың береһенән һуң Зәлифә исемле уҡытыусы яныма килеп, мине үҙҙәренә саҡырҙы:

— Ирем хәҙер машина менән килә. Һеҙ бөгөн беҙгә барығыҙ. Мунса ла инерһегеҙ. Һеҙҙең килерҙе күптән көтәм. Лекция уҡырға саҡырҙыҡ, тигәнде ишеткәс шул тиклем ҡыуандым, — тине.

Зәлифәнең борсоулы йөҙөнә, моңһоу ҡарашына ҡарағанда, минең ярҙамыма үтә лә мохтаж ҡатын тора ине. Баш тартманым.

Киттек. Район үҙәгенән алыҫ түгел бик матур төбәктә урынлашҡан ауылда йәшәйҙәр. Донъялары бик бөтөн, икеһенең дә эшсәнлеге күренеп тора. Оло йорт төҙөп ингәндәр. Бүрәнәләрҙән ҡарағас һағыҙы еҫе аңҡып тора.

— Донъя яңыртҡығыҙмы? Бигерәк матур төҙөгәнһегеҙ, — тием.

— Беҙ бында яңыраҡ күсеп килдек. Башҡортостандың икенсе сигендә йәшәй инек. Иремдең армияла бергә хеҙмәт иткән дуҫы саҡырҙы ла күстек тә килдек, — тине лә Зәлифә моңһоу ғына йылмайып ҡуйҙы. Әммә был яҡтарға күсеп килеүҙең сәбәбендә тәрән сер һаҡланғанлығы һәм Зәлифәнең керпектәре аҫтына йәшеренгән һағыштың да күсеүгә бәйле булыуын тойҙом. Шуға артабан һорашманым.

Шулай булып сыҡты ла. Мунса инеп, ашап алғас, айырым бүлмәгә урын әҙерләне лә яныма инде Зәлифә.

— Апай, мин һеҙҙең кәңәшегеҙгә мохтажмын, — тине.

— Ярҙам итерлек булһам, ихлас тыңлайым, — тинем. — Тик әгәр һүҙ үҙ-ара мөнәсәбәт, тәрбиә хаҡында барһа, ваҡыт йәлләмәйек, бәйнә-бәйнә, энәһенән ебенә саҡлы һөйлә. Бөгөн лекцияла әйтеп киттем бит: тел ярҙамы биреү өсөн, хәл-ваҡиғаның төп сәбәбен белергә кәрәк. Бөтәһен дә асыҡтан-асыҡ һөйләмәһәң, ваҡиғаларҙы фәҡәт үҙ баһаң, үҙ ҡарашың аша ғына һүрәтләһәң –

кәңәш дөрөҫ булмай. Үҙең генә уҡыр, уҡығандан һуң йыртып ташлар көндәлегеңә нисек яҙыр инең — шулай һөйлә.

Ҡыҙым әсәйемә оҡшаған

...Атайыбыҙ аварияға эләгеп ҡапыл ғына һәләк булған, әсәйебеҙ итәк тулы бала менән ҡалған. Мин иң төпсөгө, атайым үлгәндә йәшем дә тулмаған. Беҙгә өләсәйем күсеп килде. Әсәйемә беҙҙе ҡарашырға, үҫтерешергә ярҙам итте. Әле лә күҙ алдымда: ут кеүек ине ул. Кеше бер баҫҡанда, ул биш баҫыр ине.

Әсәйем, йәш булһа ла, һәр саҡ, ауырыйым, ауырыйым, тине лә йөрөнө. Аҡрын ғына атлар, ипле генә һөйләшер ине. Ҡатыраҡ ауырып китһә, үлермен инде, үлермен, ти ҙә бөтәбеҙҙе хәүефкә һалыр ине. Етмеш йәшенә тиклем йәшәне, әммә, үлеп китермен тип ҡурҡытмаған бер генә көнө лә булмағандыр. Беҙҙең йөрәктәребеҙҙе ауырыу итеп бөттө. Беҙ нисек үҫәбеҙ, нисек уҡыйбыҙ — уйлап та бирмәне. Мәктәп күрше ауылда. Һуңлабыраҡ ҡайтһаҡ: "Ни булды?" — тип һораманы. "Минең хәлде беләһегеҙ, ни эшләп һуңлайһығыҙ? Һеҙ ҡайтыуға, бәлки, йән биреп ҡуйырмын, уйынға әүрәп мине уйлап та бирмәйһегеҙ", — тип үпкәләй ине. Ә беҙ ҡайһы ваҡытта асығыуҙан хәлебеҙ бөтөп, ҡайһы ваҡыт өшөп саҡ ҡайтып инәбеҙ. Өләсәйем, әсәйегеҙ бер үҙе биш бала ҡарай, уға ихтирамлы булығыҙ, әсәйегеҙҙе эшләтмәгеҙ, һаҡлағыҙ, тип кенә торҙо. Мин шулай кәрәктер тип уйлай инем. Тик әсәйемдең үтә лә кәүгәсел, үҙен генә яратып йәшәүе аптырата ине. Әсәй булараҡ мин уны яратҡым, ғүмеренең һуңғы көнөнә тиклем баҡтым. Минең менән йәшәне, мыжыуҙың да кәрәген бирҙе, әлбиттә. Теге оҡшаманы, был оҡшаманы. Ярай әле ирем һәйбәт. Оло кеше бит, өндәшмә, тигән булыр ине. Өләсәйем дә алдан иҫкәртеп ҡуйғайны, юғиһә, бөтөнләй аптырар инем уның холҡона.

Миңә ун биш йәш тулған саҡта хушлашты был донъя менән өләсәйем. Үлер алда, мине янына саҡырып алды ла: "Ҡыҙым, төҫөң менән дә, холҡоң менән дә атайыңа тартҡанһың. Түҙемлеһең, әсәйеңдең иң сабыр балаһы һин. Ауыр булһа ла уны үҙең ҡара. Әсәйеңдең холҡо ауыр. Холоҡ тиһәм дә холоҡтан түгел инде, әллә ниндәй ҡәһәрле бер нәсәп булды, кеше яфалатҡыс," — тине, тәрән көрһөнөп. Өләсәйем: "Иш янына ҡуш тигәндәй, имгәк булып һеҙҙе яфалап ятмаһам ярар ине. Хоҙайҙан теләгәнем шул", — ти торғайны. Оҙаҡ ятманы түшәктә. Әсәйемде яңыраҡ ерләнек. Биш бала менән йәш кенә көйө тол ҡалғас, бәлки, ысынлап та, ныҡ ҡына

ауырығандыр. Бәлки, атайымды бик яратып, юғалтыуға йөрәге һыҙлап яфаланғандыр, тип уйлаһам, өләсәйемдең: "Әллә ниндәй нәсәп булды, кеше яфалап", — тигән һүҙҙәре минең был фаразыма ҡаршы килә. Өләсәйемдең, әсенеп-әсенеп: "Был саҡлы ла атайыңа оҡшарһың икән, Хоҙайым!"– тип, әсәйемә үпкә һүҙҙәре әйткәнен дә ишеткәйнем. "Оҡшатмаҫ кәрәк ине. Мин ғәйеплеме уға?" – тип яуап бирҙе әсәйем. "Һуң хәҙер аҡыл ултырған бит. Үҙең әсәйһең. Үҙгәрт холҡоңдо." "Ни эшләп үҙгәртеп тәрбиәләмәнең һуң?" Ирекһеҙҙән ошондай һөйләшеүҙең шаһиты булғайным һәм әсәйемде ныҡ йәлләгәйнем. Өләсәйемде үтә лә яратһам да, "ысынлап та, ни эшләп әсәйемде үҙе кеүек тәрбиәләмәгән икән? Ә хәҙер асыулана", — тигән аптыраулы һорау тыуғайны бәләкәй сағымда. Ошо һорауҙы шул саҡта уҡ өләсәйемә бирергә, асыҡларға, ни эшләп ниндәйҙер нәсәптең үҙәгенә үтеүен төпсөнөргә кәрәк булғандыр... "Аңлатайым өләсәйеңдең хәлен," — тигәндер инде Тәңре. "Һин тигәнсә булмай икән тәбиғәт яҙмыштары", — тигәндәй, ҙур ҡыҙым шул тиклем әсәйемә оҡшаған. Ҡойоп ҡуйған һымаҡ. Төҫө, буй-һыны — тотош ҡына ул инде. Төҫкә бик сибәр ине әсәйем. Ап-аҡ йөҙлө, һары бөҙрә сәсле, зәп-зәңгәр күҙле ине. "Әсәйеңдең тышҡы ҡиәфәте бөтөнләй башҡортҡа оҡшамаған, ҡарашы ғына башҡорттоҡо!" – ти торғайнылар. Ҡыҙымды ла шулай тиҙәр. Төҫө генә оҡшаһа икән дә ул... Уҡыуға ла барымы булманы. Ташланы. Эшкә лә ихласлығы юҡ. "Ауырыйым, минең хәлемде аңламайһығыҙ. Үлгәс, аңларһығыҙ ҙа һуң булыр", – тип йәлләтә-йәлләтә буй еткерҙе. Тик ятыуына ла риза булыр инең хатта. Холҡо боҙоҡ. Ни уйлағанын, ни ҡыласағын белеп булмай. Ирендәрен ҡымтып өндәшмәй йөрөй бирә лә, абайламай ҙа ҡалаһың, эш боҙа ла ҡуя. Кешегә һиҙҙермәй, ҡайһы саҡта атаһына ла өндәшмәй, бәләкәй туғандарына белгертмәй, үҙен тыйып, асыуланып йә ҡурҡытып үткәреп ебәрәм, инде тыныслandым тиһәң — тағы ҡыйыҡ эше беленә. Бер ваҡыт ситтән килгән егетте, кейәүгә сығам, тип эйәртеп ҡайтты. Ризалаштыҡ. Бәлки, арыу ғына йәшәп китер, тыныслаңыр, тинек. Ул егеттең ауылынан өй алып бирҙек. Бына тигән туй яһаныҡ.

Күп тә торманы, айырылды ла ҡайтты. Ярай, уңмағас, уңманы. Ирҙән айырылыусы ул ғына түгел. Ул хәтле өҙгөләмәйем үҙемде, тип уйлап, үҙемдән хөртөрәк яҙмышлы кешеләр менән сағыштырып, шөкөр итеп, аҙыраҡ тыныслаңып йөрөй инем, икенсеһен эйәртеп ҡайтты. "Бына, таныш булығыҙ," – тип тора, иҫе лә китмәй. Әйтерһең, баҙарға барып әйбер һатып алып ҡайтҡан. Бер йыл торманы, уныһы ла ҡайтып китте. "Үҙе уҡытыусы, балаһын йүнләп

тәрбиәләй алмаған", – тигән һүҙҙәр ишетә башланым. Ике бәләкәйебеҙ яҡшы уҡый, мәктәп эштәрендә лә әүҙем ҡатнаша. Уларына хатта артыҡ иғтибар ҙа юҡ һымаҡ. Бөтә булмышымды ошо өлкән ҡыҙым биләне. Эшкә барыр булһам, ҡалтырана башлайым. Оят, ғәрлек. Бөтәһе лә бармаҡ менән төртөп күрһәткән һымаҡ. Яҡшыһы онотолдо, яманын телдән төшөрмәйҙәр. Тәрбиә сәғәтендә берәйһенә бер һүҙ әйтеп өлгөрмәйһең – үҙ баланды ҡара, үҙ балана өйрәт, тип әйтеүселәр ҙә булғыланы. Ярай, кеше һүҙен үткәреп тә ебәрер, иғтибар итмәҫкә лә тырышыр инең дә, ҡыҙым үҙе, үҙәктәргә үткәреп, әсе-әсе һүҙҙәр әйтә башланы... Тамам ауырыуға әйләндем. "Ниндәй гонаһтарым бар һинең алда, балаҡайым?" – тип илаған саҡтарым да аҙ булманы. Борсоулы сағымды күреп ҡалһа, күҙҙәрендәге быяла һалҡынлығы менән теклəп тора, бер ни ҙә өндәшмәй, хатта ҡарашы менән мине иҫәрлектә, уның хәлен аңламауҙа ғәйепләгән һымаҡ. "Хоҙайым, тағы ике балам бар бит, уларын аяҡҡа баҫтырырлыҡ көс бир миңә", – тием. Барыһын да атаһына һөйләп булмай. Ир йөрәге лә таштан яралмаған, һиҙенеп йөрөй инде. Уның да сәстәренә сал төштө. Ҡыҙымдың хатта үпкә һүҙҙәре лә әсәйемдекенә оҡшаған. Әйтерһең, уның йәне күскән. Ҡайһы саҡта йән күсә тигәндәренә ышанып та ҡуям.

Бер ваҡыт мунсала әсәйемде рәхәтләндереп сабындырайым, гел генә ҡоро йыуына ла сыға, тип уйлап, ташҡа аҙыраҡ эҫе һалдым. Һалыуым булды... Эһ-һ, ул ҡарашты күҙ алдына килтерһәм, йөрәгем өшөй башлай. "Үлтерергә уйлайһыңмы мине!" – тип һикереп килеп торҙо эләүкәлә... Ҡарашы быяла һымаҡ һалҡын. Мине енәйәт өҫтөндә тоткан кеүек, ышанмай, икеләнеп ҡарай ине. Ҡурҡып киттем. Шул ҡараш күҙ алдыма килгән һайын үҙемде ғәйепле тоям. "Сабынғыһы килмәгәс, ни эшләп сабындырырға маташтым икән? Ни эшләп алдан ризалығын һораманым икән?"– тип үҙемде битәрләнем. Яңыраҡ ҡыҙым ошондай уҡ ҡараш ташланы миңә. Өсөнсө тапҡыр ир эйәртеп ҡайтҡас: "Балам, бер аҙ ғына яңғыҙ йәшәп ҡараһаңсы! Һин бит үҙеңде белеп бөтмәгәнһең, шуның өсөн ниндәй холоҡло кеше кәрәклеген дә айыра алмайһың. Иң элек үҙеңде аңларға кәрәк", – тигәйнем: "Нисә йәшкә тиклем үҙемде эҙләтергә ниәтең бар? Яңғыҙ ҡартайтырға уйлайһыңмы мине? Атыу ни эшләп үҙең ир менән йәшәйһең?" – тип ҡысҡырмаһынмы! Ҡарашы... Тап әсәйемдеке. Ҡыҙымдың холҡона ҡарап, өләсәйемде аңлай башланым. Донъяһын ташлап, беҙҙе ҡарарға килеүенең, әсәйемә әсенеп-әсенеп үпкәләүенең, "Ах шул нәсәбегеҙҙе әйтәйем, арамдаланып ятыу тиһәң, һеҙгә ҡуш, ҡулынан эш килмәһә лә тел тигәндә телеп һала, балаларыңды ҡарау уры-

нына һине көйгә һала алмай йонсойом да йөрөйөм", – тип әсенеүенең сәбәбенә төшөндөм. Әсәйем менән үҙ баламды һөйләү йөрәккә лә, күңелгә лә ауыр. Ике ғәзиз кешем бит улар. Бер бауырбыҙ. Ғәйеп итмәгеҙ инде. Ошо хәлдең әрәсәһенә төшөнгөм килә. Ысынлап та, баш балам булғас, тәрбиәләй белмәнеммә? Ваҡытым ҡалманымы? Әллә нәҫел ҡаны шул тиклем көслөмө? Ғүмер буйы көткән донъябыҙҙы, тыуған ерҙе, дуҫтарҙы ҡалдырып күсеп китергә тура килде ошо ҡыҙым арҡаһында. Ялҡауланыуы, насар уҡыуы ғына түгел, тәҙрәнән сығып ҡасып китеүҙәре, оҙон-оҙаҡ ваҡытҡа юғалыуҙары, мине һөйһөнөп етмәгән ҡатындарға мине һөйләүе үҙәктәргә үтте. Атаһына: "Әллә ҡайыш күрһәтеп алаһыңмы?" – тинем бер саҡ аптырап. "Юҡ, – ти, – ҡыҙ балаға һуғырға ярамай." Үҙем дә ҡурҡтым, һуҡһаң, өйҙән биҙеүе, бөтөнләй ҡайтмауы ихтимал, тип тә уйланым. Намыҫы ни тора! Үҙем әҙәбиәтте, тормош һабаҡтарын шул тиклем яратып уҡытам, ә үҙ балам бер ниндәй ҡалыпҡа һыймаҫ тәртипһеҙ тормош алып бара...

Зәлифә һөйләүен туҡтатты ла тартынып ҡына, әммә шундай өмөт менән, ярҙамға сарсап ҡараны, әйтерһең, мин бер һелтәүҙә уның бөтә ҡайғыларын һыпырып алырлыҡ йәки бер һүҙ менән генә уның ҡыҙын ғаилә ҡалыбына һалырлыҡ көҙрәткә эйәмен.

Лекциямды, иң алғы рәттә ултырып, башын баҫып ҡына тыңлай ине ул. Үҙ-үҙенә бикләнеп, уйҙарға сумып ултырған икән.

— Зәлифә һеңлем, врачтарҙың үҙ балалары ауырымаймы ни? Улар бит һәр ауырыуҙың сәбәбен һәм уны булдырмау юлдарын беләләр. Ә сир барыбер үҙенекен итә. Хатта профессор дәрәжәһендәге белгестәрҙең дә ғаиләһенә барып инә. Шулай бит? Насар холоҡ та шулай уҡ — ауырыу, күңел ауырыуы. Ул ҡандан күсә. Уның өсөн үҙеңде сыбыртҡыларға ярамай. Физик яҡтан зәғиф тыуған бала өсөн туҡтауһыҙ үҙен ғәйепләмәй бит әсә кеше. Ә уның хәлен еңеләйтергә тырыша. Күңел ауырыуы ла шундай уҡ сир, уның өсөн өҙгөләнергә, үҙеңде битәрләргә, яфаларға ярамай. Дауалатырға кәрәк ҡыҙыңды. Медицина көслө беҙҙә. Нәҫелдән ундай ҡан күскәнгә уның да ғәйебе юҡ. Тик ваҡытында сараһын күрергә кәрәк. Ҡыҙың үҙе аңлап, сәләмәтлеген нығытыу хәстәрлеге күрмәй икән, юлын табырға кәрәк.

— Кеше бит уны аңламай. Ғәйеп итә. Беҙҙә ни эшләптер шулай бит, нервынан, психик ауырыуҙан дауаланып сыҡҡан кешегә мөнәсәбәт төрмәлә ултырып сыҡҡандарға ҡарағанда ла хөртөрәк.

— Ғәйеп эҙләп, ғәйбәт һөйләп көн үткәреүселәр ҙә бар донъяла. Ундайҙарға иғтибар итеү — үҙеңдә ғәйеп таныу тигән һүҙ. "Ауыртмаған яғыңа ят", — тигән аҡыллы һүҙ бар бит халыҡта. Һиңә

тыныслыҡ ҡайтарырға кәрәк. Йөрәк ауырыуына әйләнеп китмәһен борсолоуҙарың. Үҙеңде улай сыбыртҡылама.

— Ә мин ҡайғырам да ҡайғырам. Уның холҡон нисек итеп үҙгәртергә икән тип уйлайым. Ашымдың тәме, йәшәүемдең йәме китте. Һин дөрөҫ тәрбиәләмәгәнһең, тип үпкә һүҙҙәре ташлай башланы хәҙер.

— Уныһы ла барҙыр, бәлки. Беҙ балаға дөрөҫ тәрбиә бирәбеҙ тип, үҙебеҙ уйлап тапҡан ҡалыпҡа һалырға тырышабыҙ. Ә һәр кешенең үҙ холоҡ ҡалыбы була. Уны иҫәпкә алмайбыҙ. Һөҙөмтәлә, беҙ үҙебеҙсә дөрөҫ тәрбиә бирергә ынтылабыҙ, ә уны бала ҡабул итә алмай. Ә ғәйепте иң тәүҙә үҙебеҙҙән түгел, ситтән эҙләй башлайбыҙ.

— Тәрбиәнең бөтөнләй әһәмиәте юҡмы икән ни? Бөтә холоҡ-фиғел ҡан аша ғына күсәме?

— Тәрбиәнең әһәмиәте ҙур. Әммә беҙ кешенең Тышҡы донъяһын ғына тәрбиәләй алабыҙ. Фәҡәт Тышҡы донъя тәрбиәһе аша ғына Эске донъяға тәьҫир итергә мөмкин. Ә инде эске донъя аң менән бәйле. Шуға күрә иң тәьҫирле тәрбиә — үҙтәрбиә, эске донъяһын кеше үҙе генә үҙгәртә ала. Өс балаң өс төрлө холоҡломо?

— Эйе. Шуға аптырап һорайым шул. Мин бит уларға бер үк тәрбиә бирәм. Ни эшләп өсөһө өс төрлө һуң улар?

— Беҙҙең бөтә бәләбеҙ шунда ла инде. Кешенең холҡон өйрәнгән саҡта, ҡандан күскән заңды иҫәпкә алмайбыҙ. Балаға дөрөҫ йүнәлеш биреү өсөн, халыҡ әйтмешләй, эс-бауырына инеү, уны өйрәнеү, уның Эске донъяһы менән йәшәп ҡарау, уның холоҡ ҡалыбын белеү мөһим.

— Ә ҡыҙымды ни эшләтәйем икән?

— Намыҫы менән сыбыртҡылап, ҡурҡытып, янап аҡылға ултыртып булмаҫын аңлағанһың. Үҙенсә йәшәһен. Өй һалып биргәнһегеҙ, нисек теләй – шулай көн күреп ҡараһын. Үҙе хаталанһын, үҙе төҙәлһен. Ә кәңәште ҡыҙыңдың яҡын кешеһе – серҙәше йәки психолог аша бирергә кәрәк. Сөнки әлегә ул һеҙҙе тыңламаясаҡ. Ә уның ышанысына инеп алған кеше кәңәш биргән саҡта, бер үк нәмәне тылҡыһын. Ҡабатлау таблицаһында билдәле бер тәртипкә һалынған һандар бер туҡтауһыҙ ҡабатлауҙан һуң ятҡа бикләнә. Ятлап алһаң, һиңә хеҙмәт итә башлай. Уйҙы ла, зиһенгә һеңдерер өсөн, көн һайын ҡабатларға кәрәк. Ҡабатланған уй-фекергә үҙең инанаһың, һәм бөтә булмышың шул фекергә буйһона башлай. Шуның өсөн тормошон яйға һалырға, киләсәге хаҡында хәстәрләргә кәрәклеге хаҡындағы фекерҙе тылҡырға, һеңдерергә кәрәк. Ә намыҫы менән ҡамсылау, уның арҡаһында

һеҙгә оят килеүе тураһында һүҙҙәр уны оторо ярһыта ғына.

— Мин үҙ әсәйемә улай ныҡ оҡшамағанмын. Ә балам уға тартҡан. Ни эшләп улай икән?

— Бәлки, ғоманлы саҡта әсәйең хаҡында үтә ныҡ уйлағанһыңдыр, борсолғанһыңдыр, әсәйеңдең холоҡ-фиғелдәрен ҡайта-ҡайта иҫләп, баландың уға оҡшамауын теләберәк тә ҡуйғанһыңдыр.

— **Балаға ғоманлы саҡта уйлаған уйҙар уның холҡона тәьҫир итәме икән?**

Зәлифәнең һорауҙарына яуаптар башҡа тыңлаусыларҙа ла ҡыҙыҡһыныу уятыр, тип уйлап, тормоштан алынған миҫалдарҙан сығып, был хаҡта артабан лекцияларҙа ла һөйләргә булдым.

Ғәли-Ғәлиә

Бик татыу йәшәгән йәш ғаиләлә бер-бер артлы дүрт ҡыҙ бала тыуа. Ир кеше, ғәҙәттә, тәүге баланан башлап малай көтә. Был тәбиғи. Нәҫел дауам итергә, уның шәжәрә ебе юғалмаҫҡа тейеш. Шул — уның маҡсаты. Атай кеше тағы ҡыҙы тыуыуға, имен булыуына шатланһа ла, ир бала булмағас, күңеле төшөп йөрөй. Шунан бишенсеһен мотлаҡ малай итергә яйын эҙләй башлай. Өлкәнерәк таныштары менән кәңәшләшә, шым-шым ғына тәжрибә уртаҡлаша башлайҙар. Күрше ауылда бер ғаиләлә бик ҡыҙыҡ хәл күҙәтелә: балалар гел алмаш тыуа, бер малай, бер ҡыҙ, өсөнсөһө — тағы малай, дүртенсеһе — тағы ҡыҙ, бишенсеһе — малай, алтынсыһы — ҡыҙ бала. Ошо ғаиләгә барып тәжрибә уртаҡлашырға тәҡдим итәләр. Китә атай кеше кәңәш алырға. Тәжрибәле ғаилә башлығы бик мут булып сыға:

— Аптыраған һың икән! Күптән киләләр уны! Ана, өйөлөп ятҡан мендәрҙәрҙе күрәһеңме? Береһе лә тауыҡ йөнө йәки ҡаҙ йөнөнән яһалмаған. Бөтәһе лә япраҡтан. Ҡыштырлап тора! — ти.

— Шунан?

— Йәй көнө япраҡтар йыйып мендәр тултырып алып ҡал. Ҡыҙ бала кәрәк икән — ҡайын, еләк-емеш япраҡтарынан яһалған мендәр һалып ят баш аҫтына. Ир бала кәрәк икән, рәхим ит — имән, ҡомалаҡ япраҡтарынан яһалған мендәрҙә йоҡла.

— Йыл буйы йоҡларғамы?

— Юҡ, йыл буйына бармай ул, ике-өс ай етә.

Кәңәш кенә биреп ҡалмай теге тәжрибәле ир, хатта япраҡ мендәр ҙә ҡосаҡлатып ҡайтара.

— Әйткәнең раҫка сығып, ир бала тыуа ҡалһа, һинең исемеңде ҡушырмын.

— Исеме лә әҙер булғас, әйҙә "Ғәли, Ғәли" тип ҡабатлап йөрө. Бала әсәһенең ҡорһағында ятҡан саҡта уҡ бөтәһен дә тойоп, ишетеп йөрөй. Мин ҡатыным ир балаға буйға ҡалһа, гел "Урал", "Ел, ерәнем" кеүек йырҙар йырлайым, ә ҡыҙҙарыма иһә "Сәлимәкәй ҡыйғас ҡаш"ты һуҙам. Бөгөндән үк ҡыҙҙарыңа ир бала ҡурсағы алып бир. Ир бала итеп уйнатһындар. Йырлай беләһеңме?

— Аҙ-маҙ һупалайым.

— Көйҙәр бер-береһенән айырылып тороруҡ йырлаһаң ярай. Әйҙә, ҡорҙаш, уңыш теләйем.

Урау булһа ла район үҙәге аша ҡайтып, магазиндарҙан ир бала ҡурсағы таптыра атай кеше. Юҡ, ҡайҙа барма — ҡурсаҡтар гел ҡыҙ бала. Ниһайәт, баш бармаҡтай ғына шыр яланғас итеп эшләнгән сабый ҡурсаҡтар табып ала. Ир бала ҡурсағы табыуҙан төңөлөп бөткән ерҙән быларға юлыҡҡас, атҡа менгәндәй шатлана. Ул ҡурсаҡтарҙы бәләкәй ҡыҙҙар ни өсөндөр "помпас та помпас" тип атайҙар, яратып уйнайҙар.

Шулай итеп, тәжрибәле ир кәңәштәренең һәр бер ҡағиҙәһе теүәл үтәлә.

— Бының малай, бының малай! — тип шатланып көтә атай кеше, япраҡ мендәрҙән, ысынлап та, ҡомалаҡ еҫтәре аңҡып торғанына ҡыуанып. Өҫтәүенә, "Ел, ерәнем"де лә мөңгөрләп йөрөй. Әсәй кеше лә, ниһайәт, ирен шатландырасағына, дуҫтарының да ирен, бракодел, тип үртәмәйәсәктәренә эстән ҡыуанып, өмөтләнеп көтә баланы. Ҡыҙҙары ла ошо уҡ өмөттә була. Тик ҡатыны яғынан ҡайынеңгәһе генә бикәсенең һыйыр һауырға сүгәләп ултырған саҡта һул яғына көс төшөрөңкөрәгәнен абайлап ҡалып:

— Ай-һай, кейәү, улай бик ымһынмағыҙ әле. Бикәс бер ҙә ир бала табырға өлгешмәгән. Борон тәғәйен бала көтөргә рөхсәт итмәйҙәр ине, — ти.

— "Һин беләһеңме, силсәүит беләме?" — тигәндәй, ҡайҙан алып әйтәһең, ҡайынйеңгә? Малай тигәс, малай! — тип үпкәләй кейәүе. Ә үҙе тыуасаҡ ир балаһы тураһында шул тиклем хыяллана, ат менергә өйрәтеүе лә, балыҡ тота барыуҙары ла, хатта һунарға сығыуҙары ла күҙ алдына килә. Ҡайһы саҡта хатта күҙ алдына килгән күренештәргә ҡыуанып йылмайып ҡуя. Ҡатыны менән икәүләшеп хыялдарға бирелеп китәләр. Ҡайынеңгәһе башҡаса ул фекерен ҡабатламай. "Улайтып, миңә ышанмағас, әйҙә, балаһы тыуғансы булһа ла малай атаһы булып йәшәһен", — ти ҙә ҡуя.

Туғыҙ айға һуҙылған хыял ҡапыл селпәрәмә килә — бишенсе бала ла ҡыҙ булып тыуа.

—Ғәли тип исем әҙерләгәйнем —Ғәлиә тип ҡушайыҡ инде. Ярай, минең ҡыҙҙар кәләшкә оҡшап уңғандар улар. Ҡайһы берәүҙәрҙең малайҙарына биргеһеҙ, — ти биш ҡыҙ бала атаһы, кинйәкәйенең тас үҙе булып үҫеп килеүенә ихлас шатланып. Бер аҙҙан бөтә бошоноуҙары юҡҡа сыға, Ғәлиә атаһынан бер тотам да ҡалмай эйәреп йөрөй, уға ярҙамлаша, ат та менә, балыҡҡа ла эйәреп бара, урман ҡырҡырға ла, бесәнгә лә атаһы менән бергә китә. Ҡалын ҡуйы сәсле, оҙон толомло килешле кәүҙәле ҡыҙ булып үҫеп китһә лә, кәлебе менән ир балаларға тартыбыраҡ тора. Малайҙар менән футбол уйнай, саңғыла йөрөгәндә уларҙан ҡалышмай. Класташ ҡыҙҙары менән ярышҡан саҡта гел беренсе урынды алғас, улар хатта: "Ғәлиә малайҙар менән ярышһын, барыбер беренсе урынды ала ул," – тиҙәр уҡытыусыға. Ғәлиә мәктәптә малайҙар араһында ла икенсе-өсөнсө урынды ала. Хатта Өфөгә лә саңғы ярышына ебәрәләр. Тик унда малайҙар менән ярышырға рөхсәт итмәйҙәр, ә ҡыҙҙар исемлегенә индерелмәгән була. Юҡҡабарға бошонмай торған Ғәлиә, Өфөнө күреүенә лә ныҡ шатланып, тыныслана. Шунан ярышҡа килгән сит райондан бер малай, туңдырманы күп ашап ауырып киткәс, малайҙар кейеме кейенеп уның урынына ярышҡа сыға ла бөтөнләй икенсе район мәктәбенә еңеү яулай.

Ғәлиә һигеҙенсе класта ваҡытта күрше ауылдан килгән уҡыусылар араһында тыныс ҡына холоҡло Ғәбит тигән малай менән дуҫлаша. Ғәбит ғаиләлә алтынсы бала булып донъяға килгән. Өлкәндәре лә ир балалар. Ғәбиттә әсәһе лә, башҡалар ҙа ҡыҙ бала булыр тип көткәндәр, сөнки әсәһенең ғоманлы саҡта ҡойҡа ашағыһы килгән. Әсәһе ҡыуана-ҡыуана ҡойҡа бешергән: "Хәҙерге заман ҡыҙҙары әллә ни эшләп ир әсәһе менән бергә йәшәү яғында түгел, ҡартайған көнөмдә килен ҡулына ҡарап ҡалғансы, исмаһам, ҡыҙым түшәгендә ятырмын", — тип хыялланған, ҡыҙ бала булырына өмөт итеп. Әммә ҡуйы ҡара сәсле ир бала донъяға килә. Сабыйға Ғәбит тип исем ҡушалар. Ғәбит бәләкәйҙән әсәһе тирәһендә урала, хатта бәйләм бәйләргә лә өйрәнә, ҡамыр баҫа, икмәк бешерә, туҡмасына тиклем киҫә. Ошо ир бала менән Ғәлиә сентябрҙең тәүге көнөндә үк бер-береһен яҡын күреп дуҫлашып китәләр. Аҙаҡ өйләнешәләр ҙә совхоз үҙәгенә йәшәргә китәләр. Татыу йәшәйҙәр. Тик улар хаҡында әленән-әле лаҡап-мәҙәктәр сығарып ҡына торалар.

* * *

... Ғәбит бесән тейәп ҡайтып килә, ти. Ғәлиә ҡапҡа асырға сыҡҡан да:

— Ни эшләп арҡалығын күтәреберәк бәйләмәнең? Атты ҡара тиргә батырғанһың! — тип асыуланған.

— Үҙең әйтеп ебәрмәнең бит. Алдына бесән һалғанда бушатҡайным. Күтәреп бәйләргә самаһын белмәнем, — тип аҡланған ти Ғәбит.

* * *

... Ғәбит менән Ғәлиә ҡунаҡҡа барған. Итле туҡмас бешергәндәр. Аш бик оҡшаған Ғәбиткә.

— Еңгәй, туҡмасың бик тәмле булған. Нисә йомортҡа һыттың? — тип һораған, ти, Ғәбит.

...Үҙ-ара татыу йәшәгәс, бындай лаҡаптарға иҫтәре китмәй Ғәбит менән Ғәлиәнең. Лаҡап-маҙар ишетһәләр:

— Уныһын да белгәндәр. Әллә беҙҙе тыңлап, аҙаҡ лаҡап һөйләп йөрөр өсөн кеше яллағандар инде! — тип кенә ҡуялар ҙа үткәрә лә ебәрәләр. Әммә береһенән-береһе матур балалары үҫеп, иҫ белә башлағас, урамда уйнағанда, әсе телле өлкәнерәк балалар мыҫҡыл итеп төрлө һорау бирәләр:

— Айнур, атайың туҡмасҡа нисә йомортҡа һыта?

— Айгизә, әсәйеңдән ат егергә өйрәндеңме әле?

— Һеҙҙә кем икмәк һала ул?

Ошондай һүҙҙәрҙе ишетеп ғәрләнеп ҡайта башлай балалар.

— Былай булмай, ил ауыҙын иләк менән ҡаплап булмай, — тигән һығымтаға килә Ғәлиә менән Ғәбит. — Берәй ҡалаға китәйек. Унда кемдең кемдә эше бар. Балаларҙың күңеле китек, йомоҡ булып үҫмәһен, — тип, нисә йыл йыйған йорт-ҡаралтыларын һатып, Стәрлетамаҡҡа күсеп китәләр.

Мәсьәләне дөрөҫ хәл итә Ғәбит менән Ғәлиә.

Был вәҡиға аша әйтәһе һүҙең әрәсәһе шул: әсә гоманлы саҡта ла, балаһын имеҙгән вәҡытта ла үҙенең уй-тойғолары менән сабыйының Эске донъяһын бар итеүҙә иҫ китмәле ҙур тәьҫир яһай ала. Тәрбиә бына ҡасан башлана!

Зифа менән Заһир

Йырҙарҙа йырланғанса икеһе лә пар килеп ҡауыштылар улар. Зифа исеме менән бергә тыуған кеүек зифа буйлы, һөйкөмлө, иғтибарҙы үҙенә генә тартып торорлоҡ матур. "Камил ҡатын-ҡыҙ ниндәй булырға тейеш?" тигән һорауға, "Зифа кеүек", тип кенә яуап бирерлек аҡыллы, уңған, эш һөйөүсән дә. Шуның өсөндөр ҙә эшендә лә бик ихтирам итәләр, ҡәҙерләйҙәр, уның фекеренә ҡолаҡ һалалар, вазифаһында бик тиҙ үрләтәләр.

Заһир — баҫалҡы, күп һөйләшмәҫ, тын ғына аҡҡан йылға һымаҡ, ипле генә үҙ эшен башҡарып йөрөй торған ир. Һирпелеп кенә ҡарап алып ипле генә итеп йылмая ла эшкә сума. Өйөндә ағастан һырлап эшләгән кәштәләрен, кейем шкафтарын, өҫтәл-ултырғыстарҙы, хатта ишек тотҡаларын, тәҙрә рамдарына тиклем үҙ ҡулдары менән оҫта итеп семәрләп, ҡулына ни тотһа, шуны гөл кеүек итеп эшләп ҡуя. Был ғаиләне белгән, яратҡан туғандарының да, таныш-белештәренең дә теләктәре бер ине: тормоштарына, үҙ-ара мөнәсәбәттәренә күҙ тейеп кенә ҡуймаһын.

Диҡҡәт бик иртә донъя ҡуйып, бишенсе балаһының тыуғанын да күрмәй, арабыҙҙан киткәс, балаларҙы аяҡҡа баҫтырыу бер үҙемә тороп ҡалды. Матди яҡтан ярҙам итерлек бер кешебеҙ ҙә юҡ, биш балаға кемдәндер даими ярҙам да көтөп булмай, уйланым-уйланым да ваҡытлыса ауылға китергә булдым. Өфөгә йомош менән килгән арала Зифаға шылтыратып хәлдәрен белешеп киткеләй инем. Диҡҡәттең вафатынан һуң күп ярҙамын күрҙем уларҙың. Улар, икеһе лә, кеше мохтажлығын күреп, йомарт ҡулдары менән ярҙам итергә әҙерҙәр ине.

Өфөгә сираттағы килеүем. Урамдан китеп барһам, машинанан сигнал ишетәм. Боролоп ҡараһам — Заһир. Аптырап киттем. Уның күҙҙәре генә Заһирҙыҡы ине. Ябыҡҡан. Ҡарашына моң ҡунған.

— Апай, һаумы! Ултыр әле машинаға, — тине ул. Заһир мине үҙ апаһындай яҡын күрә ине. — Ҡайҙа бараһың? Аҙ ғына ваҡытың бармы? Һине күргәс, шатлығымдан ҡысҡырып ебәрә яҙҙым.

— Һаумы, Заһир. Ваҡыт ни минеке бит. Табырмын. Әле генә килеп төштөм Өфөгә. Шылтыратып хәлегеҙҙе белешермен, тип килә инем.

— Хәл мөшкөл, апай...

— Ни булды, Заһир? — Йөрәкте хәүеф алды.

— Баланы әсәйҙәренә ҡалдырған да минән йәшереп ял итергә киткән бит Зифа.

— Ә ни эшләп һинән йәшереп?

— Икенсе кеше менән... Ҡатын кешенең бер юлы ике ир менән йәшәгәнен ишеткәнең бармы, апай! Зифа йәшәгән. Ышанаһыңмы, апай...

— Һиңә ышанам. Әммә Зифаның был ҡылығына ышанғы килмәй. Һеҙ бит нисә йыл дуҫлашып йөрөп өйләнештегеҙ. Өйләнешкәс тә бер-берегеҙҙән айырылманығыҙ. Ҡасан ике ир менән йәшәп өлгөрһөн ул? Әсәй кеше ул юлға баҫмаҫ.

— Апай, элек түгел, яңыраҡ йәшәй башлаған. Йә һин китеп барҙың, һине тыңлай торғайны ул. Серҙәрен һөйләһә, бәлки, ҡурсалап алып ҡалыр инең.

— Әле Зифаның ҡайтыр ваҡыты етмәйме?

— Юҡ. Ҡәйнәмде лә, бергә китәбеҙ, тип алдаған. Өсөнсө көн балдыҙҙы күреп ҡалдым. Аптырап китте. "Ҡайттығыҙҙамы ни?" – ти. Ә миңә, әсәйемдәргә барабыҙ, тине. Ял йортона шылтыраттым. Ире менән бергә ял итә, тинеләр. Шунан бирле ашаған-эскән юҡ. Урам буйлап машинала тик йөрөйөм.

Заһирҙы өгөтләп өйҙәренә алып килдем. Һәр ваҡыттағыса бөхтәлек, тулы тәртип. Һөйләшеп ултырабыҙ.

— Иҫеңдәме, Заһир, бер саҡ икәү-ара бәхәсегеҙ барған саҡта мин һеҙҙә инем. Һиңә лә, унан һуң, Зифаға ла иҫкәрткәйнем.

— Һүҙҙәрең иҫтә ҡалған, ә ниҙән килеп сыҡты ул һөйләшеү — онотҡанмын. Үтә ныҡ яратышҡан кешеләрҙең бер-береһенә талабы ла ҙур була. Һин аҙ ғына үҙгәрт үҙеңде. Телгә яғымлыраҡ, һүҙгә татлыраҡ бул, иғтибарыңды һүҙ менән дә аңғарт, тинең. Ә мин, нисек бармын — шулаймын инде, апай. Шулай тәрбиәләгәндәр, тинем. Ә нимәнән башланды һуң ундай һөйләшеү, апай? Ул саҡта ниндәйҙер хәүеф тыуҙырырлыҡ бер ни ҙә юҡ ине бит. Беҙ бик һәйбәт йәшәй инек. Ҡайҙан ундай шик төшкәйне һиңә?

...Мин һеҙгә килгәйнем. Һин өйҙә юҡ инең. Зифа ҡамыр баҫа, бәлеш һалырға йөрөй.

— Бөгөн бер хеҙмәткәребеҙ төшкө ашҡа бәлеш килтергән. Ҡамыры шул тиклем тәмле. Рецебын алып ҡайттым да Заһир ҡайтҡансы бәлеш һалайым тип йөрөйөм, — тип өтәләнеп йөрөп ята.

— Мин ҡайтайым. Балалар көтәлер.

— Әле мультфильм бара. Һинекеләр был ваҡытта кино ҡарай. Мин беләм. Былай ҙа саҡырып алып булмай. Биш бала менән иркенләп сәй ҙә эскәнең юҡтыр. Ҡамырҙы ла күп итеп баҫтым. Балаларға ла күстәнәс бирермен. Тиҙ генә өлгөрә торған ҡамыр ул.

Бәлеш бешеүгә һин ҡайттың. Ултырып матурлап бәлеш ашаныҡ.

— Рәхмәт, һыйланың, — тинең дә тороп киттең.

— Бәлеш тәмле булманымы ни, Заһир? — тип һораны Зифа.

— Бәй, бик тәмле.

— Улай булғас, ни эшләп тәмле тип әйтмәнең? Мин бит ҡамырын икенсе төрлөрәк баҫтым, яңы рецепт өйрәнеп ҡайттым.

— Һинең инде белмәгән нәмәң юҡ. Ҡайһыныһын ҡасан өйрәнгәнеңде ҡайҙан беләйем? Ҡамырын тәмле итәһеңме, эсенә һалған ашамлығынмы — айырмайым мин. Тәмлеме? Тәмле. Ашайым да ашайым. Беҙҙе шулай өйрәттеләр өйҙә — эш тә һайлама, аш та һайлама. Ҡулыңа тотторғандар икән — эшлә, алдыңа ҡуйғандар икән — аша, — тинең дә кейеменде алмаштырып гаражыңа сығып киттең, мин Зифа менән ултырып ҡалдым.

— Бына шулай, апай... — тине лә Зифа, күҙҙәрен йәш алды. — "Ни эшләп илайһың, Зифа?" — тип һорашалар, бәлеш бешергәйнем, Заһир рәхмәт кенә әйтеп тороп китте. Башҡа бер ни ҙә өндәшмәне, тиһәм, бот сабып көләләр бит инде. Беләм, аңлайым уныһын. Ә миңә ауыр. Күңелемә ауыр. Аҙ ғына йылы һүҙ әйтеү ҡыйынмы ни уға? Минең ниндәй ғаиләлә үҫкәнемде белә, беҙҙең ғаиләләге мөнәсәбәтте күрә лә баһа! – Зифа әлеге булған үпкәһен генә түгел, быға са йыйылып килгәндәрен дә һалды был һүҙҙәренә. Илаһын, әҙерәк күңелен бушатып алһын, тип тыйманым. Һин ҡайтып индең.

— Әллә илап ултыра инде әҙәм ышандырып. Ҡатындар урамда иҫереп тәгәрәп ятҡан ирҙәрен арҡаһынан һөйә-һөйә алып ҡайта, ә һин...

Зифа өндәшмәне. Шунан:

— Мин, бәлки, бәхеттән илайымдыр. Һин һораманың бит әле, — тине, үҙе күстәнәс әҙерләй башланы. — Машинаңды рәтләһәң, апайҙы илтеп ҡуй. Әллә ҡасандан ашыға ине, балалары көтәлер, – тине.

— Минең машина һәр ваҡыт сәғәт кеүек. "Һә" тигәнсе илтеп ҡуябыҙ. Әйҙә, үҙең дә. Балаларҙы ла күреп сығырбыҙ.

— Күҙ шешмәкләнеп бөттө. Икенсе ваҡыт барырбыҙ.

— Мин бик һәйбәт ит алып ҡайтҡайным. Бүлеп һал апайға, — тинең. Зифа өйҙә ҡалды. Һин мине машина менән алып киттең. Шул саҡта булды ул һөйләшеү.

— Бына шундай нескә генә күңелле инде Зифаҡайыбыҙ, апай. Ҡасан, нисек, нимә әйтергә белмәй аптырайым. Ҡайһылай әйтһәм дә оҡшамай уға.

— Ә һин уға оҡшарға тырышма. Үҙеңә оҡшарға тырыш. Зифаға булған мөнәсәбәтеңде беләм бит, шуны һүҙ менән дә әйт.

— Апай, беҙҙе улай өйрәтмәнеләр. Уны сөсө теллелек тип һанай инек. Бына бөгөн, мәҫәлән, ни тип маҡтайым аштың? Ашҡа баһа бирмәгеҙ. Аштың ниндәйе лә һинән оло. Олоға баһа бирмәйҙәр, ти ине өләсәйем.

— Ә һин ашҡа баһа бирмә. Зифаның оҫталығын баһала.

— Яһалма килеп сығыр бит. Тағы оҡшатмаҫ. Тормош өсөн ул ваҡ мәсьәлә түгелме, апай? Һин дә, Диҡҡәт ағай бешергән бәлешемде маҡтаманы, тип буҫығып илап ултыра торғайныңмы?

— Диҡҡәт тә сөсөләнеүҙе яратманы, ә шулай ҙа оҫта ғына итеп матур һүҙҙәр әйтә торғайны. Ул һүҙҙәр әле лә күңелде иркәләй. Ундай һүҙҙәр әйтелмәгән булһа, миңә ауыр булыр ине хәҙер.

— Уны бик аҡыллы кеше булған, тиҙәр. Иҫән сағында осрашырға насип булманы. Берәй маҡтау һүҙен әйт әле, сер булмаһа.

— Ҡайһыныһын әйтәйем? Бына, мәҫәлән, бер ваҡыт улым дәрес әҙерләп ултыра. Башҡорт әҙәбиәтенән мәҡәлдәр яҙып килергә ҡушҡандар. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тип йыш ҡабатлайымдыр инде. Ошо мәҡәлде яҙып ҡуйған да минән былай тип һорай:

— Әсәй, ә ҡыҙ кешегә нисә төрлө һөнәр кәрәк?

— Егет тигән һүҙ малайҙарҙы, ағайҙарҙы ғына күҙҙә тотмай. Һәйбәт кешене егет икәнһең, тип маҡтайҙар. Был тормошта арыу кеше булам тиһәң, кәмендә етмеш төрлө һөнәреңбулырға тейеш, тигәнде аңлата мәҡәл.

— Әсәй, әйҙә һинең һөнәрҙәреңде һанайыҡ, — ти башланылар балалар.

Шул саҡ Диҡҡәт:

— Әсәйеңдең белгән һөнәрҙәрен түгел, белмәгәндәрен һанағыҙ. Тиҙерәк булыр, — тине. Ул мине балалар алдында ла күтәрҙе, миңә ҡарата мөнәсәбәтен дә аңлатты, үҙенә лә ихтирам арттырҙы.

— Бик аҡыллы кеше ине, тиҙәр шул Диҡҡәт ағайҙы, – тип ҡабатланы Заһир.

— Аҡыллы ине. Мин хатта уны иҫән саҡта күрмәгән, уның менән осрашмаған кешене бик күп нәмәнән мәхрүм ҡалған һымаҡ тоям. Ғаиләлә лә үҙ-ара мөнәсәбәтте бик оҫта ҡорғандыр, тип уйлайым, сөнки миңә бейем, бикәс, ҡайнаға менән дә, уларҙың ғаиләләре менән дә бергә йәшәргә тура килде. Өйҙөң ҡайһы мөйөшөн ҡараһаң да кеше ултыра торғайны. Күмәк йәшәнек. Өҫтәүенә, тәүге ҡатынынан ҡыҙы Айгөлдө алып ҡайта торғайным. Ошондай ҡатмарлы аралашыу беҙҙең үҙ-ара мөнәсәбәткә зыян килтермәне.

— Нисек көйләне ул?

— Миңә алдан уҡ иҫкәртеп, барыһының ҡылығы-холҡо

тураһында әйтеп ҡуйҙы. Кемгә ниндәй мөғәмәләлә булһам, аҙағы нисек буласаҡлығын иҫкәртте лә, ҡалғанын үҙең самала, был хаҡта башҡаса һүҙ булмаҫ, тине. Мин самаланым.

— Нисек?

— Иң элек төп маҡсатымды билдәләнем. Маҡсатым — Диҡҡәт менән бергә йәшәү, уның кәйефенә ыңғай эмоциялар арттырыу, мөмкин тиклем уның һаулығын һаҡлау. Уның ҡан баҫымы һәр ваҡыт бик юғары булды. Эше күп, өйҙә ял итерлек мөмкинлек самалы. Шуға уның сәләмәтлегенә ҡарата көндәлек иғтибар кәрәк ине. Тормоштоң башҡа бөтә ығы-зығыһын ошо маҡсаттан сығып хәл итеү. Өндәшмәҫкәме, иғтибар итмәҫкәме, ҡырт киҫеп кенә ҡуйырғамы, яйға һалыуҙың башҡа сараларын эҙләргәме...

— Үҙегеҙҙең теләккә ҡаршы килгән нәмәләрҙе Диҡҡәт ағай хаҡына тип эшләй инегеҙме?

— Булғыланы. Үҙ балаларыбыҙ юҡ саҡта ул ҡыҙын бик һағына ине, һәм мин уны өйҙәренә, Айгөлдәрҙең яңы ғаиләһенә барып, алып ҡайта торғайным. Ҡатындың икенсе иренең Оксана исемле ҡыҙы бар ине. Айгөл үҙе генә түгел, Оксана ла эйәреп килә торғайны. Яңы өйләнешкән саҡ. Аҡса яғы наҡыҫ. Ә балалар тегенеһен һорай, бығыһын һорай. Айгөлгә һигеҙ, Оксанаға ете йәш ине ул саҡта. Алып ҡайтам, алып барам. Мин уны, әлбиттә, үтә ҡыйығынһынмай башҡарҙым, әммә оло ихласлыҡ менән дә түгел, әлбиттә. Айгөлдең әсәһе командировкаға киткән саҡтарҙа баланың йыйылыштарына ла йөрөргә тура килде. Оксана ла мине яҡын итеп алды. Хатта Айгөлдәр ул ғаиләнән киткәс тә, Оксана урамда күреп ҡалһа, йүгереп килеп ҡосаҡлап ала торғайны.

Мин үҙҙәре генә йәшәп тә килешә алмаған ир менән ҡатынға гел аптырайым. Икәүҙән икәү һөйләшеп кенә ла мөнәсәбәттәрҙе яйға һалып була бит. Скрипка ҡылының береһен генә көйләмәйҙәр. Башта береһен, уға эйәрә ҡалғандарын көйләргә кәрәк. Тәүҙә йәшәү маҡсаты билдәләп, шул маҡсатҡа ҡарап мөнәсәбәттәрҙе көйләйһең.

— Өйләнешкәс маҡсат бер инде. Донъя көтөү, балалар үҫтереү.

— Ошо маҡсатыңа ярашлы үҙгәрергә кәрәк аҙыраҡ.

— Белмәйем, әллә үҙем туң, әллә Зифаларҙың ғаиләһен аңлап етмәйем. Зифаның атаһы ла, әсәһе лә, туғандары ла ғәжәп һәйбәт кешеләр. Барған һайын һоҡланып ҡайтам. Тик шул сөсөлөктәренә өйрәнә алмайым. Берәй нәмә алып ҡайтып, биреп өлгөрмәйһең – рәхмәт тә рәхмәт, ҡайҙан белеп алдың, бигерәк белдеклеһең, тип сөсөләнә башлайҙар. Йәки берәй нәмә эшләп өлгөрмәйһең — ҡулдарың алтын икән, ҡарағыҙ әле еҙнәгеҙ нисек итеп эшләп

ҡуйҙы, өйрәнеп ҡалығыҙ, килегеҙ әле, тип, ваҡыт үткәреп берәй сәғәт һәр береһенә күрһәтеп сығалар. Эшләгән нәмәне емереп ташларҙай булаһың. Әйтерһең, мин маҡталыр өсөн, күргәҙмә өсөн эшләйем. Бер көн баҡсала ишек кәсәген семәрләтеп ҡуйғайным, Зифа: "Ҡара әле ниндәй шәп килеп сыҡты! Бигерәк кенә алтын да инде ҡулдарың!" – ти башлағайны, "Куйсы әле шул сөсө телләнеүеңде. Матур икән – матур. Оҫта икән – оҫта, бала-саға түгелмен дә инде йүкә шына ҡағырға," — тигәйнем, былай ҙа ҡара түңәрәк күҙҙәрен мөлдөрәтеп ҡарап алды ла үпкәләне лә ҡуйҙы.

— Һеҙ ике төрлө тәрбиә алғанһығыҙ, әммә урталыҡ табып була ине... Икегеҙ ҙә яҡшының да яҡшыһы бит...

* * *

Зифа ла күп балалы ғаиләлә үҫкән. Иң өлкән бала булғанлыҡтан, тәрбиәлә төп иғтибар уға йүнәлтелеп, башҡа балалар унан өлгө алырға тейеш булған. "Зифа апайығыҙҙы тыңлағыҙ. Зифа апайығыҙҙан өлгө алығыҙ. Ана ул ниндәй матур итеп өй йыйыштыра. Ана ул керҙе тап-таҙа йыуа. Уның кеүек уҡығыҙ. Ҡарағыҙ әле Зифа апайығыҙҙың нағышлауын. Тип-тигеҙ. Машина менән нағышлаған кеүек". Һәр эшенә баһа алып, маҡталып үҫә Зифа. Институтта ла отличноға ғына уҡый, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша. Бөтәһенә лә өлгө итеп күйыла. Проектлау институтының бүлек начальнигы итеп тәғәйенләнгәс тә иң алдынғыларҙан иҫәпләнә.

Зифаны бүлеккә начальник итеп тәғәйенләгәс, икенсе бүлеккә лә яңы начальник алалар. Һүҙгә әүәҫ кенә, һәр саҡ йылмайып һөйләшә торған ир аҙ һүҙле, һәр саҡ бөхтә кейенеп, текә баҫып йөрөгән, бүлектә эшләгән хеҙмәткәрҙәренә лә бик талапсан был ҡатындың матурлығына һоҡланып, бер нисә тапҡыр комплимент эшләргә ынтыла, әммә Зифаның ҡырыҫлығынан үтә алмай. Бер саҡ ике бүлектең бергә эшләгән проекттарын маҡтап ҡабул иткәс, бәләкәй генә тантана ойоштормаҡсы булалар. Һәр кем өйҙә ниҙер бешереп килтерергә тейеш була. Зифа яңы рецебы менән бәлеш бешерә.

— О-о-о! Аллалар ғына ашай торған бәлеш бит был. Кемегеҙ шул хәтлем оҫта? — ти бүлек начальнигы Хәмит.

— Беҙҙең начальник! — тиҙәр Зифаның бүлегендәге ҡыҙҙар.

— Начальниктан бик уңғанһығыҙ, ҡыҙҙар. Мин уны институт эшенә генә маһир икән тиһәм, ғәжәйеп хужабикә икән!

Зифа был һүҙҙәрҙе ишетмәмешкә һалыша, әммә сикәләренең аҙ ғына ҡыҙарып китеүе һәм керпектәрен һирпеп кенә Хәмит

Вәлитовичҡа ҡарап алыуы һынсыл ҡарашлы ирҙең күңеленә ниндәйҙер өмөт һалып ҡуя. Хәмит Вәлитович ҡайҙандыр икенсе ҡаланан ни өсөндөр ғаиләһеҙ килгән буйҙаҡ ир. Татлы тел таш иретә, тип, уңайы килгән һайын Зифаның һәр аҙымына, һәр эшенә тиерлек баһа бирә, маҡтау һүҙҙәре әйтә, һоҡлана. Был, әлбиттә, Зифаның һыуға сарсаған тупраҡ кеүек йөрәгенә һеңеп кенә тора. Һыуһыҙлыҡтан шиңә башлаған гөл кеүек күңеле, ниһайәт, дым татый, сәскәгә тумала башлай. Эшкә ашҡынып килә, күңеле күтәрелеп ҡайта. Уныһы ла, сәйҙе һин яһаһаң тәмле була, һин киҫеп һалған икмәк тә икенсе төрлө тәм бирә, тигән һүҙҙәрен әйтеп кенә тора. Ошондай һүҙҙәрҙе Заһирынан ишетергә теләй ине Зифа. Исмаһам, бер тапҡыр.

— О-о-о! Ҡалай тәмле еҫтәр аңҡый өйҙә. Минең кәләш тағы ниҙер оҫталай, ахыры! Ҡайҙа, тәмләп ҡарайыҡ әле. Өйҙә тәмле аштар бешереп көтөп торған кешең булғас, әлбиттә, ашҡынып ҡайтаһың! – тип әйтһәсе!

Бер йылға яҡын күңелендә тумалған мөхәббәт сәскәһенә асылып китергә ирек бирмәй, балаһы менән йыуанырға, иренә нығыраҡ һыйынырға, атай-әсәй намыҫына тап төшөрмәҫкә, ҡайныһы менән ҡәйнәһенән оялырға кәрәк, тип үҙен тыйып килгән Зифа, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡапыл ғына хәл итеп, балаһын ауылға ҡалдырып тора ла ял йортона китә. Хәмит Вәлитович менән бергә.

Ҡулдан килгән тиклем йыуатырға тырыштым Заһирҙы. Яратҡан балаң хаҡына түҙергә кәрәк, тип өгөтләнем. Әле ҡайғы баҫыр өсөн баланды барып ал да үҙ ауылыңа ҡайтып кил. Баланы балдыҙың алып килһен. Өлкәндәр ул-был белмәй торһон, тинем. Заһир бөтәһенә лә риза булды. Аҙаҡ бала менән үҙ ауылдарына ҡайтҡан, ял иткән. Зифа ҡайтҡас, уны килеп алған.

Бер нисә көн ауылда булып, Өфөгә ҡайтып барған саҡта, ҡаршыларына машина килеп сыға ла боролмай уларға табан елә. Зифа артабан ни булғанын аңлап та өлгөрмәй, ҡаты бәрелеү, шаңҡыу... Кешеләрҙең: "Водитель үлгән", – тигән һүҙҙәре генә мейеһен ярып инә. Аҙаҡ, был хәлде тикшереүсе милиционерҙар, Заһирҙың иҫ китмәле етеҙлек һәм сослоҡ менән үлем ҡурҡынысы аҫтына үҙен ҡалдырып, ғаиләһен ҡотҡарыу сараһын күреүен аптырап һөйләйҙәр.

Мин был хәлде ишетеп килеп еткән саҡта, Заһирҙы күптән ерләгәйнеләр инде. Авария ваҡытында Зифа ла яраланғайны. Мин килгәндә бәләкәй улы ла, үҙе лә больницала ята ине. Улар янына индермәнеләр. Бер аҙҙан Зифанан хат алдым.

"Донъя йәме юғалды минең өсөн, апай. Ҡайҙа булды ул ҡояш

нуры, аш тәме? Һин өйрәткәнсә ағын һыуҙарға ла ҡарап торам, янған усаҡҡа ла текләйем — онотола алмайым. Йәшәү ҡото менән бәйләп торған еп шартлап өҙөлдө. Һиҙмәнемме, көтмәнемме өҙөлөү сигенә килеп еткәнен, абайламай ҡалдыммы? Ә бит бәхетле инек. Заһирҙың ипле генә итеп йылмайыуҙарын бер нәмәгә лә алмаштырырлыҡ түгел ине. Баҫалҡы ғына итеп һөйләшеүе, баҡсала эшләгән саҡта моңо тап килмәһә лә көйләп йөрөгән булыуҙары… Үҙе бер йәшәү ине бит, апай. Һине хөрмәт итте ул. Һин аралашҡан ҡатын-ҡыҙҙарҙан Мәрйәм апайҙы ғына яҡын күрәм, ти торғайны. Институтта уҡығанда, күрешкән саҡтарҙа, бер-беребеҙ менән осрашҡанда, йөрәктәребеҙ күкрәктән осоп сығырҙай ярһый торғайны. Ул өндәшмәй генә йылмайып ҡарап тик тора, ә мин һөйләйем дә һөйләйем, һөйләйем дә һөйләйем. Ни һөйләнем икән? Ниндәй хәбәр менән сәғәттәр буйы ауыҙыма ҡаратып тоттом икән уны! Ошоларҙы хәтерләйем дә ҡайнар күҙ йәштәрем аша йылмайырға тырышам. Булды, булды беҙҙең бәхетле минуттарыбыҙ! Мин уға аҙ ғына булһа ла бәхет бирә алдым, тип йыуанырға тырышам. Үҙем биргән бәхетте үҙем... Апай, әйт әле, кем ғәйепле бында? Баламдың атаһын тартып алырлыҡ ауыр инеме гонаһым? Балабыҙҙың ҡайғыһын тәрәнәйтмәҫ өсөн йыш иламаҫҡа тырышам. Тик ҡәберенә барам да... тупраҡ алып күкрәгемә ҡыҫып үкереп илайым. Ыҫтылып ҡына тартып алыр ерҙә ята бит һуң! Нисек баҫайым йөрәгем ярһыуын? Тамағым ҡарлыҡҡансы: "Ғәфү итә алһаң, ит, йәнем!" – тип ҡысҡырайыммы? Әллә ҡәбер тупрағын ҡулдарым менән тырнап асып, ҡулдарын тотоп ғәфү үтенәйемме унан? Ул ишетмәй. Ул бер ни белмәй. Ул тыныс. Ана, алдымда һуңғы фотоһы ята. Тыныс. Ҡайҙа һыҙланыуҙарың? Ҡайҙа әрнеүҙәрең? Ҡайҙа асыуың? Фотола... Апай, мин бала күтәреп торам. Ә ул беҙгә ҡараған. Шундай ҡараш! Мөлдөрәмә тулы һөйөү бит унда... Апай, миңә тағы ни кәрәк булды икән? Ни етмәне миңә? Һин дә оло юғалтыу кисерҙең. Һин дә бына тигән кешене юғалттың. Тик мин беләм — уның өсөн ниҙәр генә эшләмәнең, уның ғүмерен һаҡлау өсөн үҙең менән иҫәпләшмәнең бит. Шуға һин бик өҙгөләнмәйһеңдер. Һин бит уның өсөн ҡулыңдан килгәндең барыһын да эшләнең. Намыҫ таҙалығы ҡайғыны еңеләйтә икән...Ҡайғы ҡара тиһәләр ҙә, төрлө булғанын аңланым. Һинең ҡайғың — аҡ ҡайғы. Һин уны булдырмаҫҡа тырыштың. Ә мин үҙем яһаным..."

Зифа менән Заһир фәжиғәһе тураһында нисек уйлаһам, шулай яуап яҙҙым.

"...Зифа, һин дә ул хәтлем өҙгөләмә үҙеңде. Һеҙ икегеҙ ике төрлө

тәрбиә алған кеше инегеҙ. Әлбиттә, Заһирҙың үлеме оло юғалтыу. Әммә һинең ғәйебең юк бында. Һин уға аҙғынлыктан хыянат итмәнең, ә күңел бушлығы кисерә инең. Заһир быны аңланы. Һин ялда ваҡытта һөйләшеү булғайны..."

Был ваҡиғанан күренеүенсә, Зифа менән Заһир ике төрлө һәйбәт ғаиләлә тәрбиә алғандар, һәм уларҙың тәрбиә һөҙөмтәһе ҡанға һалынған аңға тиң булырлыҡ көслө нығынған. Әммә уны үҙгәртеп була ине. Үҙтәрбиә менән шөғөлләнгән кеше тәрбиәне генә түгел, хатта ҡандан һалынған аңды ла үҙгәртә ала. Маҡсат ҡуйырға һәм Эске энергияңды эшкә ҡушырға кәрәк.

Эске энергия иҫ китмәле көскә эйә. Уның аша ҡанға һалынған, әммә ваҡытлыса ойоған, йоҡомһораған тойғоларҙы уятып ебәрергә, камиллашыуға ынтылыш бирергә мөмкин.

Сәлимә менән Ғәлимә

Бер ғаиләлә Сәлимә менән Ғәлимә исемле игеҙ ҡыҙҙар үҫә. Уларҙың татыулығы ғәҙәттәге игеҙҙәр кеүек кенә булмай, бер-береһенән аҙ ғына башҡа торһалар ҙа шунда уҡ һағыныша башлайҙар, береһенә ҡатыраҡ һүҙ әйтеүсе булһа, икенсеһе, ни эшләп беҙҙе рәнйетәһең, тип икеһе өсөн дә яуап талап итә. Бер ваҡытта ла мин тип кенә һөйләмәйҙәр, һәр саҡ, беҙ, тиҙәр. Буй еткергәс, икеһе лә бер юлы тигәндәй ғашиҡ була һәм, оҙаҡҡа һуҙмай туйҙар үткәреп, ғаилә ҡороп та ебәрәләр. Сәлимәнең бер-бер артлы балалары тыуа, Ғәлимәнеке булмай. Биш балалы Сәлимә алтынсы бала көткән саҡта ғына Ғәлимә лә оҙаҡ көткән шатлыҡ кисерә — ауырға ҡала. Береһен бер көн, икенсеһен икенсе көндә ҡала больницаһына оҙаталар. Икеһенең дә ирҙәре бер аҙҙан Сәлимә менән Ғәлимәне алып ҡайта, тик Сәлимәнең балаһы үле тыуған тигән хәбәр тарала. Ғәлимәнең балаһы бик сибек кенә сабый була. Уны тәрбиәләү шарттары яҡшыраҡ булһын өсөн, ғаилә ҡалаға күсеп китә. Сәлимә балаһын юғалтыу ҡайғыһын бик ауыр кисерә, икенсе йылына иҫәп буйынса етенсе балаһын алып ҡайтҡас ҡына бер аҙ ҡайғыһы тарҡала.

Күп балалы әсә — Сәлимә апай тураһында яҙырға тигән ниәт менән мин туп-тура уларҙың үҙҙәренә килдем.

Сәлимә апайҙар йәшәгән йорт ауыл осонда, бик матур урында. Ишек алды ҙур. Йәм-йәшел ҡаҙ үләне. Мал икенсе ҡапҡанан

йөрөй, ишек алды аша үтмәй. Шуға ишек алды таҙа, йәшел, ҡаҙ үләне түшәлеп ята, сәскәле. Ә балалар ғәжәп матурҙар һәм теремектәр. Өлкәндәре ҡул араһына инә башлаған. Сәғәтенә нисә тапҡыр әйтеләлер "әсәй" тигән һүҙ! Әле береһе, әле икенсеһе "әсәй" ҙә "әсәй" тип әле эш һорап, әле башҡарған эштәрен күрһәтеп, әле башҡа йомош менән йүгерешеп йөрөй.

— Атайҙарына бик мөрәжәғәт итмәйҙәрме? Гел әсәй ҙә әсәй, тиҙәр, — тип һорайым.

— Өй тирәһендә күберәк мин булам бит. Атайҙары әллә ни өйҙә лә тормай. Колхоз эше шул инде, таң һарыһынан тороп китә, ҡараңғыла ҡайта.

Бөтә ғаилә йыйылып аш ашарға ултырҙыҡ. Ашау урыны тышта. Иркен. Япма аҫтында. Күмәкләшеп йөрөп һауыт-һаба, ҡашығаҡ, аш-һыу ташыныларҙ. Бәләкәйҙәре сынаяҡ һанашһынмы, ҡалаҡтар теҙһенме. Ашарға ултырышҡайныҡ, балалар күберәк булып китте. Береһе Сәлимәгә "инәй" тип өндәшкәс, уның икенсе кеше балаһы икәнлеген аңланым.

— Бынығы һеҙҙеке түгелдер. Һеҙҙең унауһы ла ҡыҙ бит.

—Ғәлимәнең улы, — тине лә Сәлимә апай, баланы тупылдатып һөйөп ҡуйҙы. —Ғәлимәнең игеҙ балалары тыуҙы. Мәшәкәте ҙур. Шуға бынығы бында.

— Быларынан айырып алғыһыҙ. Бер туғандар кеүек, — тинем. Малайҙың өҫ-башы ҡаласараҡ булғас, тағы һорай ҡуйҙым.— Ҡаланан килдеме?

—Ғәлимәләр ҡалала йәшәй биреп алды ла, хәҙер ауылға ҡайттылар, рәхмәт яуғырҙар, — тип, тағы бик ҡәнәғәт йөҙ менән баланы һөйөп алды. Бала ла иркәләү йылыһына һыйынып ҡына бара ине.

Уғаса Ғәлимә апай ҙа килеп етте. Сәлимә апайҙан айырып алғыһыҙ ине. Тик кәүҙәгә генә сибегерәк. Бала "әсәй" тип ҡаршы йүгерҙе. Ғәлимә баланы күтәреп алып һөйҙө лә төшөрөп, минең менән күреште. Сәй эскәс, балалар таралышты. Мин Сәлимә апайҙың ғаиләһе, балалары, ире тураһында һораша башланым.

— Мәрйәм һылыу, әгәр мөмкин булһа, яҙма һин минең турала. Йәме? – тип үтенде Сәлимә апай.

Ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙарҙың үтә баҫалҡылығына өйрәнеп бөткәйнем инде. Эштә алдынғы булһындармы, ғаиләлә өлгөлөмө - мине яҙма, ти ҙә тораларҙ. Шуға ни өсөн тап Сәлимә апайҙар тураһында яҙырға тейешлегемде аңлата башланым.

— Мин шул тиклем матур ғаиләгә килеп юлыҡтым. Башҡаларға өлгө булырлыҡ итеп яҙа алһам ярар ине, тип уйланып ултырам.

һәр балағыҙҙың үҙенсәлекле холҡо, ә һеҙҙең һәр береһенә үҙенсәлекле мөнәсәбәтегеҙ бар. Һәр олоһо бәләкәйен хәстәрләгән була, ҡырмыҫҡалар кеүек бөтәһе лә эшләп маташа. Өҫтәүенә, туған йәнлеләр. Ни эшләп яҙмаҫҡа, ти?

Сәлимә апай бер аҙ өндәшмәй ултырҙы ла, һикереп тороп:

— Туҡта әле, һылыу, сәй яңыртайым, — тип, самауырына һыу һалды.Ҡуҙ өҫтәне. Ризалаттым, ахыры, тип ҡыуандым үҙ алдыма. Самауыр шыжлай башланы. Сәлимә апай сәй яһаны ла, миңә һуҙҙы. Сынаяҡ өҫтө зың-зың "бейей" ине. Сәлимә апайҙың шулай ныҡ тулҡынланғанына аптырап киттем. Ул керпек һирпеп кенә миңә ҡарап алды ла еңелсә генә көрһөнөп һүҙ башланы:

— Һылыу, яҙҙырмауымдың сәбәбе итеп түгел, йөрәгемдең бер серен һиңә асҡым килеп һөйләйем. Йөрәгемде һәр ваҡыт өйкәп торған нәмә барлығын бер күрәҙәсегә һөйләгәйнем, сер һыйырлыҡ, кешегә сығармаҫлыҡ кешегә генә һөйләп, бушанып ала торғаның бар. Ауыр бер нәмә һаҡлайһың йөрәгеңдә. Шул ихласлығыңдың ишеген биклəп тик тора, тине. Үҙем дә беләм шулай икәнлеген. Тик кемгә һөйләһәм дә серем асылыр ҙа барыһы ла селпәрәмә килер кеүек. Һылыу, һиңә һөйләргә яҙғандыр, — тине лә ғәжәп бер хәл тураһында һөйләне Сәлимә апай.

(*Хәҙер был ваҡиға тураһында яҙһам да ярайҙыр. Сәлимә апайҙан: "Бер ваҡыт, исемдәрегеҙҙе үҙгәртеп, яҙһам –рөхсәтме?" – тип һорағас, "Таныманаҫлыҡ ҡына итеп яҙһаң ни – яҙырһың", – тигәйне тартынып ҡына.*

Яңы ғына кеүек тойолһа ла ҡырҡ йылдан ашыу ваҡыт үтеп киткән был командировкаға... Яҙмыш беҙҙе ҡабаттан осраштырманы.)

"...Минең биш балам булды. Алтынсыһына ауырға ҡалдым. Ғәлимә ире менән айырылышыу сигенә етте.

— Миңә бала кәрәк, – тип теңкәһенә тейҙе ире. Ғәлимә үҙе лә балаһыҙлыҡты ауыр кисерҙе. Уларҙың хәсрәт утында яныуын күреү миңә лә еңел түгел ине. Игеҙ һыңары булғас, бала табыу мөмкинлеген тотош алғанмын да, Ғәлимәне оло бәхеттән мәхрүм иткәнмен кеүек тоя башланым үҙемде. Йөрәгем һыҙлауҙан туҡтаманы. Ғәлимәне йәлләнем, ирен бик ярата, унһыҙ ни эшләр? Ир бирмәк, йән бирмәк, тип ҡайғырҙым. Туған менән бала ҡайғыһы бирмәһен, һылыуҡайым. Йә ярҙам итеп булмай, йә һыпырып ташларлыҡ түгел — күкрәктә ҡуҙ һымаҡ нәмәлер яндырып тик тора. Бер ваҡыт төн уртаһында уянып киттем. Ниндәйҙер бер фекер йөрәгемде өтөп алды ла ҡапыл зиһенемде яҡтыртып ебәрҙе. Уйланып ята торғас, был фекер шунан ғибәрәт булды: алтынсы баланы уға бирергә булдым. Бының өсөн Ғәлимә лә үҙен ауырға ҡалған итеп күрһәтергә тейеш ине. Бер туғаныбыҙ врач ине, уның

менән сер беркетеп ҡуйҙыҡ. Ғәлимәнең ире ҡалаға эшкә урынлашам, тип киткәйне. Бәлки, бөтөнләй сығып китергә лә уйлағандыр. Бик оҙаҡ ҡайтмай йөрөй ине. Ҡайтһа-ҡайтмаһа ла, Ғәлимәне бәхетле итеү сараһын күрәйем әле, тип хәл иттем. (*Аҙаҡ Ғәлимәнең хәлен ишеткәс, һыйлым да ҡайтты.*) Баланы имеҙмәҫ элек бирергә булдым. Имеҙһәм, айырыла алмаҫ инем. Ул саҡтағы һыҙланыуҙар, ул саҡтағы үҙәк өҙөлөүҙәр... Ғәлимәләр йәшәргә ҡалаға күсеп китте. Баланы яһалма аҙыҡ менән үҫтерҙеләр. Ә мин, һөт төшкән һайын сабыйымды йәлләйем, йөрәк һыҙлай. Әйтерһең, тамырҙарым тиртеп һөт төшмәй, ә баланың имгеһе килеү теләге миңә һыҙланыу булып ҡайта. Етенсеһен тапҡас ҡына, бер аҙ тынысландым. Ғәлимәләр бик матур йәшәп китте. Уның өсөн шатлығым ҙур булды, ана шул ҡайғымды еңеләйтте.

Ситтә йәшәгән саҡтарында, балаға өс йәш тулған йылда, тәүгә генә ауылға ҡайттылар. Бала шул тиклем миңә оҡшаған. Үҙең дә күрҙең. Уныһы ла яҡшыға. Иремә оҡшаһа, фашланыр йәки әллә ниндәй нахаҡ һүҙҙәргә ҡалыр инек. Өҫтәүенә ир бала. Хоҙай ризалығы булғандыр. Бер көн Ғәлимә менән ишек алдында һөйләшеп торабыҙ. Балалар уйнай. Шул саҡ уртаҡ балабыҙ кәртәләү аша һикереп сығам тип, ҡапыл ҡолап төшә яҙҙы ла итәгенән һағып торҙо. Баланы хәүефтән йолоп алып ҡалырға тигән ынтылыш ҡапыл ҡан тамырҙарымды уйнатып, хәрәкәттәремә етеҙлек, сослоҡ өҫтәп ебәрҙе, ҡолап китте тигән ерҙә баланы эләктереп алдым. Һигеҙ айлыҡ ауырым бар ине, уны ла һиҙмәй атылдым. Ә Ғәлимә аптыранып тик тора... Ҡымшанмай ҙа... әсәйлек тойғоһо, әсә һиҙгерлеге шыпа ла юҡ. Был хәлдән һуң байтаҡ уйландым, шунан тыныс ҡына йәшәй алмаҫымды аңланым. Балам һәр саҡ хәүеф менән күҙмә-күҙ бер үҙе ҡалыр кеүек тойолдо. Шунан һуң Ғәлимәгә:

— Ҡайтығыҙ һеҙ ауылға. Мин бала өсөн борсолоп тик йөрөрмөн, — тигәс, Ғәлимәләр ҡайтты. Һыйлым, Ғәлимәнең ире (*беҙҙең яҡта тиңдәшеңдең ирен йәки ҡатынына шулай тиҙәр*), ҡаланы өнәп етмәй ине, ихлас ризалашты. Өй күтәрештек. Имен, татыу тормош менән йәшәйҙәр. Ҡайтыуҙарын ҡотлап игеҙ балалары тыуҙы. Быныбыҙ ике арала йөрөй. Миңә "инәй", ти. Барыбер әсәй инде.

Тағы бер хәлде һөйләп үтәйем әле. Бәләкәй саҡта Ғәлимә менән гел генә өй уйнай торғайныҡ. Балаларыбыҙ күп булыр ине. Ә беҙ бер өйҙә ике әсәй булып уйнайбыҙ. Балалар уртаҡ. Әсәйебеҙ: "Уй ошоларҙы... Уйыңа килгән алдыңа килә, ти халыҡ. Берәй яман хәлгә осрап ҡуймаһағыҙ ярар ине үҫкәс", – тип әрләй торғайны.

Бына бит нисек килеп сыкты.

— Бала үзе лә яҡын итеп торалыр әле? – тинем, был хәлгә ныҡ аптырап, тауышым да хатта ҡалтыраныбыраҡ сыҡты.

— Һылыу, һине өшөттөм, ахыры. Өйгә инһәк тә булыр ине. Әллә ни эшләп аласыҡта һөйләге килде. Хәсрәттәремдән, һыҙланыуҙарымдан ҡалған яраларым һәр һүҙем, һәр тыныуым менән уңала барыр, төнгө тынлыҡта тирә-яҡҡа таралып юғалыр, тип уйлауымдыр. Ауыр саҡта әллә ниндәй ырымдарға ышанғы килә. Йөрәктә яра һаман йөрөй. Бала алдында үҙемде ғәйепле тоям. Ирем алдында ла, тәбиғәт алдында ла... Үҙ намыҫым алдында ла. Төштәрем менән өнөмдө бутай башланым. Уяулы-йоҡоло төндәрем дә аҙ булманы. "Әсәй!" – тип, өҙәләнеп, үҙәккенәмде өҙөп ҡысҡырып ебәргән тауышҡа һиҫкәнеп китәм. "Ҡайһы балам ҡысҡырҙы икән?" — тип эҙләйем. Береһе лә ҡысҡырмаған. Бөтәһе лә тып-тыныс. Тик ошо балам ғына йән ғазаптары кисерә, мине эҙләй-эҙләй ҙә: "Әсәй!" – тип ҡысҡырып ебәрә. Шунан ярамаған һүҙ ысҡындырған кешеләй, ауыҙын ҡаплай, ҡурҡып ҡына миңә ҡарап ала, имеш. Үҙемде йыуатам. Ғәлимә бәхетле, балаң яныңда – тыныслан, тип йыуатам. Ә барыбер күңел бушанғансы һөйләй алмағас, төйөр булып тик тора. Элек ҡалай дөрөҫ ғәҙәт булған әле... Ғәҙәтме, йоламы, ырыммы тигәндәй. Әсәйем һөйләй торғайны. Ҡайғы күтәрә алмай, һарғайып ауырый башлаған кешене тау итәгенә алып барып һөрәнләтә торғайнылар, ти. Урман яңғыратып, тау-таш ярырлыҡ итеп һуҙып тороп ете тапҡыр һөрәнләһә, ҡайғыһы баҫыла, тигәндәр. Мин дә ҡайһы саҡта, урманға сығып, япа-яңғыҙ ҡалып ҡысҡырып-ҡысҡырып илап алайыммы икән әллә? – тип уйлай торғайным. Бына, һылыу, рәхәт булып ҡалды. Бөгөн төшөмдә күрҙем мин ошолай күңел рәхәтлеге кисерәсәгемде. Яҡшыға юрағайным.

...Баҡсамдан еләк өҙөп ашайым тиһәм, әллә ниндәй имәнес ҡорт баҫҡан. Шул тиклем ашағым килә — ҡорттарҙан таҙартып-таҙартып ҡабырға ынтылып ҡарайым — ауыҙға яҡын килтерер әмәл юҡ, мыжғып торалар. Шунан эргәләге иләүҙән ҡырмыҫҡалар ябырылды теге ҡорттарға. Әйҙә, берәм-берәм ашайҙар тегеләрҙе. Ҡорттарҙы ашаған һайын, еләктәр матурыраҡ булып ҡала... Йылмайып уянып киттем. Һуңғы йылдарҙа беренсе тапҡыр шулай йылмайып уянғанмындыр. Ғәлимәләр күсеп ҡайтҡас та ныҡ ҡыуанғайным, тик үҙемде нисек тотормон икән тигән хәүеф ҡатыш шатлыҡ ине ул. Шатлыҡтың да төрлөһө була бит...

Рәхмәт, һылыу. Ҡарашың йомшаҡ. Кешене тыңлай беләһең. Әллә ҡасандан һине белеп, көтөп алған һымаҡмын. Бәхетле бул.

Хәсрәтемде бушаттым. Еңел булып ҡалды, — тине Сәлимә апай.

—Ғәлимә апайҙар күсеп ҡайтып, бала яныҡыҙҙа булғас, тыныҫланып ҡалғанһығыҙҙыр әле.

— Янымда булыуынан ғына түгел, һылыу. Ғәлимәнең үҙ балалары тыуыуы тыныҫландырҙы. Әсәлек тойғоһо уянды Ғәлимәлә. Хәҙер ҡолатыу түгел, сит-ят кешенең ҡарашынан да ҡурсалай. Бәләкәйҙәре ыңғайына бынығын да сосолтоп күтәрә һалып ала. Бала тауышы ишетеү менән тертләп кенә тора. Ана шул тыныҫландырҙы...

"Әсәйлек тойғоһо уянды Ғәлимәлә". Бына бит ул ҡанға һалынған, әммә йоҡомһораған тойғо нисек уяна ла тотош булмышыңды ялмап ала һәм үҙгәртеп тә ебәрә! Тәбиғәт, Тәңре, Алла, Хоҙай аңда йоҡомһораған тойғоно ҡайтанан уятһын өсөн йүнәлеш бирергә кәрәк. Был осраҡта, әсә булыу тойғоһо уянһын өсөн, Ғәлимәгә бала алыу һәм Эске донъяһында әсәлек тойғоһо уянырлыҡ йүнәлеш бирергә кәрәк булған.

Аҫырауға бала алған ҡатындың аҙаҡ үҙенең дә бала табыуы йыш ҡына осрай. Күрәһең, балаға ҡалмауына үҙе лә борсолоп, кешенән дә тартынып, иренән дә йәберһетелеп, кәйефе балаһыҙ булыуға көйләнә башлай. Ә бала алғандан һуң, әсәлек тойғоһо уны ҡанатландырып ебәрә, ул үҙен тиңдәр араһында тиң һанай башлай, ғорурлана, үҙен әсәй тип ышандыра. Кеше булмышы быға күнә, әсәй булыу тойғоһо уның йоҡоға талған, йомоҡланған күҙәнәктәрен уята, аңына тәьҫир итә, үҙгәреш индерә.

Тимәк, ҡанға һалынған аңды фәҡәт эске көс тәьҫире менән генә уятып була. Ә эске көстө йәнләндереп ебәреү кешенең үҙенән тора. Психотерапия алымдары тәбиғәттең ошо мөмкинлегенә нигеҙләнгән һәм иҫ китмәле һөҙөмтәләр бирә.

Ҡанға һалынған эске мөмкинлекте файҙаланыу, ҡабатлап әйтергә кәрәк, кешенең үҙенән тора.

Аңдағы йоҡомһораған ҡайһы бер тойғоларҙы уятып, булмышыңды үҙгәртерлек көскә әйләндереп ебәреүҙә һүҙ көсөнөң әһәмиәте ғәйәт ҙур.

Тел телеп һала, тип юҡҡа әйтмәгәндәр. Һүҙ көсө менән ни теләһәң, шуны эшләп була. Теләйһең икән — яраштыр, теләйһең икән — талаштыр. Теләһәң — һауыҡтыр, теләһәң — ғүмерлек сиргә һал.

Күңел күрке

(*Нәҫер*)

Һине күрҙем кисә. Күкрәгеңде киреп, ҡулдарыңды иркен һелтәп, ышаныслы баҫып килә инең. Йөҙөң ҡояштай балҡыған, күңелендәге нур тирә-яҡҡа һирпелгәндәй, күҙҙәрең генә түгел, бөтә булмышың йылмайғандай.

— Ҡыуанысың оҙаҡҡа булһын, — тинем, шатлығыңды уртаҡлашып. — Аллы булдыңмы, маллы булдыңмы?

— Яҡшы һүҙ малдан артығыраҡ. Бер һүҙ! Бер һүҙ әйттеләр миңә! — тинең дә, йәнеңә аҙыҡ булырлыҡ балдан татлы һүҙгә ләззәтләнеп ары киттең.

Яҡшы һүҙ – йөрәккә ял бит ул, тип ҡарап ҡалдым һин киткән яҡҡа.

Зарығып көткән оҙон көндәреңде күҙ асып йомғансы килеп етерлек, үкенесһеҙ минуттарыңды мәңгелек яһарлыҡ ҡеүәтле һүҙҙәр була шул кеше йөрәгендә. Бер һүҙ... Бер яҡшы һүҙ әйткәндәр һиңә. Тоҙһоҙ тойолған ашыңды тел йоторлоҡ тәмләтерҙәй, моңһоҙ тигән көйөңдө тыңлап туйғыһыҙ йәмләтерҙәй, күтәргеһеҙ ауыр йөгөңдө һыңар ҡуллап сөйҙөрөрҙәй һүҙ әйткәндәр һиңә.

Осраҡҡанда яҡшы һүҙен әйтеп ҡалырға ашҡына шул изге күңелле кешеләр.

...Бөгөн күрҙем һине. Затлынан-затлы йөҙөңә һөрөм яҡҡандармы ни! Йөҙөңдәге йылмайыуҙы һыпырып алғандармы ни!

— Ни булды? Ауыр ҡайғы төштөмө башыңа, ҙур юғалтыумы? – тинем, хәсрәтеңде бүлешергә ашығып.

— Бер һүҙ... бер һүҙ... — тинең дә, башыңды түбән эйеп китеп барҙың.

Олоһомо кесегә шәфҡәт итмәне? Кесеһеме уҙаманды хөрмәтләмәне? Яңы тыуған аяҙ көндөң ҡояшын мәлһеҙ байытырлыҡ яман һүҙле кеше кем булды? Йәнеңә йәрәхәт һалырлыҡ, ашҡынып барған юлыңда тәрән упҡын уйҙырырлыҡ әйтелгән һүҙ ни булды? Ниндәй һүҙ ине ул? Ҡуҙҙай ялҡынды боҙҙай итерлек ул яман һүҙ ҡайҙан килеп сыҡҡан? Әҙәм йөрәгенәнме? Беләктәге быуынды, мейеләге зиһенде алырлыҡ һүҙҙәр ҙә була шул әҙәм йөрәгендә. Һөйҙөрәһе урынға йәндәреңде биҙҙерерлек, шатлыҡтан һөйөнөс алам тигәндә тел асҡысын юғалтырлыҡ һүҙҙәр ҙә була шул әҙәм йөрәгендә. Көн яманы китһә лә, һүҙ яманы китмәгәнен, шул һүҙ иҫенә төшкән һайын күҙ алдына Ҡәһҡәһә затлы йән эйәһе булып баҫасағын белмәгәнме ул кеше? Яман һүҙе артынан ҡәҙерен юғалта барғанын белмәгәнме ул кеше...

Байрамдарҙа беҙ туғандарға, дуҫ-иштәргә, яҡындарға аҫылдан да аҫылдарын, яғымлынан да яғымлыларын, күңел күрке булырлыҡтарын әйтәйексе һүҙҙәрҙең. Тышта буран ҡоторһа ла, күңелдәрҙә сәскә атһын, күкте болот ҡаплаһа ла, меңмең йондоҙ баҙлаһын.

Ә, уйлап ҡараһаң, кеше ғүмере – мәңгелек ғаләм тормошоноң керпек ҡағып алған арауығында үтеп китер мәле генә. Шуға ла ҡиммәтен белеп, һәр минутының ҡәҙерен тойоп, бер-береңде бәҫһеҙләмәй йәшәйек ғүмер тигән мөғжизәне.

Нәзифә

(*йәки һүҙ тәьҫире тураһында*)

Бергә эшләгән бик һөйкөмлө, матур, ипле, аҡыллы Нәзифә исемле бер ҡатын, үҙ эсенә бикләнеп, ауырыуға һабышҡан кеше кеүек өндәшмәҫкә әйләнде лә ҡуйҙы. Тулы ғына, йоморо ғына кәүҙәһе шиңгәндән-шиңә барҙы. Эс серен белергә теләйем, ҡайғыһы булһа, уртаҡлашайым, ярҙам кәрәк булһа, ҡулдан килгән тиклем ярҙам итәйем, тигән ниәт менән һүҙ башлап ҡарайым. Юҡ, өндәшмәй — эстән һыҙа. Бер көнө эштән ҡайтырға бергә сыҡтыҡ. Нәзифә автобус ишегенән инде лә мөйөшкә генә һыйынып баҫты.

— Әйҙә, алда урын бар. Ултырайыҡ, — тием. Баш тарта.

— Оялам, — ти.

— Нимәнән оялаһың?

— Йәмһеҙлегемдән.

— Кем йәмһеҙ? Һинме? Ни эшләп улай тиһең? — Мин аптырап киттем.

— Ирем шулай ти. Һинең менән урамда йөрөргә лә оялам. Ауылда ғына ҡәҙимге күренгәнһең икән. Бында әҙәм ҡарағыһыҙһың, — ти.

Эштең ниҙә икәнлеген аңланым. Иртәгәһен бергә эшләгән бер ҡатын менән кәңәшләштек тә бик матур күлдәк һатып алдыҡ. Теге ҡатын, үҙемә алғайным, тар булды, кейеп ҡара әле, тип әйтергә тейеш ине.

Нәзифә күлдәкте кейеп ҡараны. Матур зәңгәр күҙҙәренә зәңгәр төҫлө күлдәк тәненә кипсәлеп кенә тора, йөҙөн дә асып ебәрҙе. Нәзифә көҙгөгә ҡарап моңһоу ғына йылмайып ҡуйған булды.

— Ал. Бигерәк килешә бит, – тибеҙ.

— Аҡсам да юҡ, ирем менән кәңәшләшмәйенсә алыу ҙа уңайһыҙ.

— Аҡсаһын яйлап түләрһең әле. Ашыҡтырмайбыҙ. Эш хаҡы алған һайын аҙлап бирерһең йәки өҫтәмә эш алырһың.

Өгөтләй торғас, күлдәкте алдырттыҡ. Бергә эшләгән ир-егеттәрҙең дә күҙенә салынды был үҙгәреш, улар ҙа маҡтау һүҙҙәре әйтте. Һүҙ һыйырлыҡ, сер һатмаҫлыҡ кешеләр аша уның матур ҡатын икәнлеген зиһененә һала башланыҡ. Эш аҙыраҡ көндәрҙә кино ҡарарға, магазиндарға йөрөргә лә эйәртә башланыҡ. Беҙ тегендә-бында барған саҡта, башым ауырта, ауырыйым, тип, һылтаулап ултырып ҡалғанлығының сәбәбенә төшөндөк. Урамда ла кешенән йәшеренмәй, оялмай, кәүҙәһен тура тотоп текә баҫып йөрөй башланы. Ярты йыл да үтмәне, бына тигән сибәр ҡатынға әйләнде Нәзифәбеҙ. Ире үҙе көнләшә башланы, эштән ҡаршы килеп алыр булып китте.

Спортсы

Тағы бер ваҡиға. "Башҡортостан" (*Ул саҡта "Совет Башҡортостаны"*) гәзите редакцияһында сибек кенә, кәүҙәгә бәләкәй генә бер ир эшләй ине. Ҡатыны уны һанға һуҡмай ташлап сығып киткән. Ә ир кеше – А. Б. ағай йәшәүҙән тамам төңөлгән.

Машинистка ҡатындар бик шаян да, кешегә иғтибарлы ла, хәстәрлекле лә була торғайны. Орҡоя Хәйбуллина, Фәниә Гәрәева апайҙар менән һөйләштек тә: "Был ағайҙы маҡтап, күңелен күтәреп, ирәйтеп ебәрәйек әле, юҡҡа сығып ҡуймаһын, йәш бит әле, бәлки, өйләнер ҙә. Һәйбәт кеше," – тигән һығымтаға килдек. Мин тәржемәсе булып эшләйем. Ул саҡтарҙа тәржемәне ҡулдан яҙып эшләмәй, туранан-тура машинисткаларға әйтә инек. Шуға гел генә машбюрола була торғайным. Байтаҡ ҡына тәжрибә туплаған, донъя күргән өлкән апайҙар менән көндәр буйы бергә булыу, һөйләшеү, кәңәшләшеү минең үҙемә лә фәһемле була ине. Әле инде күҙ алдында шиңә, юҡҡа сыға барған ир кешене ҡурсалап ҡалыу хаҡында кәңәш ҡорабыҙ.

Ошондай һығымтаға килдек. Был ир кешенең башҡаларға оҡшамаған өҫтөнлөгөн табып, ошо өҫтөнлөктө фәҡәт уның ғына ҡаҙанышы булараҡ маҡтарға кәрәк. Шул саҡта ул үҙенә икенсе күҙ менән ҡарай башлар. Бер көн шулай кәңәш-төңәш итешеп һөйләшеп кенә ултыра инек — бәләкәй генә булып, күҙлеген рәтләй-рәтләй башын бик ныҡ эйеп теге ағай килеп инде.

— Ағай, беҙ тап һеҙҙең турала бәхәс алып барабыҙ. Беҙҙең редакцияла зәп-зәңгәр күҙле кеше Әниф Бикҡолов ҡына, тиҙәр. Ә мин,

һеҙҙең дә күҙҙәрегеҙ зәп-зәңгәр, болотһоҙ күк йөҙө һымаҡ, тием. Ышанмайҙар. Күҙлегегеҙҙе сисеп, күҙ ҡыҫып ебәрегеҙ әле йәшерәк машинистка ҡыҙҙарға, ағай. Минең еңелеп ҡалғы килмәй, — тием.

Ағай күҙлеген сисеп, йылмая-йылмая тирә-яҡҡа ҡарап алды. Ҡулъяулығын сығарып бик оҙаҡ итеп күҙлеген һөртөп ултырҙы. Үҙе шул арала алмаш-тилмәш машинисткаларға ҡарай ине һәм бер аҙҙан хатта Эстонияла армияла хеҙмәт иткән саҡта күҙҙәренең тап-таҙа зәңгәрлеге арҡаһында уны эстон егете тип уйлап, эстонса белмәгәне өсөн тетеп әрләгәндәрен дә һөйләп ебәрҙе. Унан һуң, мәҡәләһен баҫтырып алды ла, кәүҙәһен башҡа ваҡыттағыға ҡарағанда ҡупшыраҡ тотоп, яурындарын яҙып, текә баҫып, эре-эре аҙымлап атлап сығып китте.

— Һин күҙлек аша уның күҙҙәрен ҡайҙан абайлап ҡалдың? Күҙең үткер ҙә инде. Ысынлап та, зәп-зәңгәр шул, — тине Фәниә апай.

Был ваҡиғанан һуң уның галстугын маҡтап ебәреү, яңы күлдәгенең килешеүен, ғөмүмән, уның зауыҡ менән кейенә белеүен маҡтауҙар йыш ҡына ҡабатланып торҙо. Ағайыбыҙ күҙгә күренеп үҙгәреп китте. Шаянлығы кире ҡайтты. Көләмәстәр һөйләй, шаян һүҙҙәр әйтә башланы. Машинистка апайҙарҙың береһе уның тапҡырлығын, оҡорлоғон, бер ваҡытта ла юғалып ҡалмауын, ниндәй хәлдәрҙән дә сығыу юлын таба алыуын маҡтаны. "Үҙең шулай булғанға мәҡәләләрең дә уҡымлы һинең", — тип тә дәртләндереп ебәрҙек. Ағай үҙе менән булған бер ҡыҙыҡ хәлде лә һөйләп алды.

"...Яңы өйләнешкән саҡ. Ағиҙел буйына һыу инергә барҙыҡ. Кәләш һыуға төшмәй ҙә ҡуя. Мин үҙем генә һыу инә башлағайным, бер төркөм ҡыҙҙар һыу һибергә тотондо. Мин дә ҡаршы һибәм тегеләргә. Бер аҙҙан ҡараһам, кәләш юҡ. Сыҡһам, кейемемде тотош алған да, ҡайтҡан да киткән. Ни эшләргә? Элекке замандағы оҙон трусик, тубыҡҡа етеп тора. Хәҙерге кеүек плавки түгел. Йылға ярына барып ныҡ ҡына итеп һығып кейҙем дә, йүгерә-атлай, ҡулдарҙы тигеҙ генә һелтәй-һелтәй ҡайтып киттем, йәнәһе спортсымын инде..."

Шулай итеп, башын баҫып ҡайғыға бирешеп йөрөгән ағайыбыҙ элекке булмышына ҡайтты ла ҡуйҙы. Бер аҙҙан ул яңынан ғаилә ҡороп ебәрҙе. Һүҙҙең тәьҫир итеү көсө иҫ китмәле.

Тәрбиәле киләсәк – тәрбиәле әсәйҙәр ҡулында

(*йәки аңға тәьҫир тураһында*)

Милләттең киләсәге тотошо менән тиерлек әсәләрҙең тәрбиәһенә ҡайтып ҡала. Туранан-тура тәрбиәнән тыш, баланың Эске донъяһына тәьҫир итеү, миҫал-ваҡиғаларҙан күренеүенсә, әсә ғоманлы саҡта һәм имеҙгән осорҙа уҡ башлана. Артабан әсә кеше балаһына үҙтәрбиә өсөн йүнәлеш биреү өҫтөндә эшләргә тейеш. Баланың булмышын аңлау-аңлатыу, уның күңелен өйрәнеү-өйрәтеү һәм башҡалар — әсә тәрбиәһенең төп йүнәлеше.

Үҙтәрбиә менән шөғөлләнеүгә нигеҙ һалыу — тәрбиәнең тос, ышаныслы, ныҡлы бер өлөшө. Әгәр кеше бөтә нәмәне лә яҙмышҡа, мөхиткә, атай-әсәйҙең яңылыш тәрбиәләүенә һылтап, үҙтәрбиә менән шөғөлләнмәй икән — ғүмеренең һуңғы көнөнә тиклем зарланыуҙан башы сыҡмаясаҡ. Шуның өсөн әсәләрҙең бурысы — бала балиғ булғас, үҙтәрбиә менән шөғөлләнһен өсөн йүнәлеш биреү, ә балиғ булғанға тиклем туған тел, милли рух, мәҙәниәт, сәнғәт, традициялар нигеҙендә заман һулышында тәрбиәләү, белем биреү, аҡ менән ҡараны, уң менән һулды айырырға һәм әҙәплелек ҡағиҙәләренә өйрәтеү. Ә беҙҙең кеүек аҙ һанлы милләт әсәләренең тағы бер иң мөһим бурысы — үҙ балаһының йөрәгенә телгә, халыҡҡа һөйөү, киләсәгебеҙгә өмөт тойғоһо һалыу. Шул саҡта беҙ милләт булараҡ юғалмабыҙ.

Әлбиттә, йәмғиәттәге үҙгәрештәр ҡатын-ҡыҙ булмышына ла ныҡ тәьҫир итә. Ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙарҙың заманса йәшәүҙе лә, тиң хоҡуҡлы булыуҙы ла, азат рухлылыҡты ла икенсе төрлө аңлауы, холоҡтарына ят ҡылыҡтарҙы тиҙ йоҡтороп алыуҙары һәм ғәҙәткә әйләндереп ебәреүҙәре борсолдора, әлбиттә. Эскелектең иң йәмһеҙ яҡтарына тиклем үҙләштереү һәм уны нормаға һанау ҙа тәрән уйға һала. Халҡыбыҙҙың милли ҡиәфәтенең үҙгәреүе, сифат яғынан ҡайтышыраҡ ҡала барыуы ғына түгел, зәғиф балаларҙың артыуы ла аяныслы күренеш. Тимәк, башҡорт халҡының генофонды үҙгәреш кисерә.

Милли холҡобоҙҙо, милли ғөрөф-ғәҙәтебеҙҙе, милли шөғөлөбөҙҙө, милли традициябыҙҙы юғалтһаҡ, беҙ Ер йөҙөнән милләт булараҡ юғаласаҡбыҙ.

Һүҙ көсөнөң, һәр ваҡыт ҡабатлап, иҫкәртеп-әйтеп тороуҙың тәьҫире көслө икән, тәрбиә эшендә был ысулды файҙалана һәм әсәләр аша халҡыбыҙ генофондын яҡшыртыуға өлгәшә аласаҡбыҙ.

Әсәйем

(йәки милли рух тәрбиәләүҙә әсәләрҙең роле)

Әсәйем, Мәрхәбә Мәхейән ҡыҙы Яҡупова, Ейәнсура районының Ибрай ауылында тыуып-үҫкән. Яҙыу-һыҙыуға үҙ аллы өйрәнгән. Әсәһе менән атаһы бик иртә үлеп киткәс, апаһы менән еҙнәһе (*Әскәпъямал менән Мәгзүм Колмөхәмәтовтар*) ҡулында үҫкән. "Бер генә лә ҡырын һүҙ әйтмәнеләр, ҡыйырһытманылар", — тип хәтергә ала торғайны әсәйем уларҙы. Әсәйем зирәк һәм үткер булған. Шуға уны ауылдаштары үҙ-ара "Сталин баш" тип йөрөткәндәр. Сталинды Аллаға тиңләгән саҡтарҙа, әлбиттә, әсәйем өсөн был оло баһа булған.

Әсәйемдең бар көсөн беҙҙе уҡытыуға арнауы, башҡа бер нәмәгә лә артыҡ иғтибар бирмәҫкә тырышып, тормошон беҙгә бағышлауы ғәжәп. Беҙ үҫкән йылдарҙа ете йыллыҡ белем алғандан һуң һигеҙенсе класҡа уҡырға барыу түләүле ине. Ә юғары белем алыу, ҡайҙалыр барып уҡып ҡайтыу — тормошҡа ашмаҫ хыял һымаҡ ине. Урта мәктәптә фәҡәт "урында эшләгән" кешеләрҙең генә балалары уҡый алды. Иҫемдә, бер ваҡыт апайым менән абзыйымдың уҡыуы өсөн аҡса түләй алмағас, ҡәҙимге ҙур өйөбөҙҙө һатып, бәләкәй өй алдылар ҙа хаҡтағы айырманы уҡытыу өсөн түләнеләр.

"Балаларымды уҡытам! Күҙәүе булһа, энә юғалмай" — был әсәйемдең маҡсаты ине, һәм ул бөтә балаларының да юғары уҡыу йорттарында уҡыуына сикһеҙ ғорурланды. Иҫәнғолда юғары уҡыу йортона инеүселәр ҙә ул заманда бик аҙ ине. Йылдар үткәс, Иҫәнғолда гимназия асыуға өлгәшеп, уның директоры итеп тәғәйенләнгәс, үҙебеҙ йәшәгән-үҫкән йортҡа ҡарап, бала сағыбыҙҙы күҙ алдына килтереп аптыраным. Ихлас аптыраным. Атайым — ат ҡараусы, әсәйем — колхозсы. Бәләкәй генә өй. Кеше өҙөлмәй. Өйөбөҙ оло юл өҫтөндә, ауыл осонда булғас, туғаны ла, таныш-белеше лә, "знакумы" ла килә. Электр уты юҡ. Шәм. Көнө-төнө хужалыҡ эше. Һыуҙы Эйек йылғаһынан ташыйбыҙ. Йылға беҙҙең өйҙән бер саҡырымдан ашыуыраҡ алыҫлыҡта. Әсәйемдең әйтеүенә ҡарағанда, туғыҙ төрлө түләү. Һап-һары итеп май яҙып, иретеп тапшырғаныбыҙ иҫтә ҡалған. Әлбиттә, һәр саҡ улай булып торманы. Иҫәнғолда канализация, электрлаштырыу, юлдарға ҡырсын-таш түшәү һәм башҡа шундай көнкүреш уңайлыҡтары булдырыу илебеҙ ҡаҙаныштары менән бергә барҙы. Әммә, беҙ үҫкән саҡта былар хыял ғына ине. Әле уйлап ҡараһам, хатта вазифалы кешеләрҙең дә балалары юғары уҡыу йорттарында уҡый алмаған.

Вузда уҡыусылар бармаҡ менән генә һанарлыҡ заманда, абзыйым Свердловск ҡалаһына барып юридик институтка, апайым Ырымбур ҡалаһына педагогия институтына уҡырға инде. Әсәйемдең аңына ҡайҙан һалынғандыр, әммә ул мәлдә бик һирәктәр эшләгән батырлыҡты эшләне ул. Атайым төҫкә бик сибәр, ап-аҡ йөҙлө, ҡырлас танаулы, зәп-зәңгәр күҙле, һомғол буйлы, һөйкөмлө, мут ҡарашлы, йор һүҙле ир ине. Мандолинала иҫ китмәле оҫта уйнай, йырлай һәм ғәжәп үҙенсәлекле бейей торғайны. Һабантуйҙарҙа бейергә сыҡһа, Сабирйән бейей, тип сәхнәгә табан өйкөлөшә башлай торғайнылар. "Ҡара урман", "Йәйләүлек", "Хафиза ла иркәм", "Өфө", "Төйәләҫ" тигән йырҙары әле лә ҡолаҡ төбөмдә генә яңғыраған һымаҡ. Һуғыш йылдарында утыҙ йәшлек ундай ир тирәһендә уралыусы уҙауышкалар (*руссанан башҡортсалаштырылған һүҙ – вдовушка*) аҙ булмағандыр, әлбиттә. Атайымдың форма кейеп төшкән фотоһы бар. Бик килешеп тора. Ҡолаҡҡа ҡатыраҡ булғанлыҡтан, һуғышҡа алмағандар һәм милицияның район бүлегенә эшкә саҡыртҡандар. Һуғыштан һуң ат ҡараусы, мал көтөүсеһе булып эшләне.

Ҡунаҡ саҡырышыу көслө ине һуғыштан һуң. Бәләкәй һылыуым менән һәндерәлә ятабыҙ ҙа ҡунаҡтарҙың бейешкәнен, ҡара-ҡаршы таҡмаҡ әйтешкәнен күҙәтәбеҙ. Өй тәбәшәк булғас, һәндерә түбәгә яҡын ғына һалынғайны. Ултырып булмай, тик ятып ҡына ҡарайбыҙ. Йоҡлап киткәнсе, уйын күҙәтәбеҙ, йыр тыңлайбыҙ. Шакир Мозаффаров исемле ағайҙың скрипкала уйнауҙары, ҡатыны Сания апайҙың уға ҡушылып йырлауы, Шәмсиә исемле (*Йәнҙәҡова һәм Әбүбәкерова*) иҫ китмәле һылыу ике апайҙың ирҙәре менән парлашып-парлашып бергә бейеүҙәре бала хәтеренә нык уйылып ҡалған. Гармун уйнаусылар юҡ кимәлендә. Күбеһенсә скрипкаға, мандолинаға йәки таҡмаҡҡа бейей торғайнылар. Сәхипбаныу исемле таҡмаҡсы апайҙы мәжлестән мәжлескә йөрөтөүҙәрен иҫләйем. Сағыу тауышлы апай мәжлес буйы таҡмаҡлап нисек арымағандыр ҙа, ул хәтлем таҡмаҡты нисек хәтерләгәндер... Таҡмаҡ әйтә-әйтә лә өҙләп ебәрә торғайны. Бейегән саҡта төрттөрөп ҡара-ҡаршы таҡмаҡ әйтешеү нык таралғандыр, күрәһең. Бер мәжлестән әсәйемдең бик ярһыу ҡайтҡаны хәтеремдә. Ибрайҙан Камила апайым килгәйне. Уға ярһып-ярһып һөйләгәнен иҫләйем:

— Хәлимә исемле бер уҙауышка еҙнәңде бейергә төшөргән булды ла:

Зәңгәр күлдәк әрәм бит ул
Кейә белмәгәндәргә.

Матур йәрҙәр әрәм була
Һөйә белмәгәндәргә, – тип таҡмаҡ әйткән була.

— Үҙен алып төш, ни эшләп яңғыҙ бейейһең? – тинем еҙнәңә. Мин нимә тиһәм дә тыңлай бит әле үҙе, еҙнәңде әйтәм. Алып төштө Хәлимәне. Алып төшкәйне, ҡаршы таҡмаҡ әйттем:

Самауырың ҡайнамаған,
Көлгә әйләнгән күмерең.
Кеше йәренә ҡыҙығып
Үтеп бара ғүмерең, –

тинем. Бер ҡаптырырмын тип уйлай торғайным. Ундағы тел миндә юҡмы?

— Уй, апай, бигерәк ҡаты әйткәнһең. Ни эшләне шунан?

— Барып ултырҙы ла шымтайҙы.

— Апай, ауырҙыр инде һиңә. Әллә ни эшләп Ибрайҙан күсеп киттегеҙ?

— Еңел түгел. Тик иғтибар итмәҫкә тырышам. Иғтибар итә башлаһаң, күп ул сәбәптәр. Йән көйҙөрөп, ҡан ҡарайтып ауырыуға һабышһам, балаларымды кем бағыр? Уларҙы кеше итергә кәрәк. Балаларым зирәк. Баштары үҙебеҙҙең яҡҡа – Яҡуповтарға тартҡан. Уҡытам, кеше итәм балаларымды.

Әсәйем алдына алған маҡсатынан һис кенә лә тайпылманы. Атайым ат ҡараусы булып күскәс, йәй буйы урманда ағас ҡырҡты йә бесәндә булды. Алтынсы класта уҡығандан алып мин атайымдан ҡалмай йөрөнөм. Ағас ҡырҡҡан саҡта ярҙамым ҙур булғандыр, сөнки атайым һалған әрҙәнәләр (*штабелдәр*) башҡаларҙыҡына ҡарағанда һиҙелерлек ҙур булғанға аптырай торғайнылар. "Китсе, Сабирйән, күҙгә күренмәгән енең барҙыр. Юғиһә, бер кеше был хәтлемде барыбер эшләй алмаҫ!" — ти торғайнылар. Атайым үҙе лә ағас эшенә шәп булды. Урманбатыр һымаҡ күрә торғайным. Ағасты йыға бара, эре ботаҡтарын ботап ырғыта бара, икенсеһенә тотона. Мин ваҡ ботаҡтарын ботайым, ботаҡтарҙы бер урынға өйәм, үртәп ебәрәм, атайыма бысҡы тартышам, сәй ҡайнатып алып киләм йәки айран һыулайым.

(*Атайым ныҡ һыуһап киткән сағында аҙ ғына һалҡын һыу эсһә лә ауырый ҙа китә торғайны, шул уҡ һалҡын һыуҙы әсе ҡатыҡ менән айран итеп бирһәң, ауырыманы. Әсе ҡатыҡтың ниндәй гилләһе барҙыр – белмәйем.*)

Урман — беҙҙең ғаиләнең кәсебе ине. Бер яҡтан, утын әҙерләгән

өсөн аҡса түләһәләр, икенсе яҡтан, атайым урман ҡырҡҡан саҡта төҙ йүкәләрҙе (*һалабашҡа ла, һайғауға ла тәгәйендәрен*), баҫаналыҡ имәндәрҙе айырып һала бара ла аҙаҡ уларҙы һатып аҡса эшләй ине. Ҡыш көндәре йүкәнән йыуғыс, бумала яһай торғайныҡ. Шунан әсәйем тоҡ тултырып уларҙы ялан яғына тейәп алып китер ине. Беҙҙең өсөн Баймаҡ, Һарыҡташ (*Ырымбур өлкәһендә*) тигән урындар бик алыҫ һәм иҫ китмәле бай яҡ тойола торғайны, сөнки оҙаҡ көттөрөп ҡайтҡан әсәйебеҙ әллә күпме китаптар, дәфтәрҙәр, ҡара һауыттары, ҡәләмдәр тейәп ҡайтыр ине. Аҙ ғына ҙурайғас, Нәсимә һылыуым менән ҡомалаҡ, әлморон йыйып дарыуханаға тапшыра башланыҡ. Ҙурайыуыбыҙ ҙа шул хәтлем генә инде, сөнки һылыуым беренсе класҡа уҡырға барырға аҡ алъяпҡысты үҙе эшләп алған аҡсаға һатып алды. Ҡомалаҡты йә дарыуханаға тапшырҙыҡ, йә булмаһа, ниндәйҙер апайҙар беҙгә килеп һатып ала ла Ҡарағанда яғына алып китә, шунан ул яҡтарҙан эре биҙәкле ситса тауар алып ҡайтырҙар ине. Бындай митҡалдан мендәр, юрған тыштары, шаршау тегә торғайнылар. Был иҫтә ҡалған, сөнки мин туғайҙа ҡомалаҡ тиргән саҡта: "Ҡарағанда — ҡомалаҡ, әгәр йыйһаҡ күберәк, беҙгә алырҙар күлдәк," — тип йырлап йөрөй торғайным. Әлморондо киптереп, һабағын, осондағы суғын таҙартып тапшырырға кәрәк ине. Беҙ бик күп йыя инек әлморондо. Иҫәнғолдоң Ҡолтай туғайы бай була торғайны еләк-емешкә. Хәҙер ҡола яланға әйләнгән.

Әсәйем әрһеҙ булды. Абзыйым Свердловск ҡалаһында юридик институтта уҡыған саҡта, бер нисә тапҡыр аҙыҡ алып барып ҡайтты, апайым Ырымбурҙа педагогия институтында уҡығанда бер-бер артлы тыуған ике балаһын ҡарашты. Мин университетта уҡыған саҡта, Хрущевтың халыҡҡа кукуруз икмәге ашатып йонсоҡҡан йылдарында, миңә лә, Өфөгә, он килтергеләне.

Үҙ алдына алған бурысын үтәне әсәйем. Юғары белем бирәм барығыҙға ла, тине, маҡсатына иреште. Донъялыҡта ниндәй генә ауырлыҡ, аңлашылмаусанлыҡ осрамаһын – төп маҡсатына ынтылды һәм үҙен бәхетле һананы.

Үҙ телен, моңон яратты әсәйем. Азат рухлы ине. "Үлһәм дә бер үкенесем дә юҡ, уйнарын уйнаным, эшләрен эшләнем, йәшәрен йәшәнем. Маҡсатыма ирештем, балаларымды үҙем уйлағанса үҫтерҙем," — тиер ине. Дүрт балаһының да ғаиләһендә үҫкән ейән-ейәнсәрҙәренең генә түгел, бүлә-бүләсәрҙәренең дә телдәре туған телдә асылып, таҙа башҡортса һөйләшеүҙәре, башҡорт мәктәптәрендә уҡыуҙары, йыр-моңға әүәҫ булыуҙары әсәйем өсөн ғорурлыҡ та, бәхет тә, шатлыҡ та ине.

Ҡандан килгән ғорурлыҡ бар ине унда. Үҙен кәмһетергә юл ҡуйманы.

Атайымдар бесән әҙерләгәндә, яланда йоҡлап йөрөй торғайнылар. Атайым ул саҡта милицияның район бүлегендә эшләй ине. Атайым аҙыҡ алырға ҡайта. Бер милиционерҙың ашамлыҡтарын оҙон арбаға тейәп килә лә, әсәйемә үҙенә тигән ризыҡты тейәргә ҡушып, ҡайҙалыр йомош менән китә. Әсәйем атайыма әҙерләгән әйберҙәрҙе һалған саҡта, шикле тойолған бер тоҡто ҡапшап ҡарай. Шиге дөрөҫкә сыға, унда ғармун була. Әсәйем йәһәт кенә хәйлә уйлап таба, ҡайҙандыр ғармун һымаҡ посылка йәшниге алып, теге ғармунды алмаштырып һала. Атайым китә. Күп тә тормай ғармунсы милиционерҙың ҡатыны килә:

— Тейәнеп киттеме Сабирйәнең?

— Китте.

— Көтөп тора инде тегенеһе.

— Көтһә көтәлер инде.

— Үҙең ғәйепле һин, Мәрхәбә. Йүнһеҙ, эшлекһеҙ ҡатындарҙың ирҙәре гел шулай икенсе ҡатындар менән йөрөй ул. Рәткә күҙәткәнем бар. Сабырлығыңдан түгел, үҙ ғәйебеңдә белгәнгә өндәшмәй түҙәһеңдер инде. Сабирйәндең ул теттереүенә бер көн йәшәмәҫ инем уның менән.

— Йәшәмәй ҡайҙа бараһың? Балаларҙы атайһыҙ иткем килмәй. Унан һуң миңә ҡарата насар түгел бит ул. Ҡартайған көнөмдә яңғыҙ ҡалмаһам булды.

— Йәнең юҡтыр һинең.

— Йәнем бар, тип ни ҡылайым? – Шул саҡ әсәйемдең башына бер уй килә. – Әйҙә, бөгөн бер ҡыҙыҡ эшләйек. Ярҙам итәһеңме?

— Бәй, әйҙә.

— Балаларыңды йоҡларға иртәрәк һал. Мал-тыуарыңды тиҙ генә йый ҙа әҙерлән.

Китәләр былар Үрген аръяғындағы сабынлыҡҡа. Ун саҡырымдан күпкә ашыу ара. Әсәйем юлда теге ҡатынға аңғартыбыраҡ бара икән:

— Ни күрһәң дә өндәшмә, ҡысҡырма. Ирҙәр ундай саҡта, һөйәркәләре алдында шәп күренергә тырышып, бисәләрен ҡыйырһыта. Тауышыңды сығарма! Аңланыңмы?

— Ярай. Өндәшмәм, шым булырмын.

Ҡыуышҡа яҡын ғына ҡойоп ултыртылған кәбән төбөндә урынлашалар. Бесәнселәр шунда яҡында ғына табын ҡора башлайҙар. Бер саҡ һауынсылар йыйыла башлай. Әсе бал сығаралар. Ҡәҙимге ҡыҙмаса булып алғас, ғармун уйнарға ҡушалар. Гармунсы мили-

ционер тоҡто сисеп гармунын сығарһа, уныһы йәшник, ти. Милиционерҙар урман яңғыратып көлә башлай. Йәш кенә бер һауынсы йырлай-йырлай гармунсының алдына килеп ултыра:

— Мин булғанда, гармун нимәгә уға? — тип ҡосаҡлап ала тегене. Шул саҡ кәбән төбөндә ултырған ҡатыны:

— Ебәр мине, ысҡындыр ҡулымды, үлтерәм, икеһен дә үлтерәм, – тип, ярһый башлай. Тотоп торған әсәйемдең ҡулынан ысҡынмаҡсы була.

— Мин нимә тинем һиңә? Риза булдың бит шартыма. Хәҙер икебеҙ ҙә туҡмалабыҙ. Ҡайтҡас аңлашырһығыҙ. Ә мин һинең дә тап минең кеүек үк "йүнһеҙ" икәнлегеңде күрһәтеү өсөн генә килтерҙем, — тигән әсәйем.

Әсәйемдең тормошона хәҙерге күҙҙән ҡарайым да шундай һығымтаға киләм: уның төп йәшәү принцибы – балаларын "кеше" итеү, башҡортлоҡто оноттормау, үҙе менән туған телендә һөйләшерлек ейән-бүләләр ҡалдырыу. Ошо принциптарын тормошҡа ашырыуҙа ҡамасаулаған башҡа ҡаршылыҡтарҙы, хатта атайымдың ваҡытлыса мауығыуҙарын да тормошта осрай һәм үтеп китә торған ығы-зығыға һанаған. Шуның өсөн дә маҡсатына ирешә алған.

Ейәнсура районына ғаиләм менән күсенеп килгән саҡта, үҙебеҙ менән бергә әсәйемде лә алып ҡайттыҡ. Ҡырҡ йылдан ашыу йәшәгән Иҫәнғолона ихлас ҡайтты, Эйек буйҙарына төшөп йөрөнө, элек бергә ҡатнашҡан әхирәттәренең иҫән ҡалғандарын күргеләне, улар үҙҙәре лә килгеләне. Тик Ибрайға барманы. Шул тиклем һағынған тыуған ауылы ҡырҡ саҡырым ғына алыҫлыҡта ине. Үҙе иртән таңдарын тороп Ибрай яғына ҡарап торор, әйләнгән һайын телгә алыр ине: "Э-й-й, һүрәм һыуына етәме ни ул! Һалҡын көйө лә сәсте ебәктәй итә бит ул. Һүрәм балығына етәме ни ул! Эйек балығынан һыу тәме әйтеп тик тора. Ошо Иҫәнғолда ғүмеремдең яртыһынан күбеһе үтте. Барыбер үҙһенмәнем. Ибрайҙа булды күңелем. Тыуған ер менән йән бергә үреләлер ул".

— Әсәй, Хәсбиямал апай һағынған, көтә бит. Хәмдиә апайҙарҙа килһен тип ҡалды. Мөхлис олатай ҙа өлкәнәйгән. Мәрхәбә һылыуымды күреп ҡалыр кәрәк ине, оҙаҡ йәшәп булмаҫ, тип ултыра. Әйҙә, барайыҡ, – тип өгөтләйем. (*Әсәйемдең бер туғандары юҡ ине инде, ике туғандарынан Мөхлис Яҡупов олатай менән Хәсбиямал апай ғына ҡалғайны.*) Мин өгөтләйем, ул баш тарта. Ә үҙе бер аҙ йөрөй ҙә тағы Ибрайҙы һөйләй башлай: "Анау яҡтарҙа ослайып тора ул беҙҙең Осло тау. Текә генә ҡабралы ине Ҡабра тауыбыҙ", – тип ҡарап тора тыуған ауылы яғына. "Машина менән генә алып барып ҡайтам, көнөнә әйләнербеҙ", – тием — баш тарта.

Йылмайған була ла: "Барыуын барһам, бер көндә генә әйләнеп ҡайтмайым инде мин унан", — ти үҙе. Бер тапҡыр тәрән итеп уфтанды ла: "Балам, мине Ибрайға алып ҡайтып ерләрһегеҙ. Тере саҡта бармам инде," — тине. "Ни эшләп, әсәй? Әйҙә, барайыҡ. Өфөгә ҡайтып китһәк, Ибрайға килеүҙәре алыҫ булыр. Бына торған ҡырҡ саҡрымлыҡ юлға хәҙер барып әйләнәбеҙ бит".

— Юҡ, балам. Мин Ибрайҙан киткән саҡта ут кеүек инем. Хәҙер ҡолаҡ ишетмәй, күҙ насар күрә, арҡан һымаҡ ишелеп торған томдар юҡ. Ибрайым урамынан нисек үтеп китмәк кәрәк былайтып, — тине. Бына ниҙә булған икән ғилләһе!

Шул саҡта мин әсәйемдең баш тартыуының әрәсәһенә төшөндөм... Ғүмер буйы үҙ көсө, үҙ аҡылы менән үҙен иҫбат итеүҙе маҡсат итеп ҡуйған әсәйем йәшәйеш сәхнәһенән — төп төйәгенән ғорур, матур көйө китергә уйлаған.

...Әсәйемдең васыятын үтәнек. Мәңгелек төйәгенә оҙатыр өсөн Ибрайға алып ҡайттыҡ. Бик ҡәҙерләп ерләнеләр ауылдаштары. Оло рәхмәтлемен уларға. Әсәйемде бәләкәй саҡтан бағып үҫтергән Әскәпъямал инәйемдең ейәнсәре Зөлхизә апайым менән уның улы Мөхәррәм һәм килене Гөлбаныу Иҙрисовтарҙың ҡапҡалары ла, күңелдәре лә һәр саҡ асыҡ булды беҙгә. Ә бит уйлап ҡараһаң, улар беҙгә дүрт быуын айырылған туғандар. Беҙгә булған йылы мөнәсәбәттәре әсәйемә ҡарата ихтирамдан килә, әлбиттә.

Әсәйем ғүмеренең һуңғы көнөнә тиклем Яҡуповтар нәҫеле менән ғорурланды. Минең сираттағы китабым баҫылып сыҡһа ла, башҡа туғандарымдың уңышы хаҡында ишетһә лә: "Яҡуповтар ҡаны һеҙҙә лә! Яҡуповтар башы!" — тип маҡтар ине.

Мин беренсе класҡа барған йылда, 1950 йыл ине, ни ғилләменәндер башҡорт кластары асылды. Беренсе менән өсөнсө, икенсе менән дүртенсе кластарҙы берләштереп уҡыттылар.

Тәүҙә беренсе класҡа килеүселәрҙең бөтөнөһөн дә бергә ултыртты лар. Бер ваҡыт беҙҙең буласаҡ уҡытыусыбыҙ, директор һәм тағы бер нисә кеше класҡа килеп инде.

— Рустар, ҡул күтәрегеҙ, — тине директор. Бер-нисә бала ҡул күтәрҙе.

— Башҡорттар, татарҙар, мишәрҙәр, ҡулдарығыҙҙы күтәрегеҙ. Бөтә класс тиерлек күтәрҙе.

— Баҫығыҙ.

Баҫтыҡ. Күмәк инек. Директор ултырырға ҡушты ла икенсе һорау бирҙе:

— Кем уҡый белә?

Мин ҡул күтәрҙем. Абзыйыма ла, апайыма ла рус класында

уҡып китеү ҡыйынға тура килгәнлектән, мине бәләкәйҙән уҡырға өйрәттеләр һәм мин беренсе класҡа барған саҡта "Букварь" китабын уҡый, арифметиканан миҫалдар эшләй инем.

Директор алдымда ятҡан "Букварь" китабының бер битен асты ла, уҡы, тине. Уҡыным.

— Как фамилия?

— Биктимерова.

— У тебя много братьев и сестер, да?

Иҫәнғолда күп балалы тағы Биктимеровтар бар ине. Директор уларҙы һорағандыр.

— Нет. Один брат Салават и одна сестра Марфуга.

— Понятно. Садись.

Апайым менән абзыйым кластарында иң яҡшы уҡыусылар ине, Директор уларҙы белгәндер, өҫтәүенә, абзыйымды бөтә мәктәп "Салауат" тип исеме менән генә йөрөттө, яҡшы уҡыуы арҡаһында абруйы ҙур ине. Апайым да унан ҡалышманы. Шуға директор минең уҡый белеүемә аптырамағандыр. Ултырырға ҡушты. Башҡаларҙың да фамилияһын һораша, уҡытыусылар менән һөйләшә, ҡайһы берҙәрен таҡта эргәһенә сығарып баҫтыралар. Таҡта эргәһенә сығарып баҫтырғандарҙы башҡорт класына алып китәләр, башҡорт класы асыла икән, тип һөйләшә башланылар. Унлаған уҡыусы йыйылғас, йәш кенә уҡытыусы минең яныма килде лә:

— Исемең кем һинең? – тип һораны, башҡортсалап.

— Мәрйәм.

— Мәрйәм һылыу, әйҙә минең класҡа. Мин һиңә бейеүҙәр, йырҙар өйрәтермен. Ана иптәштәрең бөтәһе лә миңә бара бит, – тине.

Мин бер уҡытыусыға, бер директорға ҡарап тора бирҙем. Шунан директор:

— Она остается, — тигәс, кире урыныма ултырҙым. Директор сығып китте.

Сара, Рауза, Миңнегөл, Әхмәҙулла, Фәүжәт, Хәлит исемле балалар: "Әйҙә, Мәрйәм, әйҙә", — тип саҡыра башланылар. Рауза бөтөнләй үк эргәмә килеп, әйберҙәремде йыя башланы, үҙенең күҙҙәрендә йәш күренде. "Әсәйем, һиңә Мәрйәм ярҙам итер, тигәйне. Мин хәҙер нисек уҡыйым инде? Миңә хәҙер кем ярҙам итә инде?", — тип һөйләнә-һөйләнә илай ине Рауза Туҡтамышева. Үҙе минең әйберҙәремде ҡосаҡлап алған да бирмәй. Уҡыусылар аптырашып киткән. Рус уҡытыусыһы:

— Биктимерова, садись. Остальные идут в другой класс,— тигәйне, башҡа ҡыҙҙар ҙа Раузаға ҡушылып илай башланы. Шунан

мин улар менән киттем дә барҙым.

Уҡытыусыбыҙ — Нурия Фазлыәхмәт ҡыҙы Сәйетова "Әлифба" бирҙе. Ҡыҙыҡһынып уҡый башланым. Башҡа хәл-ваҡиғаларҙы әллә ни хәтерләмәйем, әммә "Әлифба"ның биттәрен берәм-берәм асып уҡыған саҡта, башҡортса һүҙҙәр яҙылыуы ҡыҙыҡ тойолдо. Өйҙә башҡортса китаптар юҡ ине. Атайым да, әсәйем дә "яңыса" уҡый белмәй, абзыйым менән апайым русса ғына уҡыйҙар. Уҡытыусыбыҙ, миңә китапты ҡыҫҡырып уҡырға ҡушты ла үҙе өсөнсө кластар менән шөғөлләнә башланы. "Әлифба"ны ҡыҫҡырып уҡыйым. Тик бер һүҙҙе аңламайым да ҡуям. Башҡалар ҙа аңламай. Уҡытыусыбыҙ беҙҙең яҡҡа килде:

— Нурия Фазлыәхмәтовна! — тип ҡул күтәрәм.

— Ни булды?

— **Морон** нимә була ул? – тип, О хәрефен руссалап әйтеп уҡыйым. "Букварь" уҡығанда абзыйым бик оҙаҡ итеп О-ны русса әйттереп өйрәткәйне. "Рус балалары хәрефтәрҙе әйтә белмәгәнгә беҙҙән көлә торғайны. Һин тәүҙән үк яҡшы итеп өйрәнеп бар," – тигәйне. "Букварь" китабын көн һайын абзыйым менән апайыма уҡып күрһәтә һәм рус хәрефтәрен дөрөҫ итеп әйтергә өйрәнә торғайным. Шуға **морон** тигән һүҙҙе рус акценты менән уҡығанмын. Уҡытыусы йылмайҙы ла, дөрөҫ уҡымайһың бит, рус-салап әйтәһең, башҡортсаһы морон була, тине. Өсөнсө класс малайҙары байтаҡ ваҡыт мине "морон" тип үсекләп маташтылар. Аҙаҡ туҡтанылар, сөнки мин уларға мәсьәлә сисеп бирә торғайным. Таҡтаға сыҡҡан балалар ялт итеп минең яҡҡа ҡарай һалалар ҙа, мин йә һүҙҙәрҙәге хаталарын төҙәтеп, йә мәсьәләнең яуабын әйтеп ебәрә инем. Беренсе класта уҡыһам да өсөнсөләргә һәр ваҡыт ярҙам иттем. Рус телен айырыуса ауыр үҙләштерә торғайнылар. Таҡтаға яҙған һүҙҙәрен төҙәтә инем. Аҙаҡ ҡына аңланым — башҡорт класына йә уҡыуға ауыр, йә класында артта ҡалған, йәше үткән балаларҙы йыйғандар икән. Миңә улар менән уҡыу бик күңелһеҙ булды. Тик һигеҙенсе класҡа еткәс кенә тирә-яҡ ауылдар-ҙан уҡыусылар өҫтәлде. Улар араһында яҡшы уҡыусылар бар ине, ярышып, сәмләнеп уҡыу күңеллерәк булып китте. Уларҙың береһе — Бикбау мәктәбенән бик көслө математик Маһинур Әхмәтовна Моззафарова, хаҡлы ялға киткәнгә тиклем Күгәрсен урта мәктәбендә математика уҡытты.

Башҡорт класы тип һаналһа ла предметтар рус телендә алып барылды. Башҡорт кластарын һәр саҡ иҫке мәктәптә уҡыттылар, яңы мәктәптең кластарына инеп, бер генә йыл ошо ҙур тәҙрәле яҡты кластарҙа уҡыһаҡ ине, тип хыяллана торғайныҡ. Икенсе сме-

нала булдыҡ, фәҡәт унынсы синыфта ғына беренсе сменаға күсерҙеләр. Ботаника дәрестәрендә сәскәләрҙең, үҫемлектәрҙең атамаларын, зоология дәрестәрендә ҡоштарҙың исемдәрен башҡортса һорай торғайным уҡытыусыларҙан. "Ни эшләп башҡортса уҡытҡас, бөтә фәнде лә башҡортса ғына алып бармайһығыҙ ул? — тип аптырап һорай торғайны әсәйем дә уҡытыусыларҙан. "Нимәгә ул? Вузда рус телендә уҡыясаҡтар".

— Ошо балалар бөтәһе лә вузға инер тиһегеҙме? Көн һайын Мәрйәм янына килеп дәрес әҙерләйҙәр. Анау Вилдановтың улы минең Салауатым йәшендә бит. Мәрйәм менән уҡый. Венера, Рәхимәләр (*Ҡара тәкә тиген ауылдан Яңы юлға күсеп килгән мишәр гаиләләре ҡыҙҙары ине улар*) Мәрфуғам йәшендә. Мәрйәм көн һайын шул балаларға өйгә эш аңлата. Уларға аңлатҡан нәмәне мин ятлап бөтәм. Көн һайын бер үк нәмәне тылҡый. Килгән һайын шуны оноталар. Башҡортса булғас, башҡортса ғына уҡытһағыҙ, бәлки, бер нәмә йоғор ине үҫҙәренә.

— Шулай ҡушалар бит беҙгә, Мәрхәбә апай.

— Ҡушалар тип ни, аңламағандарына башҡортса һөйләһәң, кем нимә әйтһен инде? Үҙегеҙ башҡорт та инде.

Ысынлап та, бөтә предметтарҙан да тиерлек башҡорт уҡытыусылары уҡытты. Биологиянан — Динә Ғәзиз ҡыҙы Зәйнуллина, химиянан — Фәриҙә Мөхтәр ҡыҙы Ғәйнуллина, тарихтан — Харис Вәли улы Солтанов, математиканан — Зөфәр Бикәт улы Әҙеһәмов һәм Кәбирә Исхаҡ ҡыҙы Ирсаева, физиканан — Йәүҙәт Йәмлехай улы Ғәйнуллин, рәсемдән һәм һыҙманан Сәлих Сәлмән улы Аллағолов, рус теле һәм әҙәбиәтенән — Рәмзиә Лотфулла ҡыҙы Ғәзизова һәм башҡалар. Ә уҡытыу рус телендә алып барылды.

— Шул балаларҙың аңламағандарын, исмаһам, башҡортса аңлатып ебәрһәгеҙ, уҡыуы ла ҡыҙығыраҡ булыр ине үҫҙәренә, — тип, әсәйем һаман үҙ фекерен тылҡыны. Йәштәре үтеп тә, күҙле бүкән һымаҡ, бер ни аңламай ултырған балаларҙы йәлләй ине ул.

— Ҡайҙа ул, тикшереп кенә торалар, — тинеләр уҡытыусылар.

— Тикшереүселәре лә һеҙҙең һымаҡ кеше бит инде. Аңлаша алмайһығыҙмы ни?

Бөтә илдә руслаштырыу барғанда, өйҙә үҙ балалары менән рус телендә һөйләшеүҙе мәртәбәгә һанап, уҡытыусыларҙың бөтөнөһө лә, хатта беҙҙең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы ла үҙ балаларын рус кластарында уҡытҡан саҡта, баланы туған телдә уҡытыу зарурлығын ҡайҙан аңлағандыр әсәйем — әле лә аптырайым.

Әсәйемдең өс туған апаһы йәшәне Иҫәнғолда. Ибрай ауылынан

инеләр. Мин белгәндә олатай үлгәйне. Инәй бер үҙе итәк тулы бала менән ҡалғайны. Бөтә балалары ла зирәк, уҡыуға һәләтле инеләр. Инәйебеҙҙең аңына совет идеологияһы нык һеңгәйне, балалары рус телле генә булып үҫтеләр, беҙҙең өйҙә башҡортса һөйләшкәнлектән, балаларын беҙгә бик ебәрмәне, күршеләрендәге рустар менән аралаштырҙы, инәй хатта үҙе лә балалары менән ата-емерә русса һөйләшеп маташты. Һөҙөмтәһе шул булды — өс улы мәрйәгә өйләнде, кесе ҡыҙҙары рус егетенә кейәүгә сыҡты. Бына тигән әзмәүерҙәй өс егет күңел бушлығын, күңел йыуанысын эсеү менән таба башланы һәм егерме алты йәшендә генә химия фәндәре кандидаты дәрәжәһенә эйә булған ағай ҙа, бик һәйбәт белгестәр булып танылған ҡустылары ла яҡты донъя менән иртә хушлашты. Фән кандидаты ағай Өфөлә саҡта беҙгә килә лә:

— Һылыу, һин ғүмер буйы әсәйеңә рәхмәтле бул. Һеҙҙе телдән айырмаҫҡа нисек аңы еткән Мәрхәбә апайҙың! Беҙ бит бөттөк. Бөттөк. Мин бер кем дә түгел. Башҡорттар араһында башҡорт түгелмен, рустар араһында рус түгелмен. Ә белем бар! Белем етерлек! Кандидатлыҡ яҡлаған саҡта, яуаптарыма хатта ҡул сабып ебәрҙеләр! Ә туған тел юҡ. Мәрхәбә апай, беләһеңме, нимә тине миңә? Һиңә, ҡустым, уң да юҡ, һул да юҡ, үҙең тотҡан юл да юҡ, тине. Белем менән генә йәшәп булмай икән. Кешегә йыр кәрәк, күңел йыуанысы кәрәк, туғандарың менән рәхәтләнеп һөйләшеү кәрәк. Ибрайға ҡайтам, туғандарым менән ярым-йорто һөйләшәм. Зәғиф мин, зәғиф. Күңелем зәғиф. Шул нимә була инде, ә, һылыу?! "Атай" тип әйтерлек балаң да булмаһын әле...

Йәл ине ағай. Был саҡта ул ғаиләһенән китеп эсә башлағайны. Бер туған һылыуы ауылдан килеп, апай, һеҙгә килеңкерәп йөрөһөн инде, Диҡҡәт еҙнәй бик аҡыллы бит, уның менән һөйләшеп ултырһа, бәлки, абзыйымдың да тормошонда берәй маҡсат барлыҡҡа килер, тигән булды. Килгеләп йөрөү генә түгел, бер нисә ай үҙе беҙҙә йәшәтеп ҡараныҡ, эсеүен ташлатып, эшкә урынлаштырҙыҡ, башҡортса һөйләшеп өйрәнә лә башлаған булды, әммә эсеүгә нык тартылғайны. "Туған телдә һөйләшергә аҙ-маҙ өйрәнермен дә ул. Ә йыр? Ә көй? Ә ауылдың өлкәндәре менән һөйләшеп ултырыуҙар?" —тип, тубыҡтарына һуға-һуға ҡайғыра торғайны.

Ағай Төмән яҡтарында ла йөрөп килде, ауырып китте, шунан Иҫәнғолға ҡайтып йәшәп алды, тик эсеүе арҡаһында яҡты донъя менән бик иртә хушлашты.

Әсәйем беҙҙе туған телебеҙҙә һөйләштереү өсөн, ысынлап та, ныҡ торҙо. Ә ул заманда район үҙәгендә – ҡатнаш милләтле һәм рус мәктәпле ауылда, бының өсөн ҙур ныҡышмалылыҡ, үҙеңдең

хаҡлы булыуыңа оло ышаныс кәрәккән. Хатта ниндәйҙер кимәлдә мәғрифәтселек аңылыр был, тип тә баһалайым. Ул ошо фекерҙе беҙгә лә һеңдерҙе. Беҙ, уның дүрт балаһы ла, башҡорт ғаиләһе ҡороп, балаларыбыҙҙы башҡортса һөйләштереп үҫтерҙек, әле инде улар ҙа өләсәйҙәре тәғлимәтенән тайпылмайҙар.

Арғымаҡ ат юл башлар

Аҙ һанлы милләттәрҙе теленән айырыу-яҙҙырыу сәйәсәте бик ентекле уйланылып, һүҙ көсөнөң тәьҫире, атай-әсәйҙәрҙең күңел нескәлеге иҫәпкә алынып аҡрынлап ҡына Аңға һалынған. Иң хәйләле алым — балаларын туған телдә уҡытыуҙан атай-әсәйҙәрҙең үҙҙәренең "баш тартыуы" тураһында уйҙырмалар таратыу. Сөнки "донъяға тыуған һәр бала юғары уҡыу йортона инергә тейеш, ә унда рус телен белмәһәң, инеп булмай. Рус телен яҡшы белеү өсөн мотлаҡ туған телде оноторға кәрәк, сөнки ул артыҡ тел, ауылды сыҡҡансы ғына эшкинә, унан кәрәкмәй ҙә, юғары белемле булыу өсөн тотҡарлыҡ яһай". Ошондай фекер һалына атай-әсәй зиһенена. Ундай фекергә мөкиббән ышанған атай-әсәйҙәр бер нәмәне аңламай – **туған телдән яҙҙырыу – күңел нурынан, күңелгә ялбиреү, эске донъяны сәләмәтләндереү сараһы булған туған моңдан да айырыу ул.** (*Был хаҡта МОҢ бүлегендә ентеклерәк яҙылыр.*)

Беҙ быуын-быуындан ҡандан ҡанға күсә килгән тәбиғи һәләте-беҙҙе лә үҙ туған телебеҙ аша асырға, үҫтерергә, бойомға ашырырға — ябай ғына итеп сағыштырып әйткәндә, йоҙаҡты үҙ асҡысы менән асырға тейешбеҙ. Туған телдән яҙыуҙың бала аңына кире тәьҫир яһауын тәбиғәт иҫтә тотҡан һәм кешегә сикләүһеҙ телдәр өйрәнеү һәләте биргән. Кеше бер генә телдә һөйләшергә һәләтле тигән төшөнсә юҡ. Үҙ йәшәйешең өсөн нисә тел кәрәк, әйҙә барыһын да өйрән. Тик туған телендән яҙма, балаларыңды ла яҙҙырма. Ҡабатлап әйтергә кәрәк – туған телдең функциялары аралашыу, белем алыу ғына түгел.

Кешелек донъяһы йәшәйешендә туған телдең әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Тәбиғәт биргән иҫ китмәле мөғжизә ул – туған тел. Туған тел – ул тойғо теле, моң теле. Беҙ туған телдә һөйләшеп туғанлыҡ тойғоһон яҡынайтабыҙ, туған телдә йырлап шатлыҡ ишәйтәбеҙ, ҡайғы тарҡатабыҙ, күңел сафландырабыҙ. Ә күңел сәләмәтлегенең физик сәләмәтлеккә тәьҫире иҫ китмәле. Быны медик-ғалимдар күптән иҫбат иткән.

Әммә совет идеологтары телдең әһәмиәтен шул тиклем тарайттылар, әйтерһең, тел – фәкәт аралашыу сараһы ғына. Әлбиттә, тел – аралашыу сараһы ла. Әммә был уның анатомик функцияһы, ҡулланылышы. Танау – тын алыу, күҙ – күреү сараһы тигән һымаҡ төшөнсә. Тел бындай ғына функция үтәй икән, бөтә донъя халҡын бер генә аралашыу теленә күсереп тә була. Ләкин ул саҡта инде һәр милләттең рухи донъяһының асҡысы булып торған тел булмаһа, был рухи донъя, тимәк, милләт юҡҡа сыҡты тигән һүҙ. Үҙ рухи донъяһы булмаған милләт ҡол хисабында ҡала. Үҙ телендә үҙ мәҙәни, сәнғәт, әҙәби ҡаҙаныштарынан күңел ялы ала алмаған кеше башҡа милләттәрҙең рухи ҡаҙанышынан ял алып маташырға мәжбүр була. Был иһә асыҡҡанда тоҙһоҙ аш ашау менән бер. Һөҙөмтәлә кешенең йәшәү маҡсаты фәкәт матди байлыҡ туплауға ғына ҡайтып ҡала. Ундайҙар менән идара итеү күпкә еңел, сөнки улар үҙҙәренең рухи ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү өсөн бер ни ҙә талап итмәй, уларҙы күберәк аҡса йәки маҡтау ҡағыҙы менән дә алдаштырырға мөмкин. Шуның өсөн дә аҙ һанлы милләттәрҙе туған телһеҙ, рухи донъяһыҙ ҡалдырыу сәйәсәтен үткәреү юлдары уйлап табылған да инде. Ҡатнаш ғаиләләр маҡтала, уларҙан тыуған балалар вундеркинд була, тигән уйҙырмалар таратыла... (*Ҡатнаш милләтле ғаиләнән тыуған балалар вундеркинд булып, фән өлкәһендә бөйөк асыштар яһауға һәләтле булһа, Япония әллә ҡасан артта ҡалып, Волга буйындағы республикалар, бигерәк тә ҡатнаш ғаиләләр ҡороу ягынан иң юғары күрһәткестәргә өлгәшкән башҡорттар, алда барыр ине*). Бөйөк комсомол төҙөлөштәре, сиҙәм ер үҙләштереү, ауыл ерҙәрендә совхоздар ойоштороп, ситтән башҡа милләт кешеләренән белгестәр саҡырып, мәктәптәрҙе рус теллегә әйләндереү, мәктәптәрҙә музыка дәрестәрен фәкәт рус программаһы буйынса ғына алып барыу, туған республикаңдың, туған халҡыңдың тарихын өйрәнмәү, өйҙә ғаилә теле итеп рус теленә өҫтөнлөк биреүҙе талап итеү һәм башҡа юлдар менән өлгәштеләр был "юғары" күрһәткескә...

Рәсәй халыҡтарын руслаштырыуҙан рус халҡына отош булдымы? Юҡ. Ул, ҡуйы һөткә һыу ҡушып күбәйткән кеүек, һан яғынан артһа ла, сифатын юғалта барҙы. Совет власы йылдарында донъяның алтын фондына мәҙәниәт өлкәһендә лә, сәнғәттә, әҙәбиәттә лә классик әҫәрҙәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ өҫтәлде. Рус телле башҡа милләт кешеләре рус халҡы сәнғәтенән, ҡаҙаныштарынан файҙалана ғына ала, нигеҙҙә, ниҙер өҫтәй алмай. Ошо хәҡиҡәтте аңлатыусыларҙы милләтселектә ғәйепләнеләр. Даими пропаганда үҙенекен итте, һәм әлеге көнгә тиклем туған

телен инҡар итеүселәр, балалары менән фәҡәт рус теленда генә һөйләшеүсе юғары белемле, әммә милләтен инҡар итеүсе белгестәр арта бара. Шуныһы ифрат ҙур үкенес тыуҙыра – улар үҙ арттарынан башҡорт милләте вәкилдәре ҡалдыра алмай. Ә бит бынамын тигән композиторҙар, олпат яҙыусылар, йырсылар үҙ ғаиләһендә танылыу, аңлау тапмай, үҙҙәрен дауам итеүсе ҡалдыра алмай ҡартайҙылар. Ике ғалимдан тыуған өсөнсө ғалим егет аптыратҡайны мине. Атаһы ла, әсәһе лә башҡорт милләтенән. Улдары аҡыллы, белемле, һәләтле матур башҡорт егете. Башҡорт телендә бөтөнләй һөйләшмәй. "Мин үҙемде туҡһан ете процентҡа рус тип иҫәпләйем, сөнки мин туған халҡымдың телен дә, традицияларын да белмәйем, рус телендә фекер йөрөтәм. Минеңсә, кеше ниндәй телдә фекерләй, шул милләт вәкиле булып һанала", тигән фекерҙә был егет. Ул хаҡлы. Тик бер һорау бирергә кәрәк ул егеткә: күңелендә лә, ҡанында ла рус традициялары йөрөтәме? Рустар уны рус милләте вәкиле тип иҫәпләйме?

Быға тиклем ҡалаларҙа тәрбиә һәм төрлө яҡлы белем алған әҙерлекле белгестәребеҙ үҙ милләтенә ят бауырға әйләнә барҙы, ә мәҙәниәт-сәнғәтебеҙ һәм фәнебеҙ ауыл мәктәптәрен тамамлаған белгестәр иҫәбенә тулылана. Һуңғы йылдарҙа ғына был йәһәттән алға китеш бар. Ҡала йәштәренең башҡортлашыуы, ауыл йәштәренең үҙ башҡортлоҡтарын һаҡларға тырышыуы күҙәтелә.

Тәбиғәт төрлө-төрлө ағастар, үҫемлектәр, ҡоштар, хатта бөжәктәр һәм башҡаларҙы бар итеп, һәр береһенә үҙенсәлек һәм тәғәйенләнеш бүлгән икән – уның артабанғы йәшәйеше хаҡында ла хәстәрлек күргән. Улар буталмай, һаман үҙҙәренең үҙенсәлеген һаҡлап йәшәй. Һәр милләт тә үҙен үҙе һаҡларға, үҙе хаҡында үҙе хәстәрлек күрергә тейеш. Шуның өсөн уға тел, моң, традиция бирелгән. Кешелек донъяһы ниндәй генә ҡанундар ижад итмәһен, улар тәбиғәт ҡанундарынан ситләшергә тейеш түгел. Тап шул тәбиғәт ҡанундарынан ситләшеү арҡаһында ҙур хаталарға дусар булабыҙ, милләт-ара ыҙғыштар, ҡан ҡойоштарға барып етәбеҙ, тәбиғәт гүзәллектәренән мәхрүм булабыҙ.

Милләт булмышы ла – тәбиғи ҡанун. Кешелек донъяһы күпме йәшәй, шул тиклем үк үҙенең традицияларын, үҙенсәлектәре менән милләттәр ҙә йәшәйәсәк һәм үҙгәргән хәлдә фәҡәт үҙ булмышы нигеҙендә генә үҙгәреш кисерәсәк һәм камиллашасаҡ. Үҙ булмышынан ситләшкән халыҡ милләт булараҡ ер йөҙөнән юғаласаҡ, айырым вәкилдәре рухи яҡтан тарҡаласаҡ.

Ошо хәҡиҡәтте аңлаған бер төркөм зыялылар алтмышынсы

йылдар уртаһында балаларына башҡортса уҡытыу-тәрбиә эше алып барырлыҡ мәктәп астырыуҙы юллай башларға булды.

Өфөлә бындай мәктәп һәм аҙаҡтан балалар баҡсаһы ойоштороуҙа әүҙем ҡатнаштым. Мәктәп астырғанда иң ауыры балалар йыйыу ине. Башҡорт мәктәптәре астырыуға ғүмерҙәрен арнаған Мөхәммәт Иҫкужин менән Изел Агишевтарҙан да яҡшыраҡ белгән кеше юҡтыр уның ауырлығын. Мин дә балалар туплауҙа байтаҡ ваҡыт яҡындан ярҙам иттем. Урамда башҡортса һөйләшкән кеше ишетһәң, ҡолаҡ ҡарп итеп ҡала. "Һин кем, ҡайҙан, мәктәп йәшендә балаң бармы, Өфөлә башҡорттарҙан таныштарығыҙ бармы? Уларҙың мәктәп йәшендә балалары бармы?" — тигән һорауҙар яуҙыра башлайһың. Адрестар табаһың, өйҙәренә бараһың, сәғәттәр буйы аңлатыу эше үткәрәһең. Юғары белемле, әммә "совет кешеләре бер милләтле булырға тейеш" тигән ялған ҡарашты ныҡ һеңдергән әҙәмдәргә сәғәттәр буйы туған телдең ни өсөн кәрәклеген аңлатып ултыраһың.

Башҡорт кластарын тәүҙә Красин урамындағы элекке туғызынсы башҡорт мәктәбе, хәҙер инглиз теле йүнәлешле мәктәптә астылар. Дөрөҫөрәге, мәғариф министры Фатима Мостафинаға егеттәребеҙ шул мәктәптә кластар асыуҙы тәҡдим итте, сөнки инглиз теле йүнәлешле мәктәптәр Өфөлә юҡ кимәлендә булғанлыҡтан, конкурс шул тиклем ҙур ине, хатта ошо мәктәпкә бирегә өсөн генә булһа ла балаларын башҡорт класына бирергә теләүселәр табылды. Аҙаҡ рус класына күсерергә теләһәләр ҙә, балалар үҙҙәре китмәне. Ҡан тартмаһа, йән тарта тигәндәре шулдыр. Балалар тиҙ арала үҙ-ара аралашып, татыулашып, дуҫлашып китә ине. Атайҙары мәктәпкә килтереп, әниләре йәки мамалары рус кластарына күсерергә уйлаһа ла, балалар үҙҙәре китмәй ине. Башҡорт кластары арыу ғына эшләй башлағас, балалар баҡсаһы астырыу ихтыяжы тыуҙы. Йәмәғәтселек һәм инициатив төркөм был эште миңә йөкмәтте. Өфөлә ике балалар баҡсаһының мөдире башҡорт ине, береһе тәүге һөйләшеүҙә үк баш тартты, икенсеһе — Сәлимә Азмәтова ихлас риза булды һәм беҙ бергәләшеп юллау эшен башланыҡ. Сәлимә Азмәтова юллау мәсьәләһендә асыҡтан-асыҡ йөрөмәне, сөнки унан бик еңел ҡотолорҙар, һылтау табып эштән ҡыуыр ҙа ҡуйырҙар ине. Мин декрет отпускыһындамын, ваҡыт бар, ҡалала йәшәүсе башҡорт атай-әсәйҙәр исеменән ғариза яҙып юллау эше башланым. Был эш буйынса ҡултамғалар йыйып, өйҙән өйгә йөрөп аңлатыу мәшәҡәттәре, мәктәп юллауҙағы һымаҡ уҡ, ауыр булманы, сөнки балаларын урынлаштыра алмай йөрөүсе башҡорт атай-әсәйҙәре күп ине. Өфөгә эшкә саҡырылған Диас

Хәтип улы Йәнтүриндарҙың ғына ла бер юлы өс балаһын индерҙек исемлеккә. Үҙебеҙҙең ике бала, апайымдың, һылыуымдың балалары... Утыҙ балаға тултырып, бер төркөм асыу өсөн ғариза яҙҙыҡ. Йәйге эҫе көндәрҙә вазифалы етәкселәрҙең ишек төбөндә сәғәттәр буйы ҡабул итеүен көтөп тороуҙар еңел булманы. Мәғариф министры алмаштырылғайны инде. 1972 йылдың август аҙағында Гөлнур ҡыҙым тыуҙы. Шулай булғас, июнь-июль айҙарында ниндәй хәлдә йөрөгәнемде күҙ алдына баҫтырып булалыр.

Киров РОНО-һы мөдире Шерстобитов исеменә яҙылған ғаризабыҙға кире яуап алғас, мин Мәғариф министрының ҡабул итеүен һораным. Индем. Министр С. Й. иптәш (*ул саҡта Фатима Мостафина икенсе эшкә күсерелгәйне*) миңә, Лениндың хеҙмәтен алып, ҡасан булһа ла бөтә милләттәрҙең дә бер телгә күсәсәге тураһындағы яҙмаһын уҡып ишеттерҙе. Минең буш эш менән шөғөлләнеүемде, башҡорт мәктәбенең дә киләсәкһеҙ булыуын аңлатты. "Мин үҙ ҡатынымды ла башҡорт мәктәбенә эшкә ебәрмәнем," – тип, "алдан күрә белеүсе" етәксе икәнлегенә ишара яһаны. Мин, әлбиттә, уның был ҡарашын "аңламаным". Шунан ул:

— Балағыҙҙы башҡортса өйрәткегеҙ килгәс, ауылға ғына ҡайтһағыҙ ни була? Ҡалаға килергә өлгөрөрһөгөҙ, йәшһегеҙ бит әле, – тип кәңәш бирҙе. Миңә ул саҡта 29 йәш тулып үткәйне.

— Һеҙ һаман Елизавета Указына таянып эш итәһегеҙме?

— Ниндәй Указына?

— Башҡорттарҙы ҡалаға ҡырҡ саҡырымдан да яҡын ебәрмәҫкә тигән.

— Ә ни эшләп улай тиһегеҙ? Мин үҙем дә башҡорт. Әммә һеҙгә тиклем бер кем дә башҡорт баҡсаһы тип йөрөмәне, һәм мин Өфөлә балаһын башҡортса һөйләштергән бер кемде лә ишеткәнем юҡ.

— Иртәгә иртәнсәк беҙҙе ҡабул итәһегеҙме?

— Кемде ул "беҙҙе"?

— Балаһын башҡортса тәрбиәләү өсөн янып йөрөгәндәрҙе.

— Ҡыҙыҡ булыр ине. Килегеҙ.

Беҙ барҙыҡ. Унау инек. Геолог Диҡҡәт Бураҡаев, телсе ғалим Радик Зарипов, нефтсе инженерҙар Шамил Туҡаев менән Әсғәт Биишев, уҡытыусы Айрат Ғафаров, Мусин фамилиялы инженер егет — исемен онотҡанмын (*1-се республика интернат-мәктәбен тамамлағайны*), шағир Рәми Ғарипов, яҙыусы Фәрит Иҫәнғолов, Ф. Байышев – күренекле телсе ғалим Таһир Байышев ағайҙың туғаны.

Министр былай булырын көтмәгәйне, ахыры. Бер торҙо, бер ултырҙы. Шунан аптырауы бер аҙ баҫылғас, ултырышырға тәҡдим итте. Егеттәр баланы башҡортса тәрбиәләүҙең мөһимлеге тура-

һында һөйләнеләр. Радик Зарипов Өфөлә күптән инде татар телле 1-се һанлы балалар баҡсаһы һәм 15-се һанлы татар мәктәбе булыуы хаҡында ла телгә алды.

Министр беҙҙең алда Киров РОНО-һы мөдиренә телефондан шылтыратты:

— Товарищ Шерстобитов! У вас есть заявление от родителей об открытии башкирского детского сада? Откройте им одну группу, если смогут набрать детей.

Өфө ҡалаһының Фрунзе (*хәҙер Зәки Вәлиди*) урамы менән Цюрупа урамдары киҫешкән мөйөштә ағас йортта 12-се балалар баҡсаһында тарихта беренсе тапҡыр башҡорт телендә тәрбиәләү өсөн ике төркөм асылды. (*Республикала башҡорт балалар баҡсаһы Архангел районының Аҙау ауылында, тағы Бөрйән районында ғына бар, тинеләр*). Һәр яңы башланғысты үҙеңдән башларға кәрәк. Ҡоро һүҙ – ҡуңалтаҡ итек. Шуның өсөн ике балабыҙҙы әлегәсә йөрөгән баҡсаларынан алып ун икенсе балалар баҡсаһына күсерергә булдыҡ. Путевкаларын алмаштырырға тип, РОНО-ға биргәйнек, бер аҙҙан йәш кенә ҡыҙ килеп инде беҙҙең өйгә:

— Һеҙ балалар баҡсаһындағы урындарығыҙҙы алмаштырыуҙы һорап ғариза яҙғанһығыҙ. Ун икенсе балалар баҡсаһы һеҙгә бик алыҫ, йөрөүгә лә уңайһыҙ. Унда шарттар ҙа юҡ. Боронғо ағас бинала ғына урынлашҡан. Әйҙәгеҙ, ишек алдындағы баҡсаға урынлаштырайыҡ, – ти. Әйтергә кәрәк, беҙгә Цюрупа урамында "Океан" магазины өҫтөнән фатир биргәс, әлеге ваҡыттағы Рәми Ғарипов исемендәге Республика гимназия-интернаты тирәлегендәге балалар баҡсаһында йөрөгән балаларыбыҙҙың урынын тап шул ишек алдындағы баҡсаға алмаштырыуҙы юллап бер йыл йөрөгәйнек инде. Барған һайын "урын юҡ" тип яуап ҡайтаралар ине. Ә әле "тәҡдим" үҙе юллап килеп еткән. Башҡорт балалар баҡсаһына йыйылған балалар иҫәбен кәметеү маҡсаты менән ебәрелгәнлеге көн кеүек асыҡ. Башҡорт класына балалар йыйған саҡта ла шундай уҡ хәл булғайны. Утыҙ ғариза йыйып, тәүге йыйылыш үткәргән көндә, был егерме алтынсы август көнө ине, ихтирам иткән ғалимыбыҙҙың Марат М.-тың ҡатыны (*Өфө ҡыҙы*) бик ентекле әҙерләнеп телмәр тотто. Башҡортса уҡытып, балаһын наҙан ҡалдырғыһы килмәүен, иренең дә башҡорт мәктәбен тамамлағандан һуң фәкәт башҡорт филология факультетында уҡытырға ғына эшкинеүен, русса акцент менән һөйләшеүен, башҡорт теленең башҡа бер нәмәгә лә эшкинмәүен, киләсәкһеҙ булыуын, хәҙерге заманда инглиз телендә өйрәтергә кәрәклеген аңлатты ла ғаризаһын кире алды. Уның артынса уҡ тағы ун биш ғариза кире алынды, һәм

башҡорт класы асылыуы хәүеф алдында тороп ҡалды. Почта бүлексәләренә барып, башҡортса матбуғатҡа яҙылыусы кешеләрҙе һорашып, өйҙәренә йөрөп, уларҙан тағы башҡорт ғаиләләре хаҡында белешеп, балалар һанын тултырырға уйланыҡ. Әммә ваҡыт бик аҙ ҡалғайны һәм, өҫтәүенә, беренсе класҡа бараһы балаларҙың мәктәптәрҙә йыйылыштары булып, урынлашып бөткәйнеләр. Ә башҡорт класы асыу тураһында приказ булғайны һәм, балалар һаны ун бергә генә тулһа ла, класс асылды. Бындай приказды 1971 йылға тиклем Мәғариф министры булған Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафина сығарҙы. Шуның өсөн дә Өфө ҡала башҡорт гимназияһы хаҡлы рәүештә Ф. Х. Мостафина исемен йөрөтә. Әммә балалар баҡсаһы юллаған мәлдә Фатима Мостафина хаҡлы ялға оҙатылғайны.

Мөхәммәт Иҫкужин менән Изел Агишев ағайҙар шул саҡ Өфө башҡорттарының исемлеген төҙөй башланы. "Өфө ҡалаһының һәр районында бер башҡорт мәктәбе булырға тейеш", — тип хыяллана һәм шул маҡсат менән эшләй ине улар. Уларҙың был хыялы тормошҡа ашмаҫ бер уйҙырма һымаҡ булып тойола ине. Сөнки бер класс өсөн башҡорт балаларын ни тиклем ауырлыҡ менән йыйғанды, атай-әсәйҙәренә туған телдә уҡытыуҙың, үҙ традиция-быҙҙа тәрбиәләүҙең әһәмиәтен аңлатыу ни тиклем ҡыйынлыҡ менән бирелгәнлеген үҙебеҙ генә белә инек. Әммә утыҙ йыл дауамында Өфө ҡалаһының һәр районында тип әйтерлек башҡорт мәктәптәре асыуға өлгәшелде. Быларға нигеҙҙе Мөхәммәт Иҫкужин менән Изел Агишев һалды.

Халыҡ Мөхәммәт Иҫкужиндың хеҙмәтен ихлас баһаланы. Мәғрифәтсенең етмеш йәше Башҡорт дәүләт филармонияһының Ҙур залында шығырым тулы тамашасы ҡотлауы аҫтында билдәләнде. Кисәнең сценарийын мин төҙөнөм һәм Башҡорт дәүләт филармонияһы артисткаһы Әнисә Яхина менән бергә алып барҙыҡ. Байтаҡ ҡына рәсми юбилейҙар күрелде. Әммә был юбилей айырыуса тулҡынландырғыс булды, сөнки уны халыҡ үткәрҙе. Тағы шуныһы ҡыуаныслы — Мөхәммәт ағай үҙе иҫән саҡта халҡы баһаһын һәм һөйөүен күрҙе.

Был кисәлә балаларын башҡорт мәктәптәрендә уҡытмаған атай-әсәйҙәр ҙур һабаҡ алды. Сөнки күп кенәләр: "Беҙ өйҙә лә туған телдә һөйләшәбеҙ ул. Өйрәнерҙәр әле", – тиҙәр ҙә балаларын рус мәктәбендә уҡыталар. Әммә мөхиттең дә, уҡыған предметтарҙың да, уҡытҡан уҡытыусыларҙың да тәрбиә эшендә, рух һалыуҙа ҙур әһәмиәткә эйә булғанлығын, фекерҙәш дуҫтарының булыуын, аҙаҡ туғандар кеүек аралашып йөрөйәсәктәрен, үҙ-ара өйләнешәсәктә-

рен аңлап етмәйҙәр. Бөгөнгө көндә 20-се ҡала башҡорт гимназияһын, 136-сы лицейҙы тамамлаған уҡыусылар бер-береһе менән туғандар кеүек аралашалар, бер-береһенә ярҙам итәләр, бер-береһенә таяныстар, уларҙың рухтары бер-береһенә тартыла. Иренең дә, үҙенең дә вазифаһының юғары булыуына һылтанып (*йәнәһе, башҡорт мәктәбенә балаларын бирһә, дәрәжәләре кәмей*) балаларын башҡорт мәктәбенә бирмәгән һәм әлеге көндә балалары менән бер ниндәй ҙә уртаҡлыҡ тапмаған бер ғалимә ҡатын: "Һин балаларың менән нимә хаҡында һөйләшәһең ул? Минекеләр хәл белергә килһә, ике һорау ғына бирә алам: "Хәлең нисек? Сәй эсәһеңме?" Башҡа һөйләшер уртаҡ нәмә юҡ. Ә һин балаларың менән туҡтауһыҙ һөйләшәһең, көлөшәһегеҙ, үҙ-ара бәхәсләшәһегеҙ. Ҡарап тороуы күңелле", — тип аптырағайны. Күңелле генә түгел, оло бәхет ул балаларың менән туған телдә аралашыу.

– "Юғары вазифа" арҡаһында башҡорт мәктәбендә уҡытырға "ҡуртҡан" сүрәттә лә өйҙә һөйләшергә кем тыйҙы һуң һеҙҙе? Бала менән туған телдә һөйләшмәү — күңел берлеген юғалтыу бит, — тип һорау менән яуап бирҙем.

Ошо урында "ҡуртҡан, ҡуртҡытылған" тигән һүҙҙәргә аңлатма биреп китеү кәрәктер.

Ваҡиға. КПСС-тың Башҡортостан өлкә Комитетында эшләгән Ғирфан Яҡупов үҙенең ике балаһын да башҡорт мәктәбенә уҡырға бирҙе. Был хаҡта Өлкә Комитетта билдәле булған һәм идеология буйынса сәркәтип һүҙ ыңғайында ғына:

— Һинең балаларың 20-се мәктәптә уҡыйҙар икән, – тип әйтеп ысҡындырған.

— Эйе, унда уҡыйҙар. Тыйылған мәктәпме әллә ул? — тип яуап ҡайтарған ул.

Бер аҙҙан республикабыҙҙың иң артта ҡалған райондарының береһенә КПСС-тың райком секретары итеп эшкә тәғәйенләнеләр уны. Ул "партия ҡушыуы буйынса" китергә мәжбүр булды, аҙаҡ "һөт буйынса план үтәй алмағанлыҡтан", секретарлыҡтан алынды һәм хаҡлы ялға киткәнсе бөтөнләй икенсе районда белгес булып эшләне.

Донъя кимәлендә үткәрелгән фестивалдәргә, һәр төрлө башҡа сараларға илебеҙҙән төрлө милләт вәкилен ҡатнаштырып, беҙҙең илдә бөтә милләттәргә лә ирекле үҫеш, үҙ сәнғәтен, мәҙәниәтен үҫтереү өсөн мөмкинлек тыуҙырылған, теләгәндәр үҙ туған телдәрендә уҡый алалар, тип күрһәтергә маташалар. Ә милләттәрҙе, милли сәнғәтте һаҡлауға шул тиклем ныҡ ҡаршылыҡ күрһәтәләр. Ни өсөн шулай? Бөтә милләттәрҙең дә үҙенсәлеген

һаҡлау донъя алдында маҡтанып күкрәк һуғырлыҡ ҡаҙаныш булғас, ни эшләп асылда иһә уға ҡаршы булырға? Илебеҙҙә милләттәр ни тиклем күберәк, ни тиклем төрлөрәк булһа, уртаҡ сәнғәт тә шул хәтлем байый. Һәр милләткә үҫеш өсөн ни тиклем күберәк мөмкинлек бирелһә, дөйөм рухи байлыҡҡа шул тиклем тосораҡ өлөш индерелә. Халыҡ рухи яҡтан байыған һайын, күңел күтәренкелеге, эшкә дәрте арта. Дәртләнеп башҡарған эш сифатлы ла, һөҙөмтәле лә була. Был – хәҡиҡәт. Быны иҫбат итергә кәрәкмәй. Ә ни өсөн шундай тотҡарлыҡ? Ни өсөн милләттәрҙең үҫешенә ҡамасаулау һәр урында, һәр тарафта һиҙҙермәй генә алып барыла? Юғарынан төшкән күрһәтмәме ул, әллә урындағы берәй яуызының эшеме? Ошоно аңлай алмайым. Тағы шуныһы ғәжәп – әллә күпме ҡаршылыҡтар аша йырып сыҡҡан берәй эште, шуға уҡ ҡаршы сыҡҡан вазифалы әһелдәр үҫҙәре үк, мин эшләнем дә, мин эшләнем, тип, күкрәк һуғып маҡтана башлайҙар.

Илебеҙ халыҡтарын бер генә милләтле, рус телле милләт итеүгә ынтылыш күптән килә. Бындай маҡсатҡа динде христианлаштырыу юлы менән өлгәшергә уйлаусылар ҙа булған. Башҡорт балалары өсөн кириллица нигеҙендә "Әлифба" төҙөлгән. Революциянан һуң Ленин тарафынан әйтелгән "Тел — аралашыу ҡоралы" тигән фекер ҙә кеше мейеһен ныҡ бутаны. Һәр ерҙә ошо һүҙҙәр яҙылды. "Совет Башҡортостаны" гәзитендә лә ошондай рубрика бар ине. Мин редакторға бындай рубриканың дөрөҫ түгеллеген иҫбат итеп, алдыртыуға өлгәштем. Юғары урында ултырған вазифалы кешеләр, уҡытыусылар өйҙәрендә үҙ балалары менән рус телендә һөйләшеүҙе юғары мәҙәнилек тип һананылар. Ауылдарынан ситкә сығып киткәндәр бер йыл да йөрөмәй, ҡайтып атаһы-әсәһе менән ят телдә һөйләшеүҙе мәртәбәгә һананылар.

Бөгөнгө көндә беҙ һәр уңайы килгән осраҡта туған телебеҙҙең мәртәбәһен күтәрмәһәк, уның ҡулланылыш даирәһен киңәйтмәһәк, "беҙҙең балаларыбыҙға ла, туған тел ул ауылды сыҡҡансы ғына кәрәк" тигән фекер һеңәсәк. Беҙ былай ҙа туған тел ҡулланылышын мәктәптә башҡорт теле дәресе һәм өйҙә кухняла һөйләшеү теле кимәленә тиклем тарайтып киләбеҙ. Туған телгә дәүләт статусы тип янып йөрөгән әһелдәребеҙҙең байтағы үҫҙәре үк өйҙәрендә ейәндәре менән рус телендә һөйләшә. Бер тел ғалимы, фән докторы минән: "Хәҙер нисә внукка бабуля булып киттең инде?" — тип һораны. Ә бер саҡ урамда бер әһелебеҙ менән һөйләшеп торған саҡта, үҫҙәренә саҡырҙы ла бәләкәй ҡыҙым Таңсулпанға мөрәжәғәт итеп: "Мамаң менән беҙгә килегеҙ йәме?" — тигәйне: "Минең мамам юҡ", – тине Таңсулпан. Танышым аптырап китте. "Ни эшләп

улай? Был бала һинеке түгелме ни?" — ти. "Минең мамам юҡ, әсәйем бар", – тип аңлатты алты йәшлек ҡыҙым үҙе. Ҡунаҡҡа барғас, тағы бер тапҡыр тәнҡиткә дусар булдылар таныштарым. Балалары менән рус телендә һөйләшкәндәрен ишеткәс, ҡыҙым ихлас аптыраны һәм тағы: "Мин үҙ балаһы менән русса һөйләшкән кешене аңламайым ул!" — тине. Ҡыҙым өләсәһенең һүҙҙәрен ҡабатланы, ә бала исеменән әйтелгән был һүҙҙәр таныштарымдың ҡыҙҙарын уйға һалған булырға кәрәк, сөнки Мәскәү әҙәбиәт институтының тәржемә бүлегендә уҡыған Зөһрә ҡыҙымдың "Известия Башҡортостана" гәзитендә башҡортсанан рус теленә минең хикәйәмдең тәржемәһе баҫылып сыҡҡас, теге танышымдың ҡыҙы: "Зухра русский язык знает лучше, чем мы, потому что к русскому она пришла через родной", — тип, атаһы менән әсәһенә үпкә һүҙҙәре әйткән.

Телевидение аша "Ғаилә мөхите" тигән тапшырыу алып барған саҡта, тапшырыуҙа ҡатнашыу өсөн Өфө ҡалаһында үҙ-ара ҡоҙа булышҡан башҡорт ғаиләләре, килене лә, ҡәйнәһе лә башҡортса һөйләшеүсе ғаилә, ейән-ейәнсәрҙәре менән башҡортса һөйләшеүсе ҡартатай менән өләсәйҙәр эҙләп теңкә ҡорой торғайны. Барҙар улар, әммә һирәктәр. Булғандары ла, башлыса, юғары трибуналарҙан телдең әһәмиәте тураһында һөйләүселәр түгел, ә уларҙың аҡылын тыңлаусы – ябай хеҙмәт кешеләре. Мәҫәлән, ғүмере буйы заводта инженер булып эшләгән Фәниә Тимерғазина үҙенең башҡорт килене Гөлназ менән, физик Салауат Әбсәләмов өс балаһы һәм ҡатыны менән һәм башҡа шундай үҙ телдәренең ғәмәли патриоттарын саҡырҙым. Бер нисә әһелдең – тел белгестәренең – өйөнә шылтыратып тапшырыуҙа ҡатнашыу тураһында һөйләшергә тура килде. Шылтыратам. Телефонды ейәне йәки ейәнсәре ала.

— Һаумыһығыҙ! Өләсәйең өйҙәме? – тип һорайым. Бала өләсәһенә ҡысҡыра.

— Бабуль, тебя к телефону!

— Кто приглашает?

— Я не понял. Улясай только понял.

Ә трибуналарҙан ниндәй матур сығыштар яһайҙар улар.

Милләтте белемле, һәләтле кешеләр күтәрә, ә аңлы кешеләр һаҡлай. Ә аң кимәле иһә белем кимәле менән тап килмәй. Аң кимәле лә, белем кимәле лә юғары булған шәхестәре ишле милләт алға бара, үҫә.

Әгәр аҡыллы хәбәр һөйләүсе әһелдәребеҙ үҙ аҡылдарын үҙҙәре тотһалар, өҫтәүенә, аңлы ла булһалар, шәхси өлгө күрһәтһәләр, ниндәй яҡшы булыр ине. Сөнки иң тәьҫирлеһе — шәхси өлгө. Иң

ҡиммәтлеһе – һөйләгән һүҙең менән ғәмәли эшеңдең тап килеүе һәм намыҫың алдында яуаплылыҡ тойоу. Быға мин ышанғанмын, инанғанмын, һәм был хәҡиҡәт иҫбат итеүҙе талап итмәй. 1975 йылда Ейәнсура районына ялға ҡайтҡан саҡта халыҡ араһында таралған бер хәбәрҙе һөйләнеләр миңә. Атаҡлы ҡурайсы Нәжметдин Хәсәнов Өфөгә командировкаға килгән. Ул район гәзите редакцияһында эшләй ине. Йөрөп ҡайтҡас, унан Өфө яңылыҡтарын һорашалар икән. "Башҡа иҫ китерлек яңылыҡҡа тап булманым. Ә бына бер хәл шатландырҙы. Троллейбуста китеп бара инем, бәләкәй-бәләкәй дүрт балаһын эйәртеп Бураҡаевтар килеп инде. Балалары ҡыҫҡырып тороп тап-таҙа башҡортса һөйләшә. Бына ғәләмәт! Өфөгә нисә барып урамда башҡортса һөйләшкән кеше осратҡаным булмағайны. Аптыраным да, ҡыуандым да. Тыңлап килә торғас, туҡталышты үткән дә киткәнмен", — тип һөйләгән.

Йыл һайын берәй ауылға барып ял итә торғайныҡ. Балаларҙың башҡортса һөйләшеүенә, ысынлап та, һәр саҡ аптырай ҙа, шатлана ла инеләр. Өфөлә бер ваҡыт урамда китеп барған саҡта күренекле драма артистары Зәкиә апай менән Ғата ағай Арыҫлановтар туҡтаттылар: "Һинең балалар тап-таҙа башҡортса һөйләшә, тиҙәр. Әйҙә һөйләштереп ҡарайыҡ әле", — тип, балалар менән оҙаҡ ҡына әңгәмә ҡороп торҙолар. Йылдар үткәс, Илгизәр улым ейәнем Сурағол менән бергә китеп барғанда, бер башҡорт профессоры (*үҙенең ике ғалим улы атаһының телен дә, милләтен дә бар тип тә белмәй*): "Улың да башҡортса беләме? Таҙа итеп ысын башҡорт һымаҡ һөйләшәме?" – тип аптырауын йәшермәй һөйләшеп торған.

Алтмышынсы йылдарҙа Өфөлә башҡорт телен ғаилә теле итеүсе ғаиләләр бик аҙ ине. Мәғфирә Ғәлиева менән Николай Головтар, Ғәлиә менән Рамаҙан Ҡотошовтар, Лилиә менән Вәли Псәнчиндар, Лена менән Нияз Мәжитовтар, Надя менән Рәми Ғариповтар, Клара менән Әмир Сиразетдиновтар, Ғәлиә менән Әнүр Вахитовтар, Нажиә Аллаярова менән Абрар Ғабдрахманов, Иҙел Агишев ғаиләһе, Марина-Мәсрүрә менән Рәшит Шәкүревтәр, Рәйсә менән Мәсғүт Бикжановтар, Һәҙиә менән Ғирфан Яҡуповтар, Лена менән Урал Нәҙерғоловтар, Алма Сәлмәновна Аллағолова, Әхмәтҡужиндар, Фәниә менән Нил Тимерғазиндар, Роза менән Шәрифйән Ишимовтар, Роза Зиннәтшина, Мортазиндар (*Урал Мортазиндың ата-әсәһе*) һәм тағы бармаҡ менән генә һанарлыҡ бер нисә генә ғаиләлә башҡортса һөйләшеп була ине. Аҙаҡ, 70-се йылдарҙа бындай ғаиләләр күбәйеп китте. Мәскәүҙән Рамаҙан ағай Өмөтбаев ҡайтты. Сибайҙан күсеп килеүсе Сәбилә Сөләймәнова менән Айрат Ғафаровтар ғаиләһе, Мирас Иҙелбаев менән Гөлфиә

Юнысова, Бөрйәндән килгән Флүрә менән Әхмәт Сөләймәновтар, Мәсетле яҡтарынан килгән Тәнзилә менән Диас Йәнтүриндар, Салауат районынан Таңһылыу менән Мөхәммәт Ғәниевтарҙың биш улы, апайым Мәрфуға Мусинаның дүрт балаһы, һылыуымдың һәм башҡаларҙың башҡортса һөйләшеүсе балалары өҫтәлде. Хәҙер бындай ғаиләләр артҡандан-арта бара. Бармаҡ менән һанарлыҡ ҡына түгел. Һуңғы йылдар күңелдәргә өмөт сатҡылары һалды. Өфөлә хәҙер бер кем дә башҡортса һөйләшкәнгә аптырамай, башҡорт мәктәптәренә берәмләп балалар йыйып йөрөү бөттө, башҡорт гимназияларына конкурс нигеҙендә генә ҡабул итәләр. Өфө ҡалаһының һәр районында тиерлек башҡорт гимназияһы йәки мәктәбе, рус мәктәптәрендә башҡорт кластары бар. Мин 1966-1967 йылдарҙа радио һәм телевидение буйынса комитеттың балалар өсөн тапшырыуҙар редакцияһына тапшырыуҙар әҙерләгән саҡта, Республика башҡорт интернат-мәктәбенән генә уҡыусылар саҡыра инем. Хәҙер "Тамыр" студияһына балаларҙы һайлап алырлыҡ кимәлдәбеҙ. Ә исемдәрҙең матурлығы! Азамат, Урал, Илдархан, Сыңғыҙ, Сәлимә, Зөлхизә, Буранбай, Нурислам, Гөлдәр, Алтынай, Дауыт, Таймаҫ, Мөйтән. Минең Илгизәр, Гөлназ, Гөлнур, Зөһрә, Таңсулпан тигән үҙ балаларымдың балалары – ейәндәрем дә Айгиз, Нәркәс, Сурағол, Әмилә, Айназа, Мортаза, Айсулпан, Юрматы, Сәлимә, Мораҙым исемле (*Салауат менән Нәркәс исемле ейәндәрем ҡыяматлыҡ ҡыҙым Рима менән кейәүем Таһирҙың балалары – Әбйәлил районы Аскар ауылында йәшәйҙәр*).

Исем – милли ғорурлыҡ билдәһе. Үҙ милләтен яратҡан кеше уның бөтә традицияларын, шул иҫәптән исемдәрен дә, ярата.

Йәштәрҙең аңында бындай фекер уяныу фәҡәт яҡшыға ғына.

Халҡыбыҙҙың үткәнен ғорурланып иҫкә алғанда, тағы бер мөһим сифатҡа иғтибар итергә кәрәк: беҙҙең атай-олатайҙар телебеҙгә дәүләт статусы биреүҙе көтөп тормағандар, улар һәр береһе үҙ күңелендә туған теленә статус биргән һәм киләсәк быуынға бына тигән тел ҡалдырған. Ә беҙҙең әһелдәребеҙҙең күптәре балаларын башҡорт теленә өйрәтеү өсөн дәүләт статусы көтөп йөрөнө...

Өндәшмәй-нитмәй генә үҙ урындарында ғәмәли эш атҡарғандар ҙа булды.

Шундай зыялыларыбыҙҙың береһе Ғата ағай Сөләймәнов.

Данлыҡлы ҡурайсыбыҙ Ғата Сөләймәнов халҡыбыҙ араһында ҡурай уйнаусыларҙың кәмеүенә һәр саҡ әсенеп йөрөнө. Ҡурайҙы нотаға һалып ғәжәп хеҙмәт сығарҙы. Шунан училищела ҡурай бүлеге асыу инициативаһы менән йөрөй башланы. Үҙенең уй-хы-

ялдары менән "Совет Башҡортостаны" гәзитенә килеп уртаҡлашып китер ине. "Училище директоры Камил Вәлиев юллап астырҙы бүлекте, быйыл уҡыусылар йыябыҙ", – тип шатланып һөйләп китте бер тапҡыр. Ҡурайсы малайҙар эҙләшегеҙ әле, тип мөрәжәғәт иткәс, республика мәктәптәре буйлап ҡурай уйнаусылар эҙләшә башланыҡ. Беренсе йылда данлыҡлы ҡурайсы Ришат Рәхимовтар төркөмө йыйылды. Икенсе йылына тағы эҙләшә башланыҡ. Республикабыҙҙа ҡурайсылар бик һирәгәйгән осорҙа Ейәнсура ҡурайсылары Нәжметдин Хәсәнов етәкселегендә ансамбль төҙөп, беренселәрҙән булып өс тауышҡа уйнап йөрөнөләр. Ансамблдең өс ҡурайсыһы Ибрай ауылы ингән Чапаев колхозынан ине. Ибрай мәктәбендә ҡурай түңәрәге эшләй, йәш ҡурайсылар бар, тип ишеттем. Киттем. Мәктәпкә барғайным, ҡурай түңәрәге етәксеһе Әхмәтсәлим Яҡупов, Дауытовтарҙың быйыл һигеҙенсе класты тамамлаған улдары Бикбулат ҡурайҙа яҡшы уйнай, тине. Уны мин Өфөгә алып килдем. Хат аша башҡа райондарҙан да эҙләштек. Ҡурай бүлеге асыла, тигәнгә аптыранылар ҙа, ышанмайыраҡ та ҡаранылар. Тағы бер курслыҡ йыйылды. Ҡабул итеү имтихандары башланды. Бер саҡ гәзит редакцияһына Ғата ағай йүгереп килеп ингән: "Рус теленән изложение ине, бөтәһенә лә икеле сәпәгәндәр. Ҡурай бүлеген яратмаусыларға ҡул булды был имтихан. Быйыл бүлек асыу ҡурҡыныс аҫтында. Камил Вәлиев икенсе тапҡыр имтихан үткәрәрергә риза ла, тағы шул ук хәл ҡабатланыр, тип ҡурҡабыҙ", – ти. Ул саҡта ҡабул итеү имтихандары барышында журналистарға репортаж йәки мәҡәлә яҙыу өсөн имтихандарға инеү рөхсәт ителә ине. "Совет Башҡортостаны" гәзитендә "Вуздарҙа ҡыҙыу көндәр" тигән рубрика башлағайныҡ. Мин байтаҡ ҡына уҡыу йорттарынан мәҡәләләр яҙғайным инде. Училищеға киттем. Камил Вәлиевтың Роза исемле (*башҡорт ҡыҙы, фамилияһын хәтерләмәйем*) секретары бар ине. Башҡорт дәүләт университетында филология факультетының рус бүлеген тамамлағайны. Шунан таныш ине. Икәүләшеп имтиханға инеп, уҡытыусыларға һиҙҙермәй генә малайҙарҙың изложениеларын тикшерешеп, хаталарын төҙәтеп сыҡтыҡ. Төркөм йыйылды. Тағы бер курс асылды. Бикбулат дәртләнеп уҡый башланы, һәм беҙгә килгеләп, бик ҡыуанып, яңылыҡтарын һөйләп китә ине.

— Апай, мин Ибрайға ҡайтам да ун баланы ҡурайға өйрәтәм. Ғата ағай шулай ҡушты. "Һеҙҙең һәр берегеҙ унар ҡурайсы өйрәтһен, улар тағы унарҙы өйрәтһендәр. Шул саҡта ҡурай таралып китер," – ти торғайны. (*"Торғайны", тип әйтеүем фажиғәгә бәйле – Дауытовтар гаиләһе тотош фажиғәле һәләк булды.*)

Рус телен бик яҡшы белергә кәрәк, әммә ижад кешеһе өсөн иң мөһиме – талант. Талант тәбиғәттән килә, белемде уҡып алып була. Таланты табырға, һаҡларға, ҡәҙерен белергә кәрәк тә бит... Юҡ, быны иҫкә лә алманылар: иң мөһиме рус теленең ҡеүәтен мейегә һеңдереү, зиһенгә һалыу. "Ана бит, ҡурайҙа яҡшы уйнаһа ла, рус теленән насар билдә алыу арҡаһында ҡурай бүлегенә лә инә алмаған," — тигән фекер һалыу өсөн һылтау был.

Утыҙынсы йылдарҙа йырсы, композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтов П. И. Чайковский исемендәге Мәскәү дәүләт консерваторияһы эргәһендә башҡорт студияһы ойоштороуҙы башлап ебәрә һәм башҡорт егеттәренә халыҡ араһынан таланттар эҙләп йыйыу бурысы йөкмәтә. Сәнғәт әһелдәре Фәүзи Саттаров, Ҡадир Бакировтар был эштә әүҙемлек күрһәтәләр. Башҡорт эстрадаһына нигеҙ һалыусы, башҡорт халҡының иң яратҡан йырсыларының береһе Мәғфирә Ғәлиеваны ошо студияға уҡырға Ҡадир Бакиров алып килә. Әммә Мәғфирәнең тыуған ауылы оло юлдан бер яҡ ситтәрәк ята, рус кешеләре менән аралашыу һирәк булғанлыҡтан, рус телен насар белә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ғәжәп үҙенсәлекле һәм көслө тауышҡа эйә булған Мәғфирә Ғәлиеваны педагог В. Карин уҡырға ала (*рус теленән хаталы яҙа, тип тормай*) һәм рус теленән өҫтәмә дәрестәр билдәләй. Аҙаҡ иһә Мәғфирә Ғәлиева рус телендә һөйләшеү генә түгел, ә алтмыш телдә йырлау һәләтенә эйә булды. Бөтөн илебеҙҙә төрлө телдәрҙә йырлай белеүсе Ирма Яунземдан һуң икенсе йырсы булып танылыу алды.

Мин урта мәктәптә уҡыған йылдарҙа, илленсе йылдар аҙағы, алтмышынсы йылдар башында Иҫәнғолда уҡытыусылар уҡыусыларҙың өйҙәренә йөрөп ғаиләлә рус телендә һөйләшергә кәрәклеген, рус телен белмәһәң, институтҡа юл бикле булыуын аңлатыу эштәре алып баралар ине. Әсәйем уларға ни тип яуап биргәндер, әммә ул өгөттәргә ҡолаҡ һалманы, беҙҙе үҙ-ара фәкәт туған телдә генә һөйләштерҙе. Рус телен өйрәнәбеҙ тиһәгеҙ, китапхана тулы китап – алығыҙ ҙа уҡығыҙ, ти торғайны. Ысынлап та, китап күп уҡыу беҙгә шул тиклем ярҙам итте, ат ҡараусы Сабирйән менән колхозсы Мәрхәбәнең дүрт балаһы ла үҙ кластарында, тимәк, тотош мәктәптә рус теленән иң грамоталы уҡыусылар булып телгә алына инек. Бер ваҡыт атай-әсәйҙәрҙең дөйөм йыйылышында әсәйемде сығыш яһарға, нисек тәрбиәләүе хаҡында һөйләргә һәм бер уңайҙан өйҙә рус телендә һөйләшәбеҙ, шуға балаларым рус телен яҡшы белә, тигән фекер әйтергә ҡуштылар.

Әсәйем сыҡты сәхнәгә. Йыйылыш клубта бара ине.

— Балаларым гел генә китапҡа текәлеп ултырмай, өйҙә эш күп,

хужалыҡ эштәрен бүлешеп алып ярҙам итәләр, һыу алыҫ, мал бар, шәл бәйләйҙәр, шулай ҙа әҙәби китап уҡырға ла, дәрес әҙерләргә лә ваҡыт табалар. Дүртеһенең дә иптәштәре килеп балаларымдан өйрәнә. Арифметиканһын да, рус телен дә, немец телен дә өйрәнәләр. Диктант яҙалар. Әммә балаларымдың үҙҙәрен өйҙә бер генә ауыҙ ҙа рус телендә һөйләштермәйем. Ни эшләп мин үҙ балаларым менән белер-белмәҫ көйө рус телендә һөйләшәйем, ти! Улыма мандолина, гармун алдыҡ, кистәрен бергәләшеп башҡортса йырлашып та алалар. Бер зыянын да күрмәйемсе. Балаларымды белә-һегеҙ. Әйләнгән һайын үҙегеҙ маҡтап тораһығыҙ. Балаларымдың дүртәүһе лә мәктәптең Почет таҡтаһынан төшмәй. Насар уҡыу кешенең тәбиғәтенә бәйләнгән ул. Зиһене ҡабул итмәй икән, ни эшләп уны рус телендә һөйләштереп барлы-юҡлы мейеһен миңрәүләтергә?! Ундайҙарын көслəп уҡытмаһағыҙ ҙа була. Тәбиғәт бөтәһенә лә үҙ кимәле менән икмәк эшләрлек һөнәр бирә ул. Уҡымағандар ҙа әмәлен таба, астан үлмәй. Тораһығыҙ ҙа кешенең әсәһендәй яҡын туған теленә бәйләнәһегеҙсе!

Был сығышты халыҡ нисек ҡабул иткәндер – белмәйем, әммә иртәгеһен, РОНО-ла кем булып эшләгәндер, бер кеше килеп етте өйгә. (Ул ир туҡһанынсы йылдарҙа туған телдең, традицияның кешене формалаштырыуҙағы роле хаҡында ғилми хеҙмәттәр яҙып нәшер итте һәм трибуналарҙан ошо хаҡта ялҡынлы телмәрҙәр тота ине. Бәлки, туған телгә ҡарата мөнәсәбәте үҙгәргәндер, күп кенә кешеләр аҙаҡтан булһа ла аңлап, балалары менән туған телдә һөйләшә башланы бит, тип уйлар инең — балалары бер ауыҙ ҙа башҡортса белмәй, белергә теләмәй. Улай ғына ла түгел, улар күңеленә илебеҙгә, рус теленә ҡарата ла һөйөү уянмағандыр, сөнки икеһе лә сит илдә, сит милләттә кейәүҙәләр. Илгә һөйөү туған телгә һөйөүҙән башлана, тигәнгә асыҡ миҫал был).

— Мәктәптә бөтә фәндәр ҙә рус телендә уҡытыла, Мәрхәбә апай. Юғары уҡыу йорттарының береһендә генә лә башҡортса уҡытылмай. Бала рус телен белмәй наҙан ҡалһа, институтҡа инә алмаҫ бит! Һеҙ кисә ерле юҡ нәмә һөйләнегеҙ йыйылышта.

— Наҙан бала институтҡа бармайҙыр инде ул!

— Үҙегеҙ үк әйтеп тораһығыҙ, наҙан бала институтҡа бара алмай. Ә һеҙ өйҙә башҡортса һөйләшегеҙ, тип өгөтләп, балаларҙы наҙан ҡалдырмаҡсыһығыҙ.

— Ҡустым, тыңла әле. Мин нисек бар — шулай һөйләнем. Ысынлап та, минең балалар өйҙә бер ауыҙ ҙа русса һөйләшмәй. Мин үҙ балам менән ни эшләп русса һөйләшеп ултырайым? Мин әсәй бит. Хоҙай биргән туған телем бар минең. Шул телдә уйлайым,

шул телдә йырлайым. Ниндәй әсәй үҙ балаһы менән ят телдә һөйләшһен инде? Шунан, ҡустым, тыңла әле. Ни эшләп рус балалары ла насар уҡый һуң? Ни эшләп улар бөтәһе лә елдерә һуғып институтҡа инеп бөтмәй? Ни эшләп рус булып тыуған балалар минең балаларҙан килеп үҙ туған телдәренә өйрәнәләр? Рустар өйҙәрендә гел русса ғына һөйләшәләр бит. Ә минең башҡорт балаларым уларға диктант яҙҙыра, өйрәтә. Бына һин уҡыған кеше – аңлат. Шуны аңлатһаң, һин нисек ҡушаһың – шулай һөйләрмен.

— Хушығыҙ.

Мин төштән һуң, икенсе сменала уҡый торғайным. Шуға был һөйләшеүҙең шаһиты булдым. РОНО кешеһенең ярһып сығып китеүе ныҡ иҫтә ҡалған, сөнки беҙҙең өй ҙә, тимәк, ишек тә тәбәшәк ине. Ул ҡапыл боролоп сығып китәм тине лә ишектең үрге кәсәгенә башын бәрҙе.

— Юҡты-барҙы һөйләп йөрөгәнгә Хоҙай һуҡты! — тине әсәйем.

Иҫәнғолда гимназия директоры булып эшләгән саҡта, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегаттар һайлау йыйылышы булды. Райондың абруйлы кешеләренән вәкилдәр йыйылғайны. Һәр район Өфөлә йәшәүсе күренекле бер нисә яҡташын делегат итеп күрһәтергә тейеш ине. Ейәнсуранан билдәле хирург, медицина фәндәре докторы Ибраһим Рәхмәтуллин, күренекле геолог, Дәүләт премияһы лауреаты Басир Мәһәҙиев, фән докторы Роберт Яҡшыбаев, шағир Марат Кәримовтар һайланды. Өфөлә йәшәүсе шул "патриотыбыҙҙың" да фамилияһын уҡығайнылар, Таҙлар ауылынан бер уҡытыусы: "Әгәр уны һайлаһағыҙ, республика гәзитенә мәҡәлә яҙып ебәрәм. Ел ыңғайына тәгәрәп йөрөгән ҡамғаҡ һымаҡ, әле былай, әле тегеләй кеше ниндәй делегат булһын ул?! Теге заманда бер ҙә патриот түгел ине әле. Илленсе йылдарҙа башланғыс кластарҙы уҡыттым. Үҙем башҡорт, уҡыусыларым башҡорт. Ҡушҡас – русса уҡытам. Русса белмәгән уҡыусыларыма аҙыраҡ ҡына башҡортсалап аңлата торғайным. Ошо кеше, ул саҡта РОНО-ла инспектор ине, шуны ишетеп ҡалып, Таҙларға килеп еткән. Директор бүлмәһенә индереп әрләгәнен һис тә онотаһым юҡ! "Тиҙәк таҙартыусылар ғына һөйләшә торған башҡорт телең менән ҡайҙа бараһың!" — тине миңә. Уны нисек Башҡорт ҡоролтайына делегат итеп һайламаҡ кәрәк!" – тип ҡаршы сыҡты, һәм уның кандидатураһы исемлектән төшөп ҡалды.

Был уҡытыусының һүҙҙәрендә хаҡлыҡ бар ине. Сөнки ул ирҙең патриотлығы демократик елдәр иҫкәс кенә башланды һәм, шунлыҡтан, күп сығыштарында экстремистик фекерҙәргә юл ҡуя, башҡа милләттәргә ғәйепләү ташлай һәм ошоноң менән башҡорт

халҡы исеменә тап төшөрә ине. Ә был тәбиғи күренеш, сөнки патриотлыҡ интернациоллек аша килһә, бик үк йоҡмай. Бала тәүҙә патриотлыҡ, унан һуң интернациональ тәрбиә алырға тейеш.

Баланың үҙ фекерен бәләкәйҙән үк булдырырға, уға ыңғай йүнәлеш бирергә, туған телгә, халыҡҡа һөйөү, кешеләрҙе милләтен айырмай яратыу тойғоһо һалырға кәрәк. Кешегә аңлатырҙан, үҙ һүҙеңде иҫбат итер алда үҙеңдең инаныуың кәрәк. Үҙ фекереңә үҙең инаныу ғына ныҡлы ихтыяр уята. Шул саҡта ғына башҡаларҙы ла ышандырып була. Үҙең инанмайынса, үҙ аҡылыңды үҙең тотмайынса ҡоро хәбәр һөйләү кире күренештәргә килтерә.

Ысын патриоттар өсөн бөтә милләттәр ҙә тиң. Улар бер ваҡытта ла бер милләтте икенсеһенән өҫтөн ҡуймай. Фәҡәт үҙ милләтен башҡаларҙан артта ҡалыуынан, кәм булыуынан йәки бөтөнләй юғалып ҡалыуынан ғына ҡурсаларға тырыша. Бына шул ысын патриоттарҙың маҡсаты.

Донъялағы бер ниндәй милләт тә үҙен алмаштырған быуындың ҡайтыш булыуын теләмәй. Үҙенә алмаш быуындың аҡыллыраҡ, аңлыраҡ, камилыраҡ, юғарыраҡ булыуын теләй. Һәр халыҡтың үҙ булмышынан, үҙенең Эске донъяһы талабынан, үҙ маҡсатынан сығып тәрбиә ҡанундары барлыҡҡа килгән. Был ҡалып заманға ҡарап аҙмы-күпме үҙгәрештәр кисерә барһа ла, нигеҙҙә тотороҡло һаҡлана, сөнки Кешелек донъяһында төп тәрбиә ҡиммәттәре үҙгәрешһеҙ ҡала. Кешелеклелек, ғәҙеллек, намыҫ һаҡлау, итәғәтле, ихтирамлы булыу, эш һөйөүсәнлек, әүҙемлек, биргән һүҙеңә тоғролоҡ, камиллыҡҡа ынтылыу, һыйышып тыныс йәшәү һәм башҡа шундай сифаттар заманға ҡарап үҙгәрмәй, әммә уны тәрбиәләү юлдары һәр халыҡта үҙенсә. Был тәрбиә ысулдары мәҡәлдәргә һалынған, халыҡтың башҡа төр ижад әҫәрҙәрендә сағылыш тапҡан. Ул — халыҡ педагогикаһы. Әммә меңәр йылдар һынау үткән, камиллашҡан ошо тәрбиә ҡанундары уҡытыу-тәрбиә эшендә файҙаланылмай ине.

Ошо мәсьәлә менән ҡыҙыҡһына башланым.

Башҡорт халыҡ педагогикаһы менән һуңғы йылдарҙа, нигеҙҙә, алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙа ғына шөғөлләнә башлауҙарын белдем. Ошо ваҡыт эсендә педагогтар К. Әхейәров, З. Кейекбаева, В. Баймурзина, Х. Баймурзин, Т. Исхаҡов, Й. Ҡотлогилдина, У. Атанғолов, Ә. Сафиндарҙың байтаҡ ғилми хеҙмәттәре, мәҡәләләре донъя күргән, халыҡ педагогикаһын мәктәптәргә индереү хаҡында ла фекерҙәр әйтелгән. Әммә мәктәптәр өсөн программа төҙөп, ихлас ҡына шөғөлләнеүсе булмаған. Шул үк ваҡытта мәктәптәрҙә уҡытыусылар халыҡ педагогикаһы алымдарын үҙҙәренсә ҡуллана

башлағандар. Ҡайһы бер мәктәптәр үҙҙәренең "халыҡ педагогикаһы буйынса" эшләүҙәрен хәбәр иттеләр. Ошондай бер нисә мәктәптә булдым. Әммә улар нигеҙҙә фольклор өйрәнәләр ине. Боронғо йырҙар, кис ултырыуҙар, тәбиғәт менән бәйле уйындар, йырбейеү, ҡобайыр һәм башҡалар. Ә халыҡ ижадындағы фәлсәфәгә, ғилемгә, этноэтикаға, тәрбиә ҡанундарына һәм башҡа шундай ҡиммәттәргә иғтибар ителмәй ине. Халыҡ педагогикаһы булғас, төп иғтибар тәрбиә ҡанундарына булырға тейеш. Халыҡ ижадында тәрбиә ҡанундары иҫ китмәле! "Урал батыр" эпосын үҙен генә тәрбиә ҡанундары тупланмаһы тип әйтергә мөмкин.

Халыҡ педагогикаһы нигеҙендә программа төҙөп, мәктәптәргә индереп ҡарарға тигән теләк тыуҙы. Әмәлгә ҡалғандай, демократик үҙгәрештәр халыҡ мәғарифы системаһында ла күп кенә яңылыҡтарға юл асты. Төрлө йүнәлештәрҙә инновация уҡыу йорттары программаһы төҙөргә һәм һынап ҡарарға мөмкинлек тыуҙы. Шул мәлдә улым Илгизәр университет тамамланы. Уны ла ҡыҙыҡһындырҙым. Беҙ халыҡ педагогикаһын уҡытыу нигеҙендә гимназия һәм "Артек" тибында йыл әйләнәһенә эшләй торған уҡыу һәм сәләмәтләндереү үҙәге асыу тураһында оло хыял менән пландар төҙөй башланыҡ. Ейәнсура районы хакимиәте башлығы Марат Түләбаевтың ихласлығы менән Иҫәнғолда гимназия асып ебәрҙек һәм уның йүнәлешен — халыҡ педагогикаһы нигеҙендә уҡытыу-тәрбиә эше, тип билдәләнек. Йыл әйләнәһенә эшләй торған уҡытыу-тәрбиә комплексы төҙөү һәм асыу өсөн М. Түләбаев Сөләймән ауылы эргәһендәге лагерҙы тәҡдим итте. Ихлас күңелле, патриот йөрәкле Мәғәфүр Ғиниәт улы Исмәғилев район гәзите редакторы ине, был эштә ярҙам итергә булды.

Әйткәндәй, беҙ уның менән бергәләшеп район гәзитенең исемен һәм район исемен Зианчуранан — Ейәнсураға әйләндереүгә өлгәштек, Ерәнсә сәсән ҡәберенә таш ҡуйыу мәсьәләһен күтәреп сыҡтыҡ һәм М. С. Түләбаевтың әүҙем ярҙамы менән был эште лә атҡарып ҡуйҙыҡ. Әйтергә кәрәк, Ейәнсурала гимназия асыу мәсьәләһендә лә М. Исмәғилевтың тел ярҙамы һәм район гәзите аша сығыштарының файҙаһы ҙур булды.

Беҙҙең, балаларым менән минең, гимназия һәм асыҡ һауала этнографик музей ял итеү-уҡытыу үҙәге асыу ниәтен ул саҡтағы министр Рәфҡәт Тимербай улы Гарданов хуплап ҡаршы алды һәм эште гимназия асыуҙан башларға тәҡдим итте. Ә уның урынбаҫары Миңдебай Бәхтейәр улы Юлмөхәмәтов программа төҙөү эшендә әүҙем ҡатнашты. Министрлыҡта эшләүсе Жеүәйрә Ғилман ҡыҙы Зарипова, Сибәр Хөснөлхаҡ ҡыҙы Дәүләтшина, Мәрфуға Шакир

ҡыҙы Галина, Стәрлетамаҡ педагогия институты уҡытыусылары, бигерәк тә профессор Булат Ғафаров, ихлас теләктәшлек белдерҙеләр. Ул саҡта халыҡ мәғарифы министрлығында инновация уҡыу йорттары буйынса инспектор булып эшләгән Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы Мөхәмәтйәнова — аҙаҡ халыҡ мәғарифы министры — гимназия асыуҙа ныҡ ярҙам итте.

Иҫәнғолдоң беренсе урта мәктәбе нигеҙендә гимназия кластары асылды. Мин гимназия буйынса директор урынбаҫары вазифаһын алып барам. Гимназия кластары өсөн теҙмәне (*расписание*) айырым төҙөйөм. "Халыҡ педагогикаһы" тигән предмет индерелде. Аҙнаһына бер тапҡыр. Тәжрибә дәрестәре. Улым менән өйҙә программа төҙөйбөҙ, темалар һайлайбыҙ, материал табабыҙ (*үҙебеҙҙең китапхананың байлығы һәм тематик яҡтан төрлөлөгө, айырыуса башҡорт тарихы, сәнғәте, ижады, йолалары, кейем-һалым, көнкүреш әйберҙәре, йорт-йыһаздары тураһында мәғлүмәттәргә ҡағылған әҙәбиәт күп ине*), уҡыусыларҙың йәшенә һәм ҡабул итеү ҡеүәһенә ҡарап темалар бүләбеҙ. Мәктәп уҡытыусылары ла был предмет менән ныҡ ҡыҙыҡһынды. "Нимә ул халыҡ педагогикаһы? Динме? Хәҙистәрме?" – тип һорашалар. Беҙ бөтөн дәрестәребеҙҙе лә асыҡ тип иғлан иттек. Яҡын-тирәләге райондарҙан төркөмләп-төркөмләп тә, берәмләп тә уҡытыусылар килде. Бер көн үҙебеҙҙең мәктәп директорының уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса урынбаҫары дәресемә инеп ултырҙы. Дәрес халыҡтың баланы хеҙмәткә өйрәтеү алымдарына арналғайны, һәм беҙ уҡыусылар менән хеҙмәт һәм хеҙмәткә өйрәтеү тураһында унға яҡын мәҡәлгә анализ яһаныҡ, теге йәки был мәҡәлдең ниндәй фәһем биреүен дәфтәрҙәргә яҙып ҡуйҙыҡ. "Был мәҡәлдәр менән халыҡ ниндәй сифаттар тәрбиәләргә уйлағаң?" – тигән һорауға күмәкләшеп яуап эҙләнек. Өйҙә тағы хеҙмәт тураһында икешәр мәҡәл яҙып килергә эш бирҙем.

Рус телле башҡорт етәксеһе дәресемә анализ яһаны:

— Не было наглядностей. Можно было использовать рисунки, иллюстрации. Были, конечно, положительные, довольно интересные моменты.

— Какие? — тип һорайым.

— Воспитательные. Я, например, записала тут пословицу одну: "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ".

— Дорогая ....., этот учебный предмет уже по названию воспитательный. У меня было использовано десять воспитательных пословиц, плюс к этому ученики сами привели около пятнадцати пословиц.

— Я же не могу такой анализ давать, что весь урок был воспита-

тельным. У меня есть стандарт анализа уроков. Там ясно записано — были ли на уроке воспитательные моменты?

Совет педагогикаһы ғилемендә бөтә нәмә стандартҡа һалынғайны. Дәрестең нисә минуты — журнал тултырыуға, нисә минуты — өйгә эш тикшереүгә, нисә минуты — яңы тема аңлатыуға һәм башҡалар. Тәрбиә эшендә лә шулай уҡ. Был стандарттан әле лә арына алмайбыҙ. Стандарттан аҙ ғына ситләшкән уҡытыусының эше ҡәнәғәтһеҙлек тыуҙыра. Дәрес ойоштороуҙа стандарт мотлаҡ булған предметтар була. Әммә тотош ҡына стандартҡа йәбешеп ятыуҙың, ижади эшләмәүҙең кире һөҙөмтәләре лә байтаҡ. Ошондай стандарт менән үткәрелгән осрашыуҙарҙың береһе тураһында һөйләп үтәйем.

Иҫәнғолда эшләгән саҡта, мине балалар баҡсаһына осрашыуға саҡырҙылар. Дүрт-биш йәшлек балалар төркөмө. Минең ейәнем Айгиз дә ошо төркөмдә. Осрашыу башланды. Тәрбиәсе тәбиғәтте һаҡлауҙың бик мөһим эш икәнлеген, ул хаҡта дәүләт кимәлендә закон ҡабул ителгәнлеген һөйләне. Ейәнсура районының бик матур тәбиғәт ҡосағында урынлашыуын тасуири итеп аңлатты. Балаларҙың түҙемлеге бөттө, әммә тыныс ултырырға тырышалар. Шунан сират минең менән таныштырыуға етте.

— Балалар, бөгөн беҙҙә ҡунаҡта яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева. Уның китаптары — халыҡ өсөн иң мөһим темаларҙың береһе — тәбиғәтте һаҡлауға арналған. Ул үҙенең әҫәрҙәрендә... — һәм башҡа шундай юҫыҡта минең хаҡта һөйләне, китаптарымды күрһәтте һәм балаларҙан, — Балалар, һеҙ яҙыусының кем булыуын аңланығыҙмы? — тип һораны. Балалар был оҙайлы һөйләшеүҙең аҙағы етеп килеүгә шул тиклем ҡыуанды һәм бер тауыштан:

— Аңланыҡ! Аңланыҡ! — тип ҡысҡырҙылар. Миңә уларҙың ни тип яуап бирерҙәре ҡыҙыҡ ине, сөнки береһе лә йүнләп тыңламаны. Был әңгәмә уларҙа ҡыҙыҡһыныу уятманы. Балаларҙың йәше лә, аңлау кимәле лә, сыҙап ултырыу ваҡыты ла иҫәпкә алынмағайны.

— Аңлаһағыҙ, мин бик шатмын. Әйтегеҙ әле, кем була ул яҙыусы? — тип һораны тәрбиәсе.

— Айгиздең өләсәһе, — тип яуап бирҙе балалар. Стандарт буйынса төҙөлгән план менән алып барылған осрашыуҙың һөҙөмтәһе шулай булды. Миңә һүҙ биргәс, һөйләп торманым. Балалар арығайны. Күңелле бер уйын уйнап алдыҡ. Ул уйын емеш-еләкте нисек йыйырға кәрәклеге тураһында ине. Иң оҡшағаны шул булды балаларға, сөнки урамда осрашҡан саҡта йүгерешеп килеп ҡосаҡлап алалар ҙа, ҡасан беҙгә киләһегеҙ, теге уйынды тағы ҡасан

уйнайбыҙ, тип саҡыралар йәки, апай, беҙ муйыл йыйған саҡта, ағасты һындырмай ғына тирәбеҙ, тип, уйындың әһәмиәтен аңлағандарын әйтеп китәләр ине.

Стандарттар төҙөлгән саҡта, ни өсөндөр баланың ихтыяжы иғтибарҙан ситтән ҡала. Хатта әҙәбиәт дәрестәрендә лә стандарт буйынса фекерләргә өйрәтәбеҙ. Миңә башҡорт әҙәбиәте буйынса байтаҡ ҡына дәрестәрҙә булырға тура килә ине. Дәрескә анализ яһаған ваҡытта һәр ваҡыт үҙем мәктәптә уҡыған саҡтағы әҙәбиәт дәрестәре менән сағыштыра торғайным. Уҡытыусыбыҙ Мәликә Ғибәҙуллә ҡыҙы Йосопова дәреслекһеҙ уҡытты, сөнки беҙ уҡыған йылдарҙа, башҡорт кластары тәүгә генә асылғанлыҡтандыр, әҙәбиәттән дәреслектәр юҡ ине, ҡайҙан етте шунан әҙәби әҫәрҙәр табып алып уҡый ҙа, уҡытыусы менән бергә анализ яһай торғайныҡ. Бына ул дәрестәр — ысын дәрес, ысын һабаҡ ине. Һәр кем үҙ фекерен әйтә, бәхәсләшә. Хатта башҡа предметтар буйынса әллә ни өлгәшмәһәләр ҙә әҙәбиәт дәрестәрендә ҙур активлыҡ күрһәтәләр ине. Ә уҡытыусы, уҡыусыларҙың фекерҙәрен тыңлап бөткәндән һуң, йомғаҡлап ҡуя. Минеңсә, өлкән синыфтарҙа әҙәби әҫәрҙәр буйынса уҡытыусылар өсөн генә ҡулланма булырға тейеш. Уҡыусы әҫәр буйынса фекер йөрөтөргә, унан фәһем алырға, әҙәби әҫәрҙе яратырға өйрәтергә тейеш. Ғөмүмән, әҙәбиәт дәрестәре — балала әҙәбиәткә ҡарата һөйөү уятыу дәресе булырға тейеш. Юғиһә, беҙҙә хронологик тәртиптә уҡытыу тигән принцип менән бала аңына һыймаған, зиһене ҡабул итә алмаған әҫәрҙәрҙән башлап уҡытабыҙ. Мәктәп программаһы буйынса иң боронғо әҙәбиәт тураһындағы темалар уҡыусының ун дүрт-ун биш йәшлек сағына тура килә. Өҫтәүенә, стандарт буйынса фекер йөрөтөргә өйрәтәбеҙ. Уҡыусыла үҙ аллы фекерләүгә форсат юҡ. Ул үҙ фекерен әйтә башлаһа, уны наҙанлыҡта ғәйепләү генә бар. Белорет районының Йөйәк урта мәктәбендә эшләгәндә, стандарттан ситләшеп, үҙемсә дәрестәр бирep ҡарай башланым. Уҡыусылар менән дәреслекһеҙ дәрес үткәрҙем, үҙ фекерҙәрен әйтергә, бәхәсләшергә, үҙ фекереңде иҫбатлай һәм яҡлай белергә өйрәттем. Уҡыусыларға әҙәби әҫәрҙең матурлығын, уның үҙе бер оло тормош, фәһемле тормош икәнлеген, беҙ әҙәби әҫәрҙәге геройҙарҙы аҡҡа һәм ҡараға бүлергә түгел, ә һәр геройҙың ыңғай яғынан да, кире яғынан да фәһем алырға тейешбеҙ, тигән ҡараштан сығып уҡыттым. Был тәжрибәм хаҡында Мәғариф министрлығы инспекторҙары һәм министр урынбаҫары Миндибай Бәхтейәр улы Юлмөхәмәтов менән уртаҡлаштым. Улар Йөйәккә килеп минең дәресемде ҡарарға теләк белдерҙе. Бер төркөм ғалимдар, нәшриәт редакторҙары, министрлыҡ вәкилдәре,

Өфө мәктәбе уҡытыусылары, Стәрлетамаҡ педагогия институты уҡытыусылары килде. Асыҡ дәрес өсөн уҡыу программаһына инмәгән әҫәрҙе — яҙыусы Фәрит Иҫәнғоловтың "Аҡҡошом минең" повесын алдым. Уҡыусыларға әҫәрҙе ентекләп уҡып сығығыҙ, тигән генә эш бирҙем. Уҡыусыларҙы алдан әҙерләмәнем. Фәҡәт повесты бик яҡшы итеп уҡығыҙ, һеҙ уйламаған һорауҙар биреүем ихтимал, әйтәйек, тәбиғәт күренешен тасуирлауҙың кеше характерын асыуҙағы роле, тигән һорауҙар ҙа булыуы ихтимал тип кенә әйттем. Уҡыусыларҙың күбеһе, ғәҙәттә, тәбиғәт күренешен тасуирлаған урындарҙы уҡырға яратмай. Шуның өсөн был хаҡта айырым әйттем.

Ҡунаҡтар күп килде. Бәләкәй генә класс бүлмәһе. Халыҡ күп. Ә дәрес шул тиклем йәнле барҙы, мин биргән һорауҙарға уҡыусылар ғына түгел, ҡунаҡтар үҙҙәре лә яуап эҙләй, хатта уҡыусыларҙан алда үҙ фекерҙәрен әйтә, уҡыусылар менән ҡапма-ҡаршы фекергә килә башланылар, дәрес үҙ-ара фекер алышыуға, бәхәскә әйләнеп китте. Бер ғалим, был повесты нисә тапҡыр уҡырға тура килде, ә был яҡтарына иғтибар итмәгәйнемсе, тине, мин биргән һорауҙарға ҡарата. "Булыуы бик ихтимал, сөнки һеҙ әҫәр буйынса фекер йөрөтәһегеҙ, ә мин уҡыусы мәнфәғәтенән дә, уның әҙерлек кимәленән дә һәм уларға тәрбиә биреү яғынан да сығып фекерләйем. Әҫәрҙе мөмкин тиклем уҡымлы, фәһемле, уҡыусыға кәрәкле икәнлеген иҫбат итергә тырышам," — тинем. Ғалим Мирас Иҙелбаев, йыр кеүек дәрес ҡараныҡ, тип баһа бирҙе. Ғалимдың был фекере мине бик шатландырҙы. Әммә минең маҡсатым маҡталыу түгел ине. Әҙәбиәт дәреслектәрен дә, дәрестәрен дә заманға яраҡлаштырыу — фекер тупларға өйрәтеү дәресенә әйләндереү кәрәклеге тураһында фекер алышыу ине. Тик... әҙәбиәт дәрестәре һаман стандарт дәреслек буйынса үткәрелә, уҡыусылар әҙәби әҫәрҙәрҙән һыуынғандан-һыуына бара. Әҙәби әҫәрҙәребеҙ һаман аҙыраҡ уҡыла, хатта ҡайһы бер яҙыусылар менән осрашыу ваҡытында автограф алыр өсөн дә китап алмаған осраҡтар бар. Был хаҡта әҙәбиәт дәреслектәре төҙөүсе ғалимдарға фекеремде әйткәйнем — мине дилетантлыҡта ғына ғәйепләнеләр. Уҡыусыларҙы фекерләргә өйрәтеү... Ошо хаҡта ҡайтанан-ҡайта уйландым, һәм аҙаҡ был хыялым "Тормош һабаҡтары"на һалынды.

Кешенең тормошҡа ҡарашы, фекерләүе ҡалыпҡа һалынырға тейеш түгел, ә кеше фекеренә фәҡәт йүнәлеш күрһәтеү һәм маҡсат ҡуйыу ғына кәрәк. Ошо изге маҡсатты әҙәби әҫәрҙәр аша әҙәбиәт уҡытыусылары атҡарһа, ҡалай шәп булыр ине!

Ейәнсура башҡорт гимназияһында эшләгән саҡта рус теле һәм

әҙәбиәте уҡытыусыһы итеп Рәшиҙә Ҡәрип ҡыҙы Ҡадировалы саҡырҙым. Уны, уҡытыусы булараҡ, маҡтамайҙар ине, сөнки ул сәғәт бүленешен күҙәтмәй, мәктәп администрацияһы термины менән әйткәндә, ваҡытҡа һыймай, икән. Нисә минут журнал тултырырға, нисә минут яңы дәрес аңлатырға, өйгә эш тикшерергә һәм башҡа шуның кеүек талаптарҙы үтәмәй, ҡайһы бер дәрестәрҙе журналға билдәләргә лә онотоп сығып китә лә аҙаҡ ҡына тултырып ҡуя икән. Ә мин уның рус әҙәбиәте дәресендә булғандан һуң эшкә саҡырырға булдым. Иҫ китмәле дәрестәр бирә ине ул! Уҡыусылар ауыҙҙарын асып тыңлап ултыра. Уның интонацияһы, уның әҙәби әҫәрҙәге образдарға инеп китеүе, йә йылмайып, йә күҙҙәренә йәш алып шиғырҙар уҡыуы... Бер яҙыусының йәки шағирҙың ижадын үткән саҡта, башҡалар менән сағыштырыу, сит ил, башҡорт әҙәбиәте вәкилдәренең оҡшаш әҫәрҙәренән миҫалдар килтереү... Миңә был уҡытыусының ҡалыпҡа һыйыуы түгел, ә балаларҙа әҙәбиәткә һөйөү уятыуы ҡиммәт ине. Уға фәҡәт әҙәбиәт дәрестәрен генә бирҙем, сөнки тел дәрестәрен үткәреү өсөн, ысынлап та, ҡалыпҡа һыйыу мотлаҡ. Мин директор булып эшләгән саҡта, гимназияла уҡыған уҡыусыларҙың Ҡадирова дәрестәрен тыңлауҙарына, үҙ ҡыҙымдың да уның уҡыусыһы булыуына бик шатмын. Тик мин гимназиянан киткәс, уның дәрестәренә анализ яһаусылар, уҡытыу эшенә яраҡһыҙ, тип тапҡандар һәм гимназиянан эштән сығарғандар. Күпме белем уҡыусыларға бирелмәйенсә әрәм ҡала...

Ах, ошо ҡалып! Ах, ошо стандарт! Кем төҙөгән уны? Кем уйлап сығарған? Тәбиғәттә ҡалып юҡ, ә ниндәй гармония! Ниндәй көй, көйләнеш! Тормош үҙе ошо гармонияға нигеҙләнгән. Ә беҙҙең системала әҙәбиәт дәрестәрен генә түгел, хатта милли үҙенсәлектәрҙе лә, үҙ тамыры, үҙ традицияһы, үҙ теле, үҙ моңо булған халыҡтарҙы ла бер ҡалыпҡа һалырға маташыу сәйәсәте күпме яҙмыштарҙы юҡҡа сығарҙы.

Күңел бушлығына килтереүсе сәбәптәрҙең береһе — кешене, хатта тотош халыҡтарҙы бер ҡалыпҡа, стандартҡа һалырға маташыу һәм фәҡәт шул ҡалыптан сығып баһалау.

Әммә шуныһы ҡыуаныслы, халыҡ был ҡалыпты ҡабул итмәй, ул үҙенсә тәбиғәт ҡанундарына яҡын йәшәйеш ҡағиҙәләренә яраҡлы ғүмер итә. Шуның өсөн ниндәй генә милләт булмаһын, икенсе милләтте үҙ ҡалыбына һалырға ынтылыу юҡ. Һәр береһе үҙенсә һәм барыһы ла бергә.

Иҫәнғолда йәшәүсе рус халҡы, бәләкәй сағымдан уҡ, бик киң күңелле, ихлас булып хәтеремдә ҡалған. Башҡорттарға йәшелсә ултыртырға ла, тоҙларға ла өйрәтерҙәр, үҙҙәре лә тоҙлап биреҙҙәр

ине. Үҙ сиратында улар башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан сөсө икмәк, ҡатлама бешерергә, талҡан яһарға, шәл бәйләргә өйрәнәләр ине. "Шабра" тигән һүҙ ҡайҙан килеп сыҡҡандыр, рустар ҙа, башҡорттар ҙа күршеләрен шабра тип йөрөттөләр. Рус ҡатындары ла, ирҙәре лә башҡорт һүҙҙәре ҡушҡылап ебәрәләр йәки башҡорттарҙың руссалап һөйләшеүенә оҡшатып аралашалар ине. Мин быны аҙаҡ аңланым. Юғиһә, күрше Полина апай: "Мархаба апай, ты не сердчай инде, минә әпәт мунса тапит нада", – тип килеп инһә, был апай үҙе мәрйә, ни эшләп русса шулай насар һөйләшә икән, тип аптырай торғайным. Яҙыусы Николай Задорновтың "Могусюмка и Гурьяныч" әҫәрен уҡығас, тап Иҫәнғол халҡының үҙ-ара аралашыуына оҡшаттым. Унда рус менән башҡорт дуҫлығы бик матур тәбиғи һүрәтләнгән. Бынан тыш знакумдар була торғайны. Улар — атайымдарҙың һарыҡташ, Ҡыуандыҡ баҙарына барған саҡта ҡунып китә торған таныштары. Знакумдар үҙҙәре лә килгән саҡта йоҡлап китерҙәр ине. Был знакумдар башҡортсараҡ һупалап, башҡорттар русса әүеш-тәүеш итеп, хатта бергәләшеп йырлашып та ултыра торғайнылар. Атайым мандолинала башҡорт көйҙәре уйнап, знакумдарҙың тыпырлата баҫып бейеп йөрөгәндәре күҙ алдымда. Шуға улар үҙҙәрен тиң милләттәр һанап, береһен икенсеһенән өҫтөн ҡуймайҙар ҙа ине.

Ә кем тарафынандыр бер милләтте юғары күтәреп, башҡаларын кәмһетеү сәйәсәте алып барылды. Һәм был фекер фәндең дә, тормоштоң да бөтөн өлкәләренә лә үтеп инде. Әйтәйек, азатлыҡ хәрәкәттәрендә, илде һаҡлау өсөн барған һуғыштарҙа фәҡәт бер генә халыҡ батырлыҡ күрһәткән, башҡалар эйәреп кенә йөрөгән, тигән фекер һалынды. Меңәр йыллыҡ тарихы булған һәм илебеҙгә афәт янаған һәр һуғышта бер һүҙһеҙ ҡоралланып алдан ташланған халҡыбыҙҙың бер генә батырын күтәрҙеләр. Тиҫтәләрсә башҡа батырҙарыбыҙ, хатта 17-се быуат аҙағында Ҡырым һәм Аҙау (*Азов*) походтарындағы ҡаһарманлығы өсөн 1696 йылда Петр 1-ҙән вәриҫи тарханлыҡ ярлығы һәм алтын яҙыулы көмөш ҡынлы ҡылыс алған Алдар Иҫәнгилдин дә телгә алынмай ине. Руда ятҡылыҡтарын, нефть ятҡылығын үҙҙәре асып, үҙҙәре эшкәртеп файҙалана башлаған, үҙ аҡылдары менән дары яһау, металл иретеү оҫталығына өлгәшкән, нефть эшкәртеүҙе лә, тау промышленносын да фәнни нигеҙгә һалырға кәрәклеге хаҡында Бергколлегияға мөрәжәғәт итеп хаттар яҙған ғилемле башҡорттар хаҡында ла үҙәк нәшер иткән тарихтан беҙ бөтөнләй белмәнек. Булат ҡылысы эшләү ысулын уйлап сығарған башҡорттар хатта яһалма алмас яһау кимәленә килеп еткәндәр. Ә булат ҡойоу ысулдарын ҡайҙан

ғына эҙләмәнеләр ҙә, авторлыҡты кемдәргә генә ҡайтарып ҡалдырманылар. Башҡорттарҙың булат яһау ысулын Златоуст ҡалаһы инженеры Амосов асҡан һәм булатты башҡорттар яһаған, тип иҫбат итә. Ул булат ҡылыстың углеродтың билдәле бер температурала иретелеп, яңынан һыуытылғандан һуң барлыҡҡа килгәнен асыҡлаған. Башҡорт ғилеме хаҡында факттар бик күп. Беҙ "Тормош һабаҡтары"нда байтаҡ мәғлүмәттәргә туҡталдыҡ. Боронғо башҡорттарҙың да, башҡа күп халыҡтарҙың да ғилеме хаҡында бер кем дә белмәй. Киреһенсә, хатта яҙмабыҙҙың да булмауы хаҡында һүҙ ҡуйыртыу барҙы. Әйтәйек, башҡорт рун тамғалары, унан һуң ғәрәп хәрефтәре менән яҙған һәм уҡый белгән икән, ни өсөн кириллицаны белмәгәнгә генә наҙан тип аталырға тейеш? Башҡорт ғүмер буйы үҙ малын үҙ ысулдары менән дауалаған, үҙ хужалығын үҙе яйға һалған, кешеләрҙе лә үҙе дауалаған, үләндәрҙе бик яҡшы белгән, уҡымышлы кешеләре үлән менән дә, металл, ҡиммәтле таштар менән дә, өшкөрөп тә — психотерапия алымы һәм башҡалар менән дауалаған. Ҡиммәтле таштарҙың, металдың дауалау көсөнә эйә икәнлеген әле яңы-яңы аса башланылар, ә башҡорттар уны борон-борондан дауалау сараһы итеп файҙаланған. Иәшен ҡайтарғыстары ла булған. Хатта тирмә эсенә йылан һәм башҡа бөжәктәр инмәҫлек ысулды ла уйлап тапҡандар. Былар, ғилми термин менән аталып, өйрәнелеп, донъя кимәленә сығарылмаған икән, ни өсөн халыҡ наҙан булырға тейеш? Музыка, музыка ҡоралдары, яу алымдары, аш-һыу, туҡланыу гигиенаһы, йылҡысылыҡ серҙәре һәм башҡаларҙы бөтә донъя халҡы өсөн өлгө булырлыҡ кимәлгә еткерерлек ғалимдарыбыҙ ғына кәрәк. Бик күп өлкәләрҙәге, әйтәйек, халыҡ медицинаһындағы дауалау ысулдарын "наҙанлыҡтан килеп сыҡҡан", тип түгел, ә ғилем булыу яғынан өйрәнеү фарыз. Ижадыбыҙҙа күпме ғилем йәшеренгән! Ҡаҙаҡ академигы К. И. Сатпаевтың "Урал батыр" эпосы тураһында әйткән фекерен килтереп китеү ҙә урынлы булыр. "Башҡорт легендаһында Урал батыр үҙ ирке менән үлемһеҙлектән баш тартҡандан һуң, уның һөйәктәре аҫыл хазиналарға һәм алтынға, ә ҡаны ер майына – нефткә әйләнә, тиелә. Был, ерҙең үҙе кеүек үк, бик боронғо легенда. Башҡорт халҡы уның күп быуаттар элек, фән нефтте Көньяҡ Урал тирәһендә асҡанға тиклем үк, ижад иткән. Ошонан һуң фольклор әҫәрҙәрендә халыҡ аҡылы һәм халыҡтың тормош ысынбарлығы хаҡында ҡарашы ятҡанлығын кем кире ҡағыр!" Ошо уҡ бөйөк эпоста хәҙерге тауҙар урынында борон диңгеҙ булыуы хаҡында ла әйтелгән. Эпос ижад ителгәндән һуң быуаттар үткәс, Урта Азия энциклопедистары Әбүғалисина менән Би-

руни ошо фекерҙе әйткән.

Халҡыбыҙҙың аҙ һанлы булыуы кәмселектән түгел, ә тарихи шарттарҙан килеп сыҡҡан. Күренекле кешеләренең телгә алынмауы улар булмағанлыҡтан түгел, булғандарын иҫәпкә алмауҙан, халыҡтың, "ысынлап та, наҙан икәнлеген, фәҡәт ниндәйҙер "бөйөк" милләт арҡаһында ғына белемле була башлауыбыҙҙы" һыҙыҡ өҫтөнә алыу маҡсатынан эшләнгән.

Ошондай ышандырыуҙар, аңға һеңдерергә тырышыуҙар барҙы һәм ышандырҙылар. Һүҙ иҫ китмәле көскә эйә, тинек.

Халҡыңдың яҙмаһы юҡ, халҡың наҙан, туған телегеҙ менән ауылдан башҡа ҡайҙа бараһығыҙ, ҡатнаш ғаиләнән вундеркиндтар тыуа, ҡатнаш ғаилә – ул интернационалистик тойғо сағылышы, тигән фекерҙәр көнө-төнө матбуғат биттәрендә баҫылып, радио аша яңғырап торғас, бик күптәр ошо фекерҙең ҡолона әйләнде. Республиканың көньяҡ-көнсығыш төбәктәренә иғтибар бирмәй, фәҡәт бер нисә районды ғына хәстәрләп, ә иғтибарҙан ситтә ҡалған төбәк кешеләрен ялҡаулыҡта ғәйепләп һүҙ таратылды. Ышандырҙылар. Халыҡ үҙ рухын үҙе һындыра башланы. Колхоздар, совхоздар, сиҙәм ер эшкәртеүҙәр, ҡайҙалыр яҡшы тормош барлығы хаҡында уйҙырмалар таратылды... Былар барыһы ла халҡыбыҙҙы тарҡатты, таратты. Сөнки башҡорт халҡын туплап тороусы төп факторҙарҙың береһе — тыуған ер. Шуның өсөн дә тыуған ер тураһында сығарылған ҡобайырҙар, йырҙар иҫ китмәле күп һәм күңелдәрҙе тетрәндергес. Йыр арнап сығарылмаған берәй йылға, төбәк, тау, артылыштар бармы икән башҡорт йәшәгән төйәктә!? Тыуған төйәк тураһында йырҙары менән иленән айырылып китмәҫлек һөйөү тәрбиәләгән ул халыҡ аҡылы.

Әммә һүҙ көсө арҡаһында халыҡ аңына шундай көслө тәьҫир яһалды, бөгөнгө көндә халҡыбыҙҙың ярты һы тиклеме Башҡортостандан ситтә йәшәй. Үҙ төбәктәрендә эш шарты насар булғанлыҡтан, ауылдары бөтөрөлгәнлектән, йыл һайын сит яҡтарға меңәрләп ағылды. "Кубанские казаки" фильмында күрһәтелгән рәхәт һәм мул тормошло төбәктәргә, "өйләнешкәс тә яңы фатир бирелә торған" сиҙәм ерҙәргә юл алды.

Башҡортостанға исем биреүсе, уның дәүләтселеген тотоп килеүсе башҡорт халҡын сит яҡтарға таратыу саралары төрлөсә барҙы. Сеймалға бай бынамын тигән районда рында сәнәғәт предприятиелары төҙөлмәне, фәҡәт сеймал сығанағына әүерелдерелде. Хатта мал аҫырау менән шөғөлләнгән колхоз-совхоз ерҙәрендә лә ит быҡтырыу цехтары төҙөлмәне, һыйыр малдарын ер аяғы-ер башына тереләй алып китә

торғайнылар. Ғалимдарҙың асыҡлауынса, Башҡортостандың Урал һәм төньяҡ-көнсығыш региондарында — территорияның утыҙ алты ярым процентын биләгән төбәгендә — халыҡтың ун дүрт кенә проценты йәшәй, сөнки промышленность потенциалының алты ғына проценты тупланған. Шуның өсөн етмешенсе-туҡһанынсы йылдарҙа был райондарҙан ике йөҙ меңдән ашыу кеше ситкә сығып киткән. (*Мәғлүмәттәр Беренсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының стенографик отчетынан алынды.*) Экономик һәм социаль үҫештең, етештереү көстәренең аңлы рәүештә ғәҙел урынлаштырылмауының һөҙөмтәһе — халыҡтың артта ҡалыуы, насар йәшәүе. Хатта үҙ ерендә сығарылған сеймалдан да үҙе файҙалана алмай ине халыҡ.

Белорет районының Йөйәк ауылында йәшәгән саҡта, барыһы ла йорт яңыртырға тотона башлағайны. Элекке йорттары бәләкәй генә булған, улары мал өйө итеп ҡалдырыла ине.

— Урман өҫтөгөҙгә ауып тора, ни эшләп йорттарҙы баштан уҡ ҙур итеп һалманығыҙ? — тип һорашам.

— Рөхсәт итмәнеләр. Урмансы итеп ситтән берәйһен алып килеп ҡуя инеләр. Уныһы иҫәплән, наҡыҫ ҡына, насарын ғына, йөрөүгә уңайһыҙ яҡтан бирә ағасты, саҡ ҡына артығыраҡ ауҙарһаң, ҡутарғансы килтереп штраф һала... Ә яҡшы бүрәнәләрҙе үҙ ҡулдарыбыҙ менән ситкә ебәреү өсөн ҡырҡабыҙ... Шулай, ғүмер буйы тимерсе бысаҡҡа йәлсемәне. Яңы-яңы үҙ егеттәребеҙ урмансы итеп билдәләнә башланы.

Бына бит нисек булған!

Бер ваҡыт урман яҡтарынан командировканан ҡайтып килгән Илеш егете аптырап та, әсенеп тә һөйләгәйне: "Беҙҙең яҡта булғанығыҙ бармы? Йорттарҙы нисек төҙөйҙәр беҙҙә! Күтәрелеп ҡарағанда, бүрегең төшөп китер! Әле Белорет-Шишмә тимер юлы һалынған яҡтарҙа булып ҡайттым. Ни эшләп шулай ялҡау ул башҡорттар? Урман бит емерелеп тора. Ә өйҙәре тауыҡ кетәгендәй генә", — тип иҫе киткәйне.

Һәр беребеҙ үҙ яҙмышыбыҙға үҙебеҙ хужа булмаһаҡ, бөгөнгө-бөҙҙө киләсәк мәнфәғәтенән сығып ҡормаһаҡ, суверенлы республикабыҙҙың өлкәгә әйләнеүе бына ғына тора. Ә өлкәнең башҡорт өсөн ни икәнен бөгөнгө көндө Ырымбур, Силәбе, Ҡурған, Свердловск, Пермь, Һарытау өлкәләрендә йәшәгән башҡорттар бик яҡшы белә. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында ҡатнашыусылар үҙҙәре йәшәгән өлкәләрҙә етәксе урында ла, депутаттар араһында ла бер генә башҡорттоң да булмауы хаҡында әсенеп сығыш

яһанылар. Хатта Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының Рәсәй Федерацияһының башҡорттар күпләп йәшәгән өлкәләре хакимиәт башлыҡтарына мөрәжәғәтендә лә был хәлгә иғтибар итергә һәм башҡорт милләте вәкилдәрен етәксе органдарға әүҙемерәк ылыҡтырырға тип телгә алынды. Был мөрәжәғәт 1995 йылдың 2 июнендә ҡабул ителгәйне. Хакимиәт башлыҡтары был мөрәжәғәтте дәррәү үтәргә тотондолармы икән? Бер генә үҙгәреш тә юҡ. Шөкөр, башҡа өлкәләрҙә йәшәүсе милләттәштәребеҙҙе ҡурсалап мөрәжәғәттәр, хаттар яҙырға, телефондан шылтыратырға, ниҙер талап итергә, дәғүәләргә, килешеүҙәр төҙөргә Башҡортостаныбыҙ бар.

* * *

Алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙа "перспективаһыҙ ауылдар" тигән термин аҫтында ауылдар күсерелә, эреләтелә башланы. Был сара ла, имеш, халыҡ мәнфәғәтендә башҡарылды. Аңға шулай һеңдереп маташтылар: балалар ҙур мәктәптәрҙә белем аласаҡ, ҙур коллективта тәрбиәләнәсәк, ауылдарҙа уңайлыҡтар булдырыу өсөн дә эреләтелгән хужалыҡтар ҡулайлыраҡ һәм башҡалар. Ә бындай "хәстәрлек" Башҡортостандың көньяҡ-көнбайыш райондарында, бигерәк тә Күгәрсен, Көйөргәҙе (*Күмертау*), Мәләүез, Ишембай райондарында, әүҙем алып барылды. Партияның Башҡортостан өлкә Комитетының элекке беренсе секретары Зыя Нуриевтың иҫтәлектәрендә яҙылғанса, беҙҙең республикабыҙҙа был сәйәсәтте **мөмкин тиклем таратмаҫҡа** тырышҡандар. Мин "перспективаһыҙ" ауылдарҙы бөтөрөү кампанияһы ҡыҙыу барған саҡта "Совет Башҡортостостаны" гәзите редакцияһында эшләй инем һәм был мәсьәлә менән яҡшы танышмын. Республикабыҙҙың ҡайһы бер етәкселәре "ең һыҙғанып" тотондо был эшкә. "Башҡортостан" гәзитенең 1998 йылғы 231-се һанында баҫылған мәҡәләне һүҙмә-һүҙ килтерәм.

"...Тап шул йылдарҙа барлыҡҡа килде ошо "перспективаһыҙ ауылдар" термины, — тип яҙа Зыя Нуриев. — Уның авторы — бөгөнгө иҡтисад академигы, үҙен бик ҙур белгес тип иҫәпләгән Татьяна Ивановна Заславская. Был профессиональ баш бутаусы ханым үҙенең халыҡҡа ҡаршы йүнәлтелгән теорияһын Хрущевҡа нисектер һеңдереп, хатта уның советнигы булып китте. Үҙгәртеп ҡороу осоро башланғас, был академик яңынан ҡалҡып сыҡты һәм йәнә күптәрҙең аңын томаланы. Дөйөм алғанда, беҙҙең Башҡортостанда ул кампания киң таралманы. Мәскәүҙең баҫымына ҡаршы тора алдыҡ, төрлөсә хәйләләшеп, ауылдарҙы һаҡлап ҡала алдыҡ. Ауылдарҙы юҡҡа сығарыу беҙҙең халыҡ өсөн тамырҙарҙы юғал-

тыуға тиң икәнен оноторға ярамай. Заславская кеүек геройҙарҙы ла оноторға ярамайҙыр...”

Үкенес, республикабыҙҙа Заславская теорияһын тормошҡа ашырырға атлығып тороусылар, үҙҙәренең уҫал ниәттәре өсөн файҙаланыусылар байтаҡ ине.

...Йәй көндәре отпускыла Диҡҡәт менән бергә экспедицияға сыға торғайным. (*Диҡҡәттең ҡан баҫымы даими югары булды, шуға уның һаулығы, гүмере өсөн һәр саҡ борсола инем.*) Республика буйлап балаларҙы алып экспедицияларға йөрөгән саҡта, Заславскаяның аң бутауының халҡыбыҙ тамырына ни тиклем зыян иткәнлеген күреп йән әсей ине. Шул тиклем йәшәүгә, мал аҫырауға уңайлы матур төбәктәге ауылдар ҙа, оло юлға яҡын урынлашҡандары ла, һигеҙ йыллыҡ мәктәбе булғандары ла, тарихи әһәмиәтлеләре лә аяуһыҙ рәүештә тарҡатылды. Шул уҡ ваҡытта етәкселәр теләгән бәләкәй генә ауылдар ҙа ҙур ҡолас алып үҫеп китте. 1976 йылда “Советская Башкирия” гәзитендә яҡын йылдарҙа республикала 3005 (*һәр районға уртаса 50-60 ауыл тура килә! — М.Б.*) ауылдың күсерелергә тейешлеге хаҡындағы мәҡәлә бөтөнләй аптыратты беҙҙе. Өҫтәүенә, Көйөргәҙе районына барһаҡ, заманында ике мәсетле Үрге Моталдың һуңғы кешеләре китеп бөткән. Беҙҙең Холодный Ключҡа килеүебеҙҙе ишетеп, Туғай Кинйәһе ауылынан Хәмитова Нәғимә исемле апай килеп етте. “Өс герой биргән ауылыбыҙҙы юҡҡа сығаралар бит. Ярҙам итегеҙ әле”, — тип үтенә. Диҡҡәт менән кәңәшләшеп, редакторыбыҙ Абдулла Ғиниәт улы Исмәғилевкә индем. Үҙебеҙҙе борсоған мәсьәләне әйттем. Гәзиттә сығыш яһарға рөхсәт һораным. Рәхмәт. Риза булды. 1979 йылдың 6 декабрендә минең “Бөгөнгөбөҙ һәм иртәгәһе көнөбөҙ хаҡына” тигән мәҡәләм донъя күрҙе.

Мәҡәләнән өҙөктәр килтерәм.

“...“Перспективаһыҙ ауылдар” тигән сәйәсәт аҫтында ауылдарҙы эреләтәбеҙ тигән булып, беҙ кешенең йәшәүе өсөн иң әһәмиәтле шарттарҙың береһе булған йән аҙығы хаҡында онотабыҙ. Перспектив план төҙөгәндә экономик күҙлектән генә сығып эш итергә ярамай. Тарихи яҡтан әһәмиәтле, иҫтәлекле урындарға бай булған, күренекле кешеләр йәшәгән ауылдарҙы һаҡлап ҡалдырыу ҙа, беҙҙеңсә, маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Юғиһә, киләсәк быуын алдында төҙәтә алмаҫлыҡ хата эшләүебеҙ ихтимал. Мәҫәлән, Ейәнсура районының Байдәүләт ауылы бер нисә өйгә ҡалып бара. Ә ул ауыл урамдарында комсомолец шағир Сергей Чекмаревтың, Советтар Союзы Геройы Ҡотлаҳмәт Хәйбуллиндың эҙҙәре һаҡланған. Күренекле яҙыусыбыҙ Салауат Юлаев премияһы лауреаты Зәйнәб Биишеваның тыуған ауылы Туйымбәт ҡайҙа? Нисә өй ҡалды икән

унда? Революцияға тиклем үк мәктәбе булған гөрләп торған ауыл булған бит ул. Халыҡ геройы Салауат Юлаевтың тыуған ауылын ун һигеҙенсе быуат аҙағында батша һалдаттары көл иткән. Быны балаларыбыҙ белә. Ә Пугачевтың көрәштәше, иң яҡын кәңәшсеһе Кинйә Арыҫлановтың исемен йөрөткән, алтмыш өйлөк сағында илебеҙгә өс герой биргән Кинйә ауылы ҡайҙа, тип һорашалар, балаларыбыҙға ни тип яуап бирербеҙ?

...Кешеләрҙең генә түгел, ауылдарҙың да биографиялары була. Яҡын көндәрҙә республикала 3005 перспективаһыҙ ауыл күсерелергә тейеш икән — аҙаҡ төҙәтә алмаҫлыҡ хатаға юл ҡуйылмаһын ине.

... Йәш быуынды тәрбиәләүҙә һәр ғаиләнең генә түгел, һәр ауылдың да үҙ традицияһы бар. Ә ул традицияларҙы ауылдары менән бергә емереп ташлау, юҡ итеү тәрбиә нигеҙен ҡаҡшатыу түгелме?

...Йәштәрҙе ауылдарға кире ҡайтарыу сәйәсәтенән алда уларҙы ебәрмәү яғын хәстәрләргә кәрәктер. Уның төп хикмәте, әйтеп үтеүебеҙсә, тыуған ергә, ауыл традицияларына һөйөү тәрбиәләүҙә.

...Республиканың социаль үҫеше буйынса комплекслы планын төҙөгәндә, ауылдарҙың киләсәген хәл иткәндә, был проблема бер яҡлы, дөйөм проект буйынса ғына хәл ителмәһен, уның биографияһы иҫәпкә алынһын ине".

Мәҡәлә баҫылып сыҡҡас, ул саҡта Башҡорт АССР-ы Төҙөлөш эштәре буйынса дәүләт комитеты рәйесе Л. В. Хихлухаға мөрәжәғәт иттем.

— Ауылдарҙы ереләтеү буйынса перспектив план төҙөгәндә, ауылдарҙың яҙмышын кем хәл итә?

— Беҙ планды халыҡ депутаттарының район Советтары башҡарма комитеттарының тәҡдиме нигеҙендә төҙөйбөҙ. Хәҙер был эшкә КПСС-тың район комитеттары ла йәлеп ителде. Тимәк, был мәсьәләне нигеҙҙә район етәкселәре хәл итә. Улар һәр хәлдә үҙ райондарының патриоты булырға һәм ниндәй ауылдарҙы күсерергә кәрәклеген ентекләп тикшерергә тейештәр, — тине Л. В. Хихлуха.

Мин телгә алынған райондарҙың етәкселәре исеменә мәҡәләмде ебәрҙем. Бер аҙҙан яуаптар ҙа килде.

Халыҡ депутаттарының Күгәрсен район Советы башҡарма комитеты рәйесе М.Шәриповтан ошондай яуап килде:

"Туйөмбәт ауылы Октябрь совхозы территорияһында. Хәҙерге көндә унда утыҙ туғыҙ өй бар, йөҙ утыҙ ике кеше йәшәй, ауылда башланғыс мәктәп эшләй, магазин, биш йөҙ баш һыйыр малына иҫәпләнгән ферма бар. Райондың генеральный планы буйынса Ту-

йөмбәт перспективаһыҙ ауылдар иҫәбенә ингән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, халыҡты яҡын йылдарҙа ғына күсереү күҙҙә тотолмай".

Халыҡ депутаттарының Күмертау район Советы башҡарма комитеты рәйесе Р. Әбдрәшитов иптәштең яуабы:

"**Икенсе Кинйә ауылы прспективаһыҙ**. Унда егерме ете өйҙә туҡһан бер генә кеше йәшәй, ярты һынан күберәге пенсионер".

Ошо яуаптар нигеҙендә тағы мәҡәлә яҙҙым (*"Совет Башҡортостаны", 17.02.80*), һәм Зәйнәб Биишева апай менән бергә БАССР Министрҙар Советы рәйесе Зекериә Шәрәфетдин улы Аҡназаровҡа индек. Ул беҙҙе ихлас тыңланы. Мәҡәләне ҡалдырып китеүебеҙҙе һораны, уның бик ваҡытлы яҙылғанлығын, телгә алынған ауылдарға ҡарата битараф ҡалмаясағын әйтте. (*З. Аҡназаров үҙенең иҫтәлектәрендә Кинйә ауылын һаҡлап алып ҡалыуҙы иң зур ҡаҙаныштарының береһе тип билдәләй.*) Һәм, ысынлап та, боҙ ҡуҙғалды. Мин бындай шатлыҡлы хәбәрҙе Хәмитова Мәфтуха апайҙың рәхмәт хатынан белдем. "Рәхмәт, Мәрйәм һылыу. Рәхмәт, Диҡҡәт ҡусты. Мең рәхмәт. Алып ҡалдығыҙ бит Кинйәбыҙҙы (*ауыл халҡы Кинйә ауылын шулай тип йөрөтә — М.Б.*) үлемдән. Бына уның туғайында үҫкән сәскәләрҙе һалам. Беҙҙең ҡыуанысыбыҙ тип ҡабул итегеҙ. Яңыраҡ Аҡназаров унлаған министры менән килеп китте. Хатта зыяратҡа ла барып ҡаранылар. Өйҙәргә инеп сыҡтылар. Өлкәндәр менән һөйләштеләр. Илле өй һалдырабыҙ ауылығыҙға, ситкә киткәндәр ҡайтһындар, балаларығыҙға яҙығыҙ, тине, рәхмәт төшкөрө. Әбдрәшитов та килгән булған эйәреп, янынан китмәй".

Беҙ Зәйнәб Биишева апай менән 1980 йылдың март айында ингәйнек Зекериә ағай янына, май айында ул Кинйәбыҙҙа булған. Ауылға бер ҡатлы илле йорт, ике ҡатлы мәктәп, юл һәм башҡа объекттар төҙөтөү өсөн бик күп аҡса бүлдерткән. Әбдрәшитов ауылды һаҡлап алып ҡалыуҙа хатта Зекериә Аҡназаровтың да ролен инҡар итеп маташты. "Ауылды Аҡназаров түгел, ә район Советы ҡарары менән алып ҡалдыҡ", – тип мәҡәлә яҙып сыҡты "Йәшлек" гәзитендә. Ә беҙгә рәхмәте шул булды: "Бураҡаеваның ике аяғының береһен дә районға баҫтыртмайым. Беҙҙең районға ебәрмәгеҙ", — тип редакторға шылтыратҡан. Минең аяҡ баҫыу-баҫмауымды ул хәл итә алмай ине, әлбиттә, Диҡҡәттең тыуған яғына барып йөрөйбөҙ. Минең өсөн иң мөһиме — ауыл һаҡланып ҡалды.

Ауылдың ике йөҙ илле йыллығын билдәләгән саҡта, ул ысын герой ролен "уйнаны". Аҙаҡ Кинйә ауылында музей асылғас, ҡунаҡтарҙың фекерҙәре китабында Р. Әбдрәшитовтың ауылды алып ҡалыуҙағы роле хаҡындағы яҙмаһын уҡыным. Ул – был та-

рихи ауылды алып ҡалоыуҙы үҙенең иң ҙур ҡаҙаныштарынан һанай икән.

Бер аҙҙан Күгәрсен районынан да шатлыҡлы хәбәр килде.

"Ауылдар үҫеше планын раҫлаған саҡта, Күгәрсен районының Туйөмбәт ауылы перспектив ауылдар иҫәбенә индерелде," — тип яуап биргәйне район Советы башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары А. Степкин.

Шулай итеп, "Совет Башҡортостаны" ярҙамында күренекле яҙыусыбыҙҙың ауылы ла һаҡланып ҡалды.

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның 100 йыллығы Күгәрсен районында бик тантаналы үткәрелде. Өфөнән Зәйнәб Биишева исемендәге премия лауреаттары, күренекле яҡташтарынан торған делегация ҡатнашты. Делегацияға заманында ауылды перспективаһыҙҙар исемлегенә индереүҙә ҡатнашлығы булған, әлеге ваҡытта вазифалы урындарҙың береһен биләгән иптәш етәкселек итте. Әлбиттә, был делегация составына мин индерелмәгәйнем. Әммә Мораҡта үткән тантанаға "Киске Өфө" гәзите мөхәррире Гөлфиә Янбаева машина менән алып барып ҡайтты. Гөлфиә Янбаева менән "Совет Башҡортостаны" гәзите редакцияһында бергә эшләгәйнек һәм ул бөйөк яҙыусының миңә ҡарата мөнәсәбәтен дә, ауылды һаҡлап алып ҡалыу тарихын да бик яҡшы белә ине. Делегация составында минең булмауым уны ныҡ аптыратты һәм ул бөтөн мәшәҡәттәрен ҡалдырып, машинаһы менән елдерҙе. Был хәл район хакимиәте башлығын уйландырғандыр. Райондың ул саҡтағы хакимиәт башлығы Р. Мәзитов Өфөлә билдәләнгән тантанаға алдан уҡ саҡырыу ҡағыҙы ебәрҙе.

Бер һорау тынғы бирмәй, сөнки аңлай алмайым һәм алмам да. Ауылдарҙы эреләтеүҙең дөрөҫ түгеллеген КПСС-тың Башҡортостан өлкә Комитетында лә аңлағандар, район етәкселәре лә аҙаҡ тарихи ауылдарҙы алып ҡалғанлыҡтарын батырлыҡ тип баһалап, Герой булып иҫәпләнделәр, хатта маҡтаулы исемдәргә лайыҡ булдылар. Ни эшләп үҙ ваҡытында бер генә шылтыратыу йәки ҡултамға менән хәл итә алырлыҡ һәм аҙаҡ хаҡлы рәүештә маҡтанырлыҡ мәсьәләне хәл итмәй, киреһенсә, тотҡарлап, ҡаршы тороп, ул эште башлап йөрөүселәрҙе диссидентлыҡта ғәйепләп маташалар һуң?

Ни өсөн? Ниндәй маҡсат менән? Мин үҙ ғүмеремдә бындай хәл-ваҡиғаларҙы башымдан байтаҡ үткәрҙем, әммә аңлай алманым. Шул уҡ башҡорт мәктәбе, балалар баҡсаһы астырыу мәсьәләһендә лә, "Башҡортостан ҡыҙы" журналын нәшер итә башлауҙа ла, баш-

ҡорт мәктәптәрен яптырмау, башҡорт кластары астырыу кеүек мәсьәләләрҙә лә... Ейәнсурала гимназия астырыу мәсьәләһендә ул йылдарҙа эшләгән РОНО мөдире теше-тырнағы менән ҡаршы торҙо. "Миңә артыҡ мәшәкәт кәрәкмәй", — тине. Ул саҡтағы Халыҡ мәғарифы министры Рәфҡәт Тимербай улы Гардановтың ҡәтғи талабы ғына уны ризалашырға мәжбүр итте. Мәктәптәргә индерелгән "Тормош һабаҡтары" предметы буйынса ла республика гәзите биттәрендә бәхәсле мәҡәләләр баҫылып торҙо, махсус рәүештә "яллап" яҙҙырыусылар, хатта был предметты пландан алдыртыу буйынса "махсус йәшерен комиссия" туплаусылар ҙа булды. Әммә предметты шул тиклем яратып ҡабул иткән уҡыусылар, ҡайһы бер "әһелдәрҙән" айырмалы рәүештә, предметтың әһәмиәтен аңлаған уҡытыусылар, атай-әсәйҙәр, күпселек ғалимдар, атап әйткәндә, Марат Ҡолшәрипов, Ирек Аҡманов, Әнүәр Әсфәндиәров, Мирас Иҙелбаевтар яҡлап алып ҡалды. Ошо урында бер ваҡиғаны телгә алыу урынлы ла, фәһемле лә булыр. Фәһемле, тип әйтеүем шул, күп кенә кешеләр үҙҙәре белмәгән нәмә хаҡында кеше һүҙе аша фекер йөрөтөүсәндәр.

Ваҡиға. Бер ғалим менән осраштыҡ.

— Һуңғы баҫылған ғилми хеҙмәтең менән таныштым. Шәп хеҙмәт. Ана шундай мәғлүмәттәр менән уҡыусыларҙы мәктәп эскәмйәһенән үк таныштырыуға нисек ҡарайһың? Уҡыусылар үҙ халҡының рухи ҡиммәттәре хаҡында бәләкәйҙән хәбәрҙар булһа, ғорурлыҡ сифаты, үҙаң тәрбиәләнер ине, — тинем.

— Әлбиттә, яҡшы булыр ине. Тик уны ниндәй предмет аша уҡытып була һуң? Әҙәбиәт дәрестәренә индереп булмай...

— Ә һин "Тормош һабаҡтары" дәреслектәренә күҙ һалғаның бармы? Һинең был мәҡәләңде балалар күптән өйрәнә инде. Мәҡәләң гәзиттә сыҡҡас уҡ алып индереп ебәрҙек. Ә һин теге комиссияғыҙ ултырышында беҙҙең предметты артыҡ йөк, уҡыусыларҙың башын бутау тип сығыш яһағанһың. Тимәк, үҙеңә үҙең ҡаршы сыҡҡанһың.

— Ә ни эшләп унда береһе лә был хаҡта миңә әйтмәне?

— Ул "комиссияғыҙҙа" беҙҙең дәреслектәрҙе тотоп ҡараған, белгән, өйрәнгән һәм предметҡа ҡаршы булғандар түгел, ә авторҙарға ҡаршы кешеләр тупланғандыр, тип уйлайым. Сөнки ҡаршы сығыш яһаусы әһелдәрҙең барыһының да тиерлек хеҙмәттәре дәреслектә йә телгә алынды йә тотош индерелде, — тинем дә ғалимға үҙ мәҡәләһе сыҡҡан дәреслекте тотторoп киттем. Бер аҙҙан дәреслектәребеҙ хаҡында ыңғай фекере менән уның мәҡәләһе гәзиттә баҫылып сыҡты. Үҙемде лә, урамда күреп, ҡулымды ҡыҫып:

— Һеҙ, авторҙар, башҡорт милләте алдында үҙ бурысығыҙҙы үтәнегеҙ. Дәреслекте төн йоҡламай бер тынала уҡып сыҡтым, — тип ҡотлап китте. Ғалим үҙенә тотторған бер генә дәреслек хаҡында шундай фекер әйтте. Беҙ бит 1-се кластан башлап 10-сы класҡа тиклем яҙҙыҡ.

Телгә алып китеүемсә, гимназия кластары тәүҙә Иҫәнғол 1-се мәктәп нигеҙендә асылғайны. Ул саҡтағы мәктәп директоры (*үҙе башҡорт, Бөтөн донъя башҡорттарының 1-се ҡоролтайы делегаты*) мине педсоветта тикшереүгә ҡуйып: "Буракаева своим предметом проводит узконациональную политику", — тип сығыш яһағайны, тарих уҡытыусыһы, татар егете Ирек Сәмиғулла улы Мәсәғүтов яҡлап сыҡты: "Бөтөн милли мәктәптәрҙә һәр халыҡтың ошондай предметы уҡытылһа, бик яҡшы булыр ине", — тине ул. Шуныһы ҡыҙыҡ: уҡытыусылар кәңәшмәһенә директор уны ауырып ятҡан еренән, больницанан үҙ машинаһында алып килә. Йәнәһе, татар милләте вәкиле Бураҡаеваны тәнҡитләп сығыш яһар. Киреһенсә, булып сыҡты.

Демократик үҙгәрештәр байтаҡ аңлашылмаған һорауҙарға күҙ йәсе асты һәм халҡыбыҙҙың "ялҡаулығы", "эш белмәүе" һәм башҡа шундай күп кенә кире сифаттары яһалма барлыҡҡа килтерелеп, халыҡ зиһененә һеңдерелә барғанлығы асыҡланды. Йылдар буйы бөтөн иғтибар, матди ярҙам, хатта химик ашламаларға тиклем республикабыҙҙың бер нисә районы ғына мул тәьмин ителгән. Юлдар һәйбәт, газ үткәрелгән, мәктәптәр, больницалар яңы булғас, белгестәр ҙә ул яҡтарға күплəп китә, башҡорт ҡыҙҙары ла ул яҡ егеттәрен иш итә. Ә Урал аръяғы райондары үгәйһетелеү арҡаһында, "башҡорт ялҡау, йәшәй белмәй" тигән фекер таратыла. Бөгөн иһә был ауырыуҙан ҡотолорға кәрәк, үҙебеҙҙәге эшсәнлекте, татыулыҡты кире ҡайтарыу зарур. Ҡаныбыҙҙа бар, һаҡлана һәм уяныу көтә беҙҙең бындай матур сифаттар. Тик быны һәр башҡорттоң үҙенең аңлауы, үҙтәрбиә менән шөғөлләнеүе, яһалма рәүештә ҡаҡшатылған рухын яңыртыуы һәм эске донъяһына үҙгәреш индереүе кәрәк.

Ә бөгөнгө көндә башҡорт ауылдарында барған төҙөлөштәргә күҙ һалығыҙ әле! Аҙ ғына мөмкинлек булыу менән, зиһенендәге эшсәнлек, әүҙемлек, егәрлелек, зауыҡ уянып китте! Тимәк, оҫкон һүнмәгән, рух һындырылмаған. Башҡорт тураһындағы кире фекерҙәр аңды үҙгәртә алмаған.

Әгәр тәрбиәгә зарланып, кемделер ғәйепләп йәки үткәндәрҙе генә уйлап ҡайғырып ултырабыҙ икән, ер йөҙөнән юҡ булыуыбыҙ ҙа ихтимал. Кеше булараҡ ҡына түгел, ә халыҡ булараҡ та. Ә халыҡ

буларағ юғ булһағ, кеше булып йәшәүҙең йәме, ғәме булырмы? Кеше күңеленең һыйыныр төйәге булырға тейеш. Ә кеше күңеле халҡы йәненә һыйына. Йән йылыһын туған халҡынан ала.

Бөгөнгө көндә үткәнебеҙ ҡанлы, тип туҡтауһыҙ илау йәки, үткәнебеҙ данлы, үткәнебеҙ шанлы, тип үткәндәргә мәҙхиә йырлау арҡаһында йәштәребеҙҙең ҡайһы берҙәре башҡортлоҡтан биҙә. "Хәҙер юҡ ул элекке башҡорттар. Башҡорт тигән исем генә ҡалған. Ысын башҡорттарҙы ихтилал һайын ҡырғандар. Ике йөҙ йыл буйы азатлыҡ өсөн көрәш барышында, Салауат Юлаев ихтилалында, француздарға ҡаршы егерме туғыҙ полк төҙөп яуға күтәрелгәндә юҡ ителгәндәр, граждандар һуғышында аҡтарҙан да, ҡыҙылдарҙан да ҡырылғандар, утыҙ етенсе йылда бесән сапҡандай сабып алғандар талантларҙы, Бөйөк Ватан һуғышында дивизия яугирҙары "пушка ите"нә әйләнгән. Ошонан һуң мандый алмаған башҡорттар. Хәҙер тамыры һулыған тал сыбыҡтай бәүелеп-бәүелеп ҡороп барабыҙ", – тиҙәр. Бөтә ул башҡорт, тигән төшөнкөлөккә биреләләр. Ҡанлы тарих тураһында туҡтауһыҙ һөйләү, киләсәккә бер ниндәй ҙә өмөт уятмау – тарихты һабаҡ өсөн өйрәнмәүҙең, бөгөнгө көрсөктән сығыу, ҡотолоу юлы күрһәтмәүҙең һөҙөмтәһе был. 2001 йылғы Зәки Вәлиди уҡыуҙарында ла ошо хаҡта уйлап ултырғайным. Тарихсылар ҙа, башҡа фән өлкәһендәге ғалимдар ҙа Вәлиди хаҡында шул тиклем һәйбәт һөйләнеләр. Тарих һөйләнеләр. Үҙҙәренән ике-өс тапҡырға кесерәк булған ул саҡтағы йәш Вәлидигә һоҡландылар. Ә бит бөгөнгө көн дә Вәлиди заманындағы кеүек үк ҡатмарлы. Бөгөнгө көн дә ниндәйҙер аңлатыу, сиселеш, ғалимдарҙың аныҡ һүҙен, өмөтлө йүнәлеш биреүен талап итә. Залда ғалимдарҙан өмөтлө һүҙ көтөп ултырыусы йәштәр байтаҡ ине. Әммә ғалимдарҙың, исмаһам, берәүһе булһа ла бөгөнгөбөҙ хаҡында һүҙ әйтһә! Бөгөнгө көндә тап әлеге заман менән сағыштырып, артабан ни эшләргә тейешлегебеҙгә йүнәлеш бирерлек сығыштар кәрәк ине. "Ҡайҙа Вәлидиҙәр? Ҡайҙа Бабичтар?" тигән һорау тыуҙы ихтыярһыҙҙан. Киләсәкте күрә белгән, өмөт һала алған, үҙ артынан эйәртә алған шәхестәргә мохтажбыҙ. Тура юл күрһәтеүсе, аҡты ҡаранан айырып өйрәтеүсе шағирҙар кәрәк. "Уяныр мәл етте" тип, халыҡтан һуң күҙ асыусы шағирҙарыбыҙҙа Бабич уяулығы етмәй.

Демократик үҙгәрештәр башланғас, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгенең яуаплы сәркәтибе итеп һайлағайнылар. Рәйесе Рәшит Шәкүр булды. Аҙаҡ Рәшит Шәкүрҙе Башҡорт энциклопедияһы нәшриәтенә директор итеп тәғәйенләнеләр, мин гимназия һәм асыҡ һауала этнографик музей асыу хыялы менән Ейәнсураға ҡайтып киттем. "Урал" үҙәгендә рәйес итеп Марат Ҡолшәрипов

һайланды. Был йылдарҙа халыҡ үҙәге лә депутатлыҡҡа кандидат күрһәтеү хоҡуғына эйә ине. Мине Өфөгә саҡыртып алдылар ҙа, Татарстанда халыҡ ойошмаһы рәйесе депутат мандатына эйә, беҙ ҙә Ҡолшәриповты депутатлыҡҡа үткәрәйек, Ейәнсура районы, моғайын, үҙ яҡташын һайлар, ярҙам ит, тинеләр. Республикабыҙҙа башҡорттар һаны кәмегәндән-кәмей бара, ситкә китеүселәр арта, ситтән ҡайтыусылар араһында ла башҡорттар бик аҙ. Әммә юғарыла вазифалы урын биләүселәр халҡыбыҙ мәнфәғәтендә әллә ни "ҡыл ҡыбырлатмай", сөнки депутаттар араһында аҙсылыҡ тәшкил итәбеҙ, вазифалы урындарҙы башлыса паспорты буйынса ғына башҡорттар биләй. Демократик үҙгәрештәрҙән файҙаланып, һис юғы башҡорттар күпселек йәшәгән райондарҙан башҡорт милләтле һәм, иң мөһиме, рухлы егеттәребеҙҙе һәм ҡыҙҙарыбыҙҙы депутатлыҡҡа үткәрәйек, тигән маҡсаттан сығып, ең һыҙғанып эш башланыҡ. "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге идараһы ағзаһы булараҡ, миңә Ейәнсура районында Марат Мәхмүт улы Ҡолшәриповтың ышаныслыһы булырға тигән яуаплы бурыс тапшырылды.

Шулай итеп, уйламағанда "һайлау" тигән сәйәси уйында ҡатнашырға тура килде. Был хаҡта ентекле яҙылыр әле. Әлегә шуны ғына әйтеү маҡсатым: халыҡ алдында тос, ҡыҫҡа, үтемле сығыш яһау, фекерҙәремде ҡанатлы һүҙҙәр менән нығытып ҡуйыу өсөн шағир һүҙенә мохтаж инем. Мин бөгөнгө шағирҙарыбыҙҙың көнүҙәк темаһына яҙылған шиғырҙары булмағанлыҡтан, осрашыуҙар барған саҡта Бабич шиғырын файҙаландым. Халыҡ ауыҙ асып тыңлай торғайны.

Список 9

Ошо көндә бер күпер алдында һеҙ – ҡылдан нәҙек,
Ҡурҡыныс, бик ҡурҡыныс, аһ, китһәгеҙ юлдан яҙып.
Ул күпер аҫты тамуҡтыр, аръяғында – фирдәүес,
Кисһәгеҙ, ух... ниндәй ҡыҙыҡ, уңдан аҙыҡ, һулдан аҙыҡ.
Һеҙ кисерһеҙ ул күперҙән шатланып, рәхәтләнеп,
Тик фәҡәт башҡорт өсөн булған пыраҡҡа атланып.
Башҡалар биргән һарыҡ-ҡуйҙарға атланһағыҙ,
Ант итәм, йығылып төшөрһөҙ аҫҡы ҡатҡа ҡапланып.
Нәрҫә ул һеҙҙе тамуҡтан ҡотҡара торған пыраҡ?
Ул пыраҡтыр туғыҙынсы номерлы списканъ – сыраҡ.
Шул номерға бир тауыш, алмаҡсы булһаң, тупраҡ,
Юҡһа тауышың ситкә китһә, йәмле ерҙәр әлфираҡ!
.....

Эй, туған башҡорт, әгәр булмаһаң, бәдбәхет,
Ерҙе һаҡла, ер ҡосаҡла, ер һиңә алтын тәхет!
Беҙ туғыҙ ҡабат әйтәбеҙ: алдаусылар байтаҡ булыр,
"Дин" тиеп, "Милләт" тиеп майлаусылар ҙа тап булыр.
Тыңлама, алданма, башҡорт, бир тауыш туғыҙынсыға
Шул ваҡыт йөҙөң аҡ булыр һәм изге күңелең шат булыр.

(*1917 йылдың октябрендә Учредительный собраниеға һайлау буйынса башҡорттарҙан кандидаттар 9-сы список буйынса күрһәтелә.*)

Шағир һүҙе! Шиғырҙы уҡыйым да халыҡ йөҙөнә бағам. Ни тиклем тәьҫире көслө уның! Бабич һүҙе замандаштарына ла шулай уҡ йоғонто яһағандыр.

Бөгөн кәрәк бит ошондай көнүҙәгенә һуҡҡан – юл яҡтыртыусы шиғырҙар! Юғиһә, ҡайһы берҙәребеҙ иң тәьҫирле трибунаны маҡсатлы файҙаланмайынса, тыуған ауылды һағыныу, яуапһыҙ мөхәббәт йәки алтмыш йәшлек шағирҙың ун ете йәшендәге һөйөүе, мәғәнәһеҙ рифмаларға ҡоролған мәғәнәһеҙ шиғырҙар менән халыҡтың ҡәҙерле ваҡытын, иғтибарын алалар. Икеләнгән уйҙарыңды аҡтарып ебәреп, дөрөҫ йүнәлеш бирерлек, зиһендәрҙе ҡапыл балҡытып ебәрерлек шиғырҙар кәрәк тә бит...

Һуңғы йылдарҙағы сәйәсәтте күҙаллайыҡ. Билдәле булыуынса, республикабыҙҙың үҙаллылығын иң элек сәйәсмәндәр яҡлап сыҡты. Ә һайлауҙар башланғайны, сәйәсмәндәргә, яҙыусыларға һәм башҡа шундай юғары трибунанан тороп һүҙ әйтеүгә һәләтле әһелдәребеҙгә һан бөттө. Аҡыл менән эш итеүсе етәкселәре булған бер нисә төбәктән ғенә ниндәйҙер мөғжизә арҡаһында суверенитет өсөн алдан йөрөгән бер-нисә егетебеҙ һайланып ҡалды. Улар бөгөнгө көндә лә тос, аҡыллы фекерҙәре менән республикабыҙ яҙмышында ҙур роль уйнай. Ундайҙарҙың береһе – Зөфәр Ирғәли улы Еникеев. Ул да һайлаусыларына "торба ла, асфальт та, газ да" вәғәҙә итә алманы, әммә бөгөнгө хәл иткес көндәрҙә сәйәси үҙаллылыҡты һаҡлап ҡалыуҙа тейешле һәм тос һүҙен әйтә.

Сәйәси азатлыҡ яуланғандан һуң ғына иҡтисади үҙаллылыҡ яулап була. Республикабыҙҙа ла суверенлыҡ яулап алынғас ҡына, иҡтисади, мәҙәни үҫеш буйынса иҫ китмәле дәүләт программаһы төҙөлдө. Ошо дәүләт программаһына ярашлы рәүештә төҙөлөш, мәҙәни үҫеш киң ҡолас йәйә. Ә уларҙы ҡайһы берәүҙәр һаман да вазифалары буйынса иҡтисад менән етәкселек иткән депутаттарҙың ҡаҙанышы итеп күрһәтергә маташалар, һәм хатта ҡәҙимге аңлы кешеләр ҙә шуға ышана. Ҡайһы берәүҙәр: "Һин Ҡолшәрипов тип бушҡа йөрөнөң. Ана беҙ һайлаған депутат ниндәй юлдар һал-

дырҙы!” — тип ҡуялар. Мин уларҙан былай тип һорайым: “Һеҙ белмәйһегеҙме, әллә Бөрйән, Хәйбулла, Балаҡатай һәм башҡа байтаҡ райондар ҙа өндәшмәй генә Ейәнсура депутатын һайланылармы икән? Ул яҡтарҙа ла бына тигән юлдар һалынды, газ үткәрелде бит!?”

Бөгөнгө көндә тағы һәр тарафтан үҙәккә ҡарап ҡалдыҡ. Ш. Бабич һүҙҙәре менән әйткәндә, “аҫҡы ҡатҡа ҡапланып төшөү” был. Быға беҙ “үҙебеҙ һайлаған” депутаттар арҡаһында “өлгәштек”. Ҡаҙаныштарыбыҙҙы яҡлап сығырлыҡ, дәүләт кимәлендә оло трибунанан сығып һөйләрлек сәйәсмәндәребеҙ бик аҙ. Аҙҙың тауышы ла көсһөҙ, әлбиттә. Үҙенең киләсәген хәстәрләгән аңлы халыҡ үҙен яҡлай алырлыҡ аңлы депутаттар һайлай. Халҡыбыҙ элек-электән аҡһаҡалдар, сәсәндәр һүҙенә ҡолаҡ һалған. Бөгөн сәсән кимәлендәге әһелдәребеҙ һүҙе аҫта ҡала. Ошо сифатты юғалтыу арҡаһында һәләкәткә киләбеҙ ҙә инде. Аңыбыҙҙағы уяулыҡты ҡайтарырға кәрәк бөгөн. Һәр беребеҙ үҙ булмышыбыҙҙы көйләй алабыҙ икән, тимәк, бөтөнөбөҙҙөң бергә халыҡ яҙмышын яйға һалып ебәрерлек тә мөмкинлегебеҙ бар. Ә беҙҙең яҙмышыбыҙ үҙ ҡулыбыҙҙа, ул үҙгәртеүгә мохтаж. Боронғо аҡыл эйәләренең дә, хәҙерге ғалимдарҙың да фекеренсә, үткәндәргә ғорурланып, ҡәнәғәтләнеп кенә йәшәү, үҙгәртеүҙәр хаҡында бөтөнләй уйламау башҡорт халҡын һәләкәткә килтерәсәк.

Күрәгараулыҡ, тип атай халыҡ күҙе яҡындан күрмәгән кешенең ауырыуын. Алыҫтағын күрмәү әле ғәфү итерлек, ә үҙеңдең генә түгел, халҡың яҙмышы хәл ителгәндә, аҡты ҡаранан айыра белмәү енәйәткә тиңдер, тип уйлайым. Депутаттар һайлаған саҡта сәйәси уяулыҡ бик-бик кәрәк тә бит. Райондарҙа, бигерәк тә ауыл хужалығы өҫтөнлөк иткән төбәктәрҙә халыҡ һис кенә лә үҙаллы хәл итә алмай был мәсьәләне. Район хакимиәт башлығы теләгән кешене һайламаһаң, бесәнлек, мал аҙығы, эш бирмәү менән янай. Ә уларға үҙ сиратында юғарыраҡтан күрһәтмә, күрһәтмә генә түгел, ә баҫым бар. Ә халыҡ бит кемдең кем икәнлеген тойоп белә. Ейәнсура районында 1997 йылғы һайлауҙарҙың ниндәй һөҙөмтә биргәнлеген 2010 йылдың июль айында республика хөкүмәтендә булған үҙгәрештәр асыҡ күрһәтте. Ғөмүмән, халыҡ теләмәгән, әммә баҫым арҡаһында һайлатылған депутаттар үҙҙәре ни генә ҡылмай ҙа, республика, ил менән ни генә ҡыландырмайҙар!?

Ә ни эшләргә тейешбеҙ һуң!? Ошондай ҡатмарлы осорҙа халыҡ дөрөҫ һүҙгә, шағир һүҙенә ҡытлыҡ кисерә, тинек. Ялҡынлы, ҡыҫҡа, үткер шиғри һүҙ кәрәк. Үҙ заманында Зәки Вәлидиҙе һатлыҡ булыуҙа ғәйепләгәс, Шәйехзада Бабич шиғыры менән яҡлап

сыҡҡан, "аҙ һанлы милләттәр күп һанлыларҙан йотолорға тейеш" тигән ҡараш тарала башлағас, Рәми Ғариповтың "Аманат"ы, "Тыуған тел"е кеүек шиғри һүҙгә, шағир тауышына мохтаж булды халҡыбыҙ. Балаларыбыҙҙы "телһеҙ ҡалдырыу" киң ҡолас ала башлағас, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев үҙ аҡсаһына "Халҡыма хат" поэмаһын күплəп баҫтырып, халыҡҡа таратып, туған телдең əһəмиəте тураһында аңлатты. Рəшит Шəкүр, Рауил Ниғмəтуллин халыҡ араһынан ҡайтып килмəне. Митинг һайын иң алда тиерлек Ринат Камал йөрөнө, Тамара Ғəниева һыуыҡтарҙа ла өшөй-туңа ҡатнашты. Таңһылыу Ҡарамышева, Зəйтүнə Хановалар үткер мəҡəлəлəре менəн уяулыҡҡа саҡырҙы, Розалия Солтангəрəеваның ҡобайырҙары халыҡ зиһенен яҡтыртып ебəрҙе. Ләкин миллиондан ашыу халҡыбыҙ өсөн уларҙың тауышы ғына аҙ əле. Ошондай яуаплы осорҙа тос һүҙ əйтерлек бик күп əһелдəребеҙ тарих төпкөлөнəн сыға алмай яфалана. Тарихҡа ҡайырылып ҡына ҡарарға, тарихты фəһем өсөн өйрəнергə, бөгөнгө көн менəн сағыштырыу үткəреп, һабаҡ алырға кəрəк. Был йəһəттəн тарихсы-ғалим Əнүəр Əсфəндиəров ғəйəт маҡтаулы эш башҡара.

Тарих беҙгə тарихи шəхестəрҙəн өлгө алыу, улар кеүек халыҡты, илде яратырға, уның киләсәге өсөн ни ҙə булһа эшләргə ынтылыу, заман һулышын тойорға өйрəнеү өсөн кəрəк.

Халҡыбыҙға аңындағы бына тигəн холоҡ-фиғелде, ғəҙəтҡылыҡтарын яңынан ҡайтарырға, уятырға һəм заманға яраҡлашып ҡына түгел, хатта заман талабын алдан тойомлап йəшəргə кəрəк. Бының өсөн мөмкинлеге лə, ҡеүəте лə, əһелдəре лə бар халҡыбыҙҙың. Зарланып, һəр саҡ аҡланып йəки кемдəндер ғəйеп эҙлəп, кемдəндер көнлəшеп ҡəҙерле минуттарҙы əрəмлəүҙең бер генə файҙаһы ла юҡ, киреһенсə, энергияны бушҡа сарыф итəбеҙ. Һəр беребеҙ үҙ мөмкинлегебеҙҙəн сығып ҡоророға тейешбеҙ яҙмышыбыҙҙы. Бер кем дə беҙҙең өсөн йəшəмəй, йəшəргə лə тейеш түгел. Тəбиғəт һəр кешене, һəр милләтте иң элек үҙ яҙмышы өсөн яуап бирерлек итеп яратҡан, яҙмышын ҡороруҡ аҡыл, зиһен, аң һəм тейешле шарттар биргəн. Ҡанға һалынған аңды эске энергияны эшкə ҡушыу юлы менəн үҙгəртеп була икəн, ни эшлəп боронғо башҡорт аңын тергеҙмəҫкə беҙгə?! Ни эшлəп башҡорт ялҡау, ул үҙен үҙе юҡҡа сығарасаҡ, башҡорттар бер-береһенең башына етə, башҡорттар тулыһынса ассимиляцияға дусар ителəсəк, уларҙың яртыһы башҡа милләттəр менəн ҡатнаш ғаилə ҡорған, башҡорт үҙ телен һанға һуҡмай, туған телен белмəүселəрҙең иң күбеһе улар араһында, башҡорт ауылдарында уҡыусы балаларға тиклем башын эскегə һалған, башҡорт йəштəренең бик аҙ өлөшө

генә үҙендә милли рух һаҡлай, башҡорт егеттәре өйләнергә эшкинмәй, тигән ҡараштарҙы юҡҡа сығарырлыҡ көс юҡмы ни беҙҙә? Ни эшләп бик бирешеп, ҡаҡшап киттек һуң әле? Атай-олатайҙарыбыҙҙың шул тиклем ҡан ҡойоп өлгәшкән ҡаҙаныштарын "ярты"ға алмаштырабыҙмы ни?

Аңды тышҡы тәьҫир менән генә үҙгәртеп булмай икән, беҙҙә атай-олатайҙарыбыҙҙың ҡеүәтле, әсәй-өләсәйҙәребеҙҙең зирәк ҡаны һаҡланған бит. Ни эшләп шул ҡанды ойотоп ҡуйғанбыҙ? Халҡыбыҙ тарихы, башҡа халыҡтар кеүек үк, иң боронғо таш быуат кешеләре тарихына барып тоташа. Ошо быуат осорона ҡараған донъялағы иң уникаль тарихи ҡомартҡыларҙың береһе булған Шүлгәнташ мәмерйәһе стеналарында охраға хайуан туҡымаларынан алынған елем ҡатнаштырылып яһалған буяу менән төшөрөлгөн һүрәттәр әлегәсә һаҡланған икән, урта таш быуатта һөйәк ярығына саҡматаш пластинкалары ҡуйып бысаҡ эшләгән, балсыҡ һауыт-һабалар, кирбес уйлап таба, еп иләү һәм туҡыма һөнәрҙәренә эйә булған, баҡыр иретеү технологияһын үҙләштерә башлай икән – тимәк, атай-олатайҙар шул замандарҙа үк фән серҙәренә төшөнә башлаған. Һәр эш ҡоралын, көнкүреш әйберен ҡатмарлы орнамент менән биҙәй барған икән – тимәк, фекерләүе сәнғәт юғарылығында булған. Ҡурыу үләндән үҙенә ҡурай яһап уйнай башлаған икән — үҙенә кәрәк музыка ҡоралын да беҙҙең атай-олатайҙар үҙе уйлап тапҡан. Яҙмабыҙ тәүге рун тамғаларына барып тоташа икән — халҡыбыҙ наҙанлығы хаҡында һөйләргә урын ҡаламы? Ун ике мең юллыҡ ҡобайырҙарҙы ятҡа биклəп беҙҙең көнгәсә килтереп еткергән зирәк олатайҙарыбыҙ ҡаны ла күскәндер бит беҙгә? Был эпос-ҡобайырҙарҙа иҫ китмәле фәлсәфәүи фекер, тәрбиә ҡанундары, ғилем серҙәре һалынған икән — беҙҙең ҡаныбыҙға ла күскәндер бит ошо аң?! Зиһен ҡеүәте һәм күңел байлығы буйынса беҙ донъя халыҡтарының ҡаҙаныштарынан бер ҙә ҡайтыш түгелбеҙ. Классик музыка тип аталған иң юғары талаптарға яуап бирерлек боронғо көйҙәр ижад итеп, бөгөнгө көнгә килтереп еткергәнбеҙ икән – күкрәктәребеҙҙе күгәрткәнсә һуғып маҡтанырлыҡ ҡаҙаныш бит был! Ни эшләп ошоларҙың барыһын вайымһыҙлыҡ ҡорбанына әйләндерәбеҙ? Ни эшләп ошо милләттең телен, традицияһын юғалтыуға дусар итәбеҙ? Ә милли традиция миңә лә, һиңә лә һыу-һауа һымаҡ кәрәк. Һәр кешенең тамыры – милли традиция ул. Илһам, рухи көс, маҡсат, иман нигеҙе – ул милли традиция. Ә милләтенән айырылған кеше ошо иң изге тойғоларынан мәхрүм ҡала һәм мәғәнәһеҙ тормош алып барыуға дусар була.

Һәр кешенең үҙенсә генә холҡо булған кеүек, һәр халыҡтың да милли холҡо була. Милли холоҡ уның тарихына, йәшәгән төбәгенә, тормош рәүешенә бәйләнгән. Тормош рәүеше уның ашаған ризығына, көнкүрешенә, кейгән кейеменә, моңона йоғонто яһай һәм үҙенсәлекле бер ҡылыҡ-фиғел, эске донъя – традиция барлыҡҡа килтерә һәм бер үк традиция нигеҙендә халыҡ милләт булып туплана. Ошолай итеп, тарихи нигеҙҙә барлыҡҡа килгән һәм быуындан быуынға күсә килгән үҙенсәлекле традиция мөхитендә тәрбиәләнгән кеше икенсе мөхиткә эләкһә, уның психикаһына кире йоғонто яһала. Был хаҡта 1995 йылда Мәскәү ҡалаһында бөтөн донъя медик ғалимдарының конференцияһында ҙур һөйләшеү була. Милли мөхиттең, туған моңдоң әһәмиәте тураһында байтаҡ файҙалы сығыштар, тәҡдимдәр әйтелә унда, әммә конференцияла әйтелгән ҡиммәтле тәҡдимдәр иғтибарһыҙ ҡала. Ә бит бөтөн донъяға исемдәре билдәле абруйлы ғалимдар сығыш яһай унда. Бер уңайҙан конференциянан ҡайһы бер сығыштарҙы ла тәҡдим итәйем.

Сығыштар ошо үк йылдың егерме туғызынсы мартында "Медицинская газета" ла "Йәмғиәткә диагноз" тигән исем аҫтында баҫылып сыҡты.

"Хәбәр ителеүенсә, Мәскәү ҡалаһында "Психик сәләмәтлектең мәҙәни һәм психик проблемалары" тип аталған Халыҡ-ара конференция булып үтте. Уның эшендә Россияның утыҙ биш регионынан психиатрҙар ҡатнашты һәм донъяның һигеҙ иленән күренекле белгестәр сығыш яһаны.

Профессор Т. Дмитриева. Мәскәү. *Беҙҙең һөйләшеүҙең төп темаһы – кешеләрҙең психик сәләмәтлеге менән уларҙың милләте, мәҙәниәте, дине һәм йәмғиәттәге социаль-экономик шарттар менән үҙ-ара бәйләнеше. Кеше – биосоциаль йән эйәһе, тимәк, һәр этносты өйрәнгән саҡта, уның биологик, генетик,биохимик, нейрофизиологик һәм башҡа үҙенсәлектәрен иҫәпкә алырға кәрәк. Был факторҙар айырым шәхестең дә, шулай ҡ тотош милләттең дә психик сәләмәтлегенә һиҙелерлек йоғонто яһай.*

Этник һәм социаль-мәҙәни аспекттарҙың совет психиатрҙары иғтибарынан ситтә ҡалыуы осраҡлы хәл түгел. Идеологизация шарттарында социаль, культураль, этник факторҙарҙың психик сәләмәтлеккә йоғонтоһон объектив өйрәнеү мөмкин түгел ине.

Профессор Г. Колотилин. Хабаровск. *Алыҫ Көнсығыш аборигендарының – нанайҙарҙың, ульча, удэгей, эвенктарҙың – психик патологияһын өйрәнеү шуны асыҡланы – ситкә тайпылыштарҙың уртаҡ сәбәптәре лә күп. Үҙ милләтенең йолалары, мифтары,*

риүәйәттәре аша формалашҡан шәхестәрҙең этник-психологик үҙенсәлектәрен белмәү һәм иҫәпкә алмау арҡаһында ауырыуҙың психик торошон яңылыш баһалау ихтималлығы бар. Тағы шул билдәләнде, үҙ этносынан айырылыу һәм бөтөнләй ят мәҙәни мөхиткә барып эләгеү арҡаһында аборигендар психик тайпылыштарға дусар була.

РАМН академигы В.Семке. Томск. *Шуны өҫтәп китке килә, аҙ һанлы этник төркөм вәкилдәренең психик тайпылыштарына үҙ этносынан айырылыу ғына түгел, ә уларға ят булған мәҙәни традицияларҙы көсләп индереү ҙә ныҡ йоғонто яһай. Себерҙең төньяғында йәшәүсе ерле халыҡ миҫалында шуға инандыҡ, төньяҡты промышленность үҙләштереү, ерле халыҡҡа ят булған хеҙмәт индереү, үҙҙәренең өйрәнгән кәсебе менән шөғөлләнеү мөмкинлегенән мәхрүм итеү уларҙың психикаһына кире йоғонто яһай.*

Профессор В. Бекер. Швейцария. *Беҙҙә, традиция буйынса, үҙ ваҡытында белем ала алмаған бик күп эмигранттар эшләй. Улар үҙенсәлекле мәҙәни һәм социаль шарттар булған ерҙәрҙән килә. Беҙҙең шарттарға эләккәс, психологик яҡтан бик күп ҡатмарлылыҡ кисерәләр, һәм был иһә психозға, депрессияға, алкоголизм һәм суицидтарға килтерә.*

Профессор М. Бауер.Германия. *Коллегамдың фекере Германияға ла тулыһынса ҡағыла. Беҙҙә ете миллион сит ил кешеһе йәшәй. Был иһә һәр ауырыу кешегә айырым мөнәсәбәт талап итә. Мәҫәлән, ислам динле кешеләр менән мөнәсәбәт Европа кешеһенә ҡарағанда ныҡ айырыла. Ғөмүмән, мәҙәни терапия, дини факторҙарҙы иҫәпкә алыу мотлаҡ кәрәк.*

Э. Сорель. АҠШ. *Этник һәм мәҙәни факторҙарҙы өйрәнеү психиатрияла ғына түгел, психологияла ла, социологияла ла, антропологияла ла, этнографияла ла, философияла ла тәрән белемгә эйә булыуҙы талап итә. Ниһайәт,билдәле бер этик һәм деонтологик һаҡ ҡараш кәрәк. Туҡтауһыҙ халыҡ-ара һәм дини конфликттарҙың булып тороуы был мәсьәләнең мөһимлеген күрһәтә. Мин шовинизм һәм расизм күренештәрен психиатрияны өйрәнеүгә генә ҡайтарып ҡалдырмайым, әммә милләттең психик сәләмәтлеге ниндәйҙер кимәлдә уларға ыңғай йәки кире йоғонто яһайҙыр. Беҙҙең илебеҙҙә айырыуса йәштәр араһында агрессивлыҡ арта. Кара тәнлеләр һәм аҙ һанлы халыҡтар араһында енәйәтселек көслө. Телевидение тапшырыуҙары балалар араһындағы агрессивлыҡты ҡырҡа арттыра. Балалар өсөн тапшырыуҙарҙа бер сәғәт эсендә генә лә биштән алып ун бишкә тиклем көс ҡулланыу акты күрһәтелә. Был иһә баланың психик үҫешенә кире йоғонто яһай, агрессивлыҡты арттыра. Шуныһы үкенесле, Рәсәй ҙә беҙҙең күңелһеҙ тәжрибәбеҙҙе ҡабатлай башланы.*

Профессор В. Положий. Рәсәй. *Дингә кире ҡайтыуҙы хупларға кәрәк. Был – психологик, саноген фактор, ул милләттең психик*

сәләмәтлегенә ыңғай йогонто яһаясаҡ. Әммә кешенең Алла васыяты менән йәшәүе бик һиҙелмәй, ул үҙен хәүефлектән яҡлар саҡта ғына Аллаға мөрәжәғәт итә.

Профессор М. Кабанов. С.-Петербург. *Беҙ милләттең психик сәләмәтлеге хаҡына социаль факторҙың да, сәйәси факторҙың да, иҡтисади факторҙың да, этник факторҙың да һәм башҡаларҙың йогонтоһон психик кимәлдә өйрәнергә, был проблемаға киңерәк ҡараргә тейешбеҙ.*

Т. Дмитриева. *Шулай килеп сыҡты, беҙҙең конференциябыҙ Чечнялағы ваҡигалар менән тап килде. Яңғын башланған икән – уны һүндерергә кәрәк, уны булдырмау юлдары хаҡында бәхәсләшеү һуң. Уныһы беҙгә ҡағылмай. Ә бына сәйәсмәндәр теге йәки был акцияны үйлап сығарған саҡта психологик аспекттарҙы иҫәпкә алырға тейеш ине. Күп кенә цивилизациялы илдәрҙә сәйәси әһелдәр – ҡала мәрҙәнән башлап президенттарға тиклем үҙ кәңәшселәре араһында психологтар һәм психиаторҙар тота. Беҙҙең илебеҙ ул хаҡта үйлап та бирмәй. Ә бит Рәсәй галимдарының этнопсихиатрия өлкәһендә бик ҡыҙыҡлы һәм фәһемле тикшеренеүҙәре етерлек кимәлдә тупланған.*

Күренекле психиатрҙарҙың ошо фекерҙәрен уҡып ҡына ла һәр кеше үҙе һығымта яһай ала.

Тимәк, Аң ҡан аша күсә. Әммә башҡа йән эйәләре менән сағыштырғанда, Тәбиғәт кешене үҙ яҙмышын үҙе хәл итерлек Аҡыл менән яратҡан. Кеше үҙтәрбиә менән шөғөлләнә һәм ҡанындағы холоҡ-фиғелен үҙгәртә ала. Уның өсөн маҡсат, йүнәлеш билдәләй белеү кәрәк. Дөрөҫ маҡсат, йәшәү йүнәлеше билдәләү өсөн:

ИҢ МӨҺИМЕ – ҮҘ ТАМЫРЫҢДАН АЙЫРЫЛМАУ. Тәрбиә эше үҙ тамырың нигеҙендә барырға тейеш. Сөнки төп маҡсатың тамырың тоташҡан халыҡ маҡсаты менән тап килгәндә генә һин үҙеңде юғалтмайһың. Йәшәйештә үҙеңде юғалтмауҙан да ҙур ҡаҙаныш юҡ.

Атай-олатайҙарыбыҙҙың рухи ныҡлығының, ихтыяр көсөнөң нигеҙендә ниндәй тойғолар, ниндәй өмөт-ынтылыштар яттҡан?
Азатлыҡ һөйөү, ғәҙеллек яратыу, кәмһетелеүгә һәм иҙеүгә ҡаршы тороу, тыуған ерҙе сикһеҙ яратыу.

Бөгөн ниндәй ҡиммәттәр беҙгә йүнәлеш биреүсе этәргес көс булырға тейеш?

Республикабыҙҙың суверенлығын, милләтебеҙҙе, еребеҙҙе, рухи ҡиммәттәребеҙҙе – туғанлыҡты һаҡлау. Беҙ бөгөн донъялағы башҡа милләттәрҙән һис кенә лә ҡалышмайынса рухи яҡтан да, матди яҡтан да үҫергә тейешбеҙ. Бының өсөн бөтөн шарттар бар. **Сөнки**

беҙҙең үҙ йортобоҙ — дәүләтебеҙ бар.

Аңыбыҙға байтаҡ ҡына ят, халҡыбыҙ баһаһын, милли бәҫен төшөрөүсе фекерҙәр һалынған, холоҡ-фиғелебеҙгә хас булмаған, милләтебеҙ сифатын юҡҡа сығарыусы ғәҙәттәр килеп ингән. Беҙ уларҙан арына алабыҙ. Арынырға тейешбеҙ, сөнки милләтте милләт итеп һаҡлап килгән сифаттарыбыҙҙы юғалтырға тейеш түгелбеҙ. Һәр беребеҙ — милләттең бер вәкиле. Һәр беребеҙ бергә күпте тәшкил итә. Әйҙә, туғаным, бөгөндән үк, хәҙер үк уйлан, ең һыҙғанып эшкә тотон. Атай-олатайҙарҙың хәләл көсөн, әсе тирен, ҡайнар ҡанын баһала, һынатма, бөгөлөп төшмә. Өҫтөбөҙгә ябырылған ни тиклем афәттәргә бирешмәгәнде араҡыға ғына, замандың һәр төрлө башҡа сирҙәренә генә бирешмә.

Һәр беребеҙ үҙ аҡылыбыҙҙы үҙебеҙ тотһаҡ, милләттең киләсәген башҡаларҙың балаларында түгел, үҙебеҙҙең балаларыбыҙҙа күрһәк, милләтебеҙҙе үҙебеҙ дауам итһәк, балаларыбыҙҙың киләсәге өсөн матди байлыҡтың да, рухи байлыҡтың да берҙәй кәрәклеген аңлаһаҡ, халҡыбыҙ васыятындағыса, АРҒЫМАҠ-тың ялына тотоноп ҡалыр инек. Ә ялынан эләктерелгән атты ысҡындырмау сараһын күрә белә ул БАШҠОРТ.





РУХ

"Кеше күңеле сәскәнән наҙлы, таштан ҡаты", — тигән әйтеме бар халыҡтың. Был, әлбиттә, рух ныҡлығы тураһында. Рух ныҡлығы ҡандан да күсә, тәрбиәнән дә килә, тирә-яҡ мөхиттең тәьҫире лә ҙур. Рух ныҡлығына иғтибар иткән айырым кешеләр генә түгел, халыҡтар ҙа көс-ҡеүәте яғынан айырылып тора.

Диҡҡәттең ҡартатаһы Зыяйетдин Бураҡаев тураһында телгә алғайныҡ инде. Уның тормошонан бер фәһемле ваҡиғаға туҡталып китке килә. Зыяйетдин Зәйнәғәбетдин улы Бураҡаев 1905-1907 йылғы Рус-Япон һуғышында ҡатнашҡан һәм әсир төшкән. Әсирҙә саҡта үҙенә килгән бер хатты һаҡлап ҡалдырған. Хаттың аҙағына үҙ ҡулы менән рус телендә: "Был хатты миңә Йыһангир Уразбаев яҙҙы. Мин Японияла 9 ай ярым әсирҙә булдым. Тыуған йылым 1876 йыл", — тип яҙып ҡуйған. Хат 1905 йылдың 20 мартында яҙылған. Ошо хат менән бергә Японияндан әсирлектән алып ҡайтҡан тағы бер хат һаҡлана. Уның күсермәһен тәҡдим итәбеҙ. (*Күсермә*)

Бынан күренеүенсә, япондар хатта әсир төшкән яугирҙарҙың да рухи ҡаҡшамаҫлығы, артабанғы йәшәйеше хаҡында хәстәрлек күргән. Тимәк, кеше күпме йәшәй, шул хәтлем рухи яҡтан сәләмәт булырға тейеш. Рухың һындымы — йәшәүеңдең мәғәнәһе лә юғала.

Кешенең байтаҡ сифаттары ҡан аша күсә, әммә үҙтәрбиә менән уға үҙгәреш индереп була, тинек. Рухи ныҡлыҡ тәрбиә менән бирелә торған сифат һәм уны мотлаҡ тәрбиәләргә кәрәк. Сөнки ул



Господа храбрые воины Россійской Имперіи!

Исполняя повелѣніе вашего Императора, вы, Господа, сражались за ваше Отечество и по истощеніи силъ сдѣлались плѣнниками нашего войска.

Мы выражаемъ искреннѣйшее сочувствіе вашему несчастію, и душевно желаемъ, чтобы поскорѣе возстановился миръ между Японіею и Россіею и не замедлилъ день вашего возвращенія на родину.

На Канагавской станціи желѣзной дороги: Канагавское общество вспоможенія воинамъ. Канагавское патріотическое общество Женскій отдѣлъ Іокохамскаго общества поощренія воиновъ.

Кусермэ.

башҡорт ҡанында булған һәм әле ойоған хәлдә, тиерлек. Ә рухи ныҡлыҡ тәрбиәләр өсөн өс шарт — өс таяныс кәрәк: маҡсат, үҙ көсөңә ышаныс һәм ихтыяр көсө йәки ныҡышмалылыҡ. Рухи ныҡлыҡ өсөн ошо өс таяныстың булыу-булмауының ниндәй әһәмиәткә эйә икәнлеген билдәләү маҡсатынан, тормошта булған ваҡиғаларға күҙ һалайыҡ һәм "кешене күҙәтәйек, үҙебеҙҙе төҙәтәйек".

Әммә, белеүебеҙсә, кеше ниндәй генә фәһемле ваҡиғалар тыңламаһын, аҡыллы китап уҡымаһын, һабаҡ алырлыҡ тамаша ҡарамаһын, минутында үҙгәреп китә алмай. Шуның өсөн, "Арғымаҡ"та тормошта булған төрлө ваҡиғаларға туҡталып киткән саҡта, кәрпек ҡаҡҡан мәллек үҙгәрешкә иҫәп тотманым. Минең маҡсатым – кеше ошо ваҡиғалар аша башҡалар тормошона күҙ һалһын да үҙ тормошона, холоҡ-фиғеленә байҡау яһаһын, үҙтәрбиә менән шөғөлләнә башлау өсөн этәргес алһын. Кеше фәҡәт оҙайлы ваҡыт үҙтәрбиә менән шөғөлләнгәндә генә уңыштарға өлгәшә ала. Һин былай эшлә, тегеләй эшлә, тигән кәңәш биреп кенә холоҡ үҙгәртеүгә өлгәшеп булмай. Йәшәүгә йүнәлеш биреү – юл өйрәтеү түгел. Бер кемдең дә күңел донъяһы икенсе кешенекенә оҡшамаған. Һәр кеше - үҙе бер донъя. Һәр кеше үҙенсә хаҡлы. Шуға ҡалыпҡа һалынған кәңәштәр булмай. Кәңәш — грамматик ҡағиҙә түгел. Коммунистар партияһы хакимлығы аҫтында бер төрлө генә иман менән, тәрбиә ҡанундарын грамматик ҡағиҙә кеүек ҡалыпҡа һалып, анттар ятлатып, вәғәҙәләр бирҙертеп, етмеш йылдан ашыу йәшәтеп маташыу булды, һәм бер көн килеп барыһы ла селпәрәмә килде. Селпәрәмә килде, сөнки был ҡалып талаптары ҡаныбыҙҙа юҡ ине, кешенең тәбиғи булмышы иҫәпкә алынмағайны һәм бөтөнөһө лә тышҡы ялтырауыҡҡа ҡоролғайны.

Кеше күңеле ҡағиҙә менән йәшәмәй. Шуның өсөн дә халыҡта аҡылды кинәйә менән биреү ысулы бар. Әкиәттәр, ҡобайырҙар, риүәйәттәр, лаҡаптар, мәҡәлдәр, әйтемдәр, хатта таҡмаҡтар аша кешене уйланырға мәжбүр итеү алымы ул. Әҙәби әҫәрҙәр ҙә ошондай уҡ маҡсатты иңенә һалған. Кеше уҡый, тыңлай. Үҙенә тейешлеһен зиһененә һеңдерә һәм үҙтәрбиә менән шөғөлләнә башлай.

"Аң" тигән бүлектә Иҫәнғол урта мәктәбендә тәүгә асылған башҡорт синыфында уҡыуым хаҡында яҙғайным. Рус мәктәбе нигеҙендә башҡорт синыфтары асыу һәм был кластарға бөгөнгө көндә ЗПР тип аталған синыфҡа туплаған һымаҡ уҡыуға һәләтһеҙ, тәртипһеҙ балаларҙы туплау, башҡорт теленең, башҡортса йәғни башҡорт балаларын үҙ телендә уҡыуының бәҫен төшөрөү кемгә

кәрәк булғандыр? Был ҡараш әле лә йәшәй. Рус һәм башҡорт параллель кластар булған ауылдарҙа "башҡортса уҡып ҡайҙа бараһың?" тигән ҡараш әле лә йәшәй. Туған телдең әһәмиәте тураһында күпме ғалимдар, күпме алдынғы ҡарашлы зыялылар яҙа, туған теленән мәхрүм ителгән күпме кеше йәшәү мәғәнәһен юғалтып аптырана – юҡ, совет идеологияһы аңға шул тиклем нык һеңдерелгән – бала табыу, бағыу маҡсатын фәҡәт юғары белем биреүгә, ә юғары уҡыу йортона индереү өсөн фәҡәт рус телендә белем алыуға ғына ҡайтарып ҡалдырыу әле лә дауам итә. 1995 йылда әле Иҫәнғол урта мәктәбенең уҡытыусылар йыйылышында рус синыфынан Вавилов тигән уҡыусының тәртипһеҙлеге хаҡында мәсьәлә ҡарала. Шул саҡ бер уҡытыусы ярым шаярып: "Башҡорт синыфына ултыртығыҙ ҙа ҡуйығыҙ уны", — тине. Был шаярыу нигеҙендә әсе дөрөҫлөк ятҡанлығын барыһы ла аңлай ине, әммә халыҡ аңына тиҫтә йылдар буйы туған телдең бер нимәгә лә яраҡһыҙ икәнлеген аңға һеңдерергә, рус булмаған балаларҙың рухын һындырырға тырышыу һөҙөмтәһен бирҙе, әлбиттә. Рус кластарында уҡып белем алыу өсөн ыңғай ҙа булды икән ти, ә кешене бит мөхит тәрбиәләй. Ҡанға бер төрлө хәтер һалынған икән, икенсе төрлөнө ҡабул итә алмай. Ҡан хәтере ғәжәп сер. Ошо уңайҙан ғүмере буйы тиерлек Ҡыуатов исемендәге республика больницаһы поликлиникаһында аллерголог булып эшләгән Миңһылыу Арыҫланова ҡыҙыҡ та, фәһемле лә бер ваҡиға һөйләгәйне. Бер ҡыҙ бала аллергия менән йонсой. Ниндәйҙер үләнгә аллергия икәнлеген генә белә. Ә ниндәйгә икәнен асыҡлай алмайҙар. Ҡыҙ баланы врачҡа өләсәһе алып килә. Врач һорашып ултыра торғас, өләсәй кешенең дә һуғыш ваҡытында тәненә сабыртма сыҡҡанлығын асыҡлайҙар. Сабыртма онға мысай ҡушып икмәк бешергәндән һуң сыҡҡан. Артабан барыһы ла асыҡлана. Өләсәй кешенән ейәнсәренә, бер быуын аша ошо ауырыу күскән. Тимәк, ейәнсәрендә лә мысайға аллергия, тигән һығымта яһай тәжрибәле аллерголог һәм шулай булып сыға ла. "Ҡан хәтеренең көсө иҫ китерлек! Ошо хәлдән һуң мин ауырыу сәбәбен уның үҙенән генә түгел, ә нәҫел ебенән дә эҙләй башланым", – тине Миңһылыу Арыҫланова. Сирҙең сирен хәтерендә тоткан ҡан быуаттар буйы күсә килгән ғәҙәт-йолаларҙы, традицияны нисек онотһон?!

Башлаған һөйләшеүҙе дауам итеп, тағы шуны әйтке килә: башҡорт кластарына ниндәй мөнәсәбәт менән йыялар, шул мөнәсәбәт уҡытыусыларҙа ла, параллель класс уҡыусыларында ла, шулай уҡ русса уҡыған башҡорт балаларында ла мәктәпте тамамлағанса тиерлек дауам итә. Һәр саҡ "В" йәки хатта "Г" класы

булыу, бөтөн сараларҙа ла артҡы урын алыу, физик эштәргә күберәк "егеү" һәм башҡалар. Беҙҙең, Иҫәнғол мәктәбендәге тәүге башҡорт класы булған тәүге ҡарлуғастарҙың, рухын һындырырлыҡ мөнәсәбәттән тәүге уҡытыусыбыҙ Нурия Фазлыәхмәт ҡыҙы Сәйетова ла, аҙаҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Мәликә Ғибаҙулла ҡыҙы Йосопова ла һәр саҡ ҡурсалап ҡына торҙо. Нурия Сәйетова апай үҙе иҫ китмәле талантлы ине: бейене лә, йырланы ла. Әсәһе бик килешеүле итеп башҡорт кейеме кейеп йөрөр ине. Уҡытыусыбыҙ беҙҙе үҙе белгән һөнәрҙәргә өйрәтергә тырышты. Ә Мәликә апай берәйебеҙҙә аҙ ғына һәләт һиҙеп ҡалһа ла үҫтерергә тырыша торғайны. Рәссам Илдар Туймаҡаев та уның тураһында бик йылы фекерҙәр әйтә: "Ул рәссам буласаҡ. Башҡа фәндәрҙән өлгәшмәй тип, класта ҡалдырмағыҙ", – тип яҡлаша ине мине, ти. Аҙаҡ Мәликә Йосопова Өфө ҡала башҡорт мәктәбенә (*хәҙер гимназия*) уҡытырға килде. Исеме киң билдәле ҡурайсы Роберт Юлдашев та Мәликә апай хаҡында ошондай уҡ фекер әйтте: "Минең ҡурайға ҡарата ҡыҙыҡһыныуым барлығын белгәс, ҡайһы саҡтарҙа хатта, ярай, өйҙә уҡып киләрһең, тип, эш бирә лә үҙ дәресенән ҡурай түңәрәгенә ебәрә торғайны," – ти. Илебеҙҙә мәғариф өлкәһендә туҡтауһыҙ тәжрибәләр үткәрелә. Һәр быуын уҡыусыға кәмендә ике төрлө реформа тура килә. Шул үҙгәрештәрҙең береһе – профилле уҡытыу системаһы. Был иһә баланың ҡанға һалынған һәләтенә нығыраҡ иғтибар итеү, ә тормошта уның өсөн артыҡ әһәмиәте булмаған уҡыу предметтарына ҡарата талапты йомшартыу тигән һүҙ. М. Ғ. Йосопова һымаҡ уҡытыусыларҙың һәләттәргә иғтибары һәм ҡайһы бер белгестәрҙән балаға иғтибар талап итеүҙе "үтенеп" һорауын тормош һабаҡтары дөрөҫләй бара. Мәктәп эскәмйәһендә саҡта һәләттәре бөрөләнә генә барған таланттар аҙаҡ ошо йүнәлештә эшләгән класс етәкселәренә, уҡытыусыларға сикһеҙ рәхмәтле булалар. Әгәр математикаға бик теше үтмәгән Рәми Ғариповты, үҫмер сағынан уҡ өмөтлө әҙәбиәтсе булыры билдәле булған талантты, туҡтауһыҙ ҡайыҙлаһалар (*ундайҙар ҙа табылған уҡытыусылар араһында, әммә, бәхеткә күрә уның да Мөсәлиә Хәйруллина, Мәрйәм Ғималова кеүек ҡурсалаусылары ла булған*), рухын һындырһалар, бөгөнгө көндә әҙәбиәтебеҙ ғәжәп һүҙ оҫтаһынан, фәлсәфәүи фекер эйәһенән мәхрүм булыр ине.

Кеше күңеле сәскәнән наҙлы, таштан ҡаты тиҙәр. Талант күңеле айырыуса нескә һәм ваҡытында тейешле иғтибар булмаһа, таш кеүек ҡатып ҡалыуы ла ихтимал.

Бер ваҡыт Өфөнән яҙыусы килергә тейешлеген әйттеләр. Ҙур яҙыусы тинеләр. Әҫәрҙәре мәктәп программаһына индерелгәс,

әлбиттә, ҙур инде. Бынылһын Мәликә апай аңлатты беҙгә. Бишенсе синыфта уҡып йөрөйбөҙ. Уҡытыусыбыҙға яҙыусы тураһында төрлө һорауҙар бирәбеҙ. Уның башҡортса уҡыуын, институт тамамлауын, уҡытыусы ла булыуын, редакцияларҙа эшләүен, ә хәҙерге көндә фәҡәт китаптар ғына яҙып ултырыуын да белдек. Беҙҙең өсөн иң мөһиме — уның башҡортса уҡып та шундай ҙур кеше булып китеүе ине. Мәликә апай быны бер нисә тапҡыр, баҫым яһап, телгә алды. "Йыйылышта иң алғы рәттәрҙән урын алырбыҙ. Һорауҙар бирербеҙ. Кейемдәрегеҙҙе кистән тәңкләп кенә һалып, матур ғына кейенешеп килегеҙ", — тине. Минең үҙем сығарған бер-нисә шиғырым бар ине. Уларҙы дәфтәргә матурлап күсереп яҙҙым. Рәсемдәр менән биҙәнем. Хатта район гәзитенән был яҙыусының һүрәтен алып йәбештереп, аҫтына уның әҫәренән өҙөк яҙып ҡуйҙым. "Яҙыусы ағайға күрһәтәм", — тип әҙерләнәм. Өйҙә лә ҙур әҙерлек барҙы. Кейемемде рәтләһендәрме, дәфтәремде килешкән-килешмәгән ерҙәрен төҙәтһендәрме. Хатта яңы таҫма ла һатып алдылар. Сәсем бик ҡуйы һәм оҙон ине. Бер нисек тә ыҡсым ғына урап ҡуйып булмай ине. "Яҙыусы әгәр тотош халыҡ алдында үҙенең башҡорт синыфында уҡыуы тураһында әйтһә, башҡа балалар алдында һеҙҙең өсөн мәртәбә булыр ине", — тип өмөтләнде Мәликә апай. Әйтергә кәрәк, башҡорт класы балаларын кәмһетеү үҙәккә үткәйне. Мин йыш ҡына: "Ҡайһы еребеҙ рустарҙан кәм икән. Шундай уҡ кешебеҙ, шулай уҡ өлгәшәбеҙ. Апайым менән абзыйым хатта уларҙан һәйбәтерәк тә уҡый", – тигән яуапһыҙ уйҙарға сума торғайным.

Осрашыу клубта үтте. Халыҡ шығырым тулы ине. Ә беҙ иң алғы рәттәрҙән урын алдыҡ. Минең ҡулымда дәфтәр. Яҙыусы ағайға күрһәтергә, унан баһалау алырға тейешмен бит!..

Был осрашыуҙан ҡалған хәтирәләрем шул: осрашыу рус телендә барҙы. Беҙгә иғтибар итеүсе лә булманы. Осрашыуҙан һуң клубтың оло залында бейеүҙәр башланды. Яҙыусыбыҙ бер яҡта колхоздың алдынғы помидор үҫтереүсеһе Блуднева тигән апай менән бик оҙаҡ итеп һөйләшеп ултырҙы ла күмәкләшеп сығып киттеләр. Мин шиғырҙар яҙған, матур итеп сәскәләр төшөрөлгән дәфтәремде тотоп, һөйләшергә ымһынып байтаҡ ҡына баҫып торҙом да ҡайтып киттем.

Башҡортса уҡыуҙың әһәмиәтен һәр уңайлы осраҡты файҙаланып аңлатырға ынтылған уҡытыусыбыҙ был осрашыуҙан һуң: "Ана, күрҙегеҙме – башҡортса уҡыһа ла ниндәй бейеклеккә күтәрелгән. Рус телендә лә матур һөйләшә", – тип, уңайы килгән һайын иҫкә төшөрөп торҙо. Ул шулай итеп ниндәй дәлилдәр менән

булһа ла беҙҙең башҡорт класында уҡыуыбыҙҙың, башҡортса һөйләшеүебеҙҙең һис тә наҙанлыҡ, дорфалыҡ, артта ҡалғанлыҡ түгеллеген раҫламаҡсы булғандыр, ә беҙгә туған тел тураһында байтаҡ ҡына шиғырҙар килтереп уҡыны, ә миңә Рәми Ғариповтың "Йүрүҙән" исемле китабын, унан һуң һигеҙенсе синыфта уҡығанымда "Таш сәскә" исемле йыйынтығын бүләк итте. "Мәрйәм, бына ниндәй шағирыбыҙ бар! Ул да Өфөлә башҡорт мәктәбен тамамлаған," – тип яҙылғайны унда. Уҡытыусы миндә ниндәйҙер һәләт һиҙеп, өмөт сатҡыһын һүндермәҫкә тырышҡан.

Беренсе тапҡыр яҙыусы менән осрашыу шул тиклем хәтерҙә ныҡ ҡалды һәм үҙемә ғүмерлек һабаҡ булды: ҡайҙа осрашыуға барһам да иң тәүҙә ҡәләм тибрәткән уҡыусылар бармы, күрешкеләре килһә, яныма килһендәр, тип иҫкәртеп ҡуям. Рухи ныҡлыҡтың нигеҙе ул – өмөт шәме ҡабыҙыу йәки булғанын һүндермәү. Мәликә апайыбыҙ Иҫәнғол мәктәбендә иң тәүге башҡорт кластарының иң тәүге уҡыусыларын ҡырын-мырын ҡараған күҙҙәрҙән, мыҫҡыллы һүҙҙәрҙән ҡурсалап, беҙҙә Өмөт шәмен һүндермәҫкә тырышҡан. Ни ғиллә менәндер асылған башҡорт кластарын һаҡлап алып ҡалыу сараһын күргән.

Өмөт шәме

Етенсе класта уҡыған саҡта, дүртенсе кластың пионер вожатыйы итеп билдәләнеләр. Уҡыу йылы тамамланғас, пионерҙар менән яраткан ауылым Ибрайға сәйәхәткә киттем. Ун өс бала. Иҫәнғол менән Ибрай араһы – ҡырҡ саҡырым. Ун бер йәшлек балалар менән ул араны бер көн оҙайында үтә алмабыҙ, тип уйланым да тура юлдан алып киттем. Туранан егерме саҡырымдан саҡ ҡына ашыу. Тик бер нисә ҡәҙимге текә тауға ғына артылып төшөргә кәрәк.

Юлға сығыуыбыҙ булды, артыбыҙҙан ҡыуып еткән бер һыбайлы юлаусы йүнәлеште бик матур итеп өйрәтеп ебәрҙе. "Йылдамыраҡ баҫып, аҙымдарығыҙҙы киңерәк алып йәһәтерәк атлаһағыҙ, шәмгә ут алыуға Ибрайҙа булырһығыҙ", – тине. Беҙ йырлай-йырлай, дәртле баҫып юлды дауам иттек.

Тирә-яҡ иҫ китмәле матур. Бәләкәй-бәләкәй генә тау йылғалары сылтыр-сылтыр йырлап, таштан ташҡа һикерә-һикерә, барыр юлыбыҙҙы арҡырыға киҫеп үтә. "Мине генә тыңлап кит, минең тауышыма ҡолаҡ һал", — тигәндәй, ярышып-ярышып ҡоштар һайрай. Бер машина ла, хатта егеүле ат та осрамай. Тирә-яҡ һил,

сәскәнән сәскәгә ҡуныр өсөн ашыҡҡан күбәләктәрҙең ҡанат елпеүенә тиклем ишетелер кеүек. Тик балаларҙың шау-гөр килеп йылғалар аша һикереп сығыуҙары, кемуҙарҙан йүгерешеүҙәре, ҡысҡырып һөйләшеүҙәре генә тәбиғәт тауышын күмеп китә. Бер аҙҙан тағы бер велосипедлы юлаусы ҡыуып етте. Ул уҙып китә бирҙе лә ҡайырылып ҡарап:

— Был ыбыр-сыбырҙы ҡайҙа алып киттең, һылыу? — тип һораны.

— Ибрайға! Дөрөҫ барабыҙмы?

— Серғолға барып еткәнсе бер генә юл ул. Аръяғына Ибрайҙың мәсет манараһы күренеп тора. Ошо юлдан яҙмағыҙ, бер яҡҡа ла боролмағыҙ. Бик ығышмағыҙ ҙа. Тура тиһәң дә, бала-саға аҙымы менән арыуыҡ алыҫ ара бит, — тине.

Беҙ аҙымдарҙы ҡыҙыулаттыҡ. Балаларҙы тыйып алып булмай. Тыйыуҙы уйламаным да. Үҙем дә улар менән бергә шаярҙым. Миңә лә ун дүрт кенә йәш тулып уҙғайны ул саҡта. Етенсене тамамлап, һигеҙенсе класҡа күскәйнем. Шулай уйнай-шаяра барғанда, бер малайыбыҙ ни эшләптер йығылып китте лә үсекте лә ҡуйҙы. Эй, ултыра урынынан ҡуҙғалмай. Эй, ултыра. "Берәй ерең ауыртты мы?", – тип һорайым. "Юҡ", – тип баш һелкә. Янына яҡын ебәрмәй. Йомошо барҙыр, тип уйланым да балаларҙы ары алып киттем. Әммә теге малайҙың ҡуҙғалырға иҫәбе лә юҡ. Әйҙәләүебеҙгә ыжламай ҙа. Беҙ бара бирәбеҙҙә артҡа ҡайырылып ҡарайбыҙ, бара бирәбеҙ ҙә боролоп ҡарайбыҙ. Бер ваҡыт малайыбыҙ юҡ булды. Эҙләйбеҙ, ҡысҡырабыҙ. Балаларҙы төрлөһөн төрлө яҡҡа таратып эҙләргә ебәрергә ҡурҡам. Тағы береһе юғалып ҡуйыр, тип уйлайым. Бер тирәлә генә уҡмашып, эйәртенешеп йөрөйбөҙ. Малайҙы эҙләй торғас, тура юлыбыҙҙан яҙғанбыҙ. Ә ул малай бик үткер, хатта хәйләкәр булып сыҡҡан — ағаҫка ышыҡланып ҡына боҫоп тора ла, ипләп кенә беҙҙең арттан килә икән. Уның шулай бер тотам да ҡалмай тиерлек беҙҙең эҙҙән юлланғанын бер бала абайлап ҡалмаһа, күпме йөрөр инек — белмәйем. Көндө кисләттек. Был ваҡытта беҙ егерме саҡырымды үтеп, ауылға етергә тейеш инек. Тик Ибрай ауылы янындағы Осло тау ҙа, Ҡабра тау ҙа, мәсет манараһы ла һаман күренмәне. Балалар арыны. Тағы бер тауға артылып еткәйнек, алыҫта берәүҙең шәмгә ут алғаны күренде. "Әйҙәгеҙ, аҙымдарҙы ҡыҙыулатайыҡ, хәҙер барып етәбеҙ. Ибрайҙар шәмдәренә ут ала башланы", – тинем. (*Электр уты 1954 йылдарҙа Иҫәнғолда ғына күренгеләй башлағайны. Эйектә быуа быуылып, ГЭС төҙөлгәйне.*) Балалар дәртләнешеп китте. Бара бирәләр ҙә, ут яҡынаямы, тип һорайҙар. Бара бирәләр ҙә,

һорашалар. Хатта ашарға ла туҡтап торманылар, еткәс, бер юлы ашарбыҙ, тигән булдылар. Әммә ул ут... байып барған ҡояштың яланда ҡалған трактор тәҙрәһенә төшкән сағылышы булып сыҡты. Шул сағылыш шәм уты һымаҡ йылҡылдап күренгән икән. Шәмәхә төҫөндәге шәфәҡ һүрәнләнгәйне — ут та тоноҡланды. Балаларҙың дәрте һүнде. Аяҡтарына таш бауландымы ни, ығышып ҡына атлай башланылар. Беҙ аҙашҡайныҡ. Оло юлдан яҙып, үлән баҫҡан, күптән йөрөлмәгән һүрәпән һуҡмаҡҡа килеп сыҡтыҡ. Аҙашыуҙы пионерҙарға һиҙҙермәҫкә тырышам. Улар араһында Нәсимә һылыуым да бар. Бик нескә күңелле, һиҙгер, аҡыллы булды бәләкәйҙән. Ул миңә һирпелеп кенә ҡарап алды ла – хәүефте һиҙҙе, әммә өндәшмәне. Хатта үҙенең ҡурҡыуын да башҡаларға белдермәҫкә тырышты. Бер аҙҙан шәфәҡ ҡыҙыллығы бөтөнләй көлһыуланғайны — трактор быялаһындағы ут та юғалды. Тирә-яҡ бөләңгерт төҫкә инде. Ут юғалғанын абайлап ҡалған балалар үкереп иларға тотондо. Бөтөнләй атламаҫ булдылар. Күҙҙәрендәге дәрт осҡондары һүнде... Ни эшләргә? Нисек алдаштырырға? Тоҫмаллап килгән ут ялған булып сыҡты. Һылыуым да илап ебәреүҙән саҡ тыйылып тора. Унан башҡа ун ике бала урман яңғыратып илай. Мин түмгәккә баҫтым да ҡыскырып былай тинем:

— Пионерҙар! Һеҙ бит мәктәптә иң алдынғы инегеҙ. Һеҙ бит юлға сығыр алдынан тантаналы ант иттегеҙ. Ни эшләп улай ебеп төштөгөҙ? Әйҙәгеҙ, хәҙер барып етәбеҙ, атлайыҡ! Барып етәйек тә бер юлы ял итербеҙ. Яҡында ғына трактор торғас, тимәк, ауыл да яҡын, тик күренмәй генә. Беҙ бит тауҙан күптән төштөк, ауылды урман ҡаплап тора. Беҙ шәп атланыҡ бит, килеп еткәнбеҙ. Ошо урманды аша сыҡһаҡ — ауыл! — тип юғары һүҙҙәр менән дәртләндерергә тырышам. Ә үҙем, уларға һиҙҙермәй генә, телеграф бағанаһы эҙләйем. Атайым, мине һәр саҡ үҙе менән урманға йөрөткәс, төрлө хәлдәр булырын иҫтә тотоп, юлдан яҙлыҡһаң, телеграф бағанаһы эҙлә, оло юл шунда булыр, тип өйрәтә торғайны.

Балалар өгөт-нәсихәткә лә, алдаштырыуға ла иғтибар итмәйҙәр, бер ҙә генә ыҡҡа килерҙәй түгелдәр. "Ошо ҡараңғы урманда йоҡлайыҡмы хәҙер? Өшөрбөҙ бит. Һис юғы атлайыҡ! Таң атҡансы яйлап ҡына атлап барайыҡ," — тип тә өгөтләп маташам. "Арыныҡ..." — тиҙәр. Теге малайҙы әрләй башланылар. Һәр береһе үҙендәге үпкә-асыуҙы әйтеп ҡалырға тырыша. Малай башта бирешмәҫкә тырышты, аҙаҡ шымтайҙы. Ни эшләргә? Үҙемдең дә күңелемдә тыныслыҡ юғалды. Тамаҡҡа ниндәйҙер ҡаты төйөр килеп тығылды. "Төнгөлөккә ҡалырға тура килһә, ни эшләрбеҙ?" — тигән хәүеф мейене зыулатып алды. "Шырпы алдым", — тигән

уй был хәүефте ҡыуып сығарҙы. Уныһын да атайым өйрәткәйне. "Урманға аслан шырпыһыҙ йөрөмәгеҙ. Йыртҡыс-маҙарҙан ышаныслы ҡорал ул", — ти торғайны. Бүре килеп сыҡһа, ҡурҡытырға усаҡ яғып, төн буйы ултырырбыҙ ҙа, таң атыуға юлға сығырбыҙ, тип уйланым. Күҙ бәйләнер мәл етеп килә. Шулай ҙа яҡты күҙҙә тағы бер тапҡыр телеграф бағанаһы эҙләп ҡарайым да, ҡоро-һары йыя башларбыҙ, тип уйланым. Атайым усаҡ яғырға ла, һүндереп китергә лә, ниндәй ағастың ҡуҙланып, ҡайһыныһының ялпылдап төтөнләп янғанлығын да өйрәтә бара ине. "Исемдәре буйынса хәтереңдә ҡалдырмаһаң, япраҡтарынан айыр. Ҡарағуҫкыл, ауырыраҡ япраҡлы ағастар ҡуҙланып яна. Тик тиҙ тоҡанмай. Бер яндырып алһаң, оҙаҡ яна", — тип өйрәтер ине.

Телеграф бағанаһы ҡарарға тип, ағаҫка үрмәләнем. Аҙ ғына күтәрелгәйнем, яҡында ғына бағана һыны шәйләп ҡалдым.

Йылдар үткәс, ошо ваҡиға иҫкә төшкән һайын, дүртенсе класты тамамлап, бишенсе класҡа ғына күскән бәләкәстәрҙең атай-әсәйҙәрен күҙ алдына килтерәм дә аптырайым. Ун йәшлек балаларҙы ун дүрт йәшлек кыҙ балаға нисек итеп ышанып ебәрмәк кәрәк? Күрәһең, заманаһы ла, кешеләр ҙә тыныс булған, кешенән ҡурҡмағандар. Хәҙер иң ҡурҡынысы – кеше. Тағы бер сәбәп булғандыр, күрәһең. Һуғыш ваҡытында күп ауырлыҡтар ун дүрт-ун алты йәшлек үҫмерҙәр елкәһенә төшә. Ул йәштәгеләр ҡәҙимге ҙур һаналғандар. Беҙ ҙә, һуғыш йылдарында сынығып үҫкән, бик иртә ологулға әйләнгән балаларҙы ҡыуа килә инек. Шуға күрә беҙгә лә шундай үк мөнәсәбәт булғандыр. Кешенең өлгөрөүе йәшенә ҡарамай, күрәһең. Заман, мөхит тәьҫире көслөлөр.

— Пионерҙар! Ана бит юл. Ауыл эргәһенә килеп еткәнбеҙ! – тип ҡыҫҡырып ебәрҙем, үҙем дә ҡыуанысымдан ни эшләргә белмәй. Балалар мин үрмәләгән ағас яныңа йүгерешеп килделәр, сәбәкәйләй башланылар. "Апай, ысынлап та, күренәме? Яҡында ғынамы?" Тауышым ышаныслы сыҡҡандыр — балалар һиҙҙе, ышанды. "Ҡайҙа-ҡайҙа?" – тип ағасты уратып һикерешә-йүгерешәләр. Ҡайҙандыр хәл дә, дәрт тә килеп сыҡты. Беҙ оло юлға төшөп алдыҡ та йырлай-йырлай алға киттек.

"Өмөт шәме", — тип уйлайым хәҙер, балаларҙа дәрт, алға ынтылыш уятҡан был көстө. Ә ул саҡта балаларҙың ҡыланышына ҡарап шул тиклем аптырағайным. Телеграф бағанаһын күреп ҡалғас, мыжыу ҙа, аптырау ҙа, аҙаштырған малайҙы әрләү ҙә әллә ҡайҙа булды. Ул малай башҡаларҙың әрләүенән ҡасып-боҫоп шымтайып ҡына ултыра ине — уны ла әйҙәләп етәкләп алдылар. "Апай, был яҡтанмы, теге яҡтанмы?" – тип, әйберҙәрен йомарлап тотоп һикерешә башланылар. Өмөт, ышаныс уларҙың быуындарын

нығытты, бурбай биҙҙәрен ҡатырҙы, күҙҙәренә осҡондар һирпте.

Өмөт шәме тоҡанды. Өмөт шәме быуындарға көс, йөрәктәргә дәрт бирҙе. Өмөт шәме һүнһә, кеше бөгөлөп төшә. Шуның өсөн кеше күпме йәшәй – шул хәтлем өмөт шәмен һүндермәү сараһын күрергә тейеш. Уны кеше үҙе генә булдыра ала. Өмөт маҡсатҡа бәйле. Ә маҡсаты юғары кешенең өмөтө лә юғарыраҡ була, өмөт шәме лә балҡыбыраҡ яна. Шуның өсөн һәр саҡ юғары маҡсаттар ҡуйып йәшәргә кәрәк. Тик, маҡсаттар тормошҡа ашырҙай булырға тейеш.

Германия менән барған Бөйөк Ватан һуғышының ветерандары менән осрашырға, һөйләшергә тура килде. Әлбиттә, һуғыш тураһында байтаҡ китаптар ҙа уҡылды. Әммә беҙҙең заман әҫәрҙәре совет идеологияһына яраҡлаштырып яҙыла ине, шуның өсөн хатта ветерандар үҙҙәре лә: "Хәҙер яҙырҙар инде ул..." тип кенә ҡуялар ине. Кем менән генә һөйләшмә, минең: "Ә нисек еңдегеҙ һуң?" – тигән аптырау ҡатыш һоҡланып та, ғорурланып та биргән төп һорауыма яуап бер генә ине:

– Еңеп ҡайтырыбыҙға ӨМӨТ. Хаҡлы булыуыбыҙға ЫШАНЫС. Ошо ике төшөнсә нигеҙендә тыуған РУХИ НЫҠЛЫҠ.

Әлбиттә, шулай. Шулай булмаһа, ағас мылтыҡ менән тынкыға ҡаршы йүгерәме һалдат? Күкрәктәре менән амбразура ҡаплаймы? Концлагерҙарҙа ҡоро һөлдә ҡалған тотҡондар баш күтәрәме? Фашист тылында партизандар тупланамы? Тылдағылар һуңғы ҡабым икмәктәрен фронтҡа ебәрәме?

Ә өмөт осҡонон һүҙ ҡабыҙа бит. Шуның өсөн һүҙ көсөнә айырыуса иғтибар ителә. Һине еңергә теләгән дошман иң элек дөрөҫ мәғлүмәттәргә юл бикләргә тырыша. Еңеп алыуҙы күңелгә шөбһә һалыуҙан, рухи ныҡлыҡтың арҡа һөйәге булған өмөттө ҡаҡшатыуҙан башлай.

Был йәһәттән тәбиғәт һүҙгә ғәжәп оло бурыс һалған. Тимәк, кешенең рухи ныҡлығы, кешелек донъяһының йәшәйеше һүҙҙән тора. Шуға ла Тәбиғәтебеҙ кешелек донъяһына сәсәндәр, шағирҙар бүләк иткән. Әммә улар тәбиғәттең тағы бер аҡыллы ҡануны нигеҙендә генә оло маһирлыҡҡа эйә була: халыҡ күңеленә үтеп инеп, һиҫкәндереп ебәрер, һүнеп барған өмөт усағын ҡабыл баҙлатып эйер, күңелдәргә көс-ҡеүәт өҫтәр, тоноҡланған күҙҙәрҙе осҡонландырып ебәрер һүҙҙе сәсәндәр, шағирҙар туған телендә әйтә.

Тимәк, өмөт утын һүндереүҙә йәки баҙлатып ебәреүҙә туған телдә әйтелгән һүҙ, туған теленә булған мөнәсәбәт ғәжәп көскә эйә.

Туған телебеҙ – күңел нурыбыҙ

Уҙған быуаттың алтмышынсы йылдарынан башлап илебеҙҙә бер телгә күсереү, совет халҡы тигән бер халыҡҡа уҡмаштырыу сәйәсәте алып барылыуы бер кемгә лә сер түгел. Бөтөн халыҡтар ҙа "үҙ теләктәре менән күсәсәк" телдең йәғни фәҡәт рус теленең генә өҫтөнлөгө төрлө юлдар, саралар менән даими рәүештә зиһенгә һеңдерелә торҙо. Билдәле, рус теле – илебеҙҙә генә түгел, донъя кимәлендә киң таралған абруйлы тел. Рәсәйҙәге бөтөн аҙ һанлы халыҡтар ҙа рус теле аша киң донъяға юл ала, донъя әҙәбиәте менән таныша, донъялағы фәнни ҡаҙаныштар менән файҙалана ала. Быны бер кем дә инҡар итмәй. Әммә рус телен һәм башҡа сит телдәрҙе өйрәнеү ни өсөн туған тел иҫәбенә алып барылырға тейеш һәм ни өсөн туған телдә уҡытыу мәктәптәрендә түгел, ә рус телендә уҡытыу өҫтөнөрәк, ә туған тел "артыҡ йөк","артыҡ мәшәҡәт" һанала? Был аяныслы хәл туған телдең тәбиғәттән һалынған ҡиммәтен, функцияһын, бурысын аңламауҙан (*йәки аңлап та аңлатырға теләмәүҙән, дөрөҫөрәге аңлы рәүештә башты бутауҙан*) килә, әлбиттә.

Нимә һуң ул һәр милләт өсөн туған тел?

Күптәребеҙ ул хаҡта уйламай ҙа, уйланмай ҙа. Зиһенебеҙгә бер генә фекер тылҡып һеңдерелгән: туған тел артыҡ мәшәҡәт, балаға өҫтәмә йөк, уның кәрәге ауылың ҡапҡаһына тиклем генә. Ә бит уйланырға кәрәк: улай булғас, ни өсөн тәбиғәт һәр милләткә туған тел бүләк иткән?

Туған телдең әһәмиәтенә, тәбиғәттән һалынған «бурысына» ентекләберәк күҙ һалып, үҙең төшөнөп, башҡаларға төшөндөрөп бирһәк, һәр беребеҙ балабыҙҙы күрә-баға манҡортлоҡҡа этәреүҙән, күңел нурынан яҙҙырыуҙан алыҫлаша барыр инек. Ул саҡта һәр атай-әсәй балаһы тыуыр алдан уҡ үҙ туған телен, халҡы традицияларын белмәгән кешенән дә наҙаныраҡ, үҙ халҡына юғарынан ҡарап түбәнһетеп маташҡан кешенән дә дорфараҡ кеше булмай; туған теленән яҙған кеше төп йәшәү маҡсатының арҡа һөйәген ҡаҡшата, тигән хәҡиҡәтте зиһененә һеңдереп ҡуйыр ине.

Туған тел аралашыу телдәренән икенсе төрлө өндәр йыйылмаһы менән генә айырылып торамы, әллә башҡа төрлө үҙенсәлеге лә бармы? Ни өсөн һәр милләт, милләттең алдынғы

ҡарашлы зыялылары туған телдәренә мөкиббән китеп һаҡларға тырыша? Туған телде һаҡларға кәрәк, тигән аң, фекер ҡайҙан килә уларға? Тәбиғәттәнме? Тормош талабынанмы?

Билдәле, кешелек донъяһында халыҡты, төрлө-төрлө милләттәрҙе беҙ аңлап етмәгән һәм серенә төшөнөп бөтмәгән Тәбиғәт, Юғары көс – Тәңре бар иткән. Беҙ тәбиғәт серҙәренә төшөнөп етмәһәк тә ишетә, күрә, тәмләп ҡарай, тоя, һоҡлана, ғәжәпләнә, асыулана, ярһый, ҡайғыра алабыҙ. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы берҙәребеҙ тәбиғәт серҙәре хаҡында ла уйланабыҙ. Ни өсөн бер үк шарттарҙа төрлө ағастар үҫә, ни өсөн бер үк яланда күҙ яуын алып ултырған меңәр төҫтә сәскәләр шытып сыға, ни өсөн төрлө ҡоштар бар ителгән дә, улар төрлөсә һайрай, ни өсөн һәр береһенең үҙ тәғәйенләнеше булған тиҫтәләрсә мең бөжәктәр һәм башҡа йән эйәләре йәшәй? Һәм, ниһайәт, рәүештәре, ағзалары менән бер үк булып, барыһы ла КЕШЕ тип аталған, әммә үҙ теле, үҙ моңо, үҙ йола-ғәҙәте, фәҡәт үҙенә генә хас традициялары менән йәшәгән кешеләр берлеге булған бихисап милләттәр бар ителгән был донъяға? Ни өсөн бөтөн кешелек донъяһы бер телдә генә аралашып, бер иш моңдан ғына күңел ялы алып йәшәмәй? Ни өсөн Тәбиғәт шул тиклем төрлө милләттәр бар иткән дә, уларҙы йәшәтеү, һаҡлау, ҡурсалау саралары күргән? Әйтеп үтеүебеҙсә, туған тел, үҙенсә моң, традиция, ғөрөф-ғәҙәт, бейеү, хатта тышҡы ҡиәфәт, эске булмыш, холоҡ-фиғел төрлөлөгө – милләтте ҡурсалау саралары бит. Ошондай бихисап һорауҙар яуапһыҙ ҡала, әммә бер һорауға яуап һәр ваҡыт әҙер: кеше тәбиғәт ҡанундарын боҙорға тейеш түгел. Тәбиғәт ҡанундарынан тайпылыу төҙәтә алмаҫлыҡ хаталарға, хатта һәләкәткә килтерә. Шуның өсөн тәбиғәт ҡанундарына үтә әүҙем һәм ҡыйыу ҡыҫылырға, уны үҙгәртергә тырышырға ярамай. Был хаҡта аҡыл эйәләре борон-боронда иҫкәртә килә. Ә ҡайһы бер ғалимдарҙың тәбиғәт ҡанундарын үҙгәртергә тырышып үткәргән тәжрибәләренең тормошҡа яраҡһыҙлығы йылдар үтеү менән асыҡлана. (*Яһалма йән эйәһе барлыҡҡа килтереү, йылғаларҙы киреҫә боро маташыу һ.б.*)

Тәбиғәттең беҙ аңлап етмәҫ серҙәренең береһе – туған тел. Тел – кешелек донъяһы яратылғандан бирле иң ябай ауаздарҙан камиллаша, быуаттар һуҙымында шымара, нәҫелдән нәҫелгә күсә килгән иң ҡиммәтле хазина. Һәр милләт үҙ халҡының ижад емеше булған ошо хазинанан файҙалана, ошо телдә аралаша, уй-фекер йөрөтә. Туған телгә халыҡтың фәлсәфәһе, донъяны танып-белеүе, уй-тойғолары, хатта холоҡ-фиғеле һалынған. Туған телдә тойғолар сағылдырыла, ошо телдә моң ярала, башҡа йән эйәләренең ауазда-

рын да, ҡош һайрауҙарын да һәр милләт үҙ теленә яраҡлаштырып ишетә, тәбиғәт күренештәрендәге атамаларҙа ла үҙенең эске булмышын сағылдыра. Әсә ҡарынындағы сабый булмышына, күңеленә лә кисерештәр әсә теле аша уйыла бара. Туған тел ошо рәүешле ҡан (*ген*), күңел, эске булмыш аша быуаттар һуҙымында дауам итә. Ул ғына ла түгел, әсә теле кешенең тойғо "ағзаһына" әйләнә. Башҡа ағзаларҙан ул күҙгә күренмәүе, тотоп ҡарап булмауы, йәғни физик матдә булмауы менән айырыла. Ә шулай ҙа мейе күҙәнәктәрендә ныҡлы урынын биләй. Шуныһы иғтибарға лайыҡлы – тәбиғәт туған телде һаҡлау сараһы итеп тағы бер һәләт биргән кешегә – ул мейенең бик күп телдәр өйрәнеүгә һәләте. Кеше зиһене ул яҡтан ғәжәп һәләткә эйә. Әйҙә, теләһәң күпме тел өйрән, донъя халыҡтары менән теләгәнсә аралаш, тик туған телең иҫәбенә булмаһын. Сөнки бар башҡа телдәр – аралашыу ҡоралы, ә туған тел – һинең тыумыштан ҡаныңа һеңгән, мейе күҙәнәктәрендә ныҡлы урыны булған ағзаң. Ул ғына ла түгел, туған тел – быуындарҙы быуындарға бәйләп торор ҡөҙрәт.

Халыҡ тигән төшөнсә – ул бөгөнгө көндә йәшәгән кешеләр генә түгел. Халыҡ – ул үткән быуын рухы, бөгөнгөнөң һынланышы, киләсәктең нурланышы. Халыҡ тигән бөйөк көстө бәйләп тоткан ҡөҙрәт – уның туған теле. Теленән яҙмаған һәр кеше ошо бөйөк көстән рухланып, илһам алып йәшәй. Ә туған теленән айырылған кеше халҡынан да айырыла, тамырһыҙ ҡамғаҡҡа әйләнә, сөнки ул, туған телен белмәгәнлектән, өлкәндәр менән, йәғни олатайҙары, өләсәйҙәре, аҡһаҡаллы аҡыл эйәләре, ағинәйҙәр менән аралаша алмай, быуындар бәйләнеше өҙөлә, шәжәрәңдә нәҫел ботаҡтары ҡорой башлай. Аралашыу ярым-ярты ғына көйө атаһы менән әсәһе быуынынан ары китмәй. Ә үткәндәрҙән көс-ҡеүәт ала алмағас, артабанғы быуынында ла дауам итмәй. Үҙ тамырыңдан айырылыу – йәшәйеш нигеҙен ҡаҡшата, рухи һут алыу сығанағын юҡҡа сығара.

Тел аша үткәндәрҙән, боронғонан ни алабыҙ һуң?

Ябай ғына бер миҫал. Һуңғы йылдарҙа ҡытай фэн-шуйы киң таралды. Фэн-шуй – ул, фәнгә нигеҙләнеп, профессиональ кимәлдә ҡалыпҡа һалынған халыҡ ғилеме. Был ғилем нигеҙендә йәшәйеш-көнкүреш уңайлыҡтары өйрәтелә. Ә башҡорттоң ошоға оҡшаш үҙ ғилеме булмағанмы ни? Ул меңәр йыллыҡ йәшәйеш дауамында үҙ көнкүрешен үҙе ҡормағанмы, үҙ уңайлыҡтарын үҙе булдырмағанмы? Әллә меңәр йыл элек үк ҡытай ғилеменән аҡыл алғанмы? Ни өсөн һуң беҙ башҡорт ғилемен өйрәнмәйбеҙ, донъя кимәленә күтәрмәйбеҙ? Нисәмә быуаттар буйы телдән-телгә күсә

килгән бөйөк "Урал батыр" эпосы тәржемә ителеп донъя кимәленә сығарылғас, уның фәлсәфәһе башҡа халыҡтарҙа һоҡланыу уятты. Ә эпоста төрлө ғилем тармаҡтары буйынса фекер байтаҡ. Ғөмүмән, халҡыбыҙ ижадында кинәйәләп тел төбө менән әйтелгән фекерҙәр иҫ китмәле. Уларҙы тәржемәлә тулыһынса биреп бөтөрөп булмай. Уның өсөн тәржемәсенең телде белеүе генә түгел, тойоуы мөһим. Халыҡтың тәрән фәлсәфәүи фекеренә төшөнөр өсөн, уның телен, теле аша күңелен, күңел байлығы аша ижад фәлсәфәһен, фекерләү әрәсәһен белеү мотлаҡ. Туған телен белгән ғалимдарыбыҙ Дамир Вәлиев менән Фәнзил Санъяровтар "Урал батыр" эпосының фәлсәфәһен, әхләҡи, тәрбиәүи ҡанундарын тикшереп байтаҡ ҡиммәтле асыштар яһаны. Ҡаҙаҡ академигы К. И. Сатпаевтың "Урал батыр" тураһында әйткән фекерен килтереп китеү ҙә урынлы булыр: "Башҡорт легендаһында Урал батыр үҙ ирке менән үлемһеҙлектән баш тартҡандан һуң, уның һөйәктәре аҫыл хазиналарға һәм алтынға, ә ҡаны ер майына – нефткә әйләнә тип әйтелә. Был, ерҙең үҙе кеүек үк, бик боронғо легенда. Башҡорт халҡы уны күп быуаттар элек, фән нефтте Көньяҡ Урал тирәһендә асҡанға тиклем үк, ижад иткән. Ошонан һуң фольклор әҫәрҙәрендә халыҡ аҡылы һәм халыҡтың тормош ысынбарлығы хаҡында ҡарашы ятҡанлығын кем кире ҡағыр?"

Ғалим-геолог Диҡҡәт Бураҡаев, әйтергә кәрәк, үҙ халҡының телен ғәжәп һәйбәт белгән һәм ижадына ғашиҡ булған кеше, былай тип яҙа: "Урал батыр" эпосында фәнни яҡтан дөрөҫ фекерҙәр байтаҡ. Мәҫәлән, хәҙерге Урал тауҙары ятҡан ерҙә элек диңгеҙ булған, тип әйтелә. Был һүҙҙәрҙе әйтеү өсөн ниндәйҙер дәрәжәлә геолог булырға, тауҙарҙа осраған диңгеҙ ҡабырсаҡтарын күреп танырға кәрәк. Күп кенә тауҙар урынында әүәле диңгеҙ булғанлығын ике бөйөк ғалим – Урта Азия энциклопедистары Әбүғалисина менән Бируни әйтә. Ә бит башҡорт эпосы күпкә алданыраҡ ижад ителә".

Башҡорт халыҡ ижады быға са, фольклор әҫәре булараҡ, бик ентекле өйрәнелде. Бының менән фольклорсы ғалимдарыбыҙ киләсәк быуындарға рухи һәйкәл ҡорҙо. Артабан ошо ҡиммәтле мираҫтағы ғилем сағылыштары тикшерелһә, шул уҡ ҡытай фән-шуйы һымаҡ системаға килтерелеп, фәнни нигеҙгә ҡоролһа, ни тиклем мәртәбәле хеҙмәт булыр ине. Ҡот, Ҡотло урын, Ҡотло өй, Өй ҡотлау, Байрам менән ҡотлау, Ҡот ҡайтарыу, Ҡотло йәшәү рәүеше... Ғалимдарыбыҙ был йәһәттән һис кенә лә әүҙемлек күрһәтмәй. Йырҙарыбыҙ үҙенсәлеген, кейемдәребеҙ төрлөлөгөн, аш-һыуыбыҙҙы һаман башҡа милләт вәкилдәренән кемдәрҙер

тикшерә, ярты-йорто һығымта яһап, хеҙмәт яҙа, ғилми дәрәжәләргә эйә була, тик үҙебеҙ түгел. Аш-һыуыбыҙҙы ғына алғанда ла... Кем тикшергән, кем файҙаһы, шифаһы хаҡында фекер әйткән? Ярай, туған телен яҡшы белгән врачыбыҙ Вәрис Ғүмәров бер аҙ тикшеренеү үткәрҙе. Ә бит ҡымыҙ менән бал да йылҡы ите генә түгел шифалы ризыҡтарыбыҙ. Буҙа, талҡан, ҡорот, ҡаҡ, ҡыҙыл эремсек, эркет һыуы, һоло кеҫәле, күбекмай, айран – уларҙың дауалау сифаты иҫ китмәле бит. Туған теленә, традицияһына битараф быуын ғалимдары халыҡҡа һаман сит-ят ғилем аҡылын һеңдереп маташа.

Шулай итеп, баланы туған телдән мәхрүм итеп йәки ярты-йорто телгә генә ҡалдырып, халҡыбыҙҙың ғилеменән дә, тәрбиә ҡанундарынан да ситләштерәбеҙ. Һәм,был хатта иң мөһимелер ҙә – сит-ят ғилемгә табындырып, үҙебеҙҙең бер ни ҙә булмаған, тигән фекер һалып, рухын ҡаҡшатабыҙ. "Минең милләтем башҡаларҙан кәм", – тигән тойғо шәхси кәмселектән кәмһенеүҙән нығыраҡ ҡаҡшата рухты.

Ә төптән уйлап ҡараһаң, тәрбиә буйынса фәлсәфәһе, йәшәү маҡсаты ғәжәп бит башҡорттоң. Бер генә миҫал. Төп маҡсат итеп ЯҠШЫ КЕШЕ тәрбиәләү бурысы ҡуя башҡорт. Ниндәй кешенең Яҡшы кеше исеме алыуы хаҡында ла әйтеп бирә. Ә тел белмәгән балаларыбыҙ Яҡшы кеше булып үҫеү, үҙтәрбиә нигеҙҙәре, йәшәү йүнәлеше күрһәтелгән, ололар аҡылын үҙ эсенә алған күпме ижадыбыҙҙан мәхрүм ҡала. Шунлыҡтан, улар ят йолалар, ят ғәҙәттәр, халҡыбыҙға бөтөнләй хас булмаған, хатта үҙ әҙәбебеҙгә зыянлы йолалар үҙләштерәләр.

Балаларыбыҙҙы, үҙебеҙҙең киләсәгебеҙҙе туған телдән айырып, халыҡ аҡылынан, тотош бер хазинанан, күңел байлығынан ситләштереүебеҙҙе аңлаһаҡ ине.

Ошо урында бер һорау тыуыуы ихтимал. Ни өсөн башҡорт мәктәптәрен тамамлаусылар атҡармай бындай бурысты? Беренсенән, таҙа башҡортса уҡыу юҡ, байтаҡ фәндәр рус телендә алып барыла. Икенсенән, мәктәптәрҙә халыҡ ижады фольклор әҫәре булараҡ ҡына өйрәнелә, ғилми фекерҙәренә иғтибар ителмәй. Ә шулай ҙа бөгөнгө көндә башҡорт ғилеме, башҡорт сәнғәте, әҙәбиәте өлкәһендә эшләүселәрҙең барыһы ла тиерлек заманында урта мәктәптәрҙә туған телдә уҡып, башҡорт мәктәбен тамамлаусылар.

Ҡыҫҡһы: туған телебеҙҙе белмәү арҡаһында беҙ донъя кимәленә күтәрерлек ғилемебеҙҙе өйрәнә алмайбыҙ. Шуға күрә башҡа халыҡтарҙыҡына иҫебеҙ китеп, уларҙан өйрәнергә мәжбүрбеҙ.

Башҡорт халҡы һис тә наҙан булмаған. Меңәр йылдар буйы үҙ донъяһын үҙе көткән, үҙ малын үҙе баҡҡан, үҙ ауырыуын үҙе дауалаған, үҙ ризығын үҙе булдырған, үҙ өҫ-башын үҙе бөтәйткән, буяуын да, дарыһын да яһаған, булатын да ҡойған, тимерен дә иреткән халҡыбыҙ өсөн ихлас ғорурланырға һәм уның ғилемен өйрәнмәгән, һанға һуҡмаған өсөн әсенергә генә кәрәк.

Милләт төрлөлөгө – нур төрлөлөгө

Милләттәрҙең төрлө булыуы – күңелдәргә илһам биреп, наҙлап-иркәләп үҫкән сәскәләр баҙыҡлығы һымаҡ. Бәпембәләр генә ҡаплап алған аҡландарға оҙаҡ-оҙаҡ һоҡланып булмай. Күҙ тала, күңел ялҡа. Милләттәрҙең тел моңонан, йыр моңонан күҙгә күренмәгән бихисап нур таралалыр йыһанға. Йыһан бәлки ошо моң төрлөлөгөнән илһам алалыр. Был – тәбиғәттең мәңге асылмаҫ сере. Ул хаҡта фараз итеп кенә була. Әммә, шулай шул, тип раҫлап әйтеп булмаһа ла күҙәтеүҙәр был фекерҙең дөрөҫлөгөн иҫбат иткәндәй. Иғтибар итегеҙ: моң һаҡланған ауыл тирәһендә ҡоштар ҙа һуҙып-һуҙып матур итеп һайрай, сәскәләр ҙә төрлөрәк, сағыуыраҡ, хатта ағастарҙың йәшел япраҡтарында ла айырма бар. Кешеләрҙең күңел байлығы менән тәбиғәт күркәмлеге араһында тығыҙ бәйләнеш барлығы билдәле. Әммә тәбиғәт матурлығының кеше күңеленә тәьҫир иткәнлеге ап-асыҡ булһа ла, кешенең күңел байлығының тел моңо, йыр моңо аша тәбиғәткә тәьҫире тураһында уйланырлыҡ, хатта өйрәнерлек нигеҙ бар. Бихисап моң төрлөлөгөнән һирпелгән күҙгә күренмәҫ ҡеүәт Кешелек донъяһына йәшәү көсө өҫтәйҙер, бәлки. Юғиһә, тәбиғәт милләттәр төрлөлөгөн, телдәр төрлөлөгөн ҡурсалау өсөн һәр төрлө саралар күрмәҫ ине. Кешелек донъяһы барлыҡҡа килгәндән алып кемдәр генә тыумаған да, кемдәр генә фани донъя менән хушлашмаған. Кемдәр генә был донъя менән тотош хакимлыҡ итергә, фәҡәт үҙ теленда генә һөйләштерергә ынтылмаған. Көс тә ҡулланған, хәйлә лә ҡороп маташҡан. Әммә телдәр йәшәй. Үҙгәрештәр кисерә, әммә йәшәй. Үҙенсәлекле милли моң йәшәй, милли бейеү хәрәкәттәре йәшәй. Һәм тәбиғәт милләттәргә ижадсылар бүләк итә һәм ысын ижадсылар фәҡәт үҙ теленда ижад итә, халҡы күңеленә туған тел аша ғына юл таба.

Баланы туған тел донъяһына алып инеү – уны халҡыбыҙҙың ижадына – күңел даръяһына сумдырыу ул. Туған телдә һөйләшмәү ошо байлыҡтан мәхрүм ителеү. Рухи зәғифлек, күңел ярлылығы

ул. Туған телдә ярым-йорто телдә аралашыу ҙа тел һутын, тел моңон татыуҙан мәхрүм итә. Һутһыҙ тел ижад сараһы була алмай. Милли телде бөтөрөргә ынтылыусылар (*ниндәй маҡсатты күҙҙә тотоуҙары билдәле*) был хәҡиҡәтте күптән белеп, оҫта файҙаланғандар. Туған телдә уҡытыуҙы тыйып, унан мәхрүм ителгән төбәктәр ысын ижадсы бирә алмай. Ырымбур, Силәбе, Ҡурған яҡтарынанда башҡорт телендә уҡытыу сикләнгәс, таланттар ағымы туҡталды. Бай, һутлы тел менән һөйләүсе телмәре моңло йырға ләззәтләнеү, ойотоп бейеп китеүгә һоҡланыу, күңелдәрҙе иләҫләндереп ебәрер шиғыр тыңлау кеүек тәьҫир итә. Ары-бире генә итеп, телдәр ҡатнаштырып һөйләшеү һуты һығып сығарылған емеш кеүек. Уны ашағы килмәй. Ә инде бай, йөкмәткеле, мәҡәлле-әйтемле, тос фекерле туған тел менән һөйләшкән кешенең күҙҙәрендә лә нур балҡып тора. Моңло тауышлы йырсыларҙыҡы һымаҡ була ундайҙарҙың ҡарашы. Иғтибар итегеҙ: туған телдә һөйләшмәгәндәрҙең ҡарашында ундай нур балҡымай. Күҙ – күңел көҙгөһө. Тимәк, күңелдәрендә лә нур булмай ундайҙарҙың. Мин, мәҫәлән, баланың ҡарашынан уҡ туған телдә һөйләшәме-юҡмы икәнлеген айыра алам.

Туған тел – милләтте ҡурсалаусы төп сара

Милләтте милләт итеп тотоусы төп сара – ул тел. Тел аша һеңгән моң, ғөрөф-ғәҙәт, йола.

Меңәр йылдар буйы быуындан-быуынға күсә килгән йола-ғәҙәт, холоҡ-фиғел, йәшәгән төбәктең тәбиғи шарттарының үҙенсәлеге, тарихи шарттар, мөхит кеше булмышында, тимәк, ҡанында шул тиклем нығына, ул ҡан хәтеренә әйләнә. Был – тәбиғәт ҡануны. Ҡан хәтерен бутауҙың ниндәй тайпылыштарға килтереүен күҙ алдына ла килтермәйбеҙ әле. Ябай ғына миҫал. Медиктарҙың фекеренсә, бер үк шарттарҙа йәшәгән, бер үк аҙыҡ менән туҡланған кешеләр шул шарттарға ҡулайлаша, һәр төрлө сирҙәргә ҡаршы тороу, сирҙе еңеү һәләте ошо шарттар нигеҙендә барлыҡҡа килә. Был уларҙың нәҫелендә лә дауам итә. Икенсе шарттарҙа йәшәгән халыҡ вәкиленең дә шулай уҡ. Әммә ошо ике төрлө ҡан ҡушылдымы – уларҙан тыуған баланың иң ябай сирҙәргә лә ҡаршы тороу һәләте кәмей. Бындай хәлдәрҙе ябай күҙәтеүҙәрҙән сығып та тә, ниндәйҙер һығымталар яһап аңлатып та була. Бөтөнләй икенсе континент кешеһе менән ғаилә ҡорған ватандаштарыбыҙ балаларының ауы-

рыу сәбәбен белә алмай, әле бер илгә, әле икенсеһенә алып барып йәшәтеп ҡарайҙар. Ә күңел донъяһындағы үҙгәрештәрҙе ҡайһылайтып күҙәтерһең дә, ниндәй дәлилдәр килтереп аңлатырһың. Күҙәтә лә алмайбыҙ, төҙәтә лә белмәйбеҙ. Был осраҡта беҙ юлдан яҙҙырыусы, тәбиғәт ҡанундарын иҫәпкә алмайынса юлдан тайпылдырыусы ғынабыҙ. Ике яҡ тамырынан да айырылған, туған тел тигән төшөнсәне юғалтҡан, тарихи хәтере, ҡан хәтере ҡаҡшаған баланың күңел ауырыуына бирешеүе бик тә ихтимал, сөнки ундағы ҡан хәтере аҙашасаҡ, аптыранасаҡ. Ҡан аҙаштырыу – тәбиғәт ҡанундарын тупаҫ боҙоу ул. Тәбиғәт (*Хоҙай*) кешеләрҙе ошо аҙашыуҙан ҡурсалау өсөн туған тел бар иткән. Иң тәрән, наҙлы хистәр туған телдә әйтелгәндә генә йөрәккә яҡын була. Ғаилә шундай наҙ, шундай яҡынлыҡ нигеҙендә яралырға тейештер ҙә инде. Бала хаҡына, халыҡ киләсәге хаҡына, кешелек донъяһының күркәм дауам итеүе хаҡына…

Туған теленән айырылған баланың үҙ мөхите булмай, күңел һыйыныр, йыуаныр туған халҡынан да мәхрүм була, ят мөхит тә үҙенеке итеп ҡабул итмәй. Ундайҙарға кем менән ғаилә ҡорһа ла барыбер. Әммә ни яғы менәндер арбап алған бындай мөхәббәт ялҡыны ваҡытлыса ғына йыуаныс. Аҙаҡ бындай ахмаҡлыҡ тәрән әрнеү, үкенеү тойғолары менән алмашына һәм кеше йән ғазабы кисерә башлай. Ундайҙарҙан ғазаплы йән ҡала. Йән ғазабын "тамуҡ" тимәйҙәрме икән?

Аралашыу телдәре

Аралашыу телдәренән беҙгә иң яҡыны, хатта "икенсе туған тел" һымаҡ яҡшы белгән, үҙ иткән тел – рус теле. Әммә ни тиклем генә яҡшы белһәк тә, яҡын булһа ла – ул "ҡан" телебеҙ түгел. Ул – аралашыу теле. Әлбиттә, рус теле юғары уҡыу йорттарында белем алыу, ғилем эстәү, донъя кимәленә сығыу теле. Хатта был аралашыу телен төп белем алыу теленә ҡалдырырға маташыусылар ҙа юҡ түгел.

Рус телен беҙ, ысынлап та, яҡшы беләбеҙ, грамоталы яҙабыҙ һәм һөйләшәбеҙ. Рус теле аша донъя әҙәбиәте, мәҙәниәте менән танышабыҙ. Үҙебеҙҙең рухи байлығыбыҙҙы ла башҡа халыҡтарға рус теле аша таныта бы ҙ. Рәсәй иленда генә түгел, республикабыҙҙа ла рус мөхитенән айырым йәшәүҙе күҙ алдына ла килтермәйбеҙ. Был бәйләнешебеҙ боронда н килә. Күп кенә ауылдарҙа аралашыу шул тиклем көслө, хатта рустар үҙҙәре лә башҡорт телендә

һөйләшә. Элек-электән башҡорттар менән күрше ауыл рустары бергә уйындар үткәргәндәр, "знакумдар" булдырғандар. Рус тарихсылары, сәйәхәтселәре, яҙыусылары, башҡорт халҡының ижадын өйрәнеп, беҙҙең көндәргә тиклем һаҡлап, сағыштырғыһыҙ ҙур эш башҡарғандар.

Әммә үҙ туған теле булған башҡортҡа рус телен төп белем алыу теле итеп ҡалдырыу дөрөҫмө? Донъяны танып-белеүҙә төп ҡорал булған туған телде инҡар итеп, донъяуи мәғлүмәттәрҙе зиһенгә аралашыу телендә һалыу тәбиғәт ҡанундарына ҡаршы килмәйме? Бала ҡош-ҡорт, ер-һыу атамаларын, йорт хайуандарын, үҫемлек, сәскә, йондоҙ һәм башҡа күк есемдәренең исемдәрен үҙ туған телендә өйрәнмәһә, халҡыбыҙ хазинаһы булған ижадынан, мәҡәл-әйтемдәренән, һынамыштарынан файҙалана алырмы? Ярым-йорто туған тел күңел дауаһы була алырмы? Туған тел ярлылығы күңелдәрен тоноҡландырмаҫмы? Күңел нуры балҡытмаған күҙҙәрҙә битарафлыҡ урын алмаҫмы?

Ҡабатлап әйтергә кәрәк, тәбиғәт тап ошондай тайпылышҡа юл ҡуймаҫ өсөн кеше мейеһенә иҫ китмәле һәләт биргән. Кеше зиһене тиҫтәләрсә телдәрҙе өйрәнеү, биш-алты телдә иркен һөйләшә алыу һәләтенә эйә. Тәбиғәттең бындай һәләтте туған телде ҡурсалау өсөн бар иткәнлеге ап-асыҡ. Тик был ҡанундан тайпылмаҫҡа ғына кәрәк. Барыһы ла үҙебеҙҙән тора. Ниндәй замандарҙа, ниндәй шарттарҙа һаҡланып ҡалған бөйөк телебеҙ бит ул беҙҙең.

Донъяла ҡайһы ғына илде, ниндәй генә ҡоролошло йәмғиәтте алма, уның төп йөҙө, булмышы шул илдең халҡында сағыла. Ә ул халыҡтың, айырым-айырым һәр кешенең, төп тәрбиәсеһе – ғаилә. Тимәк, һәр йәмғиәттең төп тәрбиәсеһе – ғаилә. Ә ғаиләлә бала күңеленә ниндәй орлоҡ һалынырға, ниндәй йүнәлеш бирелергә, ниндәй ҡиммәттәргә айырым иғтибар бүленергә тейеш?

Иң ышаныслы, ныҡлы нигеҙ

Һәр атай һәм әсәй балаһына өс төп ҡиммәтте, өс мөҡәддәс бурысты аңлатырға тейеш:

– **тәбиғәт алдында:** атай-олатайҙарҙан ҡалған тәбиғәт байлығын һаҡлау, ишәйтеү,

– **кешелек донъяһы алдында:** үҙеңдән һуң тағы ла аҡыллыраҡ, белемлерәк, сәләмәтерәк, камилыраҡ нәҫел ҡалдырыу.

– **милләтең алдында:** быуындан-быуынға, быуаттан-быуатҡа күсә килгән традицияларҙы һаҡлау һәм үҙ балаларында дауам итеү.

Был төшөнсәләр лозунг рәүешендә әйтелгән яңғырауыҡлы һүҙҙәр түгел, ә балаға даими рәүештә тамсылап һеңдерелә торған төп ҡиммәттәр. Улар ҡан (*ген*) аша бирелгән холоҡ-фиғел, һәләт кеүек сифаттар ҙа түгел, ә фәҡәт тәрбиә менән бирелә торған тәбиғи бурыстар. Бала күңеленә, фиғеленә ошо төп ҡиммәттәр һалынмаһа, артабан ниндәй генә юғары сифаттарға эйә булмаһын, уны тулы ҡанлы камил кеше тип әйтеп булмай. Был ҡиммәтәрҙең буш урынын икенсе маҡсаттар тулыландыра бара. Әле һүҙ юлдан тайпылтыусы насар сифаттар тураһында түгел, ә сәләмәт тәрбиә бирелгән, әммә төп ошо ҡиммәттәрҙән мәхрүм ителгән йәштәр тураһында барасаҡ.

Бөгөн китап кәштәләрендә камил кеше булыу тураһында һәр төрлө әҙәбиәт быуа быуырлыҡ. Ниндәй генә аҡыл бирелмәй уларҙа. Әммә, бигерәк тә Америка авторҙарының хеҙмәттәрендә, нигеҙҙә, бер фекер ярылып ята – нисек итеп байырға. Беҙҙең илебеҙҙә *лә* төп тәрбиә эше шул яҡҡа ауыша бара. Әммә әлегә шуныһы ҡыуаныслы – күпселек атай-әсәйҙәр балаларына юғары белем биреүҙе алғы планға ҡуя. Яҡшы, әлбиттә, бик яҡшы. Әммә, беренсенән, был яҡшы ниәтте тормошҡа ашырыуҙа күп осраҡта баланың нимәгә һәләте барлығы иҫәпкә алынмай. Икенсенән, тағы ла аяныслырағы – күпселек атай-әсәйҙәр балаға юғары белем биреүҙең иң тәүге баҫҡысын – фәҡәт бер телдә, рус теленда һөйләштереүҙә генә икән тип уйлай. Йәнәһе, баланың мейеһен артыҡ тел менән ҡатырмайҙар, ә бер тел аша бер йүнәлештә генә эшләтәләр.

Физик яҡтан камил, күп телдәр белгән, белемле, әммә туған теленән яҙҙырылған күпме йәштәребеҙ сит илдәрҙә олтан булып йәшәй бөгөнгө көндә. Олтанлыҡ – ул иң түбән эш хаҡына, башҡалар башҡармаған әшәке эш эшләү икән, тип уйларға ярамай. Олтанлыҡ – ул сит илдә кем генә булып, ҡайҙа ғына эшләмә – һин кемгәлер хеҙмәт итәһең, кемдеңдер олтаныһың, тигән һүҙ. Ус тултырып аҡса тотоп, ҡиммәтле машиналарҙа елдереп, батша һарайы һымаҡ йорттарҙа бикләнеп йәшә, ә иң яҡындарың менән телефон аша ғына аралаш, туғандарың менән бер ултырып һөйләшеүгә зар-интизар бул, күп осраҡта атай-әсәйеңде һуңғы юлға оҙатырға ла ҡайта алма, хатта үҙебеҙ өсөн икенсе туған тел кеүек үк яҡын аралашыу телебеҙ рус теленда лә рәхәтләнеп һөйләшә алма, балаларыңды сит ил ҡиммәттәре нигеҙендә тәрбиәләп, фәҡәт сит телдә генә һөйләштер, олатай-өләсәй һөйөүен татымай, ул тойғоноң ни икәнен дә аңламаған, ят бауырға әйләнгән нәҫел ҡалдыр, фәҡәт аҡса өсөн кемгәлер хеҙмәт ит – ошо

түгелме олтанлыҡ! Ҡырҡ йәштәрҙе үткәс, кешелә үҙәк өҙөрлөк яңы тойғо башлана – ул һағыныу тойғоһо. Һәр кеше кисерә торған тәбиғи осор был. Тыуған илендә йәшәгәндәр был осорҙо еңелерәк, хатта һиҙмәй ҙә үткәрә, сит илдәгеләрҙә мәңге уңалмаҫ яра һала. Барыһын да күтәрә һуғып ҡайтып китә алмай – балаларының тыуған иле, балаларын ҡалдырып ҡайта алмай – улары үҙаллы йәшәп китерлек йәштә булмай... Интернет аша ватандаштарына һағышлы, үкенесле сәләмдәр ебәреп ятыуҙан башҡа сара ҡалмай. Үрҙә әйтелгән өс төп бурыстың, исмаһам, береһен үтәй алмау уның үҙәген өҙә. Фәнни яҡтан нығлап өйрәнелмәгән, әммә барыбыҙ өсөн дә таныш етенсе ете йыллыҡ йәше (*42-49 йәштәр*) – кеше ғүмеренең тойғолар өҫтөнлөк иткән, уйланыу осоро. Ошо йәшеңдә киләсәк алдында йөҙөң ҡыҙармаҫлыҡ, балаларың өсөн битәр алмаҫлыҡ, "Үҙе лә ата балаһы булды, балалары ла шулай" тигән маҡтауға лайыҡ булырлыҡ уландарҙы нисек тәрбиәләргә һуң? Сит илдәргә олаҡмаған осраҡта ла ошо төп ҡиммәттәр нигеҙендә тәрбиәләнмәгән ватандашыбыҙҙы камил кеше тип әйтеп буламы? Туған теленән мәхрүм ителгән, халҡы традицияларын белмәгән, хатта һанға һуҡмаған юғары белемле кешене камил кеше тип әйтеп буламы? Тәбиғәт байлыҡтарын әләф-тәләф итеүсе, фәҡәт файҙаланыу яғын ғына ҡайырған, ишәйтеүҙе, киләсәк быуынға ҡалдырыуҙы хәстәрләмәгән, бөгөнгө көн менән генә йәшәгән етәксене камил кеше тип әйтеп буламы?

Мин байтаҡ күҙәтеүҙәр, халҡыбыҙ, илебеҙ һәм хатта донъя кимәлендәге миҫалдар менән сағыштырыуҙар нигеҙендә ЮҠ тип әйтә алам һәм ундайҙарҙы хатта юғары белемдәре булһа ла наҙан, рухи зәғиф тип атарға ла урын бар.

Тәбиғәт алдындағы бурысыбыҙ

иң ҙур бурыстарыбыҙҙың да ҙуры. Тәбиғәтһеҙ кешелек донъяһы ла юҡ. Уныһын барыбыҙ ҙа аңлайбыҙ, әммә иҫтән сығарабыҙ. Тәбиғәттең үҙ-үҙен таҙартыу көсө хәҙерге заман фәнни-техник алға китеш менән сағыштырғыһыҙ ҡайтыш. Сөнки фән алға киткән һайын, кешелек донъяһын яҡшы йәшәтеү, йыһанды үҙләштереү, башҡа илдәр алдында көс-ҡеүәтеңде күрһәтер өсөн һәр төрлө ҡоралланыу, химикаттарҙы киң ҡулланыу һәм тәбиғәт байлығы иҫәбенә башҡа яңылыҡтар уйлап сығарған саҡта, тәбиғәткә зыян килтермәү сараһын да күрергә кәрәк тә бит. Законда шулай ҡаралған, әммә үтәү мәсьәләһендә күҙ буяуҙар йышыраҡ. Киң

ҡоласлы мәсьәләләргә туҡталмай ғына, бик бәләкәй генәһен алайыҡ. Йылғала һәр төрлө порошок менән машина йыуыу, шифалы үҫемлектәрҙе тамырынан йолҡоп йыйыу, сүп-сарҙы, тиреҫте йылға буйҙарына ауҙарыу, ял иткәндән һуң быялы һауыттар, консерва банкалары кеүек сүп-сарҙы асыҡ урында ырғытып китеү... Зыяндың ҙурҙарына килһәк инде промышленность ҡалдыҡ һыуҙарын ер аҫты бушлыҡтарына ҡыуыу, зарарлы заводтарҙы кешеләр күплəп йəшəгəн ҡалаларҙа төҙөү (*Магнитогорск тамугы ғына ла ни тиклем халыҡты ағыулай*)... Былар бит барыһы ла кеше ҡулы менән эшләнə. Вазифалы һəм вазифаһыҙ, бейек һəм тəбəшəк, бөйөк һəм башҡалар ҡулы менəн. Ул бəндəлəр ҙə ҡасандыр сабый булған һəм ике ҡулы ике етəктə – атаһы менəн əсəһен етəкləп тəбиғəткə ял итергə сыҡҡан. Ошо саҡта уҡ сабый күңеленə тəбиғəткə һөйөү уята башларға кəрəк. Һөйөү уятыуҙы тегегə теймə, быны тапама, тигəн тыйыуҙан түгел, ə матурлыҡты аңлатыуҙан башлау яҡшы. Ҙур ағастың мөһəбəтлеген күрһəтеүгə ҡарағанда, бəлəкəй генə үҫентене күрһəтеү, ипле генə итеп һыйпатыу, шул үҫентенең ҙур буласағын, шуның өсөн ҡəҙерлəргə кəрəклеген; сəскəлəрҙең төрлөлөгөн, был матурлыҡтың күңел сафландырыу сараһы булыуын, ғөмүмəн, матурлыҡтың күңел дауаһы, сəлəмəтлек сығанағы икəнлеген һəм башҡаларҙы аңлатырға кəрəк. Баланың бəлəкəй саҡта үҙаллы булыу теләге иҫ китмəле көслө була, шуға ла ярамай тип тыйған һайын, ул киреһен эшлəүсəн. Тəбиғəттең бала күңеленə яҡын мəлдəрендə, күңеле тартылып торған йəн эйəлəре аша һөйөү уятыу еңелгə тура килə. Өҫтəүенə, һəр төрлө йəн эйəлəренə һөйөү уятырлыҡ ҡарһүҙҙəр ҙə һөйлəнелһə, уғата яҡшы булыр. Бəлəкəйҙəн тəбиғəт йəнле булып үҫкəн бала уға (*тəбиғəткə*) ҡарата хилафлыҡ эшлəй алмайҙыр. Башҡорт халҡы балаға тəбиғəтте кеше кеүек үк йəнле тип өйрəткəн. Шуға ла ул тəбиғəткə ҡарата үтə лə һаҡсыл булған.

Кешелек донъяһы алдындағы бурыс

үҙеңдəн һуң аҡыллыраҡ, белемлерəк, сəлəмəтерəк, камилыраҡ бала ҡалдырыу, тинек.

Был бурысты барыбыҙҙа яҡшы аңлайбыҙ. Шуның өсөн дə баланы спорт менəн шөғөлләндереү, иң һəйбəт уҡыу йорттарында уҡытыу, сит телдəр өйрəтеүһəм башҡа шундай сараларҙы атҡарырға тырышабыҙ. Тик ҡайһы бер ҡиммəттəрҙе яңылыш аңлап ҡуябыҙ.

Аҡыллыраҡ итеп тәрбиәләүҙә. Кешелек донъяһының төп аҡылы – халыҡта, халыҡ ижадында. Һәр кемдең булмышын тәрбиәләүҙә иң ҡулайлыһы – үҙ халҡының аҡылы. Халҡы телен аңламаған, белмәгән кеше уның аҡылын ҡайҙан, нисек өйрәнер!

Белемлерәк итеп тәрбиәләүҙә. Үҙ халҡының телен, традицияһын, тарихын, ижадын, боронғо шөғөлөн, халыҡ тәрбиәһе ҡанундарын, ғалимдарын, шәхестәрен, бөйөктәрен белмәгән, өләсәй һәм олатайҙары менән туған телендә аралаша алмаған кешене белемле тип әйтеп буламы!

Сәләмәтерәк итеп тәрбиәләүҙә. Билдәле булыуынса, кешенең физик булмышы менән күңел булмышы бер бөтөн. Күңел тыныслығы, күңел сәләмәтлеге физик сәләмәтлеккә туранан-тура бәйле. Ауырыуҙарҙың байтағы нерв тынысһыҙлығынан башланы. Ә тәбиғәт (*Хоҙай, Алла, Тәңре*) беҙгә ғәжәп күңел дауаһы бүләк иткән. Ул – йыр, моң, бейеү, уйын ҡоралдары, туғандарың менән ихлас аралашыу, туған телдә һөйләшеү. Ошо байлыҡтан мәхрүм ителгән кеше күңел дауаһын ниҙән табыр!

Камилыраҡ итеп тәрбиәләүҙә. Атай-олатайҙарыбыҙҙан, әсәй-өләсәйҙәребеҙҙән мираҫ булып үҙебеҙгә күскән рухи байлыҡты үҙ итә алмаған, үҙ милләтеңдең шәжәрәһен дауам итә алмаған кешене камил кеше тип атап буламы!

Милләтең алдындағы бурыс

Быуындан-быуынға, быуаттан-быуатҡа күсә килгән традицияларҙы һаҡлау һәм үҙ балаларыңда дауам итеү.

Милләтеңә рухи яҡтан сәләмәт нәҫел ҡалдырыу – иң төп бурыстарыңдың береһе. Һинең башҡортса һөйләшә белеүең – атай-әсәйеңдән, башҡорт булыуың – ейәнеңдә күренер.

Һинең дауамың булған ейәнең ниндәй милләттән – һин дә шул милләттәнһең.

Иҫтә тоторға кәрәк! Рухи зәғифлек – балаға сит-ят мәғәнәһе аңлашылмаған исем ҡушыуҙан, баланды туған телдән яҙҙырыу – әсәй һәм атай тигән изге һүҙҙәрҙе мама менән папа тип әйттертеүҙән башлана.

Уйланырлыҡ урын бар

Беҙ туған телдең әһәмиәте тураһында яҙабыҙ ҙа, һөйләйбеҙ ҙә.

һәр хәлдә баланы туған теленән айырырға ярамағанлығы хаҡында даими һүҙ алып барыла. Әммә ауылдарҙан ҡалаға күсеп килгән йәштәр, ғаилә ҡорғандан һуң, нигеҙҙә, рус теленә өҫтөнлөк биреүсәндәр. Әлбиттә, бала рус телендә таҙа һөйләшергә тейеш. Тик ни өсөн ул туған телде онотоу, һанға һуҡмау иҫәбенә барырға тейештер? Кеше мөмкинлеге ҙур, тиҫтәләгән телдәр өйрәнә ала. Ә инде тәбиғәт һәр милләткә туған тел бүләк иткән икән, ул юҡҡа түгел һәм кешелек донъяһы тәбиғәт серҙәрен аңлап бөтмәгән һымаҡ, туған тел серен дә аңлап бөтмәй әле. Нимә һуң ул туған тел? Үҙ ҡолағым менән ишеткән бер ваҡиғанан һуң, ошо һорау яңынан-яңы ғилми хеҙмәттәр аҡтарырға, был һорауға ҡарата төрлө фекерҙәр менән танышырға мәжбүр итте. Иң элек ишеткәнемде бәйән итәм.

“Үҙ-үҙемә ят кешеменме мин”

(*Булған хәл*)

Ҡыҙым менән ауыр операцияға килгәнбеҙ. Свердловск онкология үҙәгендә шығырым тулы ауырыуҙар. Бында ауырыуҙар яңғыҙ йөрөмәй – мотлаҡ оҙата килеүсеһе була. Оҙатыусылар өсөн шарттар ҙа булдырылған, йәғни Үҙәк янында ҡунаҡхана бар. Ваҡ-төйәк ауырыуҙарға һис кенә бирешмәй үҫкән балаларымдың береһе – ҡыҙымдың уйламағанда ошондай ҡурҡыныс ауырыу менән ҡайғыға һалыуы һис көтөлмәгән хәл һәм быға са ишетмәгән ауырыу ине. “Мальформация” тип атала ул, йәғни ҡан тамырҙарының мейеләге бөтөнләй кәрәкмәгән ят матдәне туҡландырыуы арҡаһында барлыҡҡа килгән шеш кеүек нәмә... Германияла ике йыл буйы мальформацияға операция яһау оҫталығына өйрәнеп ҡайтҡан йәш хирург мине саҡырып алды ла ҡыҙыма яңы ысул менән операция яһарға кәрәклеген аңлатты. Әлбиттә, инструменттарҙы Германиянан ҡайтарырға кәрәклеге, ә уның ҡиммәтле булыуы тураһында иҫкәртте. Яңы ысул, бер яҡтан ҡиммәтле булыуы менән аптыратһа, икенсе яҡтан, хәүефләндерҙе. Ул ысул – эмболизация тип атала һәм киҫеп түгел, ә катетрҙы ҡан тамырҙары аша мейегә үрмәләтеп, мальформацияны туҡландырып торған ҡан тамырҙарын көпләп ҡуйыуҙан ғибәрәт. Бындай ысулдың өҫтөнлөгөн хирург былай тип аңлатты: “Мальформация мейе ҡапҡасынан ныҡ аҫта урынлашҡан. Был осраҡта трепанация юлы хәүефле, сөнки мейенең ниндәй булһа ла күҙәнәгенә теймәйенсә операция эшләү мөмкин түгел. Был иһә, ҡыҙығыҙҙың йә һул күҙе,

йә һул яҡ аяҡ-ҡулы зәғифләнәсәк, тигән һүҙ.” Миңә ошо Үҙәктә Балаҡатай районынан оҙаҡ йылдар башҡорт врачы эшләүен, бик ярҙамсыл булыуын әйткәйнеләр. Ундай саҡта кемдән генә йыуаныс эҙләмәйһең. Унан, моғайын, белешмә алырлыҡ әҙәбиәт тә алырмын, үҙ тәжрибәһенән сығып кәңәш тә бирер,тип өмөтләндем. Уны таптым. Хәлиҙә исемле ҡатын. Был ысул менән яһалған операцияларҙың, ысынлап та, яңы булыуын, хирургтың оҫта ҡуллы икәнлеген әйтеп тыныслandырҙы. Мин унан мейе ауырыуҙары һәм мальформация тураһында әсбаптар һорап алдым. Операция үҙәгендә, ысынлап та, сәстәрен ҡырҙырып, операция яһатҡандан һуң яңынан йә атларға, йә һөйләшергә өйрәнеп йөрөүселәрҙе күреп, балама һиҙҙермәҫкә тырышһам да, йөрәк семетеп ҡуйҙы. Эмболизация юлы менән эшләгәндә сәс алынмай, тиҙ һауыға, элеккесә йәшәп ала ла китә, тинеләр. Шөкөр, шулай булды. Операция уңышлы үтте. Ярты йылдан һуң беҙ тикшерелергә килдек. Башына ауыр операция үткәргән һәм даими тикшерелеп торған Зоя исемле мәрйә ҡатын менән бер бүлмәгә тура килде ҡыҙым. Мәскәү өлкәһенән икән. Зояға ғаиләбеҙҙә үҙ-ара һәр ваҡыт туған телдә аралашыуыбыҙҙы әйтеп, әле лә әсәйле-ҡыҙлы үҙебеҙсә аралашасаҡбыҙ, әммә һеҙгә ҡағылһа, русса һөйләшәсәкбеҙ, тинек. Ул йылмайып ҡараны ла: “Әлбиттә, әлбиттә,” – тип, ихлас ризалығын белдерҙе. Мин ҡыҙым янында йыш булдым һәм, күңелен күтәрерлек мәрәкәләр һөйләргә тырыштым. Зоя беҙҙең яҡҡа күҙ һирпеп ҡарап ала ла шул тиклем йылы итеп йылмайып ҡуя. Мин, ул аңламаһын өсөн, Зоя тигән исемен башҡортсалап: “Утыҙ мин” беҙҙеңсә аңлаймы икән әллә? Беҙҙең яҡҡа ҡарай ҙа нимәгәлер ҡәнәғәт йылмайып ҡуя”, – тинем. Шунан үҙенән һораным.

– Телегеҙ шундай яғымлы. Шуға иғтибар итәм. Исемдәрегеҙ ҙә музыкаль. Ниндәй милләт һеҙ? – тип һорау менән яуап бирҙе ул.

– Башҡорт. Башҡортостанданбыҙ.

– Шулаймы ни? Мин бында башҡорт милләтле бер ҡатын менән бергә ятҡайным операция яһатҡан саҡта. Силәбе өлкәһенәнмен, тине. Унан башҡортса бер һүҙ ҙә отоп алғайным. Исемемә оҡшаш булғанға хәтерҙә ҡалған... “Зая” тигән һүҙ ул. Ә бәлки... исем менән генә бәйле түгелдер был һүҙҙең хәтерҙә ҡалыуы. Фажиғәгә бәйле ул... Ысын трагедия... Тәрән трагедия...

– Бында күңелһеҙ ваҡиғалар йыш булалыр инде, – тинем.

– Уныһы шулай. Әммә ундай хәлде осратҡаным булманы. Фәһемле, хатта ғибрәтле ул. Теләһәгеҙ һөйләйем, – тине лә яңыраҡ ҡына онкология үҙәгендә булған хәл тураһында бына нәмәләр

һөйләне. – Ул, башҡорт ҡатыны булһа ла, үҙен Мария тип таныштырҙы. Силәбенең Маяҡ касафатынан ҡалған сир ине унда. Башындағы шешкә икенсе тапҡыр операция эшләтергә килгәйне. Өс балаһы алмаш-тилмәш килеп йөрөй. Гел генә рус телендә аралашһалар ҙа рус түгеллектәре йөҙҙәренән күренеп тора. Ғәжәп матурҙар. Уларҙың русса һөйләшеүҙәре мине әллә ни аптыратманы. Хәҙер бит күптәр үҙ-ара русса аралаша. Марияны операцияға алып киттеләр. Балалары өсөһө лә түҙемһеҙлек менән көтөп алды. Миңә лә шул көндә эшләнеләр операцияны. Миңә эмболизация ысулы менән яһағас, үҙемде насар тойманым. Янымда ҡыҙым булды. Операциянан һуң Мария менән тағы бер бүлмәгә тура килдек. Уның хәле ауыр ине. Телдән ҡалғайны. Борсолорға ярамай, мөмкин тиклем тыныс булырға кәрәк. Марияның яңынан теле асыласағына ышандыралар врачтар. Тик был шатлыҡтың ҡасан булырын ғына аныҡ әйтә алмайҙар. Бер көн, ысынлап та, Марияның теле асылды. Ул шул тиклем ҡыуанды. Күҙҙәрендә аңлатып биргеһеҙ шатлыҡ осҡондары һирпелә ине. Миңә лә ни типтер өндәште, балаларына ниҙер әйтте. Әммә уның һүҙҙәрен бер кем дә аңламаны. Мария ымлап та, ишара менән дә аңлатырға маташа. Балалары уны аңлай алмағандарына борсола башланы.

– Нимә ти ул? Аңламайһығыҙмы ни? – тип һорайым мин дә Мария өсөн борсолоп.

– Ул ауылса, өләсәй кеүек һөйләшә. Беҙ уны аңламайбыҙ, – тине ҡыҙы.

– Ауыл теле тигән тел булмай ул. Ниндәй телдә өндәшә ул? Ниндәй милләт? – тип һорайым.

– Башҡорттар беҙ. Тик бер генә тапҡыр ҙа һөйләшмәнек ул телдә, – тине өлкән улы. Ә әсә кеше һаман ниҙер аңлатырға тырыша, өҙгәләнә.

– Атайым белә лә ул. Ул бәләкәй туғаныбыҙҙы ҡарап ҡалды.

– Бына һиңә марксистик-ленинсы ғаилә. Бына һиңә уртаҡ совет милләте, – тип йәнем әсей башланы ят кешеләр өсөн. – Табығыҙ берәй башҡортто. Юҡмы ни бында берәйһе?

– Бер ауырыу бар Силәбенән. Ул ҡуҙғала алмай ята, – тине улы. Медсестра йүгереп килеп инде. Марияны тыныслandыра, һеҙгә борсолорға ярамай, ти. Ә ул русса аңламай. Йәл, йәл ине. Ниҙер әйтә, бер кем аңламай. Ҡарашы шул тиклем моңһоу. Операцияға тиклем бынамын тигән русса һөйләшкән кеше операциянан һуң телде онотҡан да ҡуйған. Медсестра тыныслandырыу өсөн укол һалды, балаларҙың береһен Хәлиҙә исемле врачты алырға ебәрҙе. Ул килгән саҡта ҡатындың хәле насарайғайны инде. Дежур врачты

саҡырттылар. Хәлиҙә әсәнән ниҙер һораны. «Эй, Хоҙайым, үткән бит ғүмерем заяға. Мин үҙ-үҙемә ят кешемен икән дә. Үҙ балаларым аңламай мине»... тигән ул. Марияны алып киттеләр. Реанимация бүлегенә һалғандар. Хәлиҙәне тәржемәсе итеп саҡырҙылар. Башҡорт ҡатыны булмышы өсөн ят булған рус телен онотҡан. Ә туған теле онотолмаған. Бына бит тәбиғәт мөғжизәһе. Тимәк, туған тел үҙең менән бергә яралған ағза кеүек инде. «Семнадцать мгновений весны» фильмын ҡарағанда Штирлиц разведчица Катя өсөн хәүефләнде бит. Иҫегеҙҙәме? Бала табыр алда. Уның ауыр саҡта туған телендә – рус телендә ҡыҫҡырып ебәреүе ихтимал, тине. Бына бит нисек. Кеше ауыр сағында туған телендә ҡыҫҡыра икән.

Аҙаҡ врачтарҙан: «Бындай хәлдәр йыш буламы?» – тип һорағайным, бер нисә йыл элек ҡырҡ йәштәрҙәге ир кеше менән ошондай уҡ хәл булғанлығын әйттеләр. Ул да алты йәшендә балалар йортона эләгеп, туған телен онотҡан. Аҙаҡ операцянан һуң ҡапыл туған телендә һөйләшә башлаған тинеләр. Мин быға үҙара русса аралашҡандарға әллә ни иғтибар итмәй инем, киреһенсә, туған телендә аралашҡандарға сәйерһенеп ҡарай инем. Ошо ваҡиғанан һуң уйландым. Бына мин үҙем балам менән инглиз йәки немец телендә генә аралашып йәшәр инемме? Юҡ, әлбиттә. Аллам һаҡлаһын, тип уйлайым. Йәки тағы былай тип тә уйлайым. Ул ҡатындың балалары ҡайһы милләтте БЕҘ тип һөйләйҙәр икән. Уларҙың БЕҘ тигән төшөнсәһе юҡ бит. Был донъяла БЕҘ тигән төшөнсә булмаһа, йәшәүҙәре ауырҙыр ул. Туғандарҙан, дуҫтарҙан тыш һинең БЕҘ тигән ғәзиз милләтең дә булырға тейеш. Хоҙай көҙрәте бит ул. Хәҙер мин туғандарҙың үҙ-ара туған телдә аралашыуҙарына шул тиклем ҡыуанам, оло бер ҡайғылары кәмегән һымаҡ тоям, тине беҙ «Утыҙ мин» тип йөрөткән Зоя исемле инженер ҡатын.

– Әсәй, Хәлиҙә апайҙан уларҙың яҙмышын белешеп кил әле, – тине ҡыҙым, таныш түгел кешеләр өсөн борсолоп.

Хәлиҙәнән был хаҡта һораштым. «Ире килеп алып ҡайтып китте. Һауығырға тейеш ул, – тине лә шатланып өҫтәп тә ҡуйҙы. – Ошо ваҡиғанан һуң, Екатеринбургта йәшәһәм дә балаларым менән туған телдә аралашҡаныма сикһеҙ ҡыуанам. Беҙ бер-беребеҙҙе аңлайбыҙ.

Туған телгә ҡағылған ошондай ваҡиғалар һәр саҡ уйландыра һәм ҡайһы бер атай-әсәйҙәрҙең был мәсьәләгә үтә лә еңел ҡарауҙары борсоуға һала».

Тәбиғәт бар иткән бер генә нәмәгә ҡарата ла еңел-елпе мөнәсәбәт булырға тейеш түгел. Тәбиғәт үҙ ҡанундарынан ситкә тайпылғандарға ҡарата ауыр язаһын ҡыҙғанмай.

Баланың буйын да, уйын да тәрбиәлә

2010 йыл "Йәштәр йылы" тип иғлан ителде. Әлбиттә, һәр төрлө атамалы йылдар исеменә тура килгән есеменә иғтибар итеүҙе талап итә. Шуныһы менән әһәмиәтле улар һәм шуның өсөн аҡыллы етәкселәребеҙ тарафынан уйлап сығарылған да. Быйыл да ошо уңай менән матбуғатта йәштәрҙең йәшәйеше, тормошо хаҡында йыш яҙыла, уларҙың уңыштары яҡтыртыла бара. Үҙ төйәгендә матур йәшәү өсөн тырышып-тырмашып, бөтөн һәләтен һалып, ҡулынан килгән саҡлы балаларым, киләсәгем, тип ынтылған йәштәр хаҡында уҡып ҡыуанам. Афарин, йәштәребеҙ, тип ҡуям. Улар үҙ республикабыҙҙың, үҙ төйәгебеҙҙең мәртәбәһен күтәрә, халҡыбыҙҙың васыятын тормошҡа ашыра.

Ниндәй васыят ҡалдырған һуң атай-олатайҙар, әсәй-өләсәйҙәребеҙ? Халҡыбыҙ ижадына иғтибар менән күҙ һалһаҡ, төп васыяты – тыуған илде һаҡлау, тыуған илдән айырылмау. Ошоға ҡарата бихисап мәҡәлдәр, әллә күпме йырҙар ижад иткән ул.

Алтын менән көмөш сығҡан ерҙән
Тыуып ҡына үҫкән ил яҡшы, – тип әйтелә «Йәйләүлек» йырында.

Ни өсөн тыуған илгә ҡарата шул тиклем оло һөйөү уятырға тырышҡан халҡыбыҙ? Илһөйәрлек төшөнсәһе хәҙерге заманға тап киләме? Иҫкермәнеме ул? Егерме беренсе быуатта йәшәйбеҙ бит. Әйҙә, телдәр өйрән дә ҡайҙа теләйһең – шунда йәшә, тигән ҡараш дөрөҫ түгелме?

Был хаҡта һәр кем үҙенсә фекер йөрөтә. Әммә иң аҡыллы һабаҡты тормош үҙе бирә. Булған хәлдәргә туҡталып китәйек.

Беренсе ваҡиға.

Мәскәүҙән ҡайтып килгән саҡта булды был хәл. Бер ағайҙы поезға оҙатып ҡуйҙы ғаиләһе. Рус телендә аралаштылар. Килә торғас, ағайҙың башҡорт икәнлеге асыҡланды. «Ауылыма, башкөллө, үлергә ҡайтып барам», – тине моңһоу ғына көлөмһөрәп. – Йәшлек иҫәрлеге менән кителгән бит сит яҡтарға. Йәшәлгән ғүмерем йәл. Бушҡа үткәргәнмен ғүмеремде. Исмаһам,

үлгәс, үҙемсә ерләһендәр, табут артынан буҙлап бармаһындар, тип ҡайтып барыуым. Күпме ғүмер йәшәлгән ошо ҙур ҡалала, ә үкенесле бер генә нәмә лә, бер генә йән эйәһе лә юҡ», – тине ул. Һөйләшеп барырға дәрте бар ине лә, зарын тыңлап ултырғы килмәне. Ул саҡта мин Мәскәүҙә Ғәлиә Солтанова-Йәнбирҙинаға башҡорт ойошмаһы асыу буйынса ярҙам итергә барғайным, һәм исемлек төҙөп саҡыртып алған өлкән-өлкән башҡорт ағайҙарының ғүмерҙәренең заяға үтеүе, нәҫелен дауам итерлек башҡорт балалары ҡалдыра алмауҙары тураһында үкенесле зарҙарын тыңлап ялҡҡайным инде.

Мәскәү сит ҡала ла түгел, үҙ илебеҙ. Шулай булһа ла юлдаш ағайҙың үкенесе оло ине. Йәшлек иҫәрлегенә һылтанды ул (1989 йыл ине).

Икенсе ваҡиға

Балаларыбыҙ бәләкәй саҡта ҡулса эсендәге тейен кеүек туҡтауһыҙ хәрәкәтләнергә, йүгерергә тура килде. Уларҙың көндәлек мәшәҡәттәренән тыш Өфөлә туған телдә мәктәп, туған телдә балалар баҡсаһы астырыу хәстәрлеге лә беҙҙең быуын иңендә ине. Был мөкәддәс бурысты тормошҡа ашырыуҙа беҙ ҙә, йәғни Диҡҡәт менән мин дә, ситтә ҡалманыҡ, әлбиттә. Ә инде был маҡсатыбыҙ тормошҡа ашҡандан һуң ҡаланың бер осонан икенсе яғына балаларҙы йөрөтөү... Иртә таңдан тороу... Транспорт тығыҙлығы... Ошондай ығы-зығылы көндәрҙең береһендә яҡын таныштарыбыҙ килде беҙгә. Ул саҡта Өфөлә ишле балалы ғаиләләр һирәк. Беҙҙең иһә ул саҡта дүртәү. Һәр тарафтан кәңәш бирергә теләүселәр бихисап булды. Ундайҙарға рәхмәтлемен, әлбиттә. Сөнки һәр кем үҙ кимәленән сығып аҡыллы кәңәштәр бирергә тырыша, берәү ҙә яманға өндәмәй.

– Ярай, балаларығыҙҙы ишәйттегеҙ ҙә ти...һеҙҙең талантығыҙ менән бер бала ла етер ине. Яҙырға, яҙырға кәрәк ине лә икегеҙгә лә... Ә хәҙер башҡорт мәктәбе, балалар баҡсаһы тип йүгерәһегеҙ. Ни эшләп ул тиклем мәшәҡәттәр кәрәк һеҙгә, ни эшләп балаларығыҙға өҫтәлмә йонсоуҙар уйлап сығараһығыҙ? Башҡорт телендә тәрбиәләйем, тип наҙан ҡалдыраһығыҙ бит уларҙы. Әйҙәгеҙ, ярҙам итәм, улығыҙҙы инглиз теле йүнәлешендәге мәктәпкә урынлаштырайыҡ. Минең улым беренсе класта ғына булһа ла инглиз телендә ап-арыу һөйләшә башланы, – тигән кәңәш-ярҙам итеү ниәте менән килгәйне был таныштарыбыҙ ҙа.

– Ә улығыҙ башҡортса һөйләшәме?

– Нимәгә кәрәк ул?

– Аңламаным. Мин туған телен белмәгән кешене камил булмаған кеше тип һанайым. Дорфалыҡтың иң сиге ул баланды туған телдән айырыу…

– Башҡорт бүлеген тамамлағандар барыһы ла һинең һымаҡ бер яҡлы ғына уйлай. Башҡорт теле артистарға ғына кәрәк. Улар ҙа әле суфлерһыҙ йүнләп һөйләшә белмәй. Диҡҡәт, һин бит Мәскәү вузын тамамлаған кеше. Юғары даирәләрҙә аралашҡанһың. Балаларыңдың киләсәген, исмаһам, һин уйлаһаң ни була?

– Ә мин ни эшләп йөрөй тиһегеҙ? Үҙ баламдың ғына түгел, башҡа балаларҙың да киләсәге өсөн юллайбыҙ бит башҡорт мәктәптәре астырыуҙы.

– Күреп торорғоҙ, наҙандар үрсетеүсе мәктәп буласаҡ ул. Киләсәге юҡ уның. Минең ҡатынды ла инглиз теленән уҡытыусы итеп саҡырҙылар, ебәрмәнем.

Йылдар үтте. Таныштарҙың балаһы, ысынлап та, зирәк ине. Инглиз йүнәлешле мәктәпте алтын миҙалға тамамланы, юғары белем алды. Бөгөнгө көндә Америкала университеттарҙың береһендә профессор дәрәжәһендә эшләй. Өс ҡатлы йорто, ике балаһының да машинаһы бар икән. Донъялары иҫ китмәле, ти.

Тыуымдан ҡалмағас, үлемдән дә ҡалып булмай. Атаһы фани донъянан китеп барҙы. Һуңғы юлға оҙатырға Американан улы, Германиянан ҡыҙы ҡайтты. Күп тә үтмәне атаһы артынан әсәһе лә китеп барҙы фани донъянан. Был юл ҡыҙы ғына ҡайта алды. Улы эштән бушай алмағанмы – һәр хәлдә ҡайтмаған, яҡын ара түгел, эш кешеһе, бер йылда ике тапҡыр ҡайтырға форсаты булмағандыр.

Ҡатынды һуңғы юлға оҙатҡас, туғандары үҙ-ара былай тип һөйләнеләр:

– Балаларының ситтә булыуына ныҡ ҡайғырҙылар. Исмаһам, дарыу алып килеп, хәл белеп китерлек тә кешебеҙ юҡ бит яныбыҙҙа, тигән булырҙар ине. Ни өсөн йәшәлде был тормошта? Ҡартатай, өләсәй, тип килеп инһендәр ине әле ейәндәрем… Йөрәккә унан да шифалыраҡ ял булыр инеме… Нимәгә кәрәк, кемгә кәрәк уларҙың көнөн төнгә ялғап эшләүҙәре? Кем өсөн, нимә өсөн? Сит ил өсөнмө… Балалары ла шунда тороп ҡаласаҡ бит хәҙер. Рухи төрмә бит уларҙың йәшәүҙәре. Ысын төрмә. Һөйләшер, аралашыр, шатлыҡ уртаҡлашыр кешеләре юҡ, тел юҡ, моң юҡ. Атай ҙа, әсәй ҙә юҡ, туғандар ҙа юҡ, ил дә юҡ. Аҙаҡ иҫтәренә төшөрмө – белмәйем. Төшһә лә һуң буласаҡ. Илдән биҙҙереү туған телдән яҙҙырыуҙан башлана икән, – тип ҡайғырыштылар, кеше алдында һыр бирмәҫкә тырышһалар ҙа…

Был вакиғала атай-әсәй йәшлек иҫәрлеге арҡаһында түгел, ә заман шауҡымына эйәреүҙәре сәбәпле ошо хәлгә дусар булғандар.

Өсөнсө вакиға.

Сит илдә йәшәгән талантлы кинорежиссерыбыҙ Башҡортостан тарихы буйынса үҙе йәшәгән илдә "Сена йылғаһы өҫтөндә ҡурай моңо" тигән фильм төшөрҙө. Әлбиттә, ғәжәп асыштары, иҫ китмәле бай материалы булһа ла, илдән айырылғас, халыҡ тормошонан ситләшкәс, мөмкин булғандан күпкә ҡайтышыраҡ фильм килеп сыҡҡан. Был егет үҙе лә, уның таланты ла, һуңлап булһа ла тыуған яғына тартылыуы ла, ниҙер эшләргә талпыныуы ла шул тиклем йәл миңә. Сит илдәге тормошон һорашам. Баҡсама ҡайындар ултырттым – тыуған яғым сағылышы ул, бер балама башҡортса исем ҡуштым, тип һөйләй. Күҙҙәрендә лә, тауышында ла шул тиклем тәрән һағыш, уның менән тыныс ҡына әңгәмә алып барып булмай.

– Ни эшләп барып сыҡтың һуң ул яҡтарға?

– Йәшлек иҫәрлеге...

Олоғайған көндә ошондай үкенестәр, уфтаныуҙар булмаһын өсөн, халҡыбыҙ үҫәһе быуынға васыятын әйтеп ҡалдыра ла инде. Шуға ла «Сит илдә олтан булғансы, үҙ илеңдә солтан бул», – тигән мәҡәл-васыят әйткән ул. Үҙ илең – үҙ өйөң. Үҙ өйөндә бер кем дә олтан сифатында йәшәмәй. Ә сит-ят яҡтарҙа оло ғалиммы, алдынғы эшсеме, вазифалы етәксеме – кем булһаң да кемгәлер хеҙмәт итәһең, кемдеңдер олтаныһың. Фәҡәт үҙ илеңдә генә ҡайҙағына ниндәй вазифала эшләмә – һин солтанһың.

Тимәк, сит-ят яҡтарҙа вазифаң менән солтан булһаң да – рухың менән олтанһың. Үҙ илеңдә иһә вазифаң менән олтан кимәлендә булһаң да – рухың менән һин солтанһың.

Аҡыллыға ишара ла етә, аҡылһыҙға "Урал батыр" эпосында әйтелгәнсә, йөрәгендәге ҡара ҡанды киптереп яңынан ҡыҙартып булмай. Ә шулай ҙа... Икеләнеү кисергәндәр, бәлки, ошо телгә алынған һәм үҙҙәре күреп-белгән башҡалар тормошонан һабаҡ алыр, тигән өмөт менән ҡалабыҙ.

Тәбиғәт һәм туған тел

Тәрбиәлелек ике төрлө була. Тышҡы тәрбиәлелек һәм эске тәрбиәлелек. Тышҡы тәрбиәлелеккә йәмғиәттә үҙенде тота белеү, кешеләр менән мөғәмәлә итеү һәм башҡа байтаҡ тышҡы әҙәплелек ҡағиҙәләре инә. Ә бына эске тәрбиәлелек иһә кешенең тотош булмышын сағылдыра. Кешенең яҙмышы, тормошо ла ошо эске тәрбиәлелеккә нығ бәйле. Сөнки тышҡы тәрбиәлелекте үҙгәртеп тә, йәшереп тә, ҡыланып та була. Ә эске тәрбиәлелек – һинең үҙ намыҫың алдында яуаплылыҡҡа бәйле. Ул һинең иман сафлығың. Ана шул иман сафлығын тәрбиәләүҙә тәбиғәткә ҡарата мөнәсәбәт иҫ китмәле әһәмиәткә эйә. Тәбиғәткә мөнәсәбәт – һине бар иткән, һине әҙәм иткән бар нәмәгә ҡарата мөнәсәбәт ул. Ул – тәбиғәт байлығының үҙең йәшәгән дәүер өсөн генә түгел, ә мәңгелек өсөн, быуын-быуын алмашынып торор балаларың-ейәндәреңә лә кәрәклеген аңлау, шул байлыҡты ҡомһоҙланмай ғына сама белеп файҙаланыу, тәбиғәт байлығын һаҡлау ғына түгел, ә ишәйтә барыу зарурлығы. Был аң, әйтергә кәрәк, тәбиғәтте үҙенең йорто итеп күргән башҡорт халҡында бик юғары булған. Бының шулай икәнлеген башҡорт халыҡ ижадында тәбиғәт күренешенә бәйле сағыштырыуҙарҙан сығып та әйтә алабыҙ. Сағыштырыуҙар шул тиклем бай, шул тиклем мәғәнәле – хайран ҡалырлыҡ. Халыҡ иҫ китмәле нескә күҙәтеүсе генә түгел, ундай сағыштырыуҙар өсөн шифри күңелле лә, бай, һүтлы телле лә булырға кәрәк.

Мәҫәлән, "Аҡһаҡҡола" эпосынан өҙөк.

"Ер һиңкетеп күк күкрәй. Күк күкрәүе ҡотороп көсәйҙе, ҡарағастарҙы сарпып, ярғыслап, өҙгөсләп, сатын-сатҡа айырып, арҡыс-торҡос йығып бөттө. Гөл сәскәһе, елберҙәгенән асыла-асыла ҙурайып, кейеҙ ҡалпаҡтай булды, тажы күҙҙе ҡамаштырып балҡып китте."

"Хан ҡыҙы" тигән көйлө әйтештән өҙөк.

Егет. Хан ҡыҙы, ас ишегең, мин керәйем,
Һинең ҡашың ҡыйғас тиҙәр, мин күрәйем.
Ҡыҙ. Минең ҡашым күреп һиңә ниҙәр файҙа,
Ҡарлуғастың ҡой(о)роғон күрмәнеңме?

Халыҡ ижадында, йәнле һөйләү телендә тәбиғәт күренештәре менән сағыштырыу халыҡтың ғәжәп зирәк, күҙәтеүсән, тәбиғәткә

яҡын булыуын күрһәтһә, мәҡәлдәр араһында тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәт тураһында иҫкәртеүҙәрҙең үтә лә аҙ осрауын бик ябай аңлатып була – мохтаж булмаған халыҡ ундай мәҡәлдәргә. Башҡорт – тәбиғәт балаһы һәм тәбиғәткә теге йәки был зыян килтереү үҙ туған йортона хилафлыҡ һымаҡ күренгән. Ул балаһын бәләкәйҙән шул юҫыҡта тәрбиәләгән, һәр төрлө күҙәтеүҙәргә, сағыштырыуҙарға бай теле менән күңеленә наҙ һалған. Тәбиғәткә ниндәйҙер хилафлыҡ ҡылыу башҡортҡа бөтөнләй ят күренеш булған. Башҡорттоң тәбиғәтте, һәр төр йән эйәләрен, бигерәк тә йылҡы малын ныҡ яратыуы уның һүҙ байлығында ныҡ сағыла. Был – халҡыбыҙҙың тәбиғәт ҡосағында матурлыҡҡа солғанып, нурға сумып үҫкәнлегенең һөҙөмтәһе. Бөгөнгө көндә беҙҙең телмәребеҙ шул тиклем ярлы, хатта атай-олатайҙарыбыҙҙың, әсәй-өләсәйҙәребеҙҙең бик күп һүҙҙәрен һүҙлекһеҙ аңламайбыҙ ҙа. (*Әлбиттә, был фекер бай телле яҙыусыларыбыҙға, телсе галимдарыбыҙға ҡағылмай.*) Ә бит тел ярлылығы – фекер ярлылығы ул.

Әйтәйек, ҡош исемдәрен белеүселәребеҙ ҙә һирәк хәҙер. Уҙабара ете-һигеҙҙән артмайҙыр. Әҡоштарға ҡағылған ҡылым төрөнә килгәндә инде оса тигәндән башҡаны белмәйбеҙ ҙә. Рәүеш хәлен әйтеп тә тормайбыҙ.

Уҡытыусы булып эшләгән сағымда түбәндәге һөйләмде уҡыным да балаларға үҙҙәренсә яҙырға эш бирҙем. **Мин дә уғымды икенсе ҡошҡа атмаҡ булғайным, уныһы үҙ иптәшенең ҡолап төшкәнен күрҙе лә, ситкә шыҡыйып, бик бейеккә һауалап киткәс, бер ниндәй ҙә уҡ алырлыҡ түгел ине инде.**

Исмаһам, бер бала шыҡыйып, һауалап тигән һүҙҙәрҙе файҙаланһасы!

Бер ҡарағанда, һүҙ тел ярлылығы хаҡында барған һымаҡ. Асылда иһә тәбиғәттән алыҫлашыу һәм күңел ярлылығы был. Тел ярлылығы күңел ярлылығына, наҙ һайығыуына, ҡоттоң наҡыҫлана барыуына килтерә. Әйтәйек, беҙ ҡоштарҙың осоуын ғына күҙәтәбеҙ, ә боронғо башҡорт өсөн ҡоштар шыҡыйып, һауалап, ҡыйылып, кәйелеп осҡан.

Бының менән ниндәй фекер әйтке килә? Балаға тәбиғәтте күҙәтергә өйрәтергә, телен байытырға кәрәк. Тел байлығы – күңел байлығы, тинек. Әйтәйек, балаға ҡоштоң һауалап осоуының нимә аңлатҡанын аңлатһаҡ, күрһәтһәк, ағастарҙың атамаһын әйтеп, япраҡтарының төрлөсә шаулауын тыңлатһаҡ, ай торошона ҡарата һәр төрлө атамаларҙы, сабый йән эйәләренең, йорт малдарының исемдәрен, өнөҡшаш һүҙҙәрҙе өйрәтә барһаҡ, уларҙың телмәрен генә түгел, күңелдәрен дә байытыр инек. Тәңребеҙ кеше күңелен

нурландырыу сараларын бихисап бар иткән: меңәр төрлө сәскәләр, хайран ҡалып тыңларлыҡ ҡоштар тауышы, сылтырап аҡҡан шишмәләр, төн гүзәллеге, тулған ай матурлығы… Һанап бөткөһөҙ улар. Күңелгә наҙ ни тиклем мулыраҡ ҡуна – шул тиклем эске әҙәп, күңел ҡото арта. Эске әҙәбе көслө баланың үҙ намыҫы алдында яуаплылығы көслө була. Тәрбиәлелектең иң юғары ҡаҙанышы – ул кешеләге иман йәки үҙ намыҫың алдында яуаплылыҡ. Әйтеп үтеүебеҙсә, был сифат тәбиғәткә ҡарата мөнәсәбәттә айырыуса асыҡ сағыла.

Тәбиғәткә яҡын булыу күңелде лә, телде лә байыта. Тоҡос күңелле кешенең һөйләү теле лә тоҡос ҡына була.

Әйтеп үтеүебеҙсә, тәбиғәт ҡанундары – мәңге асылмаҫ сер. Уның байтаҡ күренештәрен, бигерәк тә тойғоларға ҡағылғандарын фән нигеҙендә тулыһынса аңлатып та булмайҙыр. Ә тәғәйен күҙәтеүҙәр алып барып, халыҡ тәжрибәһенә таянып, ҡайһы бер һығымталар яһап була. Был мәҡәләләр шул нигеҙҙә яҙылды ла инде. Мин ошондай һығымталар яһау өсөн байтаҡ ҡына тормош тәжрибәһе тупланым. Үҙемдең биш баламды ҡала шарттарында яңғыҙым тәрбиәләү, мәктәптәрҙә, Ейәнсура башҡорт гимназияһында алып барған дәрестәрем, "Тормош һабаҡтары" исемле уҡытыу предметын яҙыу өсөн туплаған мәғлүмәттәр, уңыштар һәм хаталар, тайпылыштар, ҡаршылыҡтар, алған һабаҡтар ҡайһы бер һығымталар яһар өсөн ярайһы уҡ нигеҙ булды.

Бер нәмәгә инанғанмын: бала күңеленә илем, халҡым, телем, киләсәгем тигән тойғо һәм яуаплылыҡ һалынһа, тормошта була торған һәр төрлө тайпылыштарҙан сығыу юлын таба аласаҡ. Сөнки был изге төшөнсәләр – оло маҡсат, ихтыяр көсө, рухи ныҡлыҡ нигеҙе.

Коммунистар партияһы ышандырған коммунизмға ла оло өмөттәр бағлап, шул тиклем илһамланып барҙы илебеҙ халҡы. Әммә маяғыбыҙ, "Өмөт шәме"ндә телгә алынған трактор быялаһындағы яҡтылыҡ һымаҡ, ялған булдымы, беҙҙе юлдан яҙҙырған малай кеүектәр күбәйеп киттеме – был маҡсатыбыҙға өлгәшә алманыҡ. Күптәрҙең өмөт шәме һүнә яҙҙы. Был үҙгәреште төрлөһө төрлөсә ҡабул итте. Фәҡәт рухи яҡтан ныҡ кешеләр генә – шуныһы иғтибарға лайыҡ, нигеҙҙә, туған теленә, традицияларына хыянытһыҙҙар заманаға йәһәт яраҡлашты, үҙен юғалтмай һаҡлап алып ҡалды.

* * *

Дикҡәттең вафатынан һуң ҡайғымды уртаҡлашып хат яҙыусылар ҙа, йортҡа килеп йыуатыусылар ҙа күп булды. Яҙыусы Вәзих Исхаҡов, ҡатыны вафатынан һуң, үҙе лә ауыр ҡайғы үткәргән мәле булғанға, айырыуса ныҡ кисергәйне минең юғалтыуымды. Ҡайғыны ниндәй юлдар менән еңелерәк үткәреп була — шул хаҡта кәңәштәр биргәйне. Бына уның кәңәштәре: тәүге көндәрҙә Дикҡәттең фотоларын күҙ алдыңдан ал, Дикҡәтте иҫкә төшөрөүсе әйберҙәргә мөмкин тиклем иғтибар итмәҫкә, килгән кешеләр менән дә уның хаҡында һөйләшмәҫкә тырыш. Дикҡәт — беҙҙең өсөн дә ҙур юғалтыу. Үҙеңдең шәхси юғалтыуың тип кенә уйлама. Оло ҡайғы ул – Дикҡәтте юғалтыу, был уртаҡ ҡайғы.

Шағирә Рәғиҙә Янбулатова, тыуаһы балам барлығын белгәс: "Биш бала менән ни хәл итерһең? Заманы ла еңелдән түгел бит. Үҙеңде һаҡла. Һинең һаулығың — балаларҙың именлеге," — тип хат яҙып ебәрҙе. Зәйнәб Биишева ул саҡта Мәскәүҙә, улында йәшәй ине, хаттарынан өҙмәне. "Бирешмә, һылыу! Тормош һиңә бик ауыр һынау ебәргән, тик еңелмә ҡайғынан. Башҡорт ҡатыны бит һин!" – тип яҙа торғайны.

Ошо осорҙа туғандарымдың, дуҫтарҙың ярҙамы иҫ киткес булды. Уларҙың матди һәм рухи ярҙамынан һуң зарланыу, бөгөлөп төшөү оят булыр ине. Йырсы Мәғфирә Ғәлиева әйләнгән һайын килеп, балаларҙы алдаштырып, йыуатып йөрөнө. Дуҫтар: "Дикҡәттең балалары өсөн взнос," — тип, бер йылға яҡын аҡсалата ярҙам күрһәтеп торҙо. Төркөм-төркөм булып йыйып, ай һайын йөҙ һум килтерәләр ине. Ул осорҙа йөҙ һум аҡса ҙур сумма ине. Радио һәм телевидение хеҙмәткәрҙәренән күренекле журналист Әнисә Тимербулатова, Дикҡәт уҡыған интернат-мәктәптән (*хәҙер Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Республика башҡорт интернат-гимназияһы*) уҡытыусыларынан — Фәүзәнә менән Рәфҡәт Аҡмановтар, Башҡорт дәүләт университетының тарих һәм әҙәбиәт факультеты уҡытыусыларынан һәм Ауыл хужалығы институтында эшләгән дуҫтарҙан Клара менән Әнүәр Әсфәндиәровтар, курсташтарымдан — Урал Нәҙерғолов, Күмертау ҡалаһынан бер төркөм егеттәрҙән — Сафуан Фәхретдинов, аралашып йөрөгән дуҫтарҙан Дикҡәттең класташтары ойошторҙолар бындай ярҙамды. Ул саҡта профсоюздарҙың өлкә комитетында эшләгән Рәшиҙә Искәндәр ҡыҙы Солтанова матди ярҙам күрһәтеү өсөн үҙе минең исемдән ғариза яҙып, өйгә аҡсалата ярҙам килтереп, ҡултамғамды ғына алып китте. "Кил, юлла, бирербеҙ", – тип аҡыл өйрәтеп китмәне. Рәшит Шәкүр, китабына гонорар алғас, өлөш бүлде. Дикҡәт менән бергә эшләгән

геолог Камил Уразаев бер-нисә ай буйы көн һайын эштән ҡайтышлай, Дикҡәттең эштән ҡайтыр мәлендә балалар янына инеп сығыр булды. Үҙенең ғаиләһе ишле булһа ла, байтаҡ матди ярҙам күрһәтте, берәй ергә барырға кәрәк булһа, машинаһы менән килеп етер ине. Ҡатыны Рина Мөхәммәт ҡыҙы менән улар дуҫлыҡтың иң юғары өлгөһөн күрһәткәндер, тип уйлайым. Рәмзиә менән Илшат Йомағоловтар улдары Айсыуаҡ менән ҡыҙҙары Айһылыуҙы алып килеп, балаларҙың да, минең дә күңелде күреп киткеләйҙәр ине. (*Әйтергә кәрәк, Илшат Йомаголов — Дикҡәттең балалыҡ дуҫы, гүмере буйы был дуҫлыҡҡа тоғро булып ҡалды. Дикҡәттең атаһы мәктәп директоры, Илшат Йомағоловтың атаһы уҡытыу-тәрбиә буйынса урынбаҫары булып эшләгән саҡта бер йорттоң ике ягында күрше йәшәгәндәр. Йылдар үтеп, мин Иҫәнголдан, Илшат Йомаголов Стәрлетамаҡтан тағы Өфөгә килгәс, бер йортта стена аша күрше булдыҡ, һуңғы юлға оҙатыуҙа ла ҡатнаштым*).

Дикҡәт үлгәндән һуң һаулығым нык ҡаҡшағайны. Баланы һаҡлап алып ҡалыу хәстәрлеге күрә башланым. Шул саҡта Мәхмүзә Ғәйнуллина, Марат Аҙнабаев, Вәрис Ғүмәров, Марат Мырҙановтар дефицит укол һәм дарыуҙар менән ярҙам иттеләр, Мәскәүҙән Ғәлиә Солтанова-Йәнбирҙина бандероль менән уколдар һалып ебәрҙе. Дикҡәттең тәүге уҡытыусыһы, һуңғы йылдарҙа Благовещен районы Ильина Поляна ауылында йәшәгән Тимербикә апай Туҡаева яңы һауылған һөт күтәреп килеп етә торғайны. Уның балалары Рөстәм Сабирович Туҡаев, Зилә, Зөлфирәләрҙең ярҙамын байтаҡ күрелде. Дыуан районында Мәрйәмғол ауылында йәшәүсе курсташым Сания менән ире Ғәлимйән Әхмәтовтар ит, картуф тейәп килеп етте. Курсташтарым Миҙхәт Мәмбәтов ҡатыны менән, Урал Нәҙерғолов менән Лена, Вил Бәхтейәров менән Фәриҙә, Марсель Ҡотлоғәлләмов менән Сания, Сибәр Дәүләтшина, Жеүәйрә Зарипова, Сәбилә Сөләймәнова менән Айрат Ғафаровтар үҙҙәренең иғтибарынан өҙмәне. Көйөргәҙе районы Таймаҫ ауылынан Ғимран Солтангәрәев улдарын алып килеп:

— Еңгәгеҙҙең ҡайнар ашын күп ашаным, хәҙер ул үҙе ярҙамға мохтаж, тел ярҙамы, ҡул ярҙамы күрһәтеп тороғоҙ, — тип, таныштырып китте.

Таңсулпаным тыуғас, бала табыу йортонан алып ҡайтырға дүрт "Волга" килде. Ә Марат Тәлғәт улы Аҙнабаев ҡатыны менән, дүрт баламды ла "Волга"һына ултыртып килеп, бала табыу йортона үҙе инеп, баланы күтәреп алып сыҡты.

Өфө ҡалаһынан Мәүрүзә Фәттәхова, Фәүзиә Байдәүләтова апайҙар иғтибарҙан өҙмәне, Фәүзиә апайҙың ҡыҙы Светлана бер-

нисә ай буйы балаларым менән музыканан түләүһеҙ шөғөлләнде. Балаларымдың дүртәүһе лә фортепианоға йөрөй ине. Рита менән Әхмәтхан Языҡбаевтарҙың ҡул ярҙамын күп күрелде. Минең ауыр хәлемде күреп, яҙыусы Гөлсирә Ғиззәтуллина, дөйөм ятаҡтағы бүлмәһен ҡалдырып, беҙгә күсеп сыҡты. Балаларыма өлкән апай, серҙәш, кәңәштәш, миңә бер туғандай һеңлекәш һәм ярҙамсы булды. Өс туған һылыуым Миңниса Сәфәрғәлина даими килеп, ҡул ярҙамы күрһәткеләп китте. Йәдкәр Рафиҡовтың ҡул ярҙамы ҙур булды. Әкрәм Биишев ағай мул итеп күстәнәс күтәреп ингеләп сыға ине.

Күгәрсен районы етәкселәре ҡымыҙға саҡырҙы, хатта алырға машина ебәрҙеләр. Ул саҡтағы ярҙамдары өсөн Венер Ғәлимйән улы Аҙнағолов менән Мәрүәгә, Сулпан Абдулхаҡ улы менән Венера Ғайсиндарға, сикһеҙ йылы мөнәсәбәте өсөн ҡәйнәһе Зөһрә апайға, Алик Ишмөхәмәт улы менән Асия Сәйетҡоловтарға һәм балаларына, ҡыҙҙары Әлфиә менән кейәүҙәре Юлай Ғәлийәновтарға рәхмәтлемен. Диҡҡәттең шәжәрә буйынса алыҫ, әммә рухи яҡтан яҡын туғандары Салиха менән Исмәғил Фәтҡуллиндар, Минира менән Мөхәррәм Үтәгәновтарҙың рухи ла, матди ла ярҙамдары ҙур булды. Был хаҡта тәпсирләп яҙыуымдың ғилләһе шул – алтмышынсы, етмешенсе, хатта һикһәненсе йылдарҙа кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр ниндәйҙер йылы, дуҫтарса ҡиммәттәргә ҡоролғайны. Бөгөнгө йәштәрҙең ҡайһы берҙәренең үҙ-ара мөнәсәбәттәре икенсерәк ҡиммәткә – алыш-бирешкә, файҙалы дуҫ эҙләүгә ҡорола башланы, шуға ҡарап бошонам да, үҙ заманым өсөн ҡыуанам. Ҡайтарырға кәрәк бындай ихлас мөнәсәбәтте.

Башҡорт халҡын быуаттар һуҙымында милләт итеп һаҡлап килеүсе төп көстәрҙең береһе ул туғанлыҡ менән дуҫлыҡ.

Кеше яңғыҙ йәшәй алмай. Яңғыҙ кешенең рухи таянысы булмай. Туғандар, дуҫтар, тотош милләт, халыҡ, ил менән көслө кеше. Донъяла туғанлыҡҡа бәрәбәр дуҫлыҡтан да ҡиммәтерәк төшөнсә юҡ. Шатлығыңды ишәйтә, ҡайғыларыңды тарҡата торған иҫ китмәле яҡынлыҡ ул. Туғанлыҡ һәм дуҫлыҡ – рухи ныҡлыҡ, рухи таяныс нигеҙе. Ышаныслы таянысың булыу өмөт шәмен һүндермәй тотоуға ярҙам итә.

Әлбиттә, һәр замандың үҙенә күрә төрлө бәндәһе була... Ләкин, бәхеткә күрә, ундайҙар бик аҙ. Ә шулай ҙа барҙар һәм ҡайһылары дуҫ булып ҡыланалар, ҡайһылары асыҡтан-асыҡ ҡаршы эшләйҙәр. Күрәһең, тәбиғәт өсөн ундайҙар ҙа кәрәктер. Кешене сыныҡтырыу өсөн тәбиғәт тарафынан бик күп һынауҙар бирелә, ошондай

һынауҙар өсөн файҙаланылалыр ҡайһы берәүҙәр. Ә кеше үҙенә дуҫ булырлыҡты күптәр араһынан айыра танып һайлап алырға тейеш-тер.

1982 йылда "Ағиҙел" журналының бер һанында минең "Һылыуҡай" исемле повесым баҫылып сығырға тейеш ине. Уға, минең иҫәбем буйынса, бер меңдән ашыуыраҡ гонорар булыр һәм иш яныңа ҡуш булып, был бол өҫтәлһә, декрет отпускыһынан имен-аман, артыҡ мохтажлыҡ күрмәй сығырмын тип уйланым. Диҡҡәттең вафатынан һуң, ҡулда әллә ни матди байлыҡ ҡалмағайны, мин фәҡәт үҙемдең ике ҡул көсөнә генә ышана инем. Машинкала баҫырмын, яҙырмын, тәржемә итермен, тип иҫәп тот-том. Биш балаға сығымдар байтаҡ ине. Уларға бирелгән 12 һум по-собие, пенсия, ул саҡтағы магазиндарҙың буш кәштәләре, һәр нәмәнең дефицитҡа әйләнеүе, һөт алыуға ла иртә таңдан сират алыуҙар йәки, сират алырға ваҡыт булмағанлыҡтан, сират һатыусыларға түләүҙәр һәм башҡа сығымдар... Хәҙер ул замандың күп ҡытлыҡтарын иҫкә төшөрһәң, ейәндәреңә генә түгел, үҙең ышаныр-ышанмаҫ хәлдә ҡалаһың. Хатта теш порошогына тиклем табып булмай торғайны... Өҫтәмә сығымдар, артығыраҡ хаҡ түләү һәм башҡа шундай юл менән генә табыла ине. Шундай ҡытлыҡ кисергән осорҙа бер меңһум аҡса суғым ғына килеп инһә, әлбиттә, һиҙелерлек бол булыр ине. Шуға күрә, повесымды планға индереп ебәргән Әмир ағай Гәрәевҡа рәхмәтле булып, балаларымдың өлөшө бар икән, тип ҡыуандым. Әмир Гәрәевтың ҡатыны Фәниә апай журнал редакцияһында машинистка булып эшләй ине, ул повесымдың номерға индерелеүе һәм типографияға төшөрөлөүе тураһында һөйөнсөләне. Бына-бына повесым баҫылып сыға һәм го-норар алам, тип өмөтләнеп, балаларым менән кемгә нимә алыу тураһында пландар ҡороп, исемлек төҙөп ҡуйҙыҡ. Бер аҙҙан, бан-дероль барып алырға, тигән ҡағыҙ килде. Унан алда ғына Зәйнәб Биишева Мәскәүҙән Таңсулпанға тип бик матур костюм ебәргәйне. Диҡҡәттең Мәскәүҙә йәшәүсе курсташы, МДУ уҡытыусыһы про-фессор Пиковский Юрий Иосифович та бер-нисә тапҡыр банде-роль ебәргеләне. "Тағы кем һалды икән?" — тип аптырап киттем. Почтаға барҙым. Нимә икән тип ҡараһам... "Ағиҙел"дә баҫыла башлаған повесымды кире ебәргәндәр... Был ни хәл? Типографияла баҫыла башлағайны бит. Әллә төҙәтмәләр индерергә генә ебәргәндәрме икән? — тип уйлайым, баҫылырына һаман өмөтләнәм. Ҡулъяҙма өҫтөндә хат бар. Асып уҡыйым. Шағир Ғ. Р. ағайҙан ине. "Һылыуҡай" повесы документаль нигеҙҙә яҙылғас, ҡайһы бер фактҙарҙы дөрөҫләргә кәрәк. Ул көйө генә журналда

сығара алмайбыҙ. Мәҫәлән, повестың төп героиняһы Һылыу Әхмәтованың ниндәй наградалар алыуы һәм ул наградаларҙы кем, ҡасан, ҡайҙа тапшырыуы тураһындағы мәғлүмәттәрҙе асыҡларға кәрәк. Уның өсөн хәрби архивҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк", – тип яҙған. Аптырап киттем. Бындай хатты повесты бөтөнләй уҡымаған кеше генә яҙа ала ине. Бөтөнләй мәғәнәһеҙ дәғүә. Повестағы ваҡиғалар дивизия яугирҙарының дошман тылына яһаған рейдынан сығыу ваҡиғаһы менән тамамлана. Һылыу Әхмәтова менән ошо уҡ полктың хәрби врачы Тәүфиҡ Саттаров өйләнешәләр, фронт шарттарында туй үткәрәләр, тик Саттаров, рейдтан сыға алмай, һәләк була. Повесть шуның менән тамамлана. Ә Һылыу Әхмәтова 1943 йылдан һуң ғына наградлана башлай. Һәм, ғөмүмән, повесть — кемдең ниндәй наградаға лайыҡ булыуы, кем ҡулынан нисәнсе йылда, нисәнсе айҙа алыуы хаҡында түгел, ә дивизия яугирҙарының еңеүгә булған оло ышанысы, патриотлығы һәм хатта үлем түшәгендә ятҡанда ла — рухи күтәренкелек, ҡот оскос шарттарҙа ла күңел матурлығы һаҡлап алып ҡалыуҙары хаҡында.

Аҙаҡтан асыҡланыуынса, был хат "юғарынан" ҡушыу буйынса, повесты алып ташлағандарына һылтау өсөн генә яҙылған. Әлбиттә, повесть йөкмәткеһендә ниндәйҙер ярамаған әйберҙәр хаҡында яҙылғаны өсөн түгел, әҫәр яҙыуға ҡарағанда әрһеҙлеге яғынан нығыраҡ талантлы яҙыусы Т. С. үҙ повесын сығарта һалыуҙы йәһәтләүе һәм юғары вазифалы бер-нисә кешене маҡтап телгә алыуы арҡаһында килеп сыҡҡайны барыһы ла. Хат яҙыусы автор ҙа был эштә ҡул шымартҡан кеше ине. Заманында шул уҡ "юғары кешенең" ҡушыуы буйынса Рәми Ғариповтың "Туған тел" шиғырының тетмәһен теткән ғалим-шағирҙың, юғары вазифалы йән дуҫы Т. Ахунъяновтың сираттағы "йомошон" үтәүе аңлашыла. Тик туктауһыҙ иман тураһында һөйләгән һәм роман яҙған яҙыусының ғына Диҡҡәт Бураҡаевтың ғаиләһенә ҡарата бындай мөнәсәбәте аңлашылманы. Сөнки, күренеп тора, бөтә был "хәстәрлекте" ул ойоштороғайны. Ә үҙе, Диҡҡәт иҫән саҡта, уның байтаҡ ҡына тел ярҙамын, кәңәштәрен күреп торған яҙыусы. Уның бер һыныҡ икмәккә мохтаж булып илап ултырырлыҡ балаһы юҡ, матди яҡтан миңә ҡарағанда сағыштырғыһыҙ өҫтөн. Ни эшләп улайтты икән? Мине ундай хәлдә ҡалдырыуының сәбәбен әле лә аңлап етмәйем.

Ул минең повесть урынына үҙенең "Аманат" повесын баҫтырып сығарҙы. Машинистка аптырап һөйләне: "Типографияла журнал баҫыла башлағайны. Туҡтаттылар ҙа уның повесын индерергә булдылар. Рус телендә яҙған. Үҙе үк минең эргәмдә ултырып

башҡортсаға тәржемә итә. Ашыға-ашыға баҫам. Корректор эргәлә көтөп тора, повесть биттәрен берәм-берәм типографияға йүгертә. Ни эшләп улай иткәндәрҙер — аңламаным..."

Аҙаҡ ҡына барыһы ла аңлашылды: уның повесы ла, "Һылыуҡай" ҙа Башҡорт дивизияһы яугирҙары тормошонан алынып яҙылғанға үҙ әҫәрен алдараҡ сығартыу ниәте менән әрһеҙләшкән икән. Минең повесым урынына баҫылған әҫәре хатта яҙылып та бөтмәгәйне, аҙағына "Повесть яҙылыу өҫтөндә" тигән ямау һалынғайны. Уның ҡарауы повестың инеш өлөшөндә, бөтөнләй урынһыҙға КПСС өлкә Комитетының идеология буйынса секретарын маҡтап телгә алған һәм шул ялағайланыу юлы менән "Ағиҙел" дең редакторы Әмир Гәрәевкә баҫым яһап, типографияла баҫыла башлаған журналды туҡтаттырып, "Һылыуҡай"ҙы алдыртып ташлатҡан. Ялағайлыҡтың ҡөҙрәте иҫ китмәле икән!

Йылдар үткәс, Т. С. романын мәктәп программаһына индертеү хаҡында ҡултамғалар йыйып, хаттар ойоштороп йөрөгән сағында Мәғариф министрлығына килгәйне, әмәлгә ҡалғандай, мин ултырған кабинетҡа инде.

— Теге ваҡыт ни эшләп минең повесты алдырттың һин? Аҡса етмәй инеме? Повесыңды аҙағыраҡ, яҙып бөткәс, сығартһаң да ҡулыңдан килә ине бит һинең...

— Шуға һаман үпкә һаҡлайһыңмы?

— Һин һүҙ әрәсәһенә тәрән төшөнгән яҙыусы. Ҡылған этлегеңә ҡарата "үпкәләү" тигән генә һүҙ үтә еңел түгелме? Биш баламдың күҙ йәшенән ҡурҡманыңмы? Һин бит уларҙы икмәкһеҙ ҡалдырҙың...

Әлбиттә, балаларымды икмәкһеҙ ҡалдырмау сараһын таптым. Яҙыусылар Союзынан оҙайлы командировкаға киттем.

КПСС-тың Күгәрсен район комитетының икенсе секретары Венер Ғәлимйән улы Аҙнағоловҡа индем. Ул өсөнсө секретарь Сулпан Абдулхаҡович Ғайсин менән РОНО мөдире Хәсән Барлыбаевич Мәзитовты саҡырып алды. Минең үтенесем шунан ғибәрәт ине: мин мәктәптә уҡытыу-тәрбиә эше тураһында әҙәби-публицистик әҫәр яҙырға тейешмен (*аҙаҡ был ниәтем "Тормош һабаҡтары" уҡыу программаһы һәм "Арғымаҡ" әҫәре булып донъя күрҙе*). Шуның өсөн мәктәпкә яҡын ғына йәшәргә мөмкинлек булған ауылға барырға, башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡытырға кәрәк. "Бала йоҡлаған арала дәрес биреп сығыр инем, үҙ балаларым да янымда уҡыр ине", — тинем.

Сәйетҡол ауылын тәҡдим иттеләр, һәм мин ғаиләм менән ошо ауылға күсеп киттем. Әлбиттә, дәрес биреү менән генә

сикләнмәнем. Ул юл менән генә тормошто өйрәнеп булмаҫ ине. Уҡытыусыларҙан һәм ауыл йәштәренән драма түңәрәге ойоштороп, Әсғәт Мирзаһитовтың "Әсәләр көтәләр улдарын" тигән пьесаһы буйынса спектакль ҡуйып йөрөнөк. Концерттар менән дә сығыш яһаныҡ, ауылда байрамдар ҙа үткәрҙек. Ҡатын-ҡыҙҙар көнөндә үткәрелгән үҙенсәлекле байрамды әле лә һағынып иҫкә алалар икән. Мәктәптә тыуған яҡты өйрәнеү музейы ойоштороҙом. Ауыл халҡының үтенестәре, йомоштары менән район Советы башҡарма комитеты рәйесендә лә байтаҡ булырға тура килде.

Әммә бер ваҡытта ла күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәнем. Минең маҡсатым юғары ине — ҡулдан ни килә — шуны эшләргә, мәктәптә уҡытыу-тәрбиә эшен өйрәнергә. Был ваҡытта мәктәптәрҙә уҡытыу-тәрбиә эшенең торошо менән ҡыҙыҡһына башлағайным. Башҡортостан Яҙыусылар Союзы идараһы рәйесе Әсғәт Мирзаһитов:

— Мәктәп эше менән ҡыҙыҡһын. Башҡорт әҙәбиәтендә мәктәп тормошо тураһында әҫәрҙәр юҡ. Балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәр фәҡәт йәйге каникулдарҙы ғына сағылдыра. Мәктәп тормошо, тәрбиә, балаларҙың күңел донъяһы тураһында әҫәр кәрәк, — тигәйне.

Балаларҙың уй-хыялдары, тормош, йәшәү хаҡында фекерҙәре менән яҡынданыраҡ танышыу өсөн, әҙәби һәм фольклор түңәрәктәре ойоштороҙом. Әммә балалар менән күҙмә-күҙ һөйләшеп ултырыу мөмкинлеге теймәне, сөнки түңәрәктәргә бөтә мәктәп уҡыусылары килә лә класс бүлмәһе тула ла китә торғайны.

Шулай итеп, мин ғаиләм менән бер йыл ауылда йәшнәп йәшәп ҡайттым.

Ҡайһылай ғына булмаһын, мин ул йылдағы матди ҡыйынлыҡтан сыҡтым. Юрағаның юш килә, теләгең менән ҡуш килә, ти ине әсәйем. Шуға фәҡәт ыңғай, яҡшы нәмәләр хаҡында ғына уйланым һәм юраным. Әсәйемдең был фекеренең дөрөҫлөгөнә үҙ тәжрибәм буйынса ла, башҡаларҙы һынау арҡаһында ла ышандым. Ысынлап та, үҙҙәренә һәр саҡ уңышһыҙлыҡ юраған, ауырыйым да ауырыйым, хәлем ауыр, тегенеһе барып сыҡмай, бынығы барып сыҡмай, мин бәхетһеҙ инде, тип үҙен йәлләтеп йөрөгән, үҙ рухтарын үҙҙәре ҡаҡшатҡан кешеләрҙең уңышҡа өлгәшкәнен күргәнем булманы.

Үҙ көсөңә ныҡлы ышаныс, оло маҡсат һәм булырлыҡ нәмәгә өмөт, ныҡышмалылыҡ кәрәк. Үҙ көсөңә ышанһаң – еңәһең. Ә икеләнеүле, ышанысһыҙ уйҙар кешене баҫа, уңышһыҙлыҡҡа һөйрәй, быуынһыҙландыра, рухын ҡаҡшата.

Был хәҡиҡәт. Иҫбат итеү кәрәк түгел. Миҫалдарҙы ла әҙәби

әçәрҙәрҙән эҙләргә кәрәкмәй, тормошта бихисап улар. Киң билдәле миҫалдарҙан ғына ла яҙыусы Ибраһим Ғиззәтуллин, ике аяғынан да яҙған Ирек Зариповтың Паролимпиадала дүрт алтын миҙал яулауы, тома һуҡыр композитор Салауат Низаметдиновтың, яҙмыш һынауына дусар ителгән, әммә һынмаған Урал Мостафин рухи нығлығын телгә алыу ҙа етә. Минең өс туған ағайым, Ейәнсура районының Ғәббәс ауылынан Ғәбитулла Шәрипов, Бөйөк Ватан һуғышында разведчик булып, тел алып ҡайтып килгән саҡта, минаға баҫып, 18 йәшендә генә уң ҡулһыҙ, тома һуҡыр булып ҡайта ауылына. Уның тураһында китаптың "Моң" тигән бүлегендә яҙҙым. Әммә ошо урында уның һүҙҙәрен килтерге килә: "Мин, Мәрйәм һылыу, шуға аптырайым. Ауылда шап-шаҡтай, һап-һау ирҙәр күңел ауырыуына шул тиклем ныҡ бирешкәндәр, өмөтһөҙлөк ауырыуынан ҡаҡшағандар. Китап уҡымайҙар, ололарҙың һөнәренә өйрәнеп ҡалыуҙы уйлап та бирмәйҙәр. Ике күҙле, ике ҡуллы көйө күңел шәмдәрен һүндергәндәр. Улайтып йәшәүҙең ни ҡыҙығы бар икән? Балаларын йәлләйем уларҙың. Улар ни күреп үҫә инде. Һуғышта ла осрағыланы ундайҙар, пуля тейер-теймәҫтән дөмөгә торғайнылар. Әл дә күп булманылар, атыу Гитлер бер һелтәүҙә юҡ итә ине илде. Шуға иҫәп тотҡан да бит ул. Халыҡты рухи ҡаҡшатыуға, милләттәрҙе тарҡатыуға... Барып сыҡманы."

Әллә былайтып ҡарайым микән...

йәки үҙ көсөңә ышанмай ҡарау һәм һәр саҡ икеләнеү бәләһе

Диҡҡәт үлгәндән һуң алған хаттар араһында бығаса бер нисә тапҡыр ғына күрә белгән таныштың да хаты бар ине.

"...Мин һинең тормошоң менән күптән ҡыҙыҡһынам. Үҙең иҫләйһеңме икән – уҡыусы сағында йәштәр гәзитендә бер шиғырың баҫылғайны. Өмөтлө генә ҡыҙ ҡәләм тибрәтә икән, тип шатланып ҡуйғайным. Унан һуң университетта уҡыған сағында радио аша ярайһы уҡ өлгөргән хикәйәңде тапшырҙылар. Гөлли Мөбәрәкова уҡығайны. "Ғәфү ителгән хыянат" тип атала ине ул. Университетта уҡығаныңды белгәс, бер тапҡыр йәштәр кисәһенә барҙым, тик танышырға, күрешергә баҙнат итмәнем. "Ағиҙел" журналында баҫылып сыҡҡанын да яратып уҡыным. Әсәйем дә башҡорт телендәге гәзит-журналдарҙы уҡый бара. Ул да, ҡара әле, бынау йәш кенә бала ҡалай олоғул хикәйә яҙған, тип күрһәткәйне хикәйәңде. Унан тағы бер хикәйәңде Биктимерова-Бураҡаева тип

баçтылар "Ағиҙел" журналында. Кейәүгә сыҡҡан икән был, тип уйланым. Тик ниндәй Бураҡаевҡа сыҡҡанынды ғына тоçмаллай алманым, сөнки мин белгән геолог һәм журналист Бураҡаевтың ғаиләһе бар. Ҡатыны, ҡыҙы. Уны яҡындан белмәһәм дә ишетә торғайным. Өфөлә бит беҙҙең егеттәр бармаҡ менән генә һанамалы, шуға күҙгә күренгән талантлыларҙы күрә белмәһәк тә, улар хаҡында хәбәрҙарбыҙ. Һораша торғас, белдем – шул Бураҡаев булған икән. "Ни эшләп ҡатын айырған кешегә сыҡты икән?" – тип аптыраным. Бер ваҡыт "Совет Башҡортостаны" гәзитендә, махсус хәбәрсе, тип мәҡәләләрең баçыла башланы. Күрге килеп китте. Редакцияға барып таптым. Һылтау өсөн тәржемә итеп бер хикәйә алып барғайным. Хәҙер авторын хәтерләмәйем. Рус теленән тәржемә иткәйнем. Ҡыр тәкәләренең ҡыр кәзәһе өсөн нисек итеп аяуһыҙ алышҡандары хаҡында ине. "Яҡшы нәҫел ҡалдырыу өсөн ҡыр йәнлектәре аяуһыҙ көрәшә. Ә беҙҙең егеттәр кем етте — шуны эйәртә лә ҡайта. Ҡыр йәнлектәре тиклем дә башығыҙ юҡмы ни һеҙҙең, егеттәр? Ниндәй нәҫел ҡалдырыу тураһында уйламайһығыҙмы?" тигән фекерҙе әйтке килгәйне. Һин әҙәбиәт бүлегенә алып инергә тәҡдим иттең. Бүлектә ҡалдырып киттем, тик: "Ундай сетерекле темаларға мәҡәлә баçырға ҡушмайҙар", – тип сығарманылар.

Һине студент сағыңда нисек күргәнмен — шулай инең. Нисә йыл ҡалала йәшәп, нисә бала әсәһе булып та толомоңдо һаҡлағанһың. Шуға аптыраным да, һоҡландым да. "Башҡортлоҡто һаҡлаған, толом үçтергән, ҡырҡмаған", — тип шатландым. Иçеңдәме икән — беҙ Салауат районында Лағыр совхозында көҙгө уңыш йыйған саҡта, бергә эшләгәйнек. Беҙҙе заводтан ебәргәйнеләр, ә һеҙ – студенттар. Бергә тип, һин ашханала инең, ә мин комбайнда эшләнем. Шул саҡта толомдарыңа иғтибар иткәйнем. Кем икәненде лә һорашып белгәйнем, хатта танышырға теләгән кешем булғанға аптырап та, ҡыуанып та киткәйнем, тик уҡыған кешеләр янына барып һөйләшергә ҡыйманым. Өфөгә ҡайтҡас, дөйөм ятаҡҡа барырға, тип, йыйынып бөттөм дә, тағы баҙнат итмәнем. Юғары белемем булмағас, ғүмер буйы үҙемде кәм тойҙом. Тик ни өсөндөр һәр саҡ һинең менән ҡыҙыҡһына барҙым. Хатта кейәүгә сыҡҡас та... Бәхетһеҙ булһаң, алырмын да китермен берәй яҡҡа, тигән дыуамал уй ҙа килгеләй ине башыма. Балаң тыуғас, был уйымдан төңөлдөм. Әммә халыҡ араһында төрлө хәбәр таралды. Һине ирең йәберләй икән, тәүге ҡатыны ҡыҙын эйәртә лә килә лә етә икән, һис тартынмай өйөнә лә бара икән, тинеләр. Тағы һораша башланым. Ул ҡатындың әрһеҙләшеп йөрөүе дөрөç булһа ла, һинең йәберләнеп

йәшәүең буш һүҙ ине. Һин бәхетле инең. Һин бер-бер артлы балалар таптың. "Бураҡаев был ҡатынынан уңды", — тинеләр. Бер саҡ дүрт баланды эйәртеп балалар баҡсаһынан ҡайтып барғаныңды күҙәтеп килдем. Артығыҙҙан эйәрҙем. Ҡалай яратаһың һин балаларыңды. Ирен яратҡан кеше генә балаларҙы шундай ҡайнар һөйөү менән ярата алалыр, тип уйланым. Мин быға һөйөндөм.

Ә үҙем һаман һиңә оҡшаған кеше эҙләнем. Таба алманым.

Таба алмам да инде. Һин хәҙер тол ҡалдың. Итәгең тулы бала. Ә мин һаман буйҙаҡ. Һинең тол ҡалыуыңдан үҙемә бәхет яһарға ниәтләнмәйем. Ә шулай ҙа ярҙам итергә әҙермен. Ниндәй ярҙамға мохтаж булһаң да, мин ярҙам итермен... Бер ултырып һөйләшергә ине...

Ғаиләңә һаулыҡ теләп, Ибраһим. Өфө ҡалаһы."

Хатҡа рәхмәт әйтеп яуап яҙҙым. Яуап хаттан һуң ауылға ул үҙе килде. Күргәс, танымайыраҡ торҙом. Ул быға аптыраны. "Шулай ныҡ үҙгәргәнменме ни?" – тине, йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгереп. Шунан сәбәбен дә әйтеп һалды: "Мин һине һәр саҡ күрә йөрөһәм дә, һин бит мине белмәйһең. Бөтөнләй иғтибар итмәүең дә ихтимал — мин һинең өсөн бер кем дә түгелмен", — тине.

...Беҙ икенсе курсты тамамлағас, колхозға эшкә алып барғайнылар. Заводтан да байтаҡ ҡына егеттәр килгәйне. Ибраһим да бар ине унда. Мине студенттарға һәм эшселәргә ашатыу өсөн асылған ашханаға ашнаҡсы итеп ҡуйҙылар. Ашнаҡсы булғас, кешегә күренеп йөрөлмәне, фәҡәт бешеренеү менән генә булдым. Таң менән эшкә киләм дә төн еткәс ҡайтып китәм. Аш таратыусы ҡыҙҙар ғына рәхмәт һүҙҙәрен килтереп еткерә ине.

Бер саҡ ашханаға ризыҡ килтереп еткермәнеләр. Ни әҙерләп ашатырға белмәй аптырап торҙом да ҡоймаҡ ҡойҙом. Һикһәндән ашыу кешегә ҡоймаҡ ҡойоуы еңел түгел ине. Әммә бик тәмле килеп сыҡты. Бөтөнһөһө лә аш таратыусы Рәшиҙә Сәйфуллина менән Фәриҙә Мотаеваға рәхмәт әйтәләр. Шул саҡ Ибраһим аш таратыр өсөн уйылған тәҙрә янына мине саҡырып алды. Берәй оҡшамаған нәмә килеп сыҡтымы, тип борсола-борсола килдем.

— Һеҙ ни эшләп әҙер аҙыҡ ташып йөрөгән ҡыҙҙарға ғына рәхмәт әйтәһегеҙ? Юҡтан бар итеп бына тигән ҡоймаҡ ҡойған, сәғәттәр буйы усаҡ янында янып-бешкән, һеҙҙе ас ҡалдырмау хәстәрлеге күргән кешегә әйтегеҙ рәхмәтегеҙҙең ҙур өлөшөн, — тине. Мин, әлбиттә, уның әйтеп бөтөүен көтөп торманым, уңайһыҙланып китеп барҙым. Әммә шул саҡта Ибраһимды яҡындан күрҙем. "Тәбиғәттең камил оҫталығылыр был! Ул тиклем дә матур кеше булыр икән!" – тип һоҡланырлыҡ һәм бер кемдең дә иғтибарынан

ситтә ҡалмаҫлыҡ егет ине йәш сағында. Колхозда эшләгән саҡта, беҙҙең ҡыҙҙар уның тураһында белешеп бөткәйнеләр, шундай матур кеше ни эшләп актер түгел икән, тип аптырайҙар ине. Әле инде, ысынлап та, ныҡ үҙгәргәйне.

(Байтаҡ йылдар үткәс, Диҡҡәт менән дә ошога оҡшаш ваҡиға килеп сыҡҡас, ҡоймаҡ ҡойоп ашатыу ваҡиғаһы тураһында Диҡҡәткә һөйләгәйнем: "Үҙебеҙ бешергән ашҡа үҙебеҙгә рәхмәт әйттереп өйрәнергә ваҡыт та ул. Ҡанга һалынмаған. Эшен эшләйбеҙ, ә ҡултамғаны икенселәр ҡуя", — тигәйне.

Диҡҡәт һөйләгән ваҡиға былай ине. Бер таныштарына бер фатирҙан икенсеһенә күсенергә ярҙам иткәндәр. Дүрт кеше, шул иҫәптән Диҡҡәт, етенсе ҡатҡа пианино күтәреп мендергәндәр ҙә, хәл йыйырға туҡтағандар. Шул сак ике ир фатирҙан килеп сыҡҡан да пианиноны һөйрәп алып инеп киткән. "Еңгәй, пианиноны ҡайҙа ҡуяйыҡ?" — тип ялпылдап йөрөп тә яталар ти. Ашарға ултырғайныҡ, хужабикә тауыҡ боттарын уларға тоторҙо. "Шул кәрәк беҙгә, асығауыҙҙарга," – тип, көлөштөк тә ҡуйҙыҡ. Талашып булмай бит инде. Әммә был ваҡиға беҙгә һабаҡ бирҙе. Ошонан һуң үҙем башлаған эште үҙемә тамамлап ҡуйырға, ҡултамғаһын үҙемә уйырға кәрәк тигән принцип ҡуйҙым," — тип һөйләгәйне.)

— Мин ашханала ашаған эшселәрҙең бөтөнөһөн дә иҫләмәйем, әммә һин иҫтәһең. Ҡыҙҙарҙы хыялыйҙар итеп йөрөгәнеңде хәтерләйем. Ҡоймаҡ өсөн рәхмәтең дә иҫемдә. Хатыңды уҡып ныҡ аптыраным. Ни эшләп һаман өйләнмәйһең? Һин ни эшләп үҙеңә баһаны бик түбән ҡуяһың? Аңламайым. Элек тә шулай инеңме, әллә берәй сәбәбе булдымы?

— Башым эшләп тә юғары белем ала алмауымды иң ҙур кәмселеккә һанайым. Мин был тормошта бер нәмәгә лә өлгәшә алманым. Хатта ғаиләм дә юҡ. Күкрәк һуғырлыҡ бер ни ҡыйратманым.

— Ә ни эшләп өйләнмәнең? Бөтөнләй өйләнмәнеңме, әллә айырылыштығыҙмы?

— Ул хаҡта һиңә хатымда яҙғайным да... Аңлата алманыммы икән... өйләнмәнем. Мине аңларҙай кеше тапмауымдан ҡурҡтым. Үҙем юғары белем ала алмағас, юғары белемле кешегә өйләнә алмам, балаларымды маҡсатлы, белемле итеп тәрбиәләй алырлыҡ кеше булмаҫ, тип хафаландым. Хәҙер балалар аҡыллы бит. "Беҙгә өйрәткән аҡылыңды ни эшләп үҙең тотманың? Ни эшләп уҡыманың?"– тиһәләр, ни тип яуап бирермен? Шуға, һис юғы, әсәйҙәре белемле булһын, тип уйлағайным да... Оҡшаған ғына

кеше булһа, бәлки уныһын-быныһын уйлап та тормаҫ инем дә...

— Оҡшаған кеше бөтөнләй осраманымы ни? Ҡыҙҙарға ҡытлыҡ юҡ бит.

— Бер тапҡыр осраны берәү. Самолетта осҡанда. Арыу ғына тойолдо. Һөйләшеп киттек. Ипле генә. Һиңә оҡшағанырағ бер ҡыҙ ине. Хатта сикәһендә бер шәлкем сәсенең бөҙрәләнеп тороуына тиклем оҡшағайны. Тағы осрашырға һөйләштек. Адресын алдым. Хушлашҡан саҡта исемен һорағам — Рузия, тине. Рузия... Нисек инде Рузия? Разия булһа, бер хәл. Разия булһа, мәғәнәһе бар. Һөйөклө, көтөп алынған, тигән һүҙ ғәрәп телендә. Ә Рузия бер ниндәй мәғәнәне лә аңлатмай. "Ҡатыныңдың исеме нисек?" — тиһәләр, "Рузия" тип әйтерменме? Көн һайын шул мәғәнәһеҙ исем менән өндәшерменме..." — тип уйланым да барманым да ҡуйҙым.

Эскерһеҙ бала кеүек, ни уйлаһа, шуны һөйләп ултырған ир уртаһы был кеше мине ныҡ аптыратты. Һорау артынан һорау тыуҙы. Телгә килгән бөтә һорауҙарымды биреп бөтмәһәм дә, уның интервью биргән кеше кеүек һәр һорауға асыҡтан-асыҡ һөйләп ултырыуы ҡыҙыҡ тойолдо. Ысынлап та, ихлас һөйләшеүгә сарсап йөрөгән кеше ине ул.

— Ә ни эшләп уҡырға инмәнең һуң? Институтта табыр инең үҙеңә тиңде. Һөйләшеүеңә ҡарағанда, зиһенең яҡты бит.

— Имтихандар биреп ҡараным. Ауыл хужалығы институтына инмәксе булғайным. Ауылыма ҡайтып эшләрмен тип хыяллана торғайным. Имтиханда бер ҡатын ултырып алған, әйҙә өҫтәмә һорауҙар бирә, әйҙә һорай. Яуап бирҙем-бирҙем дә — ҡул һелтәп сыҡтым да киттем. Юрый ныҡышҡаны күренеп тора ине. Хатта абитуриенттар ҙа аптыраған уның был ҡыланышына. Икенсе йылына тағы шул кешегә эләгәмсе. Мине танып тора. Ишек аҫкан ерҙән кире боролоп сығып киттем. Халыҡ белмәй әйтмәгән бит, иртә уңмаған — кис уңмаҫ, кис уңмаған — һис уңмаҫ, тип.

— Әле һаман заводта эшләйһеңме?

— Юҡ, институтҡа инмәһәм дә, уҡып-уҡып алғыланым мин. Умартасылыҡҡа уҡыным да үҙебеҙҙең ауылға ҡайттым. Хәйерсегә ел ҡаршы тигәндәй, мин ҡайтырҙан алда ғына совхоз директоры итеп минең элекке класташты ҡуйғандар. Мәктәптә хөрт кенә уҡыны. Эшкинмәгән генә бер малай ине. Математиканан гел минән күсерә торғайны. Ошаҡ, ярамһаҡланыу тиһәң инде — ашауын оноторкеше ине. Шул етәксе булып киткән... "Мин уның ҡул аҫтында эшләргә, унан һоранырға, уға отчет бирергә, уның кабинетының ишек төбөндә тапанып сират көтөп торорға, ҡабул итеүен үтенергә тейеш буламмы?" — тип уйланым да ҡайтманым. Электән шуны

күҙәткәнем бар — етәкселеккә гел генә ошаҡ яратыусыларҙы күтәрәләр. Етәксе булыу өсөн эш белеү, кеше яратыу сифаттары мөһимерәк түгелме икән ул? Етәксе бит – етәкләүсе тигән мәғәнәне бирә. Диҡҡәт ағай иҫән саҡта, бер ултырып шул турала һөйләшермен, тип уйлай торғайным. Ул, моғайын, дөрөҫ яуап бирер ине. Аҡыллы булған, тиҙәр. Яҙған мәҡәләләренән дә күренеп тора ине... Әлеге шул ҡыйыуһыҙлыҡ. Ғүмергә үкенескә ҡалды бына. Бураҡаев таш тураһында яҙһа ла милләт тураһында хәстәрлеге тойолоп тора, тиҙәр ине.

Шунан шоферлыҡҡа уҡырға индем. Шофер бер кемгә лә буйһонмай, үҙ алдына эшләп тик йөрөй, тип уйланым. Берәй ҙур ғына түрәне йөрөтөргә тура килһә, уларҙың ултырыштары йыш та, оҙаҡ та була торған, буш ваҡыт күп ҡалыр, китап-гәзит уҡырмын, берәй юғары уҡыу йортона әҙерләнермен, тип уйланым. Ваҡытты бушҡа үткәрмәҫ инем. Тик түрә шофery булып эләгеү өсөн дә ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ кәрәк икән. Ә минең ундай кешем юҡ. Аңҡытиңке йөрөй бирҙем дә йөк машинаһында эшләй башланым. Оҙаҡ эшләй алманым. Беҙҙә бит, сит илдәрҙәге кеүек, машинаң боҙолор-боҙолмаҫтан төҙәтеп биреү юҡ. Арыу кейенеп йөрөп булмай, машина аҫтына инеп китеп төҙәтергә, көйләргә кәрәк. Аҙ ғүмер эсендә гел генә ары-бире кейенеп, майланып, машина аҫтында шөрөп бороп ятып булмаҫ, тип уйланым. Өҫтәүенә, иҫке машина бирҙеләр. Ташланым. Бухгалтерҙар курсын тамамланым. Байтаҡ ваҡыт шул системала эшләп йөрөнөм. Ҡәҙимге оҡшап та киткән кеүек булды. Һандар үҙе бер ҡыҙыҡ донъя икән ул. Мауыҡтырғыс. Тик бер командировканан түләүле булып ҡайттым. Эш хаҡынан мул ғына умырып алып ҡала барҙылар. Тағы китергә тура килде.

— Ни эшләп түләнергә тура килде?

— Уныһы үҙе бер ваҡиға инде. Салауатҡа командировкаға барғайным. Ҡунаҡханала ике кешелек номерға урынлаштырҙылар. Бер кешелек урын юҡ тинеләр – миңә тигәндә шулай бит ул. Ике генә көнгә барғас, алмашҡа кейем дә алмағайным. Вокзалдан ҡунаҡханаға килеп еткәнсе ямғыр аҫтында ҡалып лысма һыу булдым да, ванныйҙа тотош кейемдәремде йыуып, киптерергә элеп, простыняға уранып яттым. Күршем тора ла тәмәке тартып инә, тора ла тәмәке тартып инә. Йоҡо бирмәй. Бөркәнә биреберәк стенаға яғына боролоп яттым. Бер саҡ теге ир ҡыштыр-ҡыштыр итеп нәмәлер эҙләнгән һымаҡ йөрөй башланы. "Әллә минең әйберҙәрҙе аҡтара инде был?" — тигән уй килеп инде мейемде ярып. Һикереп тороп ҡарарға оялам. Теге кешене енәйәт өҫтөндә

тотоуҙан тартынам. Ни эшләр икән был, тип көтөп ятам. Бер саҡ төн уртаһында тағы тороп сығып китте. Был юлы оҙаҡланы, ни эшләп оҙаҡлай икән тиһәм, бөтөнләй инмәне. Ниҙер һиҙенеп тороп ҡараһам, бөтә кейемдәремде лә, хатта киптерергә элеп ҡуйған эске кейемдәремә тиклем тотоп сығып киткән. Простыняға урандым да артынан йүгерҙем. Милицияға әйтеп тоттоҡ тегене. Төн уртаһында ни транспорт юҡ, ҡала урамы буйлап йәйәүләп китеп бара. Милиция бүлегенә алып килеп, кейемдәрҙе тартып алдыҡ. Өҫтөнә ҡатлап кейеп бөткән. Кеҫәһен тентеп минең документтарҙы таптыҡ. Аҡса килтереп сығарғайнылар – минеке түгел, тип алманым. Ҡайтҡас, ҡараһам, минең аҡса булып сыҡҡан. Мин аҡсаны матрац аҫтына һалғандай булғайным, уның ҡулына нисек эләккәндер — кем белһен инде. Ҡайтанан барып әйтеп булмай бит. Байтаҡ түләндем. Шунан һуң аҡса эшенә яҡын да барманым. Яңынан шофер булып эшләп йөрөйөм. Әйтәм бит, был тормошта уңышһыҙлыҡҡа юлығыр өсөн яратылғанмын. Йә һин кейәүгә сығып өлгөрҙөң...

— Һин миңә тәҡдим яһағайныңмы һуң? — тип һораным, аптырап.

— Бөтә бәлә лә шунда шул — ҡыйманым... Тәҡдим яһау түгел, яныңа килергә лә тартына инем. Һин бит юғары белемле, ә мин уҡый алманым. Ярай, ни булһа ла, нисек булһа ла ғүмер үтте инде. Һинең менән бер ултырып һөйләшергә ине, тип хыяллана торғайным — һөйләштем. Ҡулда машина — ярҙам кәрәк булһа, әйт. Баҡсаңда ла эштәр барҙыр...

Әлбиттә, ярҙамдан баш тартманым — баҡса өйөнөң ҡыйығын ябып биреүҙе һораным. Ихлас риза булды. Иртәгәһен үк баҡсаны барып ҡарап, кәрәк-ярағын килтерҙе, ял көндәре килеп бик бөхтә, сымыры итеп эшләй ҙә башланы. Ыҫпай ғына, таҙа ғына кейенеп килер, балалар менән ипле генә һөйләшер ине. Балаларҙың, атайҙарын юҡһынып, ныҡлап һағына башлаған саҡтары — Ибраһимға өйрәнеп тә киткәндәй булдылар, килерен көтөп ала торғайнылар. Барыһы ла бәләкәй булғас, күп һымаҡ тойолдо микән — ишле булыуҙарына һәр саҡ аптырай торғайны ул.

— Балаларҙы ни эшләп ул хәтлем итеп ташланығыҙ һуң?

— Беҙ бала яраттыҡ. Ғаиләнең ишле булыуын теләнек. Диҡҡәт, мин, атайым һымаҡ, ер йөҙөндә алты бала ҡалдырырға тейешмен, ти торғайны.

— Алтынсыһына өлгөрмәнегеҙ инде...

— Диҡҡәттең беренсе ҡатынынан бер ҡыҙы бар. Шулай булғас,

йәмғеһе алты бала. Хыялын тормошҡа ашырҙым.

— Шулай ҙа ул. Хәҙер ни эшләйһең? Бөтөнөһөнә лә юғары белем бирә алырһыңмы? Бала яратыу арҡаһынан тупылдатып һөйөп, битенән супылдатып үбеү генә түгел бит. Кеше араһында кәм-хур итмәй кейендереүгә, сәләмәтлеген ҡаҡшатмаҫ өсөн тейешенсә витаминлы аҙыҡтар ашатыуға күпме кәрәк. Шул хаҡта уйлап ҡараманыңмы? Бала яратыу — уны әҙәм араһында әҙәм итеп бағыу ҙа бит әле. Беҙ атайһыҙ ҡалғас, әсәйем икебеҙҙе уҡыта алманы. Һинекеләр бит бишәү. Сабыйың аяҡҡа баҫҡансы эшләй ҙә алмайһың бит инде. Ағай туҡтауһыҙ йөрәк менән сирләгәс, былай булыры күҙ алдына килмәнеме ни — ни эшләп аҙыраҡ уйламаның? Яҙыусылар тормошто алдан күреүгә һәләтле түгелме ни? Хәҙер ни эшләмәксе булаһың?

— Йәшәргә. Йәшәргә тыуғанмын донъяға. Зарланып ултырыр өсөн түгел. Үҙ көсөмә ышанғанға таптым. Артҡа юл юҡ, тик алға ғына.

— Артҡа юл булһа, ни эшләр инең?

— Биш бала табыр инем.

—Оптимист булыуың яҡшы ла ул. Аҙаҡ балаларың үпкәләмәҫме?

— Балаларым үпкәләмәҫлек итеп йәшәргә тырышам.

— Һин тормошҡа ысынбарлыҡтан сығып ҡара. Ул тиклем юғары рухлы булма әле. Рух менән генә тамаҡ туймай. Улыңды, бәлки, эшкә кертерһең. Армиянан ҡайтһын да — эшләһен. Ир балаларға ниндәй эш тә бара. Теләге булһа, аҙаҡ уҡыр. Ҡыҙҙарыңа еңел эш кәрәк, әлбиттә. Матур булып үсһендәр. Кәүҙәләрен боҙмаһындар. Ана ауыл ҡыҙҙары бәләкәйҙән ауыр күтәреп тоҡос ҡына кәүҙәле булып ҡалалар. Кәүҙә бәләкәс, аяҡтар кәкере. Беҙҙең заман ҡыҙҙары бигерәк тә шулай үҫте. Кеше күҙенә күренергә тартынып йөрөй торғайнылар. Шуға ағайҙар, кәүҙәлерәк ҡыҙҙар күҙләп, кем етте — шуға өйләнеп бөттөләр ҙә хәҙер үкенеп йөрөйҙәр. Үкенә белгәндәре. Беҙҙең ирҙәр ни эшләптер балаларына әсәй булырлыҡты түгел, ә ҡупырайып эйәртеп йөрөрлөктө ҡарай бит. Әйтерһең, аҡыл кәүҙәнең дәүмәленә ҡарай. Аҙаҡ терһәк тешләп булмай. Үҙ өйөндә үҫкән бала һине һанға һуҡмай, атай тип тә әйтмәй, олатаһы теләндә һөйләшә лә белмәй үсһен әле... Өҫтәүенә, милләттең бәкәленә һуға. Һуғыш булмаһа ла, һаман артмайбыҙ. Ярыша-ярыша башҡа милләт өсөн бала баҡҡас ни... Ярай, уныһы... Һинең ул яҡтан намыҫың таҙа... Ә матди яҡтан хәлең еңел түгел. Һыр бирмәҫкә генә тырышаһың. Баштан үтте. Әсәйемдән беләм. Ҡалай матур ине әсәйем йәш

сағында. Беҙ тип ҡартайҙы. Һуғыш ваҡытында тол ҡалдың ни ҙә, әле яңғыҙ ҡалдың ни. Яңғыҙлыҡ ҡасан да яңғыҙлыҡ инде. Улың тыңлаулы, йөктө бергәрәк тартһағыҙ, еңелерәк булыр...

— Улымды ла уҡытам. Баштары эшләй, зиһендәре яҡты. Уҡыһындар. Бер ҡалһа, ҡала ул. Аҙаҡ ҡайҙа эшләһә лә эшләр. Мин үҙ бурысымды үтәйем. Береһе иҫәбенә икенсеһен йәшәтергә уйламайым. Һәр береһенең үҙ тормошо.

— Уныһын дөрөҫ уйлайһың. Һәр кем үҙ тормошо менән йәшәргә тейеш. Бына мин, ҡустымды уҡытам, тип үҙем уҡыуға инеүҙе һуңға ҡалдырҙым да ошолай тороп ҡалдым. Ә ҡустым уҡыуҙың ҡәҙерен белмәне — башын эскегә һалды... Уға еңел бирелде, минең көс иҫәбенә йәшәне. Әҙерәк нужа һурпаһы татыһа, бәлки, тормошҡа икенсе төрлөрәк ҡарар ине... Хәҙер арала туғанлыҡ тойғоһо ла юҡ.

Эс серҙәрен һөйләр кешеһе лә булмай, күңеле менән һыйыныр урын тапмай йөрөгән Ибраһим беҙгә йыш ҡына килә башланы. Улым, урта мәктәпте тамамлаған йылда уҡ, Башҡорт дәүләт университетына уҡырға инде. Ҡабул ителеүе хаҡында белешеп шатланып ҡайтты.

— Иртәгә, ял көнө, баҡсаға барып ағайға ҡыйыҡ ябышырға ярҙам итермен, — тип дәртләнеп йөрөнө.

Иртәгеһен Ибраһим иртүк килеп етте. Улымды ҡотланы:

— Һин ҡалай бер киҙәнеүҙә йыға һуҡтың да ҡуйҙың. Еңел билеттар эләктеме? Хәйер, һинең ни фамилияң бар бит. Фамилияның да әһәмиәте ҙур шул. Бына мин ауылдан килеп, ҡайҙа, кемгә барырға белмәй аптыранып йөрөнөм. Йә шул саҡта юҡҡа атайыңа килмәгәнмен. Уның абруйы бик ҙур булған икән. Ә һиңә ни ишектән инер-инмәҫтән "бишле" ҡуя башлағандарҙыр ул? Ярай, ҡыйыҡ ябышып йөрөмәҫһең инде хәҙер — һин бит буласаҡ аҡһөйәк. Һәр кем үҙ өлөшөнә төшкәнде башҡарырға тейеш.

Улым оҙаҡҡа һуҙылған ҡыйыҡ ябыу эшен йәһәтләтеп маташты, әммә Ибраһим, ҡыҫылма, интеллигент башың менән ҡара эш эшләмә, тип уны яҡын ебәрмәгәс, аҙыраҡ аҡса эшләйем, тип Күгәрсен районына колхозға эшкә китте.

Баҡса өйөнөң ҡыйығы ябылды. Бик ентекле, сымыры, матур итеп башҡарҙы был эште Ибраһим. Күрше тирә-яҡты һоҡландырҙы уның эше. Хатта күршеләр үҙҙәренә лә ярҙам итеүен һорап маташты. Тик Ибраһим, мин көнлөксө булырға яратмайым, тип баш тартты. "Һәр тинеңде һанап тотонғансы, риза булһаңсы. Ҡулың оҫта, тәпсирләп эшләйһең — мул ғына түләһәләр, өҫтөңә

кейем алыр инең!" — тип үз фекеремде әйттем.

— Магазиндарҙа йүнле кейем юк бит. Ҡулға аҡса тотоп йөрөүҙән ни файҙа? Берәй сит илгә сығып булһа, арыу ғына итеп кейенеп ҡайтыр инем, тигән уй бар ине лә... Атайым һуғышта хәбәрһеҙ юғалған. Сит илгә сығырға рөхсәт итмәйҙәр. Ә беҙҙең ил кейемдәренең рәте бармы ни ул !

— Беҙ шуларҙы кейәбеҙ бит инде.

— Кейәһең инде. Кеймәй ҡайҙа бараһың? Йә минең кеүек әллә ҡасанғы, ҡайҙандыр эләктергән импорт кейемең менән йөрөйһөң, йә юҡ-бар нәмәгә аҡсаңды әрәм итәһең. Тәки йүнләп йәшәтмәне беҙҙе коммунистар. Ялтыр баш бутаны донъяны. Ағаһының үсен алам тип, тотош донъяның аҫтын өҫкә килтерҙе! (*Ленин тураһында бара ине һүҙ*). Ниндәй башлы кешеләрҙе юҡҡа сығарҙылар — әле сит илгә, әле һөргөнгә олаҡтырҙылар. Минең шул тиклем эшсән олатайҙы, ике һыйыр тотаһың тип, Себергә һөргәндәр. Йәшәйбеҙ хәҙер эш рәте белмәгән эшкинмәгәндәр ҡулы аҫтында. Уйлап ҡараһаң, революциянан һуң Кремлдә бер-нисә генә кеше юғары белемле булған бит.

Ибраһимдың был фекерен балаларым алдында әйттерге килмәй ине. Мин уларға бөтөнләй икенсе фекер һалырға тырыша инем. Беҙҙең быуын Коммунистар партияһы, Совет хөкүмәте тоткан юлға оло ышаныс тойғоһо менән үҫә ине. Ибраһим кеүек фекер йөрөтөүселәр ҡайһы бер ойошмаларҙың шымсылары тарафынан эҙәрлекләнә һәм ауыҙ асып ил сәйәсәте тураһында һүҙ әйтмәҫлек кимәлгә еткерелә инеләр. Шуның өсөн иң элек балаларымдың күңел донъяһын байытыуҙы, эске булмышының "арҡа һөйәген" нығытыуҙы маҡсат итеп ҡуйҙым.

Үҙ яҙмышыңдың хужаһы булырға кәрәк. Шарттар һинең менән идара итмәһен, һин шарттарҙан өҫтөн бул, оҡшамаһа, үҙгәрт, үҙеңсә ҡулайла. Бөтә уңышһыҙлыҡты – яҙмышҡа, даланың булмауҙы – бәхетһеҙлеккә, үҙеңдең йүнһеҙлегеңде кешегә япһарып, һылтау эҙләп, кешенән ярҙам өмөт итеп, үҙеңә фәҡәт уңышһыҙлыҡ ҡына юрап, мыжып йәшәү тик бәхетһеҙлек кенә килтерә. Даими рәүештә үҙтәрбиә менән шөғөлләнгәндә генә рухи камиллыҡҡа һәм уңышҡа табан барырға мөмкин, — тип өйрәтергә тырыша инем.

Ибраһим фәҡәт уңышһыҙлыҡҡына тултырып алған тоткаһыҙ сумаҙан һымаҡ. Уның һәр саҡ ризаһыҙ, ҡәнәғәтһеҙ булыуына аптырай башланым. Әлбиттә, илебеҙ тормошондағы ҡайһы бер кире күренештәр тураһында дөрөҫ һөйләй ине. Төндәр буйы радионан "Голос Америки" тыңлау үҙ эҙемтәһен һала барған. Әммә ундай

дөрөçлөктән ни файҙа? Үҙеңдән ҡасып булмай. Ошо илдә тыуғанбыҙ икән, ошо илдең патриоты булырға тейешбеҙ, бигерәк тә сағыштырмаса аҙ һанлы үҙ милләтебеҙ өсөн һәр беребеҙ ҡәҙерле, тигән ҡарашта булдым мин.

— Һин уйҙың тылсымлы көҙрәтенә ышанаһыңмы? — тип һораным унан бер ваҡыт.

— Ни эшләп?

— Кешенең уйы көҙрәтле бер көскә әйләнә лә, яҙмышы менән идара итә башлай. Уйлаған уйҙарың тотош булмышыңды солғап ала һәм, маяҡ һымаҡ, алдан юл яҡтыртып бара. Шуны белəһеңме? Ижади уңыштар ҙа, ғилми асыштар ҙа, хатта Һин әйткән "ялтыр"ҙың донъяны тотош үҙгәртеп ебәреүе лә иң элек уй-фекер булып зиһенгә урынлашҡан. Донъяла бер нәмә лә барҙан юҡ булмай, юҡтан бар булмай, тибеҙ. Кешенең уйҙары ла юҡҡа сыҡмай. Шуның өсөн бер ваҡытта ла үҙеңә уңышһыҙлыҡ юрарға, хатта уйлап ҡарарға ла ярамай. Һин үҙеңдең рухи шәмеңде үҙең һүндерәһең. Һинең менән уңышһыҙлыҡ тураһындағы уйҙарың идара итә башлаған. Өçтәүенә, Һин ниәтләгән эшеңде һәр ваҡыт урта юлда уҡ туҡтатҡанһың. Кеше ниәтләгән саҡта, үҙенең бөтә уй-фекерен шул йүнәлешкә көйләй. Ошо йүнәлеш тиҙлек йыя башлаған ғына мәлдә, Һин ҡапыл туҡтатаһың йәки ҡырҡа кире бораһың. Тупланған көсөң, дәртең, ҡеүәтең селпәрәмә килә. Хыялыңды тормошҡа ашырырлыҡ көс тә ҡалмай.

— Һин быларҙы үҙ мейеңдән алып әйтәһеңме? Әллә Диҡҡәт ағайҙың аҡылымы?

— Диҡҡәттән мин бик күп нәмәгә өйрәндем.

— Әллә мин дә уңыш тураһында уйлай башлайыммы икән? Һинең менән элегерәк һөйләшһәм, бәлки, уҡырға инеүҙе лә рәткә һалыр инем. Хәҙер һуңмы икән? Ситтән тороп уҡырға нисә йәшкә тиклем алалар икән?

— Һин ни эшләп бөтә уңыштарҙы ла юғары белем алыуға ғына ҡайтарып ҡалдыраһың? Ана бит ҡустың белемдең иң юғарыһын алған, ә файҙалана белмәгән. Минең Ғәйнетдин ҡайнағам бар. Диҡҡәттең бер туған ағаһы. Ғүмере буйы шофер булып эшләне. Фотоһы Почет таҡтаһынан төшмәне, исеме һәр саҡ маҡтап телгә алынды. Һөйләшә башлаһаң, белмәгәне юҡ. Бер кем дә уның дипломын тикшермәй, ә белеменә иғтибар итә. Эшендә абруйлы, үҙ һөнәрен камил үҙләштергән. Хатта юғары белемле етәкселәре лә уның фекере менән иçәпләшә ине. Ә хәҙер ана юҡҡа сығарылған Үрге Моталға ҡайтып, атаһының йорт урынына тап элеккесә итеп өй һалып, донъя көтә.

Бөтә уңышһыҙлыҡты юғары белем булмауға ҡайтарып ҡалдыра башлаһаң, илебеҙҙәге күпме кеше уңышҡа өлгәшә алмай, үҙен бәхетһеҙлеккә дусар итеп йәшәргә тейеш булып сыға түгелме?

— Уныһы ла дөрөҫ. Берәй яҡҡа барып умартасы булып ҡына урынлашайыммы икән?

— Хәҙер хаҡлы ялға киткәнсе ошо эшеңдә йөрө лә, аҙаҡ уйларһың, — тинем.

Байтаҡ ваҡыт күрешмәнек. Илдә бик ҙур үҙгәрештәр булды. Бер саҡ урамда осраттым.

— Иң ҙур теләгең ҡабул булды. Һиңә ҡамасаулаған система юҡҡа сыҡты. Тормошоңдо үҙеңсә яйға һал хәҙер. Магазин тулы сит ил кеймдәре. Йәнең теләгәнен һайлап кейеп була, — тинем.

— Кейерһең... Система үҙгәреү менәнме ни ул... Хайуандары шул уҡ. Коммунистар көпөләрен генә әйләндереп кейҙеләр бит. Урындарҙа шул уҡ кешеләр ҡалды. Бер коммунистың алдауы арҡаһында ғүмер буйы туплаған аҡсам елгә осто.

— Нисек? Тағы таланылармы?

— "Восток"тың Ҡадыровы алып ҡасты. Врачлыҡҡа уҡыған, Гиппократ антын биргән кеше, тип ышанған булам мин уға... Ун ике меңаҡсамды һалғайным... Кеше хаҡын ашағандар йүнле үлем менән үлмәй ул. Үлем алҡымыңдан алған саҡтағы ғазаптарың ғүмерлек рәхәтлегеңде юҡҡа сығарасаҡ. Ожмахы ла, тамуғы ла ошо фани донъяла ул. Әллә ҡайҙа түгел. Ана бит, Диҡҡәт ағай, изге күңелле булғас, йөрәге туҡтап ҡына үлде. Ә Ҡадыров һымаҡтарҙың гонаһлы йәндәрен Тәңре ҡабул итмәй, тәндәренән ҡотола алмай яфалаясаҡ. Өҫтәүенә, балаларының да рәте булмай. Күҙәткәнем бар: әсе тир һеңгән мал ғына үҙеңә бол ул, ә кеше ҡәһәре һеңгән харам аштың йоғошо юҡ уның – ғазаплы үлем көҫәй ул.

Йәл ине миңә Ибраһимдың ғүмере. Тәбиғәт бөтөнөһөн дә биргән. Аҡыл да, зирәклек тә, буй-һын да, төҫ тә. Тик үҙ яҙмышын үҙе ҡора ғына белмәгән. Тәүәкәллек, ихтыяр көсө етмәгән. Берҙән-бер туғаны менән аралашмай, дуҫтары юҡ. Алдына ҡуйған маҡсатына табан эҙмә-эҙлекле бармаған. Әле бер, әле икенсе эш башлап ташлаған. Ҡыҫҡаһы, ул тәбиғәт ҡанундарын боҙған. Тәбиғәт фәкәт булдыра белгәнгә, булдырыу өсөн ынтылғанға ғына бирә. Булдыра белмәһә, үҙе ынтылып тормаһа, булғанын да кире ала.

— Һинең хәлдәреңде ишетеп-белеп торам. Таянысһыҙ, аҡсаһыҙ тороп ҡалғайның бит...

— Балаларым үҫте. Иң ышаныслы ярҙамсыларым улар хәҙер. Ҡулыбыҙҙан килгән тиклем киләһе быуынға ни булһа ла эшләп ҡалдырырға ынтылабыҙ. Улым менән "Тормош һабаҡтары" яҙыуҙы

дауам итәбеҙ. Уның үҙенең "Күк бүреләре" тигән хикәйәләр йыйынтығы баҫылып сыҡты. Балаларым менән республикала беренсе башлап ауыл гимназияһы астым. Ҙур ҡыҙым Гөлназ башҡорт мәктәптәре өсөн музыка буйынса "Халҡым күңеле – хазина" тип аталған программа эшләне. Аудиокассета сығарҙы. Гөлнур ҡыҙым Өфө сәнғәт институтының режиссерҙар әҙерләү факультетын тамамланы. Уның менән "Тормош һабаҡтары" программаһы нигеҙендә "Йәйләү" ял итеү үҙәге концепцияһы яҙҙыҡ. Бына нисә йыл инде ошо программа нигеҙендә ял итеү үҙәктәре эшләй. Хәҙер "Тормош һабаҡтары" буйынса видеокассеталар эшләй башланы. Башҡорт легендалары буйынса нәфис видеофильмдар төшөрөргә хыяллана. Өсөнсө ҡыҙым Зөһрә Мәскәүҙә Максим Горький исемендәге әҙәбиәт институтынан һуң ВГИК-та сценарийҙар курсын уңышлы тамамланы. Ижад итә, хикәйәләре, тәржемәләре баҫыла, телевизион тапшырыуҙар өсөн сценарийҙар яҙа. Яҙыусылар союзы ағзаһы. Бер ғаиләнән өс яҙыусыбыҙ. Бәләкәй ҡыҙым Таңсулпан рәссам, әле режиссерлыҡҡа уҡый, беҙ яҙған дәреслектәрҙең ҡайһы берҙәренең художнигы, Өфө сәнғәт академияһын тамамланы. Зөһрә менән икәүләп ике нәфис фильм төшөрҙөләр. "Рәхмәт", "Минең йондоҙом" фильмдары.

— Яҡшы. Мин бик шатмын. Әммә беләм бит, үҫтеләр инде, тип әйтеүе генә еңел. Ҡулыңда йәш балаң булды. Балаларҙы ашатыу, кейендереү, уҡытыу, кеше алдында кәм-хур итмәй үҫтереү өсөн күпме көс кәрәк. Улар ауырығандыр ҙа, мыжығандыр ҙа, төн йоҡоларың да ҡалғандыр... Үҫмер саҡтарында ла ҡатмарлыҡтар булғандыр. Балаларҙың ул мәленең ауырлығы хаҡында бик күп яҙалар. Унан һуң йәмәғәт эштәренә күпме ваҡытың китә. Берәйһе ярҙам иттеме?

— Ярҙамсыларым күп булды. Дуҫтарым, туғандарым.

— Ситтән килгән ярҙам күстәнәс һымаҡ ҡына инде ул. Күстәнәсте рәхәтләнеп бер ашайһың да бөтә. Улар даими аҡса биреп тормағандарҙыр бит?

— Уныһы шулай. Әммә бөтөнләй яңғыҙ булдым тип әйтә алмайым. Даими рухи ярҙам итеп тороусыларым да бар минең, — тинем дә, ысынлап та, рухи таяныстарым хаҡында әйтеп сыҡтым.

Ибраһим менән һөйләшеүҙән һуң, ысынлап та, үҙемә рухи көс биреүсе ҡатын-ҡыҙҙар тураһында бәйнә-бәйнә уйланым. "Башҡортостан ҡыҙы" журналында эшләгән саҡта үҙем яҙған шәхестәрҙе күҙ алдынан үткәрҙем. Һәҙиә апай Дәүләтшинанан рухи көс алдым. Уны һәр саҡ янымда тойҙом. "Мин картуф ҡабығы ашап, мунса изәне йыуып йөрөгән саҡта ла бөгөлмәнем, ижад иттем. Һин ул

хәлдә түгелһең, яҙ", – тип торғандай ине. Рабиға Ҡушаева: "Башҡорт ҡатындары әсәй генә түгел, йәмәғәт эшмәкәрҙәре лә булырға тейеш", — тип, һәр саҡ иҫкәртеп торҙо, тик ятырға форсат бирмәне. Зөләйха апай Ғиззәтуллина гел генә эргәмдә торғандай булды: "Бер бөгөлһәң, яңынан турайыуы ауыр булыр. Бөгөлмә. Мин инвалид ағайың менән биш бала үҫтерҙем," — тине. Зәйнәб Биишева, миңә оло ышаныс бағлап: "Халҡыбыҙҙың күңеле матур бит, Мәрйәм һылыу. Һин шуны күрә беләһең. Ундай кеше яҙырға тейеш", — тип дәртләндереп торҙо. "Бер кем дә, мә һиңә ваҡыт, яҙ, тип услап ваҡыт килтереп бирмәҫ. Ваҡыт тап, яҙ", – тип аҡыл биргән Йыһат ағай Солтанов, яҙаһыңмы, тип иҫкәртеп тикшереп торғандай булды. ЖЗЛ серияһы менән сығарылған бөйөк шәхестәрҙең барыһы ла миңә аҡыл бирҙе, рухландырҙы. "Балаларым өсөн мин тыныс", – тип, бәхилләшеү һүҙе әйткән Диҡҡәт алдында һәр ваҡыт яуаплылыҡ тойҙом. Әсәйем: "Ғорур бул. Ваҡ-төйәккә ваҡыт сарыф итмә, кеше һүҙе юллап ғүмереңде үткәрмә. Тәбиғәт һәр кемгә үҙ һәләтен бирә, кемгә китап яҙырға, кемгә ғәйбәт уйлап сығарырға. Һәр кем үҙ шөғөлө менән мәшғүл", — тип иҫкәртеп, сүбәк сәйнәргә яратыусыларҙан ҡурсалап торҙо. Мәрфуға апайым да, ҙәнәй фажиғәле вафат булғас, егерме туғыҙ йәшендә генә тол ҡалды. Дүрт балаһын бер үҙе бағып үҫтерҙе, бөтөнөһөнә лә юғары белем бирҙе. "Ошондай кешеләрҙең аҡылынан, өлгөһөнән ҡеүәт алып, тормошомдо көслө бер ташҡынға әйләндерергә тырыштым һәм юлымда осраған ҡаршылыҡтарҙы, һикәлтәләрҙе, ҡулдарынан бер ни килмәгән эшкинмәгәндәрҙең ғәйбәттәрен йә ташҡын аҫтында ҡалдыра, йә бысраҡтары менән ҡуша ағыҙып алып бара бирәм дә уңайлы урында ситкә ырғытып китәм", — тинем Ибраһимдың һорауына. Был һүҙҙәремдә шапырыныу юҡ ине, сөнки бер генә аҙымым да ҡаршылыҡһыҙ атланманы, тиһәм дә ялған булмаҫ. Шәхси тормошомда ла, йәмәғәт эшендә лә, ижадта ла, хатта халыҡтың шул тиклем яратып, көтөп алған "Тормош һабаҡтары"н мәктәптәргә уҡытыу планына индереп ебәреүҙә лә аяҡ салыусылар күп булды. Әммә быларҙың береһе лә мине ҡаҡшатманы, сыныҡтырҙы ғына. Сыныҡтырҙы, сөнки мин бындай ҡаршылыҡтарҙы сираттағы һынау, минең рухи көсөмдө һынау, тип ҡабул иттем. Бындай сынығыу һабаҡтарын Диҡҡәт иҫән саҡта уҡ ала башлағайным инде. Диҡҡәттең тәүге ҡатыны мине сыныҡтырыу, бирештермәү өсөн "бик күп тырышлыҡ һалды". Уның "оҫталыҡ мәктәбе" аша байтаҡ тормош һабаҡтары алдым. Ундай "сынығыу мәктәбен" уйлап сығарып булмаҫ ине. Хәйер, фәһем өсөн бер генә осраҡты яҙып үтәйем.

Диҡҡәт менән минең тормош сәхнәлә барған кеүек ине. Ни эшләребеҙ, ҡайҙа барырға тейешбеҙ — тәүге ҡатыны өсөн билдәле булып торҙо. Хатта кино-театрҙарға барғанда ла беҙҙең янда һәр саҡ ул булды. Бер ваҡыт Диҡҡәт Учалы ҡалаһына командировкаға йыйынды. Институт өсөн йәшмә таштары шымарттырып алып ҡайтырға тейеш ине. Рюкзакка байтаҡ ҡына таш тейәп алды. "Ауыр булмаҫмы?" — тип һораным, уның һаулығы өсөн һәр саҡ борсола инем. "Учалыла мине ҡаршы аласаҡтар, борсолма", — тип, вокзалға төшөп китте.

Китеүенә өс көн үтеүгә Сара исемле таныш ҡатын килеп етте. Мин Зөһрә ҡыҙым менән декрет отпускыһында инем.

— Диҡҡәт ҡайҙа?

— Учалыла.

— Ә ул бит Учалыла түгел. Ул ҡатыны, ҡыҙы менән бергә Мәскәүҙә. Ҡунаҡханала. Ял итергә киттеләр. Ә һин, өйҙән сыға алмай ятаһың, башҡорттарҙы арттырам тип, итәк тултырып бала табып. Миңә ышанмаһаң, бына Мәскәүҙәге ҡунаҡхана телефоны — шылтыратып бел, — тип ниндәйҙер телефон номеры яҙылған ҡағыҙ һуҙҙы.

— Диҡҡәт Учалыла. Хатта Мәскәүҙә булған хәлдә лә ул миңә, Учалыға китәм, тигәс, минең өсөн ул Учалыла. Ә һеҙгә кәрәк икән — шылтыратығыҙ. Телефон номеры миңә кәрәкмәй.

(Мин Диҡҡәткә ныҡ ышана инем. Ул мине бер ваҡытта ла алдаманы. Уға ышанмау — тоғролоҡ тигән төшөнсә алдында хилафлыҡ булыр ине. Ғөмүмән, ул ялған һөйләй белмәне. Бер саҡ төрлө имеш-мимешкә ышанып, Диҡҡәттең "ике ҡатын менән йәшәүен" тыйыу, "ҡолағын бороу" өсөн килгән ағаһы менән Диҡҡәт араһында бындай һөйләшеү булғайны:

— Ағай, һин ожмахтан тамуҡҡа үҙ теләгең менән китер инеңме?

— Юҡ.

— Мин дә юҡ. Шулай булгас, башҡа ундай һөйләшеү булмаһын. Ағай, һөйләшәһе һүҙҙәребеҙ былай ҙа күп. Һирәк осрашабыҙ. Ғүмерҙең ҡәҙерле минуттарын ваҡ-төйәк хәбәргә бүлмәйек, — тине.

Ағаһы менән булған ошо һөйләшеү уның тоғролоғона икеләнеүгә аҙ ғына ла шик ҡалдырманы. Диҡҡәт, ғөмүмән, хатта бәләкәй генә мәсьәләлә лә алдау, хәйләләү тигән нәмәне белмәне. Атайым менән әсәйем уның шундай ҙа саф күңелле булыуына аптырап "фәрештәләр ул" ти торғайнылар. Миңә өйләнер алдынан, Диҡҡәт әсәйем менән һөйләште. Шул саҡта, әсәйем икеләнеү белдергәйне:

— Мин үҙемә ныҡлы ышанам. Кире ҡайтмаҫлыҡ кимәлгә еткәс кенә икенсе ғаилә ҡороргa булдым, — тине.

— Ярай, ҡустым, үҙенә ышанған кешегә мин дә ышанам, — тине әсәйем.

Диҡҡәт алдында ниндәйҙер хилафлыҡ әшләүҙән, тупаҫ һүҙ ысҡындырыуҙан, тотанаҡһыҙлыҡ күрһәтеп тауыш күтәреүҙән тартына һәм үҙтәрбиә менән шөғөлләнә инем. Үземде тыйып тотманым, ә, ысынлап та, булған насар ғәҙәттәремде бөтөрөү өҫтөндә ныҡ эшләнем. Шуға ла атайым: "Мәрйәм бәләкәй саҡта хатта ҡыҙыу була торғайны", – тип, берәй ваҡиға һөйләһә, Диҡҡәт тыңлап ултыра ла ышанмай һәм: "Ҡайным, һинең ҡыҙҙарың өсәү ҙә инде, башҡа ҡыҙҙарың менән бутамайһыңмы?"– тип һорап ҡуйыр ине. Хатта: "Атайым дөрөҫ әйтә. Һүҙ минең турала бара", – тиһәм дә ышанманы, атайымдың һүҙен "дөрөҫләр" өсөн генә әйткән һымаҡ ҡабул итә торғайны. Ул үҙе өйҙә ҡысҡырыу, тауыш күтәреү түгел, бер әйткән һүҙен икенсе тапҡыр ҡабатламай, ғәҙәти генә йәмһеҙерәк һүҙҙәрҙе лә әйтмәй ине. Балалар менән һөйләшеү өсөн матур-матур синоним һүҙҙәр эҙләп таба торғайны. "Телебеҙ бай бит, шундай матур һүҙҙәр бар. Балалар ягымлы һүҙҙәр ишетеп үҫһен", — ти торғайны. Ә алдашыу, хәйләләү, ярамһаҡланыу, юхалау кеүек төшөнсәләрҙе бөтөнләй белмәне. Балаларҙы иртәнсәк балалар баҡсаһына оҙатыу өсөн ашығып кейендергән саҡта, мыжый башлаһалар, иғтибарҙарын ситкә йүнәлтеү өсөн, уйлап сығарып берәй нәмә һөйләй-һөйләй кейендерһәм, ихласлап тороп тыңлап тора ла: "Ысынмы?" — тип һорап ҡуйыр ине.)

...Диҡҡәт вәғәҙә иткән көнөндә ҡайтты. Юлы уңған. Таштарын шымарттырған. Күңеле күтәренке. Мин бер ни ҙә өндәшмәнем. Кәйефен боҙғом килмәне. Фәкәт бер ай самаһы үткәс кенә, бик борсоулы йөҙ менән ҡайтып инде лә:

— Минең Мәскәүҙә "ял итеүем" тураһында хәбәр ишеттеңме һин? — тип һораны.

— Һин киткәс үк ишеттем. Хатта шылтыратып белергә тип телефон номеры ҡалдырып китте Сара.

— Спектаклгә сценарий яҙған кеүек әҙерләнгәндәр улар. Мин вокзалда Учалы поезы көтөп торһам, эргәмә Айгөл ҡыҙым йүгереп килде:

— Атайка, беҙ Янғантауға ял итергә китеп барабыҙ, — ти.

— Август аҙағы бит. Уҡыуың ҡала ла инде, — тинем, аптырап.

— Ә беҙ бик аҙға ғына. Ана мамочкам да килә.

Ысынлап та, әсәһе лә эргәлә тора ине. Поезд килгәс, үҙ вагоныма урынлаштым да, бала яныма инеп, аҙыраҡ һөйләшеп ултырҙым. Әле бына ишетеүемсә, улар был сәйәхәткә махсус сыҡҡандар ҙа шунда уҡ кире ҡайтҡандар икән. Кемдер беҙҙең вокзалда бергә тороуыбыҙҙы күреп, һиңә килеп әйтергә тейеш булған, шунан Сара

телефон номеры ҡалдырып китә. Һин институтҡа йүгереп килергә, ғауға ҡуптарырға тейеш булғанһың. Шунан мин фаш ителәм. Артабан минең коммунистарға хас булмаған холҡом тикшерелә.

Диҡҡәт минең бер ни ҙә өндәшмәүемә ныҡ аптыраны ла, үҙе үк һығымта яһап ҡуйҙы:

— Уларҙың спектаклдәренең ҡайһыныһын ғына һөйләп бөтәһең инде... Һин улар кимәленә төшмәй ҡалай дөрөҫ эшләйһең әле. Ярай, пирешмәнек, пирешмәйбеҙ, пирешмәбеҙ, — тине, шаярып.

Бына ошондай хәлдәр байтаҡ булды минең тормошомда. Хатта Диҡҡәттең вафатынан һуң да ундай әрһеҙлектәр булғылап торҙо. Әгәр мин үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе асыҡлауға, һүҙ юллауға, "көндәштәр аулауға" ваҡыт сарыф итһәм, ғүмеремдең иң матур йылдарын елгә осорор һәм заяға үткәрелгән тормошом өсөн әсенеүҙән башҡа бер ни ҙә ҡалмаҫ ине.

Йәшәү маҡсаты ни тиклем юғары булһа, рухи көс тә шул хәтлем ҡеүәтлерәк була.

Әгәр беҙ донъяға тыуыуыбыҙҙың төп тәғәйенләнешен аңлап, йәш саҡтан уҡ оло маҡсат ҡуйып йәшәһәк, рухи шәмебеҙ үҙебеҙ үлгәнгә тиклем генә түгел, хатта үҙебеҙҙән һуң да башҡаларға юл яҡтыртып торор.

Бөгөнгө көндә аҙ һанлы халыҡ вәкиле булған һәр беребеҙгә оло маҡсаттар ҡуйырға, тәбиғәттән бирелгән таланттмы, тырышлыҡ менән өлгәшелгән ҡаҙанышмы – шул маҡсатҡа йүнәлтергә тейешбеҙ. Дөйөм халыҡ тип уйламаған осраҡта ла һәр башҡорт ғаиләһенең уртаҡ бурысы — үҙ ғаиләбеҙҙәге балаларыбыҙҙы матди яҡтан нығытыу, белем биреү, тәбиғи һәләтен үҫтереү, телдәр өйрәтеү, артабан милләтебеҙҙең һанын ишәйтерлек ғаилә ҡороу, рухи байлығыбыҙҙы юғалтмау.

Был бурыстарҙы атҡарыу өсөн рухи нығлыҡ кәрәк.

Кешенең яҙмышына, имен тормошона ниндәйҙер хилафлыҡ килтереү кеүек ваҡ маҡсаттар, ығы-зығыға ваҡыт тәләфләү кешенең үҙен дә ваҡлай, халҡына ла файҙа килтермәй.

Бараһы еребеҙҙе аныҡ белмәй юлға сыҡмайбыҙ. Бараһы еребеҙҙе аныҡ билдәләгән хәлдә лә ҡайһы юлдың тәңгәл алып барырын асыҡламайынса юлланмайбыҙ. Шуның кеүек тормошто ла үҙағышына һалырға ярамай. Рухи шәмеңде ҡабыҙыу ҙа, оҙаҡ яндырыу ҙа, ҡапыл һүндереү ҙә үҙ ҡулыңда. Ҡайһы саҡта хатта иң яҡындарыңдың да, һине аңламайынса, аңғармай әйткән бер һүҙе рухыңды ҡаҡшатып ҡуйыуы ихтимал. Ул саҡта ла үҙеңде ҡулға алыу мөмкинлеге эҙләргә кәрәк. Һәр хәлдә был донъяла йәшәү һүкмаҡтары шул тиклем күп һәм төрлө, һайлап алыу оҫталығына

эйә булырға ғына кәрәк. Ә йәшәү һүкмағын дөрөҫ һайлау өсөн, иң элек үҙеңдең кем икәнлегеңде билдәләү һәм үҙ көсөңә ышаныу һәм төп юлды билдәләү мөһим. Минең төп юлым – ул халыҡ юлы булды. Юғары һүҙҙәр түгел был. Ысынлап та, ни генә эшләһәм дә төп маҡсатым – халҡым мәнфәғәте тәүшарт булды.

Үҙ көсөңә ышаныу – иң көслө дауа

Бик иркә, наҙланып ҡына йәшәп өйрәнгән ҡатын ине Гөлъямал. Әйләнгән һайын – ял йорто, әйләнгән һайын – санаторий йә больница. Ире юғары вазифа биләгәс, больницаһы ла ябай түгел – Министрҙар Кабинетыныҡы. Хәл белергә барһаң, ауырыуы, ниндәй профессор ҡарауы, ниндәй ҡиммәтле дарыуҙар алыуы тураһында ғына һөйләр ине. Минең кеүек үк ауыл ҡыҙы, атаһы ла, әсәһе лә колхозсылар, бәләкәйҙән үҙе лә эшләп үҫте. Уның шул тиклем әргендек булып китеүенә аптырай торғайным. Күрәһең, кеше шартҡа ҡарап үҙгәрәлер, тип уйланым. Уның өсөн бөтә йәшәү маҡсаты — ял итеү, кешеләргә ҡарағанда затлыраҡ кейенеү, түрәләр менән бергә мәжлестәрҙә ултырыу ине. Әллә ниҙә бер барып сыҡҡан саҡта ла матур итеп балалар хаҡында һөйләшеп, фекер алышып ултырмай инек. Сәй эсергә ултырта ла салфеткаһын эҙләй башлай — кухнялағы байлығын күрһәтеп сыға, йә таҫтамалын эҙләгән булып, "аңғармаҫтан ғына" затлы һауыт-һабаһын күрһәтә, йә альбом эҙләп маташҡан булып залдағы кәштәләрендәге яңы кейемдәрен, әллә нисә пар туфлийын һәм сит илдән ире алып ҡайтҡан башҡа кейем-һалымын күрһәтеп сыға.

Шулай итеп, бар бәхетен матди байлыҡта тапҡан иркә генә ҡатынға әйләнгәйне. Үҙ тормошо менән ҡәнәғәт һәм бәхетле ине.

Һәм бәхәтһеҙлек... Ире, вазифаларҙың иң юғарыларының береһен биләп, дачанан дачаға ғына, банкеттан банкетҡа, ҡабул итеүҙән ҡабул итеүгә генә йөрөп ятҡан мәлендә, йөрәк ауырыуынан үлеп китте.

Был ваҡытта Гөлъямал да больницала ята ине һәм уны ауырыу, ысынлап та, еңгәйне, тиерлек. Сөнки йөҙө һарғайып, күҙҙәре төпкә ултырып, яурындары төшөп, ирен дә, туғандарын да оло борсоуға һалғайны. Гөлъямалды больницала саҡта, иренән: "Гөлъямалдың хәле нисек? Больницаға барып борсоғо килмәй, шуға үҙеңдән генә белешәм," —тип һорашҡан саҡта: "Бер генә лә арыуланмай. Балалар ҙа ныҡ борсола, өсөһө лә өндәшмәҫ булдылар хәҙер. Эстән һыҙып ҡайғыралар", — тип, Гөлъямалдың һауығып китеренә һис

кенә лә ышаныс белдермәгәйне. Врачтар иң ҡурҡыныс диагнозды ҡуйғайнылар. Һәм Гөлъямалдың ошондай хәлендә, уйламағанда, ире үлеп китте. "Йүкә өҙөләме, ҡайышмы – ҡайҙан беләһең?" тип халыҡ юҡҡа ғына әйтмәгән. Ерләгән саҡта ирҙең үлеменә ҡарағанда ла ҡатындың ауырыуы нығыраҡ ҡайғыға һалғандыр. Ике яҡтан ҡултыҡлап, машинанан машинаға ғына ултыртып, врач күҙәтеүе аҫтында ғына йөрөттөләр. Гөлъямал, ирен ерләгәндән һуң, ҡабаттан больницаға инеп китте һәм был юлы оҙаҡ ятманы. Ҡайтты ла балалар хаҡында хәстәрлекте, донъя көтөүҙе үҙ өҫтөнә алды. Уның хәле аҡрынлап яҡшыра башланы. Яҡшырған һайын, сәләмәтләнеүенә ышанысы артты. Ышанысы артҡан һайын, сәләмәтләнә барҙы. Гөлъямалдың үҙгәреүе, сәләмәтләнеүе күҙгә күренеп барҙы. Хәл белергә барып: "Хәлең нисек?" — тигән һорауға ла, ғәҙәтенсә: "Яҡшы. Ошонан айырмаһын Хоҙай," — тигән яуап бирмәне. "Яҡшы. Аллаға шөкөр. Балаларым хаҡына һауыҡтым бит!" – тип яуап бирә башланы.

Уны дауалаған табиб минең яҡын танышым ине. Был ғәжәп шатлыҡтың ғилләһе тураһында һораштым. Ваҡытлыса ғына яҡшырып, аҙаҡ ауырыуы тағы еңеп китмәҫме, тип борсолдом.

— Юҡ, — тине ул, үҙе лә, ҡыуанысын йәшерә алмай, ҡәнәғәт йылмайып. — Гөлъямал сирен еңде. Уның ихтыяр көсө, ышанысы еңде. Мин уға былай тинем: "Балаларыңды тома етем ҡалдырмайым тиһәң — һауыҡ. Барыһы ла үҙ ҡулыңда", — тинем. Көн һайын иртәнсәк ас ҡарынан бына мин биргән дарыуҙы эсеп ебәр, кис ҡатыҡ эсеп ят, шунан, һауығам, барыбер һауығам, ауырыуҙы еңәм, тип ҡабатла, — тинем. Был дарыу шул тиклем көслө, бик аҙлап ҡына ҡуллан. Ҡайнатып һыуытылған һыуға семтем генә һалып татыт та эс, — тинем. Уның дарыуға ышанысы һәм балалары алдындағы яуаплылығы шул тиклем көслө булды — ул һауыҡты. Яман шештең эҙе лә ҡалманы. Был хәл минең үҙемде лә аптыратты.

— Ниндәй дарыу ул?

— Бик көслө дарыу. **Үҙ-үҙеңә ышаныс** тигән дарыу.

Күреүебеҙсә, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеү йәшәүҙән төңөлөүгә тиклем еткерһә лә хатта, эске мөмкинлегеңде файҙаланып, үҙ-үҙеңдә ышаныу, инаныу тойғоһон көсәйтеп ебәрһәң, тау аҡтарырлыҡ ҡеүәткә эйә булаһың.

Борон-боронда, профессиналь белем алмаған табибтар ҙа кешенең эске ҡеүәтен файҙаланыу, күҙәнәктәрҙә йоҡомһораған көстө уятып ебәреү сараһы күргәндәр.

Мин рухи үлемемде еңдем...

Ир кеше төҫкә бик матур ине. Әсәйем уны күргәс: "Бынау балаға Йософ тип кенә ҡушһаларсы. Уның һылыулығына Рәфис тигән исем бер ҙә килешмәгән һымаҡ. Зөләйха ғашиҡ булырлыҡ Йософ та ошолай һылыу булғандыр инде. Нисек күҙ теймәй генә үҫкән икән?!" — тип һоҡланды уға. Ә башҡалар, бигерәк тә йәштәр, уны һинд киноларындағы артистарға оҡшаттылар. Ҡатыны Рәшиҙә лә, ҡапылғара иренән төҫ-башҡа ҡайтышыраҡ тойолһа ла, бик һөйкөмлө, бик аҡыллы ҡатын ине. Әммә ир үҙенең тышҡы матурлығына үтә ныҡ әһәмиәт бирҙе, маһайҙы, ҡупырайҙы. Урамдан үткән саҡта күҙҙәре һәр саҡ магазиндарҙың быяла тәҙрәһендә булды. Быяла сағылышынан үҙенең буй-һынын, ҡабарып торған сөм ҡара сәсен ҡарай-ҡарай, бармаҡтары менән тарай-тарай барыр ине. Ғаилә ҡороуҙа уңмауынан, үҙенә тиң кешегә өйләнмәүенә зарлана, зарын баҫыр өсөн эштән һуң шарап киоскыһы аша ҡайта башланы. Вазифалы урында эшләгән ҡатынын кәмһетеп, икенсе ҡатындар менән сағыштырып ғәйебен табып маташты. Ҡатын был хәлде ауыр кисерҙе. Ире кәмһеткән саҡта илағылап та алды. Бер-бер артлы бынамын тигән матур булып үҫеп килгән балалары менән күңел йыуатып ҡараны, әммә иренең мөнәсәбәте һәр саҡ йөрәген өйкәп торҙо. Ә ир һауаланыуын дауам итте. Балаларының ыңғай сифаттарын — үҙенә, бөтә балаларға ла хас шуҡлыҡтарҙы ла, әҙәпһеҙлеккә һанап, ҡатынына оҡшатып, ҡатынын түбәнһетергә әҙер генә торҙо. Ҡатын рәссам ине, бала бағыу буйынса отпускынан һуң эшкә сыҡты, эшен маҡтанылар, заказдар бирҙеләр. Ир кеше заводта инженер булып эшләне, артабан үҫеүҙе уйламаны, бары тик ҡатыны уңышынан көнләшеп, уны кәмһетеп йәшәүен, үҙ күңеленә үҙе ҡара нур йыйыуын дауам итте. Ә ҡатын, ғаиләлә именлек һаҡлауға, юҡ-барҙан ғауғаламаҫҡа тырышып, көнләшерлек изем бирмәҫкә, иренең йәненә теймәҫкә, ул булғанда үҙен маҡтатмаҫҡа тырышты. Әммә ир кеше ҡатынының абруйы арта барғанын, әленән-әле матбуғат биттәрендә уның исем-шәрифе күренгәнен, ә үҙенең көн һайын шелтәнән башҡа һүҙ ишетмәгәнен күрә-белә йөрөнө, әммә һәр ваҡыт уңышһыҙлығында кемделер ғәйепләп маташты. Уҡыуға бик һәләтле, мәктәп йылдарында Мәскәү вуздары хаҡында хыялланып йөрөгән көслө математик булыуын иҫенә төшөргән һайын, үҙ көсһөҙлөгөнән үҙе ғәрләнде лә. Әммә ғәрләнеүҙең ҡара асыуы ҡатынына төштө. Ҡатынының ғаилә именлеген һаҡлайым, ир күңелен төшөрмәйем, тип шым йәшәргә тырышыуы баһаланманы.

Рәшиҙә тамам күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп, ауырыуға һабышып, үҙ һәләтенә вайымһыҙ ҡарай башланы. Әммә бер саҡ... Һыуға сарсауҙан япраҡтары шиңә башлаған гөлгә һыу һипкәс, ҡапыл баш ҡалҡытып ебәргән һымаҡ, Рәшиҙә лә үҙен ҡулға алды — йәшәреп, матурланып, йәшәүгә дәрте артып китте. Хәрәкәттәренә элеккесә етеҙлек, йөҙөнә йылмайыу ҡайтты. Үҙе былай тип һөйләне ул:

— Бер әҙәби әҫәр буйынса һүрәт эшләй башланым. Үҙем эшләгән һүрәт үҙ күңелемә ятмай ҙа ҡуя. Әҫәрҙәге көслө рухлы башҡорт ирен бирә алмайым да ҡуям. Күҙ алдымда Рәфис тик тора. Шунан атайымды күҙ алдына килтерҙем. Уның ҡарашын, хаҡлыҡ, ғәҙеллек яҡлап сыҡҡандағы торошон... Уны районда ғына түгел, сит яҡтарҙан да килеп адвокат итеп яллайҙар ине. Күпме кешене ялған ғәйепләүҙән, аңлашылмаусанлыҡ арҡаһында килеп сыҡҡан хөкөмдән ҡурсалап алып ҡалды ул. Ә үҙен ни тип кенә ғәйепләмәнеләр, ниндәй генә яла яҡманылар! Ә ул һаман ғәҙеллек яҡланы, кешеләргә ярҙам итте. Ниндәй инаныу уны көслө рухлы иткән икән? Ҡайһы саҡтарҙа етәкселәр менән дә алышырға тура килә ине бит уға, тип уйлай башланым. Яуабын таптым. Ул үҙенең хаҡлы булыуына ныҡ ышанған. Хаҡ булыуын иҫбат итергә ынтылышы көслө булған. Ул көрәшсе. Ғәҙеллек өсөн көрәшсе. Шуға бирешмәгән. Ул бер ваҡытта ла аҡланманы, ярамһаҡланманы, үҙ ғәҙеллеген илап-мыжып иҫбат итмәне. Ул ғорур булды, бирешмәне. Атайымдың һүрәтен төшөрҙөм. Оҡшаттылар, маҡтанылар. Ә мин уйға ҡалдым. Ни эшләп мин үҙемдең бер кемдән дә кәм түгеллегемде, хатта тәбиғи һәләтем менән бөтә түбәнһетеүҙәрҙән өҫтөн булыуымды иҫбат итеү өсөн көрәшмәйем? Ни өсөн мин булмаған ғәйебем өсөн аҡланып маташам? Ни өсөн атайымдың тырышлығын юҡҡа сығарам? Ни өсөн мин уның ышанысын аҡлау маҡсатында йәшәмәйем? Ул бит минең рәссам һәләтемде үҫтерергә тырышты, миңә ҙур өмөт бағланы. Ҡайҙа, нимә төшөрһәм дә әрләмәне, тыйманы. Мейескә һүрәт төшөрәмме, стенағамы, тупһағамы — бер ваҡытта ла асыуланманы. Ҡағыҙ, ҡәләм табырға, ҡайҙа барһа ла күп итеп альбом алып ҡайтырға ғына тырышты. Күрше ауылда йәшәгән һүрәт төшөрөүгә маһир бер ағайҙы саҡырып — минең һүрәттәремде күрһәтте. Унан да ыңғай баһа алғас, уғата дәртләнеп киттем. Шунан — мәктәп, институт. Ҡыҙыл дипломға тамамланым. Эшемдә маҡтаулымын. Ошоларҙың бөтәһенән дә эскенән башҡаны белмәгән, ауыҙын тыя алмаған бер иҫерек ҡупыҡ ирҙе әпәүләп, әүрәтеп, минең хеҙмәтемде юғары баһалағандары өсөн аҡланып йәшәүгә алмаш-

тырайыммы? Ул ғына ла түгел, балаларым үçә. Атай йөрөһөн эсеп, әсәй йәшәһен меçкенләнеп, иçерек иргә бирешеп. Рухи яҡтан ҡаҡшаһам, балаларым ни эшләр? Ижадым ни эшләр? Әйҙә, ул үҙенсә йәшәһен, мин – үҙемсә. Аҡылға ултыра икән – үҙе, ултырмай икән – үҙе. Балаларҙы был афәттән йолоп алып ҡалыу яғын ҡарарға кәрәк, тигән ҡарарға килдем дә... көрәшә башланым. Илаҡ, ҡурҡаҡ, мәшәү, былҡы үҙем менән үҙем көрәштем һәм уйҙарым менән атайым тәрбиәһенә ҡайттым. Һынды турайттым, сал төшә башлаған сәсте буяттым, йөҙөмә килешле прическа эшләттем. Ең һыҙғанып эшкә тотондом. Эске энергиямды эшкә ҡуштым. Эш яйға һалынды. Дәрт өçтәлгәндән-өçтәлә бара.

Мин үҙемде сикләп, илһам сығанағын быуып йәшәгәнмен икән. Эске энергияны эшкә ҡуша башлауым булды, бөтә булмышым үҙгәрҙе. Ижадымда юғарыраҡ уңыштарға өлгәшә башланым. Йәшәге килеп китте. Балаларым да бойоғоп йөрөмәй.

Был ҡатын хаҡлы. Эске энергияны эшкә ҡушыу юлы менән ихтыяр көсөн дә, сәләмәтлекте лә нығытып, рухи үлемде лә еңеп була.

Яҡыныңдың рухын һындыра яҙғанһың

(Һөйҙөргән дә тел, көйҙөргән дә тел, бөлдөргән дә тел)

Рәмзиә менән Закир Өфөгә килгәс, бер аҙ ваҡыт беҙҙә йәшәнеләр. Рәмзиә – белемле, ғилемле, матур ҡатын. Кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлап, ғилми дәрәжә алып эшләп йөрөгән сағында ире Закир ташлап сығып китте лә, күп тә тормай, икенсе ҡатынға өйләнде. Авиация институтының киске бүлегендә өс курс тамамлағайны, уҡыуын да ташлаған. Һуңғы йылдарҙа ҡауышыуҙар һанына ҡарағанда ла айырылышыуҙар күбәйеп китте, был осраҡта ғәҙәттәге айырылышыу һымаҡ ҡына булыр ине — әммә Рәмзиәнең бик нык өҙгөләнеүе, ғәрләнеүе, балаһын эйәртеп ире янына барып ҡайтҡандан һуң йүгереп килеп аптырап һөйләүе уларҙың ғаилә тормошона анализ яһарға мәжбүр итте.

— Апай, ҡатыны шул тиклем әрпеш, йәмһеҙ, килбәтһеҙ. Өйөндә ҡайҙа нимә ятҡанлығын да белмәй. Өçтөнә кейгән кейеменең төçөн дә айыра алманым. Баламды бер нисә көнгә атаһы янында ҡалдырып торормон, тигәйнем, ҡайҙа ул — ул әҙерләгән ашты үҙем дә ашай алманым. Магазиндан алған икмәккә ҡушып, сәй генә эсергә мәжбүр булдым. Баламды йәлләнем дә кире алып ҡайттым. Ә Закир шул ҡатындың күҙенә генә ҡарап тора. Уныһы

берәй йомош ҡушыр-ҡушмаҫтан ни әйтерен аңлап ҡала ла, йүгереп үтәй һала. Башҡорт ҡатындары ирҙәрен йомошай белмәйме, эшләтә алмаймы – ни эшләп улай һуң? Әлбиттә, беҙ бергә йәшәгән саҡта ла берәй нәмәне үҙ белдеге менән оҫта ғына итеп эш эшләп ҡуя ине, әммә минең йомош менән бер ваҡытта ла йүгермәне шикелле? Ул ҡатынға ҡарап ултырҙым да, минән артыҡ ни яғын тапты икән, тип уйланым. Белеме юҡ, төҫкә-башҡа минән ҡайтыш, кәүҙәһе ларҡайып, миндәй икәү. Йөрөшө һуң, хәс өйрәк һымаҡ байпаңлап атлай. Йәшлегенә ҡыҙыҡтымы? Аңлай алманым.

Мин Рәмзиәне иғтибар менән тыңланым.

– Һөйләүеңә ҡарағанда, Закирың ул ҡатын менән үҙен ир итеп тоя, күрәһең. Теге ҡатын уны маҡтайҙыр, күңелен үҫтерәлер, һалпы яғына һалам ҡыҫтыра беләлер. Әлдә һин бар, һин булмаһаң, ни эшләр инем, тип тә ебәрәлер. Ысынлап та, ир көсөнә мохтаж икәнлеген күрһәтә алалыр. Ә һин бит улай итмәнең. Беҙҙә йәшәгән сағығыҙҙа күрә, иҫкәртә инем һиңә. Һәр саҡ үҙ аллы булыуыңды, унһыҙ ҙа бына тигән итеп донъя көтә алырыңды, иргә бер генә лә мохтажлығың юҡлығын, аҡсаны уға ҡарағанда күберәк алыуыңды, абруйыңдың уға ҡарағанда юғарыраҡ икәнлеген иҫенә төшөрөп торҙоң, өҫтәүенә, уны һәр саҡ кәмһеттең, рухын һындырҙың. Мин был хаҡта әйтә килдем һиңә. Аш кәмләмә – ҡоҫторор, ир кәмләмә – боҫторор, тигән халыҡ мәҡәлен дә телгә алғайным, иҫеңдә булһа, — тинем.

— Мин уны кәмһетмәнемсе, апай.

—Тимәк, һин үҙең дә абайламағанһың. Әйҙә, иҫкә төшөрәйек әле. Һин кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлағас, Закир ҙа вузға инергә булды. Киске бүлеккә. Икегеҙҙең дә матди ярҙам күрһәтерлек туғандарығыҙ булмағас, алмашлап уҡырға һөйләшкәнһегеҙ. Авиация институтына инеп ҡыуанып ҡайтты. Маҡтаның — уныһы яҡшы. Бер аҙҙан курсташтары уны староста итеп һайлағандар ҙа, тағы күңеле үҫеп, балҡып-йылмайып ҡайтып инде. Әлбиттә, был — уның өсөн ҙур баһа, ҡыуаныс, һабаҡташтарының ихтирам билдәһе ине. Уның өсөн һин дә ҡыуанырға тейеш инең. Ә һин нимә тинең? "Ниндәй ҙур ҡаҙаныш! Һинең йәштә башҡалар завод директоры, институт ректоры булып ултыра. Ә ул — беренсе курстың старостаһы, имеш!"

Закир күҙҙәрен тултырып һиңә ҡарап алған булды ла бер ни ҙә өндәшмәй улы янына үтеп китте. Мин уның ҡарашынан шул тиклем ғәрләнеүен, ә өндәшмәүенән сыҙамлы икәнлеген аңланым. "Ай эттәгенәһе, бындай кәмһетеүҙәр йыш ҡабатлана ҡалһа, эштең

айырылышыуға барып етеүе лә ихтимал бит", — тип уйланым. Ҡатындар ғына төрлө саралар табып, ғаиләһен һаҡлау яғында була. Ирҙәр түҙә-түҙә лә күтәрә һуғып сыға ла китә. Шундай хәүеф менән һинең үҙең менән генә һөйләшеп алғайным.

— Бындай "баһа" ир кешене кәмһетә, рухын һындыра. Ирҙәрҙең ҡайһы берҙәре эскегә һабыша, икенселәре ғаиләһенән китә, — тип аңлатып маташтым. Ә һин:

— Эй, дөрөҫө шул да инде! Тормаһын маҡтанып! Мин ғәрләнер инем, беренсе курстың старостаһы, имеш! — тинең дә ҡуйҙың.

— Минең үҙемде ғәйепләмәксеһеңме, апай?

— Ғәйебең юҡ, тип әйтеп булмай, әлбиттә. Ир балаларҙы беҙ, әсәйҙәр, ғорур, ныҡлы рухлы итеп тәрбиәләргә тырышабыҙ. Ә үҙебеҙ үк рухтарын һындырабыҙ. Кеше күңеле таштан ҡаты, сәскәнән наҙлы, тиҙәр бит. Күңел күтәрерлек һүҙҙәр аҙмы ни донъяла? Дөрөҫлөктөң бөтәһен дә, бигерәк тә йөҙ йыртырлығын әйтергә ярамай. Шуның өсөн кешегә "тел тыйыусы" аҡыл бирелгән, тинем һәм шунда үк мәжлестәге бер хәлде һөйләгәйнем. Иҫеңдәме?

Батыр менән Бүләкбикә тураһында ине ул. Бер нисә генә кеше йыйылған мәжлес бара. Батыр, аҙ ғына ҡыҙмаса булып алғас, күңеле нескәреп хистәргә бирелеп китте лә: "Атайым арбаға ҡырын ятып алыр ҙа, дилбегәһен бушаҡ ҡына тотоп ошолайтып йырлап барыр ине", — тип аҡрын ғына итеп моңло көй һуҙҙы. "Уйыл" ине ул. "Уйыл" көйө Батырҙың моңо менән һеңеп ҡалған күңелемә. Шул тиклем моңло ине тауышы. Атаһын иҫенә төшөрөүҙәнме, әллә ошо йыр менән башҡа бер ваҡиға бәйле булдымы — күҙҙәре дымланып йәшкәҙәп китте. Ә күкрәктән сыҡҡан тәрән моң йөрәктән йөрәккә генә күскән кеүек тетрәндереп ағылды ла ағылды. Шул саҡ Бүләкбикә: "Ултырма әле, күҙең шемәреп, мөңөрәп. Йырлаһаң — йырла, йырламаһаң — кеше йонсотма..." — тине лә гөрөлдәп торған көслө тауышы менән ауыл көйө башланы. Батыр бер ни әйтмәй шымды, мәжлестең ҡото китте.

Аҙаҡ, уларҙың ғаиләһе тарҡалғас, Диҡҡәт: "Тарҡалырға тейешле ғаилә ине ул. Ҡатын менән ир бер-береһен хәстәрләп, ҡанатландырып, рухын күтәреп йәшәргә тейеш. Бер-береңдең рухын һындырып, бәҫен төшөрә башланыңмы — ғаилә түгел инде," – тине.

— Апай, иҫкә төштө әйткәндәрең. Мин йәшерәк булғанмындыр инде ул саҡта. Аңламағанмын. Хәҙер булһам, аңлар инем дә бит, - тине Рәмзиә, уфтанып.

— Хәҙер ҙә аңламаҫ инең. Сөнки һин, ысынлап та, үҙ аллыһың. Ир менән йәшәүҙе һин ниндәйҙер артыҡ йөк артмаҡлап барған

һымаҡ тояһың. Ундай ҡатындар бер һин генә түгел. Бигерәк тә ижад ҡомары йоҡҡан ҡатындар үҙ аллылар. Ундайҙар яңғыҙ йәшәүҙе өҫтөнөрәк күрә. Ҡайһылары хатта фани донъялағы бөтә гонаһтарын юйып ырғытырлыҡ изге бурысы – әсәйлек бурысын онотоп ебәрәләр. Һин үҙең дә Тәңренән яңғыҙлыҡты теләгәнһең. Әйләнгән һайын, мин үҙем дә йәшәй алам, тип ҡабатлағанһың. Тәбиғәт кешенең бер теләген дә юҡҡа сығармай. Һин бит үҙеңә буйһонып ҡына, адъютант һымаҡ ҡына йәшәгән ирҙәрҙе үҙһенмәйәсәкһең. Ә үҙеңә тиң һанаған йәки ни яғы менәндер юғарыраҡ тип иҫәпләгән ирҙәр менән һәр саҡ ыҙғышлы, бәхәсле буласаҡһың. Шуның өсөн, берегеҙ айт тигәнгә икенсегеҙ тайт тип әйтерлек кеше килеп сыҡмайынса, йәки тотошлайы менән һине үҙ ихтыярына буйһондороп шыҡырлатып тоҡкан ир булмайынса — ир хаҡында уйларға түгел. Ижад ит, үҫ. Ҡатын-ҡыҙҙың иң изге бурысы — әсәйлек бурысын үтәнең. Тик улың ғына китек күңел менән тәрбиәләнмәһен. Атаһынан айырма, бала алдында атаһына үҙ күҙлегең аша баһа бирмә. Бала үҫкәс үҙе баһалар. Улыңды атаһына сағыштырып кәмһетмә. Сөнки һин кәмселек тип һанаған сифаттар, икенсе кеше ҡарашынан, киреһенсә, ыңғай сифаттарҙыр. Әгәр улыңды атаһының һиңә оҡшамаған сифаттары менән сыбыртҡылап, "һин уның кеүек булма, ул шулай ине", тип тәрбиәләһәң, рухы һынып үҫер, кемгәлер һыйынып тыныс ҡына йәшәгеһе килер, оло маҡсаттар билдәләмәҫ, һәм, яратмаһа ла, үҙен һыйындырған өлкән йәштәге ҡатынға өйләнер. Һиңә хәҙер уңышһыҙлыҡтың бәхетһеҙлеккә килтермәү яғын хәстәрләргә кәрәк.

Бөгөнгө көндә айырылышыу осраҡтары йышайҙы. Сәбәптәре төрлө. Әммә айырылышыу ниндәй генә сәбәп арҡаһында булһа ла — күп осраҡта яңғыҙ ҡалған ир кешенең дүрт яғы ҡибла була, ә ҡатын кеше ҡулында бала — тимәк, халҡыбыҙҙың киләсәген тәрбиәләү бурысы ҡала. Яңғыҙ бала тәрбиәләү, бигерәк тә ҡайҙалыр ситтә йөрөгән атаһы тәртип яғынан рухи өлгө алырлыҡ булмаһа, ауыр. Ә бала бағыуҙа иң тәүге бурыстарҙың береһе — рухи ныҡлыҡ тәрбиәләү. Бигерәк тә ғаилә тоҡаһы, ил тоҡаһы ир кешегә рухи ныҡлыҡ кәрәк. Рухи яҡтан былҡы ирҙәр ғаилә өсөн дә, йәмғиәт өсөн дә имгәк кенә.

Шуның өсөн ир менән бергә ғаилә ҡороп йәшәй алмаған ҡатындар бала тәрбиәләүгә икеләтә яуаплылыҡ менән ҡараһа ғына, артабанғы ғүмерҙәре тыныс булыр.

Ғаилә тарҡалыуында һәр ваҡыт бер-береңде ғәйепләп кенә йөрөүҙең файҙаһы юҡ. Яңыса тормошто үҙ холҡоңдо үҙгәртеүҙән, үҙтәрбиәнән башлау күпкә отошло.

Рухлы егеттәр

Рухи яҡтан сәләмәт кеше киләсәге өсөн дә ҡалҡан була ала. Халҡыбыҙҙа ундайҙар күп булғандыр, юғиһә, күҙ ҡарашы етмәҫ ерҙәрҙе һаҡлап, "аямаған йәнен, түккән ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын" тип йырларлыҡ саялыҡ күрһәтерлек егеттәребеҙ ҙә, халыҡ моңон, традицияһын, ғөрөф-ғәҙәтен, йолаларын һәм ошоларҙың бөтәһенән дә нигеҙе булған телебеҙҙе һаҡларлыҡ олатай-инәйҙәребеҙ ниндәй сифаттарға эйә булды икән? Әлбиттә, рухи ныҡлыҡ. Ерен-һыуын, халыҡ намыҫын һаҡлау тигән сифаттар хас булған миҫалдарҙы яңыраҡ ҡына булып үткән ваҡиғаларҙа ла күрергә була. Балыҡ һаҡлау буйынса үҙ эшенә мөкиббән киткән инспектор эшләй ине. Мөхәррәм Үтәғәнов. Ул тәбиғәт байлығын һаҡлауҙың мөһимлеге тураһында шундай ялҡынлы итеп һөйләй, үҙенә бик күп яҡлаусылар ҙа таба торғайны. "Бер ваҡыт Учалы яҡтарында күлдә балыҡ һөҙәләр, тиҙ генә килеп етегеҙ, тип хәбәр иттеләр. Ялға ҡаршы ҡала кешеләре барып тулған икән. Минең кәтерпил машина менән ҡасан барып еткәнсе, байтаҡ ваҡыт үтә инде, тип йән көйә-көйә китеп барам. Браконьерҙар ҙа бинокль, бына тигән техника. Ә мин республиканың ыртыһын тиерлек бер үҙем хеҙмәтләндерәм, әллә ҡасанғы машина. Ярай, иллала менән барып еттем. Барһам, күл буйы һил. Бер кем дә күренмәй. Мин килеп еткәнсе кинәнде инде былар, тип уйлап торһам, ике егет килеп сыҡты. "Деүелдәттек кенә тегеләрҙе! — тиҙәр. — Ике ауыл егеттәре йыйылдыҡ та һыбай килеп ҡамап алдыҡ. Ауҙарын алдыҡ, хәҙер килтереп тапшырырҙар. Тегеләр арттарына ла боролоп ҡараманылар, һыпырттылар ғына", — тиҙәр. Күҙҙәргә йәш килде. Браконьерҙарҙан туҡмалған саҡта иламағанды, шатлыҡтан иланым. Бар бит егеттәребеҙ!" — тип һөйләгәйне.

Диҡҡәт тә бер ваҡиға һөйләгәйне.

— Һуғыштан һуң, беҙҙең яҡтарҙа таш күмер сығарыла башлағас, Аллағыуат-Ермолаевка тимер юлы һалына башланы. 1950 йылдар ине. Мин Өфөлә интернатта уҡып йөрөйөм. Йәйге каникулда, бесәндә инем, тик ниндәйҙер йомош менән генә ауылға ҡайтҡайным. Ауылдағылар бөтәһенә лә бесәндә. Бер саҡ бәләкәй генә бер малай йүгереп килеп еткән:

— Ағай, тимер юлда эшләүселәр беҙҙең ҡыҙҙарға бәйләнәләр. Ҡолаҡтарындағы алҡаларын өҙә тартып алалар.

Бергәләшергә береһе юҡ. Бесәнселәр янына барырға байтаҡҡына ара.

— Күмәктәрме?

— Ҡара сәүкә кеүектәр, — тигән булды малай, илай-илай. Апайым да унда. Ул йүгертте мине, — ти.

Ҡулға сүкмар тоттом да йүгерҙем. Ҡартатайым туҡтатты. Хәлде аңлаттым.

— Юҡ, улым, улай дыуамалланырға ярамай. Иҙеп һалырҙар. Ни эшләй алырһың? Ҡайҙа һуң Әнүәр? Кәмендә ун-ун биш кеше барығыҙ.

Шул саҡ яҡын-тирәлә бесәндә булғандарҙан ете егет йыйылышып, сүкмарҙар тотоп киттек ҡаршы. Тегеләр ни күмәктәр. Аҙаҡ белеүебеҙсә, өс йөҙгә яҡын кеше булған. Беҙ барып етеп албырғатырға ғына эшкиндек. Әлбиттә, еңерлек көс юҡ ине. Бер аҙҙан ҡараһаҡ, ике яҡтан саң борҡотоп һыбайлылар килә ятҡаны күренде. Ғәләмәт! Шул саҡ мин һыбайлы башҡорттарҙың ни тиклем аяуһыҙ көс булғанлығын, дошман йөрәгенә ниндәй ҡурҡыу һалғанлыҡтарын күҙ алдына килтерҙем. Тегеләрҙән елдәр генә иҫте. Күреп ҡалыу менән күҙҙән юҡ булдылар. Артабан беҙҙең ҡыҙҙарға яҡынайып ҡараһалар! Әгәр шунда ҡурҡаҡлыҡ күрһәтһәк, артабан да кәмһетерҙәр, рәнйетерҙәр ине.

Үҙ-үҙен яҡлаҡлыҡ ҡына түгел, эргә-тирәһенә лә таяныс булырлыҡ егеттәребеҙ бар әле лә.

Суверенитет өсөн көрәштә лә, аҙаҡ "оппозиция" тип аталған һәр төрлө былағайҙарҙың митингыларына ҡаршы ла тора алырлыҡ көс барлығын иҫбатлап тороусы егеттәребеҙ барлығына ышандыҡ.

Аумаҫ ҡалпаҡ кеймәгәнһең...

Йәш саҡтан уҡ аралашып, ҡатнашып йөрөгән таныштарыбыҙ Өфөгә күсеп килергә булғас, тәү көндәре ике балалары менән беҙгә фатирға килеп төштөләр. Үҙҙәренә фатир тапҡылағансы, йәшәнеләр. Ҡатыны булдыҡлы, бик тә белемле, ойоштороу эштәренә һәләтле кеше ине. Үҫергә лә, үҫергә генә тейеш ине ул. Шуның өсөн бар хәлсә ярҙам итеп, пропискаға индерешеп ебәрҙек. Эшен үҙе тапты. Тиҙ арала баҫҡыстарҙан-баҫҡыҫҡа юғары үрләй башланы. Ниһайәт, ҙур ғына вазифаға билдәләп ҡуйҙылар.

Мин, ғаиләмдең матди хәлен яҡшыртыу маҡсатында, районға эшкә киттем. Улым бына-бына урта мәктәп тамамларға, институтҡа инергә әҙерләнә, ҡыҙым да ауылға бармайым, училищеға уҡырға инәм, тип әҙерләнә. Фатирымды тапшырмай ғына китәйем, балаларыма ҡалһын, тип уйланым. Эш башлаған

ауылда вакытлыса йәшәп тороpлоҡ фатир һорау ниәте менән теге таныш ҡатынға килдем. Хәҙер минең етәксем ине ул. Бер юлы вазифалы урыны менән дә ҡотлармын, тип уйланым. Өфөнән байтаҡ алыҫлыҡта ятҡан районға киткәнлектән, һирәк күрешелә ине. Эш аҙағына тиклем үк ҡалмай килеп етергә тейеш инек, Өфө светофорҙары, күпер төбөндәге тығылыштан йәһәт кенә йырып сығырмын тимә. Сәғәткә ҡарап борсолам да, вазифалы урында яңы эш башлаған кеше, моғайын, теүәл алтыла ҡайтыр өсөн атлығып тормайҙыр әле, бәлки өлгөрөрмөн, тип тағы тынысланам. Алты тулыр алда саҡ килеп еттем. Секретарь ҡыҙ:

— Етәксе эш аҙағында килеүселәрҙе яратмай. Ҡабул итмәҫ, — ти.

— Мин бик алыҫ райондан килдем. Исем-шәрифемде әйтһәгеҙ, ҡабул итер, — тип ныҡышам.

Секретарь ҡыҙ фамилиямды яҙып алды ла инеп китте, әммә кире яуап алып сыҡты.

— Иртәгә иртүк иң беренсе булып инер, тине, – тип урынына ултырҙы.

— Һылыу, фамилия буйынса ғына мин икәнде аңламағандыр, бәлки...

— Мин һеҙҙең исем-шәрифегеҙҙе тулыһынса яҙҙым, ҡайҙан икәнлегегеҙҙе лә әйттем.

— Һуң, һылыуҡай, бер ауыҙ һүҙ өсөн уттай эш ваҡытында тотош көнөм әрәм була бит. Мин хәҙер төндә ҡайтып китәм. Иртәгә иртәнсәк районда кәңәшмә билдәләгәнмен. Инәйем дә китәйем, ҡыуып сығармаҫ әле. Мин бик яҡын танышымын.

— Түрәләрҙең таныштары күп була ул. Мин хәҙер өсөнсө етәксе менән эшләйем инде. Беләм. Көн һайын һеҙҙең һымаҡ берәй танышы килеп сыға, көн һайын һуңлап ҡайтырға тура килә. Ул да кеше бит...

Кире боролоп сығып китеүҙән башҡа сара ҡалманы. Баҫҡыстар буйлап төштөм. Етәксе лифт менән төшкәндер. Бинаның тышҡы ишеге янында тап булыштыҡ. Һәм ул мине күрмәмешкә һалышып, башын боробораҡ йәһәтләп атлап сығып китте лә, машинаһына ултырҙы. Машина янында ире баҫып тора ине. Мин тупһа ла баҫып ҡарап ҡалдым. Шул уҡ көндә ҡайтып киттем һәм башҡаса килмәнем.

Ике йылдан аҙ ғына ашыуыраҡ ултырҙы түрәлек вазифаһында. Байтаҡ ваҡыт эш таба алмай йөрөгән тип ишеткеләп ҡалдым. Мин дә бер йылдан Өфөгә ҡайттым. Бер көн урамдан үтеп барһам, ҡаршыма был ҡатын тап булды. Ҡартайған, йәшенән алда бөкөрәйеп төшкән. "Яуызлыҡ кешенең иңендә ултыра, яуызлығы артҡан

һайын инҙе баҫыла бара", — ти торғайны инәйем. Шулайҙыр. Башҡа кешеләрҙән дә уның бик дорфа етәксе булыуы, кешеләргә көн күрһәтмәүе, хәлгә инә белмәүе хаҡында ишеткеләгәйнем. Хатта берәүһе: "Ай-һай, ҡулынан килһә, ҡояшты ла үҙ яғына ғына бороп ҡуйыр ине", – тигәйне. "Ярай, файҙаһы теймәһә лә зыянын да күрмәнем, хәл-әхүәлен белешәйем, ҡунаҡҡа саҡырайым," – тип, алыҫтан йылмайып яҡынлаштым. Әммә ул, мине күрмәмешкә һалышып, үтеп китте. Ни эшләйһең, күрмәмешкә һалышҡан кешегә нисек итеп әрһеҙләшеп күренеп тораһың? Мин дә үтеп киттем.

Әсәйемдең: "Бер йыл тартай һимерә, бер йыл бүҙәнә" йәки "Аумаҫ ҡалпаҡ кеймәгәнһең, һин дә ауырһың" тигән һәм башҡа бик күп мәҡәлдәрен иҫтә тота инем. Был юлы ла: "Кеше ни эшләп көнө менән генә йәшәй икән? Кеше ни эшләп биләгән вазифаһын мәңгелек тип уйлай ҙа, иртәгәһен күҙәлламай икән? Кеше ни эшләп вазифаһын башҡаларҙан үс алыу урыны итеп файҙалана икән? Кеше ни эшләп көфөр етерен уйламай икән? Көфөр бит ете быуыныңа тиклем ҡыуа..." — тигән һәм башҡа бик күп "ни эшләптәр" сыуалды башымда. Ике тапҡыр мине күрмәмешкә һалышып үткән был ҡатынды бик йәлләнем. Ул үҙ холҡо менән үҙ рухын һындырғайны. Вазифанан төшөп ҡалыуы түгел, ә рухы һыныуы үкенес ине.

Кеше ниндәй вазифала, ниндәй дәрәжәлә булыуына ҡарамаҫтан, бәҫен юғалтмаһа, ниндәй шарттарҙа ла күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәйәсәк, рухы ла һынмаясаҡ. Биләгән вазифаһын үҙ мәнфәғәтенә түгел, халыҡ мәнфәғәтенә хеҙмәт итеү өсөн файҙаланһа, ниндәй сүрәттә булһаң да йөҙ күрһәтмәй, танытмай үтеп китеү кимәленә төшмәй кеше.

Кеше һинең вазифаңа ҡарап хөрмәт итмәй. Кешелекле мөнәсәбәтең үҙең өсөн генә түгел, балаларың бәҫен ишәйтеү өсөн дә кәрәк.

Яҡын бер дуҫтың тыуған көн кисәһенә барғайным. Кисә ашханала үтте. Халыҡ күп йыйылғайны. Бер ваҡыт заманында бик юғары вазифа биләгән, әлеге көндә хаҡлы ялға сыҡҡан түрә килеп инде олоғара бүләк йөкмәп. Эргәмдә әсе телле генә бер ханым ултыра ине:

– Йыш ҡына күҙәткәнем бар, кеше бүләкте үҙ холҡона ярашлы һайлай.

– Ул бит ни генә эшләһә лә исем өсөн генә башҡарҙы. Уның өсөн есеме түгел, исеме мөһим булды. Шуға ҡәҙере лә, абруйы ла, һөйкөмө лә юҡ хәҙер. Элек тә шул ине инде... Ултырҙы шунда түрә

булып, атаһынан ҡалған мираҫ һымаҡ күреп.

Ысынлап та, был түрә ҡотлау һүҙе әйткәндә лә, ҙур сумаҙан һымаҡ итеп заманса төрөп һалынған ҡабарып торған юрған бүләк иткәндә лә әллә ни иғтибар итеүсе булманы. Бер аҙҙан янымдағы бер ҡунаҡ:

– Теге ҡайҙа ул? – тип һорағайны, теҙ быуындарым ҡалтыранып киткәндәй булды. Өҫтәүенә ире:

– Тәмәке тартырға сыҡҡайным, машинаһына ултырғанын абайлап ҡалдым. Һиҙҙермәй генә тайҙы, ахыры, – тине.

Уға ҡарата *теге, тайҙы* тигән һүҙҙәр йөрәк өшөткөс ине. Профессор Рафаэль Аҙнағолов менән институтта бергә эшләргә тура килгәйне. Берәй хөртөрәк нәмә килеп сыҡһа, бөлдөрҙө, ти торғайны. Заманында ҡул аҫтындағыларҙы дер ҡалтыратып тотҡан түрәне "теге тайҙы" тигәс, хәтер һандығынан ҡапыл ошо һүҙ зиһенгә килеп инде. Кеше, биләгән вазифаһының төп тәғәйенләнешен аңламағанлыҡтан, кешелек сифаттарын онота яҙған, үҙен, хатта үҙенең генә түгел балаларының абруйын да бөлдөрҙө.

Етәксе булып та бөлмәү, бөлдөрмәү, вазифалы урынынан киткәс тә һине күреп, әллә ҡайҙан йылмайып, вазифалы сағындағынан да нығыраҡ ихтирам итеп күрешһендәр, ҡосаҡлап алырҙай булһындар, балаларына һинең хаҡта маҡтап һөйләһендәр, хаҡлы ялға сыҡҡас та бәҫең һаҡланһын өсөн ни эшләргә кәрәк һуң?

Халҡыбыҙҙа бар ауырыуҙарҙан да дауа булырлыҡ аҡыл етерлек. Тик ул аҡылды уҡый, аңлай белергә, аңларға тырышырға кәрәк. Ундай аҡыл бөтөн халыҡтарҙа ла бар. Һәр халыҡ үҙ киләсәген үҙ аҡыл тупланмаһы нигеҙендә тәрбиәләгән. Әммә туған телен белмәү арҡаһында үҙ халҡының алтын хазинаһы менән ҡыҙыҡһынмаған кеше башҡа халыҡтарҙыҡын да бар тип тә белмәй. Ә бит халыҡ мәҡәлендә: "Түрә булһаң, түҙем бул, телгә татлы йөҙөм бул," – тип әйтелгән. Башҡорт теленда ҺАУАЛАНЫУ тигән ғәжәп һүҙ бар. Ул төшөнсәне уйлап сығарыу үҙе бер оло аҡылдыр. "Һауаланма, һауа урыны бушлыҡ", – тиҙәр өлкәндәр, маһайып, нигеҙһеҙ эреләнеп киткәндәргә.

Һүҙлектә ошондай аңлатма бирелгән: маһайыу, маҡтаныу, эреләнеү.

Һауалы – тәккәбер, маҡтансыҡ.

Һауаланыу һүҙенә ошондай аңлатма бирелгән. Әммә халыҡтың был мәғәнәне тап ошо ҺАУА һүҙе менән бәйләүе ҡыҙыҡ. Һауаланыу – эске бушлыҡ арҡаһында юғары күтәрелеү, тимәк, ни тиклем эсең бушыраҡ, ни тиклем еңелерәһең, шул тиклем юғарыраҡ күтәреләһең. Вазифа баҫҡыстары буйлап түгел, буш

кеше юғары вазифа биләй алмай, биләһә лә оҙаҡ торламай. ҺАУАЛАНЫУ тигән һүҙ кешенең күңел торошона, холҡона, ғәҙәтенә, үҙен тотошона ҡарата әйтелә.

Тормошта иғтибар менән күҙәтһәң, заманында һауаланып, "мин кем дә, һин кем", тип йәшәгәндәрҙең ғүмер һуңы ғазаплы тамамлана. Ундайҙарға ҡарата нәфрәтле-асыулы уйҙар ҡалҡып сыға, уның өҫтөнә ҡара нур йыйыла, елкәһен баҫа, рухын һындыра.

Яңынан тыуғандай булдым

(Үҙтәрбиә емеше)

Иҫәнғолда йәшәгән саҡта, Өфөнән килеүселәрҙең беҙгә һуғылмай киткәндәре бик аҙ булғандыр. Бер саҡ ҡыш көнө төнгө сәғәт өстәр тирәһендә өшөп-туңып өс кеше килеп инде.

— Рафиҡовтар ни эшләп йөрөй былай? – тип аптырап киттем. Сәй ҡуйып ебәрҙем, мейес тоҡандырҙым.

— Ырымбур өлкәһенән, Ҡыуандыҡ, һарыҡташ яҡтарынан командировканан ҡайтып килә инек, машина боҙолдо. Йәйәү атларға тура килде. Сәғәт ундан бирле йәйәү киләбеҙ. Далан бар икән. Өйҙә булһа ярар ине, өйө йылы булһа ярар ине, ҡасан барып етәбеҙ инде, төнөн сәй ҡайнатырлыҡ мөмкинлеге булһа ярар ине, тип юл буйы теләп атланыҡ. Ожмаҡха килеп индек бит, егеттәр! – тине Зәйни ағай Рафиҡов, өҫ кейемен дә һала алмай, ҡалтыранып. Марат Рафиҡов сисенә һалды ла, Булат Рафиҡовҡа ярҙам итә башланы. Булат ағайҙың аяҡтары шаҡылдап тора.

— Ожмахтағы рәхәтлек бындай булһа, бөтә көстө һалып эләгергә тырышыр кәрәк, — тине Марат, урындыҡҡа ултырып, арҡаһын мейескә терәгәс.

Мейес эргәһендә урындыҡ һалғайныҡ. Теҙелешеп менеп ултырҙылар. Ҡайһыныһы арҡаһын терәне, ҡайһыныһы — табанын. Сәй ҡайнап сыҡты. Һурпа йылыттым. Өйҙә "мәй" ҙә бар ине. Бөтөн нәмә талонға булған саҡта, биргән тауарҙың барыһын да ала торғайным. Теш-тешкә теймәй өшөгән саҡта, дарыу булараҡ, бик файҙалы эсемлек. Боролап, лимон тамыҙып һалып бирҙем дә, йылҡы һурпаһы ҡоротланым. Булат ағай, мәйҙән баш тартып, рәхәтләнеп ҡоротло һурпа эсте. Әммә йылынып етә алмай ине. Мин уға һис юғы табандарын ыуып, йөн ойоҡ кейеп, мейескә терәп ултырырға кәңәш иттем. Марат ярҙамында ул әйтелгән процедураны эшләне, мейескә терәлеп ултырҙы ла бер аҙ йылынғас, минең хәлдәрҙе, гимназия торошон һораша башланы. Мин тормош

һабаҡтарынан төҙөлгән программабыҙҙы күрһәттем.

Булат ағай күҙ йүгертеп сыҡты ла:

— Ғәжәйеп әйбер бит был! Йоҡлау юҡ, ағай-эне. Программа тураһында фекер алышабыҙ хәҙер. Өфөгә ҡайтҡас, йоҡларбыҙ. Йоко осто. Бына ҡайҙа ул башҡорт халҡын тергеҙеү программаһы! Бураҡаевтар революция яһарға уйлағандар бит! Әйҙәгеҙ, кем ниндәй тәҡдим индерә ала — кәңәш-төңәш биреген, — тине лә ҡысҡырып уҡырға тип, Марат Рафиҡовҡа бирҙе. Зәйни ағай менән үҙе тыңлап ултыра, фекерҙәрен әйтәләр, тәҡдим индерәләр. Булат Рафиҡов тыңлай-тыңлай ҙа маҡтап ала. — Ысынлап та тормошҡа аша торған булһа, мәктәптәргә дәрес итеп индерелһә, шәп бит, иҫ киткес бит! Был тиклемде еңеп сыға алырһығыҙмы икән — дәреслектәрен нисек эшләрһегеҙ... Хәйер, бәһлеүәндәй улың бар бит. Диҡҡәткә оҡшаһа, Илгизәр оло таяныс һиңә. Әгәр ундай-бындай фекер-тәҡдим кәрәк булһа, миңә мөрәжәғәт итерһең. Ҡушҡуллап ярҙам итермен, — тине лә бер аҙ уйланып ултырғас, кинәйәле генә йылмайып алды. Шунан, — хәйер, әгәр дәреслектәр өҫтөндә эшләй башлаһағыҙ, рухи тәрбиә тураһындағы бүлеккә мине миҫал итеп индереп ебәрә алаһың. Йәшерен-боҫортоно юҡ, тура юлдан тайпылған саҡ булып алды бит. Беләһең. Әммә мин Зәйни ағайым ярҙамында үҙемде ҡулға алдым. Тик һаулыҡ ҡына ҡаҡшап ҡалды. Беҙҙең иң уҫал дошмандарыбыҙҙың береһе — эскелек. Эсә белмәү. Ниндәй аҫыл ирҙәрҙе һәләк итә ул. Был хаҡта мотлаҡ яҙығыҙ. Эсеүҙе дауалап та, өгөт-нәсихәт менән дә, гипноз менән дә туҡтатып булмай. Фәҡәт кеше үҙе аңлап ҡына ташлай ала. Мин "эсеү" тигән дошмандан ҡотолғас, яңынан тыуғандай тойҙом үҙемде, — тине.

Булат Рафиҡовтың бындай тайпылыштары "Пионер" (*хәҙер "Аманат"*) журналы редакцияһында эшләгән сағында булды. Эштән китте. Шунан һуң үҙтәрбиә менән шөғөлләнеп, үҙен ҡулға алып, яңынан ең һыҙғанып эш башларға уйлағайны — ышанмайҙар, бер редакцияға ла эшкә алмайҙар. Был хәл миңә яҡшы таныш. Сөнки мин "Совет Башҡортостаны" редакцияһында эшләй инем һәм 1972 йылда декрет отпускыһына китергә тейеш инем. Бер көн Булат Рафиҡов редакцияға килеп, минең ҡасан китергә тейешлегемде белеште лә үҙен тәҡдим итеүҙе һораны. Әммә Абдулла Ғиниәт улы ҡырҡа баш тартты. Ул хаҡлы ине, сөнки эскән кеше ҡабат-ҡабат вәғәҙәләр бирә, һүҙендә тормай, бындай яуаплы эштә ышанысһыҙ була. Өҫтәүенә, тәржемә бүлегенә кеше табыуы ҡыйын була торғайны. Ә ул саҡтарҙа *Л. И. Брежнев* сығыштары, уның "трилогияһы", ҡарарҙар, съезд материалдары иҫ

китмәле күп ине. Рус теленән туранан-тура башҡортсаға тәржемә итеп, машинисткаға әйтергә кәрәк. Яңы кеше өйрәтеүе бик оҙайлы эш. Унан тәржемә эшен өйрәтеп кенә лә булмай, уға тыумыштан һалынған һәләт тә кәрәк. "Алырмын ти, шунан ышаныҫты аҡламай, эш боҙоп ҡуйһа? Тағы ҡайҙан кеше табайым мин? Киткәнеңә тиклем берәйһен өйрәт," — ти редактор. Ә Булат ағай — әҙер тәржемәсе. Ике телде лә бик һәйбәт белә. Һәләтле журналист, шағир. Теле бай. Ғөмүмән, иҫ китмәле һәләтле, белемле кеше ине ул.

Иртәгәһен Булат ағай тағы килде.

— Булат ағай, мин үҙ өҫтөмә яуаплы бурыс алам... — тинем, икенсе тапҡыр редакторға инер алдынан.

— Мәрйәм һеңлем, — тине ул. — Мин бит үҙем ташланым, аңлы рәүештә ташланым. Ваҡытлыса түгел, бөтөнләйгә ташланым. Шуға ныҡ ышана алаһың.

— Абдулла Ғиниәтович! Булат Рафиҡовты өйрәтергә түгел. Ике телде лә бик һәйбәт белә. Ултыра ла тәржемә итә башлай торған кеше. Алығыҙ. Һынау ваҡыты билдәләгеҙ. Тәүге тайпылышы менән үк сығарып ебәрегеҙ. Үҙегеҙҙең ҡулда бит, — тинем.

— Ә тағы эсә башлаһа?

— Уғаса сығырмын. Баланы әсәйем ҡарашыр.

Абдулла Ғиниәтович эшкә алды уны. Аҙ ғына эшләгәйне, бүлек мөдире итеп күсерҙе. Унан һуң "Ағиҙел" журналы, БАССР Яҙыусылар союзы идараһының яуаплы сәркәтибе, "Ағиҙел" журналы редакторы. Бынан тыш Аҡһаҡалдар ҡоро ойоштороҙо, башҡорттарҙың Бөтөн донъя ҡоролтайы башҡарма комитеты ағзаһы булды. Башҡорт халҡының иң яратҡан абруйлы яҙыусыһына әйләнде. Республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге премияһы лауреаты исеменә лайыҡ булды, Халыҡтар дуҫлығы ордены менән наградланды. Шуның өсөн Булат Рафиҡов эсеп үткәргән көндәрен юғалған йылдар тип һанай һәм үҙҙәрен әрәм итеүсе егеттәрҙең дә, эсеүгә баш һалған ҡатын-ҡыҙҙарҙың да ғүмерҙәре өсөн әрней торғайны.

Булат Рафиҡов менән әңгәмәнән һуң үҙтәрбиә менән шөғөлләнеү тураһында байтаҡ ҡына әҙәбиәт аҡтарҙым, үҙ илебеҙҙең дә, сит ил ғалимдарының да хеҙмәттәрен өйрәндем, халҡыбыҙ ижадынан тәрбиә ҡанундары менән ентекләп таныштым. Кешегә үҙтәрбиә менән шөғөлләнеү бик мөһим, сөнки фәҡәт шул юл менән генә насар ғәҙәттәрҙән ҡотола ала. Ә илебеҙҙә барған туҡтауһыҙ үҙгәрештәр, эшһеҙлек, маҡсатһыҙлыҡ, өмөттәрҙең селпәрәмә килеүе кешене быуынһыҙландыра, рухын ҡаҡшата, "арҡа һөйәге ҡаҡшаған" йәштәр баштарын эскегә һала, элмәккә элә. Ә бит бөтөн

ауырлыҡтарҙы ла еңергә була, тик ваҡытында үҙеңде ҡулға алырға, уйланырға һәм үҙтәрбиәгә тотонорға ғына кәрәк.

Үҙтәрбиә менән шөғөлләнергә теләүселәр өсөн ошондай теләк-кәңәш төҙөнөм: ете төшөнсәнән башлар кәрәк үҙеңде үҙгәртеүҙе.

1. Үҙ-үҙеңде табыу. Тәбиғәт ниндәй һәләт һалған һиңә? Һин ҡайһы йүнәлештә эшләргә тейешһең – шуны ап-асыҡ күҙ алдыңа килтер. Һәләт, талант, тигән төшөнсәне фәҡәт йыр-бейеү, рәсем төшөрөү, шиғыр яҙыу, тип кенә уйларға ярамай. Тәбиғәт һәр кешене үҙен үҙе йәшәтерлек һәләт, һөнәр менән яратҡан. Бер кем дә икенсеһенең елкәһендә ятырға тейеш түгел.

Артабан Тәбиғәт биргән сифаттарыңды билдәлә. Ыңғайҙарын да, үҙең белгән кире яҡтарҙы ла. Уның өсөн кешенең һинең хаҡта әйткән фекеренә лә ҡолаҡ һал. Һинең хаҡта насар һөйләйҙәр икән, асыуланып, һүҙ юллап йөрөмә. Кәйефең дә ҡырылмаһын. Ҡолаҡ һал, анализла, бәлки, дөрөҫ әйтәләрҙер. "Ни өсөн минең хаҡта ундай хәбәр таралыуға юл ҡуйҙым, ниндәй сифаттарыма, холоҡ-фиғелемә ҡарап улай тип әйттеләр икән? " – тигән һорау менән ишеткән хәбәреңә анализ яһа һәм төҙәтеү яғын ҡара. Ҡайһы саҡта һин дуҫ күргән кешеләрҙең маҡтауына, хуплауына ҡарағанда, һине яратмаған кешеләрҙең "баһаһы" төҙәлеүгә нығыраҡ ярҙам итә.

Үҙтәрбиә менән үҙгәрәсәк Үҙең һәр саҡ һинең хыялыңда йәшәһен, һәм һин уға ҡарап тиңләшә бар. Яңы Үҙең башҡарасаҡ эште, йәшәйәсәк мөхитте, өлгәшәсәк уңышты һәр саҡ күҙ алдыңа килтер. Йоҡонан торғас та, транспортта барғанда ла, йоҡлар алдынан да. Төштәреңде лә фәҡәт ыңғайға юра. Яҙмыш маңлайыңа яҙылған, тигән төшөнсә ана шул. Тимәк, һин үҙ зиһененең мөмкинлеген эшкә ҡушып, үҙ яҙмышыңа тәьҫир итә алаһың. Яңы Үҙеңде барлыҡҡа килтереү өсөн ысынбарлыҡтағы минде яҡшылап өйрәнергә кәрәк.

Ҡайһы холоҡ-фиғелең менән риза түгелһең? Әгәр ошо һорауға яуап таба алмаһаң, уйың менән күҙ алдына килтереп, үҙең өсөн абруйлы кеше менән кәңәшләш. Ул кешенең берәй яҙыусы, философ, ғалим, яҡын дуҫың, өлкән туғаның, атайың йәки әсәйең, хатта кинолағы роле аша оҡшатып йөрөгән артист булыуы ихтимал. Уйыңда уның менән һөйләш һәм ысын Үҙеңде асыҡла.

Әммә күҙҙә тот. Һинең тормошоңда, эшләгән эштәреңдә, уйлаған уйыңда бер генә лә ваҡ нәмә юҡ. Бөтәһе лә ҙур әһәмиәткә эйә, бөтәһе лә һинең яҙмышыңда ниндәйҙер хәл иткес эш башҡара, шуның өсөн береһенә лә ҡул һелтәп ҡарама. Иң мөһиме — үҙеңә ҡарата иғтибарлы бул.

Үҙеңде ҡуя бел. Миңә ярай ул, тимә. Һин бер кемдән дә кәм

түгел. Яҡты донъяға беҙ барыбыҙ ҙа тиң хоҡуҡлы кешеләр булып тыуғанбыҙ. Тәбиғәт тыуымда ла, үлемдә лә бер кешегә лә өҫтөнлөк бирмәй, береһенә лә ташлама яһамай. Тик беҙ үҙебеҙ генә үҙебеҙҙе төрлө кимәлгә ҡуябыҙ. Әлбиттә, атай-олатай, әсәй-өләсәйҙәрҙән ҡалған рухи ныҡлыҡ йәки ҡаҡшағанлыҡтың тәьҫире эҙһеҙ ҡалмай, әммә был хаталарҙы һин төҙәтергә һәм үҙеңдең ҡан нәҫеленә ыңғай йоғонто яһарға тейешһең.

Һин үҙең өсөн бар булмағанһың донъяға. Һин – тәбиғәт, балаларың, халҡың алдында бурыслыһың. Ошо бурыстарыңды үтәмәһәң, тәбиғәт биргән һәләтеңде тотош файҙаланмаһаң, бөтә көс-ҡеүәтеңде ҡара эштәр башҡарыу өсөн йүнәлтһәң, кешеләргә үс тотһаң, насарлыҡ уйлаһаң, йәнең ғазап кисерәсәк.

Ғазаплы йән һынған рухлы нәҫел ҡалдырасаҡ.

Һәләтһеҙ кеше юҡ. Тәбиғәт һәр кешене үҙ һәләте менән бар итә, һәм кеше, үҙ һәләтен үҙе асып, файҙаланырға ғына тейеш. Уның өсөн бер ваҡытта ла һуң түгел. Нисә йәштә булһаң да, үҙеңде аңлап ал, рухи һәм физик сәләмәтлегеңде нығытыу эшенә тотон. Йәшеңә ҡарама, һуң инде тимә. Булат Рафиҡов, утыҙ һигеҙ йәшем тулған саҡта, үҙ-үҙемә теҙген кейҙерҙем һәм ауыҙлыҡланым, тине.

2. Йәшәү маҡсатыңды аныҡлау. Яҡты донъяла йәшәү һәм аңлы ғүмер кисереү дәүерендә ниҙәр эшләргә, нәмәгә өлгәшергә тейешһең. Ҡыҫҡа һәм тос һүҙҙәр менән яҙып сыҡ. Яҙыуға әүәҫлегең булмаһа, уйла, тос һүҙҙәр менән ҡағиҙә рәүешендә ҡалыпҡа һал да көн һайын ҡабатла. Ул һинең йәшәү рәүешеңде тәртипкә һалыр. Бихисап тәртипһеҙ һандарҙан иҫ китмәле ҡабатлау таблицаһы килеп сыҡҡан, шуның кеүек, уй-хыялдарың, теләк-ынтылыштарың, хәл ителмәгән проблемаларың, үтәлмәгән бурыстарың, ваҡыт арттырыуыңды көтөп торған вәғәҙәләреңде һәм башҡа донъяуи мәшәҡәттәреңде тәҫле генә булып бер ҡалыпҡа һалыныр ҙа күҙгә күренмәй юғала барған көндәрең эҙмә-эҙ үтәлә барған маҡсатлы ғүмергә әйләнер. Тик маҡсатыңдан тайпылма, юғиһә, тағы барыһы ла селпәрәмә килер.

3. Бер генә проблеманы ла урап үтмәү. Урап үткән йәки аша атлап сыҡҡан проблема барыбер килеп сығасаҡ һәм һиңә ҡамасаулаясаҡ. Проблема үҙенән-үҙе бар булған кәртә түгел. Һәр уңыштың башында мотлаҡ була торған тормош һикәлтәһе ул. Уны шулай күҙ алдына килтерергә кәрәк. Һинең бөтә тормошоңдағы уңыштарың ҙур бер һауыт эсендә. Ә уның ҡапҡасы бар һәм ҡапҡас ныҡ итеп ябылған. Шул ҡапҡасты астыниһәң, һауыттың эсендә тағы бер нисә һауыт. Уларҙың да һәр береһе ҡапҡаслы. Һәр береһенең эсендә уңыш бикләнгән. Ҡапҡасын асһаң — уңышҡа

юлығаһың. Аса алмай урап үтһәң, өлөшөңә тейгән көмөштән мәхрүм ҡалаһың. Әммә ҡапҡастары ла төрлөсә ябылған. Ҡайһыныһы тиҙ асыла, ҡайһыныһын асыу өсөн ярҙамсылар кәрәк. Тормош үҙе лә яңынан-яңы ҡапҡаслы һауыттар бар итеп тора. Проблеманы ана шул ҡапҡастар тип хис ит. Ҡапҡасты асыу оҫталығы үҙеңә бәйләнгән. Тәжрибәнән, тормош һабаҡтарынан, зирәклектән, оһолдан, өлкәндәр аҡылын файҙалана белеүҙән хасил ул оҫталыҡ. Тимәк, тормоштағы проблемаларҙы урап үтеү бер ни ҙә бирмәй. Ҡасан да хәл итергә кәрәк. Үҙең генә хәл итә алмаһаң, туғандарың, дуҫтарың менән хәл итергә тырыш.

4. Үҙ уй-фекерҙәреңде фәкәт ыңғайға ғына бороу. Мин эшләй алам. Был ғүмер миңә бер тапҡыр ғына бирелгән. Мин үҙемдең мөмкинлегемде тотош файҙаланырға тейешмен. Яҡты донъянан киткәс, минең насар ғәҙәттәрем арҡаһында яҡындарым яфаланмаһын, йәнем ғазапланмаһын, тип уйларға кәрәк.

5. Сама белеү. Һине маҡтау – шаштырмаһын, илһам өҫтәһен, һине хурлау – ҡанатыңды һындырмаһын, сәм тыуҙырһын. Сама белгән сайҡалмаҫ.

6. Ваҡыт ҡәҙерен белеү. Донъяла әҙәби китаптар иҫ китмәле күп, ваҡытлы матбуғаттың сиге-ҡырыйы юҡ, тәүлек әйләнәһенә әллә нисә каналдан телевизион тапшырыуҙар бара, көнө-төнө радио тулҡындары эшләй. Кешелек донъяһы информациялар менән күмелгән. Кинотеатрҙар, концерт залдары ниндәй генә күңел асыу саралары үткәрмәй. Хатта бер ни эшләмәй, фәкәт яңылыҡтар тыңлау менән генә шөғөлләнһәң дә, тыңлап, ҡарап өлгөрөрлөк түгел. Барлыҡ ошо сараларҙан үҙ маҡсатыңа кәрәклеләрен генә һайлап алыу, зауығыңа ятыштарын ғына тыңлау-ҡарау тәүлектәге егерме дүрт сәғәтте иҫ китмәле файҙалы итеп үткәреүгә мөмкинлек бирер. Ғүмерҙе оҙайтыу сараһы ул — ваҡыт ҡәҙерен белеү. Оҙон-оҙайлы ғүмерҙә лә бер ни эшләп өлгөрмәүең ихтимал, ҡыҫҡа ғына ғүмерҙе лә мәңгелеккә әйләндереүең мөмкин.

7. Һаулығың — төп байлығың. Һәр кеше үҙ ғүмере өсөн үҙе яуаплы. Һәр кеше тыуа, үҫә, атай-әсәйҙән рухи байлыҡ алып ҡала, традицияларға өйрәнә, быларҙың барыһын да ул үҙ белемен, оҫталығын, маһирлығын өҫтәп артабан камиллаштырырға, дөйөмләштерергә һәм киләһе быуынға аҡыл бирергә, һабаҡ тапшырырға тейеш. Ошо яҡтан ҡарағанда һәр кеше үҙ ғүмере өсөн үҙе яуаплы булһа ла, уның ғүмере кешелек донъяһына кәрәк. Шулай булғас, ул кешелек донъяһы һәм тәбиғәт алдындағы бурысын үтәү өсөн, үҙ һаулығын һаҡларға бурыслы.

Әгәр тәрбиә эшендә ауыл традицияһы, халыҡ традицияһы

һаҡланһа, эсеү, тәмәке тартыу, аҙғынлыҡ, илдән китеү һәм башҡа шундай халҡыбыҙҙы тарҡата торған тайпылыштарға юл ҡуйылмаҫ ине.

Ә илебеҙҙә барған туҡтауһыҙ эксперименттар күпме һәйбәт традицияларҙың юғалыуына килтерҙе һәм килтерә. Аҙ һанлы халыҡтарҙың ғына түгел, күп һанлы рус халҡының үҙенең дә иҫ китмәле традициялары юҡ ителде. Ауыл хужалығында ла, көнкүрештә лә, сәйәсәттә лә, тәрбиәүи эштә лә, мәҙәниәттә лә...

Әммә әле һуң түгел, милләтте милләт итеп йәшәтә торған традицияларыбыҙҙы мөмкин тиклем тергеҙеү сараһы күрергә кәрәк.

* * *

Алтмышынсы йылдарҙа байтаҡ ҡына ауылдар бәләкәйләнә, юҡҡа сыға, "киләсәкһеҙ ауылдар" иҫәбенә индерелә башланы. Ә Ибрай ауылы ҡымшанмай ҙа ултырыуын дауам итте, киреһенсә, яңы буралар ҙа күренгеләне. Ул йылдарҙа ауылдарҙа яңы бура һирәк осрай торған ваҡиға ине. Республика буйлап йөрөгән саҡта, хатта урта мәктәпле ауылдарҙың да юҡҡа сыҡҡанлығын күреп, бор-солоп ҡайта инем. Бер ваҡыт әсәйемдән былай тип һораным:

— Әсәй, оло юл эсендә уңайлы ерҙәге ауылдар юҡҡа сыға. Ә Ибрай ауылы иң төпкөлдә урынлашҡан. Ере аҙ, юлы юҡ, йөрөүгә уңайһыҙ. Ә һаман ҙурая. Ни өсөн шулай?

— Ибрайҙар татыуҙар улар. Көнсөл түгелдәр. Халҡы көнсөл ауылдар тарҡалыусан. Беҙҙең ауыл бөтөнөһө бер туған кеүек бит ул. Бер ваҡытта ла ошаҡ йөрөтмәне, бер-береһен һатманы. Ауылдың ошо рәүеше һаҡланғанға ныҡ ул. — Ибрай тураһында һораша башлаһаң, әсәйем ихлас һөйләй, миҫалдар килтерә ине. Был юлы ла үҙ ҡарашының дөрөҫлөгөн иҫбат итер өсөн ваҡиға һөйләп алды. — Бер саҡ колхоз рәйесен саҡыртып, план үтәй алмауҙа ғәйепләп әрләп ҡайтарғандар. Уполномоченный ебәрергә булғандар. Рәйес халыҡты йыйып был хаҡта һөйләне.

— Ah-ah, уполномочтары ни килһен, күрһен. Тау-таш аша туҡырлап йөрөгәнде, ауыҙ ҡамаштыра-ҡамаштыра ҡорот кимереп эш эшләгәнде белһен, шунан планды нисек үтәп була – аҡыл өйрәтеп китһен, — тинек.

Уполномоченный килеп төштө. Тағы клубҡа йыйылышҡа саҡырҙылар. Клуб тулы халыҡ. "Урып-йыйыу эше аҡрын бара. Уңышығыҙ башҡаларҙыҡынан түбән", — тип әрләй генә был халыҡты. "Сәбәбе ниҙә?" — тип, ибрайҙарҙы берәм-берәм торғоҙоп

һорай башланы. Шул сак аранан мин:

— Иптәш уполномоченный! Сәбәбен белһәк, беҙ күптән ул етешһеҙлектәрҙе бөтөрөр инек. Бына һеҙ, уҡыған кеше, иртәгә беҙҙең менән бергә баҫыуға барығыҙ, ырҙынға сығығыҙ. Сәбәбен асыҡлағыҙ. Шунан тағы йыйылышып һөйләшербеҙ. Былай әрепләшеп ултырыуҙан ғына эш алға бармаҫ ул, — тинем. Риза булды райком вәкиле. Иртәгәһен тегене оҙон ҡаҡ арбаға ултыртып, тау аша суҡыртмаҡлы юлдан туранан алып барҙыҡ баҫыуға. Эш барышы менән таныштырҙыҡ, көндөҙ ҡорот ҡушып сәй эсерҙек. Ныҡ ҡына ҡаҡшағандыр инде, эш аҙағын көтмәй ҡайтырға булды. Ҡайтҡан саҡта, бригадирға:

— Аҙыраҡ бесән сабып һалайыҡ арбаға, — ти икән.

— Ҡайҙа ул, хәҙер килеп штраф һалып китерҙәр. Эшкә барымдары булмаһа ла, күҙәтеүгә әүәҫтәр бит ул ҡайһы берәүҙәр, — тигән бригадир.

— Мин янында бит, бер ни ҙә булмаҫ, бер ҡосаҡ бесәнде инде — кем бәйләнһен ул хәтлем?

— Юҡ, ағай. Бер ҡосаҡ түгел, бер бөртөгөнә лә теймәйбеҙ колхоз мөлкәтенең. Сабылған урыны ҡалыр уйылып. Уйым урынды күреп икенсеһе килеп сабыр. Уполномоченный велел, тип яҙып китеп булмай бит, ҡултамға һалып, — тип тәки ҡаҡ арбала алып ҡайтҡан, ти, быны. Ташлы юл буйлап тау аша ҡаҡ арбала ҡайтҡандан һуң тәне ҡаҡшаған уполномоченный ырҙын табағына барып та тормаған — Иҫәнғолға тура ҡайтып киткән. Ҡабат Ибрайға килеп тә әйләнмәне, ти. Райкомда: "План үтәү түгел, эшләгәндәре өсөн рәхмәт әйтерлек. Шул тиклем ауыр шарттарҙа эшләйҙәр," — тип һөйләгән. Ибрайҙар бер ваҡытта ла бер-береһен һатманы. Һуғыш ваҡытында бер ус иген өсөн төрмәгә ябҡан саҡтарҙа ла улар, бөтөнөһө бер булып, ҡурмаслыҡ-талҡанлыҡ алып ҡайтҡыланы — береһен дә ошаҡламанылар.

Ибрайҙар тураһында әллә күпме һөйләп була.

Һуғыш ваҡытындағы ауырлыҡты берҙәм еңеп сығыуҙары, тол ҡалған йәш ҡатындарҙың бер һүҙле булып бер-бер артлы бала табыуҙары ла, уларҙы ауылдаштарының ғәйепләмәүҙәре лә — татыулыҡ билдәһе.

Ибрай халҡының төп сифаты – татыулыҡ, ауырлыҡҡа баш эймәү, ҡайғы-хәсрәтте еңелсәрәк үткәреү, кеше ҡайғыһын үҙ итеп ҡабул итеү, әммә үҙеңдекен кеше елкәһенә һалмау, ҡайһы бер күңелһеҙерәк йәки ҡыҙығыраҡ хәлдәрҙе лаҡапҡа әйләндереп ебәреү. Аҙаҡ үҙҙәре генә аңлаған ваҡиғаға бәйле лаҡаптары ҡанатлы һүҙгә әйләнеп китә. "Шпион тотоп ҡына аҡса эшләп бул-

май ул", – тип ҡуйһындармы йәки "эстән гимнастерка, тыштан аҡ күлдәк, уф тирләтә", "эшең күп булһа, мандолина уйна ла бейе", "һүҙеңде һүҙ иткең килһә, ат булып кешнә" тип аҡыл өйрәтһендәрме — былар бөтөнөһө лә билдәле бер ваҡиғаға бәйле. "Ауылда ихлас һөйләнгән көләмәс күп икән – ул сәләмәт мөнәсәбәт, татыулыҡ билдәһе. Ҡайһы бер ауылдарҙа көр күңеллелек юҡ, телгә алып һөйләрлек бер мәрәкә лә булмай. Ибрайҙар нәмәне булһа ла мәрәкәгә әйләндерә лә ебәрә. Ғәйбәт һөйләмәйҙәр," — тигән фекер ҙә әйтте әсәйем.

"Һүҙеңде һүҙ иткең килһә, ат булып кешнә," – тигән ҡанатлы һүҙгә бәйле ваҡиға тураһында Хәзирә апай Ҡолһаринанан һөйләтеп алғайным.

"Бер саҡ алты ҡатын бәләкәй саналар һөйрәп Һарыҡташҡа орлоҡҡа барҙыҡ. Юл насар, йә ҡара ер, йә батҡаҡ, йә боҙ. Туранан ҡайтыр юлды көрт баҫҡайны, ураўҙан, Иҫәнғол аша ҡайтырға булдыҡ. Хәл бөттө, йығылабыҙ ҙа китәбеҙ, йығылабыҙ ҙа китәбеҙ. Бөтәбеҙгә бер баш ҡорот ҡалған. "Кем Гитлер тураһында иң яман йыр сығара, шул ҡороттан бер тешләм кимереп ала!" – тип ярыш ойоштороҙоҡ. Китте таҡмаҡ сығарыш. Сана өҫтөндәге тоҡҡа баҫабыҙ ҙа ҡул болғай-болғай шиғыр һөйләйбеҙ, йә таҡмаҡ әйтәбеҙ.

Телеграмм баганаһын
Ултыртҡандар терәүһеҙ.
Ҡәһәр һуҡһын һине, Гитлер,
Ҡалдырҙың беҙҙе йәрһеҙ.

Таң атҡанда яу башланы
Немецтың эте Гитлер.
Илгә һыймаған фашисты
Ояһында дөмөктөр.

Кәбән тартам бер үҙем,
Ер һөрһәм дә — бер үҙем.
Ирҙәребеҙ ҡайтыр әле,
Дөмөккәс гитлеризм.

Орлоҡҡа тип барған инем,
Тәртә тейҙе билемә.
Һугыштарҙа ирем ҡалды,
Ҡайталманы иленә.

Һары сәсле нимес ҡыҙы
Сәстәрен үрә микән?
Беҙҙең күргән нужаларҙы
Улар ҙа күрә микән?

Яландарҙа усаҡ яҡһаң,
Яға күрмә аҫҡаҡты.
Рәхмәт инде, әхирәттәр,
Үткәрештегеҙ ҡашлаҡты.

Шулайтып, алмаш-тилмәш еңеүсе булып, ҡоротобоҙҙо ла ашап бөттөк. Иҫәнғолға саҡ килеп еттек. "Әйҙәгеҙ, райкомдан икмәк һорайыҡ. Моғайын, бирерҙәр. Улар өсөн орлоҡ алып ҡайтып киләбеҙ бит, тағы ҡырҡ саҡырымды үтерлек хәл ҡалманы", — тиештек тә, райком бинаһы янына килеп туҡтаныҡ. "Беренсенең үҙенә инәбеҙ!" – тип ҡайышабыҙ. Индермәйҙәр. Ишек төбөндә ултырған ҡыҙ яҡын да ебәрмәй. Сыҡтыҡ та райкомдың беренсе секретары кабинетының тәҙрә төбөндә саналарыбыҙға егелешеп теҙелеп баҫтыҡ, шунан бер юлы ғына ат булып кешнәп ебәрҙек. Райком секретары тәҙрәнән ынтылып ҡараһа, йәш кенә алты ҡатын тора ат булып кешнәп! Аптырап киткәндер инде. Ярҙамсыһын саҡырып, беҙҙең кем икәнлекте, ни эшләп улайтып торғанлыҡты һорашырға ҡушҡан. Теге ҡыҙыҡай килеп етте беҙҙең янға. Кем икәнебеҙҙе, ни эшләп улайтып торғаныбыҙҙы һорашты ла инеп китте. Шунан һәр беребеҙгә берәр буханка икмәк, икешәр кило он бирергә, тип ҡағыҙ яҙып бирҙе. Өйҙә туғандарыбыҙ ярым ас ултыра, тигәндәй. Икмәкте лә тамаҡ ялғарлыҡ ҡына ашаныҡ та алып ҡайттыҡ күстәнәс итеп. Ондан рәхәтләнеп ыумас ыуҙыҡ. Эй-й-й, уйлап ҡараһаң, ун туғыҙ-егерме йәшлек кенә көйө ҡалғанбыҙ бит ирҙәребеҙҙән... Эстә ут яна, дөрләп яна. Тотош тоҡанмаҫ тимә. Ә тыштан һиҙҙермәйбеҙ. Бер-беребеҙгә терәк булырға тырышабыҙ. Тотош ауыл бергә ҡушылып иларлыҡ ине бит ул йылдар. Эштән аяҡты саҡ һөйрәп ҡайтабыҙ. Аҙ ғына хәл алабыҙ ҙа кисен клубҡа сығабыҙ. Күмәкләшеп таҡмаҡ әйтәбеҙ ҙә бейейбеҙ, таҡмаҡ әйтәбеҙ ҙә бейейбеҙ. Шатлыҡтан ғына бейемәй икән ул кеше. Йөрәктәге ялҡынды шулай сығарғанбыҙ — ҡан һаумаһын өсөн.

Ибрайҙарҙың йәшәү рәүеше элек-электән шулай килгән ул: **бирешмәү, һыр бирмәү, һынмау.**

Салауат – рухи ныҡлыҡ өлгөһө

Салауат Юлаев һәйкәленең скульпторы Сосланбәк Тавасиев һәйкәлде эшләр алдынан уҡ урын һайлай. Өфөлә йәшәгән сағында уҡ дуҫы башҡорт рәссамы Рифҡәт Арыҫланов менән Ағиҙел ярын байҡап йөрөйҙәр, мөһабәт һәйкәлде күҙ алдына килтереп хыялдарға сумалар. Сосланбәк Тавасиевҡа әлеге һәйкәл торған урын бик оҡшай. Поезда барыусыларға ла, йылға буйлап пароходта йөҙөүселәргә лә, автобус менән килеүселәргә лә сәләм бирep торасаҡ, тип дәртләнеп, күңелендә был образды тыуҙыра башлай. Әммә етәкселектә ҡаршы булыусылар табыла. Шәхси йорттарҙың күп булыуына һылтаналар, уларҙы күсереү, яңы фатирҙар биреү үтә ҡиммәткә төшәсәк тип, һәйкәлде Октябрь проспектына ҡуйыу өсөн эшләргә тәҡдим итәләр. С. Тавасиев тиҙ генә баш бирергә уйламай. Мәскәүҙә Өфө төҙөлөшөнөң генераль планы менән таныша. Өфөнөң киләсәкке архитектураһы буйынса был йорттарҙың күсереләсәген асыҡлай һәм дәртләнеп эшкә тотона. Шулай ҙа Салауаттың әлеге урыны өсөн көрәш дауам итә. Өфөгә ҡабат-ҡабат килергә тура килә уға. Ошондай сәйәхәттәренең береһендә беҙ, Башҡорт дәүләт университетының башҡорт-рус бүлегендә уҡыусы бишенсе курс студенттары, уны осрашыуға саҡырҙыҡ.

Осрашыу ихлас үтте. Бик күп һорауҙарға яуап алдыҡ.

— Салауатҡа һәйкәл эшләүгә ике сәбәп булды. Беренсенән, — тине Сосланбәк Дафай улы, — мин һуғыш ваҡытында Башҡортостанда йәшәнем. Райондарҙың береһенә командировкаға килгән мәлдә, егеттәрҙе фронтҡа оҙатҡан саҡҡа тура килдем. "Салауат батыр улдары икәнлегегеҙҙе онотмағыҙ! Салауат йөҙөнә тап төшөрмәгеҙ! Салауат һымаҡ булығыҙ! " — тип оҙаталар ине улдарын атай-олатайҙар. Мин эргәмдә торған бер ирҙән: "Кем ул Салауат?" — тип һорағайным, ул яуап бирмәне, тик шундай итеп ҡараны миңә: "Салауатты белмәгән кеше лә бармы ни донъяла?" – ти ине был ҡараш. Был ҡараштан һуң мин тағы кемдәндер был хаҡта һорашырға оялдым һәм Өфөгә ҡайтҡас, китапханаға инеп, Салауат тураһында әҫәр биреҙеҙ әле, — тип һораным. Китапханасы шунда уҡ Степан Злобиндың "Салауат Юлаев" тигән романын бирҙе. Мин Салауаттың тормошон бик ентекләп өйрәндем. Халыҡҡа үҙ батырын үҙенә ҡайтарайым, тип уйланым. Эвакуацияла саҡта башҡорттарҙы бик яратып өлгөрҙөм. Бынығы — беренсе сәбәп. Салауат һәйкәле эшләүгә тотоноуымдың икенсе сәбәбе — кеше азатлығы, рух азатлығы өсөн көрәшсе образын аҙ һанлы осетин халҡы вәкиле булған мин эшләй аласаҡмын, сөнки

ғүмере буйы рух азатлығы өсөн көрәш алып барыусы, азат күңелле, буйһонмаҫ йөрәкле башҡорт халҡының уй-хыялдарын, ошондай уҡ рухлы халыҡ вәкиле булараҡ, мин бик яҡшы аңлайым, — тип һөйләне Тавасиев.

Беҙҙең ихласлыҡты күреп, ул шул тиклем ҡыуанды һәм:

— Салауатҡа һәйкәл ҡуйылғас, мине һәр башҡорт өйөндә үҙ туғаны кеүек йылы ҡабул итерҙәренә иманым камил, — тине.

Әйтеп үтәйем, беҙ С. Тавасиев менән осрашҡандан һуң, һәр биш йыл һайын июль айының тәүге шәмбеһендә иртәнге сәғәт унда Салауат һәйкәле янында осрашырға һөйләштек. Рәшит Шәкүр: "Мин һабаҡташтарымдың был һүҙҙе тоторҙарына ышанам, һәр хәлдә һөйләшкән көндә бер үҙем булһа ла килеп, Салауат менән әңгәмә ҡороп китәсәкмен", — тине. Һабаҡташтарыбыҙ әлегә саҡлы ошо традицияға тоғролар.

Сосланбәк Тавасиев халҡыбыҙ традицияһын өйрәнгәндән һуң, ошондай һығымта яһаған: **халыҡтың һәр айырым вәкиленең рухи көсөн бергә берләштереп, ҡеүәтле көскә әйләндереүсе уртаҡ рухи байраҡ булыуы шарт. Бындай рухи байраҡ бөтөн ғәмле көстәрҙе бергә туплай, халыҡтың рухи көсөн арттыра.**

Әгәр һәр кем үҙенең рухи батырлыҡ өлгөһөн булдырып, үҙтәрбиә менән шөғөлләнһә, халҡыбыҙ яҙмышындағы бихисап рухи батырлыҡ өлгөләре беҙҙең ҡеүәттәребеҙҙе бергә тупларға ярҙам итәсәк, һәм беҙ халҡыбыҙға килгән афәтте — эскелекте лә, наркоманияны ла, әҙәпһеҙлек арҡаһында тарала башлаған йоғошло ауырыуҙарҙы ла, халыҡ яҙмышына ҡарата ғәмһеҙлекте лә еңәсәкбеҙ.

Тимәк, һәр беребеҙ үҙтәрбиә менән шөғөлләнһә, рухи көсөн нығытһа, халҡыбыҙҙың да сифаты үҙгәрер.

Уйҙар кешенең бар күҙәнәктәренә үтеп инеүгә, үҙгәртергә һәләтле, ә кеше үҙ уйҙарына "күрһәтмә" бирә ала икән – уның көс-ҡеүәтен ыңғай яҡҡа файҙаланырға кәрәк.

Ҡеүәтле уйҙар ҡеүәтле теләк уята. Ҡеүәтле теләк ҡеүәтле ынтылыш барлыҡҡа килтерә, һине юғарыға әйҙәй.

Һәр ҡатмарлы заман тура юл күрһәтеп, рухи байраҡ күтәреү, ҡатмарлы заманды ябай һүҙҙәр менән аңлатып биреү өсөн уяу, ҡаһарман сәсәндәрен, шағирҙарын тыуҙырған. "Беҙ булырбыҙмы, юҡмы?" тигән һорауға улар яуап биргән. Яу батыры Дүсмәмбәт, унан килә полководец Салауат Юлаев шиғырҙары, бынан һуң Шәйехзада Бабичтың үҙ йөрәгендәге дөрләп янған ут кеүек

ялҡынлы шиғырҙары халыҡтың икеләнеүле уйҙарын ҡыуып ебәреп, алға әйҙәгән һәм әйҙәй. Суверенлыҡ яулаған мәлдәге митингыла йәштәрҙең Бабич һүҙҙәренә яҙылған йырҙы йырлап майҙан буйлап Салауат һәйкәленә табан китеүҙәре алдан һыҙылған һәм ҡултамғалар менән рәсми раҫланған план буйынса барманы — халыҡ рухы үҙенән-үҙе ошо юлды яҡтыртты, ошо йырҙы тел осона килтерҙе.

Арыҫландар үҙ ерен
Залимдарҙан таптатмаҫ,
Таптайым тип атлаһа,
Башҡорт ҡаны атлатмаҫ.
Ил өҫтөнә сапҡан яуҙа
Башҡорт йәнен ҡаҡшатмаҫ,
Бысраҡ табан аҫтында
Башҡорт намыҫы ятмаҫ.

Йылдар үткәс, ошо фекерҙе Ҡадир Даян, Рәшит Ниғмәти, Баязит Бикбай, Зәйнәб Биишева, Жәлил Кейекбаевтар ҡабатланы, унан килә заманыбыҙҙың рухи байрағына әйләнгән Рәми Ғарипов:

Батшаларға башын эймәгәнде
Башҡаларға башҡорт баш эймәҫ, –

тип был фекерҙе тағы ла нығытыбыраҡ ҡуйҙы.

Һәр ҡатмарлы, буталсыҡ заман рухи шәм булырҙай шәхес-шағирын тыуҙыра, һәм уның һүҙенән тайпылмай, уға эйәрә. Бөгөн кем һуң ундай уяу, ҡыйыу, заман һулышын тойған, үҙ һүҙе менән халыҡҡа көслө йоғонто яһарлыҡ шағирыбыҙ? Тос, үткер, ҡыҫҡа, зиһенгә инеп ултырып, икеләнеүле һәм йоҡомһораған уй-фекерҙәренде тулғандырып ебәреп, яҡтыртып ебәрерлек шиғырҙарға сарсаған бөгөнгө заман халҡы.

Һыу буйында һыуһап йөрөгәндә,
Халҡым сарсауҙарын кем баҫыр?
Ғәмһеҙлектән бер ни күрмәҫ күҙен
Уяу һүҙе менән кем асыр?

Заманыбыҙҙың ошондай мохтажлығы Розалиә Солтангәрәева ҡобайырҙарын, "Карауанһарай" ансамблен, "Иман" йырын (*Диана Килдина һүҙҙәре, Фәрит Изрисов музыкаһы*), "Рух", "Дәрүишхан",

ошо китап исемен алған "Арғымаҡ" этно-рок төркөмөн тыуҙырҙы. Әммә заман һулышын алдан тойған, "бер аҙым алға баҫып, халҡының ҡайҙа баҫҡанлығын күреү өсөн боролоп ҡарап", йөрәген һурып сығарып юл яҡтыртҡан шағир һүҙе кәрәк бөгөн!

Ә бит халҡыбыҙ бәкәленә һуҡҡан, тура юлдан яҙҙырған күренештәр байтаҡ. Заман ауырыуы арта бара. Күптәребеҙ хатта уның сир икәнлеген дә аңламай. Өҫтө йәм-йәшел үлән менән ҡапланған һаҙлыҡ кеүек заман ауырыуҙары беҙҙе уба бара. Әйтәйек, рухи байлыҡ иҫәбенә матди байлыҡ туплауға баш һалыу ҙа — заманыбыҙ сире бит. Әлбиттә, йәшәү нигеҙе, хыялдарҙы тормошҡа ашырыу сараһы ул — матди байлыҡ. Уны тупларға кәрәк. Ә инде матди байлыҡ туплау үҙмаҡсатҡа әйләнһә, рухи байлыҡты ҡыҫырыҡлап сығара башлаһа, рухи байлыҡ урынын бушлыҡ биләй. **Рухи байлыҡ урыны бушанымы – һине бер ни ҙә бәхетле итә алмаясаҡ.** Тормошоңда уңышһыҙлыҡ артынан уңышһыҙлыҡ, ҡәнәғәтһеҙлек, даими рәүештә нимәнеңдер етмәүе, һәр саҡ нимәгәлер мохтажлыҡ тойоу, серҙәшең булмау, күңел ятҡан кешеңдә таба алмау, ғаиләңдән ҡәнәғәт булмау, балаларың менән уртаҡ тел тапмауҙан бер саҡ шик, көнсөллөк һәм һуңғы сиктә психик тайпылыштар башланыуы ихтимал. Беҙ бының сәбәбен үҙебеҙ ҙә белмәйәсәкбеҙ. Ә бының төп сәбәбе — һинең тормошоңа туҡтауһыҙ нур һирпеп, эшеңә илһам өҫтәп тороусы, бәхетһеҙлек яраларын тиҙерәк уңалтыуға ярҙам итеүсе, ҡайғы-хәсрәттәреңде таратып ебәреүсе рухи аҙыҡ булмауҙа. **Кеше рухи байлығы менән ҡуша эске азатлығын да юғалта. Кеше ғүмерендә иң ҡурҡынысы – эске азатлыҡтың юғалыуы.** Аҡыллы кеше бер ваҡытта ла ошо азатлығын юғалтмай. Сөнки уны һинән бер кем дә тартып ала алмай. Хатта ҡолдарҙың да эске азатлығына баш була алмағандар. Эске азатлығын юғалтҡан кеше — ярымкеше. Һине кемдер ялтырауыҡҡа алдаштырып файҙалана, эске азатлығыңды ҡол итә ала. Ундай кеше бик тиҙ һына. Эске азатлығы булмаған кеше башҡаларҙы түгел, үҙен дә яҡлай алмай. Күңел донъяһы камил булмағандарҙың күбеһе бөгөнгө көнгә яраҡлаша алмай, йә матди байлығына ғына табынып йәшәй башлай, йә үткәндәрен идеаллаштыра.

Рухһыҙлыҡ айырым кешеләрҙе генә түгел, тотош илдәрҙе лә ҡаҡшата. Этнопедагогика нигеҙендә тәрбиәләнмәгән, тәрбиә традициялары булмаған, төрлө милләттәр тупланып йәшәгән илдәрҙә, әйтәйек, Америка Ҡушма Штаттарында күпселек психолог-ғалимдар рухи тәрбиә хаҡында түгел, ә аҡса табыуҙың төрлө юлдарын өйрәтеп, күп тиражлы китаптар, әсбаптар нәшер итәләр.

Бөгөнгө көндә бындай илдәрҙә тулыһынса рухи емерелеү, ҡаҡшау, юҡҡа сығыу башланды. Ҙур ҡалаларҙағы көсөргәнешле тормош һаулыҡҡа ныҡ тәьҫир итә, инфаркт, инсульт кеүек сирҙәр йышая. Әммә, шуныһы ҡыҙыҡ, медик-ғалимдарҙың күҙәтеүенсә, шул уҡ Америка Ҡушма Штаттарында ла япондар был сирҙән ҡотолоу юлы тапҡандар. Был хәл ғалимдарҙы уйға һала һәм улар Америкала йәшәүсе япондарҙың йәшәү рәүешен тикшереп ҡарай. Баҡһаң, башҡа американдар менән бер үк шарттарҙа эшләгән, аралашҡан япондар үҙ өйҙәрендә үҙҙәренсә йәшәйҙәр икән. Ҡайтыу менән, кимоноларын кейеп алалар, япон музыкаһы тыңлай башлайҙар, япон аҙыҡтары ашайҙар, туған телдәрендә аралашалар. Был — уларҙың күңел аҙығы, был — уларҙың күңел сәләмәтлеген һаҡлаусы сара. Япондар үҙҙәренең эске азатлығын сәләмәтлек һаҡлауға файҙаланған. Бөгөнгө көндә ошо күңел дауалаусы саралар бөткән, рухи байлығын юғалта барған илдәрҙә деградация башланды ла инде. Ә үҙенең милли йөҙөн юғалтмаған көнсығыш илдәрендә үҫеш буласаҡ. Мәҙәни үҫеш кенә түгел, фән һәм техникала ла үҫеш рухи байлығын юғалтмаған илдәрҙә алға китәсәк. Американың алға китеүе быға̀са бөтә донъянан иң аҡлы, аҡыллы ирҙәрҙе йыйып алыу иҫәбенә барҙы. Сит илдәрҙән тупланған американдарҙа яһалма рәүештә "Мин Америка кешеһе" тигән патриотлыҡ тойғоһо булдырып маташтылар. Әммә яһалмалылыҡ оҙаҡҡа бармай. Тышҡы тәрбиә менән ҡандан килгән эске патриотизм тойғоһо ҡуша үрелһә генә, ул көслө лә, дауамлы ла һәм күсәгилешлек тә нығыраҡ, сөнки үҙенең тыуған иленең патриоттарында тамыр тәрән, шунлыҡтан эске азатлыҡ тойғоһо көслө була.

Егерменсе быуат башында, халҡыбыҙ яҙмышы өсөн ғәйәт ауыр, ҡатмарлы мәлдә, башҡорттар үҙҙәрен һәр төрлө афәттәрҙән ҡурсалап алып ҡала алған, сөнки ғәмле әһелдәребеҙ байтаҡ булған. Улар дөрөҫ юл һайлай, дөрөҫ ҡарар ҡабул итә белгәндәр, үҙ мәнфәғәттәренә ҡарағанда халыҡтың киләсәге хаҡында күберәк хәстәрлек күргәндәр. Улар алға ынтылғандар, киләсәкте күҙаллай алғандар. Зәки Вәлиди, Мстислав Ҡулаев, Ғәлимйән Ҡарамышев, Таһир Имаҡов, Юныс Бикбов, Абдулла Әҙеһәмов, Әбделҡадир Инан, Шәйехзада Бабич, Муллаян Халиҡов, Муса Мортазин, аҙағыраҡ һәҙиә менән Ғөбәй Дәүләтшиндар, Рабиға һәм Хафиз Ҡушаевтар, Дауыт Юлтыйҙар заманы. Утыҙ етенсе йылдан һуң милләтебеҙ интеллигенцияһының сәскәләре юҡҡа сыҡҡас, ғәмле әһелдәребеҙ Сәғит Әлибаев, Баязит Бикбай, Рәшит Ниғмәти, Ҡадир Даян, Зәйнәб Биишева, Жәлил Кейекбаевтар сафын тулыландырып, аҡрынлап йәштәр тулҡыны килә. Ғайса Хөсәйеновтар,

Рамаҙан Өмөтбаевтар, Зәйни Ихсановтар, Шәкирйән Ҡарабаевтар, унан һуң Рәмиҙәр, Диҡҡәттәр, Рауилдар, Ғәзимдәр, Рәшиттәр, Дамирҙар, Мараттар быуыны башлана.

Беҙ бөгөн дә, Зәки Вәлидиҙәр осорондағы кеүек, халҡыбыҙҙы ҡурсалау зарурлығы кисерәбеҙ. Башҡорт халҡының яҙмышында хәл иткес осор. "Зәки Вәлидиҙәр ниндәй сәйәсәт үткәргән, ниндәй һығылмалылыҡ күрһәткән, халыҡ араһында ниндәй аңлатыу эше алып барған, Бабичтар ниндәй юҫыҡта ижад иткән, хәл иткес осорҙа нисек итеп һаҡланып ҡалғандар башҡорттар?" тигән һорау менән шул заманға ҡараш ташлап, өйрәнеп, тарихты бөгөнгөгә хеҙмәт иттерергә кәрәк. Беренсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында бик күп тәҡдимдәр индерелде, иҡтисадта байтаҡ алға һынылыш та булды, туған телебеҙ дәүләт статусы ла алды, әммә бик ығыш ҡуҙғалабыҙ. Заман үҙгәрешенән артта ҡалабыҙ. Беҙ тормош ҡуласаһын бер тапҡыр әйләнгәнсе, заман үҙгәреше икенсе тапҡырға ҡыуып етеп, тапап үтеп китеүе, беҙҙе һәләкәткә килтереүе ихтимал. Сәбәбе бер – милләттәрҙең киләсәген, рухи үҫешен хәл итерлек вазифаларҙы нигеҙҙә ғәмһеҙҙәр биләй, шуныңөсөн ғәмле ғалимдарыбыҙҙың, әһелдәребеҙҙең тәҡдимдәре һауала эленеп ҡалыуын дауам итә.

Әммә ғалимдарыбыҙҙың да заман һулышын тойғандары ла бар, тоймағандары ла байтаҡ.

Ошо урында ғалимдарыбыҙ Ғайса Хөсәйенов менән Рәшит Шәкүрҙең тарихи шәхестәребеҙ өлгөһөндә хәҙерге быуынды тәрбиәләрлек фәһем биреүҙәре ҡыуандыра, әлбиттә. Уларҙың бигерәк тә һуңғы йылдарҙа нәшер ителгән "Алдар батыр ҡиссаһы", "Пугачев фельдмаршалы", "Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев", "Ҡанлы илле биш" һәм "Арҙаҡлы башҡорттар", "Быуаттар аманаты" китаптары был йәһәттән бик ҙур әһәмиәтле.

Эс бошорғос хәлдәр ҙә булғылай. Зәки Вәлидиҙең тыуған көндәренә ҡарата үткәрелгән "Вәлиди уҡыуҙары"нда ҡатнашырға тура килгеләне. Зәки Вәлиди исемендәге республика китапханаһында барған уҡыуҙарҙа олпат-олпат ғалимдарыбыҙ мәшһүр Вәлиди хеҙмәттәре хаҡында ғәжәп үҙенсәлекле докладтар, сығыштар яһай, яңынан-яңы мәғлүмәттәр өҫтәлә. Әммә әлеге көндә лә халҡыбыҙҙың шундай уҡ революцион үҙгәрештәр осорондағы ҡатмарлы мәлдәрҙе кисереүен күҙҙә тотоп, Вәлиди һабаҡтарынан сығып, алдыбыҙҙа торған һорауҙарға яуап эҙләргә, үҙ яҙмышыбыҙҙы ҡайһылайыраҡ ҡороғға тейешбеҙ, үҙебеҙҙе һаҡлап алып ҡалыу өсөн ни эшләргә кәрәк, тигән һорауҙарға яуап ала алманым. Шуныһы аяныс: беҙҙең күптәребеҙ тарихты фәҡәт тарих өсөн генә

өйрәнә. Тарихты ҡасан заманға хеҙмәт иттерә башларбыҙ икән?

Ошо хаҡта күптәнге уйланыуҙарым, диҡҡәт иҫән саҡта уҡ һөйләшеүҙәребеҙ килтерҙе лә инде "Тормош һабаҡтары" яҙырға. Ейәнсура башҡорт гимназияһында эшләгән саҡта, улым Илгизәр Бураҡаев менән был предмет буйынса программа төҙөп тәҡдим иткәс, ул саҡтағы министр урынбаҫары Миндибай Юлмөхәмәтов ошондай уҡ предмет хаҡында хыял итеп, башланғыс кластар өсөн төҙөгән булып сыҡты, программаны берләштереп, методик советҡа тәҡдим иттек. Шул саҡ комиссия ағзаларының береһе, башҡорт ғалимы: "Башҡа милләттәрҙә ундай предмет юҡ бит, нимәгә ул", — тип ҡаршы сыҡҡайны, Илгизәр: "Беҙ башҡалар эшләгәнде генә эшләргә тейешбеҙме? Башҡорт мәктәптәрендә башлап ебәреү, башҡорттоң беренсе булыуы хилафмы әллә? Ҡасанға тиклем шулай башҡаларҙың башлауын көтөргә тейешбеҙ? Беҙ бына гимназияла эшләйбеҙ. Ошондай предметтың кәрәк икәнлеген күрәбеҙ. Мохтажлыҡ кисерһәләр, башҡалар ҙа үҙҙәренең халыҡ педагогикаһын мәктәптәргә индерер. Кем булһа ла башларға тейеш бит. Ни өсөн был йүнәлешкә башҡорттар башланғыс һалмаҫҡа тейеш? Ни өсөн беҙ һәр ваҡыт кемдеңдер башлауын көтөп йөрөргә тейешбеҙ? Ни өсөн үҙ күкрәге менән амбразураны беренсе башлап башҡорт Шакирйән Мөхәмәтйәнов түгел, ә икенсе милләт вәкиле ҡапларға, Рейхстагҡа Еңеү байрағын Заһитов түгел, ә икенсе милләт вәкиле ҡаҙарға тейеш әле. Ҡасанға тиклем кемдәрҙер беҙҙе күрмәмешкә һалыша тип, үҙебеҙ ҙә үҙ ҡаҙаныштарыбыҙға күҙ йоморға тейешбеҙ?" – тине. Йәшлек ярһыуы менән иҫбат иткәндер инде үҙ ҡарашын. Хатта һәр ваҡыт үҙ фекерен генә дөрөҫ тип һанаған теге ғалим да бер ни ҙә өндәшмәне, программа ҡабул ителде. Заман талабынан, халҡыбыҙҙың киләсәге ихтыяжынан килеп сыҡҡан уҡыу предметы ул — "Тормош һабаҡтары". Шул уҡ ғалим үҙе үк конференцияларҙа, йыйылыштарҙа, ултырыштарҙа, уҡытыусылар менән осрашыуҙарҙа балаларҙы рухи яҡтан тәрбиәләү тураһында һөйләй ине. Ә ни өсөн ҡаршы сыҡты һуң? Профессор исеме йөрөткән ул түгел, ә ябай уҡытыусылар башлаған өсөн, әлбиттә. Ҡайһы саҡта шулай ҙа иткеләйбеҙ шул.

Рухи яҡтан тәрбиәләү тураһында һөйләүгә ҡарағанда аҙ ғына булһа ла ғәмәли эш башҡарыу күпкә отошлораҡ. Үҙтәрбиә менән шөғөлләнеүселәргә лә, халыҡ яҙмышын хәл итеүҙә ҡулында вазифалы йәки дәрәжәле мөмкинлеге булғандарға ла ҡағыла был фекер.

"Туҡтарға ярамай, миллиметрлап булһа ла алға барайыҡ", —

ти ине Рәшит Шәкүр талип вакытында ук.

Бөгөн, Коммунистар партияһы идеологияһы юкка сыккас, халкыбыҙ аптыранып йөрөгән сакта, үҙебеҙҙең милли рухыбыҙға тап килгән идеология кәрәк. Уны ғалимдарыбыҙ эшләй ала. Сөнки нигеҙ бар — башкорт халкы рухын, милли үҙенсәлектәрен, традицияһын, иң мөһиме — милли аңын, рухын һаҡлаған. Үҙаллылыҡ алған сакта, әҙер гимныбыҙ "Урал" йыры, әҙер байрағыбыҙ, төрлө ырыуҙарҙан бар булған башкорт халкын берләштереп тороусы ҡурайыбыҙ булыуы — бының асыҡ дәлиле. Шуның өсөн, үҙ традициябыҙҙы һаҡлай алған өсөн, ауылдарыбыҙҙа, мәктәптәребеҙҙә тәртип яғы ла сағыштырмаса юғары. Әммә шул уҡ ваҡытта заман һулышын да тойорға кәрәк. Хәҙерге көндә төрлө илдәргә сығыу, төрлө халыҡ менән яҡындан аралашыу мөмкинлеге ҙур. Ошондай шарттарҙа милли үҙенсәлегеңде лә һаҡлап, заманға ла яраҡлашып үҫеү зарур, был һәр башкорттоң үҙе өсөн дә, милләт өсөн дә мәртәбә булыр һәм глобалләшеүҙе милләт өсөн янаған ҡурҡыныс хәл итеп түгел, ә үҙебеҙҙе донъяға танытыу сараһы итеп файҙаланырға мөмкинлек тип ҡабул итергә кәрәк.



ҒӘМ

Демократик үҙгәрештәрҙән һуң ҡоролтай, ырыу, шәжәрә тигән һүҙҙәрҙең йыш ҡабатланыуы һәм уларға бәйле йолаларыбыҙҙың ҡайтыуы халҡыбыҙ йәшәйешендә байтаҡ үҙгәреш индерҙе, әммә ҡайһы бер төшөнсәләр һәм атамалар онотола бара. Әйтәйек, *ғәм* тигән һүҙҙең һирәк ҡулланылыуы уның төшөнсәһенең юҡҡа сыға барыуына бәйле. Ғәмде ғәмһеҙлек алмаштыра башланы.

Ни өсөн ғәм төшөнсәһен ғәмһеҙлек ҡыҫырыҡлай башланы һуң? Ни эшләп кеше үҙ йәшәйеше өсөн иң мөһим шарт булған Тәбиғәткә ҡарата ла, Балаһының киләсәгенә лә, Тәрбиә, Белем алыу һәм үҙтәрбиәгә лә, хатта үҙенең һаулығына ҡарата ла ғәмһеҙ була бара? Балаһы йәшәйәсәк заман хаҡында бөтөнләй уйламаусылар, көн хәстәрлеге менән генә йәшәүселәр артҡандан-арта. Эсәр һыуҙар бысрана, тирә-яҡ мөхит төҫһөҙләнә, ер аҫты байлығы кәрәк-кәрәкмәгәнгә тәләфләнә, уңдырышлы ҡара тупраҡ ҡатламы йоҡара, күңелдәргә наҙ бөркөр сәскәләр, һайрар ҡоштар кәмей... Һөҙөмтәлә илебеҙҙә тыуымға ҡарағанда үлем арта бара. Ни өсөн? Был һорауға яуап бармы? Бар, әлбиттә. Яуапһыҙ ҡалған һорау булмай. Уның ғилләһе ғәм менән ғәмһеҙлеккә килеп тоташа. Ә ғәм менән ғәмһеҙлек яратыу тойғоһона бәйле. Был егет менән ҡыҙ йәки ир менән ҡатын мөнәсәбәтенә генә ҡағылмай, ә иң элек үҙеңде,

унан тормошто, йәшәүҙе, эшеңде, халҡыңды, милләтеңде, киләсәгеңде яратыу ул.

Яратыу ғәм тойғоһо уята, яратмау ғәмһеҙлек, битарафлыҡ тыуҙыра.

Йөрәгендә ысын ғәм йөрөтөүселәр ҙә, үҙҙәре өсөн генә йәшәүселәр ҙә бар донъяла. Ысын-ысындан ғәм йөрөткән әһелдәрҙең уй-хыялы, йәшәү маҡсаты, әйткән һәр һүҙе иленә, киләсәккә, халҡына мөхәббәт менән тулы, һәр ғәмәли эше халҡы хаҡына хәстәрлектән тора.

Ошондай әһелдәре күп булған халыҡ, әлбиттә, бәхетле. Бәхетләр иҫәбенә башҡорттарҙы ла индерергә мөмкин. Шөкөр, халҡыбыҙҙың даланы бар. Бар булмышы менән халҡы ғәме менән йәшәгән улдары һәм ҡыҙҙары байтаҡ. Беҙ улар хаҡында бай тарихыбыҙҙан беләбеҙ. Исемдәре билдәле һәм билдәһеҙ булған Шәхестәребеҙ ХАЛЫҠ, МИЛЛӘТ тигән бөйөк төшөнсә сылбырын өҙмәй алып баралар. Был сылбыр ҡулсаларын өҙөлөү сигенә еткереп, башҡорт тигән халыҡ ҡулсаһын ырғытып-бираҡтырып, ер йөҙөнән бөтөнләй юҡ итергә теләүселәр императрица Анна Иоановна менән Сенаттың обер-секретары И. К. Кирилловтар, Тәфтиләүҙәр, Урусовтар менән генә сикләнмәгән. Асыҡтан-асыҡ та, йәшерен дә ҡороткослоҡ эше алып барыусылар булған, бар, буласаҡ. Әммә ундай дошмандарҙы яттар араһында ғына эҙләүҙур хата булыр ине. Бөгөнгө көндә халҡыбыҙ тамырына балта сабыусы төп дошман үҙебеҙҙең арала ла бар. Ул ҒӘМһЕҘЛЕК тигән дошман. Әлбиттә, күҙ күреме ерҙәр билән, тотош бер ил булып, уртаҡ батшаһыҙ-ниһеҙ халыҡ булып ойошоп, йәшәп яткан башҡорт халҡының ҡанында ғәмһеҙлек көслө булған тип әйтеүе ҡыйын. Ғәм төшөнсәһе башҡортто берләштереүсе төп шарт. Ошо төшөнсә милләтте берләштереү , тарҡатмау, ҡеүәтләндереү сараһы. Был сараның ниндәйерәк булыуы хаҡында беҙ ижадыбыҙға ҡарап та фараз итә алабыҙ. Халыҡтың алдынғы ҡарашлы шәхестәренең, аҡһаҡалдарының, сәсәндәренең аҡылы ауыҙ-тел ижадында тупланған. Тыуған илгә ҡайнар һөйөү, сит-яҡтарҙа бәхет эҙләмәү , тарҡалмау, тупланып йәшәү, ерҙән айырылмау, туғанлыҡты һәм дуҫлыҡты ныҡ һаҡлау кеүек сифаттар тәрбиәләгәндәр. Әммә халҡыбыҙҙы ер йөҙөнән юҡ итергә тигән сәйәсәт алып барыусылар ҙа был ҡанундарыбыҙҙы белгән. Улар ошо ҡанундарҙан сығып эш иткән. Шул уҡ Кирилловтың 1734 йылғы планына күҙ һалып алыу ҙа быныңшулай булыуын асыҡ күрһәтә. Әйтәйек, ***башҡорттоң һанын ныҡ кәметергә, уның өсөн төрлө яҡҡа тараторға, хәрби походтарҙа киң файҙаланырға... Башҡорт феодалдарын һатып***

алып, рус властарының терәгенә әйләндерергә, тигән тәкдимдәр бар унда. Был тәкдимдәр халыкты тарҡатыуҙы, һуңғы сиктә юҡ итеүҙе күҙҙә тотҡан. Ошонан сығып уйлап ҡарағанда ла аҡһаҡалдарыбыҙҙың милләтте һаҡлау юлдарын ни тиклем дөрөҫ билдәләгәнен һәм, тыуған илгә мөхәббәт, туғанлыкты һәм татыулыкты һаҡлау тигән төп ҡанундарын йырҙары, риүәйәттәре, ҡобайырҙары, легендалары аша күңелгә һеңдерергә тырышыуының ни тиклем хаҡ булыуын күрергә була. Халҡыбыҙҙың ошо төп ҡанундары буйынса бергә тупланып меңәр йылдар йәшәп килгән, иҫ китмәле тәрән фәлсәфәүи йөкмәткеле ҡобайырҙар һәм йырҙар ижад иткән, үҙ көнкүреше өсөн мөһим булған әйберҙәрҙе үҙе булдырған, ер аҫтындағы ла, ер өҫтөндәге лә байлыкты әләф-тәләфләмәй кәрәгенсә генә тотонған, ил сакырһа, бер төптән генә ҡуҙғалып, ил именлеген ҡурсалап йәшәүҙе маҡсат итеп ҡуйған. Әммә тормош үҙгәрешһеҙ тормай. Үткәндәр менән йәшәмәйҙәр. Үткәндәрҙән фәһем алалар.

Хәҙер уйлайыҡ: бөгөнгө көндә халҡыбыҙҙың үҙен һаҡлау ҡанундары өҫтөнлөк аламы, әллә Кириллов планы ҡаныбыҙға һеңеп ҡалғанмы? Ни өсөн беҙ 100 йыл эсендә 100 меңгә генә артҡанбыҙ? Ни өсөн милләтебеҙҙең ярты һыны тиклеме республикабыҙҙан ситтә йәшәй? Әлбиттә, боронғо башҡорт ерҙәренең республикабыҙ сиктәренән тыш тороп ҡалыуы халыҡ ирке менән эшләнмәне, әммә үҙ ирке менән ил ташлап сығып китеүселәр ҙә бихисап. Бөгөнгө көндә илебеҙҙә бөтөн мөмкинлектәр тыуҙырылған мәлдә, иҫ китмәле таланттарыбыҙ була тороп та һаман гөрләп-күкрәп үҫеп китә, сит илдәрҙә башҡорт тигән талантлы халыҡ барлығын таныта алмайбыҙ? Берәм-һәрәм генә сығып бейеп йәки ҡурай һыҙҙырып ҡайтыу халыкты төрлө яҡтан танытыу тигән һүҙ түгел әле. Халҡыбыҙҙың фәнен, ғилемен, спортын, кино сәнғәтен, халыҡ ижады өлгөләрен, иң һәйбәт әҙәби әҫәрҙәрҙе тәржемә итеп сығарыуҙы юғары күтәрергә бөтөн мөмкинлектәребеҙ бар. Нимә ҡамасаулай? Ни эшләп гөрләп тоҡанып китер урында беҙ һаман быҫҡыйбыҙ? Ғәмһеҙлек тигән төп дошман көслө. Яуап шул. Әйтеп үтеүемсә, ғәм ул ихлас, ысын яратыуҙан башлана. Халҡыңды яратыуҙан, уның киләсәге хаҡында хәстәрлек күреүҙән. Ошо тойғоға ҡарата ғәмһеҙ икәнһең, әлбиттә, бер ниндәй үҫеш тә, алға китеш тә, сәскә атыу ҙа булмаясаҡ. Ә ғәмһеҙлек ниндәйҙер юғарыла, йәки ситтә, йәки күренмәгән ерҙә урынлашҡан төшөнсә түгел. Ул дошман беҙҙең үҙебеҙҙә, һәр беребеҙҙә. Атап үтәйек.

Эске йылылык. Ни тиклем оло мәғәнәне һыйҙыра ошо ябай ғына ике һүҙ. Яратыу, һөйөү, мөхәббәт тойғоһонан башлана торған

төшөнсә ул ЭСКЕ ЙЫЛЫЛЫҠ. Бер-береңә тартылыу, бер-береңде аңлау бит ул был тойғо. Эске йылылыҡ булмаһа, ғаилә тарҡала. Эске йылылыҡ булмаһа, йәмғиәт тарҡала, милләт тарҡала. Тәбиғәт кешеләрҙе берләштереп, эске йылылыҡ булдырыу өсөн хәстәрлек күргән. Моң берлеге, тел берлеге ул. Бер үк телдә һөйләшеүселәр, бер үк моңдо аңлаусылар бергә берләшкән, бергә ойошҡан. Улар араһында күңел берлеге барлыҡҡа килгән, бер-береһенә тартылып торған эске нур һуҙылған. Ошо нур өҙөлдөмө — тарҡалыш башлана. Илдәрҙе берләштергән символдар ҙа: гимн, байраҡ, герб та ошо маҡсаттан уйлап сығарылған. Башҡортто берләштереүсе көс уртаҡ моңобоҙҙа, ҡурайыбыҙҙа, ижадыбыҙҙа һәм, әлбиттә, уларҙы тыуҙырыр, аңлар өсөн бар ителгән телебеҙҙәһәм тыуған еребеҙҙә. Милләтебеҙ ҡото булған ҒӘМЛЕ шәхестәребеҙ ошо төшөнсәләрҙе — рухи байлығыбыҙҙы һаҡлау өсөн көрәшкәндәр ҙә инде. Көрәшеү юлдары төрлө булһа ла, маҡсат бер булған. Ә инде рухи байлыҡ тигән төшөнсәне матди байлыҡҡа ынтылыш ҡыҫырыҡлап сығара башлаһа, эске йылылыҡ нурҙары өҙөлә башлай. Уртаҡлыҡ кәмей. Ундай ғәмһеҙҙәргә туған тел дә, туған моң да кәрәкмәй. Уларҙың хатта аллаһы ла Мамонға әйләнә. Һуңғы йылдарҙа ғына Мамонға табыныусы ҡайһы бер "әһелдәребеҙ" республикабыҙға күпме хилафлыҡ килтерҙеләр. Торатау именлеген хәүеф аҫтына ҡуйҙылар, урмандарыбыҙҙы һаттылар, ерҙәребеҙҙән яҙҙырҙылар. Әммә бындайҙар үҙҙәре рухи яҡта бай булып ҡыланған булалар. Тик ундай ғәм, ундай яратыу һиҙелеп тора һәм халыҡ бындай күренеште "тышҡы күңел менән генә яратыу" ти. Тышҡы күңел менән яратыуҙан ЭСКЕ ЙЫЛЫЛЫҠ барлыҡҡа килмәй.

Ә яратыу тигән тойғо нимәнән башлана һуң?

Үҙеңде яратыуҙан башлана. Кеше иң элек үҙен яратырға тейеш. Ә үҙеңде яратыу ике төрлө була. Уның беренсе төрө — киң күңеллелек, эскерһеҙлек, ихласлыҡ, үҙ баһаңды аңлау, бәҫ төшөрмәү, башҡаларға ла ихтирам менән ҡарау, сәләмәт мөнәсәбәт менән яраттыра белеү. Иң ихлас, иң көслө яратыу — ул тәбиғилектән ситләшмәй яратыу. Ә тәбиғи яратыу төшөнсәһе үҙ-ара хәстәрлеккә — ғәмгә бәйле. Мәҫәлән, Ерҙе ни тиклем һәйбәт ашлайһың — шул тиклем мул уңыш бирә. Ни тиклем күберәк ағас ултыртаһың — шул тиклем һыу мул була. Үҙеңде сәләмәт яратаһың икән, тимәк, үҙеңде ихтирам итәһең. Үҙен ихтирам иткән кеше башҡаларға ҡарата иғтибарлы булыр, уларҙың күңелен аңларға тырышыр. Үҙен ихтирам иткән кеше бер ваҡытта ла тәбиғәтте бысратып китмәй — таҙарта, үҙе лә әҙәп һаҡлай, йәмһеҙ һүҙҙәр ҙә тыңламай, кешегә ҡарата ла, башҡа йән эйәләренә ҡарата ла тупаҫ булмай, үҙ йәнен

ҡарайтмай, йөрәгендә ҡара уйҙар йөрөтмәй, үҙ мөхитен күңеленә ятҡан ғына дуҫтар менән уратып ала, ваҡытын бушҡа сарыф итмәй, үҙендә булған һәләтен файҙаланып, кешелек донъяһына изгелек эшләп ҡалдырырға тырыша.

Бындай яратыу — донъяла изгелек, һыйышып тыныс йәшәү, үҫеш, алға-юғарыға ынтылыш, сәм сығанағы. Йөрәгендә ғәм тойғоһо йөрөткәндәрҙә яратыуҙың ошо төрө була. Һәм фәҡәт шундай кешеләр араһында Эске йылылыҡ барлыҡҡа килә.

Йөрәгендә үҙеңде яратыуҙың икенсе төрөн йөрөтөүселәр — үҙ мәнфәғәтен бөтөн нәмәнән дә өҫтөн ҡуйған, үҙе йәшәгән заман хаҡында ла үҙ мәнфәғәтенән сығып ҡына хәстәрләгән, халыҡ яҙмышына ла, киләсәккә ҡарата ла ғәме һуҡырайған кешеләр. Үҙенә шул мәлендә генә файҙа килтермәй торған бер нәмәгә лә ҡул ҡалҡытып ҡағылмайҙар ундайҙар. Ә инде үҙҙәренә файҙа килерлек булһа, бер нәмәнән дә тартынмайҙар — ялағайланыу, ярамһаҡланыу, кем тураһындалыр ғәйбәт йыйып үҙенә кәрәк кешегә еткереү, үҙенән түбәндәгеләрҙе ҡыйырһытыу, тәбиғәтте тәләфләү, үҙ-ара татыу мөнәсәбәт менән иҫәпләшмәү, туғанлыҡты, дуҫлыҡты һанға һуҡмау, биләгән вазифаһын мәңгелек тип уйлап, таланттарға ҡарата һауалы ҡарау... Улар үҙҙәрен көнсөл яратыу менән яратыусылар. Улар — халыҡ яҙмышына, киләсәккә ҡарата ғәмһеҙҙәр. Кириллов ***башҡорт феодалдарын һатып алып, рус властарының тирәгенә әйләндерергә*** тигән тәҡдимен индергәндә, ошондайҙарҙы күҙҙә тотҡандыр. Бөгөнгө көндә "коррупция" тип аталған яман ауырыу менән дә ошондайҙар "ауырый".

Киләсәкте алдан тоҫмаллай белгән, үҙе йәшәгән заманға, үҙенең эшмәкәрлегенә шул тоҫмалдан сығып йүнәлеш бирергә ынтылған, илен, халҡын, киләсәген хәүефтән ҡурсалау хаҡында уйлап яныпкөйгән, үҙен аямаған **ғәмлеләр** менән үҙ ҡорһағынан ары бер ни күргә теләмәгән **ғәмһеҙҙәр** араһында мәңгелек көрәш бара һәм халыҡ яҙмышы ошо көрәшеүселәрҙең көс нисбәтенә бәйләнгән.

Бөгөн беҙҙең халҡыбыҙ хәл иткес нөктәлә тора. Халыҡ араһында ғәмлеләр арта икән — беҙ милләт булып йәшәүебеҙҙе дауам итәсәкбеҙ. Ғәмһеҙҙәр һаны өҫтөнлөк алһа, тотош халыҡты хәүефле яҙмыш көтә. Тарихта быға миҫалдар бихисап.

Халыҡ яҙмышына ҡарата ғәмһеҙлек, битарафлыҡ артһа, ижадҡа ла ныҡ йоғонто яһай: киләсәкһеҙ, көндәлек кенә ижад өҫтөнлөк ала башлай. Тәрәнлек, мәңгелек, киңлек, ғөмүмән, үҫешкә ынтылыш кәмей. Халыҡтың үҙ сәнғәте үҫешмәһә, ят сәнғәт, ят мәҙәниәт үтеп инә. Сәнғәт тейешле кимәлдә үҫмәһә, милләтте уҡмаштырып тотоп торорлоҡ әҫәрҙәр ижад ителмәһә, боронғо-

боҙға һоҡланыу ғына ҡотҡарып алып ҡала алмаясаҡ халыҡты. Халыҡты милләт итеп туплау юлдары халыҡҡа һәр ваҡыт сәнғәт аша еткерелгән. "Урал батыр", "Аҡбуҙат", "Иҙеүкәй менән Мораҙым", "Алпамыша", "Заятүләк менән Маянһылыу", "Күсәкбей", "Һуңғы һартай", "Зөһрә менән Алдар" һәм башҡа иҫ китмәле фәлсәфәүи йөкмәткеле ҡобайырҙар аша әйтелгән халыҡ фекере. Аҙаҡ инде яҙма әҙәбиәт осоронда шиғырҙар һәм сәхнә әҫәрҙәре аша еткерелгән. Ул хаҡта әйтеп үттем. Әммә ҡайһы саҡта, бөйөктәребеҙ әйткән фекерҙең төп әрәсәһен төшөнөп тә етмәйбеҙ, тел төптәрен аңламай ҡалабыҙ. Мәҫәлән, Дауыт Юлтыйҙың "Ҡарағол"о өсөн һаман эс көйә. Бөгөнгө көндә ошо әҫәрҙәге төп фекер — алдыбыҙҙа маяҡ итеп ҡуйылырлыҡ. Тик әҫәрҙең төп әрәсәһенә төшөнмәгән режиссерҙарыбыҙ уға баҫым яһамай. Д. Юлтый был драмаһында халҡыбыҙҙың бөтөн йәшәү асылын әйтеп биргән ҡанатлы һүҙҙәр әйттерә Ҡыраубикәнән: "Бәндәне бәндә көнөнә ҡалдырмаһын!" Бына башҡорттоң ғәмле йәшәү принцибы! Бына халыҡтың туҡтауһыҙ ихтилалдарға күтәрелеү сәбәбе. Бына ғәмлеләргә тынғы бирмәгән төп маҡсат. Бөгөн дә беҙ тиңдәр араһында тиң йәшәү өсөн ынтылырға тейешбеҙ! Бәндә башҡа бәндәләр көнөнә ҡалырға тейеш түгел.

Йәки Һәҙиә Дәүләтшинаның "Ырғыҙ" романын алайыҡ. "Халҡым" тип янып йөрөгән геройҙарҙа ғына эске матурлыҡ, эске йылылыҡ бар. Улар йырлай. Туған моңдан: матурлыҡ тойғоһонан айырылмаған. Булған матурлыҡты ишәйтергә тағы ла матурыраҡ гөлләмә яһарға тырышалар: Диләфрүз ниндәй матур гөлләмә яһай. Ә фәҡәт матди байлыҡ уртаһында ғына йәшәгән Хаят был гөлләмәне йолҡҡолап ырғыта. Ошо яҙмыш Шәхестәребеҙгә килде түгелме һуң? Матурлыҡты тоя белмәгән Хаяттар халҡыбыҙҙың Диләфрүздәренең ҡулындағы гөлләмәне йолҡҡоланы бит! Бына ҡайҙа ул Ғәм менән Ғәмһеҙлек көрәше. Тел берлеге булһа ла, Моң берлеге булмаһа, эске йылылыҡ һүнә.

"Арғымаҡтың" был бүлегендә, тарих төпкөлөнә төшөүҙе маҡсат итеп ҡуймайынса, үҙем йәшәгән осорға — ярты быуат самаһы ваҡытҡа — дөрөҫөрәге илленсе-туҡһанынсы һәм ике меңенсе йылдар башына бер аҙ күҙ ташлап, ғәм һәм ғәмһеҙлектең көрәше хаҡында яҙып үтмәксемен. Сөнки, әйтеп үтеүемсә, ғәмһеҙҙәрҙең өҫтөнлөк алыуы ижадҡа, тимәк, үҫешкә ныҡ тәьҫир итә.

Оло шәхесебеҙ, халҡын ҡайнар һөйгән Зәйнәб Биишева тураһында һөйләп китмәксемен. Хәйер, яҙыусының Мәскәүҙән һәм ял йорттарынан миңә яҙған хатын килтереү уның ниндәй кеше икәнлеген асыҡ күрһәтер (*Ә яҙыусының миңә яҙылған бөтөн хат-*

тары менән дә яҙыусы тураһында яҙған "Оло Әйек ҡыҙы" исемле хәтирәләр китабы аша танышырһығыҙ).

Һүҙ яҙыусының "Тылсымлы ҡурай хаҡында легенда" тигән либреттоһы хаҡында бара. Зәйнәб Биишева был либреттоһын Башҡорт опера һәм балет театрына биргәндән һуң, байтаҡ ваҡыт үтә һәм 1979 йылда Рим Хәсәновтың "Ҡурай тураһында легенда" тигән балеты сәхнәгә ҡуйыла. Яҙыусының хатында һүҙ шул турала бара.

"Мәрйәм һылыу!

Хатыңды алдым, рәхмәт. Алыҫ ерҙә үҙ телендә, яҡын кешеңдән хат алып уҡыуҙан да ҡыуаныслы хәл юҡтыр. Мин бында китеп бик хаталандым. "Үҙе юҡтың – күҙе юҡ" тиҙәр бит. "Ҡурай" мәсьәләһен хәл иттермәй тороп китеп бармаҫҡа ине. Ләкин К. Ғабдрахмановна ла, Мирзаһитов та, Чурова кеүек "авторитеттар" ҙа вәғәҙә итеп торғас, китәйем, яңы роман өҫтөндә эшемде дауам итәйем, тигән булғайным шул. Әммә минең "Ҡурай"ҙы 1958 йылда уҡ быуып (З. Биишева 1957 йылда фольклор мотивтарына таянып "Тылсымлы ҡурай" тигән драма әҫәре яҙа. Аҙаҡ уны балет өсөн либреттоға әйләндерә —М.Б.) *үҙемде әҙәбиәт донъяһынан һөрөп сығарып ташларға йыйынған кешеләр хәҙер тағы ла ҡеүәтлерәк бит. Улар ул саҡта хәйләлә тупаҫыраҡ булып сыҡҡан Сайранов урынына хәҙер бит иң мәкерле ... ... төлкөнө еген алғандар. "Тылсымлы ҡурай"ҙың юлын быуырға булғандар. Шуларға таянып эш итәләр бит... Улар файҙаландыҡ тип күрһәткән әкиәт ошо маҡсат менән уйлап сығарылған бит ул... Эйе, бик тәрән уйланған этлек ята был мәсьәләлә. "Оҡшашлыҡ юҡ" тигән һүҙҙәр ҙә шул баҫып калдырыр өсөн уйлап сығарыла. Минең әҫәрҙең исемен, философик нигеҙен, рухын ботарлап, Юха йылан кеүек һурып йотһондар ҙа, оҡшашлыҡ юҡ, тип дауам итһендәр! Ә минең бынан ун йыл элек шул уҡ опера театрына тапшырылған балет либреттоһы быларҙың караҡлыҡ емешенән әллә ни хәтле югары торған әҫәрем һаман ятып калһын, имеш! Ни өсөн?*

Мәрйәм һылыу! "Тылсымлы ҡурай хаҡында легенда" тигән минең либретто өсөн көрәште ябай ғына түгел, минең өсөн генә түгел, гөмүмән, ижадтағы намыҫлылыҡ өсөн көрәш тип, аңларға кәрәк. Һеҙ бит минең был хаҡтағы фекерем менән таныш — "Һөнәрсе һәм өйрәнсек"те уҡып үҫкән балалар бит һеҙ.

Мин, ахыры, апрелдең 25-дә Мәскәүгә ҡайтырмын. Бындай хәлдә, йән тыныслығы булмаганда, ижад итеп тә, ял итеп тә булмай. Шулай булғас, бында ятыуҙың әһәмиәте лә юҡ.

(Хат ҡыҫҡартып бирелде—М.Б.)

10.1979. З. Биишева.

Яҙыусының Өфөгә ашҡынып ҡайтыуы ла, әҫәрен сәхнәләштереүҙә ярҙам итмәне. Бөгөнгө көндә Башҡорт опера һәм балет театрында бер ниндәй "Ҡурай" ҙа ҡуйылмай. Яҙыусының үҙ әҫәре идеяһына һалған фекере йомолдо.

Зәйнәб Биишеваның әҫәрен сәхнәләштереү өсөн көрәш барған саҡта, әлбиттә, ысын ижадҡа, ундағы ҡыйыу фекерҙәргә ҡарата КПСС Өлкә Комитетында айырым фекер тупланғандыр һәм шуның өсөн дә, яҙыусы тоҫмаллауы дөрөҫ булһа кәрәк, тиҙ арала "Ҡурай" тигән икенсе әҫәр "әтмәлләй" һалып, сәхнәгә сығаралар. Әммә ул бер-ике ҡуйылыуҙа төшөп ҡалды. Театр бер үк темаға "икенсе тапҡыр ҡайтманы".

Мин Зәйнәб Биишева менән бик яҡындан аралаштым. Уның һәр әҫәренең генә түгел, һәр һүҙенең, миңә яҙған хаттарының әҙәбиәт, халыҡ киләсәге хаҡында хәстәрлек менән тулы булыуына ғәжәп итә торғайным. Бөтөн булмышың менән халыҡтыҡы булыу шулай булалыр, тип уйлай инем.

Зәйнәб апай Биишева менән бик яҡын аралашҡанға һәм бөтөн серҙәрен минең менән уртаҡлашҡанға күрә, ул хатта архив материалдары менән дә таныштырып, үҙе иҫән саҡта ҡайһы берҙәрен рәткә килтерттереп, ҡайһыныһын ни эшләтергә кәрәклеге хаҡында әйтеп ҡалдырғайны. Оло яҙыусыбыҙҙы һуңғы юлға оҙатҡас, мине уның әҙәби ҡомартҡылары буйынса комиссияға ла индергәйнеләр, әммә яҙыусыбыҙ үҙе иҫән саҡта, бәлки ике ятып бер төшөнә лә инмәгән ваҡиғалар, ул бөтөнләй яҡын күрмәгән кешеләрҙең "мин уның яҡыны инем" тип ҡасандыр йәки ошраҡлы ғына бергә төшкән фотолары менән иҫбат итеүселәр, йәки кемдеңдер кемгәлер һөйләүе аша ғына ишетмеш-белмеш иҫтәлек яҙыусылар өйөрө ҙурайғандан-ҙурая барҙы. Мин дә, яҙыусы Гөлсирә Ғиззәтуллина ла бөйөк шәхесебеҙгә ауыр мәлдәрҙә ярҙам итергә барғанлыҡтан, уның ашығыс килеп етегеҙ, тип саҡырыуына йүгергән мәлдәрҙә, йә магазиндан аҙыҡ-түлек килтерешеп, йә тәҙрәләрен таҙартып, йә таҙа һыу килтереп (*фенол касафаты ваҡында*) киткән саҡтарҙа, фотограф эйәртә һалып барып, уның менән бергә үҙебеҙҙе мәңгеләштереүҙе, ҡасандыр фото менән үҙебеҙҙең яҡынлыҡты иҫбат итеп буласаҡлығын уйлап та бирмәгәнбеҙ.

Ә яҙыусының архивында иҫ китмәле материалдар бар ине. Яҙыусыларҙың идара ултырыштарында ҡайһы бер сетерекле мәсьәләләрҙе тикшереү, һәҙиә Дәүләтшинаның әҙәби ҡомартҡыларын таләфләү мәсьәләләрен ҡарау, М. Хәйҙең либреттоһының үҙгәртелеп яңынан эшләнеүенең сәбәптәрен асыҡлау, Ш. Бабич өҫтөнән яҙылған ялыуҙарҙы ҡарау кеүек ултырыштарҙың

протоколдарының күсермәһе һаҡлана ине унда. Комиссия эшен башлағандың иртәгәһенә бер төн эсендә яҙыусының тотош кабинеты — шкафтары, өҫтәле, китаптары, материалдар — юҡ булды. Ишек бикле, ә эстә бер ни ҙә юҡ. Яҙыусының улы Юлай Ғәзиз улының ҡәтғи талабы менән иртәгәһен төш ваҡытында "кабинет" кире ҡайтты һәм нисек булған шулай урынлаштырылды. Әммә унан алдағы көндә архивтан бер папканың юғалыуы (*берәү генәме икән?*) тураһында һүҙ булған. Ә ул папканы минең алыуым ихтималлығы тураһында ла һүҙ ысҡындырғандар. Тик бындай дәлилһеҙ, нигеҙһеҙ уйҙырманы уйлап сығарыусылар үҙҙәре үк кире ҡаҡҡан. Яҙыусы архивындағы ҡиммәтле мәғлүмәттәрҙең яҙмышы әлегәсә билдәһеҙ. Яҙыусы архивы буйынса төҙөлгән тәүге комиссия тарҡалды. Зәйнәб Биишеваның үҙ архивын рәткә килтереү буйынса миңә, Гөлсирә Ғиззәтуллинаға әйтеп ҡалдырған васыяттары ғәмәлгә ашманы. Ғәмһеҙлек өҫтөнлөк алды. Ғәмһеҙҙәр уның архивын матди отош өсөн файҙаланырға ашыҡты. Һөҙөмтәлә, альбом яҙыусы теләгәнсә килеп сыҡманы.

Алтмышынсы-етмешенсе йылдарҙа тотош илебеҙҙә ғәмһеҙлектең сәскә атҡан осоро ине. Тәбиғәтте һаҡлауға ҡарата ла, ауылдар яҙмышына ла, милли сәнғәт үҫешенә лә. Фәҡәт гигант төҙөлөштәргә генә табыныу заманы булып алды.

Илебеҙ милләттәренән дә уртаҡ бер гигант халыҡ яһау сәйәсәте киң ҡолас алды. Туған телдә уҡытыу "модаһыҙ", "артта ҡалғанлыҡ" тип иҫәпләнә башланы. Ошо йылдарҙа иң сая, ҡыйыу шағир Рәми Ғарипов был сәйәсәттең аҙ һанлы милләттәрҙең бәкәленә һуғасағын, һәләкәткә килтерәсәген, уларҙың аңы томаланасағын яҡшы аңлап, рухи байраҡ булырлыҡ әҫәрҙәр ижад итте. "Туған тел" шиғыры, "Аманат", "Уйҙарым" ҡобайырҙары тыуҙы уның. Әйтергә кәрәк, Рәми Ғарипов, ысынлап та, киләсәкте алдан күреүсе, сәйәсәттең яңылыш йүнәлеш алыуын аңлаған, халҡы яҙмышына ҡарата йөрәгендә ғәм йөрөткән шағир ине.

Ошондай уҡ тағы бер шағирыбыҙ бар ине. Ине тип әйтеүем шунан ғибәрәт – уны ашығыс рәүештә районға – Мәсетлегә ҡайтарып ебәрҙеләр. Рәшит Әхтәров тигән уҙаман ине ул. Шөкөр, уның яҙмалары ышаныслы ҡулдарҙа – ҡатыны Рәйсә апайҙа ҡалған. Уҡыусыларға был әҫәрҙәр еткерелә башланы.

Мин Күмертау ҡалаһының Маяҡ ҡасабаһында уҡытҡан йылда башлап яҙыусыларҙың семинары булды. Беҙҙе, семинарҙа ҡатнашыусы утыҙлаған кешене, Рәми Ғарипов өйөнә алып ҡайтты. Ике бүлмәле фатирға тулып киттек. Надя ауырый ине. Уларҙың

өсөнсө бала көткән саҡтары. Мин өҫтәл әҙерләшеү мәшәҡәттәрен үҙ өҫтөмә алдым. (*Ошо кисәнән һуң Рәми Ғарипов менән Рафаэль Сафин Диҡҡәткә донъяла Мәрйәм тигән ҡыҙ барлығы хаҡында әйткәндәр, ә Диҡҡәт "Агиҙел" журналында минең хикәйәмде уҡыуын, күрмәһә лә был исемдең таныш булыуын әйткән.*)

Кисәлә Рәми Ғарипов йәштәргә ижади уңыштар теләгән саҡта: "**Йөрәгендә халҡын йөрөткән шағир ғына ысын шағир була ала**", — тине. Рафаэль Сафин, Фәрит Иҫәнғолов, Йыһат Солтановтар йәштәргә бик аҡыллы кәңәштәр әйттеләр. Улар беҙҙең өсөн бик олпат яҙыусылар, шағирҙар кеүек ине. Шуның өсөн дә Рафаэль Сафиндың тәҡдиме менән уның үҙенә ҡушылып "Каруанһарай" йырын башҡарғанда, Рәми Ғариповтың күҙҙәрендә йәш күреп тә, уларҙың ихлас уйнап-көлөүҙәрен, ҡолас ташлап бейеүҙәрен ҡарап аптырағайным, сөнки улар миңә һәр ваҡыт уйланып, аҡыллы һүҙҙәр генә һөйләп йөрөр олпат кешеләр һымаҡ ине. Ә ул саҡта был "олпат" шағирҙарға 34-35 кенә йәш булған.

Күмертауҙың Маяҡ ҡасабаһында бер йыл эшләгәс, Фәрит Иҫәнғолов, Рәми Ғарипов, Рафаэль Сафиндар мине Өфөлә эштә ҡалдырыу тураһында хәстәрлек күрә башланы. Ф. Иҫәнғолов мине Өфөгә күсереүҙе юллап Мәғариф министрлығында ла булған. Сөнки ул саҡта юғары уҡыу йортон тамамлағандан һуң, йүнәлтелгән эш урынында кәмендә өс йыл эшләү мотлаҡ ине. Шағирә Миңнегөл Хисмәтуллина үҙ фатираһында йәшәтеп, радиокомитетта эшкә урынлаштырҙы.

Диҡҡәт менән никахыбыҙҙа Рәми Ғарипов менән Надя беҙҙең шаһиттарыбыҙ булды. Рәми Ғариповтың "Осоу" тигән шиғри йыйынтығы баҫылып сыҡҡан саҡ ине, ул титул битенә шиғыр яҙып бүләк итте.

Үтелгәндәр, дуҫкай, хата булған,
Ауыр аңлай кеше хатаһын.
Һуңлап килә бәхет!.. Тик үкенмә:
Бала аңлар ысын атаһын.

Ә баҙлауыҡ балҡып йондоҙ булмаҫ,
Ысын йондоҙ ул тик — Мәрйәмең.
Уртаҡлағыҙ бергә гүмер юлын,
Был донъяның татып һәр йәмен.

Типһәк әле тимер өҙөр саҡ бит, —
Ҡотло булһын яңы юл башы.

Ижад, дуҫлыҡ һәм мөхәббәт кенә
Өйөгөҙҙөң булһын юлдашы!

Шағир беҙҙең ғаиләне бик яратты. Уның өсөн беҙ ихлас, ысын фекерҙәштәр, рухташтар булдыҡ. Бер көн 1964 йылда яҙылған "1937" йыл поэмаһын һөйләне. Өҫтәл янында сәй эсеп ултыра инек, поэманы ятҡа һөйләй башланы ла:

— Юҡ, мин быны ултырып уҡый алмайым, — тип, баҫып тамамлап ҡуйҙы. 1970 йыл ине. Бындай әҫәрҙе яҙыу, уҡыу ғына түгел, тыңлауы хәүефле йылдар...

— Бер ваҡыт баҫылырмы икән был әҫәр? — тип һораным.

— Гел генә ғәмһеҙлек хөкөм һөрмәҫ , — тине шағир.

Ошо осорҙа Рәми Ғарипов халыҡ яҙмышы, туған тел тураһында ғәйәт ҡыйыу шиғырҙар яҙҙы. Бер саҡ Рәми Ғариповты сығыш яһарға саҡырғандар ҙа ул Диҡҡәт эшләгән институтҡа барып, беҙгә бергә килеп инделәр. Үҙен телевидениеға саҡырыуҙарын һәм унда "Салауат тураһында баллада"һын уҡыясағын әйтте. Уҡып ишеттерҙе. Баллада бик көслө ине. Диҡҡәт:

— Рәми, заманы килер, был шиғырыңды ла уҡырһың. Ә хәҙергә уныһын уҡымай тор. Һис юғы:

Хас дошмандар әле сиктәр аша
Хөр халҡыма күпме таш сөймәҫ .
Батшаларга башын эймәгәнде
Башҡаларга башҡорт баш эймәҫ , —

тигән куплетын уҡыма, — тине. Шағир бер тапҡыр уҡыуҙа уҡ Диҡҡәт был юлдарҙы иҫендә ҡалдырғайны.

Рәми Ғарипов бер аҙ өндәшмәй ултырҙы ла, исмаһам, һеҙ кире ҡаҡмаһағыҙ ни була, тигәндәй, әсенеүле ҡараш ташланы:

— Диҡҡәт, һин үҙең дә шиғыр яҙған кеше. Һәр шиғырҙа төп әйтәһе фекер була. Ә был шиғырҙың фекере тап ошо юлдарҙа. Әгәр ундай шиғырҙарҙы халыҡҡа ваҡытында еткермәһәк, шағир әйтер һүҙен ваҡытында әйтмәһә, беҙ теләгән, беҙ сарсаған заман килерме икән һуң?! Ҡыҙыл йомортҡа көнөндә ҡиммәт,— тине.

Рәми Ғариповтың "Шифри минуттар"ын ҡарар өсөн күршебеҙгә индек. Үҙебеҙҙең телевизор юҡ ине. Күршебеҙ — Хөршиҙә Хәйерова апай. Бөйөк Ватан һуғышы ветераны. Оҙаҡ йылдар типографияла эшләп, "Совет Башҡортостаны" гәзитен сығарған апай. Бергәләшеп телевизор ҡарайбыҙ. Рәми балладаһын тотош уҡыны. Һуңғы куплеттан һуң уҡ тапшырыуҙы ҡапыл туҡтаттылар. Диҡҡәт:

— Шуның өсөн Рәми бит инде, — тине.

Хөршиҙә апай:

— Һуғышта ла ана шундай егеттәр уҡа иң алда ташланды. Ундайҙар бит алдын-артын уйламай, кәрәк икән — кәрәк, тип кенә хәл итәләр. Ә бит, дөрөҫөн әйткәндә, ундайҙар булмаһа, еңеү ҙә килмәҫ ине, — тине, "ундайҙар" тигән һүҙен әйткән саҡта, телевизор яғына ымлап. Шунан тағы, борсолоп, — Хәҙер ни була инде?! — тип ҡуйҙы. Хөршиҙә апай Рәми Ғарипов шиғырҙарын бик ярата торғайны.

Артабан ни булһын?! Шағир яҙмышы КПСС Өлкә Комитетының идеология бүлеге ҡарамағында ҡалды.

Рәми Ғарипов заман һулышын иң яҡшы тойған, халҡының йөрәк тибешен иң нескә аңлаған шағир ине. Шуның өсөн дә, Шәйехзада Бабич кеүек үк, байраҡ итеп күтәреп йөрөтөрлөк әҫәрҙәр яҙҙы. Һәр әҫәре "юғарылар" тарафынан заказ буйынса тәнҡитләнә барҙы һәм матбуғатта артабанғы сығышы тыйыла килде. Ул саҡтағы матбуғатты аҡтара башлаһаң, сәсең үрә торор. "Туған тел" шиғырын кем генә "тетмәгән"?! Әммә халҡы өсөн йөрәге тулы ғәм йөрөткән шағир йөрәге ҡушҡанса ижад итеүҙән туҡтаманы.

Ул башҡаларҙың ижадына ҡарата ла ғәйәт иғтибарлы булды. "Башҡортостан ҡыҙы" журналында бергә эшләгән ваҡытта редакцияға килгән шиғырҙарҙың һәр береһен уҡып сығыр, һәр авторға кәңәш биреп хаттар яҙыр ине. Күпме көс, ваҡыт кәрәк. Уның хаттары "алдым, уҡыным, оҡшаны-оҡшаманы", тигән һүҙҙәрҙән генә тормай ине, ә төплө анализ менән, өмөтлө йәштәргә кәңәштәр биреп яҙыла ине.

Әле бына ғына торған ул йылдарға боролоп ҡараһам, бер-береңә иғтибар, татыулыҡ бөгөнгө менән сағыштырғанда күпкә юғарыраҡ булған. Әллә ҡыҫым күберәк булған һайын, берләшеү көслөрәк буламы икән? Бөгөнгө көндә "юғарынан барған ҡыҫым" тигән һүҙҙәр ят тойолалыр. Ул заманда "түрәләрҙең" үтә ваҡсыллығына, һәр нәмәгә тыйыу һалыуҙарына шикләнеп ҡараусылар ҙа барҙыр. Өҫтәүенә, ул түрәләрҙең иҫәндәре бик матур итеп иҫтәлектәр яҙа. Ҡалай ҙа һәйбәт илһөйәр етәкселәр эшләгән үҙ заманында! – тип ғәжәп итерлек. Әммә ысынбарлыҡ икенсе ине ул йылдарҙа. Быны мин Диҡҡәт Бураҡаев миҫалында, урыҡ-һурыҡ ваҡиғалар аша ла күҙ алдына килтererлек итеп һөйләй алам.

Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфөлә бер генә башҡорт мәктәбе лә булмауы һәм асырға кәрәклеге хаҡында хат яҙып, хат аҫтына ҡул ҡуйыусыларҙы үҙ эш урындарында күҙ уңынан ысҡындырмай күҙәтә башланылар. Диҡҡәттең дә ҡолтамғаһы

булғанлыҡтан, уның да һәр аҙымы күҙәтеүле булды. Әйтәйек, матбуғатҡа яҙылыу эш урынында алып барыла ине. Ул саҡта башҡорт телендә дүрт төрлө журнал, ике төрлө гәзит кенә сыға ине... Беҙ ғаиләбеҙҙә бик күп гәзит-журналдарға, шул иҫәптән, бөтөн башҡорт матбуғатына ла яҙыла инек. Диҡҡәт тураһында йыйыла барған "етешһеҙлектәр"гә был факт та теркәлгән. Бер йыйылышта уның милләтселеген иҫбат итеү өсөн: "Уның балаһы һөйләшеү йәшендә лә түгел, ә хатта балалар өсөн "Башҡортостан пионеры" гәзитенә лә яҙылған. Башҡортсаһына! Бер ҙә русса сыҡҡанына түгел! " тип сығыш яһаусылар булған.

Беҙ, яҙыу машинкаһы һатып алдыҡ та башҡортса шрифт өҫтәттек. Ул йылдарҙа башҡорт хәрефтәре менән машинка сығарылмай ине. Диҡҡәт шрифттар эшләтеп алған саҡта, институт хеҙмәткәрҙәренең береһе күреп ҡалған да: "Нимә ул?" тип ҡыҙыҡһынған. Диҡҡәт аңлатып биргән. Был да иҫәпкә алынған. Һәм йыйылышта ошолар хаҡында иҫенә төшөрәләр. "Бураҡаев, беләһегеҙме, һеҙ күҙ алдына килтерәһегеҙме?! Рус шрифтлы машинкаһын башҡорт шрифтына алмаштырған!" — тиҙәр.

Диҡҡәтте тағы бер мәсьәлә буйынса, шовинизмда ғәйепләп, тикшерә яҙып ҡуйҙылар, әммә тикшермәнеләр. Шулай ҙа теңкәһенә тейҙеләр. Уныһы — минең "һүнмәҫ нурҙар" тигән тәүге повесым баҫылып сыҡҡас булды. (*Был ваҡиға барышын яҙыусы Рәшит Солтангәрәев ҡыҙыҡһынып күҙәтә һәм, мин мотлаҡ документаль әҫәр яҙам, тип ниәтләнә ине*). Повесть геолог-ғалимдар тормошонан яҙылғайны. Унда Козлова тигән бер ғалимә образы бар. Минең маҡсатым — күренекле һәм һәләтле был ғалимәнең фәҡәт үҙен генә яратып йәшәүе арҡаһында ғилем юлында асыштарын дауам итерлек алмашсылар ҙа ҡалдыра алмауын, шәхси тормошонда ла уңмауын күрһәтеү ине.

Әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса төп герой Рамаҙан менән Козлова араһында ғилми бәхәс сыға. Был бәхәс күмер ятҡылығы запастарын билдәләү ысулы хаҡында була. Рамаҙан, Мәскәү профессоры Матвеевтың уҡыусыһы булараҡ, күмер ятҡылығы тикшереү буйынса бик әҙерлекле белгес була һәм, күмер запасын яңы ысул менән билдәләп, Козлова "юҡ" тип иҫбат иткән урында уникаль күмер ҡатламы барлығын әйтә, һәм был дөрөҫләнә. Козлова еңелә.

Геология институтында бер ғалим ошо уҡ институтта эшләгән милләте буйынса йәһүҙә профессор ҡатынға былай тигән:

— Диҡҡәт Бураҡаев повесть яҙған. Алимент түләмәҫ өсөн, ҡатыныңың исеме менән сығарған. Шул повеста һеҙҙең хаҡта яҙылған. Имеш, Диҡҡәт, башҡорт егете, һеҙгә ҡарағанда

аҡыллыраҡ, аңлыраҡ һәм белемлерәк икән... Ә һеҙҙең ғүмер буйы эшләгән эшегеҙ, түккән хеҙмәтегеҙ яраҡһыҙ булып сыҡҡан. Һеҙҙең ғүмерегеҙ, шәхси планда ла, ғилми планда ла заяға үткән.

Профессор ҡатын көтөлмәгән хәбәргә ғәжәпкә ҡалған, сөнки Диҡҡәт — уны, ул Диҡҡәтте бик ихтирам итәләр ине. Шул уҡ ваҡытта был һүҙҙәргә ышанмай ҙа булдыра алмаған, сөнки уның ҡулына минең повесты тотторғандар. Профессор ҡатын бик ышаныслы ойошма аша повесты тәржемә иттереп алып уҡып сыҡҡан да директорға ингән:

— Билал Мәғдәсимович! Һеҙ Диҡҡәт Бураҡаевтың "Неугасимые лучи" тигән повесын уҡынығыҙмы? (*Геология-минералогия фәндәре докторы, профессор Билал Мәғдәсимулы Йосопов 1968-74 йылдарҙа СССР Фәндәр Академияһы Башҡортостан филиалының Геология гилми-тикшеренеү институты директоры булып эшләне*).

— Уҡыным.

— Һеҙ башҡортса уҡый алаһығыҙмы ни?

—Әлбиттә. Мин башҡортса яҙам да. Журналдарҙа мәҡәләләрем сыҡҡылап тора.

— Нисек инде һеҙҙә башҡортса яҙаһығыҙ?! Мин беҙҙең институтта Бураҡаев ҡына башҡортса яҙа икән, тип уйлай инем.

— Миңнәхмәт Моталов та бик һәйбәт яҙыша.

— Шулаймы ни?! Ул да повесты уҡығанмы?

— Уҡығандыр. Повесть ҡыҙыҡ ҡына. Бик ихлас уҡып сыҡтым.

— Мин дә уҡыным. Бына, тәржемә иттереп алдым, — ти икән профессор ҡатын. — Һеҙ иғтибар иттегеҙме — Диҡҡәт Бураҡаев мине мыҫҡыл иткән. Имеш, мин наҙан, белемһеҙ, ә ул — башҡорт, Мәскәүҙән иң аҡыллы кеше булып уҡып ҡайтҡан.

— Унда һеҙҙең хаҡта һүҙ бармай. Мин улай тип әйтмәҫ инем. Был, беренсенән, әҙәби әҫәр. Икенсенән, уны Диҡҡәт Насретдинович яҙмаған, ҡатыны яҙған. Ә ҡатыны һәйбәт журналист. Таж-Махал хаҡындағы яҙмаларымды журналға бергә әҙерләнек. "Башҡортостан ҡыҙы" журналында баҫылып сыҡты. Халыҡтан маҡтау хаттары алдым. Өсөнсөнән, һеҙҙең бына тигән улығыҙ бар, фән донъяһында әллә күпме асыштарығыҙ, уҡыусыларығыҙ... Һеҙҙең образ Козловаға бөтөнләй тап килмәй.

— Тап килә шул. Козлова – мин. Тик Диҡҡәт Насретдинович күрә-баға күп нәмәне үҙ файҙаһына үҙгәртеп яҙған. Минең улым менән бергә уҡыны. Ни өсөн, минең балам юҡ, тип яҙа ул.

— Козлова һеҙ түгел.

— Козлова — мин. Сергей бит минең егетем ине. Тышҡы киәфәте лә, исеме лә, хатта уның менән айырылышыу ҙа тап килә...

Минең беренсе егетем Сергей ине. Мин, ысынлап та, аспирантурала уҡығаным өсөн, өйләнешеүҙе кисектереп торҙом. Ә ул Себергә китте. Аҙаҡ үҙем уны эҙләп барҙым. Тик ул өйләнгәйне. Был хаҡта бер кем дә белмәй ине. Һеҙгә беренсе башлап әйтеүем. Диҡҡәт Насретдинович ҡайҙан белгән уны?! Мин уға шәхси тормошом хаҡында бер ваҡытта ла һөйләмәнем. Ә ул Сергейҙы эҙләп барған сағымдағы һәр хәрәкәтемә, һәр һүҙемә тиклем кемдәндер һорашҡан, белгән... һәм шуларҙы яҙып аҡса эшләгән. Минең шәхси тормошомда соҡсонорға уның хаҡы юҡ. Өҫтәүенә, имеш, башҡорт егете минән белемлерәк, аҡыллыраҡ булып сыҡҡан.

— Мин һорашырмын, белешермен, асыҡлармын. Әммә бер нәмәгә иманым камил — был әҙәби әҫәрҙең авторы — Мәрйәм Бураҡаева. Мин Диҡҡәт Насретдиновичтың яҙыу стилен беләм. Ул икенсе төрлөрәк яҙа. Козлова ла һеҙ түгел, сөнки Диҡҡәт Бураҡаев һеҙҙе ғалим булараҡ та, кеше булараҡ та бик ихтирам итә, һәм, иң мөһиме — һеҙ бит күмер буйынса белгес түгел.

— Ә мин ул хаҡта уйлап та ҡарамағанмын. Шулай бит әле.

Был һөйләшеүҙән һуң профессор тынысланған, әммә алтмыш йәшенә Диҡҡәтте саҡырманы. Ә шулай ҙа повесть оло ғауға сығарҙы.

Повестағы һәр геройҙы, һәр күренеште, һәр ваҡиғаны тикшереп, был — һин, был — мин, был — ул, тип бүлеп сығып, Диҡҡәтни тиклем ваҡсыл кеше, хатта институттағы бәләкәй генә ваҡиғаларға тиклем иҫтә ҡалдыра барған, тип, әҙәби деталдәрҙе Диҡҡәттең ваҡсыллығына һанап, һөйләшмәй йөрөүселәр ҙә булды. Ә повесть өсөн мин шәхси тормош ваҡиғаларының береһен дә институт хеҙмәткәрҙәренән алмағайным. Тик мәшһүр ғалим, беренсе профессорыбыҙ Ҡадир Рәхим улы Тимерғазин образы ғына ысынбарлыҡтан күсерелгәйне.

Шулай итеп, "башҡорт әҙәбиәтендә фән, ғалимдар, ғилми донъя тураһында әҫәрҙәр юҡ, уҡыусыларҙы фән менән ҡыҙыҡһындырырға кәрәк, фән — ғәжәп мауыҡтырғыс донъя бит!" — тигән уйтеләк менән миңә ошо темаға повесть яҙырға тәҡдим иткән Диҡҡәттең хыялы селпәрәмә килә яҙҙы.

Диҡҡәтте ошо хәлдә ҡалдырыу, күренекле ғалимәгә ялған хәбәр әйтеү һәм Диҡҡәткә уның мөнәсәбәтен үҙгәртеү үҙмаҡсат булған. Д. Бураҡаевтың тәбиғәтте, халыҡты яратыуы һәм уларға ҡаршы эшләнгән хилафлыҡты кисерә алмауы ғәмһеҙҙәрҙең йәненә тейә ине. Диҡҡәт үҙенең һәләте, эшсәнлеге, хеҙмәт һөйөүе менән бар ваҡлыҡтарҙан да өҫтөн булды — уның менән иҫәпләшмәй булдыра алманылар. Әммә уның хаҡлыҡ яҡлап бәхәскә инеүе, хаҡлы булы-

уын иҫбат итеүе эҙһеҙ үтмәне. Миҫал өсөн бер ваҡиғаны килтереп үтәйем. Институттан етәксе геолог-ғалим Өфө ҡала Советы депутаты итеп һайланған һәм депутаттар алдындағы сығышында ҡала урамдарын ҡарҙан таҙартыу өсөн күпме тоҙ кәрәклеге, ҡалаға күпме тоҙ килтерелеүе хаҡында отчет биргән һәм был хаҡта институт хеҙмәткәрҙәре алдында ла һөйләгән. Диҡҡәттең быға аптырауының сиге булмаған. Ул урамдағы ҡарҙарҙы тоҙ менән иретеү арҡаһында ер аҫты һыуҙарына күпме зыян килеүе, эсәр һыуҙарҙың бысраныуы, ҡар менән ҡуша йылғаларға ағып төшкән тоҙло һыу арҡаһында балыҡтарҙың ҡырылыуы һәм, өҫтәүенә, тоҙ запасының да сикһеҙ булмауы хаҡында һөйләгән һәм етәксе депутаттың отчетын тәнҡитләгән. Урамдағы боҙҙо тоҙ менән иретеүҙең тәбиғәт сафлығына ҡарата күрәләтә хилафлыҡ икәнлеген башҡа ғалимдар белмәгәнме?! Белгән, әлбиттә. Тик улар был тәнҡиттең Диҡҡәт яҙмышында ниндәй эҙемтәләр яһарын да яҡшы аңлаған. Шуға бер*һе* лә бер ни ҙә өндәшмәгән. Тик бер әсе телле*һе* генә, депутатҡа ҡуштанланып:

— Ер аҫтына төшөп һыу тәмләп ҡараныңмы әллә? — тип төрттөрөп маташҡан. Әммә тәбиғәттәге һәр үҙгәрешкә, һәр кире күренешкә үтә лә иғтибарлы, күҙәтеүсән Диҡҡәт яуапһыҙ ҡалмай:

— Өфөнөң йөҙө һәм матурлығы булған йүкәләргә иғтибар иткәнегеҙ бармы? Йәм-йәшел япраҡлы йүкә табырһығыҙмы хәҙер Өфөлә?! Йүкә япраҡтарындағы ҡара таптар һыуҙа тоҙ миҡдары артыҡ булғанлыҡтан бит ул. Мин йүкәләрҙе йәлләйем, — тип яуап бирә. Ошо сығышынан һуң үҙенең тормошонда ла йүкә япраҡтарындағы кеүек "ҡара таптар" күбәйә башланы... Докторлыҡ диссертацияһының темаһын институттың эш планына индермәү, раҫламау, яҙыу өсөн ваҡыт бирмәү, туҡтауһыҙ йәмәғәт эштәре ҡушыу, хеҙмәте буйынса командировкаларға ебәрмәү һәм башҡалар, һәм башҡалар.

Ғәмле булыу... Диҡҡәттең һәр нәмәгә, тормоштоң һәр өлкәһенә, ҡыҫҡаһы, йәшәүгә ҡарата ғәмле булыуы миҫалында ғына ғәмдең һәм ғәмһеҙлектең нимә икәнлеген һәм нимәгә килтергәнлеген күрһәтеп була. Ғәмлеләр үҙҙәренең тура һүҙле, ғәҙеллекте, хаҡлыҡты яҡлауҙары менән һыйышһыҙ, тәкәббер булалар. Әммә тормош үҙҙәрен аямаған, үҙҙәре хаҡында уйламаған ғәмлеләрҙең алдан күрә белеүҙәре, туҡтауһыҙ көрәшеүҙәре, ғәмһеҙҙәргә ҡарата аяуһыҙ булыуҙары, халыҡ аңына хәҡиҡәт осконо һалғанлыҡтары арҡаһында алға бара. Ундайҙар арыу-талыу белмәй, үҙҙәрен йәлләмәй-аямай эшләй. Ғәмлеләр үҙҙәренең кешеләргә ярҙам итә алыуҙары, киләсәккә ниндәй ҙә булһа изгелек эшләй алыуҙары

менән бәхетлеләр. Ял итеүҙе ваҡытты бушҡа үткәреү тип иҫәпләйҙәр. Диҡҡәткә лә ял итергә кәрәклеге хаҡында мин дә, туғандарым да даими әйтеп торҙоҡ. "Балаларығыҙҙы ҡарап ҡалабыҙ. Икәүләшеп ял итеп килегеҙ", — ти торғайнылар Мәрфуға апайым менән Нәсимә һылыуым. Диҡҡәт баш тарта ине. Балалар менән күмәкләшеп ауылға барып ҡайтыу уның өсөн иң күңелле ял була торғайны. Янғантауҙан ҡайтҡас та, һеҙҙән айырылып китеп, үҙемде башҡа ғазапламаясаҡмын, тине.

Балалар өсөн фәнни-популяр әҫәрҙәр яҙырға, балаларҙа фәнгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятырға кәрәк, беҙҙең киләсәк белемле кешеләр ҡулында булырға тейеш, тип, яҙыу өсөн әллә күпме материал әҙерләне. (*Диҡҡәтте реанимация бүлегенә һалғас, мине уның янына 3 кенә минутҡа хушлашырға индерҙеләр. Был саҡта "Башҡортостан пионеры" гәзитендә уның дауамлы мәкәләһе баҫыла башлағайны. Мин шул хаҡта әйттем. Ул ҡыуанып китте һәм, әле уйлап ятам, балалар өсөн күпме әҫәрҙәрем яҙылмаған әле. Сыҡҡас та шуларға тотонам, тине*). Күпме егеттәрҙе, ҡыҙҙарҙы уҡырға әҙерләп индерҙе ул. Ауылдарҙа экспедицияла йөрөгән саҡта, һәләтле балалар тураһында һораша, эҙләй торғайны. Бер ваҡыт гәзиттән туғызынсы класс уҡыусыһы Марат Әбүзәровтың (*һәләтле шағир һәм журналист булып үҫеп бара ине, иртә донъя ҡуйҙы*) шиғырын уҡыны ла: "Барып һөйләшәйем. Талант бит был малай! Әрәм булып ҡуймаһын! Мотлаҡ Өфөгә уҡырға килергә тейеш ул," – тип, Ғафури районының Ташаҫты ауылына китте.

Мәскәү һәм башҡа ҡала вуздарын тамамлап, илебеҙҙең төрлө мөйөштәренә тәғәйенләнгән күпме белгестәрҙе үҙ республикабыҙға юллап ҡайтарышты ул.

Нефтте күберәк алыу өсөн ер аҫтына порошоклы һыу ҡыуҙырыу кеүек "асыштар", ҙур-ҙур фермаларҙы йылға буйҙарына төҙөп, тиреҫте йылға ярына сығарыу, йылға буйҙарында мал емтектәренең дә, химик ашламаларҙың да ятыуы, бысҡы бысыу эштәрен йылғаға яҡын урындарҙа төҙөү , бысҡы таптарының балыҡтың айғолағына инеүе сәбәпле балыҡтарҙың күпләп ҡырылыуы, юл төҙөү өсөн ҡомдо йылға төбөнән сығарыу — һөҙөмтәлә йылға балыҡтарының йәшәү шарты юҡҡа сығарылып, уларҙың ҡырылыуы, балыҡтар ыуылдырыҡ сәскән мәлдә "түрә" браконьерҙарҙың күбәйеп китеүе, бер лицензия алып әллә нисә мышы атыуы һәм башҡа, һәм башҡалар тураһында күпме мәкәлә яҙылды. Гәзиттә баҫылды, баҫылмағаны тикшереүгә ебәрелде. (*Әйтергә кәрәк, заманында браконьерлығы өсөн мин тәнҡитләп сыҡҡан һәм вазифалы урынынан бушатылған бер әҙел демократия елдәренең "еле" менән депутат булып*

алғас, минең фатирһыҙ интегеүемдә ҙур "роль" уйнаны).

Диҡҡәт Бураҡаев был йылдарҙа ер аҫты һыуҙарының бысраныуы өсөн айырыуса ныҡ борсолдо, туҡтауһыҙ мәҡәләләр яҙҙы, тәнҡитләне, сығыштар яһаны. "Совет Башҡортостаны" гәзитенә килгән хаттарҙың иң күбеһе – тәбиғәттең юҡҡа сыға барыуы өсөн борсолоу ине. Халыҡ күрә-баға тәбиғәтте тәләфләүгә ҡаршы булды. Мин хаттар эҙенән юлға сыға, мәҡәләләр яҙа инем. Хатта бер районда ауыл Советы депутаты — биология, география уҡытыусыһы картуфлығынан колорадо ҡорто йыйып алып, йылғаға түгә икән. Быны миңә уҡыусылар әйтте. Бына һиңә депутат, бына һиңә биология уҡытыусыһы! Райондарға барып, хат тураһында ауыҙ асыу була, иң элек авторын һорашалар ҙа, автор тураһында насар мәғлүмәттәр килтерә башлайҙар ине. Хат йөкмәткеһенә иғтибар ҙа юҡ ине, тиерлек. Ауыл Советтарында тәбиғәтте һаҡлау мәсьәләләре буйынса махсус депутат тәғәйенләнә. Уның эше менән ҡыҙыҡһынһаң, ҡыл да ҡыбырҙатылмай ине. Тимәк, гәзиттәрҙә тәбиғәт һаҡлау буйынса әсенеп-әсенеп яҙылған мәҡәләләргә ҡарата ла шундай уҡ ҡараш булғандыр. Балыҡ башынан серей, ҡойроғонан башлап таҙарталар, тигәне ошолор. Диҡҡәт Бураҡаев менән профессор Билал Йосопов ер аҫты һыуҙарының бысраныу сәбәптәре һәм уларҙы булдырмау юлдары тураһында бик күләмле мәҡәләләр яҙҙылар. Иғтибар булдымы? Киреһенсә, битәрләү, теңкәгә тейеү, йыйылышта тикшереү, "аҡылға ултыртыу" өсөн изем-һылтау эҙләп йөрөүсе ғәмһеҙҙәргә "ем" генә булды.

Бер ваҡыт Диҡҡәтте, КПСС Өлкә Комитетынан ҡушыу буйынса, СССР Фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалы Президиумы рәйесе Сәғит Рәүеф улы Рафиҡов саҡыртып ала.

— Диҡҡәт Насретдинович, мин һеҙҙе һәләтле ғалим булараҡ, бик ихтирам итәм. Күп эшләйһегеҙ, ғәмәли тәҡдимдәрегеҙ ҙә байтаҡ. Шул уҡ ваҡытта, бер төркөм милләтсе егеттәр менән бергә, "Башҡортостан башҡорттар өсөн генә" тип лозунг күтәреп сыҡҡан тип әйтәләр. Булдымы бындай һүҙ?

— Булды. Тик аҙ ғына икенсерәк.

— Нисегерәк?

— Башҡортостан башҡа милләттәр өсөн генә түгел, башҡорттар өсөн дә, тигән лозунг.

— Кем уйлап сығарҙы уны?

— Мин.

— Ә Салауат Юлаев торған бейеклек менән кем ҡәнәғәт түгел?! Тағы ла бейегерәккә күтәрергә тиһегеҙ икән.

— Салауат Юлаев – беренсе башлап рухи азатлыҡ байрағы

күтәргән шәхес. Хәҙер үҙе байраҡ булып ҡайтты. Бындай байраҡ бөтөн милләттәргә лә күренергә һәм хеҙмәт итергә тейеш. Азатлыҡ һәр кешегә, һәр милләткә лә кәрәк.

— Диҡҡәт Насретдинович, фекерҙәрегеҙ бик ҡыҙыҡ. Берәй ваҡыт табып, һөйләшеп ултырыу насар булмаҫ ине. Иркенерәк ваҡытта саҡырырмын, — тип, һәүетемсә оҙатып ҡала Президиум рәйесе. Ә шулай ҙа Бураҡаев Геология институты парткомы секретарының идеология буйынса ярҙамсыһы вазифаһынан бушатыла. Шулай ҡушҡандарҙыр.

Райондарҙа командировкаларға йөрөгән саҡта, ерҙе файҙаланыу эшендә ебәрелгән етешһеҙлектәргә йәне әрнеп ҡайта торғайны Диҡҡәттең. Шуға, "Правда" гәзитендә, район геологтары кәрәк, тип сығыш яһаны. Халыҡтан байтаҡ ҡына хуплау хаттары алды. Улар ерҙе, уның ҡара тупраҡ ҡатламын һаҡлауҙың ни тиклем зарур икәнлеге хаҡында борсолоп яҙалар ине. Тик Башҡортостан геологтары араһында хуплаусы булманы, хатта фекерҙәш тип йөрөгән кешеләре лә ҡаршы сыҡты.

— Тәбиғәт матурлыҡ өсөн генә түгел, ул кешегә хеҙмәт итергә тейеш, — тип ҡаршы сыҡтылар уға. Әммә Диҡҡәттең мәкәләһендә тәбиғәткә һоҡланып ҡына ултырыу, файҙаланмау тураһында бармай ине һүҙ, ә тәбиғәтте аҡыллы файҙаланыу, уға хилафлыҡ килтермәү, алғанды бирә лә белеү хаҡында алып барыла ине.

Диҡҡәтте "башҡорт Ломоносовы" тип йөрөтә торғайнылар. Уның студент саҡтан йыя башлаған иҫ китмәле бай картотекаһы бар ине. Рефератив журналдан ҡарап, фәндең һәр тармағы буйынса эшләүсе ғалимдарға мәғлүмәттәр йыя бара ине. Техник фәндәр кандидаты Әҙһәм Шәрәфетдиновҡа ла, медицина фәндәре докторы Ибраһим Рәхмәтуллинға ла, ветеринария фәндәре кандидаты Ирек Вәлитовҡа ла, тарихсыларға ла һәм башҡа бик күп төрлө тармаҡтарҙа эшләүселәргә ғилми тема һайлауҙа ярҙам итте.

Яҙыусы Рәшит Солтангәрәев нефтселәр тураһында яҙырға йыйынғас, ихлас ярҙам итте. Врач Вәрис Ғүмәров башҡорт халыҡ медицинаһы буйынса шөғөлләнә башлағас, үҙендә булған бар мәғлүмәттәрен тәҡдим итте. Ул саҡта аспирант, аҙаҡ философия фәндәре докторы Дамир Вәлиев менән "Урал батыр" эпосындағы философик ҡараштар тураһында фекер алыша торғайнылар. Силәбе өлкәһендә рус мәктәбен тамамлаған Дамир башҡорт халыҡ эпосындағы философик ҡараш, геологик үҙгәрештәр тураһында тәүге мәғлүмәттәрҙе Диҡҡәттән алды. "Урал батыр" эпосы тураһында сәғәттәр буйы һөйләшеп ултырырҙар ине. Бер окулист врачҡа Бируниҙан тапҡан мәғлүмәттәрен биреүен (*керпек ҡойолоп*

яфалаған сирҙе ете төрлө металдан ҡойолған әҫкәк ярҙамында дауалағандар. Шундай әҫкәк менән бер генә кәрпәк йолҡоп алһаң да артабан был ауырыу йонсотмай икән – ниндәй металдарҙан ҡойолдо икән ундай әҫкәк, тип ҡыҙыҡһына ине), зоб ауырыуының сәбәбен асыҡлауҙа Баймаҡ районында һыйырҙарҙың һөйәк кимереү фактын иҫәпкә алырға кәрәклеген әйтеүен, ошо тема буйынса эшләгән ветеринар Вәлитов менән зоб ауырыуҙары буйынса белгес хирург Рәхмәтуллинды осраштырып таныштырыуын хәтерләйем.

1969 йылда Иҫәнғолға отпускыға ҡайтҡан саҡта, уҡытыусым Мәликә Ғибәҙулла ҡыҙы Йосопова Диҡҡәт менән икебеҙҙе ҡунаҡҡа саҡырҙы. Улы Ринат сығарылыш имтиханына әҙерләнә ине. Диҡҡәт уның менән танышты. Мәликә апай улы янында Диҡҡәт менән кәңәшләшә башланы. Баҡтиһәң, Ринаттың археолог булғыһы килә, тик ҡайҙа уҡырға барырға икәнлеген асыҡламаған. Мәликә апайҙың уны медицина юлы менән ебәргеһе килә. Кешеләргә файҙаны ул медик булараҡ күберәк эшләр ине, тигән фекерҙә ул. Диҡҡәт шунда уҡ ике яҡ өсөн дә уңайлы һәм файҙалы йүнәлеш әйтте. "Ринат, әгәр һин медицина институтына инһәң, мин һине бынамын тигән шәп археолог Нияз Мәжитов менән таныштырырмын да һин уның менән экспедицияларға йөрөрһөң. Һәм шул саҡ донъяла бик һирәк, ә беҙҙең республикабыҙҙа бөтөнләй булмаған профессияға эйә буласаҡһың! Беләһеңме ниндәй? Антрополог!" Шулай итеп, Диҡҡәт аҙаҡ билдәле ғалим-антрополог булып киткән Ринат Мөхәммәт улы Йосоповҡа ғына түгел, ә Башҡортостан ғилемендә яңы тармаҡҡа йүнәлеш бирҙе.

Башҡортостанға һәм башҡорттарға ҡағылған бер генә хәбәр ҙә уның иғтибарынан ситтә ҡалманы. Мәскәүҙә уҡыған сағында Зәки Вәлиди хеҙмәттәре менән ҡыҙыҡһынған һәм Ленин китапханаһынан байтаҡ материалдар тапҡан. Командировкаларға барған сағында яратҡан китапханаһына инеп, ҡыҙыҡһынған йүнәлештәре буйынса әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһынып ҡайта торғайны. Бируниҙың медицина буйынса хеҙмәтенең фарсы телендәге төп нөсхәһен Зәки Вәлиди Туған тапҡан икән, тип ҡыуанып ҡайтҡайны бер ваҡыт. Ә был ваҡытта Вәлидиҙең исемен телгә алыу тыйыла ине. Һүҙ ыңғайында әйтеп үтәйем, Зәки Вәлидиҙе генә түгел, хатта реалибитацияланған Муса Мортазинды ла оҙаҡ ваҡыт "йәшереп" тоттолар. Мин "Совет Башҡортостаны" гәзитендә тәржемәсе булып эшләгән саҡта, хәрби журналда бер төркөм хәрби командирҙар, шул иҫәптән Муса Мортазин хаҡында ҡыҫҡаса ғына мәғлүмәт бирелде. Шатланып пропаганда бүлегенә барып индем. "Әйҙәгеҙ, Муса Мортазин хаҡында яҙайыҡ! Бына бит реабилитацияланған! " – тием.

Бер аҙҙан редакцияның партия бүлегенә саҡыртып, журналды һорап алдылар. Шунан яҡын дуҫтарса кәңәш бирҙеләр: "Балаларың ишле. Уларҙы үҙең ҡарап үҫтерергә уйлаһаң, теләһә нәмәгә ҡыҫылма".

Бер көн яҙыусы Фәрит Иҫәнғолов трилогияһының тәүге романын тикшереүҙәре, маҡтауҙары һәм нәшер итергә тәҡдим итеүҙәре тураһында шатлығын уртаҡлашырға килеп инде. Диҡҡәт романдың журналда баҫылған вариантын уҡығайны. Шунан:

— Фәрит ағай, һеҙ бик шәп прозаик. Башҡорт әҙәбиәтендә һеҙҙең кеүек прозаиктың, хикәйә оҫтаһының булыуы шатлыҡ. Ә Зәки Вәлиди — оло шәхес. Уға ҡара яғыу — дөрөҫлөк алдында хилафлыҡ булыр. Романығыҙҙың Вәлиди хаҡында насар фекер яҙылған өлөшөн алып ташлағыҙ. Уға ҡара яғыу һеҙгә бер ни ҙә өҫтәмәй бит. Вәлидиҙе аҡларҙар. Илебеҙ гел генә күләгә аҫтында йәшәмәҫ. Ә һеҙ романдың ошо өлөшө арҡаһында ғына тейешле кимәлегеҙгә күтәрелә лә, тейешле баһағыҙҙы ала ла алмаҫһығыҙ, — тине. Әммә Иҫәнғолов үҙ фекерендә ҡалды. Роман шул көйө баҫылып сыҡты.

1970 йылды ҡаршылауға беҙҙе Тимерғазиндар, башҡорттар араһынан тәүге профессор, геология-минералогия фәндәре докторы Ҡадир Рәхим улының ғаиләһе, саҡырғайны. Профессор Ҡадир Тимерғазин менән Диҡҡәт дуҫ булған, һәм профессор үлгәндән һуң да ғаиләһе – ҡатыны Асия апай, ҡыҙы Ая, улы Камил менән дә бик йылы мөнәсәбәттә инек.

Ҡунаҡтар йыйылышып, өҫтәл тирәләп ултырғас, хужалар Яңы йыл менән ҡотланы, мәжлесте асты һәм Диҡҡәткә һүҙ бирҙеләр. Ул ҡыҫҡаса ҡотлау һүҙҙәре әйткәндән һуң, ҡунаҡтарға мөрәжәғәт итеп:

— Һеҙҙең рөхсәтегеҙ менән, мин хужаларҙан рөхсәт алдым, тағы бер нәмә хаҡында әйтмәксемен. Быйыл 10 декабрҙә халҡыбыҙҙың бөйөк улы Зәки Вәлидигә һикһән йәш тулыр ине. Тик ул 26 июлдә Истамбул ҡалаһында вафат булған. Әйҙәгеҙ, уның яҡты иҫтәлегенә, хөрмәт менән баҫайыҡ.

Бер нисә генә кеше баҫты. Ҡалғандары ағарынды, аҫҡа ҡарап ултырҙы, тик баҫманы.

Илдә демократик елдәр иҫеп, зыялыларыбыҙҙың исемдәре халыҡҡа кире ҡайта башлағас, Зәки Вәлидиҙең йөҙ йыллығын билдәләү тураһындағы инициативаны "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгенең филиалы булған "Юрматы" үҙәге күтәреп сыҡты. Беҙ юллау һәм әҙерлек эштәре башланыҡ. Артабан был сара бик киң йәйелдерелде. Хатта "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәгенең башлауы ла

онотолдо. Ә теге табында тост күтәрергә күркып ултырғандарҙың кайһы берҙәре был тантаналарҙа президиумда ултырҙы.

Башкорт дәүләт университетының Ҙур залында Зәки Вәлиди уҡыуҙарында Флүрә Ғәбделхәйевна Әхмәтшина менән бергә ултырҙыҡ. Ул етмешенсе йылда Тимерғазиндарҙа булған вакиғаны былай тип иҫкә төшөрҙө:

— Минең атайым Зәки Вәлиди менән бер туған бит. Улар Әхмәтзәки, Ғәбделбарый, Ғәбдрәүеф, Ғәбделхай, Сара, Зәкиә – алты бер туған булған. Беҙ атайымдан дүртәү ҡалдыҡ. Фәүзиә, Шәүкәт, Салауат, мин. Етмешенсе йылда Тимерғазиндарҙа ҡунаҡта саҡта, Дикҡәттең телмәренән һуң ҡот осто. Булаттың (*ире - М.Б*) ҡулын ҡыҫып тотҡанмын, ҡалтыранам. Бына-бына килеп инерҙәр ҙә, пистолеттарын тоҫкап, ҡулдарҙы артҡа шаҡарып баҫтырып ҡуйырҙар ҙа мебелде ауҙара-ауҙара тентей башларҙар һымаҡ. Булат тыныҫландыра. Ирендәрҙе тешләгәнмен дә тик ултырам. "Ап-аҡ булдың," – ти аҙаҡ Булат. Ул саҡта минең Зәки бабайымдың туғаны икәнлегемде белмәйҙәр ҙә ине. Фамилияларыбыҙҙы үҙгәртеп бөткәйнек бит. Дикҡәт Зәки бабайым тураһында ҡайҙан белде икән? Кем һөйләгән уға? Тыуған йылын да, ҡасан үлгәнен дә белә ине бит. Ә мин, туғаны булһам да, уның үлеме хаҡында сала-сарпы ғына ишетеп ҡалғайным. Дикҡәттән ентекләп һорашайым тиһәм, туған икәнемде белдереүҙән ҡурҡтым ул саҡта.

Дикҡәт, 60-70-се йылдарҙа З. Вәлиди тураһында күберәк белергә теләп, уның туғандарын юллай башланы һәм бер туған һылыуы Сараның улы ғалим-физик Камил Вәлиевты табып алды. Белмәйем, нисек табышҡандарҙыр, әммә хатта миңә лә Камилдың кем икәнлеген әйтмәнеләр. Камил Вәлиев Ғәлиә исемле бик һылыу ҡыҙға өйләнгәйне, ҡыҙҙары бар ине. Фатирҙары юҡ саҡ. Өфөгә Башкорт Дәүләт университетының физика-математика факультетына эшкә саҡырылған. Дикҡәт уларҙы ҡунаҡҡа алып ҡайтып, таныштырҙы. Зәки Вәлидигә булған хөрмәтен уларға күрһәткәндер. Һәр хәлдә яҡын туғаны һымаҡ күрҙе уларҙы. Вәлиевтар, үҙҙәре фатир алғанға тиклем, аҙна һайын йыуынырға, ял итергә килеп йөрөнөләр. Икенсе улдары Юлдаш минең Илгизәр улым менән бер йылда тыуҙы. Уларҙы һыу индереү, тәрбиәләү беҙҙә булды. Аҙаҡ Ишембай ҡалаһында, Вәлидиҙең юбилей тантанаһында, Камил Вәлиев:

— Беҙҙең урамға ла ҡарға ярау итте. Был көндө күрермен тип хыял да итмәй инем. Дикҡәт кенә күрә алманы был көндәрҙе. Ә ул бит Вәлидиҙе аҡлаясаҡтарына ихлас ышанды, — тине.

Ғалим Әхнәф Харисов Төркиәлә Зәки Вәлиди китапханаһында

булып, уның хеҙмәттәре менән танышып ҡайтҡас, профессор Билал Мәғдәсим улы Йосопов уны һәм уның янына Диҡҡәт менән мине ҡунаҡҡа саҡырып, Вәлиди тураһында һөйләтте. Әхнәф Харисов Вәлидиҙең "Башҡорт тарихы", "Хәтирәләр" китабы хаҡында һөйләне. Диҡҡәт был хаҡта ишеткәс, шул тиклем ҡыуанды, күҙҙәре ялтырап китте. Өйгә ҡайтҡас, башҡорттар тарихына, тормошона ҡағылған материалдар туплай барған картотекаһы янына баҫып, ундағы мәғлүмәттәр менән шатлыҡ уртаҡлашҡандай: "Тимәк, халҡыбыҙ хаҡында ысын тарих һаҡланған икән — шуныһы ҡиммәт һәм беҙ үҙебеҙ хаҡында дөрөҫлөктө беләсәкбеҙ", — тине, сикһеҙ ҡыуанып.

"Әйткәндәй, Диҡҡәт, Вәлидиҙең Хәтирәләрендә һеҙҙең райондың Ҡунаҡбай ауылы телгә алына. Вәлиди 1908 йылда Ырымбур ҡалаһына китеп барышлай Ҡунаҡбай ауылында бер әбейҙә туҡтап киткән", – тигәйне Әхнәф Харисов, Диҡҡәттең күҙҙәре дүрт булды. Аҙаҡ хатта Ҡунаҡбай ауылына барып шул әбей тураһында һорашып та йөрөнө.

* * *

Илле етенсе йылдарҙа Мәскәүҙең төрлө вуздарынан, шулай уҡ илебеҙҙең башҡа вуздарынан бик күп белгестәр ҡайта. Белгес булыуҙары менән бергә улар үҙ халҡының ҡайнар йөрәкле патриоттары ла була. Халыҡ мәғарифы министры Фатима Хәмитовна Мостафина бик күп егеттәр һәм ҡыҙҙарҙы илебеҙҙең төрлө ҡалаларының вуздарына уҡырға ебәреүҙә тос өлөш индергән.

1946-1954 йылдарҙа БАССР мәғариф халыҡ комиссары вазифаһын башҡарған осорҙа Сәғит Рәхмәт улы Әлибаев астырған Беренсе республика интернат-мәктәбенең милли интеллигенция тәрбиәләүҙә роле бик ҙур була. 1937 йылдарҙағы фажиғәнән һуң башҡорт милли интеллигенцияһы тигән төшөнсә юҡҡа сыға яҙған саҡта, ошо мәктәпте тамамлаусы егеттәр һәм ҡыҙҙар быуындарҙың быуынға рухи бәйләнешен булдырыуҙа ғәйәт ҙур роль уйнай. Исемдәре билдәле булған һәм булмаған патриоттарыбыҙ беҙҙең бөгөнгө ҡаҙаныштарыбыҙға ышаныслы күпер һалды.

Диҡҡәттең ҡыҫҡа, әммә иҫ китмәле тығыҙ, халҡым тип янып йәшәгән ғүмере үҙе генә лә асыҡ миҫал.

Техник, геологик терминдарҙы башҡортса тәржемә итеү эшен башлаусы ла Диҡҡәт Бураҡаев булды. Фәндең һәр төр тармағы менән дә ҡыҙыҡһынған, башҡортҡа ҡағылған бөтә мәғлүмәттәрҙе лә туплай барған, фән нигеҙендә фантастик хикәйәләр яҙырға

йыйынған Диҡҡәт Бураҡаевтың геология буйынса иҫ китмәле бай китапханаһы һәм картотекаһын институттан өйгә күсереп алып ҡайттым. Унда күмер һәм нефть ятҡылыҡтары буйынса ҡиммәтле мәғлүмәттәр барлығын, ғилми хеҙмәттәре, докторлыҡ диссертация-һы тәртипкә һалынмаһа ла (*тамамланған хеҙмәтен яңынан, икенсе системаға һалып эшләй башлағайны*) үҙемдең ундағы ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса хәбәрҙар булыуымды ҡайҙа ғына, кемгә генә әйтмәнем — исмаһам, береһе ҡыҙыҡһынһа икән... Ғилми хеҙмәттәрен рәткә килтереү, Фәндәр академияһының архивына тапшырыу өсөн тәртипкә һалыу хаҡында бер кем дә ҡыл да ҡыбырлатманы. Ни өсөн икәнен аңламаным, уның ғилми мираҫына битараф булыуҙарына шул тиклем аптыраным. Бары тик Мәскәү университеты уҡытыусыһы профессор Юрий Иосифович Пиковский ғына (*Мәскәү дәүләт университетында бергә уҡығандар*) бер аҙнаға командировкаға килеп, Диҡҡәттең архивы менән эшләне.

Бөгөн килеп, ниһайәт, уның күмер буйынса хеҙмәттәре менән ҡыҙыҡһыныуҙарын белдерҙеләр.

Әйтергә кәрәк, Диҡҡәт Бураҡаев быуалар быуыу мәсьәләһендә лә үҙ фекерен әйтте. Иштуған һыуһаҡлағысы буйынса бәхәстәр башланғас, мелиорация буйынса белгес Рауил Йәғәфәр улы Ғарипов Диҡҡәттең фекере менән ҡыҙыҡһынды:

— Иштуған буйынса бәхәстәр бара. Беләбеҙ, Диҡҡәт быуалар быуыуҙы хуплай торғайны, әйҙәгеҙ, берәй мәҡәләһен баҫтырайыҡ, — тине.

— Диҡҡәт быуалар быуыу яғында ине. Тик һыуһаҡлағыс кеүек ҙур быуаларға ҡаршы булды. Ул боронғо тирмән быуаларын ҡайтарыу яғында ине, — тинем.

Диҡҡәт ҙур быуаларҙың тәбиғәткә лә, ер аҫты геологик ҡатламдарына ла зыян килтерәсәген әйтә торғайны. Йомағужа һыуһаҡлағысы буйынса бәхәстәр яңынан ҡуйырғас, был турала Диҡҡәттең шул фекерен әйттем һәм матбуғатта сығыш яһарға уйлағайным:

— Һин үҙ фекереңде әйтеп күпме яндың инде! Һыуһаҡлағыс төҙөләсәк, хәл ителгән. Артыҡ ялпылдама, — тип тыйҙылар дуҫтар.

Әле һүҙ ғәмле егеттәребеҙҙең береһе хаҡында ғына барҙы. Ә улар, илленсе-алтмышынсы йылдарҙа ең һыҙғанып янып-көйөп эшләүселәр, үҙҙәрен аямай халыҡ, киләсәк мәнфәғәте тип, йәшәүселәр байтаҡ ине. Әммә Башҡортостан энциклопедияһына уларҙың байтағы инмәгән, хатта рус телендә сығарылғанында Диҡҡәткә лә урын табылмаған. Башҡорт телендә сығарылғанына

индереп ебәреү өсөн оло бәхәс сығып, энциклопедияның География һәм геология бүлеге мөдире Әкрәм Закировтың ныҡышмалылығы менән исеме күренде. Диҡҡәттең иҫ китмәле оратор, журналист булыуы ғына ла энциклопедияла урын бирерлек кимәлгә күтәрә ине. Әммә Диҡҡәт үҙен түгел, эшен алдараҡ күрһәтеүселәрҙән ине. Ә үҙеңде күрһәтә белмәү арҡаһында ҡайһы бер юғары исемдәрҙән мәхрүм ҡалаһың һәм регалияларың тап килмәү арҡаһында энгциклопедияға ла эләкмәйһең. Шуның өсөн халыҡ мәнфәғәте тип янған ғәмле илһөйәрҙәрҙең исем-шәрифтәрен мөмкин тиклем атап китмәксе булдым ошо китабымда. Туғандары, балалары уҡып белер, яҡындары телгә алыр.

Аралашҡан кешеләребеҙ ҙә Диҡҡәттең үҙе кеүек үк ғәм ялҡынында сорналған кешеләр ине.

Ғәмле әһелдәребеҙ ҡайҙа, кем булып эшләһә лә, иң элек халыҡ улдары һәм ҡыҙҙары тип таныттылар үҙҙәрен.

Республикабыҙҙың һәр ауылында бар үҙҙәрен халыҡҡа арнаған ғәмле кешеләр. Уларҙы халыҡ онотмаһын ине.

Өфөлә Цюрупа урамы менән Достоевский урамдары киҫешкән урында мөйөштәге йортта йәшәнек. КПСС-тың Башҡортостан өлкә Комитетында эшләүселәрҙең йәшәгән төйәге беҙҙән алыҫ түгел ине – Коммунистик һәм Энгельс урамдары кварталында, ә Октябрь революцияһы менән Цюрупа урамдары киҫешкән йортта сәнғәт әһелдәре йәшәне. Унда йәшәүсе дуҫтар Үҙәк баҙарға барһа ла, кистәрен Иван Яҡутов исемендәге паркка йүгерергә сыҡһалар ҙа, юлдары беҙҙең аша үтте. Эске эштәр министрлығы министры урынбаҫары Ҡарабаев ағай ашығып ҡына килеп инер ҙә:

— Ошонда ғына тора ул халҡым, — тип йөрәк тапҡырына баҫыр ине. — Ҡулымдан килгән саҡлы ярҙам итергә тырышам, тик ниәтемдең, теләгемдең йөҙҙән бер өлөшөн дә эшләй алмайым, — ти торғайны. Ҡарабаев үҙ вазифаһынан тыш халҡы өсөн тағы ниҙер эшләргә тырышҡан, республиканың киләсәге, халҡының яҙмышы өсөн ғәмһеҙ булмаған. Өфөлә прописка мәсьәләһе бик ауыр тора ине. Киләсәкле егеттәребеҙгә һәм ҡыҙҙарыбыҙға шул мәсьәләлә ярҙам иткәндер, тип уйлайым.

Диҡҡәткә фартир алыуҙа ярҙам иткән Рамаҙан Өмөтбаев ағай йыш булыр ине беҙҙә. Уны күреп белмәгән саҡта уҡ, КПСС Үҙәк Комитеты эргәһендәге Ижтимағи фәндәр академияһында уҡыған сағында "беҙҙең бик шәп ағай ҡайтырға тейеш. Ул ҡайтһа, бәлки, егеттәребеҙгә аҙыраҡ юл асылыр" тип өмөтләнеп көтөп йөрөйҙәр ине. Уның юғары вазифа биләй алыуына ышаныс ҙур булды. Ҡайҙан сыҡҡандыр уның һәйбәт кеше, халҡым тип яныш йәшәүе

хаҡында хәбәр, әммә ни өсөндөр уның ҡайтып эш башлауына өмөт ҙур булды. Һис юғы барып эсте бушатып ҡайтыр кешебеҙ булыр, тип уйланылды. Әлегәсә аңлашылмай: Мәскәү тарафынан ҡыҫым ҡаты булдымы, урындағылар шаштырҙылармы – һәр хәлдә хатта Конституцияла яҙылған хоҡуҡ хаҡында һүҙ барғанда ла милләтселектә ғәйепләргә әҙер тоҡалар ине вазифалы етәксе иптәштәр. Партияның өлкә комитеты тирәһендә ултырыусылар үҙ тарихыбыҙға дөрөҫ ҡараш, милли мәҙәниәтте үҫтереү, туған телдә уҡыу, балаларҙы тәрбиәләү өсөн туған тел мөхите булдырыу һәм башҡа шундай законлы һәм тәбиғи талаптарҙы ла иҫәпкә алманылар, киреһенсә, "ҡара исемлеккә" индерә барҙылар. Бөтөн өмөтөбөҙ Өмөтбаевта ине. Әйтерһең, ул ҡайта ла, юғары вазифа биләй ҙә, егет һәм ҡыҙҙарыбыҙға үҙ хыялдарын тормошҡа ашырыу өсөн киң юл аса. Р. Ғ. Өмөтбаев Академияны тамамлап ҡайтҡас та БАССР Министрҙар Советы рәйесе урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Һигеҙ йыл самаһы эшләгәс, БАССР-ҙың Кинофикация буйынса дәүләт комитеты рәйесе итеп төшөрөлдө. Донъяла ғүмер буйы ғәм менән ғәмһеҙлек араһында көрәш бара... Халҡыбыҙҙың бөйөк улын һуңғы тапҡыр осратҡан мәлемде ҙур әсенеү менән иҫкә алам. 1997 йылда, Ейәнсура районынан ҡабат Өфөгә күсеп килергә тура килгәс, дөйөм ятаҡҡа урынлаштыҡ. Юғары вазифалы кешегә торлаҡ мәсьәләһе буйынса барғайным. Минән алда ингән кеше бик оҙаҡланы. Ҡабул итеү бүлмәһендә ултырған башҡорт ҡыҙынан, кем шул тиклем оҙаҡлай ул, тип, ҡыҙыҡһындым. "Какой-то старикашка," — тине. Бер аҙҙан "какой-то старикашка!" сыҡты. Мин уңайһыҙланыуымдан ни эшләргә белмәнем. Ағай тураһында ошондай һүҙҙәр әйткәне, миңә ишеттергәне өсөн ҡыҙға рәнйенем дә, ағайҙан оялдым да. Ул Рамаҙан ағай Өмөтбаев булып сыҡты. Ихлас күрештек. Хәлен һорашырға ашыҡтым. "Фатир һорап йөрөйөм әле. Апайың да, мин дә ауырыйбыҙ. Эшләргә айырым бүлмәм юҡ. Яҙаһы нәмәләрем бик күп," — тине. Ошонан һуң күп тә үтмәне, ағайыбыҙҙы ла, апайҙы ла һуңғы юлға оҙаттыҡ.

Ғәмле булыу телдән маҡталһа ла, ғәмәлдә иһә юғары вазифа биләгәндәр тарафынан да, "йәшәй белеүселәр" яғынан да "насар холоҡ" тип баһалана. Әммә тормошто фәкәт ғәмле кешеләр генә алға һөрә. Улар тәгәрмәстең иң нык ашалған тыш яғындалар. Тарих тәгәрмәсен алға тәгәрәтеүселәр шуның өсөн дә үҙҙәре үк тәгәрмәс табаны аҫтында ҡалыусан. Ә йәмғиәттең "ғәмһеҙҙәр" тип аталған өлөшө рәхәтләнеп эс яғында әйләнә. Бына шуның өсөн ҡайһы берәүҙәр ғәмһеҙ йәшәүҙе өҫтөн күрәләр. Әммә ғәмһеҙҙәрҙән матур нур таралмай йыһанға. Донъяға яҡты нур ни тиклем күберәк

һирпелә, шул тиклем сафлыҡ арта, кешеләр араһындағы мөнәсәбәт яҡшыра, кешеләрҙең күңеле күркәмләнә.

Ҡайһы берәүҙәр: "Ни өсөн беҙ үткәндәргә баш эйәбеҙ? Ни өсөн шәхестәребеҙ үҙҙәре иҫән саҡта ҡәҙерҙәрен белмәйҙәр, үлгәс кенә байраҡ итеп күтәрә башлайҙар?" — тип аптыраусан. Үткәндәрҙән беҙгә фәҡәт аҡыл, яҡтылыҡ, яҡшылыҡ ҡына килеп етә. Ә ундай төшөнсәләрҙе үҙ заманында "насар холоҡло", "һыйышһыҙ" тигән мөһөр һалынған Ғәмле Шәхестәр ҡалдыра. Үҙҙәре иҫән булмағас, уларҙың бөйөклөктәре алдында баш эйһәң дә ярай. Тарихта ҡалған шәхестәр үҙҙәренең шәхсән тынғыһыҙлығы менән ҡамасаулай алмай, ә фәҡәт данлы исемдәре һәм башҡарған эштәре, аманат итеп ҡалдырған уй-фекерҙәре менән тарих ҡуласаһын алға этәреүсе көс булараҡ баһалана. Ә кешелек донъяһын алға этәреү кәрәк – унһыҙ йәшәйеш туҡтай. Быны вазифалы етәкселәр бик яҡшы аңлайҙар, тик улар "Урал батыр" эпосында әйтелгәнсә:

Аҡбуҙатҡа менер ҙә,
Булат ҡылыс тотор ҙа
Беҙҙән өҫтөн булыр, –

тип, ғәмлеләрҙән ҡурҡалар. Ә ғәмлеләр иһә өҫтөн булыу хаҡында уйлап та бирмәйҙәр: улар тәбиғәттән бирелгән һәләттәрен генә ғәмәли башҡарып ҡалырға ашығалар һәм фәҡәт шул маҡсатта ғына шарт булдырыуға мохтаждар.

Шәхескә ҡаршы ҡул күтәреүселәр – йәшәйештең алға китешен тотҡарлаусылар улар. Тәңре үҙенең саф күңелле "бүләгенә" ҡул һуҙыусыларға, уның данына ҡыҙығып, юҡҡа сығарырға маташыусыларға сикһеҙ асыулы була һәм ундайҙарҙың нәҫел даланын ҡорота.

Кеше хаҡына ҡул һуҙған, балаларына харам ризыҡ ашатҡан, кеше рәнйеше алғандарҙың үҙенә булмаһа, ҡан нәҫеленә ҡарата Тәбиғәт аяуһыҙ.

Етмешенсе йылдарҙа "Совет Башҡортостаны" гәзитендә хәбәрсе булып эшләгән осорҙа Диҡҡәт Бураҡаев менән байтаҡ ҡына проблемалы мәҡәләләр менән сығыш яһаныҡ. Шул саҡта беҙҙең сығыштарыбыҙға ҡарата халыҡтан хаттар шул тиклем күп килә торғайны, хатта ошо ук гәзиттең әҙәби бүлеге мөдире билдәле яҙыусы Сабир Шәрипов: "Был хаттарҙы үҙең ойоштораһыңдыр. Һеҙҙең мәҡәләгеҙ сығыуы була, редакция хаттар алыу буйынса планды арттырып үтәй", — ти торғайны. Мине халыҡтың беҙ күтәргән проблемаларға ҡарата битараф булмауы ҡыуандыра ине. Ә беҙ, башлыса, тәбиғәтте һаҡлау, эсәр һыуҙарҙы бысратмау, ер

аçты һыуҙарын һаҡлау, ауылдарҙы юҡҡа сығартмау, ишле балалы ғаиләләрҙе арттырыу мәсьәләләре буйынса сығыш яһай инек.

Диҡҡәттең тәбиғәттең киләсәге өсөн сикһеҙ борсолоуы матбуғат аша халыҡҡа билдәле ине. Шуға ла редакция аша ла, өйгә лә тәбиғәтте һаҡлауға ҡарата борсоулы хаттар күп килде. Шуның өсөн дә, ул үлгәндән һуң, шағир Ғәлим Дәүләтовтың Диҡҡәткә арнап сығарған "Алтын егет" тигән шиғырында былай тип яҙылды:

Бүләк иткән ине тыуған мәктәп
Һиңә маҡтап алтын миҙалын.
Зирәклегең үҙенеке итте
Беҙ малайҙарҙың уй-хыялын.
Мәскәү вузы йәшлек йылдарында
Дөрләткәйне йөрәк ялҡынын.
Ябай Урал ташы ҡулдарында
Йондоҙ булып хатта балҡыны!
Әсәй итеп күрҙең тәбиғәтте.
Һаҡланың һин, булдың ҡалҡаны.
Көтмәгәндә
Ерем тартып алды —
Сөнки һин инең үҙ алтыны.

Диҡҡәт, ысынлап та, тәбиғәттең дә, халҡы мәнфәғәтенең дә, туған телдең дә ҡалҡаны булып йәшәне. Уның ваҡытлы матбуғатта ай һайын тиерлек баҫылып торған мәҡәләләренә генә күҙ ташлап сыҡһаң да, ғалимдың геология өсөн генә йөрәге янмағанын тоҫмаллап була. "Совет Башҡортостаны" (*хәҙерге "Башҡортостан"*) гәзитенең 1978 йылдың 24 декабрендәге "Кеше һәм тәбиғәт" тигән махсус биткә иғтибар итәм. Редакция исеменән яҙылған баш һүҙ. "Газетабыҙҙың быйылғы 274-се номерендә (*ялғауҙа ул саҡтағы орфографик талап – М. Б.*) геология-минералогия фәндәре кандидаты Д. Бураҡаев "Мелиорация эштәре хаҡында" тигән мәҡәлә менән сығыш яһағайны. Ул унда Башҡортостанда үткәрелгән мелиорация эштәре буйынса үҙенең фекерҙәре, уй-теләктәре менән уртаҡлашҡайны. Фекер алышыу тәртибендә баҫылған мәҡәлә газета уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Был хаҡта редакцияға бик күп хат килә. Республикабыҙҙың төрлө райондарынан, төрлө һөнәр кешеләре мелиорация эштәренә ҡарата үҙ фекерен, үҙ ҡарашын яҙа, уны һәйбәт итеп үткәреү буйынса тәҡдимдәрен дә әйтә."

Гәзит биттәрен артабан ҡарайым. Д. Бураҡаев профессор Ғайса Хөсәйеновтың "Заман. Әҙәбиәт. Әҙип" тигән китабының республи-

кабыҙҙың Салауат Юлаев премияһына тәҡдим ителеү уңайы менән үҙ фекерен әйтә һәм ғалимдың китабын "Рухи хазиналар тупланмаһы" тип атай. 1976 йылда "Район геологы" тигән проблемалы мәҡәлә менән сығыш яһаны. "Геолог Башкирии" гәзитендә Д. Бураҡаевтың геологик терминологияһының башҡортсаға тәржемәһе маҡтала. "Башҡортостан пионеры" гәзитендә "Юлдаш" клубы битендә "Мауыҡтырғыс фән донъяһы" тигән рубрика бар ине. Диҡҡәт иң әүҙем авторҙарҙың береһе булды. 1977 йылда СССР Конституцияһы проектына төҙәтмә индереүгә тәҡдим менән сығыш яһай. Уның тәҡдименә күҙ һалған саҡта ла тәбиғәт өсөн, ысынлап та, бөтә йөрәге менән янғанлығын тоябыҙ. "СССР граждандары тәбиғәтте ҡәҙерләргә, уның байлыҡтарын һаҡларға бурыслы һәм эштә тотҡан вазифаһына ҡарамаҫтан, йәшәп килгән закон положениелары алдында берҙәй үк яуаплы булып тора", — тигән тәҡдим индереү хаҡында яҙып сыҡты.

1981 йылдың сентябрь айында, Диҡҡәт больницала ятҡан саҡта, "Аҡмулланың шиғырҙары" тигән йыйынтыҡ баҫылып сыҡты. Диҡҡәт шул тиклем ҡыуанды был ваҡиғаға, ауырыған көйө, үҙенең Аҡмулла шиғырҙары менән бәйле иҫтәлектәрен яҙып, "Әйҙүк, Аҡмулла!" тигән мәҡәләһен яҙҙы. Ошо үк сентябрь айында яҡты донъянан китте...

Ә республикабыҙҙың түбәнге карбон ҡатламдарында нефть һәм ташкүмер ятҡылыҡтары асыу буйынса ғилми хеҙмәттәре илебеҙҙәге геология-минералогия ғилеме өлкәһендә генә түгел, сит илдәрҙә лә танылыу таба ине.

Ғәмләләр киләсәк заман һулышы менән йәшәй. Шуның өсөн уларҙың холҡо, маҡсаты, йәшәйеше, тормошҡа ҡарашы замандаштарына ят тойола. Уларҙы аңламайҙар ҙа, аңларға ла теләмәйҙәр, сөнки ғәмләләр ғәмһеҙҙәргә туҡтауһыҙ мәшәҡәт тыуҙыра. Бөтөн тормош, яҙмыш, үҙ яҙмышы ғына түгел ил яҙмышы, халыҡ яҙмышы уларҙың йөрәге аша үтә. Ғәмләләр үҙ ғүмерҙәре менән мәңгелеккә юл яралар.

Шуныһы шатлыҡлы, халҡыбыҙҙа йөрәгендә ғәм йөрөткән егеттәр һәм ҡыҙҙар тыуып тора. Һәҙиә менән Ғөбәй Дәүләтшиндар, Дауыт Юлтый, Ғәзиз Әлмөхәмәтов кеүек халыҡ тип янып-көйөп йөрөгәндәргә алмашҡа тулҡын-тулҡын булып йәштәр килде. Ғәмле ғалимдар үҙҙәренең ғилми хеҙмәте ҡалыбында ғына ҡайнамай. Тарих төпкөлөнән шәхестәребеҙ хаҡында мәғлүмәттәр табып, бөгөнгө йәштәргә фәһем булырлыҡ мәҡәләләр, очерктар яҙыу менән дә мәшғүл. Ундайҙарҙан ғалим Әхнәф Харисовты әйтеп китергә кәрәк. Ғалим-яҙыусы Ғайса Хөсәйенов әүҙемлеге менән ныҡ айыры-

лып тора. Ғалим-шағир Рәшит Шәкүр халҡыбыҙ араһындағы күпме талантларҙы табып, исем-шәрифтәрен халыҡҡа билдәле итте.

1960-1980 йылдарҙа халыҡ мәнфәғәте өсөн ғәмәли эш башҡарыусылар һаны күҙгә күренеп артты. Ундайҙар, һанап үтелгән сәйәсмәндәр генә түгел, ҡулдарынан килгән тиклем ярҙам итергә әҙер торған врачтарыбыҙ араһында ла байтаҡтар. Бер нисә врачты беҙ хатта "Халыҡ врачтары" тип йөрөттөк. Был врачтар тәүлектең ҡайһы мәле булыуға ҡарамаҫтан, ярҙам ҡулы һуҙа торғайны. Ул йылдар хаҡында аңлатма биреп китмәһәк, ни өсөн башҡорттарҙың фәҡәт таныш врачтарға ғына мөрәжәғәт итеүе аңлашылмаҫ. Өфөлә прописка инеү үтә лә ауыр мәсьәлә ине. Эш тапһалар ҙа прописка таба алмай йонсойҙар ине. Ауырып киткән саҡтар ҙа була. Кемгә барһындар күҙ терәп? Вәрис Ғүмәров, Ибраһим Рәхмәтуллин, Марат Мырҙанов, Марат Аҙнабаев, Мәхмүзә Ғәйнуллиналар эскерһеҙ ярҙам иттеләр. "Халҡым" тип кәрәк саҡта яңа-яңғыҙ алышҡа ташланған Рәшит Шәкүр ҙә, Дамир Вәлиев та, Марат Ҡолшәрипов та, Диас Йәнтурин да, "халыҡ уятырға" райондар буйлап сәйәхәткә сығып китеүсе күренекле ғалимәләр Нәжибә Мәксүтова менән Таңһылыу Күсемовалар ҙа, сая Зәйтүнә Хановалар... "Сәнғәттә һүҙ иҫ китмәле көскә эйә! Театрға саф башҡорт телен ҡайтарырға кәрәк!" — тип аяуһыҙ көрәшкән Илшат Йомағолов та, театрҙың репертуар байлығы һәм тел сафлығы, уйнау тәбиғилеге өсөн тырышҡан Шәүрә Мортазина ла, үҙ эшенә фанатиктарса бирелгән, донъялағы кешеләрҙе браконьерҙарға һәм браконьер түгелдәргә генә бүлеп баһалаған Мөхәррәм Үтәғәнов та... Заманса уҡытыусылар әҙерләйем тип, ваҡытын-көсөн, белемен-ялын йәлләмәй ең һыҙғанып эшкә тотонған ғалимыбыҙ Самат Мөхәмәтйәнов та... Ошондай ил улдары һәм ҡыҙҙары булғанға, үҙаллылыҡ яулау кимәленә халыҡ булып ойошоп, тарҡалмай килеп еттек тә инде. Тик Баязит Бикбай, Жәлил Кейекбаев, Ҡадир Даян, Әнүр Вахитов, Ким Әхмәтйәнов, Марат Минһажетдинов, Диҡҡәт Бураҡаевтар ғына аҙмы-күпме иркен тын алырға форсат биргән үҙгәрештәр заманына тиклем йәшәй алманы.

Мин райондарҙа бик күп ғәмле уҡытыусыларҙы күрҙем. Улар һәр береһе үҙ эшендә, үҙ төбәгендә "халҡым" тип янып йөрөгән, ихлас эшләгән кешеләр. Исем-шәрифтәрен яҙа китһәң, шөкөр, бик күп урын алыр ине. Йөрәгендә "халҡым" тигән ғәм йөрөтөүселәр арҡаһында милләтебеҙҙең йәшәйеш ҡулсаһы өҙөлмәй.

* * *

Ғәмһеҙҙәребеҙ ҙә етерлек әле. Әммә улар, һис юғы, үҙ мәнфәғәттәре хаҡына халҡыбыҙ киләсәге тураһында борсолорға тейеш. Башҡорт халҡының һан яғынан кәмеүе республикабыҙҙың үҙ аллы дәүләтселегенең юғалыуына һәм өлкәгә йәки башҡа төрлө берәмеккә әйләнеүенә килтерәсәк, ул саҡта инде бөгөнгө көндө "мин – мәңгелек" тип күкрәк һуғып йөрөүсе ғәмһеҙ етәкселәрҙең дә әлеге вазифаларын биләүҙәре икеле. Улар, һис юғы үҙ вазифаларын һаҡлау өсөн булһа ла республикаға исем биргән һәм республиканы суверенлы берәмек итеп һаҡлап торған халыҡ һәм ысын таланттар хаҡында хәстәрлек күрһендәр ине. Таланттар — халыҡтың рухи юғарылығының көҙгөһө. Шәхестәр — халыҡ яҙмышының ҡото. Ысын таланттарҙы, шәхестәрҙе ҡәҙерләү иң төп маҡсатҡа әйләнергә тейеш. Тағы бер нәмәне иҫтә тоторға тейеш ғәмһеҙ етәкселәр: күрше өлкәләрҙә, башҡорттар байтаҡ йәшәгән райондарҙа, етәксе урындарҙа ла, депутаттар араһында бер башҡорт та юҡ. Башҡорт халҡының берҙән-бер рухи ҡәлғәһе булған республикабыҙ үҙаллылығын юғалтһа, бөгөнгө көндә вазифалы урындар биләгән ғәмһеҙҙәребеҙ ҙә вазифаларын юғалтасаҡ. Ул саҡта интернациональ ғаилә ҡороуҙары ла, балаларына интернациональ исем ҡушыу ҙа, үҙ телдәрен һанға һуҡмай сит телдәргә генә өҫтөнлөк биреүҙәре лә уларға вазифаларын һаҡлауға ярҙам итмәйәсәк. Башҡортостандың дәүләтселегенә әүҙем ҡаршы сыҡҡан ҡан-ҡәрҙәштәребеҙ вәкилдәре лә быны иҫтә тотһа, насар булмаҫ ине. Башҡортостанда ла, Татарстанда ла татар милләтен күтәреүсе сәнғәт эшмәкәрҙәренең байтаҡ өлөшө ҡайҙалыр сит өлкәләрҙә түгел, ә Башҡортостанда үҫеп сыҡҡан. Башҡорт милләтенән булған ғәмһеҙҙәр, әйтеп үтеүебеҙсә, үҙ мәнфәғәттәре, вазифалы урындары хаҡына булһа ла, ғәмлелеккә йөҙөн борһа ғына был хәүефтең булмауы ихтимал. Ләкин үҙҙәренең шулай йәшәйешен дөрөҫ тип, "йәшәй беләбеҙ" тип баһалаған ғәмһеҙҙәрҙән ундайҙы өмөт итеү ҡыш көнө ләйсән ямғыры теләү һымаҡ. Ундайҙар ғәмһеҙлеккә шул тиклем күнгән, халыҡ мәнфәғәте өсөн әллә ни инициатива күрһәтеп бармайҙар. Улар өсөн иң еңеле – үҙҙәренән юғарылар алдында ялағайланыу, түбәндәгеләрҙе ҡаты ҡул менән баҫыу, үҙҙәре янына үҙҙәре кеүек үк ғәмһеҙҙәрҙе туплау. Тап улар тынғыһыҙ ғәмлеләрҙе генә түгел, ә тормош ағышын алдан һиҙемләгән, алға ынтылыусан, үҙ фекерҙәре булған, халыҡтың киләсәге өсөн ниҙер эшләргә тырышҡан кешеләрҙе юҡҡа сығара, эҙәрлекләй, үс тота, уларҙың эш урындарын ҡыҫҡарта, уларҙан ҡотола, сәйәсәткә яҡын йөрөтмәү яғын ҡарайҙар. Шунлыҡтан алдынғы ҡарашлы, әммә их-

тыяры йомшағыраҡ булғандар көрәште туҡтатырға мәжбүр була. Айырыуса саялары халыҡҡа хеҙмәт итеүҙең икенсе формаларына күсә, ә рухтары йомшағыраҡтар эскелеккә һалыша. Ҡайһы берҙәре сит яҡтарға сығып китә һәм, ғәмләләре күберәк булған халыҡ араһында фекерҙәштәр табып, уларға хеҙмәт итә башлай. Рухи яҡтан ныҡ булған, бер ниндәй ҡаршылыҡтарға ла бирешмәгән өлөшө, "вазифалы урын биләүселәр" менән көрәштең ваҡытлыса икәнлеген, тарихтың, халыҡ хәтеренең был кешеләр ғүмеренә ҡарағанда сағыштырғыһыҙ оҙайлы булыуын уйлап, төшөнкөлөккә бирелгән халыҡты алға әйҙәй, ҡуҙғата, үҙенең идеалдарына ирешеү өсөн көсөн дә, ваҡытын да, хатта, кәрәк булһа, ғүмерен дә йәлләмәй, йәшәүен дауам итә. (**Тарих тәрәнлегенә түгел, хатта үҙең йәшәгән осорға ғына күҙ ташлаһаң да Тәбиғәттең, Юғары көстөң ни тиклем аҡыллы булыуына хайран ҡалаһың: юғарымы, түбәнерәкме – ниндәй генә булһа ла вазифа биләгән мәлдәрендә ғәмлеләр менән көрәштә ҡулланаған "аяуһыҙ ысулдары" ғәмһеҙҙәрҙең үҙҙәренә кире ҡайта. Етәкселек урындарынан Ергә түңкәрелеп төшәләр йәки яман сиргә дусар булалар. Ҡайһы берҙәре ғәмләләргә ялағайлана башлай, улар сафына баҫырға тырыша, имеш, ул да күңеле менән ғәмле булған, тик юғарынан талап иткәнгә генә ғәмһеҙ булып тойолған. Ҡайһылары һыр бирмәҫкә тырыша. Әммә ундайҙарҙың аяуһыҙлығын халыҡ онотмай, мөнәсәбәт балаларына күсә**).

Ғәм менән ғәмһеҙлекте айыра белгән һәм ғәмләләргә мөмкин тиклем ярҙам иткән халыҡ ҡына үҙ ғүмерен оҙаҡ дауам итә. Ғәмләләр халыҡтың йәшәйеш ҡулсаһын өҙмәй тота. Тап улар – халыҡтың юғары ынтылышынан көс-ҡеүәт туплап, шул энергияны йәш быуынға тапшырыусылар. Кешене лә, халыҡты ла Ғәм йәшәтә, Ғәм алға этәрә, юғарыға әйҙәй. Ғәмләләр үҙҙәрен аямай, үҙҙәре хаҡында уйламай, дан-шөһрәт өсөн дә ынтылмай, вазифалы урын биләү хаҡында ла хәстәрлек күрмәй. Ярҙам итһә, ихлас ярҙам итә, аҡсалата бүләкләүҙе лә талап итмәй — фәҡәт халҡының киләсәкке яҙмышы хаҡында ғына борсолоуҙан сығып ҡора үҙ йәшәүен. Ғәмләләрҙең тынғыһыҙ булыуы арҡаһында ил ҡоролошонда ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр булып тора.

Халыҡ ошондай ғәмләләрҙе үҙенең идеалы иткән. Урал батыр образы тыуҙырған. Ғәмләләр менән Ғәмһеҙҙәр көрәше Урал батыр менән Шүлгән алышы ул.

Илебеҙҙә лә, республикабыҙҙа ла демократик үҙгәрештәр башланыуға, халыҡ хаҡында асыҡтан-асыҡ хәстәрлек күреү өсөн мөмкинлек тыуыуға шатлыҡ шул тиклем ҙур булды — һәр милләттең ғәмле вәкиле, күңелдәрендә быуылып килгән уй-хыялдарын тормошҡа ашырыу өсөн, төрлө ойошмалар төҙөй башланы.

Республикабыҙҙа ла шундай йәнләнеү барғанда, мин Белорет районының Йөйәк ауылында уҡытыусы булып эшләп йөрөй инем. Өфөнән бер төркөм иптәштәр килеп:

— Бөтә нәмә тыйылы заманда әле мәктәп, әле балалар баҡсаһы, тип янып йәшәнең-йәшәнең дә, инде генә иркенлек бирелгәйне, киттең дә барҙың. Өфөлә Яҙыусылар Союзы бинаһында кесаҙна һайын халыҡ үҙәге вәкилдәре йыйыла. Рәйес итеп Рәшит Шәкүрҙе һайланыҡ. Сәркәтибе юҡ әле. Ул эште ваҡытлыса Тәлғәт Шаһманов алып бара, беҙ һине алып ҡайтырға килдек, — тинеләр. Нисек түҙеп ятмаҡ кәрәк?! Өфөгә кире килдем. "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәгенә сәркәтип итеп һайланылар. Фрунзе урамындағы ҡырҡынсы йорттан бүлмә бирҙеләр. Ғәжәп хәл ине был! Халҡың өсөн эшлә, тип айырым бүлмә, телефон һәм тулы ирекле бирелде! Эш башланыҡ. Әле генә бит газета йәки журнал биттәрендә башҡорт, ҡурай тигән һүҙҙәрҙе йыш ҡабатламағыҙ, барыбер бер милләт булып ойошасаҡбыҙ, тип, һәр аҙымды тикшереп, тыйып, ҡурҡытып ултыралар ине – бына һиңә хөрриәт! Ысынмы был хәл, ваҡытлыса түгелме?! Халыҡтың үҙе булып, тәбиғәт биргән һәләтен үҫтереп, балаларына тапшырып йәшәргә тип алып барған көрәшенең, рухи азатлыҡҡа ынтылыуының тантанаһымы был? Нисек кенә булмаһын – был мөмкинлекте файҙаланып ҡалырға кәрәк. Көнө-төнө халыҡ ағымы туҡтамай. Иртәнге сәғәт туғыҙҙа киләбеҙ, киске ун-ун бер тирәһендә генә ҡайтып инәбеҙ.

Халыҡ тарихы, көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш Башҡортостан башҡорттары яҙмышы, халыҡ суверенлығы, тел статусы, кадрҙар мәсьәләһе, миграция процестары, милли мәктәп концепцияһы, тәбиғәтте һаҡлау проблемаһы һәм башҡа бик күп мәсьәләләр ҡарала торғайны идара ултырыштарында ла, йыйындарҙа ла.

Партияның өлкә Комитетында туҡтауһыҙ үҙгәрештәр бара. Башҡорт АССР-ы Юғары Советы менән Министрҙар Советы ғына тотороҡло эшләй. Халыҡ геү килә. Интеллигенция вәкилдәре ҡыҙыу бәхәстәр алып бара. "Урал" үҙәгенә бирелгән бүлмәне "Смольный" тип атанылар. Райондарҙан шылтыратыуҙар, ҡаланыҡыларҙың килеп үҙ кәңәштәрен биреүселәр, юғарыға саҡыртыуҙар... Гимн өсөн һүҙҙәр яҙып та, флаг өлгөләре тегеп тә алып

киләләр, герб хаҡында ла фекерҙәрен әйтәләр. Даими армия, республиканың үҙ аҡса өлгөһө булырға тейеш, тигән фекер ҙә әйтәләр. "Беҙҙең армия булған бит. Ленин хатта үҙе ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән. Хәҙер ҙә булырға тейеш", — тигән фекер менән дә инеп сығалар. Бынан тыш, республиканың йылдар буйы ихтибарҙан ситтә ҡалған райондарының мәнфәғәтен ҡайғыртыусылар ҙа килә. Ер кодексы, һыу кодексы, Тупраҡ һәм сүплек проблемаһы, Иштуған һыуһаҡлағысы, Ағиҙел атом электростанцияһы... Төрлө тәҡдимдәр, бихисап үтенестәр, һорауҙар... Мин уларҙың фекерҙәрен, тәҡдимдәрен, дәғүәләрен — бөтөнөһөн дә яҙып бара инем. Аҙаҡ Б. Н. Ельцинға һәм хөкүмәтебеҙгә мөрәжәғәт эшләгән саҡта, халыҡтан йыйылған шул фекерҙәр файҙаланылды. Әлбиттә, тәүҙә идара ултырышында тикшерелде, ғалимдар ентекле өйрәнде.

Республика ниндәй статус алырға тейеш? Мәскәүгә буйһоноу нисек булырға тейеш? Федерациямы, әллә конфедерациямы? Республикабыҙҙа йәшәгән халыҡтар ниндәй хоҡуҡтарға эйә булырға тейеш? Телебеҙгә дәүләт статусы алыу өсөн ниҙәр эшләргә кәрәк? Башҡорт халҡын тергеҙеү һәм артабан үҫтереү өсөн ниҙәр эшләргә кәрәк? Ошо һәм бик күп башҡа мәсьәләләр буйынса халыҡ ойошмаларынан килгән вәкилдәр менән дә, вазифалы етәкселәр менән дә осрашыуҙар йыш булды.

Республиканың статусы, дәүләт теле тураһында референдум үткәрәйек, тигән фекерҙәр ҡуйырҙы. "Ҡыҙыл таң" менән "Йәшлек" гәзиттәрендә бәхәсле мәҡәләләр баҫылды. Ыңғай фекерле лә, кире карашлы ла ҡултамғалар йыйылды. Ҡыҫҡаһы, республикабыҙҙың суверенитет яулауында халыҡ фекере тыуҙырыуҙа "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәге, уның филиалдары, "Йәшлек" гәзите (*мөхәррире Таңһылыу Карамышева*) ғәжәп ҙур роль уйнаны. Әйтергә кәрәк, "Урал" үҙәге активистары башҡорт халҡына ғына аңлатыу эше алып барманы, башҡа милләт вәкилдәре менән дә әүҙем эшләне.

1990 йылдың 20 июлендә Министрҙар Советы Рәйесе урынбаҫары Мансур Әнүәр улы Әюповта булған осрашыу айырыуса иҫтә ҡалған. М. Әюпов республикабыҙҙа ойоштороло торлө милли ойошмалар етәкселәрен саҡыртып алғайны. Һөйләшеүҙең төп йүнәлеше республиканың статусы һәм дәүләт теле тураһында барырға тейеш ине.

Мансур Әнүәр улы үҙенең инеш сығышында уҡ бындай фекер әйтте: "Республика ниндәй генә статус алһа ла, республикала йәшәүсе бөтә милләттәрҙең дә проблемалары хәл ителергә тейеш. Республика күп милләтле икән, тимәк, ундай проблема бар һәм етди һөйләшеүҙе талап итә. Ошо хаҡта фекер алышайыҡ. Тик

фекер алышыу барышында бер-беребеҙгә баһа бирмәйек, һөйләшеүҙе бәхәскә бормайыҡ, фекер генә алышайыҡ.

Сығыштар, фекер алышыуҙар башланды.

Рәшит Шәкүрев:

Башҡорт халҡы өсөн төп өс проблеманы хәл итеү зарур. Ассимиляция, миграция һәм туған телде өйрәнеү. Ҡыҫҡаһы, башҡорт проблемаһы — ул ер йөҙөндәге тотош бер халыҡтың йәшәү йәки үлем проблемаһы. Башҡорт халҡының йәшәүе республиканың артабанғы яҙмышын һәм бында йәшәүсе башҡа милләт вәкилдәренең дә яҙмышын хәл итә.

Татар ойошмаһынан **Наил Бәҙретдинов:**

Башҡортостан йәшәргә тейеш, тимәк, беҙ иң элек башҡорт халҡының яҙмышы хаҡында хәстәрлек күрергә тейешбеҙ.

Татар ойошмаһы лидеры **Кәрим Яуышев:**

Башҡорт халҡының яҙмышы ғына түгел, башҡа халыҡтарҙың яҙмышы ла борсой беҙҙе. Халыҡтарҙы һаҡлау өсөн юридик гарантия кәрәк.

Татар ойошмаһынан **Марат Рамазанов:**

Автономиялы республикаларҙың сиктәрен үҙгәртеүгә юл ҡуймаҫҡа кәрәк. Беҙ татар халҡы күпселек йәшәгән райондарҙы бүлеп, икенсе республикаға ҡушыу йәки яңы берәмек барлыҡҡа килтереү түгел, ә был төбәктәрҙә татар телле башҡорттарҙың да барлығын иҫәпкә алып, татар теленә лә дәүләт статусы биреүҙе хәстәрләргә тейешбеҙ.

Марат Рамазановтың сығышы һәм татар теленә статус мәсьәләһен "имеш, башҡорттар мәнфәғәтенә" бороп ебәреүе башҡа милли ойошмалар етәкселәрен ышандыра биреп ҡуйҙы.

Бәхәс ҡыҙыу булмаҡсы. Әгәр өс телгә дәүләт статусы биреү өсөн бер генә тауыш артыҡ булһа ла, йәмәғәт ойошмалары шундай-шундай резолюция ҡабул итте, тигән хәбәр республика матбуғатында баҫылып сығыр ине. Артабан ни булыры ла билдәһеҙ... Был хәлгә юл ҡуйылһа, башҡорт ойошмаларының барлыҡҡа килеүенән, "башҡорт теленә дәүләт статусы!" тип алып барған көрәшенән ни фәтеүә? Ә бит йыйылышҡа килеүселәрҙең тәнәфес ваҡытында өймәкләшеп-өймәкләшеп һөйләшеп тороуҙарына ҡарағанда, Татар ижтимағи ойошмаһы вәкилдәренең байтаҡ тауышты үҙ яҡтарына ауҙарғандары һиҙелеп тора ине. Татар ойошмаһының: "Татар телле башҡорттарҙың да телдәренә дәүләт статусы бирергә кәрәк", – тип, бик оҫта ғына уйлап табылған һылтанмаһы, башҡа ойошма вәкилдәренең аңын томалап, тауыш арттырырға ынтылыуҙары көн кеүек асыҡ ине. Мәҫәлән, әсәһе башҡорт, әммә татар

телле Яуышев, йәки милләте башҡорт, әммә татар теллегә әйләнгән, башҡорт ҡыҙына өйләнгән Марат Рамазановтың татар телле балалары һәм башҡа шундай бик күптәр "телһеҙ мәхрүм ҡаласаҡ". Мари, сыуаш, немец, белорус, фин-уғыр, славян, әрмән һәм башҡа милли ойошма етәкселәренә ошо фекер һеңдерелгәйне. Тик йәһүд ойошмаһы вәкиле һәм тотош Дуҫлыҡ йорто рәйесе Шолом Кац ҡына улар менән бергә уралмай ине был йыйылышта.

Мансур Әнүәр улына был хаҡта иҫкәрттек һәм тәнәфестән һуң иң элек һүҙҙе миңә бирегеҙәрен һораныҡ. Сөнки һөйләшеүҙе башҡорт ойошмаһы башлағас, фекер алышыуҙы ла беҙ башларға тейеш түгел инек – һәр ваҡ-төйәктән шау-шыу сығырға ғына тора ине. Мансур Әюпов бик оҫта хәл итте. Һөйләшеүҙе ҡатын-ҡыҙҙан башлайыҡ, тип (*катын-кыҙҙарҙан бер үҙем генә инем*), һүҙҙе миңә бирҙе. Мин, республиканың бығӑса иғтибарҙан ситтә ҡалған райондарында халҡыбыҙҙың социаль-иҡтисади проблемаларын хәл итмәйенсә, тел мәсьәләһен күтәреү иртә. Шуның өсөн "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге сессияла тел мәсьәләһен ҡуймауҙы тәҡдим итә, тинем. Бәхәскә, ыҙғыш-талашҡа әҙерләнгән ойошма етәкселәре аптырап ҡалды, ни әйтергә белмәнеләр. М. Ә. Әюпов һүҙҙе Шолом Кацҡа бирҙе. Ул да минең фекерҙе яҡлап сыҡты һәм тауышҡа ҡуйырға кәрәклеген әйтте. Тәҡдим тауышҡа ҡуйылды һәм милли ойошмалар исеменән ҡабул ителде.

"Урал" үҙәге бер аҙҙан республикабыҙҙа сәйәси, иҡтисади, мәҙәни өлкәләрҙә хәл ителергә тейешле мәсьәләләр буйынса үҙ тәҡдимдәре менән брошюра сығарҙы ла Ельцинға, үҙ республикабыҙ етәкселегенә адресланы. Үҙебеҙ яҙҙыҡ, ә үҙебеҙ ышанмайбыҙ. Әкиәт кеүек ине барыһы ла. Шулай булырмы икән? Беҙ яҙғандарҙың дүрттән бер өлөшө генә хәл ителһә лә иҫ китмәле булыр ине бит! Әйтәйек, Бөрйән, Ейәнсура, Хәйбулла, Балаҡатай райондарына асфальт юл түшәтеү тураһындағы тәҡдим ысынлап та хыял ғына һымаҡ ине. Әгәр шул саҡта берәйһе: "Бөрйәнгә машина менән дүрт сәғәттә барып етәсәкбеҙ!" — тиһә, хыялый тип әйтер инек. Бөгөн ул ысынбарлыҡ!..

Дүрт бүлектән торҙо был Мөрәжәғәтебеҙ: дәүләт сәйәсәте һәм закондар сығарыу өлкәһе, социаль-иҡтисади өлкә, халыҡ мәғарифы өлкәһе һәм мәҙәниәт, сәнғәт өлкәһе. Ғалимдарыбыҙ түләүһеҙ-ниһеҙ был киң ҡоласлы эштә ғәжәп әүҙемлек күрһәтте. Нәжиб Вәлитов, Заман Мөфтиев, Мазһар Иҫәнбаев, Зөфәр Еникеев, Басир Мәһәҙиев, Нәжибә Мәҡсүтова, Мөсәлимә Хәйруллина, Мәрйәм Ғималова, Вакифа Хәйруллина, Хәмиҙә Байморатова, Дамир Вәлиев, Марат Ҡолшәрипов, Диас Йәнтүрин, Хәлил Барлы-

баев, Ирек Аҡманов, Әнүәр һәм Клара Әсфәндиәровтар, Марат һәм Румил Аҙнабаевтар, Зәки Хамматов, Зиннур Ҡотлобаев, яҙыусыларҙан Рәшит Шәкүр (*"Урал" үҙәге етәкселһе булараҡ, айырыуса әүҙем булды*), Рауил Ниғмәтуллиндар көнөн төнгә ялғанылар. Мөрәжәғәттәге һәр пункт ентекле тикшерелде. Ҡайһы бер ғалимдар үҙҙәре индергән тәҡдимде тормошҡа ашырыу буйынса ла әүҙем эш алып барҙы. Мәҫәлән, Дамир Вәлиев Сибайҙа үҙ аллы юғары уҡыу йорто асыу, Арғаяш һәм Ҡоншаҡ райондарын ҡайтанан Башҡортостанға ҡайтарыу тәҡдимдәрен индерҙе лә Сибайҙа юғары уҡыу йорто асыу тәҡдимен тормошҡа ашырыуҙа тос өлөш индерҙе.

Республиканың иҡтисады хаҡындағы бүлек буйынса Мазһар Насип улы Иҫәнбаев ең һыҙғанып эшләне. Ул СССР Фәндәр Академияһының Башҡортостан филиалында Иҡтисади тикшеренеү бүлегендә эшләй ине. 1990-1997 йылдарҙа БР Юғары Советы Президиумының социаль-иҡтисад бүлеге мөдире һәм Дәүләт йыйылышы Ҡоролтай рәйесенең кәңәшселһе булды. Ҡайҙа ғына эшләмәһен, үҙен борсоған төп мәсьәлә йүнәлешендә алып барҙы эшмәкәрлеген. Ә был мәсьәлә — республикабыҙҙа социаль-иҡтисад үҫеш кимәленең күҙгә ташланып торорлоҡ сыбар булыуы. Башҡорттар күпселек тәшкил иткән төбәктәрҙең артта ҡалыуы, етештереү көстәренең рациональ урынлашмауы ине. Мазһар Иҫәнбаев ҡайҙа, ниндәй генә вазифа биләмәһен, үҙенең төп йүнәлешенә тоғро ҡалды һәм Башҡортостанда етештереү тармағын комплекслы үҫтереү һәм был йәһәттән социаль мәсьәләләрҙе иҫәпкә алыу буйынса мөһим ҡулланма булырлыҡ хеҙмәттәр яҙҙы.

Мөрәжәғәт эшләгән саҡта, бәхәсле мәсьәләләр ҙә байтаҡ булды. Әйтәйек, ҡайһы бер йәштәр республиканың үҙ аҡса билдәһен индерергә һәм республиканың ғәскәрен булдырырға тигән мәсьәлә күтәрҙе. Аҡса билдәһе булдырыу тәҡдиме кире ҡағылһа ла, ҡыҙыу бәхәстәр менән ғәскәр булдырыу тигән тәҡдим үтеп китте. Тап ошо тәҡдим башҡарылған байтаҡ эштәрҙе юҡҡа сығара яҙҙы, урындағы ойошмаларҙың эшенә кире йоғонто яһаны, сөнки башҡа милләт вәкилдәре райондарҙағы ойошмаларыбыҙҙы, һеҙ үҙ ғәскәрегеҙҙе булдырып, беҙҙе республиканан ҡыуырға уйлайһығыҙ икән, беҙ улай булғас, суверенлыҡҡа ҡаршыбыҙ, тип, аптыратып бөткәндәр. Әлбиттә, оло проблема хәл ителгән саҡта ҡыҙыу бәхәстәр килеп сығыуы билдәле. Ләкин ошондай сетерекле мәсьәләләрҙе хәл иткән саҡта, һәр ваҡыт үҙебеҙҙең процент нисбәтенән сығып, башҡаларҙың фекеренә иҫәп тотоп һәм шул уҡ ваҡытта башҡорт халҡының республикаға исем биреүсе халыҡ булыуын һәм,

республикабыҙ йәшәһен тиһәк, иң элек башҡорт мәнфәғәте хәл ителергә тейешлеген онотмай ҡарар ҡабул итеүҙә Рәшит Шәкүрҙең оҙон-оҙаҡ уйлап эш итеүе ыңғай һөҙөмтә бирә килде. Тик яндырайланып, дыуамалланып, тотҡан урындан һындырырға яратыусылар Рәшитте эш белмәүҙә, ығышыуҙа, ҡарар ҡабул иткәндә аҡрын ҡуҙғалыуҙа ғәйепләп маташтылар. Ығышмы-түгелме, бөгөн килеп ул йылдарҙа башҡарылған эштәргә күҙ ташлаһаң, иҫ китмәле. Әлбиттә, объектив сәбәптәр арҡаһында тормошҡа ашмай ҡалған тәҡдимдәребеҙ ҙә байтаҡ әле. Улар Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайҙарында яңынан ҡуҙғатылды, мөрәжәғәттәр, ҡарарҙар ҡабул ителде.

Ғәмле зыялыларыбыҙҙың үҙ тәҡдимдәрен тормошҡа ашырыу өлкәһендә күп көс һалыуы тураһында әйткәйнек инде. Мөхәммәт Иҫҡужин, Иҙел Агишевтар башҡорт мәктәптәре һәм балалар баҡсалары астырыу буйынса арымай-талмай эш алып барҙылар. Үҙ тирәләренә ярһыу йөрәкле патриоттарҙы тупланылар.

1990-1992 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһы Юғары Советы Рәйесе Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе Рәшит Шәкүрев менән мине бер нисә тапҡыр үҙенә саҡырҙы. Беҙ үҙебеҙ генә лә, район вәкилдәре менән дә, ғалимдар менән дә барғыланыҡ. Республиканың киләсәге, уның статусы хаҡында фекер алышыуҙар була торғайны. Шундай осрашыуҙарҙың береһендә М. Ғ. Рәхимов Ельциндың килергә тейешлеген әйтте. Бындай ҡатмарлы ваҡытта баҫалҡылыҡ, иплелек һаҡлайыҡ, — тине.

— Ельцин ун ике августа Өфөлә була. Стәрлетамаҡҡа, Нефтекамскиға бара, Нефть һәм химия предприятиеларын ҡараясаҡ, аграрниктар менән осрашасаҡ, — тине М. Ғ. Рәхимов. Мортаза Ғөбәйҙулла улы статус тураһында Ельцинға, Лукьяновҡа ике хат ебәреүен һәм унда тәҡдимдәрен индереүен әйтте.

Үҙәккә буйһоноумы, РСФСР-ғамы — халыҡ үҙе хәл итер, тигән фекер үткәрҙем, тине. Суверенлыҡ мәсьәләһендә республикабыҙҙа күпселек тәшкил иткән рустарҙың икеләнеүе, хатта ҡаршы сығыуы ла ихтимал. Суверенлыҡ уларҙы республикала йәшәүҙән мәхрүм итәсәк, тип уйлаусылар бар. Сөнки башҡа региондарҙа шундай хәл күҙәтелә. Шуға күрә бик һаҡ эш итергә, суверенлыҡ хаҡында башҡорттарға ғына түгел, башҡа халыҡтарға ла, бигерәк тә рустарға аңлатыу зарур.

М. Рәхимов менән осрашыуҙарға беҙ райондан килгән вәкилдәрҙе лә, ғалимдарыбыҙҙы ла алып инә торғайныҡ, тигәйнем. Был юлы ғалим-философ Дамир Жәүәт улы Вәлиев менән бергә барҙыҡ.

Фекер алышыуҙа ер мәсьәләһе ҡуҙғатылды.

— Ер һатыу булмаясаҡ, — тине Мортаза Ғөбәйҙулла улы. — Ер — ул Башҡортостандың милке. 1991 йылдың 1 ғинуарынан башлап министрлыҡтар үҙгәртеләсәк, шул саҡта ер мәсьәләһенә лә ҡарашты нығытасаҡбыҙ.

Байтаҡ райондарҙа башҡорттарҙың йәшәү кимәленең сағыштырмаса түбән булыуы хаҡында ла һүҙ барҙы.

— Күп осраҡта үҙебеҙ ғәйепле. Культуралы йәшәп өйрәнергә ваҡыт, – тигән теләгән дә әйтеп ҡуйҙы.

Дамир Вәлиевтың һәр саҡ һәм ғүмере буйы әсенер проблемаһы — Арғаяш-Ҡоншаҡ мәсьәләһе хаҡында ла фекер алышыу булды.

— Әле генә өҙөп бер ни ҙә вәғәҙә итә алмайым. Хәл ителмәгән мәсьәләләр бик күп. Беренсе бурысыбыҙ — суверенлыҡ яулау. Артабан тел мәсьәләһен дә, башҡаларын да яйлап хәл итә барырбыҙ. Әле бик ҡатмарлы осор. Баҫалҡы булайыҡ, — тине М. Рәхимов.

Был осорҙа Коммунистар партияһының роле һаман кәмей барҙы. Башҡортостан Ельцинды көттө. Ул Татарстанға килде. Унда Ельцинды йылы ҡаршылауҙары, ихтирам билдәһе итеп бик матур эшләнгән татар түбәтәйе кейҙереүҙәре хаҡында хәбәрҙар булдыҡ. Ағас ҡурай эшләү оҫтаһы Вәкил Шөғәйеповтан "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге исеменән махсус ҡурай эшләтеп алдыҡ һәм елән әҙерләнек. Ниһайәт, Ельцин килде. Август айының матур, йылы, ҡояшлы көнө. Фрунзе урамында беҙ ултырған бина ҡаршыһында халыҡ йыйылды, митинг ойошторолдо. Мин башҡорт халҡы исеменән елән менән ҡурай бүләк иттем. "Бындай ҡиммәтле бүләкте алмайым, ә бына ҡурайҙы алам, тик нисек уйнайҙар уны?", — тип һораны Борис Николаевич Ельцин. Мин, өрөп уйнарға кәрәк, тигәс, өрөп ҡараны. Ошо мәлдә фотоға һәм телевидение фильмына төшөрөп алғандар (*1995 йылда нәшер ителгән М. Әюпов мөхәррирлегендә нәшер ителгән Башҡортостан тигән китапҡа был фото-кадр индерелгән*). Яҙыусылар Союзы рәйесе Динис Бүләков хәстәрлеге менән Борис Ельцин менән осрашыу ойошторолдо. Осрашыу шул ук бинала булды. Күренекле әҙиптәр, ғалимдар исемлек буйынса ғына саҡырылды. Рәшит Шәкүр менән мин дә ҡатнаштым, һәм күңелем ҡайтып сыҡты. Беренсенән, Ельцин менән осрашыу барышында абруйлы ағайҙар республиканың социаль, мәҙәни проблемалары тураһында әсенеп-әсенеп һөйләне, тәҡдимдәр әйтте. Ә Ельцин тыңлап та бирмәне. Күҙ ҡарашында бер генә лә ихласлыҡ та, ҡыҙыҡһыныу ҙа тойолманы. Абруйлы һәм дәрәжәле ағайҙарҙы бик йәлләнем. Улар республика, халыҡ яҙмышы проблемаларын хәл итеү буйынса эшлекле һөйләшеүгә

әҙерләнеп, өмөтләнеп килгәйнеләр. Мостай Кәрим, Ғайса Хөсәйенов, Ғәзим Шафиҡов, Булат Рафиҡов, композиторҙарҙан Заһир Исмәғилев, ғалимдарҙан Зиннур Ураҡсин, Нәжип Вәлитовтар бар ине.

Мин Ельцинға бүләккә тәғәйенләнгән, әммә ул ҡабул итмәгән еләнде тотоп ингәйнем һәм, күҙ алдында тормаһын тип, өҫтәл тартмаһына тығып ҡуйғайным. Осрашыу тамамланғас, арттараҡ ҡалып, еләнде рәтләп торһам, Ельцин сығып барған еренән кире боролдо ла:

— Вы где работаете? — тип һораны.

— В башкирском центре "Урал".

— Вы читаете мою "Исповедь"?

— Читаю.

— Так вот, переведите и напечатайте. Гонорар берите сами.

Башта бик күп аңлашылмаусанлыҡҡа асыҡлыҡ индергән, юғары эшелон тормошо хаҡында асыҡтан-асыҡ тәнҡит күҙлегенән яҙылған был әҫәр ҡыҙыҡ һымаҡ тойолғайны миңә. Аҙаҡ инде ул асыҡлыҡтың юғары кимәлдәге ләстит һатыуға әйләнә барыуы менән ялҡыта башлағайны. Бәлки берәй эшлекле тәҡдимдәргә күсер, тиған өмөт менән генә "Исповедь"тең "Комсомольская правда"гәзитендә баҫылып сыҡҡан һәр һанын уҡый барҙым. Әммә өмөт һаман аҡланмай ине. Ельциндың үҙен күргәс, ни өсөн шулай икәнлеге аңлашылды. Ә халыҡтың уға өмөтө шул тиклем ҙур булды, аҙ ғына шик һалыу ҙа демократик үҙгәрештәргә өмөтләнгән ышаныс ҡанаттарын һындырыр ине. Беҙ, Ельцин менән осрашыуҙа ҡатнашҡан бер нисә яҙыусы һәм "Урал" үҙәге идара ағзалары, һөйләшеп-килештек тә етәксенән төңөлөүебеҙ хаҡында өндәшмәҫкә булдыҡ. Ә үҙебеҙҙең күңелдә тәрән бушлыҡ урынлашты. Ошондай етәкссе идаралыҡ иткән шарттарҙа бар мөмкинлеген, көсөн, ҡеүәтен республикабыҙ үҫеше өсөн һалған Мортаза Ғөбәйҙуллә улының эшмәкәрлеге баһалап бөткөһөҙ, әлбиттә. Тарих өсөн бик ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә хыял итергә лә ҡурҡҡан күпме үҙгәреш булды төйәгебеҙҙә.

Ельцин менән һөйләшеүҙе күреп ҡалған егеттәр минән:

— Айыу ҡолағыңа нимә әйтте? — тип көлөшөп һораштылар.

Мин Ельциндың тәҡдимен әйттем.

— Ни эшләп, уйлап ҡарарға кәрәк, — тине кемдер. Аҙаҡ кем нимә хәл иткәндер — белмәйем, әммә мин был эшкә тотонманым. Башҡалар ҙа тотонмағандыр, "Исповедь" башҡорт телендә донъя күрмәне.

Ошо заманда халыҡ аңына төрлө фекер һалырға тырышыусы-

лар күп булды. Башҡорттарҙың башҡа милләт вәкилдәрен "кәмһетеүҙәре, ҡыҫырыҡлауҙары", бөтә республикала "башҡортлаштырыу" сәйәсәте алып барылыуы, әгәр Башҡортостан милли суверенитет формаһы алһа, башҡа милләт вәкилдәрен ҡыуа башлаясаҡтар, тигән уйҙырмалар тараттылар, ялған фекер ҡуйыртттылар, туҡтауһыҙ Мәскәүгә яҙҙылар. Мин Мәғариф министрлығында милли мәктәптәр бүлегендә эшләгән саҡта, татар мәктәптәре асыуға ҡамасаулай тип, минең фамилияны ла ҡыҫтырып яҙғайнылар, министр Р. Т. Гарданов был ялыуҙы тулыһынса кире ҡаҡты һәм миңә һүҙ тейҙертмәне. Татар мәктәптәре астырмайҙар, татар балаларын көсләп башҡортса уҡыталар, тигән уйҙырмалар ҙа байтаҡ булды. Ышандыра алмаһалар, илауға күстеләр, зарландылар. Мәскәү гәзитендә, КПСС Үҙәк Комитеты секретары Лигачев докладында ла, Башҡортостанда башҡорттар татарҙарҙы ҡыҫырыҡлай икән, тигән фекерҙәр ҙә әйтелде. Әммә халыҡ аңына үҙгәреш индерергә маташыу барып сыҡманы, сөнки рус халҡы ла, татар халҡы ла республиканың үҙаллылыҡ статусы алыуы бөтә милләттәр өсөн дә һәйбәт буласаҡлығы хаҡында төплө информациялар ала торҙо. Тик Мәскәүҙән комиссиялар килеп, Мәғариф системаһында тикшереүҙәр үткәреп, нисә башҡорт мәктәбе, нисә татар мәктәбе барлығын иҫәпләп йөрөнө. Бугаева фамилиялы ханым етәкселегендә бер комиссия милли ойошмаларҙың вәкилдәре менән осрашыу үткәрҙе һәм Башҡортостан республикаһынан килгән ялыуҙаты менән таныштырҙы ла ундағы факттарҙың дөрөҫләнеүен әйтте. Мәғлүмәттәрҙе ул Мәғариф министрлығы һандарынан алғайны. 28 процент тәшкил иткән татарҙарҙың мәктәптәре һаны егерме ике процент самаһы тәшкил иткән башҡорттар уҡыған мәктәптәр һанынан аҙыраҡ, тине ул. Шуға мин һүҙ һорап, үҙ фекеремде әйттем:

— Һеҙ мәктәптәр һаны буйынса фекер йөрөтмәгеҙ. Уҡыусылар һанына иғтибар итегеҙ. Сөнки бик күп башҡорт ауылдары бәләкәй, тимәк, мәктәптәре башланғыс ҡына. Өҫтәүенә, иҫәпкә индерелгән ошо башланғыс мәктәптәрҙән һуң уҡыуҙарын рус мәктәптәрендә генә түгел, татар, сыуаш телендә дауам иткән башҡорттар ҙа байтаҡ.

— Фекерегеҙҙе ниндәй дәлилдәр менән раҫлай алаһығыҙ? – тип һораны Мәскәү вәкиле.

— Миҫал килтерәм, – тинем. – Күгәрсен районының Күгәрсен ауылында татар урта мәктәбе бар. Тирә-яҡтағы бәләкәй-бәләкәй башҡорт ауылдарында фәҡәт башланғыс мәктәптәр генә. Ошо

башланғыс мәктәп балалары артабан уҡыуын татар мәктәбендә дауам итә. Татар мәктәбендә өс йөҙҙән ашыу бала уҡый, бер мәктәп, тип иҫәпкә инә, йәмғеһе егерме өс уҡыусыһы булған өс башҡорт ауылы мәктәптәре өс мәктәп булып иҫәпләнә. Башланғыс кластарҙа башҡортса уҡытып, аҙаҡ татар, рус, хатта сыуаш урта мәктәптәрендә уҡытыуҙы дауам иттертеүсе РОНО мөдирҙәре Ауырғазы, Шишмә, Ғафури һәм башҡа райондарҙа ла осрай, — тинем. Мәскәү комиссияһы етәксеһе Бугаева мин әйткән фактҡарҙы Мәғариф министрлығында РОНО-ларҙың отчет документтарын ҡарап, ышанып, Татар ижтимағи ойошмаһының Мәскәүгә яҙған ялыуындағы фактҡарҙың дөрөҫләнмәүен күреп ҡайтты.

Шул уҡ ваҡытта Ростовта шағир Айҙар Хәлим сценарийы буйынса "документаль" фильм төшөрөлгән һәм Үҙәк телевидение аша күрһәтеүҙе планлаштырғандар. Планға индереүселәр был фильмдың йөкмәткеһен белмәгәндәрҙер һәм ниндәй һөҙөмтәгә килтеререн уйламағандарҙыр ҙа, бәлки. Беҙ иһә, башҡорт менән татар халыҡтары мөнәсәбәтенә Айҙар Хәлимдең ни тиклем кире йоғонто яһарға ынтылғанлығын белә инек, шуға ла был фильмды күрһәттереүгә ҡырҡа ҡаршы булдыҡ. Әйтергә кәрәк, татар халҡы вәкилдәре үҙҙәре лә Айҙар Хәлимдең сығыштарына, аслыҡ иғлан итеп маташыуына кире мөнәсәбәттә булдылар һәм ошо фильмдың күрһәтеләсәге, татарҙарҙың был хаҡта белеүе һәм көтөп йөрөүҙәре, ә телевидение программаһына фәҡәт "Документаль фильм" тип кенә индерелеүе хаҡында үҙҙәре үк иҫкәрттеләр һәм хатта "Ростовфильм"дың ошо фильмды төшөрөүе хаҡында яҙылған журналды алып килеп тотторҙолар. Беҙ журналдағы ошо белдереүгә таянып, Партияның Үҙәк Комитетына, Үҙәк телевидениеға телеграммалар ебәрҙек һәм был фильмды күрһәтеүҙе тыйыуҙарын һораныҡ. Беҙгә ыңғай яуап килде. Фильм күрһәтелмәне. Аҙаҡ башҡорт, рус, татар, сыуаш, немец, еврей, белорус, украин милли ойошмаларын берләштергән Халыҡтар дуҫлығы үҙәгенә, уның рәйесе Шолом Кацка мөрәжәғәт иттек һәм фильмды тәүҙә Дуҫлыҡ йортонда ҡарау һәм фекер алышыу ойошторолоуын талап иттек. Һәр милли ойошманан икешәр вәкил ҡатнашлығында фильм ҡарау һәм фекер алышыу булды. "Аҡ тирмә"нән Басир Мәһәҙиев менән мин барҙым. Фильмды ҡараныҡ. Бәлки, программаға индерелеп тә, күрһәтелмәгән фильмдың йөкмәткеһе менән ҡыҙыҡһыныусылар булыр. Аҙ ғына туҡталайым.

Фильмды "Ростовфильм" студияһы төшөргән. Ямғырлы, бысраҡ көндә Айҙар Хәлим нефть вышкаһы янында ниҙер эшләй. Баҡһаң, Башҡортостанда йәшәүсе күренекле һәм билдәле татар

шағиры үҙенең классика кимәлендәге әҫәрҙәрен нәшер итә алмағанлыҡтан, ныҡ бөлгән һәм, ғаиләһен туйҙырыу маҡсатында, ошондай ҡара эштә йөрөргә мәжбүр икән. Ғөмүмән, башҡорт булмаһаң, Башҡортостанда йәшәү бик ауыр. Артабан был фекерҙе раҫлар өсөн, бер нисә татар кешеһенән үҙ балаларын көслəп башҡортса уҡытыуҙары, татарҙарҙы башҡортлаштырырға маташыуҙары тураһында һөйләттеләр һәм Башҡортостанда ҡыҫырыҡланған татар шағирының тормошо менән сағыштырыу өсөн Тайфур Сәғитовтың эш һәм йәшәү шарттарын күрһәттеләр. Иркен фатир, кабинет, бай китапхана. Сәғитов башҡорт булғаны өсөн уға бөтөн шарттар тыуҙырылған. Фильмда Башҡортостанда йәшәүсе татар әһелдәренең үҙ телдәрендә ижад итеү мөмкинлеге юҡлығы, ҡыҫырыҡлауға дусар ителеүҙәре төп тема ине. Илау, зарланыу, башҡорттарға ҡарата нәфрәт тулы фильм ине был.

Фекер алышыуҙа, ғәҙәттә, иң тәүге фекер йүнәлеш бирә. Тик ул уйланылған, төплө, нигеҙле һәм кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр менән тулы булырға тейеш. Мин ныҡ әҙерләнгәйнем. Башҡортостанда татар телендә нисә өлкә һәм район гәзите, нисә журнал сығарылыуы, нисә татар уҡыусыһының үҙ телендә белем алыуы һәм башҡа шундай дәлилдәр әҙерләп килгәйнем. Шуны иҫәпкә алып, беҙ быға са һар саҡ отошло булған алымды файҙаландыҡ — Басир Мәһәҙиев Кацка: "Әйҙәгеҙ, бында ҡатнашыусы берҙән-бер ҡатын-ҡыҙҙан башлайыҡ фекер алышыуҙы", — тигән тәҡдим индерҙе. Кац һәр ваҡыттағыса Басир Мәһәҙиевтың һүҙен хупланы, һәм башлап мин һөйләнем. Айҙар Хәлимдең алдан әҙерләп ҡуйған кешеләре был мәғлүмәттәрҙе ишетеп аптырап китте, фильмдың йөкмәткеһенә ҡарата шик тыуа башланы. Ошондай икеләнеүҙәр башланғас, Басир Дәүләт улы Мәһәҙиев бик объектив аҡыллы йомғаҡлау һүҙе әйтте һәм фильмды күрһәтеүҙе тыйырға тигән тәҡдим индерҙе. Күпселек тауыш менән беҙҙең тәҡдим ҡабул ителде.

Республиканың Юғары Советы 1990 йылдың 11 октябрендә Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул итте, тип әйтеү еңел. Уға саҡлы күпме бәхәстәр, күпме фекер алышыуҙар, хатта ҡайһы бер экстремистарҙың янауҙары булды. "Башҡортостанға – союздаш республика статусы" тигән талапты хуплаған ҡултамғалар йыйған саҡта, райондарҙан күпме ҡаршы хаттар һәм хаттар менән бергә янауҙар, "Кесе Башҡортостанығыҙға кире тупланығыҙ!" тигән сығыштар булды. Төрлөсә, төрлө юлдар менән ҡыҙҙырып ебәреү, сығырҙан сығарыу ысулдары файҙаланып маташтылар. Беҙ баҫалҡылыҡ һаҡланыҡ.

Ошо уңай менән бер ваҡиға хаҡында яҙып китәйем. Шәхси мунса инеп, башыма еҫ тейҙе. Ашығыс ярҙам саҡырҙыҡ. Утыҙ-утыҙ биш йәштәр самаһындағы ир врач укол яһаны ла карточка тултырырға ултырҙы. Гөлнур ҡыҙым уның янында.

— Фамилияғыҙ нисек?

— Бураҡаева.

Осраҡлы килгән ашығыс ярҙам врачы:

— Әллә теге бунтарь Бураҡаевамы? — тип аптырап китте.

Бындай һорауҙан һуң мин больницаға китмәнем. Шуны әйтке килә, хатта ни тиклем баҫалҡылыҡ, объективлыҡ һаҡларға тырышһаҡ та, ошондай фекерҙәр таратыла ине.

Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителәсәк сессияла "Татар теленә – дәүләт статусы" тигән тәҡдимде хупларға тип, митинг үткәрелде. Совет майҙанында митинг үткәреү өсөн рөхсәтте Татар ижтимағи үҙәге алғайны. Татар ойошмалары исеменән бер нисә кеше сығыш яһаны һәм татар теленә лә дәүләт статусы бирергә кәрәклегенә баҫым яһалды. Митингыла Башҡорт йәштәре ойошмаһы әүҙем ҡатнашты. Етәксеһе Ринат Байымов ине. Татар ойошмаһы әһелдәре сығыш яһағандан һуң, Ринат трибунаға сыҡты ла: "Трибунанан сығыш яһау халыҡ фекере тигән һүҙ түгел. Митингыла башҡорттар ғына. Һеҙ нисек татар халҡы исеменән резолюция ҡабул итә алаһығыҙ?" — тине. "Митингыла татарҙар ғына!" – тип, уға ҡаршы сыҡтылар трибунала торған татар егеттәре. "Татар халҡы исеменән һөйләргә хаҡығыҙ юҡ. Улар һеҙҙе хупламай", — тип үҙ һүҙен бирмәй ныҡышты Байымов. Шунан оҙаҡ уйлап торманы, митингыла ҡатнашыусыларға мөрәжәғәт итеп: "Башҡорттарым! Әйҙәгеҙ, Салауат Юлаев янына!" – тип, "Башҡортостан-гөлбостан"ды йырлап ҡуҙғалғайны, ысынлап та, митингыла ҡатнашыусылар тотош уның артынан эйәрҙе. Был күҙҙәргә йәш төйөлөрлөк иҫ китмәле матур күренеш ине. Майҙан тулып йәштәр ҡуҙғалды. Митингыла унлаған ғына кеше тороп ҡалды. "Башҡортостан-гөлбостан" тигән йырҙы көслө тауышлы Ринат Байымов башлай, бөтә майҙан уға ҡушыла. Иң алда (*ул саҡта рәсми раҫланмаған*) өс төҫлө байраҡты юғары күтәреп оҙон һомғол буйлы, ялҡынлы йөрәкле (*Көйөргәҙе егете*) Спартак Хөсәйенов бара. Был ярһыу тулҡын Өфө урамдарын тултырып Салауат Юлаев һәйкәле янына килде һәм, 1919 йылды хәтерләтеп, Бабич шиғырҙары яңғыраны, өс төҫлө байраҡ елберләне. Саяраҡ егеттәр Салауат Юлаев һәйкәле алдына баҫып: "Һин хыялланған азатлыҡ килә, Салауат!" — тип ҡысҡыра, уйын-көлкө башлана. Халыҡ хәрәкәтендә лә, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгендә лә һәр саҡ әүҙем

Дауыт Сәғитов йәшәреп киткәндәй, әле лозунг ҡыҫҡыра, әле йырға ҡушыла. Уның ҡыуаныстан балҡып киткән йөҙөнә ҡарап, шағир Сәләмдең "ситлектәге ыласын ҡоштоң йәшәреүе, яңынан тыуыуы" тураһындағы шиғыр юлдары иҫкә төшөп китте.

Иртәгәһен сессия барған бина янында халыҡ тағы ла күберәк йыйылды. Райондарҙан бик күп килгәйнеләр. Транспаранттар, лозунгылар һәм плакаттар бик сыбар ине, әлбиттә. "Рус һәм башҡорт теленә дәүләт статусы", "Башҡорт, рус һәм татар телдәренә дәүләт статусы" тигән лозунгыларҙан башлап, "Суверенитет тураһында декларация өсөн персональ тауыш бирегеҙ!" тигән талаптар ҙа ҡуйылды. Депутаттар халыҡ тулған "коридор" аша үтә. Митингыла ҡатнашыусылар уларға: "Суверенлыҡ тураһында декларация ҡабул итмәһәгеҙ, был бинанан сығармайбыҙ!" — тип, ярым шаярып, әммә үҙ фекерҙәрен белгертеп ҡалалар. Беҙ сессия барған бинала үҙ бүлмәбеҙҙә ултырабыҙ. Тышта йыйылған халыҡ менән сессияла ҡатнашҡан депутаттар араһында бәйләнеш булдырабыҙ. Сессияла ҡатнашыусы депутаттар араһында "Урал" үҙәге менән тығыҙ бәйләнештә булған депутаттарҙан Ишморат Абайҙуллин, Гүзәл Ситдиҡова, Ризуан Хажиевтар даими рәүештә беҙҙең янға инеп, хәл менән таныштырып китәләр. Беҙ был турала тиҙ генә листовкалар эшләйбеҙ ҙә тыштағыларға тапшырабыҙ. Хупларғамы, хупламаҫҡамы — хәбәр биреп торабыҙ. Фәҡәт сессияның икенсе көнөндә генә урам яғында ла трансляция булдырылды.

Башҡорт ойошмаларының үҙ эсендә лә фекер айырымлыҡтары булды. Шунһыҙ булмай ҙа. Төрлө фекерҙәрҙең тыуыуы тәбиғи хәл. Беҙ, "Урал" үҙәгендә даими эшләүселәр, Министрҙар Кабинеты менән тығыҙ бәйләнештә булдыҡ. Юғары органдарҙағы фекерҙәр менән хәбәрҙар инек һәм, халыҡ фекерен дә иҫәпкә алып, самалап, уртаҡ фекергә килеүҙе дөрөҫ тип таба торғайныҡ.

Митинг ваҡытында ғәжәп аҡыллы аҙым яһаған Ринат Байымов менән бер мәсьәләлә фекер айырымлығы барлыҡҡа килде. Ул урындағы ойошмаларға, тирмәләр тейәп килеп, сессия бараһы бина янында тирмәләр ҡороп, усаҡ ягып, төндө шунда үткәрергә саҡырып, телеграммалар ебәргән. Беҙ был хаҡта белмәнек. Бер саҡ бина янына машина килеп туҡтап, тирмә бушаттылар, Бөрйән районынан тинеләр. Беҙ аптырап киттек. Уғаса булмай, телефондан ундағы башҡорт ойошмаһы активисы Мәрйәм Ҡәҙерғолова, тирмә алдығыҙмы, усаҡлыҡ тағанды, ҡаҙанды үҙебеҙ тейәп, иртәгә килеп етәбеҙ, тип шылтыратҡас, аптырап киттек. "Кем күрһәтмәһе буйынса киләһегеҙ?" – тип һорайым. "Ринат Байымов телеграмма бирҙе", — ти. Беҙ тиҙ арала "Урал" үҙәге исеменән бөтөн

ойошмаларға ла хәбәр ебәрҙек. 10-сы октябрҙә ойоштороласаҡ демонстрацияға саҡырҙыҡ һәм бәләкәй ҡоролтай үткәрәсәгебеҙ хаҡында иҫкәрттек, тирмәләр тейәп килеүҙе ҡәтғи тыйҙыҡ. Ринат быны ишетеп ҡалып, асыуланып килеп инде. "Ринат, аңла, әгәр шулай итәбеҙ икән, башҡаларҙы үҙебеҙгә ҡаршы ҡуясаҡбыҙ. Суверенитет башҡорт халҡы өсөн генә түгел, Башҡортостанда йәшәүсе бөтә халыҡтар өсөн дә" тигән фекеребеҙҙе юҡҡа сығарасаҡбыҙ", — тип аңлатып ҡарайбыҙ. Әммә йәш, ҡыҙыу ҡан беҙҙе ҡартайыуҙа, йәштәрсә фекер йөрөтә белмәүҙә ғәйепләне. Бындай оло мәсьәләне хәл итеү алдында торғанда, дыуамал, яндырай булыуҙың ярамағанлығын аңлатабыҙ. Йәштәр ойошмаһы менән "Урал" араһында фекер айырымлығы барлыҡҡа килде. Фекер айырымлыҡтары, әйтеп үтеүемсә, "Урал" үҙәге идараһы ағзалары араһында ла булғылап торҙо. Сөнки үтә киң масштаблы, тәрән проблемалар килеп тыуа торғайны һәм, дөрөҫ ҡарарға килеп, халыҡҡа таратып ебәреүҙә "Урал" үҙәге төп ролде уйнай ине. Үҙәктең Башҡортостан территорияһы һәм күрше өлкәләрҙәге башҡорттар йәшәгән төбәктәрендә, хатта Ҡаҙағстан, Үзбәкстан республикаларында ла ойошмалары эшләй ине. Алма-Атанан бер төркөм ғалимдарға суверенлыҡ мәсьәләһен яҡлап матбуғатта сығыш яһауҙарын һорап хат яҙҙыҡ. Был хатта ла сәйәси яҡтан дөрөҫ йүнәлеш күрһәтеү мөһим ине. Унда йәшәүсе ғалимдарыбыҙҙан бер туған геолог Айһылыу менән Көнһылыу Каймирасовалар беҙгә актив ярҙам итәләр ине. "Совет Башҡортостаны" гәзитендә Алма-Ата ғалимдарының суверенлыҡты яҡлап бик матур хат-мөрәжәғәттәре баҫылды. Район ойошмалары, Ырымбур өлкәһендәге өс ойошма, Сургут, Татарстандағы башҡорт ойошмалары, Сыуашстан, Удмуртия һәм башҡа төбәктәр менән хатлашыуҙа аҙ ғына яңылышлыҡ арҡаһында ла ҙур хаталарға юл ҡуйылыуы ихтимал ине. Шуның өсөн һәр ваҡыт ныҡ уйланылған, айыҡ фекерле, дөрөҫ йүнәлешле күрһәтмәләр кәрәк ине. Халыҡ менән осрашыу өсөн ҡайҙа ғына саҡырманылар. Республиканан ситтәге халыҡ ойошмалары ла саҡыра торғайны. Ул йылдарҙа Ташкент, Алма-Ата ҡалаларында ойошмалар әүҙем эшләп алды. Тиҙ арала концерт бригадалары ойоштороп, сәйәси яҡтан ныҡ әҙерлекле кешеләрҙе ебәрә торғайныҡ.

Унынсы октябрҙә үткәрелгән бәләкәй ҡоролтайҙа башҡорт теленә дәүләт статусы мәсьәләһендә ҡыҙыу бәхәс башланды. Дамир Вәлиев был проблеманы бер юлы ошо уҡ сессияла хәл итеү яғында булды. Бер ҡалһа, ҡаласаҡ, тип ныҡышты. Беҙҙе, бер төркөм идара ағзаларын, ярамһаҡланыуҙа ғәйепләне, сөнки беҙ тел мәсьәләһен ҡуҙғатмаҫҡа тигән фекерҙе таратып ебәргәйнек. Хатта депутаттар-

ҙың адрестарын алып, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге идараһы исеменән һәр береһенә хат яҙғайныҡ. Уның йөкмәткеһе шулай ине: башҡорт халҡының әлеге көндә социаль-иҡтисади мәсьәләһе ауыр хәлдә. Юл, газ, торлаҡ мәсьәләләре хәл ителмәгән, мәктәптәр иҫке биналарҙа. Шуның өсөн беҙ тел мәсьәләһен күтәрмәүҙе хуп күрәбеҙ, тип яҙҙыҡ.

Ундай ҡатмарлы ваҡытта тел мәсьәләһе ҡуйылһа, оло бәхәс сығып, суверенитет мәсьәләһе хәл ителмәүе бик тә ихтимал ине. Шуға күрә беҙ төп маҡсатты иң элек үҙаллылыҡ яулауҙа күрҙек. Бөгөнгө көн беҙҙең был аҙымыбыҙҙың дөрөҫлөгөн иҫбат итте.

Гәзиттәрҙә лә ошо фекер үткәрелде."Замандаш" гәзитен Дауыт Хәйретдинов Малаязда яңғыҙы сығара ине. "Воля" тигән гәзит сыға биреп ҡалды. Гәзиттәр ҙур роль уйнаны. Бигерәк тә рус телле башҡорттар өсөн рус телендә мәҡәләләр биреү отошло булды. Сөнки рус телендә сыҡҡан башҡа гәзиттәр, күп ваҡыт мәсьәләләрҙе объектив сағылдырмайынса, фәҡәт башҡорттарҙы экстремизмда ғәйепләгән мәҡәләләр баҫҡыланылар.

"Урал" башҡорт халыҡ үҙәгендә, нигеҙҙә, үҙ теләктәре менән йөрәктәре ҡушыуы буйынса эшләгән ғәмле егеттәребеҙ булды. Тулыһынса ошо үҙәк эшен генә алып барып, эш хаҡы алып эшләүселәрҙән мин, Рита Яҙыҡбаева һәм бухгалтер ине. Айырыуса әүҙем эшләүселәргә йәки ҡатмарлы документтар эшләүҙә ҡатнашыусыларға, хәлебеҙгә ҡарап, аҡсалата бүләкләүҙәр эшләнек, әммә уларҙың күбеһе баш тарта торғайны. Командировкаға барыусыларға юл сығымдарын ҡапларлыҡ ҡына түләнек. Ҡайһы берҙәре ашау өсөн дә алмай торғайны. (*Әммә аҡсалата ярҙам һорап килеүселәр ҙә, халыҡ аҡсаһын бушлай ашап ятаһығыҙ, тип битәрләп тә китеүселәр булғыланы. Уларына беҙ бер аҙ хыялыйланған кешегә ҡараған кеүек мөнәсәбәттә булдыҡ*). Эш күплегенән, кешеләрҙең күп килеүенән, туҡтауһыҙ телефондан һөйләшеүҙән, һәр ваҡ ҡына мәсьәлә буйынса ла оҙон-оҙаҡ аңлатмалар биреүҙән баш әйләнеп саҡ ҡайтып йығыла инем. Совет власы урынлаштырылғандан һуң үткән етмеш йыл эсендә ҡәнәғәтләндерелмәгән матди һәм рухи ихтыяж менән беҙгә мөрәжәғәт иттеләр. Әйтерһең, беҙ иң юғары власть органы һәм халыҡтың үтенесен шунда уҡ ҡәнәғәтләндереү көсөнә эйәбеҙ! Үҙебеҙҙең мөйөштәге бәләкәй, тынсыу бүлмәнән, өҫтәл-ултырғыстарҙан башҡа бер нәмәбеҙ ҙә юҡ. Иң мөһиме — телефон булды, әлбиттә. Сейф булғанға тиклем бөтә документтарҙы күтәреп өйгә алып ҡайта торғайным. Көн һайын сәғәт ун-ун бер тирәһендә машина менән оҙатып ҡуялар ҙа, иртәнсәк үҙем күтәреп тағы килә торғайным. "Ни эшләй инегеҙ һуң?" – тигән һорау ты-

уыуы ла ихтимал. Сөнки мин үҙем дә, балалар менән һөйләшерлек тә ваҡытым ҡалмағанлыҡтан, ҡайһы саҡта ошондай уҡ һорау бирәм: "Ни эшләнек икән ул саҡлы?" Көндәлегемде асып ҡарайым. "Урал" үҙәгендәге эш дәфтәремдең бер көнөнән генә күсермә бирәйем. Беҙҙең эш күҙ алдына баҫыр.

1990 йылдың 11 сентябре.

— Татар ойошмаһы Башҡортостандың Татарстан менән сиктәш райондарын бүлеү тураһында мәсьәлә ҡуйырта башланы. Бик аҡыллы сығыш һәм мәҡәлә кәрәк. Төньяҡ-көнбайыш төбәк вәкилдәре профессорҙар Мөсәлимә Хәйруллина, Нәжиб Вәлитов, Лира Карамовалар менән һөйләшергә. Кәрим Яуышевтың мәҡәләһенә ҡарата яуап мәҡәлә йәһәтләргә. (Татар ойошмаһы лидеры Кәрим Яуышев республиканың төньяҡ-көнбайышы райондарында башҡорттарҙың аҙ булыуы, булғандары ла татар телле башҡортҡа әйләнеүе һәм, шуны иҫәпкә алып, башҡорт, рус, татар телдәренә дәүләт статусы биреү зарурлығы хаҡында яҙғайны - М.Б.)

— Интернат-мәктәп уҡытыусыларының гаризаһы буйынса Мәғариф министерствоһы менән һөйләшергә. (Хәҙерге Рәми Ғарипов исемендәге гимназия-интернат уҡыусылары директорҙарының башбаштаҡлығы хаҡында яҙғайны. Әммә ул директор, ҡала Советы депутаты булғанлыҡтан, вазифаһынан бушатыу мәсьәлә ҡатмарлы ине).

— Хәйбулла районына командировкаға кешеләр тупларға.

— Ғәрип егет матди ярҙам һорап гариза яҙған. Идара ултырышына ҡуйырға һәм ыңғай хәл итеү ягын ҡарарға.

— Вадим Сафин, Әбделхай Байморатов, Юлай Мәҡсүтовтарға "Урал" үҙәгенең эше тураһында мәғлүмәттәр бирергә. (Райондарға командировкалдарға сығып, халыҡ алдында сығыш яһаусыларҙан һәр ваҡыт "Урал" үҙәгенең эше тураһында һорау бирәләр ине).

— Фәнил Баишевҡа тәржемә өсөн түләү мәсьәләһен хәл итергә. (Һүҙ "Көрьән"де башҡортсаға тәржемә итеү тураһында бара).

— Нарбулатовты мәктәп эштәре буйынса инспектор итеп алыу тураһында мәсьәлә хәл итергә. Ыңғай хәл ителһә, командировкаға ебәрергә.

— Күп кенә мәсьәләләргә ҡарата юрист кәңәше кәрәк. Винер Сәмиғуллинды саҡырып һөйләшергә.

— Гүзәл Ситдиҡова өсөн Дүртөйлө тураһында мәғлүмәттәр әҙерләргә.

— Егерменсе башҡорт мәктәбенә башҡорт телен һәйбәт белгән математика, рус теле, башлангыс кластар өсөн уҡытыусылар кәрәк. Эҙләшергә.

— Әсғәт Биишевтың "Урал" үҙәге эргәһендә "Ижад" берекмәһе асыу

тураһындағы гаризаһын ҡарарға.

Минең яҙмалар аҫтына Рәшит Шәкүрев өҫтәмә яһаған:

— Ун өсөнсө сентябрҙә Матбуғат йортонда Татар ижтимағи үҙәгенең матбуғат конференцияһы була. Мотлаҡ ҡатнашырға кәрәк.

— Брошюра сығарыу мәсьәләһен йәһәтләтергә.

— "Аҡ тирмә" рәйесе Сәфәр Йәнтурин командировкаға китергә тейеш. Уға мәғлүмәттәр кәрәк.

— Кесаҙна көнө сәғәт икелә Мансур Әнүәрович Әюпов саҡыра. Һинең менән барабыҙ.

— "Вечерняя Уфа" — Ғәбиҙуллин мәҡәлә һорай.

— Сибәр Дәүләтшина Ейәнсурағa командировкаға бара.

Бына ошолай эшләне "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге.

"Демократик үҙгәрештәр" дауам итте. Иҡтисад һаман артҡа тәгәрәй, халыҡ эш хаҡы ла, пенсия ла ала алмай, магазин кәштәләре буп-буш. Әммә йөрәгендә ғәм йөрөткән ирҙәр уға иғтибар итмәне, әүҙем эшләне. Дауыт Сәғитов, Мәрфуға Галина, Сибәр Дәүләтшина, бейеүсе Рәшиҙә Туйсина, пенсионер Факиһа Таңһыҡкужина һайлауҙарҙа, региондарҙағы ойошмаларҙы ойоштороуҙа әүҙем ҡатнашты. Яҡуп ағай Шәмсетдинов нефтселәрҙән аҡса күсертте, үҙе лә әүҙем эшләне. Күптәр ине улар, әүҙемдәр ине. Теҙеп яҙып сыҡһаң, берәйһен генә төшөрөп ҡалдырып, күңелен китеүҙән ҡурҡам. Сөнки сит өлкәләрҙән килеп, унда йәшәүсе башҡорттар өсөн үҙ аҡсаларына китаптар, гәзиттәр алып ҡайтып таратып йөрөүселәр ҙә, бер ҡайҙан матди ярҙам алмай Өфө менән бәйләнеш өҙмәүселәр, үҙ көстәренә генә ышанып Өфөнән концерт бригадалары саҡырыусылар, күпме кеше килһә лә үҙ өйҙәрендә ашатып-йоҡлатып сығарыусы егеттәребеҙ ҙә бар ине. Медногорск егете Риф Биккузин менән Ырымбур муллаһы Хәсән Хәсәновтар ҙа, Силәбе өлкәһе патриоттары Арғаяш уҡытыусыһы Мөхәмәтжанов Рафаил Йомасолтанович, Силәбе егете Памир Йосопов һәм башҡалар булды. Бер йоҙроҡ булып төйнәлгән башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙарының көсө суверенлылыҡ яҡлауҙа ҙур роль уйнаны ла инде.

Беҙ "Урал" үҙәгендә эшләүселәр һәм идара ағзалары үҙебеҙҙең егеттәрҙе һәм ҡыҙҙарҙы депутат итеп үткәреү өсөн әүҙем эш башланыҡ. Командировкаларға сыҡтыҡ, мәҡәләләр яҙҙыҡ һәм байтаҡ ҡына уңыштарға өлгәштек.

Ошо осорҙа "Каруанһарай" эстрада ансамбленең башҡорт рухын күтәреүҙә роле әйтеп бөткөһөҙ ҙур булды. Баһауетдин Зәйнетдинов һүҙҙәренә патриотик йырҙар яҙып сығыш яһауҙарын халыҡ йылы ҡаршыланы.

Зәйнетдин Баһауетдинов тураһында айырым тукталып китеү кәрәк. Ул поезда осраклы ғына Ләлә Кинельская менән танышып киткән һәм уның атаһы Дан Мәхмүт улы Кинельскийҙың "Көрьән"де тәржемә итеүе һәм әле был тәржемәнең кулъяҙма көйө һаклануын белгән. Был хакта ул Рәшит Шәкүрев менән миңә генә әйтте. Сөнки аксалыраҡ ойошмаларҙың ул тәржемәне үҙҙәренә алыуҙары ихтимал ине. Һүҙ сығармаҫ машинистка табып, был кулъяҙманы башкортсалаштырып тиҙ арала баҫтырып алырға булдык. Минең бер туған һылыуым Нәсимә Ғәйнуллина эштән һуң үҙ өйөндә баҫырға риза булды. Тик машинка кәрәк ине. "Урал" үҙәгенә яңы ғына машинка алғайныҡ, һәм ул бик еңел дә, башкорт шрифттары ла һылыуымдың редакцияла эшләгән машинкаһындағы тәртиптә куйылғайны. Машинканы һылыуымдың фатирына алып барҙыҡ та, үҙәккә ваҡытлыса минең өйҙәге машинканы алып килдек. "Көрьәнде" иң беренсе башлап башкортса баҫыусы Нәсимә Ғәйнуллина булды. Оҙайлы, ауыр, күп күҙ нуры һәм иғтибар талап иткән был эшкә бик аҙ ғына хаҡ һораны һылыуым. "Һауап өсөн эшләйем", — тине. Әммә ул саҡта "Урал" үҙәгенең аҡсаһы самалы ине, һәм Баһауетдин үҙ кассаһынан барлыҡ аҡсаһын алып түләне. Ә ошо ваҡыт эсендә минән машинка таптырып, идара ултырышында: "Бураҡаева машинканы үҙенең иҫке машинкаһына алмаштырып, өйөнә алып ҡайтҡан, алып килһен!" – тип даулай башланылар. "Ике айҙан алып киләм. Тик әле бик кәрәк. Биреп торҙоҡ", – тип аңлатып ҡарайым, әммә һыныҡҡа һылтау булды, электән теш ҡайрап йөрөгән бер нисә кеше бар ине. Бөрйән районын һыу баҫҡан мәлдә халыктан матди ярҙам йыйғайныҡ. Шул саҡта үҙ кеҫәһенә "өлөш" сығарыусыларҙы фашлағайным. Бынан тыш Көйөргәҙе районынан ярҙамға тип, ике машина ҡарабойҙай ярмаһы ебәргәйнеләр, ул да юҡ булды. Әммә был намыҫһыҙлыкты бер кешегә лә өндәшмәнем. Үҙҙәренә генә әйттем дә — бөттө. Ә "әхирәттәр" (*береһе бухгалтер ине*) үс тотоп йөрөгән икән. Улар, Рәшит Шәкүрҙең урынына "кыҙығып" йөрөүселәрҙең бер нисәһен ҡотортоп, идара ағзаларының күпселегенең отпускыла булыуынан файҙаланып, һүҙҙәре үтерлектәрен йәки бер ни аңғармай ҡалғандарын саҡырып идара ултырышы йыйғандар. Беҙ был хаҡта белмәй ҡалдыҡ. А. Х. К. ханым менән Р. Ғ. Н. әфәнде: "Бураҡаева халыктың яңы машинкаһын алып үҙенең иҫке машинкаһын алып килеп куйған", — тип хәбәр тараткан. Мин идара ултырышында "Аманат" ойошмаһынан килгән бер туған абзыйымдан, Диҡҡәт иҫән саҡта ҡатнашып йөрөгән кешеләрҙән бик оялдым һәм минең хаҡта шундай ялған

һөйләнеүгә аптыраным, ғәрләндем, ултырышты ташлап сығып киттем. Сыҡһам, Мәхмүзә Ғәйнуллина тора. Сираттан тыш идара ултырышы булырын һәм минең "машинка урлауым" хаҡында һүҙ ҡуҙғатылырын Мәхмүзә Кәлимулла ҡыҙы Ғәйнуллинаға телефондан шылтыратып әйткәндәр ҙә ул килеп еткән: "Бына аҡса, машинканың хаҡы. Хәҙер алып инеп бирәм. Һинең нисек эшләгәнеңде беләм. Машинка урлауыңа ышанмайым. Мәрйәмде ни эшләп өҙгөләйһегеҙ, тип әйтәм. Бөтөн республика һинең нисек эшләгәнеңде белә. Ә бында бер төркөм әтрәғәләм эшһеҙлектән йонсой. Инәм дә шуны ла әйтеп сығам. Миңә кемдең шылтыратыуын, хәҙер Мәрйәмдең көлөн күккә осорабыҙ, ултырмаһын әллә кем булып, бөтөн республиканы ауыҙына ҡаратып, тигән ҡатындың да исемен әйтәм", — ти. Мин: "Ҡуй, Мәхмүзә, йә юрый индергән тип әйтерҙәр. Дөрөҫләнер әле. Бөтөн халыҡ ҡарап торған ойошмабыҙға тап төшөрмәйек", — тинем. Бер аҙна үтеүгә командировканан Басир Мәһәҙиев ҡайтып төшөп, был хәл хаҡында ишетеп, идара ағзаларын яңынан йыйҙы, һәм ултырышты ойоштороп йөрөүсе Р. Ғ. Н. менән А. Х. К-ны "Урал" үҙәгенән эштән сығарҙылар.

Нисек кенә булмаһын, беҙ "Ҡөрьән"дең башҡортсаһын сығарыуҙа ҙур эш башҡарҙыҡ. Бер төркөм ир-егеттәр менән бергә Тажи хәҙрәткә инеп, ғәрәп телендәге "Ҡөрьән"дең фотокопияһын алыу тураһында ла килешеп сыҡтыҡ. Шунан мин Мәсетле районына, Дәүләткирәй Дәүләтбай улы Мәһәҙиевты саҡырып алып ҡайтырға киттем. Ул Өфөләге феноллы һыуҙан ҡасып, ваҡытлыса ҡоҙаларына киткәйне. Дәүләткирәй ағайҙы алып ҡайтҡансы "Ҡөрьән" машинкала баҫылып бөткәйне. Артабан инде эште Байышев Ф. Н., Сөйәрғолов Н. Ә., Мәһәҙиев Д. Д., Әбсәләмов С. С., Зәйнетдинов Б. Ф. һәм даими ярҙам итеп йөрөүсе Ләлә Кинельскаянан торған Ижади төркөм башланы. Был ваҡытта нәшриәттә директор булып эшләгән Аҫылғужа Баһумановтың ойоштороу эшендә роле ғәйәт ҙур булды.

Демократик ел ыңғайына ғына ҡалҡып сыҡҡан, үҙҙәрен күрһәтеп ялпылдап йөрөүҙе маҡсат иткән "патриоттар" ҙа күбәйеп китте ул йылдарҙа. Ундайҙар, әлбиттә, ығы-зығы, йомортҡанан йөй эҙләү, һүҙ ҡуйыртыу менән күберәк шөғөлләнделәр. Әммә беҙ, ирекле һүҙгә, азат фекергә юлдар бикләнгән саҡта уҡ халыҡ ғәме менән йәшәгән кешеләр, бер-беребеҙгә терәк тә, таяныс та булдыҡ. Демократик үҙгәрештәр булғанға тиклем үк үҙебеҙгә тәрбиә йүнәлеше уйлап сығарғайныҡ. Башҡорт егеттәре йә беҙҙең фатирҙа, йә "Башҡортостан ҡыҙы" журналы редакцияһында йы-

йылыша торғайныҡ.

Мохтажлыҡ кисергәнгә ярҙам ит, ярҙам итә алмайһың икән — ҡамасаулама.

Бөтә уңыштарҙың нигеҙе — берҙәмлектә. Туғанлыҡ тойғоһон көсәйт. Һинең туғаның — милләт вәкиле.

Үҙең үҫ һәм туғандарыңа үҫергә ярҙам ит.

Ҙур еңеүҙәргә өлгәшә алмаһаң, бәләкәйҙәренә өлгәшеүеңә ихлас ҡыуан һәм мыҫҡаллап булһа ла уңыш өҫтәй бар.

Эске кеүәтеңде уят һәм эшкә ҡуш.

Һаулығыңды нығыт. Балаларыңды ла бәләкәйҙән һаулыҡ нығытыуға өйрәт.

Уңышҡа өлгәшкән башҡа кешеләрҙәге көс-кеүәт һиндә лә бар. Шулай булғас, үҙеңә ышан, алға ынтыл, көн һайын уңыш хаҡында уйла һәм эшлә. Көнләшмә – сәмләп. Көнсөллөк һинең үҙеңде ашай, сәмселлек – кеүәт өҫтәй.

Һәр эшеңде "халҡым" тип эшлә. Киләсәк быуын яҙмышы һинең ғәмлелек кимәленә бәйле.

* * *

Этнопсихология менән шөғөлләнеүсе ғалимдарҙың фекеренсә, башҡорт психологияһы нигеҙендә "яҡшы ямандан көслө", "таш менән атҡанға ла аш менән ат", "яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ менән яуап бирергә кәрәк" тигән төшөнсәләр ята. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр башҡорттоң ҡунаҡсыллығын, киң күңеллелеген, эскерһеҙлеген, тура һүҙле булыуын, кешелекле һәм ябай булыуын да билдәләй. Шулай уҡ башҡорттоң һәр ваҡыт рухи азатлыҡты һәм рухи байлыҡты өҫтөн ҡуйыуын да, матди байлыҡҡа әллә ни иғтибар бирмәүен дә өҫтәргә кәрәк. Бөгөн иһә етеш тормош алып бармайынса бер нәмәгә лә ирешеп булмағанлыҡты, сауҙа эшенә лә өйрәнергә кәрәклекте һәм һығылмалы холоҡҡа эйә булыуҙың зарурлығын да төшөндөрөргә кәрәк. Холоҡта һығылмалылыҡ булмау арҡаһында күптәребеҙ "яна", юғары вазифаға күтәрелә алмай. Һығылмалы холоҡто ялағайланыуҙан, ярамһаҡланыуҙан айыра белеү кәрәк. Һығылмалы холоҡ — үҙ мәнфәғәтең өсөн дөрөҫ юлға түгел, ә ысул таба белеү. Ҡайһы бер ҡыҙыу ҡанлылар намыҫ һаҡлау менән дыуамаллыҡты бутап ташлайҙар. Һөҙөмтәлә үҙҙәре өсөн зыян ғына була. Таш менән атҡанда аш менән атыу ҙа, үтә ҡунаҡсыллыҡ та бөлдөрә. Һәр ерҙә сама кәрәк. Сама белгән сайҡалмаҫ. Беҙҙең милли холҡобоҙҙо бар иткән шарттар үҙгәрҙе, икенсе шарттар икенсе холоҡ-ғәҙәт ҡалыбы булдырыуҙы талап итә.

Әммә төп милли үҙенсәлектәрҙе билдәләүсе төп сифаттар

һаҡланырға тейеш.

Халҡыңдың килəсəгенə ышан, үҙең дауам ит һəм заманға ҡарап заңыңды үҙгəрт.

Етеш, мул тормош булдырыуға ынтыл, тик рухи байлығыңды төп маҡсаттарыңдың береһе итеп ҡуй. Береһе икенсеһен ҡыҫырыҡлап сығармаһын.

Халҡыңды кəмлəмə. Булыр илдең балаһы бер-береһен батыр ти, бөлөр илдең балаһы бер-береһен бахыр ти. Югиһə, беҙҙе бахыр тиеүселəр үтə лə күбəйеп китте. Өçтəүенə, был фекергə үҙебеҙ ҙə ҡушылабыҙ һəм, үҙебеҙҙе миçалға килтереп мыҫкыллап көлə башлайбыҙ. Милəткə ошонан да ныгырақ зыян юҡ.

Милəттең баһаһын күтəрер таланттарҙың ҡəҙерен бел. Талант — təбиғəттең бүлəге. Тəңре бындай бүлəкте халыҡтың мəртəбəһен күтəрер өсөн бирə. Халыҡ мəртəбəһен күтəрер өсөн ебəрелгəн бындай таланттар үтə нескə күңелле, ғəмле, йөрəктəре яраланыусан, намыҫсан була, нахаҡҡа түҙмəй. Ундайҙарға йəшəү ауыр. Улар ғəҙеллектең еңеренə ышана. Алданалар – барыбер ышаналар. Отолалар – барыбер ышаналар. Ышаныстары аҡланмаһа, күңел төшөнкөлөгөнə бирелəлəр. Улар үҙҙəренə юл яра алмайҙар. Сөнки йүнһеҙ əҙəпһеҙҙəр бөтөн кешене лə үҙе кеүек тип уйлай ҙа, шунан сығып эш итə һəм отолмай. Йүнле əҙəплеләр ҙə, бөтөн кешене лə үҙе кеүек күреп, намыҫ, əҙəп ҡалыбы менəн эш итə һəм... отола. Таланттарға ярҙам кəрəк. Уларҙың тəғəйенлəнешен аңлаған һəм ярҙам ҡулы һуҙған халыҡ фəкəт ота ғына. **Шəхесен күтəргəн халыҡ үҙен күтəрə.** Шəхестəр — Тəңренең халыҡҡа ебəргəн бүлəге ул. Əммə халыҡ бəхете өлөшөнə төшкəн бүлəккə ҡаршы көрəш асыусы, көнлəшеүсе, уларҙы юҡҡа сығарырға маташыусы, сикһеҙ дан-шөһрəт яратыусылар ҙа юҡ түгел донъяла. Илебеҙҙəге һəр төрлө болғаныштар: граждандар һуғышымы, "кулактар"ҙы Себергə ҡыуыумы, утыҙ етенсе йылғы фажиғəме — һəр береһе кешеләге "көнсөллөк, көнсөллөктөн башланған үс алыу" тигəн яуыз "ҡара ҡеүəт"кə таянып эш итте лə инде. Əммə ундайҙар бер нəмəне онота: үҙенең саф күңелле һəләтле "бүлəгенə" ҡул һуҙыусыларға, уның данына ҡыҙығып, юҡҡа сығарырға маташыусыларға Тəңре сикһеҙ асыулы була һəм нəҫеленең даланын ҡорота. Сөнки, беренсенəн, təбиғи — йəшəйеш алға барырға, ə уға ҡамасаулаусылар юҡҡа сығырға тейеш. Икенсенəн, күңел сафлығы булмаған шарттарҙа йəшəүсе һəм хилаф юл менəн табылған хəрəм файҙаланыусыларҙың аҙығына ҡарғыш, ҡəһəр, əр, əрнеү, рəнйеү һеңə.

Тəңре ғəмһеҙлекте лə яратмай, уның да ҡоһорон ҡайтара. Ғəмһеҙлектең өçтөнлөк алыуы бөтөн донъя кимəлендə лə ҙур

афәттәргә килтерә. Илдәргә генә түгел, тәбиғәткә лә ҙур йоғонто яһай. Әйтәйек, ғалимдарҙың раҫлауынса, бынан егерме мең йылдар элек Ер шарында сүллек булмаған. Хәҙерге сүллектәр урынында цивилизация сәскә атҡан. Ошо матурлыҡты, цивилизацияны һаҡлап тороплоҡ ғәмле кешеләрҙең кәмеүе, ғәмһеҙлектең өҫтөнлөк алыуы сәбәпсе булған бындай һәләкәткә.

Башҡорт халҡының меңәр йылдарға һуҙылған йәшәү тарихы булып, боронган килгән үҙ традицияһын, мәҙәниәтен һаҡлай алған икән, тимәк, ғәмле вәкилдәре күп булған. Ғәм һаҡлай киләсәкте. Бөгөн дә һан яғынан сағыштырмаса аҙсылыҡ тәшкил итһә лә, халыҡ ғәм һәм ғәмле шәхестәре арҡаһында үҙ йөҙөн юғалтмай һаҡлап килә. Ғәм артҡан һайын рухи көс ишәйә һәм еңелмәҫ көс булып туплана.

Дөрөҫлөккә ынтылыусы ғәмлеләр фәнни асыштарға өлгәшә.

Матурлыҡҡа ынтылыусы ғәмлеләр сәнғәт өлкәһендә ижади ҡаҙаныштарға өлгәшә.

Ғәҙеллеккә ынтылыусы ғәмлеләр социаль үҙгәртеүҙәргә өлгәшә.

Ошо прогресс. Ошо — алға китеш һәм юғарыға осош. Былар булмаһа, милләт тә һаҡланмай. Бындай ҡаҙаныштарға фәкәт йөрәгендә ғәме булғандар ғына өлгәшә ала. Һәр беребеҙ, һис юғы үҙебеҙҙе һаҡлау өсөн генә булһа ла ғәмлеләргә ҡарата иғтибарлы булһаҡ, тарих өсөн, халҡыбыҙҙы һаҡлап алып ҡалыу өсөн тос өлөш индерер инек. Беҙгә яңыса, яңы ҡеүәт менән тағы балҡып китер өсөн, йөрәгендә башҡорт рухы булған һәр кешегә ең һыҙғанып, күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәйенсә эшләргә кәрәк. Ә йөрәгендә ҒӘМ ҡуҙы баҙлаған егеттәребеҙгә һәм ҡыҙҙарыбыҙға, халыҡты ниндәй юлдар менән күтәрергә уйлаһа ла, ҡамасауламаҫҡа ине.

Ә ҡамасауламау һәм ҡулдан килгәнсә ярҙам итеп ебәреү өсөн ғәмлеләрҙең ынтылыш-маҡсатын аңларға кәрәк. Ғәмлеләр заман һулышын яҡшы тоя, киләсәкте алдан күрә. Улар тынғыһыҙ. Һәүетемсә йәшәү рәүеше уларға оҡшамай, сөнки киләсәктә был йәшәү рәүешенең үҙгәрәсәген һәм ошо үҙгәреште тиҙерәк башларға кәрәклеген улар аңлай. Улар үҙҙәре лә тынғыһыҙ, башҡаларға ла тынғылыҡ бирмәй.

Ғәмлеләрҙең маҡсаты — милләтебеҙҙе йәшәтеп килгән сифаттарҙы һаҡлау.

Һәр кеше Тәбиғәттең бер өлөшө, Кешелек донъяһы вәкиле, үҙе йәшәгән ил вәкиле һәм үҙ халҡының улы. Шуның өсөн ул Тәбиғәт, Кешелек донъяһы, Иле һәм Халҡы алдында яуаплы.



Ы Р Ы Ç

Аң, Рух, Ғәм кеүек үк, Ырыç та – күҙгә күренмәгән төшөнсә, хистойғо. Уны беҙ тоймайбыҙ ҙа, ҡояш йылыһы, көн һалҡыны, һауа, һыу һәм башҡа шундай физик яҡтан тәьçир итә торған төшөнсәләр һымаҡ, бар сағында иғтибар ҙа итмәйбеҙ.

Университетта бергә уҡыған әхирәтем Сания Әхмәтова (*ҡыҙ фамилияһы Рахманғолова*) менән һирәк осрашһаҡ та, бер-беребеҙгә бик яҡын булдыҡ. Осрашҡан саҡтарҙа һөйләшеп һүҙ бөтмәй. Уның бер ваҡытта ла зарланмауы миңә оҡшай. Бошмау түгел, ә зарланмау. Әсәһенән дә, атаһынан да бик иртә етем ҡалған, атаһының әсәһе — ҡартинәһе ҡулында тәрбиәләнгән, бик үҙ аллы, көслө ихтыярлы ҡыҙ булды. Мандолинала ла, баянда ла уйнай, оҙон көйҙәргә йырлай.

Һуңғы курста уҡыған саҡта, каникул ваҡытында, кейәүгә сығып килде лә эшкә иренең дә, үҙенең дә тыуған яғына, Дыуан районының Арый урта мәктәбенә, ҡайтты. Ғәлимйәндең атаһы менән әсәһендә, Мәрйәмғол ауылында бергә йәшәнеләр. Арыйға йөрөп уҡытты. Биш ҡыҙ бала үçтерҙеләр.

Алда әйтеп үтеүемсә, университетты тамамлаған саҡта уҡ, курсташтар биш йыл һайын осрашып тороу тураһында һүҙ ҡуйышҡайныҡ. Һүҙебеҙҙә торҙоҡ, осрашабыҙ. Осрашҡанда, әлбиттә, эш хаҡында ғына түгел, шәхси тормошобоҙ: ҡыуаныстарыбыҙ, йыуаныстарыбыҙ, күңел китеүҙәре, юғалтыуҙар, уңыштар-отолоуҙар хаҡында ла һөйләшеп ала торғайныҡ. Сания менән бер һөйләшкән саҡта ул: "Өлкән кешеләр менән йәшәү бик үк еңел түгел, әлбиттә. Төрлө саҡтар булғылай. Аңлашмай ҙа китәбеҙ. Тағы ярашабыҙ, тигән һымаҡ. Тик бер кемде лә ғәйепләп булмай беҙҙең

аңлашмауҙа. Һәр кемдең донъяға үҙ ҡарашы. Мин, рус теле һәм әҙәбиәтенән уҡытҡас, өйгә ҡосаҡ тултырып дәфтәр алып ҡайтам. Дәрес әҙерләйем. Башҡорт мөхитендә генә үҫкән ауыл балаларын рус теленә өйрәтеү еңел түгел. Ә ҡәйнәм: "Уҡытыусының ниндәй дәресе булһын ул! Уҡытыусы кеше уҡытып ҡына йөрөмәйме ни, ул ниндәй дәрес әҙерләү? — ти ҙә аптырай. — Уҡыған саҡта еренә еткереп уҡыманыңмы әллә" — тип тә ебәргеләй. Уларҙың киленгә үҙ ҡараштары, үҙ талаптары. Арыу ғына килен булырға ла, үҙемә тәғәйен эштәргә өлгөрөргә лә тырышам да бит... Ә үҙҙәре мәктәптәге уңышым өсөн ихлас ҡыуаналар, хатта "кем килене, Әхмәтовтарҙыҡы!" тип, маҡтанып ебәрәләр. Атай-әсәйһеҙ үҫкәс, уларҙың шатлыҡ уртаҡлашыуы күңелемде үҫтерә. Шатлыҡ уртаҡлашыусың булһа, икеләтә ҡыуаныс бит", — тигәйне бер осрашҡан саҡта Сания. Уның ҡарттарҙы аңлап һөйләүенә, мәсьәләгә айыҡ ҡарашы булыуына ҡыуанып ҡалғайным. Йәш кешенең өлкәндәргә аҙыраҡ баш биреүе бер ҙә насар түгел. Уларҙы тәрбиәләргә, үҙеңсә итергә маташыу ярамай, әлбиттә. Фәҡәт аңларға, йомшаҡ телле булырға ғына кәрәк. Байтаҡ йылдар үткәс, уларға юл төштө. Мәсәғүт педагогия училищеһына лекция менән саҡырғайнылар. Арый ауылынан Саниялар йәшәгән Мәрйәмғолға йәйәү киттем. Йәйәү йөрөргә яратам. Аҙ ғына форсат тейһә, йәйәүләп сығырға әҙер генә торам. Шағир Тимер Иҫәповтоң тыуған ауылы Әпсәләм тәңгәлендә (*ауыл юҡ ине инде*) юлдаш та осраны. Мәрйәмғол ауылынан булып сыҡты. Саниялардың өйөн һораштым. Сания менән Ғәлимйәндең ғаиләһенә, уларҙың татыулығына, Саниянының түҙемле булыуына һоҡланып, маҡтап алды юлдашым. "Ауылда япа-яңғыҙ ғына үҫкән ҡыҙҙарына ла күҙ-ҡолаҡ була алмағандар бар, ә Саниянының биш ҡыҙ бит! Улар тураһында, исмаһам, бер алама һүҙ ишетһәк! Ҡыҙҙары бик әҙәпле," — тип һоҡланды ул. Мин курсташым, әхирәтем өсөн ғорурландым.

Минең килеүемә бик ҡыуандылар, тик Ғәлимйән, хәбәр итмәгәнһең, машина менән барып алыр инем, тип шелтәләп алды. Машиналы кеше йәйәү йөрөүҙе, ғәҙәттә, ныҡ йонсоуға һанай.

Йән рәхәтлеге һирпеп торған йылылыҡ бар ине бында. Йәшәгән йорттары ла, үҙ-ара мөнәсәбәттәре лә, ысынлап та, һоҡланырлыҡ. Ҙур, татыу, матур ғаилә. Ҡайны, ҡәйнә, биш ҡыҙ. Йәмғеһе туғыҙ кеше бергә йәшәгәндәр. Ире, Ғәлимйән, атҡаҙанған ауыл хужалығы работнигы исеменә лайыҡ булған. Сания — Башҡортостан мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы. Ҡыҙҙары ипле, матур-матур ғаилә ҡорғандар, барыһы ла уҡыған. Мин барған саҡта, Ғәлимйәндең атаһы яҡты донъянан киткән ине. Апай иҫән ине әле.

Ҡартайған, шулай ҙа йәш саҡта ут сәсеп торған үткер ҡатын булыуы күренә. Аҙ ғына ваҡытҡа килгәс, Сания менән төн буйы һөйләшеп сыҡтыҡ. Сания ҡайны менән ҡәйнәһенән бик риза ине. Тик бер генә үкенесе ҡалған:

— Килен, әсәй, ҡатын булыу бурысын да, хөкүмәтебеҙ алдында уҡытыусы бурысын да намыҫ менән башҡарҙым, тип әйтә алам. Ҡайным менән ҡәйнәмә рәхмәтлемен. Балаларҙы үҫтерештеләр. Хәҙер инде үҙемдең дә әсәйлек бурысым өләсәйлеккә алмаштырылды. Тик бер бурысым елкәнән төшмәй әле — килен булыу. Ғүмерем буйы күҙәтеү астында йәшәгән кеүек булдым. Һәр аҙымың, ҡайҙа, ҡасан, нисек баҫыуың билдәле. Исмаһам, аҙ ғына үҙ аллы йәшәргә ине, тип уфтанып киткән саҡтар ҙа булғыланы. Хәҙер инде ғүмер үтте, — тип бер аҙ моңайыбыраҡ йылмайып ҡуйҙы Сания.

— Өйҙә һинең һәр аҙымыңды тикшереүсе булыуҙың ыңғай яғы күберәк булғандыр ул, Сания. Ҡартайған көнөңдә күңел тыныслығы алыуың шунан башланған бит. Балаларың, ҡыҙҙарың ҡараулы булған, өләсәй һабаҡтары алған. Улар өсөн эсең бошоп, йән тыныслығы тапмай ултырһаң, еңел булмаҫ ине, моғайын. Был бит бик тә мөһим. Эшкә китһәң — тынысһың. Һуңлабыраҡ ҡалһаң — йәнеңде усыңа алырҙай булып борсолоп ултырмайһың: балалар асыҡҡанмы, өй һыуыҡ түгелме, тышта оҙаҡ йөрөп ташламағандармы, шырпы менән уйнамағандармы... Арыйҙан килгәндә бер ҡатын менән һөйләшеп киттек. Өйөгөҙҙөң ҡайҙа икәнлеген һорағайным. Ул һеҙҙе мәктәп телгә алды. "Биш ҡыҙы тураһында биш ауыҙ насар һүҙҙә ишетелмәне", — ти. Ҡыҙҙарыңдың, үҫкәс тә һәр аҙымы тикшерелгән инде. Шуға ла бишеһе лә мәктаулы, береһе лә ҡырын баҫмаған. Ҡыҙҙы ҡырҡ ерҙән тый, ҡырҡ беренсеһенә сыбыҡ ҡыҫтырып ҡуй, тигәндәр бит. Көнө-төнө эштә юғалған әсәй кеше бер үҙе ҡырҡ ерҙән тыйып өлгөрә алмай. Мин һәр ваҡыт, их, балаларға күҙ-колаҡ булырлыҡ береһе булһа ине, тип уйлай торғайным. Өйҙә өлкәндәрҙең булыуы – үҙе үк оло тәрбиә. Ҡыҙҙарың тураһында туҡтауһыҙ борсолһаң, күңелең тыныс булмаһа, "аҫҡаҙанған" миҙалың да ҡиммәткәрәк төшөр ине, бөгөн былайтып уңған ҡатын, мәктаулы әсәй, һөйкөмлө өләсәй, абруйлы ауылдаш, күкрәк һуғып ултырырлыҡ ҡәйнә булып та ултыра алмаҫ инең. Был ғүмерҙә иң ҡиммәте — йән тыныслығы бит. Йән тыныслығы булмаһа, бер ни ҙә күҙгә күренмәй.

Санияның йөҙөн йылмайыу баҫты. Ғәҙәтенсә, усына ус һуғып тороп:

— Ысынлап та. Ҡәйнәм арҡаһында бит хәҙер кейәүҙәр алдында

күркә кеүек ҡуҡрайып, маҡтанып ултырыуҙарым! Һин ҡыҙыҡ кеше ул, Мәрйәм. Уҡыған саҡта ла шулай ҡатмарлы төшөнсәләрҙе ябай ғына аңлата ла бирә торғайның. Әле лә оло бәхетемдең асылын әйттең дә һалдың. Иң ҡиммәте – йән тыныслығы шул донъяла. Ә уны миңә ҡайным менән ҡәйнәм биргән, — тип шатланды Сания.

Кайһы ваҡытта шулай үҙ бәхетебеҙҙең ысын бәхет икәнлеген дә аңламай ҡуябыҙ. Кеше тормошо күп яҡлы. Үҙеңдең бәхетләме-түгелме икәнлегеңде белеү өсөн, башҡалар менән сағыштырып ҡарар, хыялтеләктәреңмен самалап ҡарарға кәрәк... Бәлки, әле һин ҡәнәғәтһеҙлек белдереп ултырғаның — ҡасандыр һинең хыялыңда йәшәгән, һин ынтылған, оло бәхет тойолған ырыҫ-бәхетеңдер.

Яҙмаларымдың "Моң" тигән бүлегендә Ғәйшүрә менән Ғәбитулла Шәриповтарҙың ғаиләһе тураһында тулыраҡ телгә алырмын. Әле уларҙың бәхет-ырыҫ тураһындағы фекерҙәрен килтереп үтәйем. (*Атайымдың әсәһе Ғәзизә — минең ҡәрсәйем Ғәббәс ауылынан Шәрипова фамилиялы булған. Ғәббәс — атайымдың тыуған ауылы. Ғәбитулла ағай — миңә ике туған*).

Бөйөк Ватан һуғышы инвалиды, ике күҙе лә тома һуҡыр, уң ҡулы терһәктән өҙөлгән, егермеһе лә тулмай кеше көнлө булып ҡалған Ғәбитулла ағай менән ҡарап тормалы һылыу Ғәйшүрә еңгәйебеҙ биш ул, бер ҡыҙ үҫтерҙе. Мин һомғол буйлы, тирәктәй ағайымды һәм уны етәкләп килеп ингән сибек кенә кәүҙәле еңгәйҙең утыҙ биш саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Ғәббәс ауылынан Иҫәнғолға йәйәүләп, сарсап-һыуһап килеп ингәндәрен, һәм үҙемдең ашыға-ашыға уларға айран һыулап биргән саҡтарымды хәтерләйем. Урта буйлы, ҡап-ҡара сәсле, ҡара күҙле, Кавказ ҡатындарына тартым оҙонса ас яңаҡлы, тура ҡырлы танаулы еңгәйҙең ҡара күҙҙәренә оҙон ҡуйы керпектәре ниндәйҙер серлелек, моң өҫтәй ине. Уның ғәжәп моңло күҙҙәренә ҡараһам, ни өсөндөр илағым килә башлай торғайны. Бик бәләкәй сағым булғанғалыр, илағы килеүҙең сәбәбен үҙем дә аңламай инем. Ҙурая килә бер нисә тапҡыр Ғәббәскә барырға тура килде. Бер барғанымда ишек алдарының таҙалығына һоҡланып ҡарап торҙом. Һарай яғына һарҡыуыраҡ ишек алды йәм-йәшел ҡаҙ үләне, үлән өҫтөндә туп-тулы балалар. Бөтәһе лә яланаяҡлап әллә ниндәй уйын уйнай. Ғәбитулла ағай картуф әрсеп ултыра, еңгәй бесән әҙерләргә киткәйне. Ғәбитулла ағай аяҡ тауышын һиҙеп, башын ҡалҡытып һаулыҡ һорашты. Һис кенә лә зәғиф тип әйтерлек түгел. Ул ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем тура һынлы, матур йөҙлө булды. Телмәре һүҙҙәргә бай, һөйләмдәре төҙөк, аҡрын ғына, тыныс ҡына һөйләй. Ә Ғәйшүрә еңгәйҙең, күҙҙәрен сырт-сырт

йома-йома, ҡаштарын һикертеп, йәһәт кенә күҙ һирпеп алып, ашығып-ашығып ҡына һөйләүен, һәр саҡ эше күп булғанлыктан, эш эшләргә ҡабаланғанлыктандыр, тип уйлай торғайным.

Ғәбитулла ағай менән Ғәйшүрә еңгәй тураһында "Совет Башҡортостаны" гәзитенә "Ике тапҡыр ҡалҡҡан ҡояш" тигән очерк яҙҙым. Шул очеркты әҙерләгән саҡта, уларҙың икеһе менән дә айырым-айырым һөйләштем. Бер тапҡыр барғанымда Ғәбитулла ағай һарайлыҡ ағас ҡырҡырға киткәйне. Еңгәй менән бик оҙаҡ һөйләшеп ултырҙыҡ.

— Еңгәй, үкенмәйһеңме?

— Мин уның һуҡырмы-түгелме икәнлеген уйламаным да бит ул. Белеүен белдем, ә уйламаным. Танышырға килгәндәрендә, бер аулаҡ өйҙә әхирәттәрем менән йыйылыштыҡ. Бер аҙҙан Хөсәйен, буласаҡ ҡәйнешем, Ғәбитулла ағаһын етәкләп килеп инде. Оҙон буйлы, матур егет ине ағайың. Ишектән эйелә биреп килеп инде. Ҡапыл ғына тәнем буйлап ниндәйҙер ҡалтыраныу үтеп китте. Алданыраҡ ингән Хөсәйен тирә-яҡҡа ҡаранып аптырап тик тора. Ҡыҙҙар күмәкбеҙ бит инде. Ғәбитулла ишек төбөндә тора. Хужабикә апай:

— Ана, мейес буйында ултырғыста ултырғаны еңгәң була инде, — тигәйне, Хөсәйен ялт итеп миңә ҡарап алған булды ла, ашығаашығыға яҡын килеп, ағаһының ҡулын миңә тотторҙо. Үҙе сыҡты ла йүгерҙе. Шул көндән алып уның ҡулдары минең ҡулда. Уны етәкләп йөрөһәм дә, минең өсөн оло таяныс бит ул. Уның янында үҙемде ышаныслы тоям. Иҫәнғолдан һуңға ҡалып ҡайтҡан саҡтар йыш була ине элек. Күгәрсен тапҡырынан тау аша төшәбеҙ. Күҙгә төртһәң, күренгеһеҙ ҡараңғы. Шунда ла, ағайың менән етәкләшеп барғас, хәүефһеҙ була торғайны. Тормошта ла шулай: ағайыңдың булыуы әйтеп аңлатҡыһыҙ тыныслыҡ тыуҙыра. Тома һуҡыр булһа ла, бик аңлы ул. Күҙле көйө лә ҡатындарын рәнйеткән, йүнләп йәшәтмәгән ирҙәр бар. Ағайың тормоштоң ҡәҙерен белеп йәшәй, бер ваҡытта ла зарланмай. Шул яғы миңә оҡшай.

— Еңгәй, улай булғас, һин бәхетле бит.

— Бәхетте кем нисек аңлайҙыр инде, бикәс. Кеше үҙе ынтылған нәмәне эшләй алһа, шул бәхеттер тип уйлайым мин. Һуйылдай-һуйылдай улдарым бар. Атай, әсәй, тип кенә торалар. Ҡыҙым бар. Ейән-ейәнсәрҙәрем ҡартатай ҙа, өләсәй тип алдыбыҙға килеп ултырып һөйҙөрөп китәләр. Мин ошонан башҡаға ынтылманым. Ынтылғаныма ирештем. Шулай булғас, бәхет инде. Һуғыштан яраланып ҡайтҡан Ғәбитулланың хәле тураһында ишеткәс тә ныҡ йәлләгәйнем. Хәҙер ул да үҙен ҡатындан уңдым, тип иҫәпләй.

Уныһы ла минең өсөн бәхет. Үтте бит ғүмерем заяға һинең менән, тип үкенһә, минең өсөн бәхет булыр инеме? — тине еңгәй.

Ғәбитулла ағай бәхет тураһында үҙенсәрәк әйтте:

— Бәхетте кеше үҙе ҡоя, һылыу. Кәбән ҡойған һымаҡ, өйөлә бара, өйөлә бара ул бәхет. Кәбәнде лә төбөнән үк матур һалһаң, елямғырға бирешмәй. Баштан ары-бире һалһаң, һипмә ямғыр ҙа үтә төшә лә ҡуя.

Кеше бәхетле булғыһы килһә лә — үҙе, бәхетһеҙ булғыһы килһә лә – үҙе. Ауылыма иҫән ҡайтҡас, бәхетемә бер ҡыуандым. Зәғифлегем йөрәгемде урталайға ярып һыҙлатҡан саҡтарымда: "Их, исмаһам, гармун тоторлоҡ ҡулым иҫән булһасы!" — тип өҙгәләнә инем. Уң ҡулымдың терһәгенә гармун ҡайышын эләктереп, һул ҡул бармаҡтары менән гармун төймәләренә баҫып уйнауҙы уйлап тапҡас — тағы ҡыуанысымдың сиге булманы. Ысын бәхет ине был минең өсөн. Бик теләһәң, булдырып була, тип шатландым. Ынтылған хыялың тормошҡа ашһа, шул бәхеттер, һылыу. Әлбиттә, булырлығын ғына теләргә кәрәк. Мин ҡулымдың үҫеүен йәки күҙле булыуымды теләмәйем. Улары булмаҫ хыял. Ә булғандан сығып нимә эшләп була — шуға ынтылдым. Һылыу, күҙле көйө донъя матурлығын күрмәй, ҡаҙерен белмәй йәшәгәндәр ҙә бар бит. Һаңһау ирҙәрен элмәккә алып барып тыҡҡан бисәләр ҙә юҡ түгел. Ә еңгәң мине ғүмере буйы күҙле итеп йәшәтте. Балаларға, барығыҙ, атайығыҙға күрһәтегеҙ, барығыҙ атайығыҙ менән кәңәшләшегеҙ, ти ул. Үҙе лә миңә, Ғәбитулла, ҡара әле, тип һүҙ ҡуша. Уның ошо һүҙҙәре минең күңелде уғата үҫтереп ебәрә, йәнгә рәхәтлек бирә. Күҙле кешегә, ҡара әле, тигән һүҙҙәр бер ни түгел. Ә минең өсөн ул — йәшәү, икенсе һулыш, тын алыр һауа, сарсап килеп эсер һыу һымаҡ. Бына ниндәй ҡиммәтле һүҙ әйтә еңгәң миңә!

Үҙем бер ваҡытта ла зәғифлегемде байраҡ итеп алдан ялпылдатып йөрөмәнем. Һыңар ҡул көсөм менән, Ғәйшүрә менән булдырҙыҡ бөтәһен дә. Шуға ла кәбәнебеҙ бушаҡ ҡойолманы. Ҡарағайҙай улдарым үҫте. Баштарын һыйпап ҡарайым тиһәм, буйым саҡ етә. Ҡайындай зифа буйлы ҡыҙым бар. Ошо минең өсөн оло бәхет, һылыу. **Йәшәүҙең ҡаҙерен белеү, уны ҡаҙерләп йәшәй белеү бәхет,** тип уйлайым.

Беҙҙең бер ярҙамсыбыҙ ҙа булманы тиерлек. Бер кемгә лә һылтанманыҡ, бер кемдән дә ярҙам көтмәнек, аҡланманыҡ та, әргендекләнмәнек тә. Еңгәң дә ул яҡтан үҙемә оҡшаған. Үҙе әрһеҙ, үҙе намыҫсан. Кеше көнлө булып, йәлләтеп, үткәнемде һағынып зар илап, һуғышты ҡәһәрләп, Гитлерҙы әрләп, араҡы шешәһе ҡосаҡлап та үткәрә ала инем был ғүмерҙе. Ә мин балалар ҡалды-

рам. Алты бала ҡалдырабыҙ еңгән менән. Ғүмерҙәре булһын да, йәшәү ҡәҙерен белһендәр, һынатмаһындар ине. Хәҙер буйҙаҡ ҡартайған егеттәр ҙә күп, ти, бит. Ундайҙар бына, ысынлап та, бәхетһеҙ. Бер генә бирелгән ғәзиз ғүмерҙең ҡәҙерен белмәйҙәр. Күҙле бүкәндәй, иҫәпкә бар һанға юҡ булып йәшәгәндәрҙең ғүмерен йәлләйем, шуларға ҡарап йәнем әсей. Бер ҡустым армияла уҡ кемгәлер өйләнеп ҡалды ла ҡартайған көнөндә тыуған тупраҡ тартып ҡайтып инде. Ике бала тегендә тороп ҡалды. Исмаһам, хат та яҙмайҙар. Ҡартлыҡ көнөндә "атай" тип әйтерлек балаһы ла юҡ. Терһәкте тешләп булмай. Бына ҡайҙа ул бәхетһеҙлек. Мин күңел донъяһы менән йәшәйем. Ә ул Донъяны үҙем нисек теләйем — шулай күҙ алдына килтерәм. Ул донъя шул тиклем матур, шул тиклем хозур. Ғәйшүрәм, балаларым, өйөм, ауылым, ауылдаштарым — уларҙы мин үҙем теләгәнсә күрәм. Бик матур итеп күрәм. Ана шул үҙе бәхет бит, һылыу.

Моң тулы ҡара күҙҙәрен сырт-сырт йомған булып мөлдөрәтеп ҡараған Ғәйшүрә еңгәй, сибек кенә кәүҙәле ҡатыны етәгендә эйәреп йөрөгән һомғол буйлы Ғәбитулла ағай. Иҫәнголға йомош менән килгән саҡта, беҙгә килеп инһәләр, һәр ваҡыт күңелем тулып, күҙҙәремә йәш төйөлә торғайны. Бәхет тураһындағы ошо һөйләшеүҙән һуң бәләкәй саҡтан ҡалған ошо тойғо һыпырып алғандай юҡ булды.

Мин һине бәхетлелер тип уйлағайным...

(йәки кеше бәхетен үҙ ҡалыбыңдан сығып самалау)

...Хәлил ғаилә бәхете таба алмай байтаҡ ҡына йөрөнө. Уның өйләнмәйенсә оҙаҡлап китеүе үҙенә ҡарағанда ла туғандарын, дуҫтарын нығыраҡ борсоуға һалды. "Һаман өйләнмәгәнме ни ул?!" — тип аптырап бер-береһенән һорашалар. Һәр яҡлап килгән был ирҙең бығаса берәүҙе лә оҡшатмауы мөмкин түгел, берәйһен онота алмай йөрөйҙөр, тигән һығымта ла яһайҙар ҡайһы берәүҙәр. Икенселәре тегенеһе менән дә, быныһы менән дә таныштырып маташа. Юҡ. Әллә күңел һалырлығы булманы, әллә өйләнергә тигән маҡсат ҡуйманы — һәр хәлдә таныштырырға теләүселәрҙең күңелен төшөрөп, үҙенә дошман арттырып йөрөп ятты.

Кеше бер төрлө уйлай, тормош үҙенсә эшләй, тигәндәй, ҡырҡтың өҫтөнә баҫтым тигәндә, командировкаға тип китеп барышлай, автобуста йәнәш ултырып барған ҡатынға ғашиҡ булды ла ҡуйҙы. Юлы, әмәлгә ҡалғандай, оҙон-оҙайлы. Ҡатындың урыҡ-

һурыҡ ҡына биргән яуаптарынан Хәлил уның ауылда медсестра булып эшләүен аңлап ҡалды. Журналистарҙың ул яҡҡа ҡолаҡтары һаҡ. Кешене тел төбөнән аңлауға, ярым-ярты һүҙенән әллә ниндәй һығымталар яһауға маһирҙар. Тик ҡатын ҡайһы ауылдан икәнлеген дә, исемен дә әйтмәне. Һөйкөмлө генә йылмайҙы ла:

— Һеҙ йән яҙыусымы әллә? — тип, һөйләшеүҙе артабан дауам итмәҫлек итеп ҡырт өҙөп ҡуйҙы.

— Эйе, — тине Хәлил. — Йөрәгемә йән өргән йәндәрҙең иҫәбен алам.

— Ундай иҫәп алыусы булғас, ике бала әсәһенә бөтөнләй һүҙ ҡушмауығыҙ хәйерлерәк булыр, — тине Хәлиҙә тағы ла ҡырыҫыраҡ итеп. Йәшерәк сағы булһа: "Ярай, быйтаңлама. Оҡшамаҫлыҡ егет түгелмен дә инде", — тип кенә ҡуйыр ҙа биленән эләктерер ҙә алыр ине лә бит... Ирендәрен асыр-асмаҫ ҡына, ынйы кеүек ваҡ ҡына тигеҙ тештәрен күрһәтеп, баҫалҡы ғына һөйләшеүе, керпек һирпеп алғанда, уң күҙе янындағы ҡап-ҡара ғына миңенән, ике битендәге уймаҡтан нур сәселеп киткәндәй һөйкөмлө йылмайыуы үҙ булды ла ҡуйҙы. Әйтерһең, был ҡатынды күптән белгән, күптән яҡын итеп аралашып йөрөгән. Тик бына ҡырыҫлығын үҙҙәренең ҡолонона оҡшатты Хәлил. Эйе шул, ҡолонға оҡшаған, тип уйланы ул. Йәй көнө ауылға ҡайтҡанында ҡолондо ла, эргәһенә барып һөйәм тиһә, артҡы тояҡтарын һикертеп-һикертеп типмәксе булып, баш бирмәй маташа, усламдай ғына ялы ялпылдығы сыға, ҙур күҙҙәре ялт-йолт килә ине. Ҡолон киреләнгән һайын, Хәлил оторо сәмләнә төшә, ҡолондо тотоп яратҡыһы килә. Әле лә Хәлиҙәнең сала-сарпы һөйләшеүе, Хәлилгә арҡаһын ҡуйыбыраҡ борола биреп ултырыуы һөйкөмөн тағы ла арттырҙы ғына. Хәлил хатта бер юлы ошо ауылда тороп ҡалып, аҙ ғына булһа ла был һөйкөмлө ҡатын менән йәнәшә барырғамы, тип уйланы. "Ире берҙе һалып ебәрһә ебәрһен әйҙә! Был тиклем һылыу ҡатындың ире ниндәйерәк икән, күрермен!" — тигән дыуамал уй ҙа килеп инде зиһенен ярып. "Өйләнмәй йөрөү диуана малайға яҡынайта икән кешене. Вәт, иҫәр..." — тип үҙенән үҙе көлөп ҡуйҙы. Шулай ҙа Хәлиҙә төшөргә әҙерләнгәс, әйберҙәрен сығарышып, хушлашты ла туҡталыштағы ауыл исемен уҡып хәтеренә биклəп ҡуйҙы, автобус тәҙрәһенән ул киткән яҡҡа ҡарап барҙы. Әмәлгә ҡалғандай, ошо туҡталышта ингән өлкән йәштәрҙәге ҡатын Хәлил янына ултырҙы ла:

— Медсестрабыҙҙы оҙатып ҡалдың. Таныш-тоношоңмо әллә? — тип һораны.

— Эйе. Бергә уҡығайныҡ, — тине Хәлил, ни әйтергә белмәй, ир

ҡатыны намыҫына шик төшөрөргә теләмәй.

— Тағы ишәктәй йөкмәнеп ҡайтып бара. Шул ике балаһы тип йән ата инде. Әллә атайһыҙлыҡтарын һиҙмәһендәр, ти. Әллә башҡаларҙан кәм-хур булмаһындар, ти, әллә ҡайғыһын шул мәшәҡәт менән баҫа. "Ҡалаға барып кейем алдым малайҙарға", — ти тағы. Танышың булғас, Хәлиҙәнең ирен дә белгәнһеңдер? Шәп кеше ине. Хоҙайға ла һәйбәт кешеләр кәрәк, ти бит. Иртәрәк китте. Хәҙер ни хоҙай үлеменә ҡарағанда аварияға эләгеп үлеүселәр күберәк... Ахырыҙаман етеүе ошо инде... Ахырыҙаманда аңһыҙ үлем күберәк булыр тигәндәр...

Тағы ниҙәр һөйләгәндер был телдәр ҡатын, Хәлил иғтибар итмәне. Уның күҙ алдында Хәлиҙә генә ине. "Был хаҡта аҙ ғына алданыраҡ белһәмсе!" — тигән үкенесле уй йүгереп үтте. Үҙе үк ҡаршы сыҡты: "Мине кемгә һанайһың һин?!" — тип ҡыуып ебәрһә, ҡабат бара ла алмаҫһың, һыртын ҡабартып тик торор", — тип уйлап тынысланды ла тағы осрашыу хаҡында баш вата башланы. Бер аҙ барғас, үҙ алдына үҙе шатланып йылмайып ебәрҙе. "Һуң ни өсөн журналист мин?! Мин журналист бит! Оҙаҡламай медицина хеҙмәткәрҙәре көнө! Материал кәрәк. Бер юлы тағы очерк алып ҡайтасаҡмын. Бирәм тигән ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына, тигәндәр бит. Булды. Хәл иттем." Хәлил, район үҙәгенә барып, йомошон йомошланы ла, медицина работниктары көнөнә очерк яҙырға кәрәк, тип, район гәзите редакцияһынан Ташлы ауылының медсестраһы тураһында һорашты.

— Шәп кеше ул Хәлиҙә. Беҙ әллә нисә тапҡыр яҙҙыҡ уның тураһында. Номер һайын тигәндәй, рәхмәт хаттары баҫылып тора, тик республика матбуғатында ғына яҙғандары юҡ, — тинеләр. Хәлилгә бөтөнөһө лә ҡулай килеп кенә торҙо. "Яҙмыш" тигәнең, бәлки, шулай булалыр, тип уйланы, ҡыуанып. Райондың баш врачынан рөхсәт алып, Хәлиҙәнең ауылына юл тотто.

Ике көндән медпунктҡа Хәлил килеп ингәс, Хәлиҙәнең аптырауының сиге булманы. Үлгән ире кеүек: "Һаулармыһығыҙ!" — тип һаулыҡ һорашҡас, тәне буйлап еңелсә земберләү үтеп китте хатта.

— Мин һеҙҙең турала гәзиткә яҙырға килдем. Райондан тәҡдим иттеләр. Мин тәғәйенләп килгән кешенең һеҙ икәнлеген белгән булһам, бер юлы төшөп ҡалыр инем. Анау тиклем йөктө бер үҙегеҙҙән күтәртмәҫ инем, — тип, шаштырып та ебәрҙе Хәлил.

Хәлиҙә, минең турала район гәзитенә яҙҙылар инде, рәхмәт, тип, баҫалҡы ғына баш тартты. Хәлил үҙ һүҙендә ныҡ торҙо һәм Хәлиҙәнең медпунктына инеп сыҡҡан бер нисә кеше менән һөйләшеп тә алды. Бер өлкән инәйҙән:

— Дарыуҙар етәме? — тип һорағайны:

— Дарыуҙы нимә тип уйлайһың һин, мырҙам? Дарыу – ул һауыҡтыра торған сара. Шулаймы? Бына мин ошонда килеп, Хәлиҙәнең йылмайыуын күрәм дә һауығып ҡайтам. Ҡултыҡ аҫтыма градусник ҡына ҡуйһа ла шифаһы тейә. Хәлиҙә – үҙе дауа ул, — тип маҡтай башланы Хәлиҙәне. "Әһә, йылмайыуы — үҙе шифа, тип атармын очеркты", — тип яҙып та ҡуйҙы.

Инәй кешенең маҡтауынан һуң, Хәлил медсестраға:

—Өфө һынлы Өфөнән килгәс, буш ҡул ҡайтыу юҡ. Яҙырға тигәс, яҙам. Тик очерк ҡоро ғына килеп сыҡмаһын өсөн, үҙ тормошоғоҙҙан алып иҫегеҙҙә ҡалған берәй ваҡиға тураһында һөйләгеҙ. Эш тураһында булмаһа ла ярай. Бер нисә ауылды хеҙмәтләндергәс, төрлө хәлдәргә юлығып тораһығыҙҙыр бит?

— Ашығыс ярҙам һорап төрлө яҡтарҙан йыш киләләр. Минең биләмәгә инмәгән ауылдарҙан да килеп етәләр ҡайһы ваҡыт. Ундай саҡта эшме, йоҡомо, баламы — ҡарап тормайһың. Йүгерәһең. Ҡатындар балаға таңға табан ауырып китеүсән. Шуға ашығыс ярҙам күрһәтеү өсөн кәрәк-яраҡтар һәр саҡ әҙер тора. Үҙ балаларыңды ла оноторға ярамай, ашығыс ярҙам да кәрәк. Ҡырҡа ҡырҡылырҙай булаһың ҡайһы саҡта.

— Бына шундай саҡтарҙа, әйтәйек, төндә, таң менән юлға сыҡҡанда, берәй хәлгә юлыҡҡанығыҙ юҡмы? Ауыл менән ауыл араһын төндә үтеү хәүефле түгелме?

— Ҡурҡыныс инде... Бер ваҡыт шулай таң менән ярҙам һорап өйгә шылтыраттылар. Балаларға күҙ-ҡолаҡ булырға, тип, таңғы йоҡоһонан уятып күрше инәйҙе алып килдем дә киттем йәйәүләп. Йылға аша һалынған күперҙән сыҡҡас алыҫ түгел ине ауыл. Күҙ аҫҡыһыҙ буран, ҡаршы ел. Юлдан яҙлыҡҡанмын. Үҙем күпер тәңгәлендә торам, ҡайһы тәңгәлдән китергә белмәйем. Ҡайһы яҡҡа барһам да батам. Буран аҙыраҡ баҫылғайны, алда бер ҡоролма күреп ҡалдым да шул яҡҡа табан ыңғайланым. Ферма булып сыҡты. "Юл ошо синдә булырға тейеш. Ферма эргәһенән йөрөй торғайным," — тип уйланым. Боролдом. Ашығыбыраҡ атлайым тиһәм, ҡаршымда бүре ултыра. Миңә текләгән, ҡуҙғалмай. Туҡтап ҡалдым. "Ни эшләп ҡуҙғалмай икән?" — тип уйлайым. Тик торам. Ҡымшанырға ла ҡурҡам. "Балаларым... Инде әсәйһеҙ ҙә ҡалдылармы? Сабыйҙарым..." — тигән ҡурҡыныс уй йөрәкте уртаға ярырҙай булып өйкәй. Күпме торғанмындыр — белмәйем, бер аҙ яҡтыра төшкәндәй булды. Ферма яғында ат бышҡырған, сана табаны шығырлаған тауыш ишетелде. Ипләп кенә күҙ һалам. Йөҙ аҙым самаһы алыҫлыҡта сана егелгән ат үтеп бара. Ылаусы минең

яҡҡа боролоп та ҡарамай, исмаһам. "Кешеләр йөрөй башланы. Улбыл була ҡалһа, ярҙам һорап ҡысҡырырмын, тип уйланым да һаҡ ҡына артҡа сигенә башланым. Бүре нисек ултырған, шулай ҡуҙғалмай. Ултырған урынында туңған, тиерһең. Күҙҙәре генә һазлап ялтырай. Мин күҙҙәренә туп-тура ҡарарға тырышам. Бүренең күҙҙәренә туп-тура ҡараһаң, үҙе ҡурҡа, тип ишеткәйнем. Белмәйем, ул буранда күҙҙәремде күрҙеме-юҡмы — һәр хәлдә артҡа сигенгәндә, һаман күҙҙәренә теклəй-теклəй барҙым. Аҙ ғына икенсе төрлө хәрәкәт эшләһәм, ҡапыл өҫкә һикереп ҡуйыр тип ҡурҡам. Ә ул ни эшләптер ҡуҙғалмай. Туңған, тиһәм, күҙҙәре ялтырай. Тере тиһәм, ҡуҙғалмай. Ырғырға уңайлы мәл көтәме икән тип, тағы шөрлəй төштөм. Ферма яғында тағы бер һыбайлы күренгәс кенә, күңел йылынып китте. Тиҙлекте өҫтәнем. Боролайым да һыпыртайым, тип уйлайым. Көрт тәрән. Һаман артым менән генә барам. Шулай бара торғас, аяҡтарым ҡатҡыл ергә баҫты. Тынысландым. Ат юлына килеп сыҡҡанмын. Тағы бер ылау күренде. Ҡыуаныстың сиге юҡ. Ҡул болғаным. Санаға нисек килеп еткәнемде, нисек ултырғанымды ла һиҙмәй ҡалдым. Килеп ултырғас, ылаусының кем икәнлеген дә абайламайым әле. Ҡурҡыуымданмы, өшөүемдәнме, шатлығымданмы тыным ҡурыла, һөйләшә алмайым. Ҡараһам, беҙҙең яҡта тәбиғәт һаҡлау буйынса инспектор Мөхәррәм ағай булып сыҡты.

— Хәлиҙә һылыу, ни эшләп йөҙөң ап-аҡ? Ни булды? Ныҡ өшөнөңмө? Толоп бирәйемме әллә? — ти. Һүҙемде әйтә алмайым. Теш тешкә теймәй. — Ныҡ өшөгәнһең, ахыры, һылыу. Тотош ылауҙы дер һелкетәһең бит! — тип шаярта-шаярта, минең яҡҡа толобон шылдырып һалды. Ҡурҡыуымды һиҙҙермәҫкә, һыр бирмәҫкә тырышам, шулай ҙа гел йөрөй торған юлым бит, әйтмәй ҙә ярамай. Бер аҙ тыныслангас:

— Ферма янында бүрегә тап булдым. Әле лә унда ултыра. Мылтығығыҙ булһа, атып алаһығыҙмы әллә? — тием.

— Күкме? — тип һорай.

— Күк шикелле. Уны ҡайҙан белəһегеҙ?

— Күптән йөрөй ул бер ҡарт күк бүре. Тешһеҙ. Ташланып та әллә ни ҡыла алмаҫ ине. Ферма артында ни емтек бығау тапҡандыр, шуға һиңə иғтибар итмəгəн инде, — ти, үҙе хахылдап көлə. Уның шулай вайымһыҙ хахылдауы ҡурҡыуымдан бер аҙ айнытып ебәрҙе. Ə ул һыны ҡатып көлдө-көлдө лə:

— Шунан, һылыу, ҡурҡыуың бер аҙ баҫылдымы? Ҡотоң ҡайттымы? Уйҙарыңдан албырғатмаһам, йөрəк ауырыулы булып ҡалырһың, тип шарҡылдап көлдөм. Юғиһə, йөҙөң ап-аҡ булып,

ҡан төҫө ҡалмағайны. Һинең ҡурҡыуың ҡыҙыҡ булған өсөн көлмәнем, — тине. Миңә, ысынлап та, еңел булып ҡалды. — Ярай, һылыу, ул тешһеҙ бүрене атып алырбыҙ. Һинең йөрөр юлдарыңда ни ҡамасаулаһа, шуны ҡырырмын. Донъяға изгелек эшләп йөрөйһөң бит. Әле кем саҡырҙы һуң? Мөхәммәттең ҡатыны балаға ауырый башлағанмы әллә? Мөхәммәт үҙе Себерҙә эштә. Ҡайтыуына Ҡуҙыйкүрпәс кеүек малай ҡаршы алып торһа, шәп була инде!

— Һеҙ күрәҙәсе һымаҡ, кешеләр тормошон да, бүреләр тормошон да тотош белеп тораһығыҙ икән, — тинем аптырап.

— Инспектор бит мин, — тип көлә. — Ошо ауылда һунар ҡомары ҡайтмаған өлкән генә бер ағай бар. Инеп уға әйтеп китәйем, атып алһын әйҙә бүрене. Минең киленем булыр, һинең күңелең булыр, тигәндәй, әйҙә, олоғайған һунарсыға — кинәнес, туҡтауһыҙ юл йөрөгән һиңә тыныс булһын. Һине алып барып ҡуяйым да... — тип, атын йәһәтләтте. — Әйҙә, малҡай. Мөхәммәттең ҡатыны өсөнсө бала көтә бит, ашығырға кәрәк, — тине, әллә миңә, әллә атына өндәшеп.

Йыш булмаһа ла бына шундай хәүефле хәлдәр осрағылап тора. Эш бит. Өс ауылды хеҙмәтләндерәм. Түрәләрҙең һәр береһендә бер машина. Их, миңә бер көтерпил генә бирһәләр ҙә ауырыған кешеләр яныма тиҙерәк барып етер инем, тип уйлап ҡуям. Ҡайһы саҡта бер-бер артлы һәр береһе бер машинала эргәнән жыйтлап үтеп китәләр. Әйләнеп тә ҡарамайҙар, исмаһам.

— Һиңә ләме?

— Медсестра икәнлегем алыҫтан танылмай бит. Белһәләр, бәлки, туҡтарҙар ине.

Хәлил медпунктҡа килгән тағы бер нисә кеше менән әңгәмәләште. Хәлиҙәнең йомшаҡ ҡуллы "кендек инәһе" булыуын бөтөнөһө лә маҡтап телгә алды.

Хәлил был командировкаһынан ҡанатланып ҡайтып инде һәм, редакторға ғариза яҙып, ошо зона буйынса үҙхәбәрсе итеп ебәреүҙәрен һораны.

Бер аҙҙан республика гәзитендә Хәлиҙә тураһында бик матур очерк баҫылып сыҡты. Хәлил, һылтау өсөн гәзит тотоп, күстәнәстәр алып тағы ауылға килеп етте. Малайҙар менән таныштым. Был ауылға килер йомоштары йышайып китте. Ике малай ҙа уға тиҙ генә эҫенде. Ир балаларға ир кеше менән аралашыу яҡшыраҡ булдымы, үҙ атайҙары һымағыраҡ һөйләшеүе яҡынайттымы — ҡайһылай ғына булмаһын, күп тә үтмәне, Хәлил малайҙарҙың үҙ кешеһенә әйләнде. Ҡырҡ йәшенә хәтлем бер кемде лә оҡшата алмай йөрөгән Хәлил мөкиббән ғашиҡ булды. Хәлиҙәнән башҡа

тормошон күҙ алдына ла килтермәне. Ул "түбәһе күккә тейгәндәй, аяҡтары ергә теймәй осоп барғандай" йөрөнө. Үҙен сикһеҙ бәхетле тойҙо. Итәғәтле, ипле был кеше менән Хәлиҙәнең дә бәхетле булырына берәү ҙә шикләнмәй ине.

Бер йылдан ашыу ваҡыт үткәс, Хәлил өйләнешергә тәҡдим итте.

— Һинең өсөн ғаилә тормошоноң башы. Минең өсөн ул дауамы. Килешә алырбыҙмы һуң? Балаһыҙ йәшәй алмаҫһың. Уртаҡ балалар булғас, малайҙар ят тойолмаҫмы? — тип, төрлө һылтауҙар менән баш тартмаҡсы ине Хәлиҙә, Хәлил уны күндерҙе. Әйтергә түгел, матур тормош ҡорҙолар улар. Хәлил ғаилә бәхете таптым, тип ҡыуанды. Хәлиҙәһе бала табырға ла ризалашты. Балаларға ҡараш айырмалығы булмаһын, тип ныҡ теләгәндер Хәлиҙә. Тәңре уның теләген ҡабул ҡылғандыр. Әмәлгә ҡалғандай, ике ҡыҙҙары булды. Ҡыҙҙар иркә, һөйкөмлө инеләр. Малайҙар бик яратты уларҙы. "Түңәрәк бәхет" ошо булалыр, тип, ғаилә өсөн тырышты ла тырышты Хәлил. "Хәлиҙә бәхетле. Уның бәхете — минең бәхетем", — тип ҡыуанды, балалар менән көңгөр-ҡаңғыр һөйләшеп, донъя көтөүгә ихлас Хәлиҙәгә ҡарап. Хәлиҙә, балалар өсөн йәнен фиҙа ҡылырҙай әсә булды. Хәлил хатта аптырап та ҡуя, үҙеңде лә ҡара, үҙеңә лә ваҡыт бүл, тип әйткеләп тә ала ине.

Тик... Ни эшләп йәшәйештә "тик" тигән төшөнсә бар икән?

Бер ваҡыт Хәлил, телевизорҙан тапшырыу ҡарарға ултырғайны, эштә күҙлеген онотоп ҡалдырғанын иҫенә төшөрҙө. Хәлиҙәнең кәштәһендә ятҡан күҙлекте алып кеймәксе булып:

— Хәлиҙә, һинең кәштәңдәге күҙлек плюсмы? — тип һораны.

— Эйе. Плюс бер.

— Кейеп торайым әле. Үҙемдекен эштә ҡалдырғанмын.

— Ал.

Әммә Хәлил Хәлиҙәнең күҙлеген түгел, ә үрҙәрәк ятҡан икенсе күҙлекте һораған икән. Хәлиҙә, ал, тигәс, Хәлилдең үрелеүе булды, күҙлек иҙәнгә ҡойолоп төштө лә селпәрәмә килде. Хәлиҙә иренең аварияға эләккән саҡтағы күҙлеген ҡоршап ҡына һалып ҡуйғайны. Ыуалып төшөргә генә торған күҙлек тотош онталды. Алтын ялатылған, бер аҙ йәмшәйгән тирәсе генә ҡалды. Хәлиҙә йүгереп килеп сыҡты ла:

— Уй-й-й... — тип, күҙлек тирәсен ҡулына алып, сеңләп кенә илап ебәрҙе.

Хәлил, был хәлгә аптырап ҡалды, ни әйтергә, ни эшләргә белмәне. "Иҫке күҙлек өсөн ни эшләп шул тиклем иламаҡ кәрәк?!" — тип, ни эшләптер әле күҙлек алған, һәр ваҡыт ябыҡ булған кәштәгә күтәрелеп ҡараны ла барыһын да аңланы. Унда тап ошо

күҙлекте кейеп төшкән ирҙең, Хәлиҙәнең тәүге иренең, фотоһы тора ине. Хәлилдең мейеһенә иҫәпһеҙ-хисапһыҙ уйҙар, икеләнеүҙәр килеп тулды. "Тимәк... Тимәк..." Был уй йомғаҡтары "тимәк" тигән һүҙ менән башлана ла аҙағына тиклем барып етмәй, тағы яңыһы килеп инә. Тағы, тағы... "Тимәк... Тимәк..." Ул бер ишеккә йүнәлде, бер кире боролдо. Шулайтып аптыранып торғанда, телевизор ҡарарға йыйынған балалар:

— Атай, хәҙер башлана бит, тиҙерәк кил, — тигәс кенә айныған-дай итте лә улар янына сығып ултырҙы. Тик ниндәй кино ҡараған-ын да, балаларҙың ни һөйләгәнен дә, ни тип һорау биргәндәрен дә, үҙенең ни тип яуап ҡайтарғанын да хәтерләмәне ул. "Ни булды был? Артабан ни хәл йәшәргә?"

Уйлана торғас, бер һығымта яһаны Хәлил: ул үҙе ғәйепле. Ул Хәлиҙәнең күңелен яулай алмаған. Ул хаҡта уйламаған да. Ҡатыны-ның холҡона төшөнөп етмәгән: йомоғораҡ, өндәшмәҫерәк булыуын үтә баҫалҡылыҡҡа һанаған, һалҡынлығын холҡондағы ҡырыҫлыҡ-ҡа ҡайтарып ҡалдырған. Уның күңел донъяһы Хәлил өсөн бикле булған. Был турала Хәлил башына ла килтермәгән. Хәлиҙә ике ут араһында янған. Хәлилгә бала табып та, ғаиләлә именлек, тәртип булдырып та, өлгөлө ҡатын булып та тырышҡан, ә күңелендә тәүге мөхәббәтен йөрөткән. Хәлил һалған уны шундай ғазаптарға. Хәлиҙә тәүге иренә булған сикһеҙ мөхәббәтен мең йоҙаҡтар менән бикләп тоторға, йәшерергә теләһә лә, "быуа йырылған".

Эске донъялағы үҙгәреш йә һағышлы йыр, йәки хисле шиғри юлдар, йәки табан аҫтарында үлән көйҙөрөрлөк ҡайнар көрһөнөү, йә биттә юлаҡ-юлаҡ эҙ ҡалдырырлыҡ әсе күҙ йәштәре булып тышҡа сыға. Тәбиғәттең ҡануны, кешенең булмышы шулай, юғиһә, йә мейегә, йә йөрәккә ҡан һауа. Хәлиҙә эске кисерештәрен күпме генә йәшереп йөрөһә лә, үҙ яҙмышына күнергә тырышһа ла күңеленә һеңеп ҡалған тәүге һөйөүен юғалтыу ҡайғыһы ҡайнар күҙ йәштәре булып атылып сыҡты.

Хәлиҙәне бәхетле иттем, тип тәрән ышанған, ун йыл бергә йәшәгәндән һуң, тәүге ире менән йәшәгәнгә ҡарағанда минең менән бергә күберәк йәшәне инде, тип тыныслanған, ҡатынының бәхетле булыуына бөтөнләй шикләнмәгән Хәлил үҙен ғәйепле һананы.

Хәлиҙә лә өҙгөләнде.

..."Үлгәндәрҙе кире ҡайтарып булмай. Мәңгелеккә киткәндәр хаҡында оҙон-оҙаҡ ваҡыттар буйы уйланырға ярамай. Үҙеңдең йөрәгеңә лә ҡан һауа, әруахтарҙы ла борсойһоң. Улар теге донъяға яраҡлашырға тейеш, ә һин уны туҡтауһыҙ борсойһоң, хәтерләү-

ҙәрең менән үҙ тормошоңда йөрөргә мәжбүр итәһең. Был икегеҙ өсөн дә дөрөҫ түгел", — тип, тыйып киткәйне әсәйем. Ә мин уның тураһында уйламай булдыра алманым. Онотоуҙың икенсе юлдарын табырға, икенсе эш менән мауығырға, Хәлил менән дә тышҡы күңел менән генә йәшәмәҫкә, ә бар күңеленде бирергә кәрәк ине миңә," — тип уйланы Хәлиҙә лә. Был хәлде ул күңел хыянаты тип ҡараны.

Хәлиҙә, ғаиләһенең тыныс, матур тормошон һаҡлап ҡалырға, балаларҙы бәхетһеҙ итмәҫкә, Хәлилдең дә уғата яҡшылығына изгелек менән яуап бирергә, күңел берлеге табырға кәрәк, тип уйлана башланы.

Бер аҙҙан, шатлыҡ, бәхет, татыулыҡ булып, Хәлилдең тап үҙенә генә оҡшаған малай өҫтәлде был ҙур ғаиләгә.

Шулай итеп, был матур ғаиләгә ҡот ҡайтты.

* * *

Халыҡ яҙмышы менән сағыштырған саҡта ла шулай. Халыҡтың эске булмышы, күңел донъяһы тұңәрәк бөтөн булмаһа, рухи байлыҡ тупланмаһа, халыҡ рухы ҡанаттарын йәйеп, кирелеп китеп үҙенең бар мөмкинлеген файҙаланып ижад итеп йәшәмәһә, тышҡы бәхет — матди байлыҡ ҡына уны тулыһынса ырыҫлы итә алмай. Тәбиғәт балаһы булған башҡорт халҡы хәҙерге заман шарттарына яраҡлашып нисек кенә мул йәшәргә ынтылмаһын, күңел донъяһын бәхетле итмәһә, ҡасан булһа ла ул Хәлиҙәнең сеңләп илауы һымаҡ килеп сығасаҡ.

"Һәр кеше үҙ бәхетен үҙе ҡоя," — тине Ғәбитулла ағай Шәрипов. Хәлиҙә был хәҡиҡәтте яҡшы аңлай, ғаилә мөнәсәбәтендәге аңлашылмаусанлыҡты тиҙ генә яйға һалып ебәреү яғын ҡарай. Һәм дөрөҫ эшләй. Аҡыл менән хәл итә. Ҡайһы саҡта тойғоларҙы теҙгенләү бик тә ярап ҡала.

"Һәр кеше үҙ бәхетен үҙе ҡоя"

Мәҙинә исемле апай бар ине. Уның матурлығы әле лә күҙ алдымда ғына. Ихлас итеп көлөп ебәрһә — күҙ ҡамаштырырҙай апаҡ тештәренә, йөҙөнөң нурланып балҡыуына хайран булаһың, йырлап ебәрһә, донъялағы бар мәшәҡәттәреңде онотоп, уны ғына тыңлайһың. "Камил башҡорт моңо ниндәй булырға тейеш?" — тигән һорау булһа, Мәҙинә апайҙы тыңлағыҙ, тип әйтер инем. Бер ваҡыт Өфө артистары, уның йырлағанын ишетеп, үҙҙәре менән

алып китмәксе булғандар. Тик Мәҙинә апайҙың Мәхмүт тигән егетте яратып йөрөгән сағы — артистар күпме өгөтләһәләр ҙә бармай ҡалған.

Өйләнештеләр Мәхмүт менән. Мәхмүт еҙнәйҙе алыҫтағы бер ауылға колхоз рәйесе итеп ебәрҙеләр. Бәхеттең етенсе күгендә ине Мәҙинә апай. Нисек йәшәгәндәрҙер — белмәйем.

Бер саҡ әсәйем һыйыр һауырға сыҡһа, ҡапҡа төбөндә генә арбала бер бала ултыра, ти. Ҡараһа, Мәҙинә апайҙың улы булған. Биш йәшлек балаһын беҙгә ҡалдырып, башы һуҡҡан яҡҡа сыҡҡан да киткән Мәҙинә апай. Баҡһаң, Мәхмүт еҙнәй уҡыған ерендә икенсе бер ҡатынға өйләнгән дә ҡуйған.

— Мәҙинә Медныйҙа эшләй икән хәҙер, — тигән хәбәр ишетелгәс, әсәйем хат яҙҙыртты. Бер аҙҙан Мәҙинә апай ҡайтып балаһын алып китте. Балаға ете йәш тулғайны инде. Медногорск ҡалаһында кейәүгә сыҡҡан, ҡәҙимге ғаилә ҡороп йәшәп ятҡан ерҙәренән ауылға ҡайтырға булғандар. Өй һалып ингәндәр. Был саҡта мин Өфөлә инем инде.

Бер йылы Мәҙинә апай беҙгә килде. Һаман шулай уҡ матур, һөйкөмлө итеп йылмая. Тик ҡап-ҡара күҙҙәрендә тәрән моң, һағыш.

— Һылыу, былтыр Ибрайға барып мәктәптә йәшәгәнһегеҙ, – тип ишетеп, хатта йәнем әсене инде. Туғанһыҙ кешеләй булып улайтып йөрөмәгеҙ. Үҙемә килегеҙ. Өйөбөҙ иркен, һөт-ҡатыҡ мул. Миңә ауыр саҡта, әсәйең баламды ҡарап ҡалғайны. Бер изгелегем тейер әле, тип уйлағайным. Килегеҙ, — тип саҡырҙы.

— Рәхмәт, апай. Беҙ урын юҡлыҡтан мәктәптә йәшәмәнек ул. Ибрайҙа ла әллә нисәмә кеше үҙ өйөнә саҡырҙы. Ишле балалар менән кешегә ҡамасау булмайыҡ, тинек.

— Беҙгә бер ҡамасау ҙа булмаҫ. Еҙнәң йәй буйы көтөүҙә, балалар лапаҫ башында йоҡлай. Йәйҙең урыны иркен. Бер өй тотош үҙегеҙгә булыр, — тине.

Диҡҡәт ихлас риза булды. Уның төп маҡсаты — йәй көнө ғаиләһе ауылда булһын, һөт-ҡатыҡ эсһен, саф һауа һулаһын, һыу инһен.

— Рәхмәт, ҡайынбикә, барырбыҙ. Быйыл минең экспедициям шул тарафтарға, — тине.

Тик Нәсимә һылыуым ғына икеләнде.

— Ай-һай, апай, балаларыңды йонсотоп ҡына ҡайтмаһаң ярар ине. Әйтеүен мул һөйләй ҙә ул, күңеле диңгеҙҙәй уның, тик әллә нисек, ауырыу кеше һымаҡ күрәм мин уны хәҙер, — тине. Нәсимә һылыуым һүҙҙе дөрөҫ кенә һөйләй ҙә ҡуя. Тик икеләнергә, икенсе

урын һайларға вағыт ҡалмағайны. Диҡҡәт әйберҙәрҙе тейәп, экспедиция машинаһы менән киткәйне инде.

"Балалар менән үҙем булам бит, ас итмәм, үҙ балаларым — үҙ хәстәрлегем", — тип уйланым.

Киттек Мәҙинә апайҙар ауылына. Донъялары, ысынлап та, етеш, бөтөн. Өй ҙә иркен, һәйбәт. Кәртә-ҡура ла төҙөк. Еҙнәй көтөү көтә. Таң һарыһы менән сығып китә лә, ҡараңғыла ғына ҡайтып инә. Малайҙар һәр береһе үҙ көнөн үҙе күрә. Олоһо атаһы менән, башҡалары йә колхоз эшенә сыҡҡылай, йә балыҡ ҡармаҡлай. Мәҙинә апай үҙе лә өйҙә әллә ни тормай, бәләкәй ҡыҙын эйәртә лә сығып китә. Ҡулында бәйләм. Беҙҙең яҡта бәйләм тотоп йөрөмәгән ҡатын-ҡыҙ юҡ. Иртә менән китә лә кисен генә ҡайта. Йылға буйҙарында ла була ул, яланға ла сыҡҡылай, күршеһендә лә ултыра. Беҙ үҙебеҙсә йәшәнек.

Бер саҡ йәш балам төнөн илай башланы ла, башҡаларын уятмайым тип, тышҡа алып сыҡтым. Айлы матур төн. Тотош тирә-яҡ ай нурына сумған. Ошо тиклем матурлыҡты ни эшләп йоҡлап үткәрәбеҙ икән, тип уйлап ҡуйҙым ирекһеҙҙән. Ҡараһам, ҡойма буйында Мәҙинә апай ултыра. Аптырап киттем. Ул һиҙҙе быны:

— Аптырама, һылыу. Хатта эсем боша. Быйыл бигерәк ауыр. Йәшәүҙән толҡа тапмайым. Үҙемде үҙем әрләп үтте инде ғүмерем. Быйыл үлермен ул. Тик балаларым йәл. Бигерәк яратам бит уларҙы. Малайҙарым үҫте лә ул. Ҡыҙ баламды ҡыҙғанам. Яңғыҙы ғына бит. Әллә ни эшләп иптәшкә тағы бер ҡыҙым булманы. Еңгәй ҡулына ҡарап ҡалыр инде. — Мәҙинә апай тәрән итеп көрһөндө лә:

Уф, тиһәм, үләндәр көйөр,
Эсемдәге ялҡынға, — тигәндәре ошолор, — тине.

— ...Бер кемгә лә бәхет бирә алманым, һылыу. Ҡоро шәүлә генә ул мин. Тәүге еҙнәң менән генә булған йәшәүемдең мәғәнәһе. Күңелем уны ғына юҡһына. Үҙемде йыуатып та ҡарайым, алдаштырып та маташам. Һуғыш ваҡытында күпме йәп-йәш ҡатындар ирҙәрен юғалтҡан. Улар ҙа һинән кәм яратмағандыр бит, тип әрләйем үҙемде. Уларҙыҡы күҙ алдында йөрөмәгән шул, тип тағы ҡайғырыуымды аҡлайым. Күңел һала алманым был еҙнәңә. Йәлләйем генә. Һалҡынмын. Балаларҙы ла яратам да ул, яратып үҫтерҙем, тик хәҙер күп уйланыуҙан башым әйләнә, ауырыйым. Эс яныуҙарымды баҫырға йырлап ебәрәйем тиһәм, тауышым да юҡ хәҙер.

Баштан дөрөҫ булмаған. Күтәрә һуғып, барыһын ташлап уҡырға китергә лә барырға ине. Ҡайғы баҫам тип, кеше икенсе

берәүгә кейәүгә сығамы, иҫәр! Уны ла бәхетһеҙ иттем. Бахырғынам, кәләшем, тип ҡайтҡан булалыр инде өйгә. Ә мин уны күрмәҫ борон тип ҡасам. Йылға һыуына битемде йыуам да йөҙөм һарыһы һыуға сыҡманымы икән? — тип ҡарайым.

— Бына тигән балаларың бар, апай...

—Бөтәһен дә аңлайым мин, һылыу. Аңламағандан түгел. Балаларымды башҡа кешегә ҡарағанда ла нығыраҡ яратам. Ни эшләп улай тиһеңме? Мин бит уларҙы әсәй булып та яратам, йәлләп тә яратам, айырылышыу яҡынлашҡанын һиҙеп тә яратам. Әсә йылылығы бирә алманым, тип үҙемде ғәйепләп тә яратам. Арыу ғына кәләшкә тап булһындар инде. Кеше бит яратылырға тейеш. Сабый саҡтарында имеҙеп ултыра торғас, һыңҡылдап илап ебәрә торғайным, сабыйҙарым күҙгә теклəп ята ла миңә ҡушылып илай. Һиңә ошоларҙы һөйләрмен, тип саҡырғайным да, һылыу. Мәшәкәттәрең күп бит. Йәлләп китәм. Бынығы сабый ғына, тыуары тағы бар. Ауырлы саҡта ла, имеҙгән саҡта ла борсолорға ярамай. Шуға һөйләмәй инем. Яратыу ғазаптары бигерәк ҡыйын. Һиңә һоҡланам да, ҡыуанам да. Яратҡан кешең менән йәшәүҙән дә ҙур бәхет юҡ икән. Оҙаҡҡа булһын бәхеткәйең.

...Ҡайтҡан саҡта, Мәҙинә апай менән бик моңһоу айырылыштыҡ. Күп тә үтмәй уның вафаты тураһында хат килде.

Мәҙинә апай, ысынлап та, үҙ яҙмышына икенсе төрлө ҡараһа, мәсьәләне башҡасараҡ хәл итһә, был фажиғә булмаҫ ине. Мәхмүт еҙнәй өйләнгән икән — "тәбиғәт шулай ҡушҡан, мине ғаилә, ир ҡарау яуаплылығынан бушатҡан, мин һиңә талант бирҙем, халыҡҡа хеҙмәт ит тауышың менән, тигән тәбиғәт яҙмыштары", тип, йәшәү рәүешен бөтөнләй икенсе яҡҡа борорға ла ебәрергә кәрәк булған. Һәм, ысынлап та, шулай. Ул бына тигән тауышын ялған мөхәббәткә алмаштырған. Тәбиғәт тәғәйенләнешенән тайпылған. Тәүге еҙнәй Мәҙинә апайҙың матурлығына һоҡланғанмы, ғашиҡ булып өйләнгәнме — юҡмы, әммә үҙен генә яратыуҙан, бөтә матур нәмә минеке генә булырға тейеш, тигән ҡараштан сығып өйләнгән һәм уны бәхетһеҙ иткән. Мәҙинә апай уның матур һүҙҙәренә алданған. Әммә бер тапҡыр хата эшләнгән икән, ни эшләп уны тәрәнәйтергә? Был хатанан һабаҡ алырға ла артабан йәшәргә, яҙмышыңды өр-яңынан һәм икенсе йүнәлештә ҡора башларға ине. Йырсы булырға ынтылырға кәрәк булған Мәҙинә апайға. Яратмаған кешегә кейәүгә сығыу юлы менән мөхәббәт ялҡынын һүндереп булмай. Бәлки, үҙ фекерҙәше, моңдашы, рухташы табылыр ине аҙаҡ.

Һәр кеше үҙ ғүмеренең һуңғы көндәрендә йәшәлгән йылдарына, башҡарылған эштәренә йомғаҡ яһай. Уйлана. Ошондай мәлдә, матди яҡты ла, шәхси яҙмышҡа ҡағылған мөнәсәбәттәрҙе лә иҫкә алмай. Был тормошта рухи йәһәттән эшләнгән эштәрен генә барлап сыға. Рухи йәһәттән башҡарылған эштәре самалы булһа, ул кеше тәрән үкенә. Сөнки ул, ниндәй генә кимәлдәге кеше булмаһын, кешелек донъяһын алға этәреүсе көстөң, хатта шул уҡ матди байлыҡты булдырыусы ҡеүәттең дә рухи алға китештән икәнлеген аңлай. Һәм әгәр рухи байлыҡ ишәйтеүгә ни ҙә булһа өҫтәмәһә, ҡулынан килгән саҡта ла эшләргә теләмәһә, кешелек донъяһының алға китешенә индергән өлөшөнөң самалы ғына булыуын, хатта алға китеш өсөн ғүмерен арнағандарға аяҡ салыуын аңлаһа, уны ауыр ҡайғы баҫа. Йәне тынғыһыҙлана, йәндең тәндән айырылыу мәле ғазаплы була.

Бәғзе берәүҙәргә бындай тойғо иртәрәк килә. Күңелдә үҙәк өҙҙөргөс шыҡһыҙ бушлыҡ тойола башлағас, улар, ни өсөн бәхетем китек, ни өсөн тулы түгел, барыһы ла бар, бысағым майҙа, ҡалағым балда, тип уйлана башлай. Ундай кешенең күңел бойоҡлоғона иғтибар иткән яҡын таныш-тоноштары иһә, кешенең нәфсеһе сикһеҙ, уға һаман да ниҙер етмәй, тип уйлай. Ә кеше үҙе, сәбәптең ниҙә икәнлеген ныҡлап төшөнөп етмәгәнлектән, ошо бошоноуҙы баҫыр өсөн ялтырҙан ялтырға, татлынан татлыға ынтылып маташа. Йорт-ҡураһы – мебель келәтенә, үҙе тәмле-татлы аҙыҡ эшкәртеүсе машинаға әйләнә. Был да уны ҡәнәғәтләндермәй. Ул хатта күңел бушлығының ысын сәбәбен аңламағанлыҡтан, ауырыуға һабыша, сит илдәрҙең санаторийҙарына йөрөй, иң ҡиммәтле дарыуҙар менән дауалана. Бөтә был сирҙәрҙең күңел бушлығынан икәненә иғтибар итмәй. Бындай ғаиләлә тағы ғүмере буйы күңел бушлығы кисереүсе ошондай уҡ балалар тәрбиәләнә. Уларҙың ҡайһы берҙәре үҙҙәрен табыуы ихтимал, әммә, нигеҙҙә, тәбиғи һәләттәренә юл аса алмай юғала. Ысын бәхет һәм күңел тулылығы булғанда ғына, тәбиғи талант тулыһынса ҡолас киреп ебәрә. Кеше үҙенең тәбиғи һәләтен тапһын өсөн, рухи яҡтан бай нигеҙ булыуы шарт. Рухи ярлылыҡтың төп ике сәбәбе бар. Бөгөнгө көндә халҡыбыҙ араһында үҙҙәре лә һиҙмәҫтән ошо ике сәбәпкә лә йәшел юл асыусылары-быҙ осрағылай. Был — бик тә аяныслы хәл. Уларҙың береһе — ҡаныңа һалынған моң, тел, традиция мөхитенән айырылыу.

Илебеҙ тарихында һәр ваҡыт төрлөсә тайпылыштар булып торған. Йә тотош ил цивилизацияһын француз теленда, йә инглиз теленда һөйләшеүҙә күргәндәр, йә көнбайышса тәрбиәләүгә күсеү, йә халыҡтарҙы бер дингә күсереү маҡсатында көслөк менән

сүкындырып маташыу, йәки динде тотош халыҡ тормошонан һыҙып ырғытыу, дин тотоусыларҙы эҙәрлекләү, йәки илдә йәшәүсе бөтөн милләттәрҙе лә бер теллегә әйләндерергә маташыу, бөтөн халыҡтар өсөн дә бер төрлө тәрбиә ҡалыбы уйлап сығарыу, быуаттар буйы һыналған традицияларынан мәхрүм итеү, милли тойғо менән иҫәпләшмәү... Был сараларҙың бөтөнөһө лә кешенең күңел донъяһы менән аяуһыҙ "шаярыу". Ундай шаярыуҙар рухи ярлылыҡҡа килтерә, халыҡтың меңәр йылдар туплаған тәрбиә ҡанундары емерелә, әҙәп-тәртип юҡҡа сыға.

Бөгөнгө көндә күңел донъяһының бөтөнлөгөнә иғтибар биргән илдәр алға китә, үҫеш юлындалар. Япония, Ҡытай, Корея илдәре төптән ныҡлы килгән илдәр. Америкала, Көнбайышта тышҡы ялтырауыҡҡа, тышҡы ырыҫҡа алданып, үҙ халҡының күңел донъяһы тураһында хәстәрлек күреүҙе күҙ уңынан ысҡындырған илдәрҙә рухи тарҡалыш бара. Ул илдәрҙә иң ҙур ҡиммәт — аҡса, байлыҡ. Аҡса эшләү, байлыҡ туплауға өйрәтеү буйынса күләмле китаптар баҫылып сыға, психологик хеҙмәт күрһәтеү үҙәктәре эшләй. Сит ил аҡса эшләй белә. Шуның өсөн дә беҙҙең илдән Америкаға йәки башҡа алдынғы илдәргә барып ҡайтҡан кешеләр ундағы тормош кимәленә иҫтәре китеп ҡайта. Әммә оҙағыраҡ йәшәгәндәр кеше мөнәсәбәтендә лә, аралашыуҙа ла эске йылылыҡ юҡлығына, йылмайыуҙың да хатта яһалмалығына иғтибар итә һәм, шөкөр, әлегә ул йәһәттән илебеҙ кимәленең күпкә юғары булыуына ҡыуанып ҡайта.

Ҡайһы бер лингвист ғалимдарҙың, хәҙер компьютерҙар заманы, глобаллаштереү, шулай булғас, күп теллелек бөтәсәк, донъяла инглиз, ҡытай, француз, рус телдәре генә ҡаласаҡ, тигән фараздары таратыла. Әммә бындай ҡараштар, фаразлауҙар фәҡәт ваҡытлыса башты бутау ғына. Тәбиғи ҡанундарға, тәбиғилеккә ҡаршы эшләнгән бер генә "асыштың" да "оҙон ғүмерле" булыуы мөмкин түгел. Был осраҡта ла һүҙҙең аралашыу телдәре тураһында ғына барғанлығын беҙ аңларға тейешбеҙ. Донъяла аралашыу теленән башҡа туған телдәр, милләттең үҙ-ара аралашыу телдәре бихисап. Тәбиғәттән үк күңел дауалау сараһы итеп бар ителгән туған телдән бер ваҡытта ла мәхрүм ҡалырға ярамай. Кеше ҡош тауыштарын, йылға-шишмә ағышының матурлығын, хатта төнгө тынлыҡты ла үҙ телендә тыңлаһа, донъя матурлығын күңел күҙе менән күрһә генә күңел ялы ала, күңелен сәләмәтләндерә. Фәҡәт шул ғына ысын ырыҫ-бәхет килтерә. Фәҡәт шулай булғанда ғына күңелдә илһам тыуа, талант ҡанатын ҡаға һәм донъя һоҡланырлыҡ әҫәрҙәр тыуа. "Урал батыр", "Аҡбуҙат", "Иҙеүкәй менән Мораҙым" кеүек донъя

халҡы һоҡланырлыҡ һәм ижад ителеү серенә әле лә төшөнөп етмәҫлек эпос-ҡобайырҙары булған, классик кимәлдә "Урал", "Зөлхизә", "Ҡолой кантон", "Абдрахман", "Мал" һәм башҡа тиҫтәләрсә йырҙары булған, ағас һырлау эшенә иҫ китмәле маһир — тоташ ағастан йөҙәр ҡулса эшләгән башҡорт халҡының күңелендә ижад ҡомары һүнеп ҡалғандыр, тип әйтеп булмай. Тик уны уятыр аҫҡыҫты ғына юғалта бара инек. Беҙ үҙебеҙҙең ижадыбыҙ, ғилемебеҙ менән донъя халҡы өсөн дә файҙа килтерерлек кимәлгә сыға аласаҡбыҙ. Боронғобоҙҙан ғәжәп фәнни асыштар яһап була. Химия, биология, медицина, психотерапия, физика, философия өлкәләрендә ижадыбыҙҙа, халыҡта әллә күпме билдәһеҙ асыштар һаҡлана. Булмышы менән ғалим Салауат Ғәлләмов әйткәнсә, башҡорт философияһы тикшерелһә, ысынлап та, ғәжәп асыштарға юлығырбыҙ.

Халҡыбыҙ бөгөн тышҡы бәхеткә генә ҡәнәғәт булып йәшәгән Хәлил кеүек. Рухи донъяның һайыға барыуы бер көн килеп бәкәлгә һуғыр, һәм беҙ үҙебеҙҙе милләт булараҡ һаҡлап ҡалыу сараһы ла таба алмабыҙ.

Бәхет-ырыҫ тигән төшөнсәнең ҡалыбы юҡ. Бәхетте кеше үҙе ҡоя, ә даланлы булып тыуа. Дала – кешенең һәр саҡ уңышҡа өлгәшеүе. Кешенең ете быуынындағы берәйһенең изгелеге, кешегә яҡшылығы нәҫеленә дала булып ҡайта, һәм ул кеше бик йыш уңышҡа юлыға. Дала кешегә матурлыҡ, һаулыҡ, һәләт, талант, һөйкөм, һөйләшә белеү оҫталығы, күркәм холоҡ, яҡшы атай-әсәй, туған йәнле ҡәрҙәштәр, көтмәгән урындан бол һәм башҡалар рәүешендә күсә. Тик былардың бәхет түгел, ә һинең даланың икәнлеген аңларға кәрәк.

Бәхет осраҡлы, көтөлмәгән ерҙән килмәй, яһалмай, ҡулға төшмәй, тәбиғәттән бирелмәй. Бәхетте кеше үҙе ҡоя, тине тормоштоң әсеһен-сөсөһөн бик ныҡ татып, бәхетле булған Ғәбитулла Шәрипов.

Ысын бәхет – ул алдыңа ҡуйған маҡсатыңа өлгәшеү. Һәр кем был маҡсатты үҙенсә билдәләй. Маҡсат билдәләү кешенең холҡона, тәрбиәһенә, заманға бәйле. Һуғыш, аслыҡ ваҡыттарында табын тултырып икмәк киҫеп һалып, ауыҙ тултырып туйғансы ашау, һуғыш яланынан туғандарының имен ҡайтыуы, тиҙерәк тыныс тормош урынлашыуы, өҫтөң кейемгә, тамағың аҙыҡҡа туйыуы булһа, заман үҙгәреү менән, кешенең нәфсеһе лә үҙгәрҙе. Иркен фатир, ҡиммәтле машина, дача, сит илдәргә сәйәхәт... Ҡайһы берәүҙәрҙе ул ғына ла ҡәнәғәтләндермәй. Минең бер таныштарым — йәш ғаилә оҙаҡ йылдар буйы дөйөм ятаҡтың бер бәләкәй генә бүлмәһендә йәшәне. Ниндәй генә, хатта "хрущевка" булһа ла айырым фатир тураһында

хыялланды. Бик матур иркен, заманса төҙөлгән йорттан, бынамын тигән өс бүлмәле фатир алдылар. Бер генә бала менән рәхәтләнеп, кинәнеп йәшәргә лә йәшәргә. Бындай фатирға улар өсөн мин ҡыуандым. Машина алдылар, дачаларына бүрәнәнән йорт күтәрттеләр. Улар яңы өйләнешкән саҡта, матди ярҙамға мохтажлыҡтары ҙур осорҙа ярҙам иткеләп ебәргәйнем. Шуны онотмағандар. Матурлап әҙерләнеп ғаиләм менән ҡунаҡҡа саҡырып алдылар. Беҙ үҙебеҙ оло табынбыҙ, тип, баш тартып ҡараһам да:

— Апай, тәғәм ҡабыр ризығыбыҙ юҡ саҡта һиңә килеп йығылдыҡ. Ашаттың, йыуаттың. Беҙ күптән ошо ниәт менән йәшәйбеҙ. Килегеҙ, — тигәс, барҙыҡ. Уларҙың тормоштары өсөн ихлас ҡыуандыҡ. Фатирҙарының уңайлы булыуын әйттек, бергәләшеп рәхәтлектә йәшәүҙәрен теләнек. Һүҙ эйәрә һүҙ китеп, ир кеше үҙенең дуҫының фатирын маҡтай башланы:

— Бына, исмаһам, фатир тәк фатир! Беҙҙең фатир уларҙыҡы менән сағыштырғанда пүстәк кенә, — ти.

— Һинең фатир ҙа бик һәйбәт. Беҙҙең ана дүрт бүлмәле тигән исеме генә бар. Залының дүрт яғында ла ишек. Һеҙҙең ишек төбөгөҙ беҙҙең зал кеүек, — тинем.

— Уныһы шулай, апай. Тик йәшәгәс-йәшәгәс, Вәлиҙәрҙең фатиры кеүек булһа, яҡшыраҡ та инде, — ти йорт хужаһы.

Кешенең нәфсеһе сикһеҙ. Ул алған һайын ҙурая барған соҡорға оҡшаған. Хатта донъялағы ызғыш-талаш, ҡораллы һуғыштар ҙа ил менән идара итеүселәрҙең байлыҡҡа, ергә, хазинаға, хакимлыҡ итеү даирәһенә туймағанлығы арҡаһында килеп сыға.

Кеше шәхси, тар мәғәнәле бәхеткә өлгәшеүҙе генә маҡсат итеп ҡуйһа йәки нәфсеһен тыя алмаһа, бер ваҡытта ла үҙен тулы бәхетле итеп тоймаясаҡ.

Ямғыр – ер ырыҫы, яҡшы бала – ир ырыҫы

Һуңғы йылдарҙа башҡорттар араһында мул йәшәүгә ынтылыу тенденцияһы күҙәтелә. Был — бик яҡшы. Әммә бының аҡсаға табыныу ауырыуына әйләнеп китеү ҡурҡынысы ҙур. Әгәр байырға ынтылған һәр башҡорт беҙгә тиклем йәшәгән ҡайһы бер милләттәштәребеҙ кеүек халыҡ мәнфәғәтен дә хәстәрләһә, бындай ауырыуҙан ҡотола алыр ине. Билдәле булыуынса, "аҡса" ауырыуы һиҙелмәй генә килеп йоға, кеше булмышын ялмап ала һәм күңел донъяһын тотош юҡҡа сығара. Уны дауалап булмай. Аҡсаға булған нәфсе туҡтауһыҙ үҫә, уға көнсөллөк тигән төшөнсә килеп ҡушыла.

Байлыҡ халыҡ бәхетенә хеҙмәт иткәндә генә һәм балаларына рухи байлыҡ нигеҙе булғанда ғына ысын шатлыҡ, бәхет-ырыҫ килтерә.

Ун һигеҙенсе быуаттың беренсе яртыһында йәшәгән башҡорт ире Исмәғил Тасимов Санкт-Петербургтағы Тау училищеһын ойоштороу инициаторы булыуы менән билдәле. Ошо башланғысы менән халыҡ мәртәбәһен күтәреүҙәге өлөшө сағыштырғыһыҙ. Академик Д. И. Соколовтың: "...башҡорттар үҙҙәренең яҙмышы буйынса Тау эшендә беҙҙең күҙебеҙҙе асыуға сәбәпсе булды", — тигән баһаһы менән тотош халҡыбыҙ хаҡында матур фекер ҡалдырыуға сәбәпсе була был башҡорт ире. Өҫтәүенә, ул үҙе һәм уландары үҙҙәренең аҡсаһына башҡорт егеттәрен уҡытыу эшен башлаған. Тик Крәҫтиәндәр һуғышының киң ҡолас алып китеүе ҡамасаулаған. Ун һигеҙенсе быуаттың икенсе яртыһында исем-шәрифтәре телгә алына башлаған башҡорт дворяндары Ҡыуат Кинйәғолов һәм уның уландары Буранғол, Нарынбай, Ҡаһарман, Әхмәт, Таһир, Әлмөхәмәттәр үҙҙәренең маҡсаты итеп башҡорттарҙа мәғрифәтселекте үҫтереүҙе ҡуялар һәм ғәмәли башҡаралар. Ҡаһарман менән Әхмәт башҡорт малайҙарын Санкт-Петербург, Мәскәү, Ҡазан һәм башҡа ҡалаларға үҙ аҡсаларына үҙҙәре оҙатып баралар, уҡыуға урынлаштыралар һәм уҡығандары өсөн аҡса түләйҙәр. Уларҙың хәстәрлеге менән донъяға билдәле Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев үҫеп сыға.

Октябрь революцияһынан һуң да был изге эште дауам итеүселәр була. Ауылдар буйлап һәләтле балалар йыйып йөрөүсе әһелдәребеҙҙең исемдәре яҡшы билдәле. Ул хаҡта телгә алынғайны. Бөгөнгө көндә үҙенең вазифаһы буйынса йәки матди яҡтан мөмкинлеген халҡыбыҙ мәнфәғәтендә файҙаланыусы егеттәребеҙ ҙә бар. Ундайҙарҙың береһе – Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми тикшеренеү институты директоры Марат Тәлғәт улы Аҙнабаев. Ул үҙ инициативаһы менән Урал һәм Көнбайыш Себер төбәктәрен хеҙмәтләндереүсе Өфө өлкә-ара күҙ микрохирургияһы үҙәге ойоштора. Үҙе үк етәкселек итә. Силәбе, Ҡурған, Ырымбур өлкәләрендә милләттәштәребеҙ йәшәгән төбәктәрҙә лә, Башҡортостандың байтаҡ ауылдарында ла институт хеҙмәткәрҙәре менән берлектә дауалау-профилактик эштәр башҡара. Бынан тыш әҙәбиәт, сәнғәт өлкәһендә башлап ижад итеүселәргә спонсорлыҡ ярҙамы күрһәтә.

Сағыштырыу өсөн. Икенсе бер ғилми-тикшеренеү институтының Башҡортостандағы филиалы етәксеһе филиал биләгән бер нисә генә бүлмәне бизнесмендарға арендаға биреп, юғары вазифалар биләгән түрәләргә күстәнәстәр, сәскәләр бүләк итеүгә тотоноп,

уңайы тура килгән һайын саҡырып ҡунаҡ итеп, үҙенә ел-ямғыр тейҙермәй генә йәшәгән. Үҙен заманса йәшәй белеүсе бик бәхетле әҙәмгә һанаған. Әммә халҡыбыҙ өсөн эшләй алырлыҡ бик ҙур мөмкинлектәрҙе файҙаланмаған, сөнки теләмәгән. Аҡсаны был юл менән эшләү уны ҡәнәғәтләндергән. Күп кенә әһелдәребеҙ вазифаларын халыҡ мәнфәғәтенә хеҙмәт итеү өсөн файҙаланмайынса, кеҫә ҡалынайтыуға иң уңайлы мөмкинлек тип һанай һәм шуның менән маһаялар ҙа. Был иһә башҡорттарға ышаныҫты кәметә, халыҡ исеменә тап төшөрә, башҡаларҙа асыу тыуҙыра.

Марат Тәлғәт улы Аҙнабаев һымаҡтар мөмкин тиклем күберәк булһын ине лә бит!

Яҙыусы Зәйнәб Биишеваның башлап яҙыусы йәштәргә аҡсалата ярҙам күрһәткәнен беләм. Тик уларҙың береһе яҙыусынан алған ярҙамды эсеү өсөн тотона ине. Зәйнәб апайға был хаҡта әйтмәнем, әлбиттә. Күңеленә ауыр булыр, тип уйланым. Ә теге егеттең был ҡылығын белеп ҡалғас, үҙенә әйттем дә ғүмерлек дошманына әйләндем. Бик иртә етем ҡалып, үҙ күкрәк көсө менән юл ярып яҙыусы булып киткән апайҙың ихласлығын бындай маҡсатҡа файҙаланыу әсенеүле күренеш, әлбиттә. Филиал директорының да хөкүмәттең уға ышанып шундай яуаплы эш тапшырыуын, аҡса бүлеүен, бина биреп ҡуйыуын шәхси мәнфәғәттә файҙаланып, йәшәй белеүгә һанап йөрөүен Зәйнәб апайҙы алдап аҡса алған теге эскесе шағир менән бер күрҙем.

Ә бына Клара менән Әнүәр Әсфәндиәровтарҙың халыҡ мәнфәғәте өсөн башҡарған эштәрен һанап бөтөрлөҡ түгел. Әнүәр Әсфәндиәров ауыл һәм ҡалалар тарихын тикшереү аша милләтебеҙ тарихына байҡау яһауы менән бер рәттән (*әйтергә кәрәк, был хеҙмәтте әҙерләүҙә ҡатыны тарих фәндәре кандидаты Клара Әсфәндиәрова ихлас ярҙам итә*) бихисап фәнни-популяр әҫәрҙәр яҙҙы. Һәр бер хеҙмәтенең тел төбөндә милләт өсөн ғорурлыҡ уятыу идеяһы ята. Бынан тыш күпме егеттәрҙе һәм ҡыҙҙарҙы өйөндә йәшәтеп, уҡырға индереү, аҡсалата ярҙам итеү, үҙ аҡсаларына ашатып ятҡырыу нисә йылдар дауам итә. Үҙе уҡыған мәктәптә – Баймаҡ районы Сыңғыҙ ауылында — Әсфәндиәров премияһы булдырған. Мәктәпте иң яҡшы билдәләргә яҡшы тәртип менән тамамлаған уҡыусыға тапшырыла был премия. Ғалим үҙ аҡсаһынан өлөш сығара.

Ике күренекле ғалим үҙҙәренең тынғыһыҙ ошо эштәренән ҡәнәғәт һәм бәхетлеләр. Осрашҡан ваҡытта улар үҙҙәре ярҙам иткән балаларҙың ҡайһыныһының ҡайҙа уҡыу дауам итеүен, ниндәй ғилми тема өҫтөндә эшләүен һөйләп ҡыуаналар.

Мәғфирә Ғәлиева менән Николай Головтарҙың да, Фәүзәнә

менән Рифҡәт Аҡмановтарҙың да фатирҙары абитуриенттар төйәгенә әйләнә торғайны.

Уҡытыусылар ғаиләһе Таңһылыу менән Мөхәммәт Ғәниевтар ҙа бынамын тигән биш ул үҫтереү менән бергә күпме егеттәргә һәм ҡыҙҙарға уҡырға инергә һәм эшкә урынлашырға ярҙам иттеләр.

Икеһе лә медик-ғалим Венера менән Ишмырҙа Һиҙиәтовтар тураһында айырым китап яҙырлыҡ. Улар бөтә ғүмерҙәрен, көсҡеүәтен халыҡ сәләмәтлегенә арнаған кешеләр. Бөгөнгө көндә Әбйәлил районының Ҡужан ауылына ҡайтып, ауыр хәлдәге ҡарттар өсөн дауалау йорто асҡандар. Ишмырҙа Һиҙиәтов ғүмеренең һуңғы көнөнә саҡлы Гиппократ антына тоғро ҡалды.

Шул уҡ ваҡытта икенсе "бер йәшәй белеүсе ханым" Өфө уҡыу йорттарының береһендә уҡытыу дәүерендә уҡыусыларҙың атай-әсәйҙәренән ришүәт йыйып, фатир һатып алды, быны ла ул бәхеткә һанайҙыр. Әммә фани донъялағы эштәрҙең яҡшыһы ла, яманы ла эҙһеҙ үтмәй. Тәбиғәттәге Юғары көс үҙ һығымтаһын яһай. Кеше күҙ йәше иҫәбенә йыйылған, тупланған бол бер ваҡытта ла бәхет килтермәй, йоғошо, бәрәкәте, ҡото булмай. Уның эҙемтәһе үҙеңә булмаһа, балаларыңа йә сир, йә бәхетһеҙлек, ҡайғы булып ҡайта. Балаларын даландан мәхрүм итмәһендәр ине атай-әсәйҙәр. әсәйем: "Сәсең менән ер һеперһәң һепер — балаларыңа харам ризыҡ ашатма", — ти торғайны.

1980 йылдарҙан башлап Мәхмүзә Кәлимулла ҡыҙы Ғәйнуллинаның исем-шәрифе лә халыҡ араһында телдән төшмәй. Телевидениенан "Сәләмәтлек" тапшырыуҙары алып барыуы менән генә түгел, ә ярҙамсыл булыуы уның исемен һәр кешенең күңеленә яҡын итте. "Мәхмүзәлә дауаландым. Мәхмүзә ярҙам итте. Мәхмүзә кәңәш итте. Мәхмүзә менән кәңәшләштеңме һуң? Миңә Мәхмүзә үҙе шулай тип кәңәш итте..." Ошондай һөйләшеүҙе бик йыш ишетергә мөмкин. Ул, күрәһең, халҡыбыҙ өсөн фәрештә итеп яратылғандыр донъяға. Уның һымаҡ изге күңелле, ярҙамсыл, аҡыллы кешене халыҡта "алла бәндәһе" тиҙәр. Ғаиләһенә оло ҡайғы килгән саҡта ла (*ире, үҙе һымаҡ уҡ киң күңелле һәйбәт ир Радик Яҡупов аварияла һәләк булды*), Мәхмүзә иң элек ярҙам ҡулы һуҙыу яғын ҡарай ине. Хатта хәл генә белешергә барған ваҡытта ла, ҡабат-ҡабат төпсөнөп: "Берәй йомош менән килмәнеңме? Әйтергә уңайһыҙланып ултырмайһыңмы?" – тип һораша торғайны. Миңә генә түгел, башҡа бик күптәргә ҡарата ла шундай уҡ мөнәсәбәттә булды. Ошо уның бәхете. Бындай бәхет уның үҙенә лә, туғандарына ла, нәҫеленә лә фәҡәт далан ғына булып ҡайтасаҡ. Ә үҙен халыҡҡа арнауы ҡайғыларын еңелерәк үткәрергә ярҙам итте.

Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты врачы Фәниә Нафиҡова ла ярҙамсыллығы менән танылған. Күҙенә операция яһатҡан кемде генә күреп, хәлен һораһаң да: "Фәниә ярҙам итте" – тигән яуап ишетәһең.

Мәләүез ҡалаһында халыҡ хәрәкәтенең әүҙем ағзаһы, Беренсе бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты врач Салиха Фәтхуллина медиклыҡ бурысынан тыш, ярҙам һорап килеүселәрҙе ҡоро кәңәш менән генә сығармай. Һәр ваҡыт ҡул ярҙамы күрһәтергә әҙер.

1980 йылда Зәйнәб Биишева менән тыуған яҡтарға "күк үләндә яланаяҡлап йөрөү өсөн" сәйәхәткә сығыуыбыҙ хаҡында яҙғайным. Шул барыуыбыҙҙа беҙҙе Советтар Союзы Геройы Суфиғәли Хажиғәли улы Суфиянов ҡунаҡҡа алып ҡайтты. Ҡасандыр шау-гөр килеп торған Ай-һай Мөрсәләй ауылында мейес мөрйәләре һерәйеп ултыра, ҡапҡа баҫаналары ҡыйшайып бөткән, ишек алдарын әрем-кесерткән баҫҡан ине. Бер яҡ оста Фатима исемле апай, икенсе яғындараҡ тағы бер нисә өй, шунан Сабира апай менән Суфиғәли ағайҙарҙың йорто. Суфиғәли ағайҙарҙың ишек алдарына килеп ингәйнек, ауылдың юҡлығы ла онотолдо. Бөтәү генә етеш йорт алды. Һәр урында тәртип, бөхтәлек һәм муллыҡ билдәһе.

Суфиғәли Суфиянов ағай беҙҙе Мораҡ ҡунаҡханаһына ебәрмәне, үҙҙәрендә ҡалдырҙы. Киске аш ваҡытында ауыл яҙмышы хаҡында күңелдәргә һағыш булып урынлашыр һөйләшеү башланды.

— Суфиғәли ҡустым, медпунктты Туйымбәткә күсертһәң, исмаһам, Туйымбәт һаҡланыр ине, — тине Зәйнәб апай.

— Ай-һай Мөрсәләй барыбер бөткән, тип әйтмәксеһеңдер инде, апай? — тип һораны Суфиғәли ағай, тәрәндән сыҡҡан әрнеүле тауыш менән. Шунан ауыр көрһөнөп алды.

Суфиғәли Хажиғәли улы Советтар Союзы Геройы булғанлыҡтан, даими медицина хеҙмәтләндереүе менән тәьмин ителергә тейеш. Шуның өсөн Ай-һай Мөрсәләйҙә медпункт тотолар икән. Ә эргәлә генә урынлашҡан Туйымбәттән, Зәйнәб Биишеваның тыуған ауылынан, мәктәп, магазин, медпункт, клуб — барыһы ла ҡайҙалыр күсерелгәйне. Зәйнәб апайҙың тыуған ауылы "перспективаһыҙ", йәғни киләсәкһеҙ, ауылдар исемлегенә индерелгән. Был хаҡта яҙып үткәйнем. Әле инде халҡыбыҙҙың иң күренекле прозаигы, Көнсығыш әҙәбиәте донъяһында ҡатын-ҡыҙҙарҙан беренсе трилогия авторы менән илем, ерем, ауылым, тип яу ҡырында алышып, еңеп ҡайтҡан Советтар Союзы Геройы һәр береһе үҙ тыуған ауылын һаҡлап алып ҡалыу сараһы тураһында һөйләшәләр. Дөрөҫөрәге,

хатта төрлө "хәйлә" ҡороп маташалар. Сөнки иң һәйбәт төбәктәрҙә урынлашҡан ауылдарға афәт булып ябырылған "перспективаһыҙ" тигән проекттан ҡотолоп ҡалыу әмәлен табыуы ҡыйын йылдар ине.

Суфиғәли ағай Зәйнәб апайҙың был тәҡдименән һуң байтаҡ өндәшмәй ултырҙы ла былай тине:

— Зәйнәб апай, бына, Мәрйәм һылыу ҙа, Илгизәр улым да тыңлаһын, бер ваҡиға һөйләйем. Әлбиттә, һуғыш ваҡиғаһы. Беҙгә Днестр йылғаһы аша сығырға приказ булды. Минең төркөмдә яугирҙар бишәү генә ҡалған. Ошо биш кеше йылға аша сығасаҡ танкыларҙы ҡаршы яҡ һөжүменән һаҡларға тейешбеҙ. Самолеттарҙың килере икеле. Хәбәрләшеү өҙөлөп тора, тинеләр. Йылға буйы ҡола ялан урын. Ышыҡланыр әмәл юҡ. Йылғаға арҡыры ауған ҙур бер ағас ҡына ята. Тамыры тырпайып ышыҡланыр өсөн бик уңайлы. Тик барып етеү өсөн байтаҡ ара бар. Мин яугирҙарҙы алып, ипле генә шыуып киттем. Ғәжәп, ут асыусы булманы. "Абайламайҙармы икән, әллә берәй этлекме?" тигән һорау борсоно. Ҡайһылай ғына булмаһын, беҙ йылға аша кисеү яныңа килеп еттек. Танкылар ошо кисеү аша сығырға тейеш теге яҡ ярға. Бер саҡ бер танк йылға аша беҙҙең яҡҡа ыңғайланы. Тапҡырға ғына килеп еткәйне, граната ебәнек. Танк кире боролдо. Иплəп кенә боҫоп ҡарайбыҙ: немецтар ағастың теге яҡ башы эргәһендә ниҙер мыш-тыр-мыштыр киләләр. Өҫтәмә көс кенә килеп етһә ярар ине, хәлебеҙ оборона тотоп ятырлыҡ та түгел. Урынлашыуын һәйбәт урынлаштыҡ та ул, тип һөйләшәбеҙ. Бер ваҡыт ағас ҡаты ғына һелкенеп ҡуйҙы. Был ни хәл, тип аптырап киттек. Ағас тағы һелкенде. Беҙ дошман хәйләһен шунда ғына аңлап алдыҡ: улар ағастың теге яҡ башына трост бәйләп танк менән тартып сығарып, беҙҙе йә юҡ итмәксе, йә әсир төшөрмәксе булғандар. Беҙ кәңәш-төңәш итештек тә бер-беребеҙ менән хушлаштыҡ, гранаталарыбыҙҙы ҡулға тотоп алдыҡ. Бирелеү юҡ, ағасҡа һағып, һыуланмай ғына теге яҡ ярға сығып етергә, ҡул көтәрергә, шунан ҡап урталарында шартлатырға, тип әҙерләндек. Шулай ҙа үлге килмәй. "Әгәр ошонан иҫән ҡалһам, тыуған тупрағымды ҡосоп ятып йән бирһәм дә риза булыр инем. Ай-һайымдан бер ҡайҙа ла китмәҫ инем," — тинем.

Ағас аҡрын ғына шыуа. Ботаҡтары ҡамасаулаймы, әллә беҙҙең йөрәктәргә аҡрынлап ҡурҡыу һалалармы — билдәһеҙ. Фашистарҙың был холоҡтары ла билдәле ине беҙгә. Улар яралы һалдаттарҙы танк менән ҡыуып йөрөп изеп китәләр ине. Бесәй сысҡанды уйнаткан кеүек был йыртҡыслыҡтары үҙҙәренә йыуаныс биргәндер. Әле лә бөтәбеҙҙе ҡырып һалырға бер граната етә ине. Юҡ. Уларға ҡыҙығыраҡ үлем кәрәк. Ағас аҡрын ғына шыуыша. Беҙ ышыҡланып

маташҡан булабыҙ. Бына бер саҡ йылғаға индек. "Бөтөүебеҙ ошолор," — тип уйланыҡ. Шулай ҙа ағас тамырына һаҡтыҡ та, һыуланмаҫҡа тырышып шыуабыҙ. "Тереләй бирелмәйәсәкбеҙ. Бер нисәһен булһа ла дөмөктөрөп үләсәкбеҙ!" Ағасты тартып сығарҙылар. Беҙ танкыға тағы граната елләнек. Танк шартланы. Әммә уның эсенән немецтар һикерешеп килеп сыҡты. Ырғытырлыҡ гранаталар юҡ. Ҡул һуғышы башланды. Һуғышта иң ҡурҡынысы — ҡул һуғышы. Бындай тетрәндергес, үлем менән йәшәү араһында ҡалған минуттарыбыҙ күп булды, әммә был тиклем үк көсөргәнешле минуттарҙы хәтерләмәйем. Шунда сәстәрем ағарып сыҡты. Утыҙ йәшем дә тулмаҫ элек минең сал сәстәрем баш тулы ине.

Немецты киноларҙа ғына иҫәр тип төшөрәләр. Иҫәр дошман менән һуғыш шул тиклем ҡорбандарға килтерәме һуң? Улар бик оҫта һуғыштылар. Бик әҙерлекле инеләр. Тик үҙ ерҙәрендә һуғышмауҙары, баҫҡынсы-фашист булыуҙары ғына көс-ҡеүәттәренә ҡырын һуҡты. Бер саҡ айпашып йөрөгән ерҙә былар ҡаса башланы. Баҡһаң, өҫтә беҙҙең самолеттар күренә икән. Ә аҫта — танкыларыбыҙ. Ҡурҡыуҙан саҡ ярылмай ҡалған йөрәктәр шатлыҡтан шартлай яҙҙы. Мин ҡыуанысымдан тын ала алмай торам хатта. "Ауылым, Сабирам!" тип өҙәләнеүҙәрем ғүмеремде һаҡлап алып ҡалғандыр, тип уйлайым. Үпкәләмә, Зәйнәб апай, минең тамырым ошонда. Ошонан айырылһам, мин һулырмын кеүек. Өфөлә лә фатир бирҙеләр. Барып йәшәп ҡараныҡ. Мейес яғырға, утын әҙерләргә түгел. Барыһы ла өйҙә. Юҡ инде, сыҙар әмәл юҡ. Ауылды һағынам. Ҡайтып киттем. Табандарым менән ҡуша йәбешкәнмен мин Ай-һайыма, Зәйнәб апай. Бында һыу килтереүе лә, Сабираға мейес яғып донъя көтөүе лә, мал аҫырауы ла еңел түгел. Тик минең бер ҡайҙа ла киткем килмәй. Ошо ҙур бәхет минең өсөн, Зәйнәб апай. Ә Туймбәтте юҡҡа сығармау тураһында ни бына Мәрйәм һылыу яҙып сыҡты бит. Берәй нисек хәл итерҙәр. Ул ауылды һаҡлау һинең өсөн генә түгел, халыҡ өсөн, әҙәбиәт өсөн кәрәк бит, — тине.

Республикабыҙ ғына түгел, тотош илебеҙ кимәлендә абруйлы кешеләребеҙҙең тыуған ауылдарының ер йөҙөнән юҡ ителеү кимәлендә булыуы үҙәк өҙгөс хәҡиҡәт ине. Суфиғәли ағайҙың күҙҙәренә йәш алып һуғыш ваҡиғаларын иҫкә төшөрөүе, Зәйнәб апайҙың ҡулъяулығын күҙенән алмай тыңлауы, ире һуғышты иҫкә алған һайын, күҙ йәштәрен тыя алмай тыңлаған Сабира апайҙың яулығы менән йөҙөн ҡаплап ипле генә илап ултырыуы тетрәндергес ине. Әйтергә кәрәк, Зәйнәб апай күп кенә ҡайғылар үткәрҙе, әммә мин уның күҙҙәрендә йәш күрмәнем. Әле ул да илай ине.

Суфиғәли ағай һөйләп бөттө лә:

— Үпкәләмә, Зәйнәб апай, мин ошонда йән бирермен. Ә кешеләргә тыуған ауылдары ғәзиз түгелме икән ни? Ни эшләп ташлап китеп бөттөләр икән? Ғибаҙулла ағай Биишев ауыл һайын тигәндәй йөрөп, ауыл һаҡланһа, башҡорт һаҡланыр, ауылығыҙҙан китмәгеҙ, тип өгөтләп йөрөй торғайны. Һуңғы йылдарҙа ғына нисәмә ауыл юҡҡа сыҡты.

Зәйнәб апай ауыр итеп көрһөндө лә:

— Беҙҙең көрәштәр юҡҡа сыҡмаһа ярар ине лә, — тине.

"Совет Башҡортостаны" гәзитендә киләсәкһеҙ тарихи ауылдарҙы яҡлап яҙған сығышымдан һуң, Күгәрсен районына килергә, Туйымбәт ауылын күрергә кәрәк булды. Шул саҡта бер ыңғайҙан Суфиғәли ағайҙарға инеп сыҡтым. Ҡыш ине. Йортто тотош көрт баҫҡан. Ҡапҡа яғы ғына матур итеп һуҡмаҡ һалынып көрәлгән, һарайға ла һуҡмаҡ таҙартылған. Сабира апай туҡмас баҫып йөрөй. Суфиғәли ағай бәләкәй санаға фляга ултыртып һыуҙан ҡайтып килә. Суфиғәли ағай ҡаршы килеп ихлас күреште лә:

— Тәки алып ҡалдың бит Зәйнәб апайҙың ауылын, — тине, ҡыуанысын уртаҡлашып. — Музей һалырға уйлайҙар хәҙер. Мораҡта ул хаҡта ишетеп ҡыуанып ҡайттым. Ҙур эш башҡарҙың, һылыу, — тип, атайҙарса арҡамдан ҡағып һөйөп алды. — Бына ҡалай ҙур бәхет. Йәштәр ҙә ҡайта башлар. Мәктәбе булһа, ауыл бөтмәй ул. Рәхмәт, һылыу. Кинйәне лә күсермәйҙәр, ти. Һинең мәҡәләңдән һуң Аҡназаров үҙе барып ҡайтҡан икән. Ҡалай бәхетле иттең ул ауыл кешеләрен, — тине ағай.

Һәр кем үҙе аңлағанса, үҙе теләгәнсә, үҙе уйлағанса бәхетле. Ситтән ҡарап торһаң, бөткән ауыл, аралашыр-һөйләшер кеше юҡ. Малға эсереү, йыуыныу-бешеренеү өсөн һыу байтаҡ кәрәк. Утын киҫергә, мейес яғырға. Ҡар көрәргә. Балалары ярҙам итһә лә, көндәлек тормоштоң көндәлек мәшәкәте күп. Ә улар үҙҙәрен бәхетле тоя. Әкиәт кешеләре кеүектәр. Суфиғәли Суфьяновтың хыялы, маҡсаты тормошҡа ашҡан. "Ауылды һаҡлай алғанса һаҡлайым әле. Бәлки, йәштәр ҡайта башлар", — тине ул ошо күрешеүҙә.

Үҙенең шәхси бәхетен халыҡ бәхетендә күргән кешеләрҙең күбеһе рәсми энциклопедияға инмәне. Әммә улар халыҡ күңелендә һаҡланырға тейеш. Был китапта уларҙың бөтәһен дә яҙып та, исемлек төҙөп тә, белеп бөтөп тә булмай. Шулай ҙа был яҙмаларға күҙ һалған һәр кеше халҡыбыҙ ҡулсаһын өҙмәй алып ҡалыуға өлөш индереүсе ауылдашын, яҡынын, туғанын, танышын белә. Уларға рәхмәтле булһындар ине. Мин халыҡ яҙмышын ҡулса-ҡулса ағас

сылбырға оҡшатам. Ошо ҡулсаның бер генә дүңгәләге өҙөлһә лә ҡабат ялғап булмай. Өҙмәй тотоп тороусылар данға-шөһрәткә ынтылмай, фәҡәт бер маҡсат — ҡулсаны имен алып ҡалыу хаҡында хәстәрлек күрә.

Рафаэль Сафиндың Диҡҡәткә арналған шиғырында кешенең йәшәү маҡсаты хаҡында ошолай тип яҙылған:

Ологайыу тигән нәмә
Әллә тотош уйҙан тора,
Дуҫтарымдың сәстәрендә
Сал күрһәм дә уйландыра.

Ах, сал сәстәр... Үткән гүмер
Эҙе генә микән улар?
Дуҫтарымдың сикә сәсен
Сигеп киткән ниндәй ҡулдар?

Һаргаялар арыштар ҙа
Башаҡтары тос булыуҙан.
Һәм ағара ҡылғандар ҙа
Елгә еллән ултырыуҙан.

Әҙәмдең сал сәсендә лә
Үҙенә бер хикмәт ята.
Берәүҙәрен ил ағарта,
Берәүҙәрен ел ағарта.

Минең дә бит йөрәгемә
Күп ҡаҙаны газап угын.
Тик әлегә сәскенәйем
Юғалтмаған ҡаралығын.

Күрәһеләр күптер әле...
Һөртөрмөн дә йәштәремде.
Ағартһа, тик ел түгел, юҡ, —
Ил ағартһын сәстәремде.

Был рифма өсөн генә әйтелгән һүҙҙәр түгел. Ул осор егеттәре, ысынлап та, шундай маҡсат менән янды, йәшәне, ни ҙә булһа эшләргә ынтылды. Юғары маҡсатлы булдылар. Шуның өсөн бер-береһенә арнап яҙылған шиғырҙары ла юғары рухта була торғайны.

Халыҡ өсөн ни булһа ла эшләргә тип, мөкиббән киткән шул егеттәрҙе күҙ алдына килтереп, аптырап ҡуям: йәшәү маҡсатын фәҡәт халыҡҡа хеҙмәт итеүҙә генә күргән был егеттәрҙә фиҙакәрлек, мөкиббәнлек ҡайҙан килде икән? "Театрға – милли рух" тип, янып-йәшнәп эшләгән, аҙаҡ республиканан китергә сәғәтләп ваҡыт бирелгән талантлы режиссер Шәүрә Муса ҡыҙы Мортазинала? Республиканан сығып байтаҡ йылдар ситтә, ғаиләһенән айырым йәшәргә мәжбүр ителгән Дауыт Сәғитовта? Эшенән ҡыуырға тип әмер бирелгән, әммә редакторыбыҙ Абдулла Исмәғилев икенсе бүлеккә күсереп йәшереп алып ҡалған, күҙҙәре күрмәһә лә һаман халыҡ мәнфәғәтендә эшләгән Дәүләт Мәһәҙиевта? Ғүмере буйы "халҡым" тип тир түккән Әкрәм Биишевта? "Башҡортлоғон юғалтмаған, беҙҙе ялғап алып китерлек йәштәр аҙ", — тип өҙгәләнеп, халыҡ араһында ағартыу-аңлатыу эше алып барырға тырышып йөрөгән Ҡоншаҡ муллаһы Рәшит Зыяевта? Һәм башҡа, һәм башҡаларҙа ҡайҙан килә ул фиҙаҡәрлек? Ошо һорауға яуап эҙләйем һәм ихлас һоҡланам уларға. Ә ҡулында халыҡ мәнфәғәтендә эшләрлек мөмкинлеге булып та ҡыл да ҡыбырлатмаған ҡайһы бер вазифалы егеттәребеҙгә һәм ҡыҙҙарыбыҙға аптырайым да, йән дә көйә. Яҙыусы Зәйнәб Биишеваның миңә Мәскәүҙән – Малеевканан яҙған хаттарының береһендә шулай тип әйтелгәйне:

"...Бында, Малеевкала, иҫ киткес матур яҙ. Һандуғастар, кәкүктәр, сыйырсыҡтар тауышы, япраҡтар, гөлдәр, сәскәләр еҫе күптән-күптән күрелеп, онотолоп, әле ҡапыл, көтмәгәндә иҫкә килеп төшкән төш һымаҡ, тылсымлы хыялый күренеш һымаҡ... Аһ, яҙҙы маҡтар һүҙ табып буламы ни хәҙер минең йәштә?!

Йә, үҙегеҙҙә ниндәй яңылыҡтар, ниндәй ҡыуаныс-йыуаныстар? Ышанам, донъя имен, бала-саға, дуҫ-иш имен-иҫәндер. Иң мөһиме – иҫәнлек. Эйе, иҫән-һау булыу, ер емертеп эшләп йөрөү! Башҡаһы бер үҙмыш гүмер, иҫкән ел генә. Ә бит шул эш, хеҙмәт кенә ҡала бит кешемен тиған кешенән. Кеше булып, хеҙмәткә барлыҡ көсөңдө, булмышыңды биреп йәшәүҙә генә оло бәхет. Шулай бит, Мәрйәм һылыу."

"Халҡым" тип исем өсөн, дан өсөн генә түгел, ә, ысынлап та, уны милләт булараҡ һаҡлап ҡалыр өсөн ни ҙә булһа эшләргә тигән маҡсат менән яныусылар, Зәйнәб апай әйткәнсә, барлыҡ көстө, бөтә булмышты биргәнбеҙҙер, ғүмерҙе арнағанбыҙҙыр. Ә инде илдә "демократик елдәр" иҫкәс, бөтөн һәләтен киләсәк өсөн, тип эшләргә теләүсе ир-уҙамандарыбыға, уҙаман ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға тейешле шарттар булдырылыуы, һәр төрлө ҡаршылыҡ-кәртәләрҙең юҡҡа сығарылыуы тураһында хыялланғанбыҙҙыр... Ошондай хыялдарҙан, ихлас ышаныуҙан үрелгәндер юғары вази-

фалы етәкселәребеҙгә яҙылған хаттарыбыҙ, мөрәжәғәттәребеҙ.

"Урал" башҡорт халыҡ үҙәге идараһы исеменән БАССР Юғары Советына һәм Б. Н. Ельцинға яҙған хатта билдәләгән пландарыбыҙҙың бер өлөшө генә тормошҡа ашһа ла беҙ үҙебеҙҙе бәхетле тойор инек, тип хыяллана торғайныҡ. М. Ғ. Рәхимовты Башҡортостандың беренсе Президенты итеп һайлап халыҡ яңылышманы. Был пландар берәм-берәм тормошҡа аша башланы һәм шатлыҡ-бәхет килтерҙе. "Башҡортостан энциклопедияһы", Урал аръяғында юғары уҡыу йорто, асфальт юлдар, күперҙәр, газ менән тәьмин ителеү, яңы мәктәп биналары һалдырыу, "Башҡортостан" киностудияһы асылыу, башҡорт телендә календарь сығарылыу һәм башҡалар — ошо маҡсат өсөн, халыҡ мәнфәғәте өсөн үҙҙәрен йәлләмәгән ғәмле егеттәребеҙҙең хыялы ине. Әгәр һәр беребеҙ үҙ ҡулынан килгән тиклем ҡыбырлаһа, халыҡ мәнфәғәте өсөн ни булһа ла эшләһә, үҙ ғаиләһендә үҙ шәжәрәһен дауам итерлек балалар үҫтерһә, тотош башҡорт халҡы өсөн ни тиклем оло бәхет-ырыҫ булыр ине!

Ә бит ғаиләңдә башҡортлоҡто һаҡлау бәхетенән бер кем дә мәхрүм итмәгән. Ни өсөн беҙ үҙебеҙ үҙебеҙҙе, балаларыбыҙҙы, милләтебеҙҙе ошо бәхет-ырыҫтан мәхрүм итәбеҙ. Туған телендә, тимәк күңел телендә һөйләшеү, аралашыу, йырлау, әҙәби әҫәр уҡыу, мәктәптәрҙә туған телдә уҡыу, радио аша йырҙар тыңлау, телевидение тапшырыуҙарын ҡарау, тарихыңды өйрәнеү, үҙ сәнғәтең ҡаҙаныштарына һоҡланыу, мәҙәниәтеңде үҫтереү – ҡыҫҡаһы меңмең балҡыш араһында үҙ нурыңды ла һүндермәү бәхет түгелме ни? Ни өсөн үҙ ҡулдары менән балаларын ошо бәхеттән мәхрүм итергә тырышаларҙыр ҡайһы берәүҙәр – был аңлашылмай?!! Ә бит бер кем дә тыймай ошо бәхет эсендә йәшәүҙән, фәҡәт аңды, аҡылды ғына эшләтергә-ҡуҙғатырға, ҡара наҙанлыҡтан ҡотолорға, үҙ өйөңдә солтан булып йәшәүҙең ырыҫ икәнен тойоу, сит-яттар араһында ниндәй генә вазифа биләһәң дә – рухи байлыҡтан мәхрүм икәнһең – олтан булыуыңды, был бәхеттән мәхрүм ҡалыуыңды аңлау ғына кәрәк!


Бәхет алһыу нурлы таң һымаҡ...

Бер саҡ иртә таң менән Ейәнсуранан Сибайға юл алдыҡ. Таң атыуға беҙ Етебөгөлгә (*халыҡ телендә Ҡаҙғантау*) артылып, һарҡыулата (*түбән төшә*) башлағайныҡ... иҫ китмәле матурлыҡ солғап алды беҙҙе: тирә-яҡты алһыу-ҡыҙыл нурҙарға күмеп ҡояш ҡалҡып килә. Тауҙар араһындағы уйһыулыҡтағы томан тотош ҡо-

яш нурҙарына ҡойонған. Беҙ машина менән ошо нур эсенә инеп барабыҙ. Бына-бына машинаның эсе шул алһыу нурға тулыр, мин уларҙы хатта усыма йыйып һоҡланып ҡарай алырмын кеүек. Әммә был гүзәллек хыял һымаҡ ине. Яҡынайған һайын алыҫлаша барҙы. Томан аҡрын ғына күтәрелә, күтәрелгән һайын нығыраҡ алһыулана. Бер саҡ тотош донъя алһыу томанға сорналды. Әммә машина эсендә ул нурҙар һиҙелмәне. "Күҙгә күренәме әллә?" — тип уйлайым, аптырап. Икенсе тауға артылғас, ҡайырылып артҡа ҡараһам, уйһыулыҡ тулы алһыу-ҡыҙғылт томан ине әле. Беҙ шул алһыу томан эсенән үтеп киткәнбеҙ...

Бәхет тә шулай, эсендә йөҙгәндә һиҙелмәй, аҙаҡ ҡына тойола. Ә бәхет эсендә йөҙгән сағында үҙенең бәхетле булыуын аңлаған кеше, ысынлап та, бәхетле.

Тимәк, ырыҫ-бәхет — ул бәхетле икәненең ваҡытында тоя белеү.



МОҢ

Кешегә ғүмер итеү өсөн һыу-һауанан, уттан-ерҙән ҡала иң кәрәкле шарттарҙың береһе – МОҢ. Моң кешене елкендерә, илһамландыра, дәртләндерә, күңелгә ҡанат ҡуя, һағыш уята, сәләмәтлеккә ыңғай тәьҫир итә. Шуның өсөн кеше яратҡан йырын тыңлағанда, йөҙө балҡып, күҙ ҡараштары нурланып, хатта маңлай һырҙары яҙылып китә.

Әгәр кеше үҙ мейеһендә, күңел донъяһында барған фекерҙәр сыуалышын күрә алһа, ике тапҡыр бик ныҡ ғәжәпләнер ине. Беренсе тапҡыр — уларҙың бихисап иҫәбенә, туҡтауһыҙ хәрәкәтенә, күҙ эйәрмәҫ тиҙлегенә, икенсе тапҡыр — кешенең күңеле моңға тулған мәлдә, уларҙың бер тәртипкә инеп талғын ғына аға башлауына. Тап бына ошо арауыҡта, уй-кисерештәр бер йүнәлештә аҡҡан саҡта, кешенең күңеле ял итә, сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһала. Шуның өсөн Тәбиғәт моң – матурлыҡ яратҡан донъяға. Таң һыҙылып атыуы, ҡояш ҡалҡыуы, көн тыуыуы, шишмәләрҙең сылтырап ағыуы, күҙ ҡамаштырырлыҡ төрлө сәскәләрҙең керпек ҡағып алыуы, мөғжизә өсөн яратылған күбәләктәрҙең леп-леп осоуҙары, ярыша-ярыша ҡоштар һайрауы, бихисап йондоҙҙарҙың баҙлауы... Кешелек донъяһы үҙе бар иткән моң-тойғоноң да тәьҫире ғәжәйеп көслө. Улар – йыр-көй, рәсем-һүрәт, күңелдә ҡалған

бәхетле минуттар, моңһоу айырылышыуҙарҙан һуң йылылыҡ бөркөп торған осрашыуҙар...

Моң — тәбиғәттең иң ғәжәп мөғжизәләренең береһе һәм беҙ күҙ алдына ла килтермәгән көскә эйә. Моң тәьҫирен донъя фәне яңы-яңы ғына өйрәнә башланы. Әммә фәнни күҙлектән яңы өйрәнеү кешелек донъяһының был хәҡиҡәтте ошоғаса белмәүе тигән һүҙ түгел.

Кешеләр моңдоң, зиһендәге барлыҡ күҙәнәктәргә үтеп инеп, бөтә булмышына тәьҫир итеүен яҡшы белгән һәм сәләмәтләндереү сараһы итеп тә файҙаланған: моңланған, йырлаған, йыр менән күңел асҡан, ҡайғы тарҡатҡан, күңелдәрҙе берләштергән, йыр менән еңеүҙәр яулаған, күңелдәр арбаған.

Моң — рухландырыусы, күңелдәрҙе берләштереүсе көскә эйә булыуы менән дә кешелек донъяһы йәшәйешенә ыңғай йоғонто яһай. Шуның өсөн гимндар, маршtar ижад ителә.

Әлеге "Моң" тигән бүлектә моңдоң сәләмәтлеккә ыңғай тәьҫире тураһында һүҙ барасаҡ. Уның шифаһын күҙ алдына килтереү өсөн, билдәле шәхестәребеҙҙең һәм шулай уҡ исемдәре киң билдәле булмаған таныштарым тормошонан бер нисә ваҡиға.

Иҫәнғолға ҡайтып йәшәгән саҡта, Өфөнән дә, Мәскәүҙән дә байтаҡ дуҫ-иштәребеҙ килеп, хәл-әхүәл белеп, ял итеп киткеләне. 1992 йылдың август айында танылған актриса, шағирә һәм драматург Рәғиҙә Янбулатова килде. Дөрөҫөрәге, улы Салауат Мөбәрәков алып килеп, машинанан күтәреп төшөрөп, өйгә индерҙе...

1935 йылдан башлап сәхнә түрендә булған, тиҙ арала тамашасыларҙың күңелен яулап, иң яратҡан актрисаларҙың береһенә әйләнгән, нескә лирик талантлы йырсы булды ул. Ул нигеҙҙә музыкаль спектаклдәрҙә уйнаны: Ғәлиәбаныу – "Ғәлиәбаныу", Сәрүәр – "Башмағым", Аҫылйәр – "Аҫылйәр", Мәйсәрә – "Зәңгәр шәл", Сания – "Тальян гармун". Ошо героинялары менән бер рәттән трагик һәм драматик ролдәре — Шекспирҙың "Отелло"һында – Дездемона, Шиллерҙың "Мәкер һәм мөхәббәт"ендә — Луиза, Назым Хикмәттең "Мөхәббәт тураһында легенда"һында — Ширин, Мостай Кәримдең "Ай тотолған төндә" трагедияһында Шәфәҡ һәм Тәңкәбикә һәм башҡа бик күп ролдәре менән дә замандаштары күңелен яуланы ул. Киң ҡоласлы талант эйәһе Рәғиҙә Янбулатова лирик шиғырҙары, йыр һүҙҙәре менән дә әҙәбиәтебеҙгә тос өлөш индерҙе. Йомшаҡ теле, яғымлы тауышы һәм шул тиклем ипле ҡарашлы күҙҙәре, ауырыу хәлендә лә үҙен бөхтә тотоп, кершән яғып, һөрмә тартып, кешегә йәмһеҙ күренмәҫкә тырышҡан был актрисаның тәү осрашыуҙа уҡ күңелдәрҙе арбап ала торған

һөйкөмө бар ине. Ғүмеренең һуңғы йылдарында ҡаты ауырыны һәм өйҙән сыға алманы. Иҫәнғолдан Өфөгә эш менән килгән саҡта, уның хәлен белергә инә торғайным. Бер тапҡыр уларға барған сағымда (*уны ҡыҙы Гөлли Мөбәрәкова менән ейәне Аяз баҡты*), беҙ йәшәгән ауыл, тәбиғәт тураһында бик ентекләп һорашып ултырҙы ла, тәрән көрһөнөп:

— Яландарға сығып бер тынала ҡош һайрауҙарын тыңлай алһам, үлгәндә үкенесем ҡалмаҫ кеүек. Тәбиғәтте бик һағынам. Аяҡтарым йөрөмәй шул. Һуғыш ваҡытында ла, унан һуңғы йылдарҙа ла ауыл клубтарында Ҡарлуғас ролен уйнағанда һыуыҡ алдырҙым. Клубтар һалҡын, иҙән боҙло. Ауыл клубтары ҡыш буйы яғылмай тора ла, беҙ килер алда ғына мейес яғып ебәрәләр. Яғылмай торған клубтың түбәһенән тамсылар тама башлай. Боҫлана. Сәхнә бөтөнләй йылынмай. Бер генә тапҡыр, бер генә ауылда түгел бит. Ауыр көндәрендә аҙ ғына булһа ла күңелдәрен күтәрәйек тип, ал-ял белмәй бәләкәй генә ауылдарға тиклем йөрөй торғайныҡ. Сәхнәне яҡтыртып тороу өсөн бер нисә генә шәм эленә. Сәхнә иҙәне боҙ көйө ҡала. Ә мин Ҡарлуғастың үлемен күрһәткән сәхнәлә күлдәксән генә иҙәнгә йығылып китәм дә әйҙә ятам, әйҙә ятам. Әҫәр буйынса шулай тейеш бит — беләһең. Күлдәгемдең иҙәндәге боҙға туңып киткән саҡтары ла була торғайны. Бер саҡ хатта Мөбәрәк (*ул ире Арыҫлан Мөбәрәковты шулай ти торғайны*) спектакль барған саҡта, салбары менән ҡуша эскәмйәгә йәбешкән дә ҡуйған. Сәхнәнән сығып китергә тейеш, сәхнә артында егеттәр саҡыралар, аптырайҙар, ә ул тороп китә алмай. "Эскәмйәгә ҡуша туңғанмын бит, егеттәр. Китеп булмай", — тип ҡысҡыра. Тамашасы көлә. Әллә дөрөҫөн әйткәнгә көлдө, әллә роле шундай тип уйланы — кем белһен инде. Бына шундай шарттарҙа эшләп йөрөнөк. Һөйәктәргә һыуыҡ һеңгән. Хәҙер зарланыуҙан бер файҙа ла юҡ. Йәшәрен йәшәнем, ҡулдан килгән тиклем илемә, халҡыма хеҙмәт иттем. Халыҡ яратырлыҡ образдар тыуҙырҙым. Шиғырҙарыма йырҙар ҙа яҙылды, китаптарым да баҫылып сыҡты. Яратҡан кешем менән ғүмер иттем, ҡыҙ тиһәм — ҡыҙым булды, ул тиһәм — улым булды. Ейәндәремде, ейәнсәрҙәремде күрҙем. Тик һуңғы ваҡытта эсем бигерәк боша, ҡош тауыштарын һағынам. Рәхәтләнеп ултырып бер тыңларға ине. Ошо теләгем үтәлмәй үлһәм, бик ҙур нәмәнән мәхрүм ҡалырмын, йәнем тынысһыҙ булыр кеүек, — тине.

Мин уны ауылға саҡырҙым.

— Саҡырыуыңа рәхмәт. Тик белмәйем, бара алмамдыр. Салауатым ҡайтҡас, әйтеп ҡарармын. Машинаға күтәреп ултыртырға тик уның ғына көсө етер, — тине.

Салауат Мәскәүҙә йәшәй ине.

Бер сағ йомош менән Ғәббәс ауылына киткәйнем, артымса машина менән мине эҙләп килеп еткәндәр. Иҫәнғолда өйҙә булмағас, күршеләрҙән һорашҡандар ҙа, ҡырҡ сақрымдай ара үтеп, халыҡ араһында "Эт бармаҫ" тигән атама алған төпкөлдәге ауылды табып килгәндәр. Ғәббәстә Шәмсиә апай менән Ғәлиулла еҙнәйҙәрҙә (*билдәле журналистка Миңниса Сәфәргәлинаның әсәһе менән атаһы*), юл ыңғайында Өмбәт ауылында киномеханик Ҡунаҡбай еҙнәй менән Люциә апайҙарҙа ҡунаҡ булып, Иҫәнғолға ҡайтып киттек. Рәғиҙә апай менән Салауат кешеләрҙең ихласлығына, һыйлаған сағта мул ҡуллы булыуҙарына һәм тәбиғәт матурлығына һоҡланып килделәр. Салауаттың Ейәнсура тәбиғәтенә иҫе китте. Рәғиҙә апай әленән-әле машина туҡтатып ҡош тауыштарына ҡолаҡ һалаһала килде. Юлда бик күп итеп артыш йыйып алдыҡ. Бер ай ятты беҙҙә Рәғиҙә апай. Ай буйы артыш менән аяҡтарын дауаланым. Бер нисә көн үтеүгә уның аяҡтары хәрәкәт итә һәм үҙе ҡуҙғалып йөрөй башланы. Башта урындан урынға күсереп йөрөтөргә Илгизәр улым ярҙам иткәйне, аҙаҡ таяҡ таянып үҙе хәрәкәт итә башланы. Быға уның шатлығының сиге булманы. Ә Өфөгә ҡайтҡан сағта Ейәнсура районы хакимиәте башлығы Марат Сәйфула улы Түләбаев "Волга"һын биргәйне, машинаға ҡултыҡ таяҡтарына таянып үҙ аяҡтары менән атлап барып ултырҙы.

Өйөбөҙ Эйек ярында ине. Ишек алдында алма ағасы. Ҡоштар ҡунып һайрай. Рәғиҙә апайға алма төбөндә урын рәтләнек. Туҡтауһыҙ өҙөлөп төшөп торған алмалар ҡамасауламаһын өсөн, баш осона сатыр ҡорҙоҡ. Рәғиҙә апай үрелеп кенә алма өҙөп ала ла бәләкәй генә ҡырғысы менән ҡырып ашай. Эргәһендә генә тҮтәлдәр. Алмаға кишер ҙә, сөгөлдөр ҙә ҡушып ебәрә. Аяҡтарына артыш бешекләп бирәм. Нисә минут ултырырға кәрәклеген әйтәм. Минуттарҙы ятҡа бикләгән әҫәрҙәре менән иҫәпләй торғайны. Татьянаның Онегинға яҙған хаты, Дездемонаның монологы, Ҡарлуғастың йыры һәм башҡа әҫәрҙәрҙең нисә минутҡа һуҙылғанын белә һәм яттан һөйләп ултыра торғайны. Етмеш ете йәштә иҫ китмәле хәтер!

Бер көн кистән мунса индек, иртәгәһен тағы алма төбөнә алып сыҡтыҡ. Өйҙә Гөлнур ҡыҙым пианинола ниндәйҙер көй уйнап ебәрҙе. Мин артыш бешекләргә мунсаға индем дә, ҡараһам, эскәмйәлә Рәғиҙә апайҙың ҡулъяулығы ята. Ҡулъяулыҡты алдым да, бирәйем, тип, ул ултырған яҡҡа ыңғайлаһам, күрәм — Рәғиҙә апайҙың күҙҙәрендә йәш. Ни эшләргә белмәй аптырап киттем. Янына барырға баҙнат итмәнем, ул күҙ йәштәрен тыя алмай, тауышһыҙ ғына түгелеп илай. Пианинонан музыка һаман ағыла.

Мин ҡабаттан мунсаға инеп киттем дә, бер ни күрмәгән кешеләй:

— Рәғиҙә апай! Дездемонаның ҡулъяулығы мунсала ҡалған бит! Яго алмаған икән, — тип ҡысҡырҙым. Рәғиҙә апай көтөлмәгән бындай шаяртыуға күҙ йәштәре аралаш көлә башланы:

— Шулай булғанмы ни? Яго алмағанмы ни! Мунсала ҡалғанмы Дездемонаның ҡулъяулығы! — тип ҡайта-ҡайта һүҙҙәремде ҡабатлап көлә.

Мин янына килдем.

— Ҡош тауыштарына ҡушылып пианинонан музыка яңғырағайны, Мөбәрәк менән бергә үткән бәхетле минуттарым, балаларымдың "әсәй ҙә әсәй" тип янымда уралышып йөрөүҙәре күҙ алдыма килде лә күңелдәрем нескәреп китте. Һинең бик бәхетле сағың, Мәрйәм, балаларыңдың "әсәй ҙә әсәй" тип янында ғына йөрөгән ваҡыты. Әсәйең дә эргәңдә, — тине. — Барыһы ла булды минең дә. Дан-шөһрәткә күмелгән, ҡосаҡ-ҡосаҡ гөлләмә сәскәләргә сумып ултырған ҡыуаныслы саҡтарым да... Һөйөлдөм дә, һөйҙөм дә. Көнләштем дә, көнләштерҙем дә. Тормош бит. Инде һикһән йәшкә етеп киләм, ҡайһы бер һығымталар ҙа яһай аламдыр. Ҡайғының иң ауыры, иң ғазаплыһы – яңғыҙлыҡ. Әммә уны ла үткәреп була. Моң бар. Ҡолаҡтары ишеткәндәрҙе моң ҡотҡара. Иң әсе ҡайғы – бала ҡайғыһы. Иң ҙур бәхет — балаларҙың йылы мөнәсәбәте менән һаулыҡ. Шунан айырмаһын Хоҙай, — тине ул.

Ә ҡулъяулыҡ, ысынлап та, матур ине. Матурлығынан тыш, шуныһы ғәжәп булды: баҡһаң, был ҡулъяулыҡ, ысынлап та, сәхнәлә Дездемона ҡулъяулығы булып "хеҙмәт" иткән икән. Уны Рәғиҙә апай Арыҫлан ағайҙың ҡомартҡыһы тип һәр саҡ кеҫәһендә йөрөткән.

Аяҡтарының һыҙлауы бер аҙ баҫылғанға, ҡош тауыштары тыңлау мөмкинлеге булғанға сикһеҙ ҡыуанып көндәрен үткәргән нескә хисле шағирә Рәғиҙә апайҙың хәтирәләрен, моң ҡапыл уятып, күңелен иләҫләндереп ебәрҙе. Тағы ниндәй кисерештәр, ниндәй хәтерләүҙәр килтергәндер был моң — уныһын һорашманым. Әммә аҙағыраҡ ул ижад ҡомарының да, илһамдың да, кисерештәрҙең дә, йәшәүгә дәрттең дә, күңел йыуанысының да фәҡәт моң аша ғына килеүе тураһында һөйләне. "Ҡайһы ваҡыт шундай ауыр булып китә, ҡулға бер ни бармай, быуынһыҙланам, күңелдә тик бушлыҡ ҡына хөкөм һөрә... Шул саҡтарҙа радиоалғысымды яныма ҡуям да сәғәттәр буйы йыр тыңлайым. Күҙ алдарым асыла, тын алышым иркенәйә, сәләмәтлегем яҡшырып китә. Эшләге килә башлай. Ҡулыма дәфтәр, ҡағыҙ алам. Шиғыр яҙам. Өфөлә ниндәй генә

дарыуҙар менән дауаланманым, әммә барыбер төрлө дарыуҙарға ҡарағанда ла йыр нығыраҡ дауалай ине. Бәлки баштан уҡ ошолай тәбиғәт ҡосағында тәбиғи ысул – үләндәр менән дауаланһам, ҡош тауыштары тыңлаһам, эргәмдә ошолай моң ишетелеп, баш осомда туп-туп итеп алмалар яуып торһа, ҡартайған көнөмдә кеше көнлө булып та ҡалмаҫ инем. Үҙ аяғың менән йөрөп ҡартайыуға ни етә! Көндәремде яңғыҙ үткәргән саҡтарым бик йыш бит хәҙер. Шул саҡтарҙа: "Әлдә моң бар донъяла!" — тип ҡыуанам.

"Әлдә ошо йыр бар, әлдә моң бар. Бөтә һыҙланыуҙарыма ла шифа ул," – тип ҡабатлай ине Рәғиҙә апай йыш ҡына.

Бындай фекерҙе бик күп кешеләрҙән ишеткәнем булды.

Өфө ҡалаһында йәшәүсе, оҙаҡ йылдар музыка уҡытыусыһы булып эшләүсе ғәжәп талантлы мандолинасы һәм пианист Мәүрүзә Шөғәйеп ҡыҙы Фәттәхова апай менән таныштым. Дөрөҫөрәге, Диҡкәтте ерләгәндән һуң бер нисә көн үткәс, үҙе беҙгә килде һәм килеүенең сәбәбен дә аңлатты:

— Мәктәп уҡытыусылары менән бергә Диҡкәтте һуңғы юлға оҙатырға барҙым. Унда килгән кешеләрҙең күплеге, ул кешеләрҙең бөтөнөһөнөң дә Диҡкәттең яҡты донъянан китеүен үтә ауыр кисереүҙәре мине хайран итте. Баш осонда тороу өсөн сират шул тиклем оҙон ине, кешеләрҙе бик йыш алмаштырып торҙолар. Мин бығаса һеҙҙең хаҡта ишетә генә белә инем. Унда күрҙем. "Катыны бишенсе бала көтә," —тинеләр. Һинең тыныслығың, врачтарҙың ярҙамынан баш тартыуың, хатта шундай ауыр саҡта ла атайҙары менән хушлашырға килгән балаларыңды хәстәрләүең ғәжәпләндерҙе. Мин мәктәп уҡытыусылары менән бергә барғайным. Директор Вил Шәйҙуллович Бәхтейәров минең янымда торҙо. Ҡурайсы Юлай Ғәйнетдинов табут янына баҫып "Ашҡаҙар"ҙы уйнап ебәргәйне, хушлашырға килеүселәр бөтөнөһө бер юлы: "Эһ!" тип ебәрҙе. Кешеләр генә түгел, тотош бина көрһөнгәндәй тойолдо. "Ни эшләп кенә "Ашҡаҙар"ҙы уйнай инде, ҡатыны хәҙер үкереп илап ебәрһә, туҡтатып алып булмаҫ бит!" — тигәндәй, кешеләр һинең яҡҡа боролдо. Медсестра эйәртеп яныңа Марат Аҙнабаев барҙы. Ә һин ауыр итеп бер көрһөндөң дә үҙеңде ҡулға алдың. Уколдан баш тарттың. Шул саҡ янымда торған Вил Шәйҙуллович: "Ниндәй кешеләр китә донъянан!", — тине лә ҡулъяулығын алып күҙҙәрендәге йәшен һөртөп алды. Ул минутта күҙ йәштәрен һөртмәгән кеше булмағандыр... Аҙаҡ белдем: беҙҙең директор менән бергә уҡыған икәнһең. Был хәлдәр һеҙҙең менән яҡынданыраҡ танышыуға сәбәп булды һәм берәй нисек ярҙам итә алмаммы, тигән теләк тыуҙы, — тине ул.

Сәй эсеп алдыҡ. Шунан ул стеналағы мандолинаны күреп, рөхсәт һораны ла уйнап ебәрҙе.

Уның уйнап ебәреүе ҡапыл шул тиклем тетрәндерҙе: беренсенән, мандолина Диккәттеке ине, ул да ихлас уйнай торғайны. Икенсенән, уның үлеменә күп ваҡыт үтмәгәйне, өйҙә кемдеңдер музыка ҡоралында уйнауын тыңлау түгел, радио тыңлағаныбыҙ ҙа юҡ. Тамаҡҡа ниҙер килеп тығылды, күҙгә йәш төйөлдө, әммә күңел нескәргәнен балаларға күрһәтергә ярамай. Мәүрүзә апай һиҙҙе быны һәм бейеү көйө уйнай-уйнай бейей башланы. Бейене-бейене лә, иҙәнгә ултырып уйнап тағы әйләнеп-әйләнеп бик етеҙ генә әллә ниндәй бейеү хәрәкәттәре эшләп, балаларҙы шаяртып, көлдөрөп, уларҙы бейергә төшөрөп, ихлас йыуатты беҙҙе.

"Гел генә бер нәмә тураһында уйлау мейене арыта. Мейе арый башлаһа, әллә ниҙәргә килтереүе ихтимал. Бер үк нәмә тураһында ун минуттан да ары уйларға ярамай", — тигән фекерҙәр уҡыным аҙаҡ. Мәүрүзә апай шуның өсөн беҙҙе көлдөрөп алыуҙы маҡсат иткән икән.

Мандолинала оҫта уйнаусыларҙы беләм. Атайым, абзыйым уйнаны. Иҫәнғолда Рәмил Байсурин тигән иҫ китмәле мандолинасы бар ине. Беҙҙең менән бергә уҡығандарҙан Урал Нәҙерғолов, Вил Бәхтейәров, Сәбилә Сөләймәнова, Сания Рахманғоловалар, унан һуң шағирә Кәтибә апай Кинйәбулатова ғәжәп оҫта уйнай. Кәтибә апайҙың "Ҡолой кантон"ы тап үҙе уйнағанса ғына ҡолаҡта сыңлап тора. Сания "Зөлхизә" менән Огинскийҙың "Полонез"ын ғәжәп уйнай торғайны. Ә Мәүрүзә апайҙың уйнауы үҙенсәлекле, башҡаларҙыҡына бөтөнләй оҡшамағайны. "Ҡайғыны моң менән генә тарҡатып була," – тигән фекерен раҫларға теләгәндәй, иҫ китмәле дәртле сиртә ине мандолина ҡылдарын.

Ул, ысынлап та, моң тәьҫире тураһында һөйләргә ниәтләнеп килгән икән. Беҙ аҙаҡ бик яҡын дуҫтар булып киттек. Шунан Мәүрүзә апай үҙ тормошонан ошо ваҡиғаны һөйләне.

"... Бик ҡаты ауырып больницаға инеп киттем. Ашҡаҙаныма операция яһанылар. Операциянан һуң ҡайғыларға сумып, йәшәй алырмынмы-юҡмы, тигән икеләнеүҙәр менән уйланып ятам. Өйҙәгеләрҙән бер хәбәр ҙә юҡ. Ике бәләкәй улым, ирем... Борсола башланым. Бер аҙҙан ағайым килде. "Һин борсолма. Төҙәлгәнсе уйланмай ғына ят. Балаларҙы беҙ ауылға алып ҡайтып торорбоҙ. Унда тынысыраҡ йәшәрҙәр. Әсәй йылыһы булмаһа ла, хәстәрлек күрһәтә алырбыҙ. Тамаҡтары туҡ булыр. Кейәүҙе бик ашығыс ҡына оҙайлы командировкаға ебәргәндәр икән," — тине. Мин ышандым. Күңелемдә ниндәйҙер борсолоу тойһам да бер аҙ тынысландым.

Операциянан һуң бер аҙ яттым да больницанан сыҡтым. Ҡайттым. Ишекте асып ебәрһәм, аптырауымдан сайҡалып киттем. Өйҙә бер нәмә лә юҡ тиерлек... Ни булғанын да аңламай ҡарап тик торам. Ишек асылған тауышты ишетеп, күрше инде. Баҡһаң, мин больницаға ингәс тә, балаларҙың атаһы, иҫке-моҫҡоно ғына ҡалдырып, күҙгә күренер әйберҙәрҙе тейәгән дә икенсе ҡатынға сыҡҡан да киткән. Балалар үҙҙәре генә ҡалған, ике көн буйы вермишель кимереп ултырғандар. Шунан күршеләр хәл белергә инеп, быны күргәс, ағайыма шылтыратып саҡырып алғандар.

Мин шыҡһыҙ ҡалған бүлмә уртаһында, ҡатҡан баҫана һымаҡ, ҡуҙғала ла алмай тик торам. Күпме ваҡыт үткәндер белмәйем, бер саҡ кухнялағы радионан "Ғайса" йыры ишетелде. Көндөҙгө концерт бара. Хәбир Ғәлимов йырлай ине:

Ҡаҙ бәпкәйҙәре лә һары икән,
Теҙелеп-теҙелеп һыуға бара икән.
Йөрәк башҡайына ҡан һауҙырған,
Йөрәк ярып сыҡҡан бала икән.

— Туҡта әле, мин ни эшләп бөгөлөп төштөм? Иң ҙур байлығым ҡҙемдә ҡалған бит. Балаларым, йырым, музыкам минең менән... Йыр ярата, йыр аңлай торған йөрәгем бар. Ни эшләп әле мин сепрәк-сапраҡҡа, ялтыратылған йәшниктәргә ҡайғырып ултырам? Теләһәң, хәҙер булдырыла ла, юҡҡа сыға ла торған нәмәләр бит улар! — тип, һикереп торҙом да үрелеп мандолинамды алдым. Ҡаҡ стенала мандолинам ғына эленеп ҡалғайны. Алдым да уйнай-уйнай бейей башланым. Операциянан һуң әллә ни дәртле бейей алманым. Шулай ҙа эстәге ялҡынды һүрәүләтерлек бейенем. Бейенем-бейенем дә диванға ауҙым. Ҡараһам, эргәмдә күршеләр тора. Аптырағандарҙыр инде миңә. Бәлки, ҡайғынан бер төрлөрәк булып бара, тип тә уйлап ҡуйғандарҙыр. Шунан береһе сәй эсергә саҡырҙы. Инеп сәй эстем дә, үтескә юлға аҡса алып, балаларым янына ауылға киттем.

Балаларҙы алып ҡайттым. Дуҫтарым, таныштарым, туғандарым ярҙамы менән яңынан донъя көтә башланым. Береһе ашарға алып килә, икенселәре кейем килтерә. Балалар элеккесә балалар баҡсаһына йөрөй башланы. Үҙем эшләнем. Өсәр смена эшләнем. Ул ир менән йәшәгән саҡта өйҙә нәмәбеҙ булған — бөтөнөһөн дә яңырттым. Балалар әйберҙәре юҡлыҡҡа кәмһенмәһендәр, ҡайғырмаһындар, тип уйланым.

Үҙемдең йәшәүем, ауырлыҡтарҙы еңеүем, дәртемде һүндер-

мәүем һәм йәшәү ҡомарымды юғалтмауым менән мин моңға бурыслымын. Моңдо һатып алып булмай. Ул кешенең йөрәгендә ярала. Моң минең булмышымдағы бөтә мөмкинлекте бергә туплаһы ла ҡеүәтле бер көскә әйләндерҙе.

Әгәр врач булһам, ауырыуҙарға мотлаҡ рәүештә йыр тыңларға ҡушыр инем. Иң яратҡан йырҙарын, туған моңдарын тыңлатыр инем. Һауығыуҙы күпкә тиҙләтер ине был сара.

"**Йырҙан, моңдан айырылма**", — тигән кәңәш бирҙе Мәүрүзә апай миңә.

Моңдоң сәләмәтлеккә ыңғай тәьҫире тураһында тағы бер ваҡиға.

Башҡортостан сәнғәтендә 1953 йылдарҙан башлап яңыса яңғырашлы эстрада йырҙары ишетелә башлай. Ирле-ҡатынлы Мәғфирә менән Наил Ғәлиевтар (*Николай Голов*) "Өфө уттары" тигән инструменталь ансамбль төҙөп, башҡорт эстрадаһына нигеҙ һалыусылар булып танылалар. Ғәлиевтар менән аралашып йәшәнек. Бик әҙәпле, татыу, һәр саҡ күтәренке кәйеф менән йәшәргә ынтылған ғаилә ине был. Мин Мәғфирә Ғәлиева тураһында ла, Наил Ғәлиев тураһында ла матбуғат биттәрендә байтаҡ ҡына мәҡәләләр яҙҙым. Ошо матур ғаиләгә бер ваҡыт ауыр ҡайғы килә. Мәғфирә апай ҡаты ауырып больницаға ята. Наил Ғәлиев һыңар ҡанаты һынған ҡош һымаҡ тоя ине үҙен. Бер көн уларҙың яҡын дуҫтары, ижади фекерҙәштәре һәм хеҙмәттәштәре шағир Шәриф Бикҡол менән ҡатыны Рәйсә Наил Ғәлиевты йыуатып оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырып ҡайтып китәләр һәм шул уҡ кистә Шәриф Бикҡол Наил Ғәлиевҡа телефондан шылтырата:

— Коля, мин, һинең тойғоларыңды сағылдырып, йыр һүҙҙәре яҙҙым. Тыңла. Оҡшаһа, көй яҙ. "Оҙата кил" тип атаным:

Һайра, һайра, һандугасым...
Һиртмә-һиртмә талдарыңда.
Хыялыйҙар иткәйнең бит
Мине йәшлек таңдарыңда...

Наил Ғәлиев былай тип хәтергә алды ул көнөн:

— Шиғыр һүҙҙәрен тыңлай барам, шул ыңғайға күңелдә көй ярала. Шәриф трубканың теге яғынан: "Яҙҙыңмы?" – тип һорай. Ә мин: "Йыр тыуа бит, Шәриф, йыр тыуа, — тип, яуап бирәм. Ул аптырап китте. — Был көй минең күңелемдә йөрөгән, тик уны йөрәктән һурып сығарыр өсөн тап ошо һүҙҙәр кәрәк булған. Рәхмәт һиңә."

— Йырлап ишеттер, — ти.

— Ғәфү ит, Шәриф. Тәүҙә Мәғфирәгә йырлайым, — тинем.

Мин шунда үк һүҙҙәрҙе көйгә һалдым да больницаға Мәғфирәгә шылтыраттым:

— Мәғфирә, тыңла,—тинем һәм "Һайра, һайра, һандуғасым..." — тип йырлай башланым. Күңел тулған, күҙҙәрҙә йәш. Телефон трубкаһының теге яғында Мәғфирә илап тыңлай. Тойоп торам...

Мәғфирә апай һауығып сыҡҡас, был ваҡиға тураһында ошолай тип һөйләне:

— Өмөтһөҙлөккә бирелгәйнем инде. Аяҡҡа баҫа алмам, башҡа бер ваҡытта ла сәхнәгә сыға алмам, тип уйлағайным. Ә Колянын:

Әле булһа тыңлайым да
Моңдарыңа хайран ҡалам.
Һайрай башлар минутыңды
Мин зарығып көтөп алам.

Сиртә-сиртә күңелемдең
Үтә нескә ҡылдарына.
Оҙата кил гүмеремдең
Йәшәлмәгән йылдарына, —

тип йырлауы һәм "Һиңә арнап сығарҙыҡ, Мәғфирә, һинең йырың был!" тип әйтеүе, мине ҡанатландырҙы ла ебәрҙе. Үҙем йыр тыңлайым, үҙем илайым. Шатлыҡ йәштәре ине улар. Мин һауығасаҡмын, улар минең яңынан сәхнәгә баҫырыма ышана, тип ҡыуанам. Ошо көндән башлап мин һауығыуға табан киттем. Больницанан сыҡҡансы һәр көн кис Коля миңә ошо йырҙы телефон аша йырланы. Минең иң ҡиммәтле, иң шифалы дарыуым ошо булды.

Мәғфирә Ғәлиева байтаҡ ҡына сығыштары алдынан кешегә моңдоң тәьҫире тураһында һөйләп, йыр-моңдан айырылмағыҙ, ул кешенең ғүмерен оҙайта, тигән нәсихәт әйтә.

Ғәжәп үҙенсәлекле лирик шағир Рафаэль Сафиндың яҙмышы, үҙе әйтмешләй, тетрәнеүҙәр тулы бәхет. "Гармуным булмаһа, моң булмаһа, ижадым булмаҫ ине", — ти ул үҙе. Ғүмере буйы тәүге мөхәббәтенә тоғро, ғүмере буйы саф һөйөү менән бер яҡлы яратыу, ғүмере буйы тиерлек яңғыҙ. Уның шиғри әҫәрҙәре лә, драмалары ла моң менән бергә яралған. Кешеләр хаҡында, яҙмыш тураһында уйланыуҙары ла моң аша бара. Рафаэль Сафиндың яңғыҙлыкта үткән тормошон фәҡәт моң ғына тулыландыра. Иҫ китмәле гармунсы шағир күңел һыҙланыуҙарын, мөхәббәт ғазаптарын гармуны менән баҫа. "Туған моңома, гармуныма рәхмәтлемен", — ти ул.

Уның “Гармунсы” поэмаһына ла туған моңдоң кеше яҙмышында күңел яраларын төҙәтерлек көскә эйә булыуы хаҡында фекер һалынған.

* * *

Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының өлкәнәйгән саҡтарын күреп, беҙ һуғыштан да шулай ҡайтҡандарҙыр, тип уйлап ҡуябыҙ ихтыярһыҙҙан. Ә бит улар ун һигеҙ-егерме йәштәрҙәге егеттәр, утыҙ-ҡырҡ йәштәрҙәге бынамын тигән ирҙәр булғандар. Атайым яғынан туған ағайыбыҙ Ғәбитулла Шәрипов егермеһе лә тулмай зәғифләнеп ҡайта. Оҙон буйлы, сын яһау матур егет була ул. Разведкаға барып ҡайтып килгән саҡта яңылыш минаға баҫа. “Һунарсылыҡ тәжрибәһен беләм. Шуға, разведкаға барған саҡта, төлкө ысулы менән эш итә торғайным. Разведкаға мине бик йыш ебәрәләр ине. Бурысты үтәмәй ҡайтманым. Хатта наградаға ла тәҡдим иткәйнеләр...

Төлкө һәр ваҡыт барған юлынан тайпылмай ғына кире ҡайта. Сөнки уның хәүефһеҙ икәнен белә. Мин дә барған саҡта, ентекләп тикшереп, юлымды билдәләй-билдәләй барам да кире яҡҡа тыныс ҡына ҡайта инем. Ә был юлы, белмәйем, һаман да аптырайым, юл хәүефһеҙ, яҡында фашистар ҙа юҡ ине, кире ҡайтҡанда, шыуышып килеп минаға баҫтым да ҡуйҙым,” — тип, өлкәнәйгәнгә тиклем шул хәлде аңлай алмай һөйләне Ғәбитулла ағай. Уның ике күҙе лә тома һуҡыр, уң ҡулы терһәктән түбән өҙөлгәйне.

— Тыуған яҡтарыма ҡайтып үлһәм, үкенмәм, тип уйланым. Ҡайттым. Эскенәйем тулы ялҡын. Эх, элеккесә гармун алып һыҙҙырып ебәр ине лә, бөтә ялҡыныңды һал ине моңға, тип уйлайым. Гармунымды ҡосаҡлап ултырам. Телдәренә баҫыр өсөн уң ҡул өҙөк. Аяҡҡа эләктереп уйнап маташам. Юҡ. Тиҙ арыта. Өҫтәүенә, яланаяҡ ултырырға кәрәк. Әмәлен табырға, нисек булһа ла уйнарға, шунһыҙ ни хәл түҙмәк кәрәк, тип баш ватам. Тик моң ғына йөрәгемде баҫыр һымаҡ. Шунан уйлап таптым. Гармунды әйләндереп тоттом да, яралы ҡулға бас яғы ҡайышын ҡыҫтырып ҡуйҙым, төймәле яғына һул ҡул бармаҡтары менән баҫып уйнай башланым. Ҡәҙимге уйнап була. Көй сыға башланы. Шунан аҙыраҡ тыныҫландым. Күкрәкте тотош көйҙөрөп сығарырҙай булып яндырып торған ҡуҙ аҡрынлап һүрәнләнә башланы. Шулайтып һул ҡул менән бер яҡлап ҡына уйнап алдым да киттем. Донъяны моң аша тоя башланым. Хәҙер бөтәһен дә моң аша һиҙәм. Йүкә сәскә атҡанын да, арыш баш ҡоҫҡанын да, кәрешкә сәскәләнгәнен дә тоям, моң аша һиҙәм. Бөтә нәмәнең дә үҙенең бер моңо була бит ул. Тик

уны тойорға кәрәк. Ағас япраҡтарының ҡыштырлауынан ниндәй ағас икәнен билдәләй алам, аяҡ тауышынан кем килгәнлеген айырам, хатта малдарҙы ла тояҡ тауыштарынан айырам... Кешене һөйләшеүенә ҡарап, кәйефен, эске торошон аңлай-айыра алам. Кешенең күңел торошо тын алыу, һөйләшеү тулҡындарында сағыла. Хатта ҡайһы бер хәрефтәрҙе әйткәндә, айырыуса һиҙелә...

Ғәбитулла ағайҙың был һүҙҙәрен Ғәйшүрә еңгәй хуплай:

— Ғәбитулланы бала ҡарарға ҡалдырам да үҙем бесән сабырға китәм. Бер тынала сабып өлгөрәмме-юҡмы, Ғәбитулла килеп етә. Алыҫтан уҡ һөрән һалып килә ул: "Ғәйшүрә, салғыңдың яныуы еткән. Туҡтат эшеңде, беләгеңә көс төшә бит," — ти. Шул тиклем оҫта яный салғыны.

— Мөмкинлегем булһа, салғынан берәй музыка ҡоралы яһар инем. Салғы тауышы бик моңло ла, һығылмалы ла ул. Мин уны тауышына ҡарап яныйым, шуға үткер була. Һуғыш ваҡытында, ирҙәр юҡ саҡта, бөтөнөһөнөң дә салғыһын янып бирә торғайным.

— Салғыны ғына түгел, балтаны ла тоя ул, — тип һүҙгә ҡушыла Ғәйшүрә еңгәй. — Малайҙар утын ярып торһа, ни эшләп үтмәҫ балта менән туҡылдығы сығаһығыҙ? Беләккә лә, йөрәккә лә көс төшә, утын да ярсыҡлана. Йорт алды сүплəп, үлән араһына тап тултырып бөтәһегеҙ. Ярсыҡлаған утындың ҡыҙыуы буламы ни уның, ти башлай. Ҡайһы саҡта, үтә ваҡсылланып китәһең, тип ҡуям да талабы дөрөҫ булғас, тағы тыйылам. Бер ваҡыт күршелә яңы ғына килен булып төшкән һылыуҙың һыйыр һауғанын ишетеп ҡалған да йәллəп килеп ингән: "Йәш киленде әйтәм, һауа белмәйме, ҡулдары көсһөҙ генәме, сөпөрлөгө сығарып ҡына һауып ултыра. Бар, өйрәтеп кил. Һыйырҙы ла яфалай, үҙе лә этләнә бит. Һауып өйрәнгәнсе бығауын имеҙһен. Әллә ни эшләп һөт йəллəп бығауҙы иртә айырған булалар. Былай ни, киреһенсә, һыйыр һыуала бит", — тип, мине ярҙам итергә ебәрҙе.

Донъяны шулай тойоп "күргəс", беҙгә ҡарағанда күберәк аңлайҙыр, тип уйлайым. Тойоу мөмкинлеге күреүгә ҡарағанда күләмлерәктер, киңерәктер. Бер саҡ ҡыҙым әсе ҡамыр баҫа башлаған икән:

— Ҡыҙым, мейесеңдə булдырмай тор. Йүкәнәнме, ҡайынданмы бер нисә утын өҫтә. Ҡамырыңдың әсеүе етмәгән әле. Баҫ та ултырта бирəп ал. Әсәйеңдең икмәге кеүек эре күҙәнәкле булып бешһен, — тип өйрәтә, ти.

— Ә һин ҡайҙан беләһең уны, атай?

— Тоям, балам. Тауышынан тоям. Булған ҡамыр баҫҡан саҡта шартлап тора, булмағаны бысылдығы сыға, — ти икән. Балаларҙың

тәүге бишәүһе ир балалар. Биргесләшеп тә, түпәләшеп тә ала торғайнылар. Бер сағ икәүһе танауҙарын мыршылдата тартып килеп ингән. Ғәбитулла тегеләрҙе берәм-берәм эргәһенә сағырып алған да, бер ни ҙә әйтмәй ебәргән. Шунан тағы ла икеһен бергә сағырып алып, баштарынан һыйпап, былай тигән:

— Урал улым, һин өлкәнмен, ағаймын, тип, тегеләрҙе һыртлатыбыраҡ ебәрҙең, ахыры. Улайтып үҙең туҡмалма, өлкән була бел. Туҡмама, ә ағайҙарса ҡаты ҡуллы бул. Аңланыңмы? Ә һин, Рауил, абзыйыңды абзый итә бел. Өлкәндәргә ҡул күтәреү килешкән эш түгел. Абзыйың көсө етмәгәнгә һуҡмай тип уйлайһыңмы, ауырттырып ҡуймайым, тип йәлләй ул һине. Ә һин, абзыйымды еңдем, тип уйлап, шәбәйеп киткәнһең. Ярамай улай. Бынан ары үҙ-ара ыҙғышып йөрөмәгеҙ. Татыу булығыҙ, — тигән. Малайҙар сыҡҡандар ҙа:

— Әсәй, атайымдың күҙе булмаһа ла күрәлер ул. Беҙҙең һуғышҡанды вис кенә күреп торған да ул, — тип һөйләйҙәр ярыша-ярыша.

— Нимә ти?

— Рауилдың миңә һуҡҡанын күргән, — ти Урал. — Абзыйыңды абзый итә бел, ти.

Аҙаҡ, Ғәбитулланың үҙенән һорашһам, танау тартыуҙарынан һиҙеп торам, ти. Уралының мышҡылдауы үпкәләберәк сыға, Рауилы үҙен ғәйеплерәк тотоп, минең янда ҡурҡыбыраҡ баҫҡан, — ти.

— Ғәбитулла ағай, тойоу көсө нығыраҡмы, әллә ҡул менән һиҙеүме? — тип һорайым.

— Тойоу көслөрәктер. Яңылышҡаным юҡ. Ә ҡул менән яңылышҡылайым. Бер сағ еңгәң йоҡлап ятҡан баланы ҡарап тороргә ҡалдырҙы ла бесән сабырға китте. Таң яңы атҡайны. Һыйырҙы көтөүгә ҡыуам да таңғы ысыҡта бер юлы бесән сабып ҡайтам, тине. Китеүе булды, бала уянды ла ҡуйҙы. Аҫтын ҡараһам, еүеш. Алмаштырайым тиһәм, оло ярау иткән. Йыуырға кәрәк булды. Мейес башындағы күнәктәр араһынан ҡул һырты менән йылырағын эҙләйем. Береһе йылы ғына ине, шуныһынан сүмес менән һирпеп алдым да көлдөксәлә генә йыуайым тип тора инем, малайҙарҙың береһе уянған да, атай, сүмесеңдә һөт бит, тип һикереп килеп торған. Ә ишетеү-тойоу мине яңылыштырғаны юҡ. Ҡош тауыштарына ҡарап көндөң, йылдың нисек килерен тоям. Эйәреп яҙып йөрөр кеше булһа ҡайҙа ла ул. Үҙем белгәнде тотош өйрәтер инем, балаларым эштән бушамай. Эш күп бит ауылда.

Мәрйәм һылыу, Диҡҡәт кейәү, тотош ошо донъя кешенең

бәләкәй генә йөрәгенә моң булып һыйған. Уны тоя белергә кәрәк. Донъя һулышын, тын алышын тойған кеше бер вакытта ла ҡоралға тотонмаҫ ине. Кеше зәғифләү – донъяның үҙен зәғифләү бит ул. Ә донъя шул тиклем матур бит...

Һуҡырҙар өсөн китаптар уҡып, бөтә яңылыҡтарҙы белеп йәшәгән, үҙ ҡулдары менән ағас ҡырҡып бына тигән итеп бура бураған, ҡапҡа баҫаналарын төп-төҙ итеп ултырта алған, биш улы һәм ҡыҙы булған был ағайҙы Диҡҡәткә күрһәтер, таныштырыр өсөн Ғәббәс ауылына килгәйнек. Ауылдағы йола буйынса, кис ҡунаҡ саҡырҙылар. Ғәбитулла ағай гармунда уйнап ебәргәйне, Диҡҡәттең күҙҙәрен йәш алды. Уның эргәһендә ултырған Ғәйшүрә еңгәй:

— Ошолайтып уйнап ҡаратып алды инде мине, — тип шаяртып алған булды. Еңгәйҙең һылыулығына хайран булған Диҡҡәт: "Улар һуғышҡа тиклем таныш булғандармы?" – тип һораны. "Юҡ. Ҡайтҡас, өйләнгән. Дөрөҫөрәге, еңгәй кейәүгә сыҡҡан", — тигәс, аптырауы тағы ла артты.

— Ғәбитулла ҡайнаға ҡатынының шул тиклем матурлығын күрә алһа, ни эшләр ине икән? Ғәббәс ауылының байлығы бит улар, – тип ҡуйҙы Диҡҡәт.

Ғәйшүрә еңгәй Диҡҡәтте бик оҡшатты. Бөтә кешегә лә әллә ни асылып бармаған ҡырыҫыраҡ холоҡло еңгәй уны яҡын итте һәм ошоларҙы һөйләп алды:

— Бер генә күрҙем мин уны. Хатта күрмәнем дә тиерлек, ишеттем генә. Урамдан үтеп бара инем, берәү гармунда уйнай. Гармунының тауышы әллә нисегерәк һымаҡ, балаларҙың бәләкәй гармунында уйнайҙыр, тиһәм, моңо хайран ҡалдыра. Ҙур гармунда тиһәм, тауышы әллә нисегерәк. Баҡһаң, гармунының бер яғында ғына Ғәбитулла уйнаған икән. Был тиклем моңло кешенең йөрәге тулы ялҡындыр инде, тип йәлләп, өйҙәре тапҡырында оҙаҡ баҫып торҙом. Кемдер быны күреп ҡалған да Ғәбитуллаға әйткән, ахыры. Бер вакыт ҡустыһын эйәртеп Мәзит ауылына килеп еткәйнеләр, риза булдым да ҡуйҙым. Төрлө саҡтар булды, кейәү. Тик кистәрен ултырып ошолайтып гармунын һуҙып ебәрһә, көн буйы кисергән ауырлыҡтары ла, һыҙланыуҙары ла, ығы-зығыһы ла онотола ла ҡуя торғайны. Моң шифа бит ул йөрәккә. Ике ҡул көсө. Алты балам, Ғәбитуллам. Йөрәккә ял бирерлек ошо гармуны булмаһа, белмәйем, ни эшләр инем? Ошо моң йәшәтте, ошо моң көс бирҙе беҙгә, — тип һөйләне еңгәй.

* * *

Һәр ғаилә яҙмышы ил тарихы менән бәйле. Отставкалағы полковник, Диҡкәттең яҡташы, Урта Мотал ауылы ир-уҙаманы Йәүҙәт Иҫкужин республикабыҙҙа билдәле кеше. Өфөлә йәнәш урамда йәшәнек, йыш ҡына осраштырғылап та ала торғайныҡ. Йәүҙәт ағай, мине журналист булараҡ та, яҡташ килене итеп тә яҡын күрҙе һәм бер ваҡыт: "Һин ошо ваҡиғаны мотлаҡ яҙырға тейешһең", – тип, бер ваҡиға һөйләне. Мин яҙҙым һәм Силәбе өлкәһендә башҡорт телендә нәшер ителә башлаған "Тыуған яҡ" гәзитенә ебәрҙем.

Ваҡиға шундай. Йәүҙәт ағайҙың атаһының бер туған ҡустылары Шәрифулла менән Рәхмәтулла Иҫкужиндар кулактар исемлегендә балалары менән бергә Белорет районына урман эшенә ҡыуылалар. Һөйләһәң, әҙәм ышанмаҫ шарттарҙа бер-бер артлы үләләр, ҡасалар, юлда үлеп ҡалалар, тотоп карцерға ултырталар. Шәрифулла менән ҡатыны Көньямал ике балаһын больница, икәүһен милиция бүлегендә ҡалдырып, юл шарттарын белеп, аҙыраҡ аяҡҡа баҫҡас, балаларҙы юллап алыу шарты менән ҡасалар. Бер аҙҙан Көньямал Белоретҡа килеп, балаларын эҙләй, әммә тапмай. Йәүҙәт Иҫкужин ғүмере буйы, эш буйынсамы, ялға барғандамы – ҡайҙа ғына булмаһын, туғандарын эҙләй. Документтар аҡтара, йөҙгә оҡшаш кешеләргә иғтибарлы була. Бер ваҡыт Йәүҙәт Иҫкужин ҡатыны Миңзифа менән Ессентукиҙа ял иткән саҡта, урындағы фотографҡа иғтибар итәләр. Ул йөҙө-ҡиәфәте менән башҡортҡа оҡшаған була. Тик исем-шәрифтәре тап килмәй. Николай Иванович Касанов. Иҫкужиндың үтә лә иғтибарлы ҡарашын тәүҙә аңлап етмәй фотограф, әммә үҙенең дә ҡыҙыҡһыныуын йәшерә алмай.

Һөйләшеп киткәс, шул асыҡлана: Николай Иванович үҙенең кем, ҡайҙан, ниндәй милләттән икәнлеген дә белмәй. Тик рус түгеллеген генә аңлай. Ғүмере буйы "үҙен" эҙләй. Күңеленә яҡыныраҡ ял итеүселәрҙе өйөнә алып ҡайтҡылай, һөйләшеп тә ултыралар. Ҡаҙаҡ егетен дә, татар егетен дә, үзбәкте лә алып ҡайтҡан. Тик береһен дә үҙенеке итә алмаған. Әсәһе үлгәс, атаһы икенсе ҡатынға өйләнергә уйлаған да кеше һөйләүе буйынса ла, әкиәттәрҙән дә үгәй әсәйҙең шул тиклем насар булыуы тураһында "белгән" балалар өйҙән ҡасҡан. Илдә аслыҡ-яланғаслыҡ хөкөм һөргән саҡ. Ҡасып аҙашып та, аслыҡтан өйөнән сығып та киткән балалар вокзалдарҙа шығырым тулы була. Уларҙы балалар йортона тапшыралар. Николай ҙа ҡустыһы менән бергә балалар йортона эләгә. Унан армия, Бөйөк Ватан һуғышы, армиянан һуң хеҙмәттәш дуҫы менән Ессентукиға килә һәм өйләнә. Әммә ғүмере буйы

күңеле кемделер, нимәнелер юкһына, тынғылыҡ тапмай. Шуға ла бында ял итергә килгән һәр кешегә иғтибарлы, берәйһендә үҙ туғанын таныу өмөтө була.

– Бәләкәй саҡтан берәй нәмә хәтереңдә ҡалмағанмы? – тип ҡыҙыҡһына башлай Йәүҙәт Ғәли улы.

– Юҡ.

– Бына мин ҡатыным менән башҡортса һөйләшәм, берәй нәмә иҫкә төшмәйме?

– Юҡ.

– Улай булғас, йырлайым.

Йәүҙәт Исҡужин һуҙып тороп башҡорт халыҡ йыры йырлап ебәрә. Николайҙың күҙҙәренә йәш килә. Ул тотош һағышҡа күмелә. Тауышы ҡалтыранып, тыныс ҡына һөйләшә алмаҫ хәлгә килә.

– Әйҙәгеҙ беҙгә, әйҙәгеҙ, – тип, үҙҙәренә алып ҡайта. Байтаҡ тыныслана алмай. Ҡунаҡтарын ихлас ҡунаҡ итә һәм иртәгәһен тағы осрашырға һөйләшеп хушлашалар.

Иртәгәһен, йөрәк тапҡырын ҙур йоҙроҡтары менән ыуалап:

– Бөтөн нәмәне аҡтарҙы был йыр. Күҙ алдынан әллә ниҙәр, таныш өйҙәр, таныш йөҙҙәр, һуҡмаҡтар үтә. Кемдер миңә исемем менән өндәшкән кеүек. Ә мин ҡарамайым. Исемемде белмәйем. Ауылыбыҙ М хәрефенән башлана ине шикелле. Станция алыҫ түгел. Ауыл осонда бер яҡта күл, икенсе яҡта зыярат. Сулаҡ бер ағай бар ине. Ул туған булды, ахыры. Беҙҙең өсөн ныҡ борсола торғайны. Хатта бер йыр ҙа иҫкә төштө. Балалар йортонда ҙурыраҡ малайҙар йырлата ла хахылдай ҙа көлә торғайнылар. Шул хәтерҙә ҡалған.

Бейек тауларга менебез,
Менебез – ултырабыз.
Биш йылға тиген планды
Дүрт йылда тултырабыз.

– Был бит ауыл йыры, әсәйҙәребеҙ йырлай торғайны. Һин башҡорт, былай булғас. Әйҙә, хәҙер ауылыңды эҙләйек. Мин ярҙам итәм һиңә, –ти Исҡужин.

– Башҡортмондор. Быға тиклем кемдәр менән генә осрашманым, кемдәр менән генә йырлашып ултырманыҡ, ә был тиклем үҙәк өҙөрлөк тойғо кисергәнем булмағайны. Тотош ҡан тамырҙары буйлап йүгереп үтте был йыр.

Аҙаҡ бик оҙаҡ эҙләнеүҙәр… Тимер юл станцияһына яҡын ғына

ятҡан М-дан башланған башҡорт ауылдарын барлап сығыу һәм, ниһайәт, Силәбе өлкәһе Арғаяш районының Мәүлит ауылында туҡталалар. Был дөрөҫ булып сыға. Туғандар менән осрашыуҙар, күрешеүҙәр. "Туған яҡ" гәзитенә яҙған мәҡәләмде "Ике изге тойғо" тип атағайным. Был һүҙҙәр Николай Касановтыҡы. Уның менән телефон аша һөйләштек: "Мин бәхетле, – тине ул. – Ике изге тойғомдо таптым: тыуған ер һәм туған тел. Уларҙы мин туған йыр аша таптым". Йәүҙәт Иҫҡужинға ғүмере буйы рәхмәтле икәнлеген дә әйтте.

* * *

Атайым мине бәләкәй сағымдан уҡ үҙе менән бергә урман ҡырҡырға йөрөттө. Баштараҡ сәй ҡайнатып, ашарға әҙерләп, һауыт-һаба йыуып ҡына ярҙам итә инем, аҙаҡ ағас та йығыша, бысҡы ла тартыша, ботаҡтар өйөшә, япраҡтар яндырыша, ҡырҡылған ағастарҙы әҙернәгә һалыша башланым. Эш ауыр булһа ла рәхәтләнеп ҡыуышта йоҡлауы күңелле ине. Арығандан һуң йылы ҡыуышта, яңы сабылған хуш еҫтәр борҡоп торған бесән өҫтөндә, атайымдың тиртуына уранып изерәп йоҡлап китеү әле лә хәтеремдә. Атайым ҡыуыштарҙы оҫта, йылы итеп яһай ине. Ҡыуышты йылы итеп ҡороуҙың маҡсаты бер нисәү булған: беренсенән, иң мөһиме – йылы булһын өсөн, сөнки мин бәләкәй булғас, өшөмтәлмен, ә атайымдың үҙенең тамағына тиҙ генә һалҡын тейә торғайны. Икенсенән, ҡыуыш ҡороуға киткән бесән байтаҡ була ине. Бесәнде самалап ҡына бүлеп биргән саҡта, ҡыуышҡа ябылған өлөшөн, күрәһең, иҫәпкә алмағандарҙыр. Атайым ҡыуыш өсөн бесәнде ағас араларынан, йылға буйҙарынан сабып ала торғайны. "Ҡыуыш япҡан бесән үҙе бер йөк була ла ҡуя", — тигәнен абайлағаным бар ине. Ошоноң менән байтаҡ отош яһағандыр. Өсөнсөнән, ҡыуыш ҡорған саҡта файҙаланылған ағасты ла алып ҡайта инек. Нисек кенә булмаһын, атайымдың ҡыуышы башҡаларҙыҡынан айырылып тора ине һәм кистәрен беҙҙең янға бесәнселәр йыйылыша ла оҙаҡ-оҙаҡ һөйләшеп ултыралар ине. Уларҙың ипле, талғын ғына, телдең үҙ моңо менән генә мөңгөр-мөңгөр һөйләшеүҙәре тәьҫирендә йоҡоға тала торғайным. Башҡорт теленең матурлығы бәләкәйҙән бер моң рәүешендә һеңде күңелемә. Ибрай ауылына барған саҡта, әсәйемдең бер туған апаһы Әскәпъямал инәй менән Мәғзүм олатайҙарҙың утъяҡҡыс эргәһенә төҙөгән йәйге өйҙәрендә йоҡлай торғайным. Иртән таң менән инәйем менән олатайым мөңгөр-мөңгөр килеп ярымтауыш менән генә

һөйләшәләр. Шул һөйләшеүҙең талғын моңо ла күңелемә һеңеп ҡалған.

Бында ла усаҡ яҡтыһында башҡорт ағайҙарының әңгәмәләре, ҡайһы ваҡыт мәрәкә һөйләшеп көлөп ебәреүҙәре, сәй эсеүҙәр, баш осонда ҡоштар һайрауы, эргәлә генә аттарҙың ҡырт-ҡырт үлән утлап йөрөүе, Наҙы йылғаһының сылтыр-сылтыр ағыуы — төнгө тынлыҡта иҫ китмәле мөғжизәле күренеш була торғайны. Бер ваҡыт беҙҙең ҡыуыш янына йәш кенә ағай килде. Атайым янына килгән ағайҙар эргәһенә тағы бер кешенең өҫтәлеүе табынды йәнләндереп ебәрҙе. Бер аҙ ултырҙылар ҙа хушлашып таралышмаҡсы инеләр, теге йәш ағай:

— Ағайҙар, һеҙҙең рөхсәт менән анау имән башына менеп бер йырлайым әле. Шунһыҙ йоҡо алмаҫ мине, – тине, шаян йылмайып.

— Беҙ үҙебеҙ әйтәйек тип ултыра инек әле. Йырла, ҡустым, йырла. Ҡеүәтең булғанда йырла, – тине атайым. – Ә һин, ҡыҙым, ят. Иртәгә иртә торорға бит. Йоҡламаһаң, йыр тыңлап ял итеп ят.

— Ул ғына баланы таңғы ысыҡтан торғоҙоп ни эшләтәһең?

— Аттарҙы ул ҡарай бит. Минең ҡолаҡ ҡыңғырау тауышын аңғармай, — тине атайым.

— Аттар алыҫлап китһә, ҡурҡмаймы?

— Бығаса ҡурҡам тимәне. Көн һайын был яҡҡа ыңғайлатып ҡыуып ҡайта.

— Беҙҙең башҡорт балаһы тыуғандан тәбиғәт менән ҡуша үрелә инде. Ҡурҡыу ҙа, һалҡын ысығынан сирҡаныу ҙа юҡ.

Тағы ни һөйләшкәндәрҙер, мин ҡыуышҡа инеп киттем. Урын рәтләп ятыуға йыр башланды.

Табаҡ та ғына табаҡ, ай, аҡ ҡағыҙ
Буранбайҙың яҙған да хаттары.
Буранбайҙың яҙған хатын уҡып,
Зар илайҙыр ауыл ҡарттары.

Төнгө тынлыҡты ярып, көмөш сылтырауындай моң ағылды. Балалыҡ хәтеремдә шулай ҡалған: ул ағай йырлаған мәлдә бар тирә-йүн һиҙ булды һымаҡ. Ярышып һайрап торған ҡоштар ҙа тынды, эргәлә сылтырап ағып ятҡан Наҙы йылғаһы ла туҡтаны, күктә моңайып торған Ай ҙа, йондоҙҙар ҙа йыр тыңларға түбәнерәк төшкән һымаҡ ине. Йыр үргә лә үрләне, тирә-яҡҡа ла таралды, ҡыуышты ла тултырҙы, ағас ботаҡтарына ла һарылды, бесәнгә лә һеңде һымаҡ. Атайым ҡыуыштың түбәһенә тирмә тағарағына оҡшаш уйым ҡалдыра ине. "Йондоҙҙарҙы күҙәтеп ят шунан", – ти

торғайны. Үҙем йондоҙҙарҙан күҙемде алмайым, үҙем ошо моңға бәүелеп иҙерәйем. Бер ваҡыт күҙҙәремә йәш төйөлдө. Ни өсөн икәнен дә аңламайым. Күктәге йондоҙҙар берәм-берәм яныма төшә башланы. Төшкән береһе зың-ң-ң иткән моң сығара ла ағайҙың йырына ҡушылып китә һымаҡ. Бына ағайҙың йыры менән тотош йыһан бергә ҡушылды, ҡайһыныһы йондоҙ, ҡайһыныһы йыр һүҙҙәре икәне лә айырғыһыҙ булып китте...

Был йыр йыһандың үҙенән яралған. Ул булмаһа, тәбиғәт матурлығы кителеп китер, ниндәйҙер бер нәмә етмәҫ кеүек. Йыр тыңлаған саҡта берәм-берәм яныма тирелеп төшкән йондоҙҙар ошо моңдан тағы ла сағыуыраҡ баҙлап китте. Моң туҡтаһа, баҙлауҙары тоноҡланыр. Ҡоштар ҙа моңдо ошо йырҙан алған, Ерҙән үрелгән моң булмаһа, уларҙың тауыштары һаңрауланыр. Хатта күҙ яуын алырҙай, төрлөлөгө менән хайран итерҙәй сәскәләр ҙә моң булған өсөн бихисап төҫкә мансылған. Моң – уларға төҫлө буяу ҙа, көс тә, һут та һымаҡ. Ер йөҙөндәге бөтә матурлыҡтар ҙа моң менән нурҙың ҡушылыуынан бар булған. Төрлө моңдан төрлө төҫ ярала. Улай булмаһа, бындай күҙ яуын алырҙай төҫтәр ҡайҙан хасил булһын, тип һығымта яһаным үҙемдең бала аңым менән. Әкиәттәрҙә Ташбашты ла, Ханды ла әсир иткән моң ошолай булғандыр, тип уйланым.

Иртәгәһен аттар эҙләй барған саҡта, алыҫтан ҡолағыма сағылып ҡалған ҡыңғырау тауышында ла ағайҙың йыры ишетелеп киткәндәй булды. Минең өсөн тирә-йүн тотош шул моң тәьҫирендә йәшәгән кеүек ине. Хатта шиғыр ҙа уйлап сығарып маташтым. Бала саҡта зиһенгә уйылып ҡалған уй-фекерҙәр онотолмай икән. Әле хәтер йомғағын һүтеп ҡараһам, бөтөнөһө лә иҫкә төшә. Хатта, шиғыр тип уйлап, һүҙҙәр теҙмәһе яҙып ҡуйған шул саҡтағы кисерештәрем дә онотолмаған:

Йыр тыңлайым. Ағай көнө буйы
Нисек түҙҙе икән йырламай?
Хәҙер ана ағыла "Буранбай"
Айға, күккә үрләй, туҡтамай.

Минең хәҙер йоҡом килмәй инде,
Саҡ-саҡ ятам әле иламай.
Был ағайҙың йырын ишеткәс,
Мин дә түҙә алмам йырламай.

Алтынсы класты тамамлаған саҡта яҙған ошо "шиғырымды"

етенсе класҡа барғас, стена ғәзитендә баҫып сығарҙылар. Өлкән кластарҙа уҡыған (*өлкән кластар рус кластары ғына ине*) башҡорт уҡыусылары килеп, шиғырымды үҙемдән ҡыҫҡыртып уҡытып аптырап, һин шулай яҙҙыңмы, һин башҡортса шиғыр яҙырлыҡ яҡшы беләһеңме, тип һорап китәләр. Абзыйым менән апайымдың класташтары килеп, минән башҡортса уҡытып, апайымдан руссаға тәржемә иттереп, маҡтайҙар.

...Иртәгәһен атайымдан йырсының кем булыуын һораным. Иншар ағайың, тине атайым. Иншар Солтанбаев булған икән. Иртәгәһен ул килмәне. Эргәлә генә ятҡан Үрген ауылына ҡайтып киткәндер. Ә олатайҙар беҙҙең ҡыуыш яныңа тағы йыйылдылар ҙа байтаҡ ҡына һөйләшеп ултырҙылар. Бөтә һөйләшеүҙәре лә иҫтә ҡалмаған, әммә бер ағайҙың тәрән итеп көрһөнөп:

— Балаларҙың урыҫса уҡыуы ошо моңдан яҙҙырыр инде беҙҙе. Урыҫлашып бөтөрбөҙ инде, – тип әйтеүе хәтерҙә.

— Ниндәй телдә уҡыһа ла, өйҙә урыҫлаштырма. Минең балалар рәхәтләнеп башҡортса һөйләшә, улым мандолинала уйнай, ҡыҙҙар ҡушылып йырлай. Мәрхәбә ул яҡтан ныҡ тота балаларҙы, – тине атайым.

— Әллә уны уйлаған да юҡ. Минең бисә ни үҙе лә ҡайһы саҡта балаларға ҡушылып урыҫса һупалап ебәргән була, – тине теге олатай. Ҡотлозаман ине уның исеме.

— Тегеләй ҙә һупалап, былай ҙа һупалап ҡына һөйләшә башланыҡ шикелле инде хәҙер. Тел белмәгәс, йырын да отоп алып булмай инде уның. Минең балалар ҙа әлепте таяҡ тип тә белмәйҙәр башҡортса, — тип һүҙҙе элеп алды тағы бер олатай.

— Ҡуй, улайтып телдән яҙҙырма балаларыңды. Тел юғалһа, моң юғала...

— Бынау Иншарҙы әйтәм, мәрйә эйәртеп ҡайтып, тауышын әрәм итеп ҡуймаһа ярар ине.

— Мәрйә эйәртеп ҡайтһа, телен онотор тиһеңме?

— Үҙе онотмаһа, балалары һуң? Кеше үҙе мәңгелек түгел, уны нәҫеле дауам итә. Мәрйәнән башҡорт тыумаҫ бит әле ул...

— Һин тәрәндәнерәк уйлай икәнһең...

— Шулайтып ошо хәтле моңобоҙ бөтөрмө икән ни? – тип уфтанды бер олатай, шунан атайым:

— Минекеләр бөтөрмәҫ. Рәхәтләнеп башҡортса йырлап-бейеп үҫәләр, — тине атайым.

Әле уйлап ҡараһам, ҡыуыш эргәһендә ошондай әңгәмә алып барған атайым, олатайҙар ҡырҡ биш йәштәр самаһындағы ирҙәр булған. Шул саҡта тел юғалыуҙың эҙемтәләрен ябай ғына итеп

аңлап ултырғандар.

Ә Иншар Солтанбаев ағай, шөкөр, Әбйәлил районының бынамын тигән бейеүсеһе Мәрзиәгә өйләнде, музыкаль белемле балалар үҫтерҙеләр. Фирүзә Солтанбаева тигән йырсы ҡыҙҙың тауышын һоҡланып тыңлайбыҙ. Улы Радмир менән килендәре Миңнегөл музыка белгестәре, Илшат та музыкаль һөнәрле. Опера йырсыһы Руслан Хәбибуллин менән Фирүзә Солтанбаеваның ике ҡыҙы ла Башҡортостан телевидениеһында "Сәңгелдәк" тапшырыуында ҡатнашты, ә хәҙер Лиана Хәбибуллина танылған йырсы, "Баяс" тигән башҡорт халыҡ йыры менән киң танылыу тапты. Радмир менән Миңнегөлдөң ҡыҙы — өмөтлө скрипкасы, ә Урал – йырсы. Халҡыбыҙ моңон киләһе быуынға еткереүселәр улар.

Мәрзиә менән Иншар Солтанбаевтар үҙ балаларына ғына түгел, хатта ейәнсәрҙәренә халҡыбыҙ моңона, теленә ҡарата һөйөү тәрбиәләй алғандар. Балаларҙа рухи дауамың булыуы әллә ниндәй юғары исемдәрҙән, миҙал-ордендарҙан да юғарыраҡ баһа ул.

Ысын моң, башҡорттоң иҫ китмәле йыры менән тәүге осрашыуым булды. Ошо моң, ошо һөйләшеү миңә ғүмеремде арнарлыҡ йәшәү йүнәлеше бирҙе. Мин бөгөнгө көндә ни генә эшләһәм дә, күңелемә рух, ғәм, ырыҫ, моң, ҡот төшөнсәләре һалған ошо йырға, ошо һөйләшеүҙәргә лә бурыслымын.

Аҙаҡ оҙон көйҙәрҙе шул тиклем ярата башланым, радио янынан китмәй өйрәнә торғайным. Һигеҙенсе класта уҡыған саҡта, концерттарҙа тәүге өйрәнгән йырым "Азамат"ты йырлағайным, сәхнәгә тағы саҡырҙылар. "Азамат"ты тағы йырлап булмай бит инде, тип уйланым да атайымдың яратҡан йыры "Ҡара урман"ды йырланым. Шунан сәхнәгә өлкән генә бер апай сығып:

— Ошо ғына бала ла оҙон көйҙәр йырлап торғас, йырҙарыбыҙ йәшәй икән әле, — тип, күҙҙәренән йәшен һөртөп алды. Беҙҙең яҡтың данлыҡлы йырсыһы, оҙон көйҙәр башҡарыу оҫтаһы Роза Аҡбашева булған икән. Һәр ваҡыт минең эргәмдә, һәр ваҡыт минең өсөн янып-көйөп йөрөгән Нәсимә һылыуым сәхнә артында тора ине, мин сыҡҡас: "Ул апай ни эшләп илай ул?" — тип аптырап һораны. Мин үҙем дә уның ни эшләп илағанын аңламай инем. Күп йылдар үткәс, Иҫәнғолда гимназия асып, уҡыусыларым менән Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районы ауылдарында "Сәғиҙә бәйете" тигән спектакль менән концерт ҡуйып йөрөгән саҡтарҙа, өлкән ағай-апайҙарҙың илап тыңлап ултырыуҙарын аңлай инем инде. Өлкән артистарҙың сығышы ғәҙәттәге хәл тип ҡабул ителә, ә балаларҙың йырлауы, уйнауы йөрәктәрҙә һағышлы өмөт булып һарыла, киләсәгебеҙ бар, юғалмайбыҙ, тигән ышаныс уята.

“Моңобоҙҙоң, үҙебеҙҙең дауамыбыҙ бар икән әле!” тигән эске ҡыуаныс-йыуаныс күҙҙәрҙе йәшкә мансый. Ырымбур өлкәһендә етеш тормошта йәшәгән, әммә рухи байлыҡҡа ҡытлыҡ кисергән милләттәштәребеҙ уҡыусыларымдың концерттарын ауылдан ауылға эйәреп йөрөп, илай-илай ҡараны, һандыҡ төбөндә һаҡланған тәңкәләрен, ҡумыҙҙарын сығарып бүләк итте. Себер яҡтарында эшләп ҡайтып, тыуған ауылы Украинканы ҙур совхоздан бүлдереп алып, “Азат” тип атап, крәҫтиән хужалығы ойоштороп ебәргән Мәргән Мөлкәмәнов тигән башҡорт ире, уҡыусыларымдың арҡаһынан тупылдатып һөйөп, күҙ йәштәрен һөртә-һөртә:

— Балалар, һеҙ үҙегеҙҙең ни тиклем оло эш башҡарып йөрөүегеҙҙе аңлап етмәйһегеҙ әле. Апайығыҙ аңлап эшләй быны. Моң юғалмаһа, халыҡ йәшәр, балалар. Быны һеҙ ҙурайғас аңларһығыҙ. Әлегә һеҙгә ихлас рәхмәт, — тип, ашау яғын хәстәрләп, транспорт менән тәьмин итеп йөрөнө. Кистәрен ауыл халҡы беҙҙе ҡунаҡтан ҡунаҡҡа йөрөттө, балаларығыҙ урамдарҙан милли кейемдәрен сисмәй йөрөһөндәр әле, күңелгә ял бит, тип үтенделәр.

Мин рухи яҡтан китек күңелле милләттәштәремдең яҙмышының ни тиклем аяныс икәнлеген уҡыусыларыма аңлатып, ни өсөн Ейәнсура районында, Ырымбур өлкәһе менән сиктәш районда башҡорт гимназияһы асыуымды төшөндөрә инем. Гимназияла Ырымбур өлкәһенән ике бала уҡыны.

Роза Аҡбашева апайҙың “йырҙарыбыҙ йәшәй икән,” тип, ҡыуанып тороуы ла минең, бәләкәй генә бер ҡыҙ баланың, нисек йырлауыма түгел, ә оҙон көй башҡарыуыма ҡарата әйтелгән маҡтауы һәм шатлығы булған. Ул саҡтарҙа мәктәптәр берәм-берәм русса уҡытыуға күсә башлаған ине.

Илдә барған сәйәсәт киләсәген уйлай белгән ғәмлеләрҙе хәүефкә һалған.

Ябай ғына итеп тотош милләт яҙмышы хаҡында аңғәмә ҡороп ултырған был ағайҙар.

“ Моңһоҙ күңел – ҡыу томшоҡ”. Әсәйемдең яратҡан әйтеме ине был. “Балаларығыҙҙы моңһоҙ ҡалдырып ҡыу томшоҡҡа әйләндерәһегеҙ инде. Иҫәпкә бар, һанға юҡ булып ҡалырҙар әле,” — ти торғайны үҙ балаһы менән рус телендә һөйләшкәндәргә. Бөгөнгө көн юғарылығынан ҡараш ташлап, Иҫәнғолда балаларын рус телле итеп тәрбиәләгән кешеләрҙе урам буйлап, йорт буйлап барлап китәм дә “уф” тип көрһөнөп ҡуям.

Күршебеҙ Н. Н. ғаиләһе. Балалары уҡыуға бик һәләтле булды. Үҙе лә вазифалы урында ине. Ибрай ауылынан күсеп килгәндә, өлкән ҡыҙы башҡорт мөхитендә тәрбиә алып, башҡортса шартлатып һөйләшеп килгәйне һәм, башҡорт егетенә кейәүгә сығып, матур-матур балалар үҫтерҙе. Ә ҡалған дүрт балаһы рус кластарында уҡыны, рус телле булдылар. Уларҙың ике улы ниндәйҙер милләт вәкилдәре булған ҡатындары артынан ҡайҙалыр сығып китеп, ары һуғылып, бире һуғылып йөрөнөләр, әсәйҙәрен дә, атайҙарын да ерләргә ҡайта алмағандар хатта. Бер ҡыҙҙары тормошта үҙ юлын таба алмай, ары һуғылып, бире һуғылып йәшәгән дә фажиғәле вафат булған, кесе ҡыҙҙары украин егетенә сығып, матур ғаилә ҡорҙо, әммә отпускыға ҡайтҡан саҡта ғына туған телендә һөйләшеп "кинәнә" — үҙе әйтмешләй.

Уларҙың күңеленә туған моң һалынманы. Өйҙәрендә һәр саҡ ниндәйҙер ят көйҙәр яңғырап торҙо.

Әсәйемдең апаһы тураһында яҙылғайны. Тағы бер тапҡыр иҫкә төшөрөп үтәм. Иҫәнғолға күсеп килгәнгә тиклем ауылда үҫкән ике балаһынан башҡалары рус телле булып үҫтеләр. Бынамын тигән өс улы шәжәрәләрен дауам итерлек нәҫел ҡалдыра алмай юҡҡа сыҡты, кесе ҡыҙҙары икенсе тапҡыр башҡорт егетенә кейәүгә сығып йәшәй, әммә берҙән-бер ҡыҙҙарын тағы рус телле итеп үҫтерә. Стәрлетамаҡ ҡалаһында йәшәй. Ни өсөн үҙенең фажиғәһен ҡабатлаталыр – билдәһеҙ. Икенсе күршебеҙ – С. С.-лар ғаиләһе. Ҡыҙҙары рус егетенә кейәүгә сығып айырылып ҡайтты, улы, әсәһе әйтмешләй, ни аллаға, ни муллаға, күрше рус ауылында мәрйә менән йәшәй. Күрше К. ғаиләһе. Иң оло улы ғына матур ғаилә ҡороп балалар үҫтерҙе, ҡалғандары башҡа милләт вәкилдәре менән ғаилә ҡороп, тырым-тырағай ҡайҙалыр таралышып бөттөләр.

Һанай китһәң, иҫ-аҡылдарың китер. Кәмендә биш балалы ғаиләләрҙән атай-олатайҙары шәжәрәһен дауам итерлек бер генә бала ла ҡалмаған ғаиләләр бик күп.

Белемһеҙлектәнме? Улай булһа,Өфөлә туған телдең әһәмиәте тураһында трибунанан шул тиклем аҡыллы хәбәр һөйләгән иң юғары белемле әһелдәребеҙҙең — фән докторҙарының да үҙ шәжәрәләрен дауам итерлек балалары булмауын нисек аңлатырға?

Тимәк, белем кешегә аң өҫтәмәй. Белем кешегә аҡыл да өҫтәмәй. Бәләкәйҙән күңеленә туған моң һалынмаһа, өйҙә үҙ телендең моңо яңғырап, ҡолаҡ төбөндә үҙ моңоң сыңлап тормаһа, бала күңеле далала булыуы һис кенә лә ғәжәп түгел.

Күңелдәре далала булған балаларыбыҙҙың күбәйеп китеүе

арҡаһында башҡорт халҡының һаны артмай ҙа инде.

Ошо урында балаларын бына тигән итеп башҡорт рухында, башҡорт йыры солғанышында тәрбиәләгән сәнғәт оҫталарынан Рәмил Ғәйзуллинға, Иншар Солтанбаевҡа, Нажиә Аллаярова менән Абрар Ғабдрахмановҡа һәм уларҙың ҡыҙҙары Миләүшә Иҙрисоваға, Гүзәл Хәмитоваға халыҡ моңон түкмәй-сәсмәй күңеленә һеңдереп балаларына мираҫ итеп ҡалдырған башҡа ҡала кешеләренә лә рәхмәтле булыр халҡыбыҙ. Ә атай-олатайҙарҙан, тимәк, халҡыбыҙҙан ҡалған бынамын тигән һәләткә үҙҙәре менән һуңғы нөктә ҡуйыусы йәки киләсәктәрен икенсе милләткә бүләк итеүсе заттар үҙ хилафлыҡтарын үҙҙәре аңлайҙыр... Балаларға туған телдең моңон, тәмен, туған телдә һөйләшеүҙең юғары абруй икәнлеген аңлатыуҙа тиңһеҙ эш башҡарған "Тамыр" студияһын ойоштороу инициаторы Луиза Азаматтың, уны дауам итеп, камиллаштырып, байытып, йөкмәткеһен тәрәнәйтеп, айырым канал астырыуға өлгәшкән Гөлназ Ҡолһаринаның хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ, әлбиттә.

Беҙҙе, дүрт балаһын, туған моңдан айырмаған атай-әсәйемә сикһеҙ рәхмәтлемен. Юҡ аҡсаларын бар итеп мандолина ла, гармун да алдылар. Патефоныбыҙ ҙа булды, пластинкаларыбыҙ ҙа бик күп ине. Әсәйем пластинка алыуға бер ваҡытта ла аҡса йәлләмәне. Кистәрен өйҙә йырлашып ултырһаҡ та тыйманылар. Әсәйем үҙе лә ниндәй көй һораһам да өйрәтер ине, ниндәй таҡмаҡ һораһам да таҡмаҡлар ине. Радионан бейеү көйө тапшырһалар, үҙе лә бейеп китер ине лә, беҙҙе лә төшөрөр ине. "Анау тиклем матур көйҙө әрәм итмәйек әле, әйҙәгеҙ бейейек," — тиер ҙә тыпырлата башлар ине. Әсәйем бик оҫта тыпырлата торғайны. Мин берәй таҡмаҡтың көйөн әйтә лә, унан тыпырлаттыра инем. Көйҙөң үҙен генә килештереп тыпырлата ине. Ибрайҙа тыпырлатыу ныҡ таралғайны. Башҡорттарҙың ошо ғәжәп оҫталығы онотолоп бара.

Абзыйым бәләкәйҙән мандолинала уйнаны. Әллә ҡайҙан матур-матур бейеү көйҙәре отоп ала ине ул. Әлегә саҡлы "Күпер аҫты күләгә", "Ейәнсура таҡмаҡтары" тигән бейеү көйҙәре хас абзыйым уйнағандағы мандолина моңо булып күңелемдә йөрөй. Был көйҙө мин Иҫәнғол гимназияһында мотлаҡ итеп индергән ҡурай, ҡумыҙ һәм мандолинала уйнарға өйрәнеү түңәрәктәрендә лә, үҙ балаларыма ла, "Йәйләү" тип атап ойоштороп балалар ял итеү үҙәгендә ял итеүсе уҡыусыларға ла өйрәттем. Береһе булмаһа, икенсеһе күңелендә һаҡлар, тип өмөтләнәм. Иншар Солтанбаевтың ике туған һеңлеһе, иҫ китмәле моңло тауышлы Линиза Шаһисәлим

ҡыҙы Солтанбаеваның абзыйыма кейәүгә сығыуы, беҙҙең яратҡан еңгәйебеҙ булып китеүе лә абзыйымдың моңло итеп гармунда уйнауына бәйле. Аҙаҡ инде уларҙың улдары, минең ҡустым Ғәзинур Биктимеровтың "Рух" ансамбле төҙөп, патриотик йырҙар яҙып башҡарып йөрөүе лә ошо моңдоң дауамылыр, тип уйлайым. (*Бик һәләтле ойоштороусы, оҫта бейеүсе, үҙенсәлекле башҡарыусы — йәштәр уға бик тиҙ арала "башҡорт Цойы" тип исем биргәйнеләр — бик иртә фажиғәле һәләк булды*). Күпме кешенең күңеленә рух осҡоно һибеп өлгөрҙө Ғәзинурҙың ансамбле һәм йырҙары. "Рух" ансамбле әле лә йәшәүен дауам итә.

* * *

Халыҡ бала күңеленә моң һалыуға айырым иғтибар бүлгән. Бала тел аңламаған саҡта уҡ, һәр үҫеш баҫҡыстарын иҫәпкә алып һүҙҙәргә ҙур мәғәнә һалып һамаҡлауҙар ижад ителгән. Сабый күңеленә ғүмергә һеңеп ҡалырлыҡ моң менән бергә изге тойғолар һалыр һүҙҙәр теҙмәһе был һамаҡлауҙарҙа.

Әлли-бәлли бәү-бәү,
Йоҡла, балам, йом күҙең,
Йом-йом күҙең, йондоҙом,
Кистән һәйбәт йоҡлаһаң,
Уйнап үтер көндөҙөң.
Әлли-бәлли бәү-бәү,
Әлли-бәлли бәү-бәү.
Үҫеп көслө булыр был,
Мораҙына етер был.
Ялҡау булмаҫ, тик ятмаҫ,
Тырыш бала булыр был.

Бала үҫеп еткәс, тегеләй эшлә, былай эшлә, тигән өгөт-нәсихәттәргә ҡарағанда, бишек йырында әйтелгән ошо һүҙҙәр күпкә йоғошлораҡ. Сөнки ул һүҙҙәр туған моң менән ҡуша күңелдәргә һеңә.

Йүргәккә ураған әйтелгән һамаҡлауҙарға иғтибар итәйек.

Йоҡла, балам, ойоп ҡына,
Күҙеңде йомоп ҡына,
Йомшаҡ ҡына йүргәгеңде
Ҡуйындай тойоп ҡына.

Баланы һикерткән саҡтағы һамаҡлауҙар:

Һәтес, һәтес, һәтес тә
Бигерәк матур бәпес тә.
Кем ҡарамай, кем һоҡланмай,
Бындай матур бәпескә.
Ҡара, ҡара, атаһы,
Ҡара, ҡалай талпына.
Талпынып та, йылмайып та,
Һөймәҫ ерҙән һөйҙөрә.

Бала талпынырға, һикерергә, уяу булырға, күңел үҫтерергә, ихтыярын нығытырға тейеш.

Ҡыҙ баланы һикерткәндә, наҙлы һүҙҙәрҙе күберәк әйтеүгә иғтибар иткәндәр. Баланың күңелен үҫтереү ошолай булған:

Һәтес, һәтес, һәтес тә,
Бигерәк матур бәпес тә.
Ҡашы ҡара, буйы зифа
Ҡойоп ҡуйған кәртешкә.

Ә ир балаға теләктерҙең ниндәйен әйтеп һикерткән башҡорт әсәйҙәре!

Айт ит, тайт ит,
Үҫеп уҫка тулып кит!
Атайыңды, әсәйеңде
Данға күмеп үҫеп ет!

Баланы "Сәңгелдәк йыры"нан, көйлө әкиәттәрҙән өҙмәгәндәр. Әсәйемдең көйләп-көйләп һөйләгән ҡар һүҙҙәре һаман да иҫемдә. Бала саҡта ишеткән моң-йырҙар береһе лә онотолмай. Яҡшы һүҙ – күңел күрке, тигәндән сығып, әсәйҙәр сабыйҙарына яҡшы һүҙ әйтеп, күңелен күркәм итергә, рухын күтәрергә, әсә һөтө менән бар яҡшы теләктәрен һалып ҡалдырырға тырышҡан. Баланың күңеленә көрлөк тойғоһон тәүҙән һалыуҙы зарур һанаған аҡыллы кешеләр. Был тойғо бала һөйләшә белмәгән, телмәр аңламаған саҡта уҡ һалынһа ла, ҡолағыбыҙҙа әсә йыры ошо һүҙҙәр менән сыңлаған кеүек, сөнки ул күңелгә ғүмергә һеңеп ҡала. "Һөт менән кергән йән менән сыҡҡан", — тиҙәр шуның өсөн дә.

Бер ниндәй фәнни-техник үҫеш тә, алға киткән йәмғиәт тә сабый

күңеленә әсә моңо һалған тойғоно һала алмай. Моңдан, наҙҙан айырылған баланың киләсәге күркәм түгел. Был хәкиҡәткә күҙ йомоп ҡараған йәмғиәттең дә нигеҙе нык булмай. Иртәме-һуңмы деградация башланасаҡ. Күңел донъяһы наҙ менән тулған, матурлыҡты аңлай, тоя белгән, һоҡлана алған кеше рухи яҡтан сәләмәт була, һәм ундай кешеләр берләшмәһе сәләмәт йәмғиәт барлыҡҡа килтерә.

Рухи сәләмәтлек, нигеҙҙә, үҙ халҡыңдың рухи байлығына эйә булған саҡта ғына тәрбиәләнә, ә халҡыңдың рухи байлығына уның телен белгәндә генә өлгәшеп була.

Сөнки халҡыбыҙҙың тәрбиәүи ҡанундары, нигеҙҙә, әйтеп үтеүебеҙсә, халыҡтың ауыҙ-тел ижадында һалынған, шуның аша килеп еткән. Ә ауыҙ-тел ижады, белеүебеҙсә, телдең яңғыраш үҙенсәлегенә бәйләнгән. Уны теүәл генә итеп һис кенә лә тәржемә итеп булмай. Шулай булғас, балам башҡорт ижадын русса тәржемәнән уҡып та белер әле — кәрәге булһа, тигән фекер менән һис кенә лә килешеп булмай.

Күңеленә моң һалынған әһелдәребеҙ башҡорт рухлы балалар тәрбиәләүгә өлгәште. Өфө ҡалаһының ҡала башҡорт мәктәбен тамамлаусы байтаҡ йәштәребеҙ халҡыбыҙ мәнфәғәтенә эшләй. Ул ғына ла түгел, үҙ балаларын ошо мәктәпкә алып килә. Беренсе сентябрҙә үткәрелгән тантанала ҡарап тороуы күңелле: ысынлап та Башҡортостандың башҡалаһында йәшәгәнлегеңә инанаһың.

* * *

Ибрай ауылында йәшәгән Әсҡәпъямал инәйем менән бәләкәй саҡта ғына аралашып ҡалдым. Аҙаҡ Ибрайға йыш бара алманым. Бик үкенесле. Ғәжәп зирәк һәм нескә күңелле кеше ине инәйем.

Нисә йәштә булғанмындыр — әйтә алмайым, уҡымай инем әле, инәйем мине үҙе менән емеш йыйырға алып китте. Йылға буйында усаҡ яғып, сәй ҡайнатып, алдыҡ та, тау битенә табын йәйҙек.

— Еләҫ ерҙә себен-фәлән булмай, — тине инәйем. Сәй эсеп ултырабыҙ, эргәлә генә ҡоштар һайрай. — Тыңла әле һүрәм ҡоштарын! — ти, бер аҙҙан һуң. — Иҫәнғол тирәһендә ҡоштар матур һайрамай ул. Тыңлағаным бар. Һандуғастың да тауышы өҙөк-өҙөк кенә. Һүрәм һандуғастары һымаҡ һуҙып-һуҙып моңландырып һайрай алмай, сыйырсыҡтары ла турғай һымаҡ

ҡына һыҙғыра, — тине.

— Ни эшләп, инәй?

— Иҫәнғолда төнгө йыр юҡ. Халҡы ҡатнаш. Кистәрен матур итеп йырлап йөрөгән йәштәр юҡ. Ҡатнаш ауылда шулай инде. Беҙҙең Ибрайҙа ни төндәр буйы ҡалай матур итеп йырлап сыға ауыл йәштәре. Ҡоштар кеше моңон отоп алып ҡабатлай бит ул. Мин әйткәндәрҙе зиһененә һалып ҡуй ҙа, ҙурайыңҡырағас үҙең иғтибар итерһең. Йәшел төҫтәр ҙә, сәскәләр ҙә беҙҙең яҡта баҙығыраҡ. Әллә үҫемлектәрҙең төҫтәре ҡояш нуры менән моңдан бар буламы икән тием. Моң бар ерҙә төҫтәр баҙыҡ. Моң кеше күңелен дә ана шулай баҙыҡландырып ебәрә ул. Сафландыра, таҙарта. Шуға, уңайы килгән һайын, ҡош тауыштарына ҡолаҡ һалырға тырыш, балам.

Инәйемдең әйткәне һәр саҡ иҫемдә. Ул, ысынлап та, дөрөҫ әйткән. Йырлы-моңло ауыл янында ҡош тауыштары ла, тәбиғәттә төҫтәр ҙә күркәмерәк.

Тәбиғәт менән Кеше араһында иҫ китмәле тығыҙ бәйләнеш йәшәгәнлеген аңланым. Кеше – Моң , Тәбиғәт – Нур кеүек. Улар бер-береһен тулыландыра, наҙландыра, йәшәтә. Әммә Кеше Тәбиғәт ҡанундарын боҙа, шул саҡта Нур менән Моң араһында нисбәт боҙола. Тәбиғәт ҡанундары боҙолған мәлдә, ерҙә Моң кәмей.

Йәштәребеҙҙең туған телдән, туған моңдан, тәбиғәт матурлығын тойоуҙан алыҫлашыуы музыка сәнғәтенең ярлыланыуына килтерҙе. Күңелдәрҙе берләштерер, ялҡынлы йөрәктәрҙе бергә туплар йырҙарға мохтаж халыҡ. Йырҙың берләштереү көсөн элек-электән белгәндәр һәм файҙаланғандар. Йыр менән яуға сапҡандар, йыр менән Еңеү яулағандар, йыр менән бөйөклөктө данлағандар...

Ниндәй ҙур көскә эйә булған туған моңдан мәхрүм итеп маташҡандар...

Зәйнәб Биишева бер саҡ шулай тип һөйләгәйне:

— Граждандар һуғышы барғанда, мин бәләкәй инем әле. 1919 йылда Муса Мортазинды күрҙем. Ул, башҡорт яугирҙарынан бригада ойоштороп йөрөгән сағында, егеттәре менән Шәйехзада Бабич һүҙҙәренә "Башҡортостан-гөлбостан" тигән йырҙы йырлап урам буйлап һыбай үткәйне, теге өйҙән дә, был өйҙән дә һыбайлылар сығып уларға ҡушыла башланы. Беҙҙең ауылды ике тапҡыр урап сыҡты. Күрше ауылдарҙа ла шулай иткән, ти. Башҡорт егеттәре хатта бер-береһенән ишетеп, уларҙың арттарынан ҡыуып китә торғайнылар, тиҙәр. Ауыл ҡарттары

ғорурлыҡ менән: "Муса Мортазин бит ул!" тип һөйләшеп ҡалдылар. Ә мин балалығым менән: "Муса Мортазин Салауат Юлаев микән?" тип уйлаған булдым. Йырҙың, һүҙҙең ниндәй ҡөҙрәткә эйә булыуын шунда күрҙем...

Радио һәм телевидение тапшырыуҙарында интервью биргән кешеләрҙең, хатта иң һәйбәт тел белгестәре лә, әҙәбиәт әһелдәре лә русса һүҙ ҡатнаштырмай һөйләй алмай. Үҙҙәрен аҡлау өсөн, "руссалап әйткәндә" тигән булып ҡуялар. Ни өсөн ул – башҡорт, башҡорттарға үҙ фекерен руссалап әйтергә тейештер? Ауылдарҙа ла таҙа ғына итеп башҡортса һөйләшеүселәр кәмегәндән-кәмей. 1970-1980 йылдарҙа Силәбе, Курган өлкәләрендә командировкала ваҡытта өлкән-өлкән апайҙарҙың русса ҡатнаштырып һөйләгәндәрен тыңлап йәлләгәйнем. Бәй, күп булһа егерме-утыҙ йыл үтеүгә Башҡортостандың башҡорт ауылдарында ла тел ярлылығы башланды. Бөрйән районына, туҡһан проценттан ашыу халҡы башҡорт булған районға, таҙа башҡорт телмәре ишетермен, тип өмөтләнеп барғайным, урамда йөрөгән бәләкәй генә балаларға тиклем ярым ғына телдә һөйләшә башлағандар. Һүҙ шишмәһе сығанаҡтарын таҙартып, яңынан мул һыулыға әйләндермәһәк, үҙебеҙҙе үҙебеҙ итеп һаҡлай алмаясаҡбыҙ.

Алтмышынсы йылдарҙа беҙ дуҫтар менән бергә йыйылышһаҡ, таҙа башҡортса һөйләшеү, башҡортса телмәр тотоу буйынса ярыша торғайныҡ. Ошондай ярышты мин өйҙә балаларым араһында ла ойоштора инем.

Башҡорт теленә дәүләт статусы бирелгәс, мәктәптәрҙә башҡорт теле инә башланы. Мин мәктәптәрҙә йыш булам. Бер рус ире үҙ балаһына башҡорт теле өйрәтеүҙән баш тартты һәм былай тип аңлатты:

— Сперва сами говорите на своем языке. Собрания ведутся на русском, на свадьбах говорят на русском. Дети между собой разговаривают на русском. Какая же перспектива башкирского языка? Я не вижу необходимости учить своего ребенка совершенно ненужному даже самим башкирам языку, — тине. Башҡа милләт вәкилдәре күҙе менән ҡарағанда бына нисек күренәбеҙ икән.

Сәнғәт юлынан киткән, үҙен ошо изге эшкә бағышлаған йәштәргә, һәләтле балалары булған атай-әсәйҙәргә шуны әйтке килә: тамырыбыҙҙа ойоп ятҡан һәләтебеҙҙе уятып ебәреү өсөн беренсе шарт — туған моңдан, туған телдән айырылмау булһа, икенсе шарт — күңелебеҙҙе, зиһенебеҙҙе Көнбайыш сәнғәте ҡаҙаныштары менән генә түгел, Көнсығыш сәнғәте өлгөләре менән дә байытырға кәрәк. Тамырҙарыбыҙ көнсығышҡа барып тоташа беҙҙең. Уртаҡ-

лыҡтарыбыҙ ҙур. Цивилизацияны фәҡәт Көнбайышта ғына күреп, Көнсығышты тотош тигәндәй иҫәпкә алмағанлыҡтан, илһам бирер тамырҙарыбыҙҙан да айырылдыҡ, тиһәк тә яңылыш булмаҫ. Тимәк, донъя шаулатырлыҡ, донъя сәхнәләренә сығырлыҡ әҫәрҙәр ижад итерлек мөмкинлектәребеҙгә юл ярылмаған әле. Башҡортостан кимәлендәге йырсы булып йәки сит илдәрҙә Башҡортостан йырсыһы булып ҡына ҡалырға түгел, ә башҡорт йырын, башҡорт эстрадаһын, башҡорт сәнғәтен донъя кимәленә сығарыуға өлгәшергә кәрәк. Заманында Париж сәхнәһендә күренекле йырсы Ирма Яунзем Йомабай Иҫәнбаев ҡурайына ҡушылып "Абдрахман" йырын башҡарған бит! Шуның кеүек башҡорт сәнғәте менән әсир итерлек, башҡорт йырҙарын башҡалар башҡарырлыҡ, сәхнә әҫәрҙәрен төрлө телдәргә тәржемә итерлек кимәлгә өлгәшкән осраҡта ғына сәнғәтебеҙ үҫеше менән ысын кимәлдә ғорурлана алырбыҙ. Юғиһә, әле беҙ башҡорт йыр оҫталарының сит ил әҫәрҙәрен донъя сәхнәләрендә башҡарыуынан ғына йыуаныс алабыҙ. Әлбиттә, башҡарыу оҫталығы ла ҙур уңыш, әммә ҡаҙаныш түгел. Башҡорт бейеү ансамбле генә үҙ ижады менән сыҡты донъя кимәленә. Әммә ҡурайҙы ла, халыҡ бейеүҙәрен дә экзотика рәүешендә ҡабул итәләр. Сәнғәттең үҫеш юғарылығы башҡорт әҫәрҙәрен башҡа милләт кешеләренең башҡарыуында булыр. Заманында Мостай Кәрим, Илшат Иомағолов, Азат Абдуллиндарҙың сәхнә әҫәрҙәре донъя сәхнәләрендә ҡуйылды. Бына ошондай ҡаҙанышҡа өлгәшергә кәрәк беҙгә. Сәнғәт юғалмаһа, халыҡ юғалмай. Сәнғәт күтәрелһә, халыҡ күтәрелә.

* * *

— Берәй нимә яҙаһыңмы? Ни эшләп юғалдың? Беҙ бит һине яратып уҡый торғайныҡ. "Тормош һабаҡтары" һине тулыһынса тышауланы, ахыры. Файҙаһы булырмы һуң ул "Тормош һабаҡтары"ның? Әҙәби әҫәр яҙһаң, исмаһам, тәржемәһе булһа ла ҡалыр ине... Халҡың барыбер бөтә бит. Ассимиляция иҫ китмәле ҡолас алған. Ситкә китеүселәр һаны быға̀са булмаған кимәлдә. Туған телен һанға һуҡмаусылар һаны һаман арта. Әкрәм Бейештең китабын уҡыған̀һыңдыр бит – башҡорттарҙың үҙ дәүләтселеге булмаһа, улар артабан милләт булып һаҡланып ҡала алмаясаҡ, тигән. Ә беҙ ҙур унитар дәүләттең аграр һәм промышленность сеймал базаһына әйләнгәнбеҙ. Хәҙер башҡорттоң зиһене лә, аҡылы ла, моңо ла беҙҙе йотҡан халыҡты үҫтереүгә хеҙмәт итәсәк, — тигән фекер әйтте бер ғалим.

Икенсеһе уның фекеренә ҡаршы сығып былай тип өҫтәне:

— Ә, ғөмүмән, башҡорт халҡына дәүләтселек йәки башҡорт теленә дәүләт статусы кәрәкме һуң? Бына мин ғүмерем буйы рустар менән аралаштым, рус мәктәбендә уҡыным, атай-әсәйем, туғандарым менән аралашырлыҡ башҡортса беләм, ә башҡаса туған телдә һөйләшә белеүҙең ихтыяжын да тоймайым. Фатирым, дачам, машинам бар. Балаларым рус мәктәбендә уҡый. Өйҙә бына тигән итеп рус теленда һөйләшәбеҙ, хатта инглиз телен ныҡлап өйрәнәбеҙ. Тел, милләт тип йөрөү шул башҡорт бүлеген тамамлаған башҡорттарға ла, артистарға ғына кәрәктер. Башҡорт булмаһа, уларға эш бөтә бит. Йөрөгән булалар шунда тел белмәгәндәрҙе битәрләгән булып, оялтып. Кем нисек йәшәй бит. Кемдер ҡурай уйнап тамаҡ туйҙыра, кемдер ғилем донъяһында асыштар яһай. Миңә бына, техник фәндәр кандидатына, башҡорт теленә ҡарағанда инглиз теле нығыраҡ кәрәк.

Өсөнсө ир быларҙың икеһенән дә арттырып ебәрҙе:

— Киләсәктә барыбер бөтәһе лә бер телдә һөйләшәсәк. Балаларҙы инглиз теленә өйрәтергә кәрәк. Сит илдәргә сыҡһаң, хатта рус теле менән дә бер ни эшләп булмай. Инглиз, испан, француз, немец телдәре кәрәк.

Тағы береһе ҡулын ғына һелтәп ҡуйҙы ла әсенеп былай тине:

— Бөткәнбеҙ инде. Башҡорт дауалап булмаҫлыҡ ауырыуға дусар булған. Мишәрҙәр хәленә ҡалып барабыҙ. Оҙаҡламай дәүләтселек тә, телебеҙгә статус та кәрәкмәйәсәк. Үҙебеҙҙе үҙебеҙ юҡҡа сығарасаҡбыҙ. Ауылдарға командировкаға барғы килмәй хәҙер. Район үҙәктәрендә автобус вокзалынан ҡунаҡханаға алып барғандары өсөн дә яртылыҡ һорайҙар. Кем аунаҡлап эсеп йөрөй? Башҡорт. Кем үҙ-үҙенә ҡул һалған? Башҡорт. Кем сарылдатып бисәһен туҡмай? Башҡорт. Ғүмере булмаған нәмә бит ул башҡортта бисә туҡмау, бала йәберләү. Никольский башҡорттарҙың ғаиләһе хаҡында ниндәй йылы итеп яҙған. Хәҙер ғаилә тигәне лә юҡ кимәлендә. Ауыл һайын утыҙ-ҡырҡлаған егет өйләнергә эшкинмәй йөрөй. Егетлекте эсеүҙә күреп, кәләш урынына араҡы шешәһе ҡосаҡлап ята. Белем алыу тураһында уйлап та бирмәйҙәр. Уларға статус ни ҙә, ней ни. Үҙенең тарихи илендә, Башҡортостанда, белем алыу буйынса йәһүд, урыҫ, украин, татарҙан ҡала бишенсе урында бит башҡорт. Мәсхәрә. Автономия тип, язалауҙарға дусар булған Бабич, Мортазин, илен ташлап китергә мәжбүр булған Вәлиди, утыҙ етенсе йыл нахаҡҡа атылған алтын ирҙәребеҙ был хәлдәрҙе белһә, ни эшләр ине икән? Ғәрлектәренән, күңел рәнйеүҙәренән кире ҡәбергә төшөп ятырҙар ине, биллаһи.

Ошондай фекерҙәр, әсенеп-әсенеп һөйләшеүҙәр һәм лекция

уҡыған саҡтарҙа бирелгән төрлө һорауҙар мине һәр саҡ уйға һала. Икеләнеүле уйҙарға түгел, ә "Уларға туған телдең, туған моңдоң әһәмиәтен нисек аңлатырға? Халҡыбыҙҙың йәшәйеше өсөн булмаһа, һис юғы һәр кешенең үҙе өсөн, бала тәрбиәләүҙә еңеллек һәм ауырыу дауалауҙа ыңғай тәьҫир өсөн кәрәклеген ҡайһылайыраҡ һеңдерергә?" тигән һорау борсой. Кем генә нимә генә тимәһен, мин башҡорт халҡының киләсәге булыуға икеләнмәйем (*әлбиттә, тейешле шарттар үтәлгән сүрәттә*). Милли ғорурлыҡ тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуйған "Тормош һабаҡтары" яҙыуҙы дауам итәбеҙ. Уҡыусыларҙың, уҡытыусыларҙың , атай-әсәйҙәрҙең был предметты нисек ҡабул иткәнен беләбеҙ. Халҡыбыҙҙың киләсәген хәстәрләп, балаларҙы үҙ рухыбыҙҙа тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуйып башлаған был хеҙмәтебеҙҙе халыҡ ихлас ҡабул иткән икән, тимәк, уларҙың да киләсәккә өмөтө бар һәм халыҡты йәшәтеү теләге көслө. Мин үҙ йүнәлешемдең дөрөҫлөгөнә бер ваҡытта ла икеләнмәнем. Үҙ фекеремә ышанғанмын, инанғанмын. Бер ваҡытта ла бер төрлө һөйләп, икенсе төрлө эшләмәнем. "Үҙен башҡортмон тигән кешенең ейәне башҡортса һөйләшергә тейеш!", — тигән лозунг ташланым. Кешенең милләтен ейәненә ҡарап билдәләйем. Үҙемдең балаларым, ейәндәрем бөтөнөһө лә башҡортса һөйләшә. "Балаларым, ҡалала тыуһа ла телде, халыҡ ижадын, традицияһын, тарихын яҡшы белергә тейеш", – тип маҡсат ҡуйҙым һәм быға өлгәштем. Улар белеү генә түгел, донъя ҡаҙанышы талабынан сығып анализ яһай һәм сәнғәттебеҙҙе донъя талабына яуап бирерлек кимәлгә күтәреү юлдарын эҙләйҙәр. Туған телдең әһәмиәтен дә яҡшы аңлайҙар. Мин уларға туған телдең, туған моңдоң кешегә һыу-һауа кеүек кәрәклеген аңлата алдым. Кеше фәҡәт туған теле аша ғына донъяның наҙын тоя, моңдоң асылына төшөнә, матурлыҡтың илһамландырғыс көсөнә инана. Туған тел аша матурлыҡты күреү генә түгел — тойоу, белеү генә түгел — асылын аңлау серенә төшөнә. Туған моң – йыуаныс, йәнгә сихәт бирә. Әлбиттә, тәмен белмәгән аҙыҡты ашағы килмәй. Ғүмере буйы ресторан йәки ашхана ашы менән дә туҡ йөрөгәндәр бар. Әммә үҙеңә генә тәғәйенләп, һинең өсөн генә тип күңел нуры ҡушып бешерелгән аштың, сынаяғыңды алдыңа ҡуйып ҡына яһалған һөтлө сәйҙең, һин яратҡанса ғына ҡойолған ҡоймаҡтың йәки бешерелгән бәлештең тәмен татыған кеше бындай һыйҙы һағыныр, юҡһыныр. Туған тел һәм туған традициялар тап ана шул үҙеңә тәғәйенләп кенә әҙерләнгән татлы аш кеүек. Һәр ваҡыт ишетергә тура килгән һәм күптәрҙең зиһененә һеңеп ҡалған бер фекер тураһында яҙып үтәйем.

— Баламды инглиз йүнәлешле мәктәпкә бирҙем. Ике тел етер

уға. Башҡорт теле менән ҡайҙа ғына бараһың инде. Үҙем рус теле белмәгәнлектән, әҙәм була алманым. Өләсәһенә барһа, ярым ымлап, ярым ишаралап аңлаша торған әле. Артығы нимәгә?

— Балаға үҙ мөмкинлегенән артыҡ йөк йөкмәтеү, әлбиттә, ярамай. Тик бер нәмәне бутарға ярамай: туған тел кешегә бер ваҡытта ла артыҡ йөк һаналмай. Туған тел, туған моң – нервыларҙы ял иттереү сараһы. Эсең бошҡанда, күңелеңә ауыр булып киткән саҡтарҙа туған телдә йырлап ебәрәһеңдер бит? Кешенең нервылары һәр ваҡыт ял итеп торһа, сәләмәтлеккә ыңғай йоғонто яһала. Бөтөн ауырыуҙар ҙа нервылар арыуҙан башлана. Ә балаң ниндәй телдә йырлар? Күңелен ни менән асыр? Йөрәк яныуҙарын ниндәй саралар менән баҫыр? Әле тыңлаған көнбайыш тыңҡылдауҙары ҡырҡ йәштәрендә уның күңел йыуанысы була алмаҫ, киреһенсә, теңкәһенә тейә башлар. Шул сағында ниндәй моң уның күңел ялы була алыр?

Баланы телдән мәхрүм итеү – моңдан яҙҙырыу, күңелен ял иттереү сараһынан мәхрүм итеү бит ул. Күңел теле бит ул туған тел.

Туған моң кешенең сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһай. Ә туған тел – шул уҡ туған моң ул. Көйҙөң бөгөлөштәре ни тиклем күп, ни тиклем моңлораҡ яңғырай, шул тиклем йөрәккә ятышлыраҡ була. Шуның кеүек туған телде лә кеше ни тиклем һәйбәтерәк белә, телмәрендә туған тел һүҙҙәре ни тиклем күберәк һәм төрлөрәк, байыраҡ файҙаланыла – шул тиклем күңел ялы өсөн файҙаһы ла күберәк була.

"Дәүләтселегебеҙ булмайынса, халҡыбыҙҙың киләсәге тураһында хыялланырға ла ярамай," – тигән фекер әйтеүселәр, ысынлап та, милләтебеҙҙең киләсәгенә ышанмайҙарҙыр, сөнки күбеһенең балалары үҙ туған телен белмәй, хатта белгәндәре лә башҡа милләт өсөн балалар үҫтерәләр. Был "әһелдәр" үҙҙәренән һуң шәжәрәләрен дауам итерлек нәҫел ҡалдырмау ғына түгел, башҡаларҙа ла күңел төшөнкөлөгө тыуҙыралар. Ә үҙҙәре кемдеңдер, ҡасандыр, ҡайҙандыр улар өсөн дәүләтселек ҡороп биререн, телебеҙҙе ҡурсалап алып ҡалыу өсөн дәүләт теле статусы алып яуларын, Башҡортостандың ҡуйы урмандарында туҡтауһыҙ башҡорт һаны ишәйеп тороуын "ҡырын ятып" көтәләр, боронғо башҡорттарҙың батырлыҡтары, күп балалы булыуҙары тураһында фәлсәфә һаталар, ундай батырҙарҙың хәҙерге көндә булмауына үкенес белдерәләр, ул ғына ла түгел бар көсөн һалып ни ҙә булһа эшләргә тип йөрөгән ғәмле егеттәребеҙгә һәм ҡыҙҙарыбыҙға аҡыл өйрәтәләр, уларҙан ғәйеп эҙләйҙәр. Хатта ҡайһы берҙәре күп ҡатынлылыҡ тураһында

закон ҡабул ителеүенә лә ышаналар. Әйтерһең, фәҡәт күп ҡатындарҙан ғына саф башҡортса һөйләшкән, күҙҙәрендә дәрт осконо янып торған, белемле, сәйәси яҡтан әҙерлекле, йөрәктәрендә башҡорт моңо тулы башҡорт егеттәре тыуыр ҙа, бөтөн проблемалар ҙа хәл ителер. "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгендә көндө төнгә ялғап эшләгән осорҙа ундайҙарҙы күп күрелде. Ваҡытымды алып, оҙон-оҙаҡ фәлсәфә һатып ултырыусыларға:

— Рәхмәт, тик мин үҙ аҡылын үҙе тотҡан кешеләрҙең аҡылына ҡолаҡ һалырға өйрәнгәнмен. Ғәмәли аҡыл һабағы ҡөҙрәтлерәк була, – ти торғайным.

Ил, халыҡ хәл иткес мәл кисергән саҡта, сәсән, шағир һүҙе кәрәк. Илленсе-алтмышынсы йылдарҙа, туған телдә уҡытылған мәктәптәр рус теллегә күсерелә башлаған осорҙа, өйҙән өйгә йөрөп рус телле мәктәптәрҙә уҡырға кәрәклеген аңлатып, өйҙә атай-әсәйҙәр менән рус теленда генә һөйләшергә кәрәклеге хаҡында өгөт-нәсихәт алып барған саҡта, халыҡ төшөнкөлөккә бирелгән мәлдә, өмөт осконо балҡытып ебәрерлек шиғри һүҙ кәрәк ине. Ул – шағир Рәми Ғариповтың "Аманат"ы булды. Был әҫәр, баҫылып сыҡҡанға тиклем үк, яҙма рәүештә ҡулдан ҡулға, телдән телгә таралды. Ышандырырлыҡ, кешенең фекерен ҡырҡа үҙгәртеп ебәрерлек ҡөҙрәт бар ине шағир һүҙендә. Ундай ҡеүәт шәхестәрҙең ялҡынлы телмәрендә лә булған. Заманында Салауат Юлаевтың хаттары, Аҡмулла шиғырҙары, Өмөтбаевтың публицистик мәҡәләләре, Шәйехзада Бабич, аҙағыраҡ Рәшит Ниғмәти, Баязит Бикбай, Ҡадир Даян, Зәйнәб Биишева шиғырҙары, Жәлил Кейекбаев сығыштары шундай көскә эйә булған.

Ялҡынлы йөрәкле, заман һулышын яҡшы тойған, киләсәкте алдан күреү һәләтенә эйә булған шағир Р. Ғарипов "Туған тел" шиғырын яҙып, бындай шиғырға сарсаған халыҡҡа йотом тере һыуҙай өмөт бирҙе.

Телеңдән яҙҙырыу – милләтеңдән яҙҙырыу ул, милләтеңдән яҙҙырыу — һине рухи ҡол итеү. Ошо хәҡиҡәтте аңлатты Рәми Ғарипов үҙенең "Туған тел", "Уйҙарым" шиғырҙары, "Аманат" ҡобайыры менән.

Телең барҙа илең бар,
Илең барҙа иркең бар,
Иркең барҙа күркең бар,
Ерең, күгең - икең бар,
Утың-һыуың - дүртең бар.
.....

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Һүҙем әйтеп бөтәйем.
Ни һуң икән киләсәк?
Кемдәр унда киләсәк?
Яуап биреп үтәйем:
Төрлө гөлдәр үҫәсәк,
Һутлы емеш бирәсәк.
Һәр гөлгә ер етәсәк.
Бер бакса ул - Киләсәк,
Хөр бакса ул киләсәк.

Яҙмышты кеше үҙе бар итә, үҙе юрай, үҙе булдыра. Ҡайһылай юрайһың — Тәңре тормошоңдо шулай ҡора. "Уйыма килгән – алдыма килә", — тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. Кеше әҙер аң менән тыуһа ла, әҙер яҙмыш менән тыумай. Яҙмыш, әйтеп үтеүебеҙсә, кешенең уйҙарынан, юрауынан, бәләкәйҙән туплана килгән күңел моңдарынан хасил була.

Кеше күңелендә матур тойғоларҙы ни тиклем күберәк һаҡлаһа, шул тиклем изгелекле, ихтирамлы, иғтибарлы, итәғәтле була. Ә ундай күркәмлек күңелгә моң аша, матурлыҡты тоя белеү аша һалына. Ошондай йылылыҡ, моң һалынһа һәм һаҡланһа, күңелдәр тиҙ генә ҡыйратылмай, ҡаршылыҡтарға бирешмәй, илдең идеологияһын ниндәй генә йүнәлештә үҙгәртеп маташһалар ҙа, зиһендә тарихи хәтер, милли үҙаң тиҙ генә юйылмай. Милләттең сәйәси һәм рухи үҫеше тотҡарлыҡ кисермәһен өсөн, бөгөн яңы юлдар эҙләргә кәрәк. Ул юлдарҙың береһе — башҡорт йәштәре күңелендә шәреҡлекте тергеҙеү. Беҙҙең тамырҙарыбыҙ Шәреҡ донъяһы менән тоташҡан, беҙҙең күңелдәребеҙ шәреҡ моңона ауаздаш. Әгәр беҙ иҫ китмәле шифриәтле, моңло шәреҡте өйрәнәбеҙ икән, зиһенебеҙҙәге тарихи хәтерҙе уятып, халҡыбыҙҙа ҡасандыр булған, бөгөнгө көндә ваҡ-төйәк дыңҡылдауҙар аҫтында онотола барған ҡиммәтле ҡаҙаныштарыбыҙҙы хәтерләп, уны заманға яраҡлаштырып үҫтереп ебәрә аласаҡбыҙ. Шулай булмағанда, көндәлек, бер көнлөк, бер айлыҡ йырҙар, сәнғәт әҫәрҙәре менән генә ҡәнәғәт булып йәшәһәк, халҡыбыҙҙы туплап, алға әйҙәп, күңелдәрен яҡынайтып, берләштереп, быуындарҙы быуындарға ялғап тарҡатмай тотоп тороролоҡ әҫәрҙәр ижад итә алмаясаҡбыҙ. Тимәк, күңелдәребеҙгә ысын моң ҡайтһын өсөн иң элек үҙ моңобоҙҙо, унан һуң шәреҡ моңон һалырға тейешбеҙ. Хәҙерге заманда төрлө әҙәбиәт уҡырға ла, төрлө музыка тыңларға ла мөмкинлек бар. Интернетҡа сығып та, китапханалар аша заказ менән дә әҙәбиәт алдыртырға була. Күңелебеҙгә

туған моң ҡайтһын, зиһенебеҙҙәге элекке бөйөклөк уянһын, тамырыбыҙ буйлап үҙ тарихибыҙға юл алайыҡ тиһәк, Шәреҡ аша юлларға кәрәк. Үҙебеҙҙең ижад ҡомарына ҡурҙы Шәреҡтән алыу мотлаҡ.

Үҙ аллы илдәрҙең үҙ Гимны, Гербы һәм Байрағы була. Халыҡты туплаусы символдар булар. Бер үк моңдо тыңлау, бер үк нәмәне күреү, бер үк рухландырғыс әләмгә бағыу күңелдәрҙе берләштерә. Һүҙлектә Гимн һүҙенә аңлатма былай тип бирелгән: "Дәүләт йәки социаль берҙәмлек символы итеп ҡабул ителгән йыр".

Башҡорт халҡының ырыуҙары берләшә башлағас, иң тәүге берләшмә — Ете ырыу үҙенең гимны итеп "Урал" йырын алған, һәм был йыр бөтөн башҡорт халҡының уртаҡ гимнына әйләнгән. Халҡыбыҙҙы туплап, берләштереп тороусы гимныбыҙ, ҡурайыбыҙ булған өсөн тарҡалмай һаҡлана алғанбыҙ. Бөйөк таланттар милләтһеҙ, туған моңһоҙ булмаған. Уларҙың күңел һыйынысы – халҡы, милләте, илһам алыр моңо, мөхите булған. Ҡаныңа һеңгән тел моңо, традиция — зиһенеңә тәбиғәттән һалынған һәләтте асыу өсөн иң бәрәкәтле нигеҙ. Ошо хәҡиҡәтте аңларға теләмәйенсә, балаларын милләтенән, туған теленән айырған кешеләр балаларын да, халыҡты ла күҙ алдына ла килтермәгән асыштарҙан, ижади бейеклектәрҙән мәхрүм итәләр. Халыҡ аңына был хәҡиҡәт барып етһә, ул үҙен һаҡлап алып ҡала ала, барып етмәһә, әлбиттә, милләт булараҡ юғала. Милләтенән, туған моңонан айырылғандарҙың рухи шәмдәре тиҙерәк һүнеүсән, улар күңел төшөнкөлөгөнә нығыраҡ бирелеүсән.

Халыҡ фекеренсә лә, ғалимдарҙың күҙәтәүенсә лә кеше тәбиғәте ете йыл һайын үҙгәреш кисерә. Был үҙгәреш тышҡы ҡиәфәте, холоҡ-фиғелендә генә түгел, уның эске донъяһында ла була. Ҡырҡ йәштәрҙән үткәс, кеше күңелендә һағыныу тойғоһо көсәйә башлай. Кеше үҙенең үткәнен һағына, тормошона барлау үткәрә, күберәк уйлана. Тойғоларға өҫтөнлөк биреп, аҡыл менән хәл итмәгән мәлдәре өсөн үкенә. Ошо осорҙа ҡанына һалынған моңдо һағына башлай. Ҡайһылары быны аңлай, ҡайһылары аңламай – ни икәнен дә тоймай. Туған теленән, туған моңонан айырылғандарҙың күңелендә шыҡһыҙ бушлыҡ тойола. Кеше ниндәй генә шарттарҙа йәшәһә лә туған халҡының күңел моңо ғүмерлеккә уның булмышында һаҡлана.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында етем балалар күбәйеп киткәнлектән, байтаҡ ҡына балалар йорттары асыла. Бер районда ғына өсәр-дүртәр була ундай йорттар. Һәр төбәк үҙ етемдәрен үҙе баҡҡан. Минең атайым яғынан туған бер инәйебеҙ ире һуғышта

ваҡытта ауырып китеп вафат була. Яңы тыуған балаһы менән йәмғеһе алты бала тома етем ҡала. Сабыйҙы һеңлеһе ала, ҡалғандарын ауылдағы балалар йортона бирәләр. Әммә һуғыш тамамланғас, балалар йорттарын Үзбәкстанға, Украинаға һәм башҡа әллә ҡайһы төбәктәргә тараталар, хатта бер туғандарҙы ла айыралар. Биш баланың бишеһе биш яҡҡа олаҡтырыла. Байтаҡ йылдар үтеп, ауылда ҡалған сабый бала буй еткереп, зиһене асылғас, туғандарын эҙләй башлай. Ҡырым яғынан урыҫ теллегә әйләнгән бер ағаһы, Үзбәкстандан үзбәксә генә һөйләшкән бер ағаһы, Украинанан бер апаһы табыла. Әммә осрашыу бәләкәй һеңлеләре теләгәнсә бәхет килтермәй. Улар көҙгө алдына баҫып, бер-береһенә оҡшаш булыуҙарына хайран ҡалып ҡосаҡлашып илашалар, әммә рәхәтләнеп ултырып бер телдә һөйләшә, туған телдә йырлаша, ауылдағы туғандары менән ихласлап иркенләп аралаша алмайҙар. Исемдәре лә, телдәре лә, ғәҙәттәре лә, үҙҙәрен тотоштары ла йәшәгән төйәктәренә, тәрбиәләнгән мөхиттәренә ҡарап үҙгәргән. Нәфисә исемле апайыбыҙ Анфисаға әйләнгәйне.

Анфисаның һөйләгәндәрен һүҙмә-һүҙ килтерәм.

Башҡортостандан алып киткән саҡта миңә биш йәш булған. Аралашырлыҡ, һөйләшерлек бер кем ҡалмағайны. Бер яҡын кеше лә булмағанлыҡтан илағым килеп, тик иларға ярамаганлыҡтан, көндәр буйы тамағымда бер төйөн ауырттырып йөрөгәнен ныҡ хәтерләйем. Ауылда саҡтағы апайҙарым, агайҙарым береһе лә юҡ. Тәрбиәселәр икенсе. Мине улар аңламай, уларҙы мин аңламайым. Тик үҙемсә бик яҡын һүҙ ӘСӘЙ тип кенә һығылып-һығылып илайым. Төндә генә, юрған аҫтында ғына. Аҙаҡ украин телендә һөйләшә башланым, әммә әсәй тигән һүҙҙе күңел йыуата торған һүҙ кеүек хәтеремдә ҡалдырҙым. Хатта бер ваҡыт "әсәй, әсәй..." – тип йырлап йөрөгән саҡта, бүлмәгә килеп ингән комиссияны ла һиҙмәй ҡалганмын. Аҙаҡ ни өсөндөр тәрбиәсенән бик ҡаты әләкте, мине ҡараңғы бүлмәгә биклән ҡуйҙы ла, тағы үҙ телендә бер генә һүҙ әйтһәң ошо бүлмәнән сығармаясаҡмын, тине. Мин аҡбур ашарга ярата торғайным, кеҫәмдә аҡбур киҫәге ятҡан. Ҡараңғы бүлмәлә стенаға әсәй, әсәй тип яҙҙым да бөттөм. Мине әрләп-әрләп был бүлмәнән сығарҙылар. Тәрбиәсе мине мыҫҡыллап <u>әсәй</u> тип йөрөттө. Тик мин ул һүҙҙең ниндәй милләттеке икәнлеген белмәнем, аҙаҡ онотола ла барҙы.

Балалар йортонан һуң институтта уҡыным. Бик һәйбәт украин милләтле егеткә кейәүгә сыҡтым. Атай-әсәй ҡулында тәрбиәләнгән. Беҙ өйләнешергә булдыҡ һәм ауылдарына барҙыҡ. Туғандары ла мине яҡын иттеләр. Беҙҙе сиркәүгә алып киттеләр. Индек. Ҡулдарына майшәм тоткан кешеләр теҙелешеп баҫҡан. Поп тора. Кешеләр араһынан үтеп барабыҙ. Йөрәк эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Бына поп икебеҙҙең дә

ҡулыбыҙға майшәм тоттороҙо. Башта йөрәк тапҡырында ниҙер сәнскән һымаҡ булды, шунан һалҡын бер нәмә ҡапыл ярылып китеп бөтә булмышыма таралды ла ут кеүек ҡыҙҙыра башланы, уң аяғымдың тубыҡ астында ғына биҙ ысҡынып киткән кеүек булды һәм мин тотош быуынһыҙландым. Күҙ алдарым ҡараңғыланды.

Өйҙә генә айнып киттем. Мине сүкындырмагандар. Аҙаҡ та ирекһеҙләмәнеләр.

Шул саҡ мин үҙемдең христиан динле түгел икәнлегемде аңланым.

Өфөнән хат алғас, ҡапыл ниҙер бөтә тәнемде йылытып ебәргәндәй булды. Бәләкәйҙән йөрәгемде өйкәп, тамағымда ҡаты төйөр булып ҡатҡан ауыр төйөн яҙылып киткәндәй итте. Мин аңлашылмаған бер тойғо эсендә ҡалдым. Күҙ алдарым яҡтырып, офоҡтарым киңәйеп китте. Ни эшләптер үкһеп-үкһеп илағым килә башланы. Ҡыуаныстанмы, аптырауҙанмы, ниндәйҙер оло бер бәхетемде юғалтып ҡабат ҡайтара алмау үкенесе яҡынлашыуҙанмы – уныһын аңламаным. Хат авторы әҙләгән Нәфисә минме, түгелме икәнлеген асыҡламаганбыҙ, ә күңел инде "ул һин, һин!" тип талпына ла башланы. Үҙем белгәндәрҙең барыһын да яҙҙым һәм мине яратмаган тәрбиәсе арҡаһында ғына ӘСӘЙ тигән һүҙҙе хәтерләүемде лә өҫтәнем. Яуап оҙаҡ көттөрмәне. Әсәй тигән һүҙҙең башҡортса икәнлеген һәм улар башҡорт ҡыҙын әҙләүҙәрен яҙғайнылар. Өҫтәүенә минең бәләкәй сағымдағы фотоны һалғандар. Әсәйем менән атайым араһында баҫып торам. Ирем дә, балаларым да уның мин икәнлеген таныныlар. Әсәйемә ныҡ оҡшагайным.

Өфөгә килеп еттем. Тулҡынланыуымдан вагон ишегенән саҡ сыҡтым. Вагондан ғына төшкәйнем, бер бала эргәмдән генә "Әсәй!" тип йүгереп үтеп китте. Әсәй, әсәй! Таптым! Таптым! Ғүмер буйы эҙләгән һүҙҙе таптым. Торган урынымда диуана кеше һымаҡ үҙ алдыма үҙем йылмаям. Туғандарым йүгерешеп килеп "Нәфисә!" тип ҡосаҡлап алдылар. Нисек таныныlар икән тип аптыраһам, улар төҫ-башҡа тап үҙем кеүек. Вокзалға индек тә ҙур көҙгөнән ҡарайбыҙ. Беп-бершибеҙ.

Ҡайһы саҡта үҙәк өҙҙөрөп йөрәк төбөндә ниҙер һулкылдап ҡуя. Уныһы инде бөтөнләй икенсе төрлө тойго. Элекке ҡургаштай ауыр һалҡын юҡһыныу ҙа түгел, туғандар менән осрашҡан саҡтағы ҡанатлы ҡыуаныс та түгел, ә һағыш. Һары төҫтә түгел ул, ә шәфәҡ төҫөндә моңһоу бер һағыш. Ә шулай ҙа бәхетлемен. Көйҙәребеҙ, моңобоҙ ҡаймаҡ һымаҡ йөрәккә ягылып тора. Осрашыуыбыҙҙың йәш, буйҙаҡ саҡта булмауы насар. Әммә әл дә балаларым бәләкәй саҡта осрашмаганбыҙ, тип ҡыуанам. Йөрәгем икегә бүленһә, ҡыйын булыр ине. Мин балаларымды тәрбиәләгән саҡта украинка инем. Украинса йырланым, украинса гөрөф-ғәҙәткә өйрәттем, донъяны ла улар күҙенән ҡараным. Ә хәҙер мин үҙемдең башҡорт икәнлегемде асыҡланым да, йөрәгем икегә бүленде.

Эске булмышым үзгәрмәгән икән. Шуга ла мин һәр сак нимәнелер юкһынганмын, күңелем нимәгәлер сарсаган. Ни өсөн икәнлеген элегерәк белһәм, кителган күңел менән балаларҙы атаһының нәҫелен дауам итеүсе итеп тәрбиәләй алмаҫ инем. Улар ҙа аҙак әле мин кисергән һағышты йөрөтөрҙәр ине күңелдәрендә. Балаларым украиндар. Күңелдәре бүлгеләнмәне. Киәфәттәре лә атайҙарына оҡшаган. Был миңә тыныслык бирә.

Баланы беҙ юғары белемле итеү өсөн генә тапмайбыҙ. Кеше ғүмере юғары уҡыу йортонда уҡыған ғына арауык түгел. Ғүмерҙең артабан да дауам итерен, нигеҙе ғаиләлә һалынғанлығын аңларға, үҙенең дә атай-әсәй булырын, өлкәнәйеүен, һағыныу осорҙары кисереүен, бөтә кешегә лә килә торған төрлө сирҙәргә дусар булырын алдан күрергә һәм МОҢдан айырмаҫка кәрәклеген аңларға тейешбеҙ.

* * *

КПСС-тың милли сәйәсәте совет кешеләренең яңыса берлеген булдырыуҙан ғибәрәт ине. Тәбиғәттә тик бер генә төрлө ағастар, бер генә төрлө ҡоштар, хатта бөжәктәр ҙә булмаған кеүек, милләттәр ҙә бер генә төрлө була алмай. Тәбиғәт үҙе шулай бар иткән беҙҙе. Хатта сит ояға йоморткa һалып, ят ҡоштар баҫып сығарған кәкүк балаһы ла кәкүклеген юғалтмай.

Бер милләтте икенсе милләткә яһалма рәүештә әйләндереп булмай. Миҫал өсөн көслөк менән суҡындырылған халыҡтарҙы ғына алайыҡ. Диндәре үҙгәрһә лә, милләте үҙгәрмәне. Милләт – тәбиғәттән килә. Төрлө милләттәрҙең тәбиғи үҙгәреше лә, икенсерәк милләткә үҙгәреүе лә, ер йөҙөнән юғалыуы ла фәкәт һәр халыҡтың эске булмышына ғына бәйле.

Әгәр беҙ ҙә үҙебеҙҙе үҙебеҙ юҡҡа сығармаһаҡ, тыштан яһалған көс кенә юҡ итмәйәсәк. Меңәр йылдар буйы тарихта һәм ер йөҙөндә үҙен һаҡлап килгән халҡыбыҙҙың тышҡы ҡаршылыҡтарға торор ҡеүәт-ҡөҙрәте бар. Халыҡтың эске тарҡалышын булдырмау сараһын күрергә кәрәк. Халҡыбыҙҙы ойоштороусы символ – гимнға әйләнгән "Урал" йыры бар, Халыҡты тарҡатмай, ныҡлы күсәр һымаҡ үҙ тирәһендә тоҡан ҡурайы бар. Тыуған ергә сикһеҙ һөйөү тойғоһо һалып, үҙ-ара изге мөнәсәбәткә, яҡшылыҡҡа саҡырып, өндәп тороусы "Урал батыр" эпосыбыҙ бар. Телгә, тарихҡа, шәжәрәгә, фән серҙәрен өйрәнеүгә тәрән ихтирам тыуҙырырлыҡ тәрбиә ҡанундарыбыҙҙы туплаған ҡиммәтле

хазинабыҙ – ауыҙ-тел ижадыбыҙ бай. Рухи азатлыҡ байрағы – Салауат Юлаевыбыҙ бар. Был биш төшөнсә булған, бар, буласаҡ. Ошо төшөнсәләрҙең һәммәһе лә бала күңеленә туған тел, моң аша һалына. **Әгәр атай-әсәйҙәребеҙ балаларын туған телдән, моңдан мәхрүм итмәһә, башҡорт булған, бар, буласаҡ.**

Туған тел – моң теле

Профессиональ медицина яңынан-яңы асыштар яһай. Һуңғы йылдарҙа музыканың кеше сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһауы хаҡында киң билдәле булып, ошо ысул тарала башланы. (*Әйткәндәй, үҙебеҙгә билдәле булған оҙон гүмерле йырсыларҙы күҙ алдына килтерәйек. Мәғәфүр Хисмәтуллин, Мәғәфүрә Сәлиғәскәрова, Фәриҙә Кудашева, Мәғфирә Ғәлиева, Хәбир Ғәлимов... Әлбиттә, һәр төрлө фажиғә арҡаһында гүмерҙәре иртә өҙөлгәндәрҙе иҫәпкә алмайбыҙ. Ә сәләмәт тормош алып барыусы ысын йырсылар хаҡында һүҙ бара*). Тәбиғәт кешелек донъяһына моңдо юҡҡа ғына бүләк итмәгән. Моң – ул Тәбиғәттең иң серле, иң ҡиммәтле һәм ҡөҙрәтле көскә эйә булған ижад емеше. Шуның өсөн дә халыҡтар араһында аралашыу, хатта тел буталыу ни тиклем генә көслө булмаһын – моң һаҡлана. Үҙ моңоңа килеп ингән аҙ ғына хилафлыҡты ла танып була. Ер йөҙөндәге күпме халыҡ үҙ моңон һаҡлай, үҙ моңо менән йәшәй. Ә туған телендә һөйләшмәгәндәр йәки ярым-йорто ғына белгәндәр тел моңона, халыҡ моңона эйә була алырҙармы? Туған моңдоң ошо ҡөҙрәтле көсөн файҙалана алырҙармы? Ундай наҙандар (*туған телен, үҙ халҡының тарихын, традицияһын белмәгәндәр*) күңел ауырыуын ниндәй моң менән дауаларҙар? Ә бит билдәле, бик күп ауырыуҙар кешенең күңел торошона бәйле. Кеше үҙ ауырыуын үҙе дауалау сараһы күрһен өсөн бар ителгән бит моң. Туған тел, бигерәк тә саф, бай, һүтлы тел – шул уҡ моң. Туған телдең аңға нисек тәьҫир иткәнлеген сит илдәрҙә йөрөп ҡайтҡан кеше әйтә ала. Иленде, туғандарыңды һағынып йөрөгән мәлдә туған теленде һөйләшеүсене осратып ҡара! Таныш ауаздарҙың нисек тәьҫир итеүен шунда тойорһоң!

Һүҙҙең, моңдоң кеше күңеленә тәьҫир итеүен иҫбат итеп тороу кәрәкмәй. Тәбиғәт кешелек донъяһына йыраусы, рәссам, сәсән, шағир тигән һәләттәрҙе юҡҡа ғына бар итмәгән. Күңел ялы биреүселәр, күңел сәләмәтләндереүселәр улар. Ә уларҙы фәҡәт туған теленде тойоп, туған теленде ҡабул итеп, күңеленә һеңдереүселәр генә сәләмәтлектәренә ыңғай тәьҫир алала.

Тимәк, туған телһеҙ ҡалыу – моң юғалтыу, моң юғалтыу – ул сәләмәтлегеңә лә зыян, рухилыҡ юғалтыу ҙа, ә инде рухилыҡ юғалтыу донъялыҡтағы бар бурыстарыңды ла онотоуға килтерә. Ошо төп өс бурысты (*алдағы мәҡәләләрҙә өс бурыс хаҡында әйтелер*) үтәй алмау, үтәү тураһында бөтөнләй уйламау, тоймау – кешене фәҡәт тамаҡ аҫыраусы йән эйәһенә әйләндерә, кеше ер йөҙөндә йәшәмәй, тереклек кенә итә.

Тойоу һәләте туған телдә ярала

(*йәки туған тел – ул күңел теле*)

Кешелә ишетеү, күреү генә түгел, күңел тойомо тигән һәләт тә бар икән, ул да туған тел аша ярала. Карындағы сабыйҙы физик яҡтан кендек бәйләһә, тойоу йәһәтенән (*биологик*) туған тел бәйләй. Буласаҡ әсә менән бала төрлө өндәрҙән торған ауаздар аша түгел, ә туған телдәге тойғо, уй-фекер аша аралаша башлай. Әгәр әсә туған телендә уй-фекер йөрөтә икән, бала күңеле әсәнеке менән шул тиклем тығыҙ бәйле була, улар ғүмер буйы үҙ-ара тойоу аша ла аралаша ала. Баланың шатлығын да, хәсрәтен дә әсә тоя аласаҡ. Был тойғоноң төрлө билдәләр аша булыуы ихтимал. Тик уның билдәһен һиҙеү мотлаҡ. Төш күреү, күңел тойоуы, эс бошоу, күҙ тартыу, түш сәнсеү, йөрәк семетеп алыу һәм башҡа шундай тән һәм йән берлегенә бәйле билдәләр аша бер-береңдең хәлен иҫкәртеү иземе бирелгән. Был тән күҙәнәктәре аша бирелгән тойоуҙы инҡар итеүселәр бар, әммә төш юрау тигән ышаныуға ҡоролған сюжеттар халыҡ ижады әҫәрҙәренә лә инеп киткән. Бындай тойоу көсөн үҙендә һынаусылар һис кенә лә кире ҡаҡмаҫ.

Тимәк, туған тел – ул нерв күҙәнәктәребеҙ аша ҡан туғандарҙы тойоу сараһы ла. Туған телдә аралашмаған туғандар бер-береһен тоямы, юҡмы – уныһын әйтә алмайым, әммә күҙәтеүҙәремдән сығып шуны ныҡлы әйтә алам: бәләкәйҙән күңеленә туған тел, туған моң аша тыуған ил, туғандар тигән тойғо һеңдерелмәгән кешегә атай-әсәйҙе, халыҡты, илде бар тип тә белмәй фәҡәт үҙ мәнфәғәтен генә хәстәрләп сит илдәргә олағыу бер ни ҙә тормай. Ә инде аҙаҡ, кеше етенсе ете йыллығын йәшәгән осорҙан башлап, тәбиғәт барыбер үҙ ҡалыбына һалырға маташа һәм бындай тәүәккәл аҙым эшләүселәрҙең күңелен һағыш сорнай.



АҡЫЛ

Аҡыл, ырыҫ-бәхет кеүек үк, туплана торған төшөнсә. Китаптарҙан, тирә-йүндәге кеше фекеренән, тормоштоң үҙенән туплана. Зирәк, зиһенле кеше быны аңлай һәм ғүмере буйы камиллашырға ынтыла, аҡыл туплай. Ундай кешеләр бер ваҡытта ла үҙен камил белемле һәм аҡыллы тип иҫәпләмәй. Белгән һайын-белгеһе, күргән һайын күберәк күргеһе килә.

Ә аҡыл нимә ул? Аҡылды үлсәүҙең берәй ҡалыбы бармы? Аҡылды һәр кем үҙенсә аңлаймы? Ғөмүмән, аҡыл тигән дөйөм төшөнсә бармы?

Әлбиттә, "аҡыл" тигән һүҙ барлыҡҡа килгән икән, үлсәме, ҡалыбы булмаһа ла, төшөнсәһе бар.

Аҡыл – ул дөрөҫ һығымта яһау һәм башҡарған эшеңдең ыңғай һөҙөмтә биреүе.

Ә ғүмере буйы аҡыл туплауға һәм камиллыҡҡа ынтылған аҡыллы кешене башҡаларҙан нисек айырып була?

"Аҡыллы" тигән дөйөм төшөнсәне, нигеҙҙә, ете шарт билдәләй:

Аҡыллы кеше үҙ аҡылын үҙе тоторға тырыша.

Аҡыллы кеше һәр ваҡыт алтын урталыҡ таба белә һәм дөрөҫ һығымта яһай.

Аҡыллы кеше эске рухи азатлығын юғалтмай.

Аҡыллы кеше хатаны үҙенән эҙләй, үҙен төҙәтеүҙән башлай һәм бер эшләгән хатаһын ҡабатламаҫҡа тырыша. Әммә үҙ хатаһы менән даими рәүештә үҙен сыбыртҡыламай: кеше хатаһынан да, үҙ хатаһынан да фәһем ала. Аҡыллы кеше үҙен кеше урынына ҡуйып фекер йөрөтә белә.

Аҡыллы кеше маҡсат менән йәшәй.

Аҡыллы кеше үҙтәрбиә менән шөғөлләнә, төшөнкөлөккә бирелмәй, кешегә һылтанмай, яҙмышҡа зарланмай.

Был китаптың тәүге өлөштәрендә телгә алынған Ибраһим бер ваҡыт миңә шундай һорау бирҙе:

– Диҡҡәт ағайҙы барыһы ла бик аҡыллы ине, тиҙәр, Мәскәү университетын ҡыҙыл дипломға тамамлаған. Ишетә белеүемсә, имтиханда ул биргән яуаптарҙы хатта университеттың радиоһы аша тапшыра торған булғандар. Уны егеттәр "башҡорт Ломоносовы" тип атаған. Әммә был бит белем. Кешенең тәбиғәттән һалынған зирәклеге. Уҡыуға һәләтле булыуҙан, тырышлыҡан килә. Аҡыл түгел. Аҡыл – белемгә, ә белем аҡылға бәйләнмәгән, минеңсә. Һин ун биш йыл йәшәгәнһең уның менән. Уның аҡыллы булыуы нимәлә сағыла ине? Ибраһим, ысынлап та, Диҡҡәт менән күрешеп, бер ултырып һөйләшергә хыялланып, тик баҙнаты етмәгәнлектән, яҡындан таныша алмай йөрөгән кеше, минән уның тураһында бик йыш һораша торғайны.

– Әлбиттә, аҡылды белем менән бутарға ярамай. Белемдең иң юғарыһына эйә булғандар ҙа аҡылһыҙлыҡ ҡылып ҡуя. Юғары белем хаҡында дипломы булмағандар ҙа аҡыллы кеше тигән баһаға лайыҡ була. Әммә бирәһе кәңәштәреңә, ҡылаһы ҡылыҡтарыңа алтын урталыҡ табыу өсөн бик киң һәм тәрән белем кәрәк. Диҡҡәткә кәңәш һорап килеүселәр күп була торғайны. Уның биргән кәңәштәре һәр ваҡыт Аҡмулла, Бабич, Лермонтов, Ғамзатов, Омар Хайям, Кабус шиғырҙары, Аристотель, Авиценна, Ларошфуко һәм башҡа аҡыл эйәләренең ҡанатлы һүҙҙәре, башҡорт мәҡәлдәре менән раҫлап ҡуйылғанлыҡтан, зиһендә ҡала ине. Ҡандан килгән аҡылды белем менән ни тиклем ҡеүәтләндереп, ҡанатландырып, сағыуыраҡ итеп ебәреп булғанын мин Диҡҡәттең кәңәштәрендә, яҙған мәҡәләләрендә күрә инем. Шул уҡ ваҡытта бындай кәңәштәр шундай ябай, аңлайышлы бирелә ине, килгән кеше, хатта үҙ хатаһын танытырлыҡ итеп әйтелһә лә, ҡәнәғәт тойғо менән ҡайтып китә торғайны. Диҡҡәт бик кеселекле булды, үҙен бер ваҡытта ла һауалы тотманы.

– Диҡҡәт ағай менән бер генә тапҡыр осрашҡан, үтә яҡындан аралашмаған кешеләр менән дә һөйләшергә тура килгәне бар минең. Улар, иҫтәре китеп, Диҡҡәт шул тиклем аҡыллы кеше ине, тиһәләр, бер күреүҙә кешенең аҡылын ҡайҙан белеп була икән, тип аптырап ҡуя торғайным.

– Кешене һынауҙың иң ышаныслы мөмкинлеге бәхәсләшкән саҡтыр. Ҡайһы берәүҙәр, башҡаларҙың әйткәнен ҡолаҡҡа ла эл-

мәй, кешене бүлдерә-бүлдерә үҙ ҡарашын өҫтөн ҡуйып маташа. Имеш, ул ғына белә, ул ғына хаҡлы һәм бөттө. Икенселәре иҫбат та итмәй: ҡоро тауыш менән еңмәксе, үҙ һүҙен һүҙ итмәксе була. Өсөнсөләре һикереп тора ла, һауаны урталай ярғандай, һыңар ҡулын һелтәп ҡуя ла үҙ фекеренең генә һуңғы һүҙ икәнлеген иҫбатлай башлай. Уның был хәрәкәте, берегеҙҙең дә әйткәне дөрөҫ түгел, бына мине тыңлағыҙ, тигән кеүек ишара була. Ҡайһы берәүҙәр, бәхәсләшкән саҡта, рәнйетерлек һүҙҙәр әйтеп ташлай, башҡаларҙы кәмһетә. Халыҡтың, айырылмаҫ дуҫыңа ҡайырылмаҫ һүҙ әйтмә, тигәнен иҫәпкә лә алмай, был бәхәс менән генә көн бөтмәгәнен, алда ла ғүмер барлығын, аҙаҡтан шул һүҙҙәрең өсөн үкенеп, ғәфү үтенер кимәлдә түбәнһенеп йөрөрөн уйлап та бармәй.

Бәхәс башланһа, Диҡҡәт, тәүҙәрәк бер ни әйтмәй, бөтөнөһөн дә тыңлап ултыра ла, бөтәһе лә үҙ фекерен әйтеп бөткәс, һүҙ әйтергә рөхсәт ала, һәм, әйтелгән фекерҙәрҙе тотош бергә туплап, йомғаҡ яһай. Бына һин шулай тип әйттең. Дөрөҫ. Тик төп фекер аҙ ғына әйтеп еткерелмәне. Фәләндең әйткәнен өҫтәһәк, был фекер тосораҡ булыр. Ә бына Фәләнов дуҫ хатта Аҡмулласа әйтеп ҡуйҙы. Аҡмулла бына былай тигән… Һәм шулай итеп, бәхәстә ҡатнашыусыларҙың һәр береһенең ҡарашына, әйткәненә таянып, ыңғай яғын билдәләп, уртаҡлыҡ табып, берәй мәҡәл йәки бөйөк аҡыл эйәләренең береһенең ҡанатлы һүҙе, йәки шифыр юлдары менән йомғаҡлап ҡуйыр ине. Һөҙөмтәлә, һәр береһе уның менән ризалаша, Сөнки һәр береһенең фекеренә һылтанма яһала. Аҡыл эйәләренең фекере менән раҫлай. Бәхәстә ҡатнашҡан һәр кешене, баламы ул, өлкәнме – бәҫен төшөрөргә түгел, ә күтәрергә тырышыр ине һәм, башҡа милләт вәкилдәре менән һөйләшкән саҡта, белгәне тиклем, шул милләттең үҙ шағирының шифыр юлдарын телгә алыр ине. Бер сыуаш егете менән һөйләшкәндә, Константин Ивановтың "Нарспи" поэмаһынан өҙөктәрҙе сыуаш теленә ятҡа әйтеп аптыратҡайны. Ә теге егет был әҫәрҙе белмәгән булып сыҡты. Илгизәр атаһы менән Кавказ яҡтарына барған саҡта, атаһының күп белеүенә аптырап ҡайтҡайны. "Атайым Ғамзат Цадасаның "Чабан тураһында йыр" поэмаһынан өҙөктәр, Шамил тураһында шифырҙарын, Рәсүл Ғамзатов шифырҙарын ятҡа һөйләп, әңгәмәселәрҙе аптырата торғайны, әңгәмәлә ҡатнашыусылар хатта атайым һөйләгәнен яҙып ала торғайнылар", – тип һөйләй.

Диҡҡәт, ысынлап та, һәр кешенең фекере менән иҫәпләште, хатта балаларҙың әйткәндәренә лә ҡолаҡ һала ине. "Бер олоно, бер кесене тыңла," тип әйтер ине үҙе. Дорфалыҡҡа, тупаҫлыҡҡа бер ваҡытта ла юл ҡуймаҡны. Ғәмәлдә үҙе булдыра алғанды ғына

кешенән талап итте. "Донъяла иң еңеле – диванда ҡырын ятып йәки трибунанан ҡул болғап аҡыл өйрәтеү. Шул аҡылды үҙең тотоу, үҙеңде үҙеңә буйһондороу, әлбиттә, аҙ ғына ҡыйыныраҡ. Мин ғүмерем буйы үҙемә үҙемде буйһондороу өсөн көрәшәм," – ти торғайны ярым шаярып.

Уның башҡаларға биргән кәңәштәренең ҡайһы береһен телгә алып китеү кәрәктер, сөнки үҙ-ара мөнәсәбәткә ҡағылған һорауҙар мәңгелек улар.

Бер ваҡыт беҙгә бер йәш ир килеп, Диҡҡәткә:

– Диҡҡәт ағай, минең хәлде ишеткәнһеңдер, бәлки. Кәләштән уңманым бит. Һинең һымаҡ башҡаланып, икенсе ғаилә ҡорһам, нисек булыр икән? Һин бит хәҙер бөтөнләй икенсе Диҡҡәткә әйләндең. Бөтөнөһө лә шулай ти, – тине.

– Һин мине кәләштән уңмаған өсөн киткән тип уйлайһыңмы? Бәлки, ул минән уңмағандыр... Кеше һәр береһе үҙенсә хаҡлы, үҙенсә һәйбәт. Тик ҡайһы берҙәре бергә булғанда килешә алмай. Күптәр үҙҙәрен тулыһынса аңлап етмәйенсә, ғаилә ҡороу өсөн ниндәйерәк иш кәрәклеген уйлап еткермәйенсә өйләнешәләр. Һин әле үҙеңә ниндәй кеше кәрәклеген аңланыңмы? Тағы яңылышыуҙан ҡурҡмайһыңмы? Икенсе ғаилә тап Һин хыялланғанса булыр, тигән ышанысың бармы? Үҙең хыялланған ҡатындың ниндәй булырға тейешлеген күҙ алдына килтерә алаһыңмы? Әҙәм ғүмерендә иң яуаплы аҙым был. Икенсе ғаилә ҡороу икеләтә яуаплы. Мин тәүгеһендә яңылыштым, үҙемде ныҡлап аңламағанмын. Үҙем яңылыштым. Икенсеһен бик уйлап хәл иттем. Сөнки мин, ниндәй кеше менән ғүмер итә алырымды аныҡ күҙ алдына килтергәс кенә, өйләндем. Иң элек үҙеңде тап – шунан иш һайла. Ә, бәлки, ҡатының менән килешеп йәшәп китерһегеҙ. Һин уның һәйбәт сифаттарын күрмәй генә йөрөйһөңдөр; бәлки, күрергә теләмәйһеңдер. Тәүҙә үҙеңде ныҡлап тикшереп ҡара.

Тағы бер кәңәше хәтерҙә. Диҡҡәттең бик яҡын кешеһе, ҡыҙ бала, ғаиләле иргә күңел һалған. Диҡҡәт был хәлгә ризаһыҙлыҡ белдерҙе:

– Ғаилә боҙоуҙан, кеше бәхетен тарҡатыуҙан үҙеңә бәхет табырмын, тип уйлайһыңмы?

– Һеҙ бәхетле бит...

– Һин минең өйләнгәнгә тиклем ниндәй хәлдә икәнлегемде беләһең. Мәрйәм апайың мине айыртманы. Ул мине бөтөнләй юҡҡа сығыуҙан ҡурсалап алып ҡалды. Шуның өсөн мин уға һәр саҡ рәхмәтлемен. Ә Һин Уны ғаиләһенән, балаһынан айыртып алып та бәхетле итә алмаһаң, ул Һиңә рәхмәтле булырмы? Ә үҙең күңел

тыныслығы табырһыңмы? Намыҫына көс килмәҫме? Бер ваҡытта ла кеше бәхетһеҙлегенән үҙеңә бәхет эшләргә тырышма. Кешене бәхетле итә алһаң ғына, үҙең бәхетле булырһың…

Диҡҡәт, тәүге инфаркттан һуң, ныҡлап ҡына һауығып китә алмай яфаланды. Ҡан баҫымы һәр саҡ юғары булды. Сәбәбен аныҡ ҡына билдәләй алманылар. "Янғантау" санаторийына барырға тәҡдим иттеләр. Ай ярым – байтаҡ ваҡыт. Бер аҙ яҙыу-һыҙыу эше менән дә шөғөлләнермен, ял да итермен, тип дәртләнеп китте. Ял итеүен итте, әммә ҡан баҫымы юғары көйө ҡалды…

Дауаланып ҡайтҡас, бер аҙҙан хат алдыҡ. Беҙҙе алыҫ бер районға ҡунаҡҡа саҡырғайнылар. Диҡҡәт, Янғантауҙа танышҡайныҡ, бергә ял иткәйнек, тип кенә әйтте. Ғаилә менән танышҡанмы, ирме, ҡатынмы – төпсөнөп торманым. Әммә ҡунаҡҡа бара алманыҡ. Саҡырыуҙарына рәхмәт әйтеп яуап хаты яҙыуҙы Диҡҡәт миңә йөкмәтте. Икенсе тапҡыр алған хатыбыҙҙа, яңы таныштарыбыҙ, ҡасан килһәгеҙ ҙә, ҡапҡабыҙ һәр саҡ асыҡ булыр, тип яҙҙылар. Хатты ир кеше яҙғайны. Беҙ уларға бөтөнләй бара алманыҡ. Алты йыл үткәс, Диҡҡәттең вафатынан һуң, улар ирле-ҡатынлы, бергәләп, Диҡҡәтте һуңғы юлға оҙатырға килеп еттеләр. Ерләүҙе хәл итеү мәсьәләһе оҙаҡҡараҡ һуҙылып китте Мосолмандар зыяратынан урын алыу ҡатмарлашҡайны. Йома көнө вафат булғайны, шишәмбе генә ерләй алдыҡ. Яңы танышҡан ҡатын мине хәл алып килергә тип яҡындағы урманға саҡырҙы. Өйҙә кеше күп ине. Ул ҡатын түбәндәгеләрҙе һөйләне:

– Дүрт балам бер-бер артлы ғына үҫте. Йорт-ҡура эштәре, малтыуар. Йонсоп, ваҡсылланып, мыжыҡҡа әйләнеп, холҡом да боҙолоп киткәндер. Тиҙ генә ҡыҙып китәм, өйҙә ғауға күтәрәм. Иремдең дә мөнәсәбәте һалҡынайҙы. Эштән бик һуңлап ҡайта башланы. Әсәйем килде. Был хәлгә бик аптыраны, сөнки беҙ ошоғаса бик татыу тыныс йәшәй инек. Әсәйем мәсьәләне үҙенсә хәл итте. Донъяңды үҙем ҡарап ҡалам, аҙыраҡ ял итеп, һауа алмаштырып, кеше менән аралашып ҡайт, – тип, үҙенең путевкаһын миңә бирҙе. Ирем дә ҡаршы булманы. Янғантауға килдем. Килеүемдең тәүге көнөнән үк Диҡҡәт Насретдиновичты күреп, оҡшаттым да ҡуйҙым. Минең хыялымдағы кеше кеүек ине ул. Яғымлы һөйләшеүе, ипле ҡарашы, һөйкөмлө йылмайыуы, онотолоп китеп ихлас көлөүе… Мин үҙемде белә-белгәндән алып ошондай кеше хаҡында хыяллана инем. Ә уның ҡатын-ҡыҙҙарҙа эше лә юҡ. Һаулыҡ һорашам, баш ҡағып ҡына үтеп китә. Ентекләп, иғтибарлап ҡарамай ҙа. Ашханала үҙ өҫтәлемдән уның өҫтәленә күсеп ултырҙым. Һүҙ ҡушам, таныш-маҡсы, үҙемә иғтибар иттермәксе булам. Юҡ. Буш ваҡытында йә

урманға сығып китә, йә яҙышып ултыра. Ике аҙна үтте. Ҡайтыр ваҡытым яҡынлаша, таныша ла алмам инде, тип борсола башланым. Бер көн тәүәккәлләнем дә, был хаҡта үҙенә әйттем дә ҡуйҙым. Өндәшмәне. Ашханан бергә сыҡтыҡ. Ғаилә хәлдәрен, балаларымды һораша, йорт-ҡурағыҙ нисек, малығыҙ бармы, ти. Бөтөнөһөн дә төпсөнөп белешә. Мин инде, уның менән һөйләшеүгә форсат сыҡҡас, ихлас һөйләйем. Өйөбөҙ, малыбыҙ, кәртә-ҡура, йорт-йыһаздары хаҡында ла, балаларым тураһында ла... Һөйләшеп китеүгә изем булһын өсөн һорашалыр, тип уйлайым. Һөйләйем дә һөйләйем, хатта иремдең һалҡын мөнәсәбәте хаҡында ла телгә алдым.

– Бөтөнөһө лә теүәл. Тик күңелем генә китек, – тип әйтеп һалдым.

– Бына тигән дүрт балағыҙ бар. Көнитмешең һәйбәт. Донъям яҡшы, тиһең. Барыһын да кем булдырҙы? Атайҙан ҡалған малмы, әллә иреңдең ҡул көсөмө? Атайҙан ҡалған мал, тиһәң, атайһыҙ үҫтем, тиһегеҙ. Тимәк, бергәләшеп булдырғанһығыҙ. Йөктө тиң тартҡанһығыҙ. Йөктө тиң тартмаһаң, тормош алға бармай ул. Тимәк, донъя көтә башлаған саҡта икәү-ара татыу булғанһығыҙ. Бынһы – бер. Икенсенән, ирең булдыҡлы, йүнсел булмаһа, әле һөйләгән матур донъяны бар итеп булмаҫ ине. Бына минең улайтып донъя көтөргә ҡулымдан килмәҫ ине. Өйгә мин бысаҡ та һатып алғаным юҡ. Магазинда бер буханка икмәктең күпме торғанын да белмәйем. Йыл һайын больницала ятып алам. Ҡан баҫымым даими юғары. Заманында бер үҙем һыуытҡысты артмаҡлап алтынсы ҡатҡа мендергән кеше, – хәҙер ике килограмдан артыҡ әйбер күтәрергә ярамай. Өйҙә лә, баҡсала ла Мәрйәм көс түгә. Мин хатта яратҡан балаларымды ла ҡулға алып сөйә алмайым, тубығыма ултыртып ҡына иркәләйем.

Ул "һин"гә күсеп китте. Йөҙө ҡып-ҡыҙыл булды. Мин үҙемде битәрләй башланым. "Ни эшләп ял итергә, дауаланырға килгән кешенең тыныслығын алдым?" – тип уйлайым. Һүҙ өндәшергә түгел, тын алырға ла тигәндәй тартынып киләм. Ә уның, иргә хыянат итеү, тигән төшөнсәгә шул тиклем асыуы килде, үҙенә хыянат иткәндәй ҡабул итте.

– Һөйләүеңә ҡарағанда, бынамын тигән донъя ҡорған иреңде баһалай белмәйһең. Әле бына ял итергә ебәргән. Мин Мәрйәмде бер айға түгел, бер көнгә лә ял итергә ебәргәнем юҡ. Ялдың ни икәнен дә белмәй ул... Ҡайтҡас, иреңә өр-яңы ҡараш менән баҡ. Яратырыу өсөн ярата белергә кәрәк бит. Өйләнешкән саҡта яратышып өйләнешкәнһегеҙҙер. Ул саҡта яратты ра белгәнһең бит, – тине.

Ошо һөйләшеүҙән һуң, үҙемде ҡайҙа ҡуйырға белмәнем, бүл-

мәмә ҡайтып рәхәтләнеп илап алдым да иртәгәһен иртә менән, ялды тамамламайынса, ҡайттым да киттем. Диҡҡәт Насретдиновичтең күҙенә күренергә оялдым. Әле бына табутында күргәс тә, терт итеп ҡалдым. "Дүрт бала әсәһе бит һин. Ғаиләң хаҡында уйларға кәрәк!" – тип шелтәләгән кеүек тойолоп китте лә, ирекһеҙҙән эстән генә: "Мин ирем менән килдем," – тип әйтеп торамсы, диуана кешеләй.

Янғантауҙан иртә ҡайтыуымдың сәбәбен иремә һөйләнем. Шунан ул һеҙҙе ғаиләгеҙ менән ҡунаҡҡа саҡырырға булды. Әлбиттә, ҡайғың оло. Әммә ундай кеше менән аҙ ғына йәшәү ҙә ғүмерлек бәхет бит, – тип, мине аптыратып, танышыу һәм бында килеү сәбәптәрен һөйләне.

Был хаҡта Диҡҡәт үҙе һөйләмәһә лә, уның менән бергә ялда булған дуҫы Әкрәм Биишев ағай (*Диҡҡәттең яҡын дуҫы, күренекле телсе-ғалим*) әйтә биреп ҡалғайны:

– Ҡая ла ҡая, Диҡҡәт тә ҡая һымаҡ. Ял итергә килгән көндән башлап бер сибәр ҡатын ҡармаҡлап маташты, Диҡҡәт тәки баш бирмәне. Теге ҡатын ныҡ ғәрләнде, ахыры, ялын да тултырмайынса алдан ҡайтты ла китте, – тип, Диҡҡәттең баһаһын күтәреп һөйләгәйне. Мин быға әллә ни иғтибар итмәгәйнем, сөнки Диҡҡәткә үҙ һөйөүҙәрен аңлатырға теләүселәр һәр саҡ табылып торҙо. Мин унан ун йәшкә кесе инем, ә минән йәшерәк ҡатындар уға ғашиҡ була торғайны. Был юлы хәлдәр икенсерәк төҫ алған икән... Ҡатын мине балаларым менән бергә ҡунаҡҡа саҡырып ҡайтты. Әммә бара алманым. Хат алышыуҙы ла дауам итмәнем. Форсат та, теләк тә булманы. Шағирә Зөһрә Ҡотлогилдинаның яҡташ ағаһы Диҡҡәткә арналған "Ил ағаһы" тигән шиғырын һалып ебәрҙем дә бәйләнештәребеҙ өҙөлдө.

Сатра урмандары тынып ҡалған,
Һуҡмаҡтарға һағыш һарылған.
Тыуған яҡтың горурлығы булған
Моңло ҡоштоң йөрәге ярылған.

Ил ағаһы йәше – илле, тиҙәр.
Һин етмәнең хатта илледә.
Үҙ йәшеңдә ил ағаһы инең,
Илле хәстәр булды иңендә.

Кем йыуатып, кемдәр һөртөр икән
Тәбиғәттең йәшле күҙҙәрен?

Мәңгелеккә ергә уйыр өсөн
Япраҡ ҡаплай һуңғы әҙҙәрен.

Сатра урманында шундай тынлыҡ,
Ҡыяҡ елпенерлек ел иҫмәй.
Тәбиғәте тәбиғилек булған
Ил ағаһын һағынып, ил иҫләй.

* * *

Баҡсабыҙ булмаған саҡта балалар менән тәбиғәткә сығыу, Диҡҡәткә балыҡ тотоу мөмкинлеге булдырыу маҡсатында (*балыҡ ҡармаҡлаған саҡта ҡан баҫымы яйға һалына шикелле, сәләмәтлегем яҡшырып ҡала, тын алыуым иркенәйеп китә, күкрәк ҡыҫмай башлай, ти торғайны. – М. Б.*) яҡын тирәләге башҡорт ауылдарының береһендә "таныш" яһап алмаҡсы булдыҡ. Ул танышыбыҙ – Шишмә районы Түбәнге Хәжәт ауылынан мәктәп директоры Фатима Абдулла ҡыҙы Миңнеғәлиева булды.

– Күңеле диңгеҙ уның, – ти торғайны Диҡҡәт уның тураһында. Беҙ Фатима Абдулла ҡыҙы менән бер-беребеҙҙе шул тиклем үҙ иттек, яҡын серҙәш-туғандар һымаҡ булып киттек. Яҙ етеү менән, аҙна һайын ауылға юл алабыҙ. Рәхәтләнеп ял итәбеҙ. Диҡҡәт Димгә балыҡ ҡармаҡларға китә, мин йорт эштәрендә ярҙамлашам. Фатима Абдулла ҡыҙының бик матур, һөйкөмлө, итәғәтле ике ҡыҙы: Гүзәлиә менән Лилиә беҙҙең балаларҙы һағынып көтөп алалар, үҙ туғандарындай ҡаршы ала торғайнылар. Ауыл кешеләре өсөн дә беҙ яҡын булып киттек. Электричканан төшкәс тә ауылға ҡайтыусы йәштәр:

– Саумыҫыҙ, ҡайтып киләҫеҙме, бергәләшәйекме? – тип күрешәләр, әйберҙәребеҙҙе күтәрешәләр, берәй аҙна ҡайтмаһаҡ, ни эшләп үткән аҙна ҡайтманығыҙ, тип һорашалар ине.

(*Диҡҡәттең үлеме тураһында ишеткәс тә иң беренселәрҙән булып Фатима Абдулла ҡыҙы килеп етте. Үкенес, мин уның үҙен һуңғы юлға оҙатыуҙа ҡатнаша алманым. Әле ҡыҙҙары менән күрешкелән торабыҙ. Гүзәлиә лә, Лилиә лә бик матур итеп гаилә ҡороп йәшәй. Икеһе лә әсәйҙәре юлынан китте, башҡорт теле һәм әҙәбиәте белгестәре, "Башҡорт мәҙәниәте", "Башҡортостан мәҙәниәте" предметтарын уҡытты, мин алып барған семинарҙарҙа ҡатнашалар.*)

Ауылға барған көндәрҙең береһендә, ҡойма ямғыр булғанлыҡтан, Диҡҡәт балыҡҡа бармай ҡалды. Бергәләшеп һөйләшеп ултырабыҙ. Фатима Абдулловна, тәрән итеп көрһөндө лә, ғәҙәте буйынса шул ыңғайға йылмайып ҡуйҙы һәм:

– Ҡыҙҙарым кейәүгә сығып китһә, яңғыҙ ҡалыуҙан ҡурҡам. Өфөлә минең кеүек шәп ҡатын эҙләүсе берәй дуҫың юҡмы? – тип, уйынлы-ысынлы әйтеп ҡуйҙы.

– Фатима Абдулловна, үҙегеҙ һүҙ башлағас, уңайһыҙ булһа ла һорайым әле, ҡыҙҙарҙың атайҙарынан ни эшләп киттегеҙ? – тип һораны Диҡҡәт.

– Мин уны елкәнән ҡағып төшөрҙөм, – тине Фатима Абдулловна.

– Мин шулайҙыр тип уйлағайным да, – тине Диҡҡәт. – Һеҙҙең кеүек янып торған булдыҡлы ҡатындар бөтөнөһөн дә үҙҙәре эшләй ала, ҡулынан да, теленән дә килә. Ә ирҙәре адъютант ролендә генә ҡала. Ә адъютанттарҙы үҙегеҙ үк һөйһөнөп етмәйһегеҙ. Һеҙгә кем тиң була алыр икән? Ниндәйерәк кеше? Тағы берәй ирҙе шундай уҡ яҙмышҡа дусар итмәҫһегеҙме? Һеҙ бит, ысынлап та, шәп ҡатын ғына түгел, шәп кеше лә. Һеҙҙең кеүектәргә иш табыу еңелдән түгел, – тине Диҡҡәт.

– Уныһы шулай инде. Ауылда директорҙан да юғары кеше юҡ. Шуға Өфөлә ауыл мәктәбе директорынан юғарыраҡ вазифалы кеше табылыр, бәлки, тип уйлағайным да,.. – тип, тағы уйынлы-ысынлы һығымтаһын яһаны Фатима Абдулловна.

Аҙаҡ был һөйләшеүгә кире ҡайтып, үҙенең шул тиклем ныҡ аптырауын һөйләне.

– Эйе лә, тимәне, юҡ та, тип баш тартманы. Ҙурламаны ла, хурламаны ла. Ә был хаҡта башҡаса ауыҙ асып һүҙ башламаҫлыҡ итеп аңғартты ла ҡуйҙы. Ундай аҡыл ҡайҙан туплана ул кешелә?! – тине ғәжәпкә ҡалып.

Диҡҡәткә кәңәш һорап килеүселәр уның фекеренә ҡолаҡ һалалар ине. Ул кешегә һыналған кәңәштәрҙе генә бирер ҙә, үҙенең дә һүҙе менән эше айырылмаҫ ине.

Аҡыллы кеше менән аҡылһыҙ кешенең айырмаһы шунда: аҡыллы кеше үҙендә тупланған аҡылды үҙе тоторға тырыша – үҙтәрбиә менән шөғөлләнә. Аҡылһыҙ кеше, бар белгән аҡылын кешеләргә өйрәтеп, фәҡәт үҙен аҡыллы күрһәтеү өсөн генә файҙалана.

Быны көндәлек тормошта, үкенес, йыш ҡына осратырға мөмкин.

Үҙебеҙгә ситтән күҙ һалайыҡ.

...Тәбиғәтте бысратыуҙың,хатта бәләкәй генә быяла киҫәгенең дә ҙур зыян килтереүен беләбеҙ – әммә ырғытабыҙ.

...Эсәр һыуҙың сикһеҙ түгеллеген, запасының самалы булыуын, һаҡларға кәрәклеген аңлайбыҙ. Үҙебеҙҙән һуң йәшәйәсәк бала-

ейәндәребеҙҙе таҙа һыуҙан мәхрүм итмәҫкә кәрәклеген беләбеҙ. Әммә ҙур-ҙур предприятиеларҙың ҡалдыҡ һыуҙарын таҙарттырмайынса ер аҫты бушлыҡтарына ҡыуҙыртҡан вазифалы етәкселәрҙән башлап, фатирҙа, урамдарҙа колонкаларҙан көндәр буйы һыу ағып тороуына битарафлыҡ күрһәткән кешеләргә тиклем белгән аҡылыбыҙҙы тотмайбыҙ.

...Хәрәкәттә – бәрәкәт, тигән бик аҡыллы әйтем бар халҡыбыҙҙа. Ул беҙгә быуаттарҙан-быуаттарға, быуындарҙан-быуындарға килеп еткән. Сәләмәтлектең нигеҙе – хәрәкәттә, икәнлеген профессиональ медиктар ҙа аҙым һайын иҫкәртеп тора. Әммә бөтөн кеше лә был хәҡиҡәткә ҡолаҡ һалмай. Үҙ сәләмәтлегенә ҡарата вайымһыҙ. Ялҡаулығын еңә алмай. Артыҡ хәрәкәт итергә йыбана, аҙ ғына йәйәүләүҙән дә ҡурҡа.

...Ғүмеребеҙҙең бер генә тапҡыр килгәнлеген, башҡа бер ваҡытта ла был яҡты донъяға тыумаясағыбыҙҙы, самаһыҙ матди байлыҡтың да, уҫаллыҡтың да, кешегә үс тотоуҙың да, яһиллыҡтың да, көнсөллөктөң дә ошо бер генә ҡәҙерле ғүмерҙе ҡыҫҡартыуын беләбеҙ. Әммә нәфсе тигән төшөнсәгә сик ҡуйыу тураһында уйланмайбыҙ. Әле тегенеһе кәрәк, әле бынығы кәрәк... Шул тиклем күп кәрәкме кешегә?!

...Һәр кешенең ҡабатланмаҫ шәхес икәнлеген беләбеҙ, беребеҙҙең үҫешенә ҡамасауламай йәшәүҙең бөтөнөбөҙ өсөн дә тик файҙа ғына икәнлеген аңлайбыҙ, сөнки Тәбиғәт һәр кешене, бигерәк тә Шәхестәрҙе, үҙ тәғәйенләнеше менән бар иткән. Шәхестәр тарафынан табылған һәр асыштың, һәр яңылыҡтың Кешелек донъяһы өсөн алға китеш, мөһим аҙым икәнлеген аңлайбыҙ, әммә көнсөллөк ғәләмәтен тыя алмай аҡылһыҙлыҡҡа юл ҡуябыҙ. Әйтерһең, донъя тар, әйтерһең, һинең алға китеүең өсөн кемдер ҡамасаулай.

Әгәр һәр беребеҙ башҡаларҙың уңышына көнләшмәй, фәкәт өлгө алып, үҙ аҡылыбыҙҙы, тәжрибәбеҙҙе өҫтәп, башҡаларға ярҙам итмәгән сүрәттә лә ҡамасаулыҡ итмәй, тәбиғи һәләтебеҙҙе үҫтерергә тырышһаҡ, күпме асыштар яһалыр, күпме һәләттәр тәбиғәттән бирелгән аҡылдарын кешелек донъяһы өсөн хеҙмәт иттерә алыр ине.

Тупланған аҡылын йөрәге менән тойған кеше генә үҙ аҡылын үҙе тоторға ынтыла.

Диҡҡәт дуҫтарының уңышына ихлас ҡыуана, ҡулынан килгән тиклем ярҙам итергә тырыша ине. Күп уҡыны. Уҡып туплаған белемен системаға һала барҙы. Уның картотекаһын күргән һәр береһе аптырай торғайны. Фәндең һәр төрлө тармағы буйынса

бүлектәр бар ине унда. Таныштарҙан ҡайһы өлкәлә ғилми эш башлаусы берәй яңылыҡ һорамаһын, уның картотекаһында мәғлүмәт бар ине. Мәскәү дәүләт университетында уҡыған саҡта уҡ туплай башлаған был хазинаны.

Тәбиғәткә ҡарата сикһеҙ һаҡсыл булды. Ял итергә туҡтаған урында бәләкәй генә ҡағыҙ киҫәге лә ҡалдырмай таҙартып китер ине. Балаларыбыҙ ҙа шуға өйрәнгәйне. Бер ваҡыт күмәкләшеп бер ауылға барҙыҡ та эргәләге яланға ял итергә сыҡтыҡ. Ауылдан байтаҡ кешеләр бар ине. Аҙаҡ бәләкәй генә соҡор ҡаҙып, сүп-сарҙы йыйып һала башлағайныҡ, эргәбеҙҙәге ауыл егеттәре аптырап китте. Шуныһы ҡыҙыҡ: ихлас аптыранылар.

– Һеҙ ни эшләйһегеҙ ул? Бер беҙ генә ял итәбеҙме ни?!

– Һәр беребеҙ шулай таҙартып китһә, балаларығыҙ яланаяҡ йөрөр урын тапмай интекмәҫ ине, – тине Зөһрә ҡыҙым, атаһының һүҙҙәрен ҡабатлап. Әле лә тәбиғәткә ялға сыҡҡан балаларым башҡаларҙан ҡалған сүп-сарҙы ла, үҙҙәренекен дә таҙартып китә.

Аҡылдың беренсе билдәһе – үҙ аҡылыңды үҙең тоторға тырышыу, тигәйнек.

Аҡылдың икенсе билдәһе – эске рухи азатлығыңды һаҡлау. Тиңдәр араһында тиң булып йәшәү өсөн иң кәрәкле был рухи ҡиммәтте һаҡламаныңмы – тыш яҡтан ни тиклем генә ялтырама, ниндәй генә бейеклектәргә өлгәшмә – һин рухи ҡол. Башҡаларға һиҙҙермәҫкә тырышһаң да, уны үҙең тояһың, үҙең яфаланаһың, үҙеңде юғалтыу тойғоһо ғүмерең буйы йөрәгеңде иҙәсәк. Күптәр хатта йәшәү мәғәнәһен юғалта.

Рухи азатлыҡ өсөн күпме атай-олатайҙарыбыҙ баш һалған. Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, баш күтәреүсе башҡорттарҙың етәкселәре матди яҡтан етеш, мул йәшәгән, мохтажлыҡ кисермәгән кешеләр булған. Улар фәҡәт матди яҡты ғына уйлап йәшәһә, көтөү-көтөү малын һаҡлап, башҡаларға ярамһаҡланып тик ятырҙар ине. Ярамһаҡланыу, ялағайланыу кеүек сифаттар эске азатлыҡты юғалтыуҙан башлана. Ихтилалға күтәрелеүселәр бындай йәшәүҙең мәғәнәһен тапмағанға рухи азатлыҡҡа ынтылғандар.

Рухи азатлыҡ һаҡлауҙың төп шарты – донъяла үҙ тәғәйенләнешеңде билдәләү һәм таба алыу. Кеше үҙен рухи азат тойһон өсөн, тәбиғи һәләтен, ерҙә үҙ тәғәйенләнешен табып, үҙ көсөнә ышанып, ныҡлы баҫып торорға тейеш. Шул саҡта кеше үҙ эшенең оҫтаһына әйләнә һәм яҡты донъяла йәшәүенән, һәр яҡты көндән, башҡарған эшенән, ғаилә йылылығынан ҡәнәғәтлек кисерә. Үҙен таба алмаған кеше генә ялағайланыу, ярамһаҡланыу юлына баҫа, тинек. Ундайҙарҙың ғүмере башҡаларға хеҙмәт итеүгә арнала. Хатта матди яҡ-

тан тулыһынса тәьмин ителеп, башҡалар алдында күкрәк һуғып маҡтанып йөрөүе лә рухи ҡоллоғон йәшереү, үҙен алдау өсөн генә була.

Ошо урында бер миҫал килтерәйем. Район мәктәптәренең береһендә директор эшен алып бара алмай бер ир кеше. Бының район етәкселәре яҡшы аңлай. Әммә директорлыҡ вазифаһынан бушатмайҙар. Атай-әсәйҙәрҙән, уҡытыусыларҙан, хатта уҡыусыларҙан да ялыу хаттары ағыла. Ошондай ялыуҙарҙың береһе "Совет Башҡортостаны" гәзитенә лә килде. Мин ул саҡта редакцияла хаттар бүлеге хәбәрсеһе инем. Хат юлынан командировкаға сыҡтым. Бөтөн ялыу хаттарының да район Советы башҡарма комитетына ебәрелеүе һәм ни ғиллә менәндер директор сейфына килеп ятыуы, аҙаҡ авторҙарҙан һәм уларҙың балаларынан үс алыу ҡоралына әйләнеүе хаҡында ла яҙылғайны. Был тәртипте кем уйлап сығарғандыр, әммә беҙҙең илдә ялыу тикшереү тәртибе шулай – ҡайһы етәксе өҫтөнән яҙыла – хат шуның ҡуллына тотторола. Беҙҙең редактор "Хат юлға саҡыра" тигән рубрика булдырып, хаттарҙы мотлаҡ хәбәрселәр аша тикшертергә тырыша ине.

Кисләтеп кенә РОНО-ға килдем. Унда минең танышым эшләй ине. Мине үҙҙәренә алып ҡайтты. Үткәндәрҙе иҫкә төшөрөп һөйләшеп ултырҙыҡ. Ниндәй йомош менән килеүем тураһында ғына әйтмәнем.

– Өс йыл мәктәптә эшләнем дә РОНО-ға алдылар. Хәҙер хаҡлы ялға сыҡҡансы ошонда эшләр ҙә ҡуйырмын инде. Район мәктәптәрен биш бармағым кеүек беләм, – тине.

– Районығыҙ ҙур. Бындағы мәктәптәрҙе тотош белеп бөтөү өсөн, әлбиттә, байтаҡ эшләргә кәрәк.

– Беҙҙең районда беренсе тапҡыр булыуың шикелле.

– Бер тапҡыр Н. ауылында осрашыуҙа булғайным, яҙыусы сифатында, – тинем. – Унда һаман да шул уҡ директормы?

– Районда иң ҙур стажлы директорыбыҙ ул. Йылан аяғы киҫкән, тиҙәр ундайҙарҙы. РОНО мөдирҙәре алмашына, райком етәкселәре алмашына, ә директор һаман үҙ урынында. Күпме яҙалар уның өҫтөнән. Пенсияға сыҡҡас та эшләтерҙәр әле. Район етәкселәренә бик кәрәк кеше ул.

– Ни эшләп?

– Уны һөйләһәң, бер кем ышанмаҫ. Әкиәт кеүек. Шул тиклем оҫта алып бара эште – бүреһе лә туҡ, һарығы ла теүәл. Бер йылы мәктәп баҡсаларын тикшереү комиссияһы менән миңә лә барырға тура килде Н. ауылы мәктәбенә. Иҫ китмәле тәртип уларҙың баҡсаһында. Ҡайһы класс тәрбиәләй, етәксеһе кем, ҡайһы культуранан

күпме уңыш алынған һәм аласаҡтар – тотош ҡына яҙылған. Иң юғары уңыш – һәр ваҡыт уларҙа. Уҡыусыларҙы ҡыш буйы ашатырлыҡ йәшелсә, картуф, емеш-еләк ҡайнатмаһы – үҙҙәренеке. Маҡтарлыҡмы? Әлбиттә. Август конференцияһында маҡтала, өлгө итеп ҡуйыла. Баҡһаң, мәктәп участкалары уҡытыусыларға бүлеп бирелгән. Уҡытыусылар уҡыусылар менән үҙ участкаларында "тәжрибә үткәрә". Аҙаҡ, уңышын йыйып алғас, мәктәпкә өлөш сығаралар. Ҡайнатма әҙерләп бирәләр. Ә уҡыусылар эшләрлек мәктәп участкаһы бөтөнләй юҡ. Мәктәп картуфлығы юҡ. Көҙ еткәс, атай-әсәйҙәрҙән йыйып алалар. Директор уларға ошондай шарт ҡуя: йә йәйҙең оҙон көндәрендә балағыҙҙы мәктәптә эшләтәһегеҙ, йә үҙегеҙҙән өлөш сығараһығыҙ. Уттай эш ваҡытында, йәйҙең бер көнө ҡышты туйҙыра тигән мәлдә, кем балаһын көн оҙайына мәктәпкә ебәрһен? Әлбиттә, рәхмәт әйтә-әйтә икенсе шартҡа күнәләр. Ә картуфтың иң эреһен, иң матурын һайлап килтерәләр. Комиссияның күҙен ҡыҙҙырырлығы, йөҙ ҡыҙармаҫлығы килә мәктәп баҙына.

– Уҡытыу-тәрбиә эше нисек бара һуң?

– Мәктәп эшен һандар менән тикшерәбеҙ бит. Һандар иҫ китмәле! Ялыу туҡтауһыҙ ағыла. Хатта бер йылы Мәскәүгә лә яҙғандар. Был хат йөкмәткеһен уҡытыусылар коллективында тикшергәндәр ҙә… Аҙаҡ инде директор хат авторын саҡыртып һөйләшкән. Күл тәрән булһа ла ала ҡаҙҙың түшенән, ти бит халыҡ.

– Урындағы етәкселәр береһе лә ялыу йөкмәткеһе менән ҡыҙыҡһынмаймы һуң?

– Кемгә кәрәк уның йөкмәткеһе? Уларға директорҙың эше лә кәрәкмәй. Башы булһа, бала уҡый ул, тиҙәр. Уларға директор үҙе кәрәк.

– Берәйһенең берәйһеме әллә?

– Бөтәһенең дә берәйһе.

Минең ҡулдағы хатта ла уҡытыу-тәрбиә эшенең түбән кимәлдә булыуы, тәрбиә эшенең фәкәт директор бүлмәһенә индереп ҡолаҡ бороу менән ҡурҡытыуҙан ғибәрәт булыуы, уҡытыусыларҙың дәреслектәге материал менән генә сикләнеүе, өҫтәлмә бер ниндәй мәғлүмәттәр менән ҡыҙыҡһындырмауҙары, күргәҙмәлелекте асыҡ дәрестәрҙә генә ҡулланыуҙары, коллективта эсеп йөрөүсе уҡытыусыларҙың да булыуы, уҡытыусылар коллективының, нигеҙҙә, директорҙың туғандарынан ғына тороуы, бер нисә предметты, география, химия, физкультура, математиканы бер үк уҡытыусы алып барыуы һәм башҡалар хаҡында яҙылғайны.

Һөйләшеүҙең үҙенән-үҙе был хат йөкмәткеһенә асыҡлыҡ

индереүе мине шатландырҙы.

– Нисек инде бөтәһенең дә берәйһе?

– Ул – бик һәйбәт һунарсы. Район етәкселәренә кәрәк саҡта, директорҙың өйөнә килеп, ҡайһы түрәгә ниндәй һый кәрәк, шундай тирене һайлап алып китәләр.

– Боронғо башҡортса инде. Яһаҡ түләйҙәр.

– Эйе. Ул директор үҙе химик. Тирене шул тиклем һәйбәт эшкәртә – береһе лә битараф ҡалмайҙыр. Тиреләре йылҡылдап, күҙ яуын алып тора. Түрә ҡатындары күреү менән аҡылдан шашырлыҡ. Ул директорҙың атай-олатайҙары һунарсы булған, тирәяҡҡа дан алғандар. Кем белә, бәлки шул боронғо ҡаһаҡ түләү өсөн тире эшкәрткәндәрҙер. Бәләкәйҙән үк һунарға сос, тире эшкәртеүгә маһир булғандыр үҙе лә.

РОНО инспекторының һөйләүенә ҡарағанда, һунарсылыҡҡа һәләтле был директор ҡандан күсә килгән оҫталығын заманса камиллаштыра, тире эшкәртеүҙә химияның иң һуңғы ҡаҙаныштарын файҙалана икән.

Миңә был кеше шул тиклем йәл булып китте. Әгәр ул ошо оҫталығын, ошо йүнәлештәге белемен камиллаштырһа, оҫталығын бөтөн донъяға танытырлыҡ кимәлгә еткерер ине, бәлки. Боронғо заманда үк атай-олатайҙарынан ҡалған, тәбиғәттән ҡанына һалынған был һәләтте бәләкәй генә маҡсатҡа хеҙмәт иттереүе йәл ине. "Яҙығыҙ әйҙә, мине бер кем дә урынымдан ала алмай, йәшәй беләм", – тип, кәперәйеүе, рухи ҡол кимәлендә булыуы, буш-юҡҡа ҡупырайыуы кемгә файҙа килтерә? Беренсенән, ул үҙ урынында түгел, әлеге вазифаһын йүнләп алып бара алмай, уның уйында фәҡәт һунар ғына. Эшен алып бара алмағанлыҡтан, башҡаларҙан рәнйеш йыя, йәшәүенең ҡото кәмей. Изге теләктәр ҙә, рәнйеш тә юҡҡа сыҡмай. Икенсенән, быуаттарҙан-быуаттарға күсә килгән һәләтте юҡҡа сығара. Үҙен юғалтҡан, асылын таба алмаған.

Командировкаға барып ҡына тикшереп бөтөрлөк ялыу түгел ине был. Хатта яҙылған бөтөнөһө лә дөрөҫ ине, әммә йомғаҡ ебенең осо түрәләргә барып тоташҡанлыҡтан, сейәлтмәй генә һүтеү өсөн икенсе төрлөрәк тикшереү кәрәк ине. Мин редакторға быны аңлаттым һәм хатты Мәғариф министрлығына тапшырҙыҡ. Аҙаҡ ауылға барып, директорҙың үҙе менән һәүетемсә генә һөйләшеп, артабанғы уй-маҡсаты тураһында һораштым. Ул: "Берәй исем алырға ла һыпыртырға ине ауылдан. Өфөгә китергә кәрәк. Хәҙер йәш тә байтаҡ инде. Ялҡтым был эштән. Кеше балаһын кеше итәм тип, яманатлы булып бөттөм, ишетмәгән һүҙ ҡалманы", – тине. Йылдар үткәс – ҡыҙыҡһынғайным: директорға атҡаҙанған исем

бирелгәнлеген ишеттем. Ғәжәп түгел. Ҡайһы саҡта ғына түгел, күп осраҡта юғары исемдәр кешенең эшенә ҡарап түгел, үҙенә ҡарап бирелә. Эшләй белмәгәндәр үҙҙәрен күрһәтә белә. Әммә тәбиғәттең беҙ белеп етмәгән сере бар: намыҫы таҙа булмағандар түштәренә ниндәй генә ялтырауыҡ таҡмаһындар, ниндәй генә түрҙә ултырмаһындар, эске ҡәнәғәтлек менән йәшәмәйҙәр. Нәҫелдән-нәҫелгә ниндәйҙер ҡара нур күсә бара һәм ул кешене эстән "кимерә".

Шуның өсөн, аҡыллы кеше үҙе алып бара алмаған эшкә ынтылмай, күпселектең үҙенә ҡарата ризаһыҙлығын һиҙә башлау менән, үҙ яҙмышын үҙе хәл итә. Ҡара нур йыйыу "берәмегенә" әйләнмәй.

Директор йәл ине. Ул бынамын тигән талантты юғалтҡан, нәҫел, халыҡ байлығын юғалтҡан. Тәбиғәт биргән маһирлыҡты ысын ижадҡа әйләндерә алмаған, бәләкәй генә вазифа ҡоло булып ҡалған.

Етәксе булыу үҙе бер һәләт. Ул да тәбиғәттән һалына. Тыумыштан бындай һәләте булған кеше даими камиллаша, үҙ өҫтөндә ныҡ эшләй. Кешене күҙәтә, үҙен төҙәтә. Ил тормошонда яҡты эҙ ҡалдыра. Ә етәкселеккә осраҡлы ултырғандар фәҡәт ярамһаҡланыу, ҡулайлашыу яғын ҡарай. Улар һарыҡ янында – бүре, бүре янында һарыҡ сүрәтенә инә. Таланттарға ҡамасаулай, көнләшә, аяҡ сала. Бының менән хатта ил үҫешенә ҙур зыян килтерә.

Эске азатлыҡ ғаилә баҡҡанда ла бик мөһим. Әгәр ир менән ҡатын рухи үҫеш яғынан бер кимәлдә булмаһа, ғаилә йә тарҡала, йә, ғаиләне һаҡлау маҡсатында, береһе икенсеһенең ҡолона әйләнә. Ә ысын аҡыллы хәл итеү – үҙеңде раҫлау өсөн дөрөҫ юл табыуҙа, үҙ ғүмереңде арнаған, үҙеңде дауам итер ғаиләңдең күңел йыуанысына әйләнеүҙә. Үҙең өсөн дә, ғаилә өсөн дә.

Шағир Рәми Ғариповтың ҡатыны Надежда Васильевна, украин ҡыҙы, урта мәктәпте тамамлаған эшсе ҡыҙ. Уларҙы китап яҡынайта. Надя китап уҡырға ярата. Ғаилә ҡорғас та, Рәми тәҡдим иткән китаптарҙы уҡый, башҡортса өйрәнә, Рәми кимәленә ынтыла, уның донъяға ҡарашын, ижадын, ынтылышын, маҡсатын аңларға тырыша. Рәми ҙә яҙған шиғырҙарын иң элек уға уҡый, уның менән кәңәшләшә, уның фекерҙәренә ҡолаҡ һала. Рәми вафат булғас, Надя бөтөн архивын тәртипкә килтерә. Бәләкәй генә ҡағыҙ киҫәгендәге осраҡлы яҙмаларына тиклем тәҫләп, ипкә килтерә, ҡалын-ҡалын өс томлыҡ әҙерләп, нәшер итеү кимәленә еткерә. Шағирға үлгәндән һуң Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән исем бирелгән икән, бында Надяның өлөшө бик ҙур. Уның хеҙмәтен күрмәү, тейешенсә баһаламау, иренең ижадына мөкиббән китеүен аңламау хилаф булыр. Ошо тырышлығы, иренә тиң булырға ынтылыуы, уны аңлауы Надяның эске азатлығын булдыра. Ирен аңларға тырыша, аңлай.



Атайым менән әсәйем



Салауат абзыйым, Нәсимә һылыуым, Мәрфуға апайым һәм мин (*1963 йыл*)



Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған йыл (*1965*)



Беҙҙең никах (*1966 йыл*).
Шаһиттарыбыҙ: Надя менән Рәми Ғариповтар һәм бикәсем Венера



Беҙҙең ғаилә (*1978 йыл*)



2005 йыл



Диккәт
Бураҡаев
(*1979 йыл*)



Балаларым менән (*1982 йыл*)



Зәйнәб Биишева менән Оло Эйек буйында



Балаларым, ейән-ейәнсәрҙәрем, киленем, кейәүем менән
(*2005 йыл*)



Беҙ БДУ-ны тамамлағас, һәр биш йыл һайын осрашып торабыҙ (*1985 йыл*)



Мәрйәм Бураҡаева ғаиләһе менән (*2015 йыл*)

Шуның өсөн дә Рәмиҙең таланттарға хас булған буйһонмаҫ ярһыу йөрәген дә, ҡатмарлы холҡон да, тормоштағы аңлашылмаусанлыҡты ла аңлап үткәрергә тырыша. Шағир намыҫын яҡлап, нахаҡҡа рәнйетелеүен иҫбат итергә тырышып, партия Өлкә комитетының идеология буйынса секретарында бер нисә тапҡыр ҡабул итеүҙә була. Байтаҡ мәсьәләләрҙе ыңғай хәл итеүгә өлгәшә. Бының өсөн үҙе сикһеҙ шатлана. Рәми тураһында иҫтәлектәр китабын әҙерләй. Надя өсөн Рәми үлмәй.

Тағы бер миҫал. Бер ғалимә ҡатын мине өйөнә саҡырҙы. "Һин аңларһың, башҡа берәүгә лә һөйләй алмайым, барыбер ышанмаҫтар," – тип уйлайым, тине. Ысынлап та, әҙәм ышанмаҫлыҡ "яңылыҡ" менән аптыратты ул мине.

– Бер көнө ирем аҙ ғына эсеп ҡайтҡан да ғүмере ҡул күтәрмәгәнен типте лә йыҡтысы... Абайламай ҙа ҡалдым. Тупаҫ шаярыуҙыр, яңылыштыр, тип, ҡатырғанып өндәшмәгәйнем, бер ваҡыт типкеләй башламаһынмы! Ғүмерҙә булған хәл түгел. Йә инде, профессор дәрәжәһенә күтәрел дә ябай бер инженерҙан кәмһетелеп, тукмалып тор, имеш.

– Ҡунаҡта булғайнығыҙмы? Көнләшкәндер, бәлки?

– Ҡунаҡта булғайныҡ. Әммә ул көнләшерлек бер ни ҙә эшләмәнем. Минең ят ирҙәргә ҡарарға ваҡытым да, теләгем дә юҡ. Әлбиттә, ҡунаҡта йырланым. Мине маҡтанылар. Әммә мин ул маҡтауҙарҙы минең оҫта башҡарыуым өсөн түгел, ә вазифам өсөн икәнлеген аңлайым. Бөгөн эш урынымды юғалтһам, иртәгә шул йыр өсөн бер маҡтау ҙа ишетмәҫемде лә аңлайым.

– Маҡтауға һин лайыҡ. Вазифа кешене биҙәмәй, кеше үҙе вазифаһын биҙәй. Әлбиттә, һин хаҡлы, вазифаң өсөн генә маҡтаусылар ҙа, ҡунаҡҡа саҡырыусылар ҙа барҙыр. Иреңдең көнләшеүе лә вазифаң юғарылығы арҡаһында түгелме икән? Һин дәрәжәң, белемең, вазифаң менән унан юғарыһың. Ошоно күреп ҡайтҡан ул ҡунаҡтан һәм үҙенең дә өҫтөнлөгөн күрһәтергә уйлаған: ҡул күтәргән. Аҙаҡ "аһ" итеп ҡалғандыр. Рәнйетергә уйламағандыр ҙа... Терһәк тешләр кимәлгә етеп үкенәлер әле, моғайын?

– Үкенгәнен тойоп торам мин уның. Тик топ-тоҡандан ҡул күтәреүен аңлай алмай инем.

– Һин һаман үҫәһең, камиллашаһың. Әле бына машина йөрөтөргә өйрәнеп алдың... Өйрәнеп ҡуйыуың насар түгел, әлбиттә. Һөнәрҙең артығы юҡ. Әммә һис юғы ошо яҡтан ир ярҙамына мохтаж икәнлегеңде күрһәтер кәрәк ине. Уның ир булып ҡалғыһы, ни яҡтандыр өҫтөнлөгөн күрһәткеһе килә. Ҡатын-ҡыҙҙан өҫтөн булыу ирҙәрҙең ҡанында бар. Һауаланыу, мин тип күкрәк ҡағыу өсөн

түгел, ә үҙҙәренә ҡарағанда ҡайтышыраҡ-көсһөҙөрәк кешегә, уның ярҙамына мохтаж булыусыларға ярҙам ҡулы һуҙыу – улар өсөн мәртәбә. Ә һин хәҙер уның кәңәшенә түгел, хатта физик яҡтан да ярҙамына мохтажлығың юҡ икәнлекте күрһәтә башланың. Хәҙер йоҙроҡ ярҙамында өҫтөнлөгөн иҫбат итеүҙе ғәҙәт итеп алыуы йәки уның ярҙамына мохтаж ҡатын эҙләп сығып китеүе лә ихтимал.

– Ул да уҡыһын, үҫһен. Уға бер кем дә ҡамасауламай.

– Әлбиттә, шулай. Мин уны яҡлап та, аҡлап та әйтмәйем. Ҡул күтәреүенең сәбәбенә төшөнөргә, төшөндөрөргә тырышам. Был, әлбиттә, уны матурламай. Ирлек тә, аҡыл да түгел. Өҫтөнлөк күрһәтеүҙең был ысулы һинең күҙ алдында уны төшөрә генә.

– Мин ни эшләргә тейеш?

– Әгәр ул үҫергә, камиллашырға, ҡыҫҡаһы, һинән ҡалышмауын йәки хатта өҫтөнөрәк икәнлеген башҡа юлдар менән күрһәтергә теләмәй икән – үҙең тап. Ғаиләңде һаҡлау, балаларыңды атай менән үҫтереү өсөн башҡа сара юҡтыр. Иреңдә үҙен кәм тойоу сире башланған. Ул сирҙе һин генә дауалай алаһың. Ғаиләлә ир ҙә, ҡатын да бер-береһенән кәм дә, артыҡ та булырға тейеш түгел. Үҙеңдә кәм тойоу үс алыуға, яуызлыҡ туплауға килтерә. Ниндәй булһа ла мәсьәләлә уны өҫтөн ҡуй. Һораш, кәңәшләш, белһәң дә – кәңәшләш, ярҙам һора, унан өйрән, үҙең хәл итеп ҡуйһаң да, кәңәшләшеп ал.

– Алдайыммы? Ҡыланайыммы?

– Ҡыланма. Ысын шулай ит. Моғайын, һин белмәгән – ул ғына белгән төшөнсәләр барҙыр. Машина йөрөтөү буйынса уның тәжрибә һинекенән күп. Ғаилә икән – ғаилә булһын. Быға са татыу йәшәнегеҙ бит. Белемең артҡан һайын, аҡылың да арта барһын. Һинең вазифаң да, белемең дә эш өсөн бит, ғаиләлә үҙгәреш булмаһындыр, тип уйлайым. Башҡаларға биргән аҡылыңды, үҙең дә тот.

Тағы бер хәҡиҡәтте иҫеңдә тот: һәр кеше үҙе өсөн Мин. Кешене аңлайым тиһәң, үҙеңде уның урынына ҡуйып ҡара.

Аҡыл – туплана торған төшөнсә тинек. Тормошоңда икеләнгән, аптыранған саҡтарыңда, һорауҙарыңа яуап табыу өсөн, халыҡ аҡылына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Халыҡ ижадында ғәжәп бай аҡыл тупланған. Тормоштағы бик күп һорауҙарға унан яуап табып була. Мин был ғалимә ҡатынға "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре"н бүләк иттем һәм ир менән ҡатын мөнәсәбәттәренә ҡағылған бик күп мәҡәлдәр аҫтына һыҙып ҡуйҙым.

Рус мәктәбен тамамлаған, халҡыбыҙ ижадына әллә ни иғтибар бирмәгән был ғалимә ҡатын, мәҡәлдәрҙе уҡып сыҡҡас:

– Иҫ китмәле китап бүләк иттең миңә! Ҡолас етмәҫлек байлыҡ. Был бит – аҡыл тупланмаһы. Мин дә күп итеп алып ҡуям да дуҫтарымдың тыуған көндәренә бүләк итәйем әле, – тип уй-ниәтен уртаҡлашты.

Икеһе лә ғәзиз йән

"Совет Башҡортостаны" гәзите редакцияһының хаттар бүлегендә хәбәрсе булып эшләгән саҡта, ялыуҙар буйынса байтаҡ ҡына йөрөлдө. Шундай хаттарҙың береһендә алыҫ райондарҙың бер совхозы тураһында яҙылғайны. Хат көтөүлектәрҙең наҡыҫ булыуы, ерҙең тотош һөрөп бөтөрлөүе хаҡында ине. Мин совхозға килгән саҡта, яңы директор эш башлағайны. Хат йөкмәткеһе менән танышып сыҡҡас, директор үҙенең яуабы менән ныҡ аптыратты. "Дөрөҫ яҙылған, – тине ул. – Ауыл осондағы өйҙәрҙең кәртәләүен ҡырлатып һөрөп сыҡҡандар бит хатта. Әйтерһең, кеше ашау менән генә йәшәй!" Аптырауымдың ғилләһе шунда: етәкселәр, ғәҙәттә, хаттың авторына иғтибар йүнәлтәләр ҙә, уның тетмәһен тетә башлай торғайнылар.

– Сәсеүлек майҙанын киңәйтеп түгел, тупраҡты һәйбәтләп ашлап арттырырға кәрәк тә бит уңышты... Сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәр тип тә, һаҙлыҡтарҙы киптереп тә бер булалар инде, ерҙе әрәмләп. Ана, ауыл осонда һаҙлыҡ киптергәндәр, хәҙер күрһәтермен. Бер нимәгә эшкинмәй ята хәҙер. Быуа быуҙырырға уйлайым унда. Ә мин малай саҡта унда бик матур ҡамышлыҡ, күрән ине. Ҡоролоҡ йылдары күрән сабып алалар ине. Ә күл йыуаһы ниндәй ине! Тирәяҡта дым һаҡлап, дым тотоп ятҡан һаҙлыҡ булған ул. Илле алтынсы йылдарҙа эшләгән совхоз директоры уны һөрҙөртөп, аҡтартып ташлаған. Шуныһы ҡыҙыҡ, директорға "Сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәр эшкәрткәне өсөн" миҙалы биргәндәр. Мин быға саса ошо совхозда агроном булып эшләнем. Һаҙлыҡтарҙы киптереүгә ҡаршы сығып ҡараным – ҡайҙа ул! План бирелгән икән етәкселәргә. Ҡалдау ерҙәрҙе аҡтарғас, тирә-яҡтағы боронда ҡалған ултыртма урмандар ҡороно. Хәҙер бына ағас ултыртып ҡарайбыҙ – ҡорой ҙа ҡуя. Борон рәтен белгәндәр. Һаҙлыҡ яҡын тирәнән башлап ултыртҡандар, күрәһең. Шулай яйлап-яйлап киңәйтә барғандарҙыр. Далала ағас үҫтереү – үҙе бер ғилем бит. Фән уны өйрәнеп етмәгән, ә халыҡ белгестәренең баштары Себерҙә ятып ҡалды. Нисә йылдар беҙ, халыҡ тәжрибәһен иҫәпкә алмай, уны "ҡара наҙанлыҡ" тип, кирегә эшләйбеҙ. Тиҙ генә ыңғайға һалып алып булмаҫ әле. Быйыл йыл ҡоро

килә. Һыйырҙар моронда ры менән ер соҡоп, үлән тамыры йолҡа. Туҙанға батып, күҙҙәренән йәш ағып ҡайталар көтөүҙән. Ҡарап тороуы йәл... Был тиклем булғаны юҡ ине әле. Сиҙәм аҡтарыу планын үтәйбеҙ тип, ер ҡыртышын әйләндереп һалып, киптерҙеләр ҙә баҫыуҙарҙан ҡоро туҙан оса.

Директор тотош сәсеүлектәрҙе, ҡара тупрағы әйләнеп кибеп бөткән "сиҙәм эшкәртелгән" ташландыҡ ерҙәрҙе күрһәтеп сыҡты, совхоздың хәле тураһында йәне әсеп һөйләне. Ҡайтыуыбыҙға ашхана ябылғайны. Директор мине үҙҙәренә саҡырҙы.

Алып ҡайтты ла... үҙенең "ҡунаҡсыллығы" өсөн үкенгәндер ҙә... Өйҙә "буран уйнай" ине. Баҡһаң, ҡатыны, уҡытыусы, эштән ҡайтҡан саҡта, һауыт-һаба йыуылмаған булған. Йәш бала ҡараған ҡәйнәһе, директорҙың әсәһе, бала бөгөн ныҡ көйһөҙләнде, ҡул бушаманы, ти икән. Тауыш ҡупҡан. Беҙ килгән саҡта, ҡәйнә илаған, ҡатын да ҡыҙарынып-бүртенеп бөткәйне.

Совхоздың ауыр хәле, ауыл хужалығы өлкәһендәге хаталар тураһында уйланып, әсенеп һөйләп, халыҡ яҙмышын хәстәрләп ҙур-ҙур пландар ҡороп, уй-фекерҙәре менән уртаҡлашып ҡайтып килгән оло йөрәкле, егәрле етәксе әле килеп өйөндә һауыт-һаба йыуыу мәсьәләһенә ҡағылған ыҙғышты хәл итергә тейеш ине. Ҡатын-ҡыҙ өсөн һауыт-һаба йыуыу көн һайын иртән ҡул-бит йыуыу менән бер. Шул арҡала килен менән ҡәйнә араһында ыҙғыш сығыу икеһен дә биҙәмәй ине, әлбиттә. Әммә бит, нисек кенә булмаһын, ир кешенең бер йөрәгенә йыйыла. Эш өсөн – айырым, көнкүреш ығы-зығыһы өсөн айырым ҡан тамырҙары юҡ. **Ирҙәр йөрәген көнкүреш ығы-зығыһы нығыраҡ ашай.** Өҫтәүенә, уларҙың икеһе лә ир кешегә ғәзиз, икеһе лә яҡын, береһенә лә ауыр һүҙ әйтә алмай. Ә ҡатындар үҙҙәренең тойғоһона баш булып, береһе – өлкәнләтә, икенсеһе – кесерәк булып, тойғоларына аҡылды баш итеп, ир урынына үҙҙәрен ҡуйып ҡарауҙы баштарына ла килтермәй. Ир ике ут араһында. Әсәһе менән ҡатыны үҙ-ара килешеп, алтын урталыҡ табып йәшәргә тейеш тә бит...

Аҡыл – хис-тойғоларға, дыуамаллыҡҡа, яндырайлыҡҡа өҫтөнлөк бирмәй, һалҡын ҡанлылыҡ менән уйлап эш итеү, алтын урталыҡ таба белеү, төймәләй аңлашылмаусанлыҡты дөйәләй ыҙғышҡа әйләндермәү...

Редакцияға килгән хаттар араһында ғаиләлә, бигерәк тә ҡәйнә менән килен мөнәсәбәтенә ҡағылғандары байтаҡ була торғайны. Эш тураһында, хеҙмәт урынындағы йәки етәкселәр менән булған мөнәсәбәт хаҡындағыһын тикшереп тә, тикшерергә ебәреп тә хәл итергә мөмкин. Ә бына кешеләр араһындағы мөнәсәбәткә ҡағыл-

ғандары күпкә ҡатмарлы. Бер саҡ ошондай хат килде. "...Ҡәйнәмдәр менән бергә йәшәйбеҙ. Уның иң яратмағаны, иң күрәлмағаны – минмен. Иремә нимәләр генә тип ошаҡламай. Ҡайным һәйбәт, ә ҡайһы саҡта уға ла теләһә нимәләр һөйләп, миңә ҡарата мөнәсәбәтен үҙгәртеп ҡуя. Башҡа ғына сығып китер инек, минең ирем – кесе улдары. Уларҙы беҙ ҡарарға тейешбеҙ. Өҫтәүенә, ҡайным ауырыу. Мунса индереү, урамға алып сығыу, тышҡа сығарыу мәшәкәттәрен улы башҡара. Ҡәйнәм үҙе беҙһеҙ аҙ ғына ла йәшәй алмай. Тик ни теләгәнен дә аңлап булмай..."

Хат буйынса киттек. Диҡҡәттең дә ул районда йомошо бар ине. Бергә юлландыҡ. Төш ауғас ҡына килеп еттек ауылға.

...Әммә ауылға ауыр ҡайғы килгәйне. Хат авторының ирен һуңғы юлға оҙаталар ине. Ғаиләләге сираттағы ыҙғыш ваҡытында сыҡҡан ла аҫылынған. Редакциянан икәнлегемде өндәшмәй генә ауылдаштарынан, күрше-күләндән ипле генә итеп һорашып, түбәндәгеләрҙе белдем.

...Килен кеше балалар йортонда тәрбиәләнгән. Холҡо һәйбәт, ипле, тыныс. Илгәҙәк. Ире бик яратҡан үҙен. Сәкәрләшкән булып, гел генә бергәләшеп, күгәрсендәр кеүек гөрләшеп йәшәгәндәр. Изән йыуһа ла, кер йыуһа ла ире ярҙамлашҡан. Килен ирҙең ата-һын да, әсәһен дә ҡарағас, өлгөрә алмай киткән саҡтары ла булғандыр. Ҡәйнәнең түҙеме етмәгәндер, улының гел ярҙам итешеүенә лә ризаһыҙлыҡ белдергәндер, уға оҡшамағандыр... "Ҡатынша. Ир башың менән иңеңә көйәнтә һалып... Оялмай. Әҙәмдән оял. Ҡулыңды ҡамырға ла тығырһың әле, тартынмай... Уны белгәндә, бәләкәйҙән туҡмас йәйеп өйрәтер инем,.." – тип әрләгән улын.

Барып күрҙем ата-әсәһен дә, киленде лә.

– Редакцияға хат яҙғанымды почтальон апай әйткән дә, өйҙә оло ғауға сыҡты. Ҡайным үҙе ауырыу, үҙе йыуаш. Яҡлап маташты ул мине... Ҡәйнәм гел генә кәмһетте. Әйтерһең, мин үҙем теләп етем ҡалғанмын... Өлөкөгөн дә сығырынан сыҡты. Шулай ҙа ни тиһә лә өндәшмәҫкә, түҙергә тырыштым. Иремә ҡарайым да, башын һәлендереп кенә ултырғанын күреп, йәлләйем. Уға ҡыйын бит, тип уйлайым. Тик минең дә түҙемем бөттө. Ҡәйнәм: "Өйһөҙ кәнтәй", – тигәс, илап ебәрҙем. Шунан ирем сығып китте. Мин тәмәке тартырға ғына сыға икән, тип уйланым. Ҡамыр баҫа инем, эшем булғас, бер юлы тамамлап ҡуяйым, тип йөрөгән булдым... Күрәсәктәре булғандыр инде... Бер ваҡыт йөрәгемдә ниҙер ҡылт итеп өҙөлөп төшкәндәй булды ла йүгереп артынан сыҡтым. Һуң ине... Гел ике ут араһында ҡала торғайны... Ике ут тиһәм дә мин өлкәндәргә бер һүҙ ҙә ҡаршы әйтмәнем, түҙҙем ул... Барыбер хәлемде аңлағандыр.

Миңә бер ауыр һүҙ ҙә әйтмәне. Тыныслandыра, рәхмәт әйтә торғайны.

Маҡсаты нимә булған әсә кешенең? Балаһының бәхетен теләмәгәнме ул? Улының бәхетле икәнлеген күргәс, ни эшләп ваҡ-төйәккә тауыш сығарған? Һәр Әсәнең төп маҡсаты – балаһының бәхетле булыуы. Ә бала үҙ бәхетен нисек аңлай – уныһы шәхси эше. Бәхетте минеңсә аңламайһың, үҙеңдең бәхетһеҙ икәнлегеңде күрмәйһең, тип битәрләү бөтөнләй дөрөҫ түгел. Ҡатынына ярҙам итеүҙе, иңенә көйәнтә һалыуҙы улының бәхетһеҙлеге тип һанаған әсә. Ә улы яратҡан кәләшенә ярҙам ҡулы һуҙа, уның эшен еңеләйтә алыуына ҡыуанғандыр. Бәлки, ғөмүмән, йорт эштәрен ирҙәр эше, ҡатын-ҡыҙ эше, тип бүлмәгәндер.

Беҙ үҙ булмышыбыҙға – үҙ күҙебеҙ менән, кеше булмышына кеше күҙе менән ҡарарға тейешбеҙ. Ҡайһы саҡта үҙ булмышыңа кеше күҙенән ҡарап баһа биреү ярап ҡала, әммә кеше булмышына үҙ ҡарашыңдан сығып баһа бирep ҡыҫылырға ярамай. Үҙеңде кеше урынына ҡуйып ҡарау ғына ыңғай хәл ителешкә ярҙам була.

Әгәр беҙҙең һәр беребеҙ хатаны иң элек үҙенән эҙләп, үҙ тәрбиә менән шөғөлләнеүгә баш борһа, тормошта алтын урталыҡ табып өйрәнһә, үҙе өсөн дә, халыҡ өсөн дә ҙур мәртәбә булыр һәм халыҡ сифат яғынан яҡшыра барыр ине. Ул саҡта башҡорт халҡы аҡыл менән хәл итә торған боронғо сифатын ҡайтарыр, заман талаптарын да лайыҡлы үҙләштерер һәм йәшәйештең хәл иткес арауығын хәүефһеҙ үтер инек.

Сәйәсәттә "алтын урталыҡ" табыу бик мөһим

Республикабыҙ яҙмышында барған хәл иткес ҡатмарлы осорҙа "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәгендә эшләргә тура килде, тигәйнем. Ошо йылдарҙа сәйәсәттә "алтын урталыҡ" таба белеүҙең ни тиклем мөһим икәнлеген аңланым. Үҙәк исеменән ниндәй ҙә булһа ҡарар ҡабул итер алдан әллә күпме осрашыуҙар үткәрелә, әңгәмәләр ҡора, төрлө фекерҙәр тыңлай торғайныҡ. Ә 1990 йылдың 12 июнендә Рәсәй Федерацияһының дәүләт суверенлығы тураһында Декларацияһы ҡабул ителгәс, Башҡортостандың милли үҙенсәлеген, дәүләт үҙаллылығын яҡлап сығыш яһаусы, тос һүҙ әйтеүсе иң абруйлы ижтимағи ойошмаларҙың береһе – "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәге булды. "Урал" үҙәгенең фекеренә халыҡ та, республика етәкселеге лә ҡолаҡ һала ине. Шуның өсөн үҙәк исеменән әйтелгән фекер уйланылған аҡыллы булырға тейеш ине. Ә аҡыллы фекер әйтеү өсөн,

әйтеп үтеүемсә, төрлө фекерҙәр туплары hәм "алтын урталыҡ"та туҡтарға кәрәк була торғайны.

Ошондай уҡ бурыс, әлбиттә, хөкүмәт етәкселеге алдында ла, депутаттарҙа ла торғандыр. Сөнки осрашып һөйләшеүҙәр, фекер алышыуҙар йыш була торғайны һәм беҙҙең үҙәк кемде генә саҡырһа ла береһе лә баш тартмай – килә ине. "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәге етәкселеген дә һәр төрлө ултырыштарҙан ҡалдырманылар.

БАССР Министрҙар Советы Рәйесе урынбаҫары Мансур Әнүәр улы Әйүпов республикабыҙҙың артабанғы статусы тураһында фекер алышырға милли ойошмалар етәкселәрен саҡырҙы. Беҙ алдан уҡ ныҡлы әҙерлек алып барҙыҡ. "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәге идараһының киңәйтелгән ултырышын йыйып, фекерҙәр алыштыҡ, урындағы ойошмаларҙың тәҡдимдәре менән таныштыҡ һәм Яҙыусылар союзы бинаһында депутаттар Ишморат Абайдуллин, Ризуан Хәжиев, Марат Аҙнабаев, Михаил Бугераны саҡырып, яҙыусылар менән берлектә фекер алышыу үткәрҙек. Суверенлыҡ өсөн барған көрәштә ниндәй фекерҙәр булғанын, ниндәй уй-фекерҙәр әйтелгәнен белеү өсөн ҡайһы бер сығыштарҙан өҙөктәр килтерәм.

Шағир һәм ғалим Ғилемдар Рамазанов. Башҡорттар беренсе булып автономия яуланы. Әммә әле яҡуттар, комиҙар, татарҙар үҙ суверенлығын иғлан итһә лә, беҙ һаман хәл итә алмайбыҙ. Яҙыусылар республиканың суверенлы булыуына икеләнмәй ҙә. Әммә мин ҡайһы берәүҙәрҙең һәм хатта күпселектең "Башҡортостан – иң күп михнәт күргән республика" тип һәр саҡ баҫым яһауҙары менән риза түгелмен. Ни эшләп меҫкенләнергә Беҙгә мәҙәниәтебеҙҙе күтәрергә, телебеҙҙе үҫтерергә кәрәк. Яҡуттар үҙ республикаһында ун ете генә процент, ә башҡорттар – егерме ике. Эш милләттең һанында түгел, ә йөрәгендә. Хөрмәтле депутат иптәштәр! Суверенлыҡты ныҡышмалы рәүештә талап итегеҙ.

Драматург Нәжиб Асанбаев. Беҙ суверенлы республика булырға тейешбеҙ. Башҡортостан хатта айырым дәүләт тә була ала. Уның үҙ армияһы булыуы ла мөмкин. 1812 йылда рус армияһы менән бер рәттән башҡорт армияһы ла булған. Ленин үҙ ваҡытында Петроградты ҡотҡарыу өсөн башҡорттарҙан ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән. Башҡорттар Бөйөк Ватан һуғышында ике дивизия туплаған. Беҙҙең Зәки Вәлиди кеүек үҙ премьерыбыҙ ҙа булырға тейеш, Кәрим Хәкимов кеүек дипломаттарыбыҙ ҙа була ала.

Драматург һәм яҙыусы Наил Ғәйетбаев. Бөтөн конфликттар иҡтисади артталыҡтан килә. Сәйәси үҙаллылыҡ булмаһа, иҡтисади үҙаллылыҡҡа өлгәшә алмаясаҡбыҙ.

Журналист, депутат Ризуан Хажиев. Һәр депутаттың прог-

раммаһына суверенлыҡ өсөн көрәшеү тигән мәсьәлә мотлаҡ инергә тейеш.

Яҙыусы Борис Павлов. Рустар, әгәр суверенлы республика булһаҡ, башҡорттар Россиянан сығыу мәсьәләһен ҡуясаҡ, тиҙәр. Ә татарҙар, беҙҙең мәнфәғәт сикләнәсәк, тип ҡурҡалар. Халыҡҡа суверенлыҡтың әхлаҡи яғын аңлатырға кәрәк.

Яҙыусы Динис Бүләков. Был хаҡта матбуғатта киң сығыштар баҫырға, депутаттарҙың суверенлыҡ өсөн тауыш биреү һөҙөмтәләрен асыҡтан-асыҡ күрһәтергә кәрәк: шул саҡта кемде һайлағаныбыҙҙы белербеҙ.

Дәүләт эшмәкәре, депутат Михаил Бугера. Суверенлыҡтың айырым милләт өсөн түгел, республика өсөн кәрәклеген халыҡҡа аңлатырға кәрәк.

Депутат Марат Аҙнабаев. Референдум беҙҙең быға са башҡарылған эште юҡҡа сығарасаҡ. Был мәсьәлә фәҡәт Юғары Советта ғына башҡарылырға тейеш. Башҡорттар айырым өҫтөнлөктәр талап итмәй. Улар үҙҙәрен һаҡлап ҡалыу хаҡында хәстәрлек күрә. Башҡорт телен дәүләт теле итеп раҫлау халыҡты һаҡлауға ыңғай аҙым буласаҡ. Сит илдәрҙең тәжрибәһен дә ҡарарға кәрәк.

Ошолай бөртөкләп-бөртөкләп, һәр кемдең фекеренән, кәңәшенән, тәҡдименән йыйыла ине "Урал" Башҡорт үҙәгендә аҡыл. Ә идара ағзалары булған шәхестәребеҙ бындай фекерҙәрҙән алтын урталыҡ тупланы.

Һөҙөмтәлә, суверенитет яулау алдынан булған буталсыҡ мәлдә, нигеҙҙә, Урал үҙәгенең тәҡдиме хуплана торғайны.

Тағы бер тормош дөрөҫлөгөн иҫтә ҡалдырырға кәрәк: ниндәй генә мәсьәләне хәл иткәндә лә, икәү-ара мөнәсәбәтме, ғаилә-арамы, сәйәсәттәме – үҙ мәнфәғәтеңде хәл иткәндә, башҡалар мәнфәғәтен үҙеңдеке кеүек итеп күҙ уңында тотоу һәм иҫәпкә алыу һәм ошонан сығып алтын урталыҡ табыу – тәрән аҡыллылыҡ билдәһе. Был хәҡиҡәттән ситләшеү төрлө тайпылыштарға килтерә. Тайпылыш һәр ваҡыт үҙ мәнфәғәтеңде өҫтөн ҡуйыу яғына ғына ла бармай. Мәҫәлән, башҡорт халҡының ғөрөф-ғәҙәтендәге үтә ҡунаҡсыллыҡ, киң күңеллелек арҡаһында беҙ, киреһенсә, башҡаларҙың мәнфәғәтен үтәгән саҡта үҙебеҙҙе онотҡолап ҡуйғанбыҙ. Шуның өсөн демографик көрсөккә килеп терәлдек. Атай-олатайҙарҙан ҡалған "Шаң һуҡҡанда ла сама бел", "Самаһыҙлыҡтың да самаһы була", "Сама белгән сайҡалмаҫ" тигән мәҡәлдәрҙе онотмау кәрәк.

Һуңғы йөҙ йыл эсендә ҡырғыҙ һәм төркмәндәр ун тапҡырға, ә башҡорттарҙың йөҙ утыҙ меңгә генә күбәйеүе йәки үҙ республи-

кабыҙҙа бөгөнгө көндә һан яғынан өсөнсө урында тороп ҡалыуыбыҙ ҙа ҡунаҡсылыҡта ла, битарафлыҡта ла, моңһоҙлоҡта ла, сама белмәүҙән килеп сыҡҡандыр. Әлбиттә, объектив сәбәптәр ҙә байтаҡ, әммә ундай сәбәптәр башҡорт башынан ғына үтмәй. Беҙ объектив сәбәптәргә лә ныҡ иғтибар биреп ташлайбыҙ. Бөгөн сифат яғынан яҡшырыу, һан яғынан ишәйеү өсөн бөтөн милләттәргә лә бер үк шарт бар. Зарланыуҙа ла, илауҙа ла, һылтаныуҙа ла, шанлы йылдарыбыҙ менән туҡтауһыҙ маһайыуҙа ла сама белергә ваҡыт беҙгә. Шул үк ваҡытта матди байлыҡ туплағанда рухи байлығыбыҙ хаҡында онотмауҙа ла сама кәрәк.

Әйтергә кәрәк, республикабыҙ етәкселегенең аҡыл менән эш итеүе, алтын урталыҡ таба белеүе арҡаһында йөҙҙән ашыу милләт вәкиле йәшәгән Башҡортостанда тыныс һәм һыйышып йәшәү тәьмин ителә.

Төрлө милләттәрҙең һыйышып тыныс йәшәүе, әлбиттә, республикабыҙ өсөн дә, уның төп халҡын тәшкил итеүсе башҡорт халҡы өсөн дә ҙур мәртәбә. Әммә һуңғы йылдарҙа тап ошо башҡорт халҡының сифатының төшә барыуы, рухһыҙлығы борсой. Шуның өсөн дә ғалимдарыбыҙ милли концепция кәрәклеге тураһында һүҙ ҡуҙғата башланы. Һис һүҙһеҙ, халыҡты һаҡлап алып ҡалыу өсөн бығаса тупланған һәр аҡылды бөртөклəп йыйып, туплап, рәткә килтереп милли концепция төҙөргә кәрәк. Әммә түбәндәге фекерҙәрҙе лә иҫәпкә алыу кәрәктер.

Тәбиғәт ҡанундары һәм милли концепция

Ниндәй генә милләттең үҫеш, үҙен һаҡлау буйынса концепцияһы төҙөлмәһен, ул Тәбиғәт (Тәңре, Хоҙай) ҡанундарына ҡаршы килергә лә, был ҡанундарҙан алыҫлашырға ла тейеш түгелдер. Сөнки милләт – ул Тәбиғәт бар иткән булмыш. Милләттәр буталмаһын, ҡан ҡатнашмаһын, Ер йөҙөндәге йән эйәләре араһында иң юғары аңға эйә булған берҙән-бер Кеше тигән бөйөк зат хайуан кимәленә төшмәһен, ә уйлап, фекер йөрөтөп, бер-береһе менән тиң булып аралашып йәшәһен өсөн, Кешегә Зиһен һәм Туған телдән башҡа тағы аралашыу телдәренә эйә булырлыҡ мөмкинлек бирелгән. Әммә Кеше фәҡәт аралашыу, һөйләшеү сараларына эйә булып ҡына Кешелек донъяһын алға алып бара алмай. Уға арығанда – ял итер, сирләгәндә – сәләмәтлек нығытыр, хистәр яңыртыр, шатлыҡ ишәйтер, ҡайғы еңеләйтер саралар ҙа кәрәк. Тәбиғәт уныһын да бар иткән. Төрлө-төрлө матурлыҡ: сылтырап ағыр шишмә-

ләр, һайрап торор ҡоштар, таң атҡанда ла, эңер төшкәндә лә хасил булған ғәжәп төҫтәр, ай ҡалҡҡандағы йәки ай тулғандағы ғәжәп серле күренеш, ләйсән ямғыры яуғандағы рәхәтлек, йәйғор ҡалҡҡандағы хозурлыҡ, муйыл, йүкә сәскә атҡан мәлдә донъя тултырып аңҡып киткән хушбуй, күҙ ҡамаштырырлыҡ сәскәләр төҫө һәм һанап бөткөһөҙ мең-мең йәм-гүзәллектең бөтөнөһө лә кешенең күҙ ҡарашын, ҡолаҡ пәрҙәләрен наҙлай, ял иттерә, тыныслandыра, матур хис-тойғолар уята, уйландыра, илһамландыра торған саралар. Беҙ үҙебеҙ һиҙмәһәк тә, уларҙан сикһеҙ көс-ҡеүәт, ҡөҙрәт-илһам алабыҙ. Күңел тыныслығы – ғәжәп дауалау сараһы. Рухи сәләмәтлек менән физик сәләмәтлек араһындағы тығыҙ бәйләнеш барлығын ғалимлар күптән иҫбат иткән. Ә Тәбиғәт Кешелек донъяһын бар иткән саҡта уҡ матурлыҡ менән тойғо бәйләнешен булдырған.

Традицион Ҡытай медицинаһы сир барлыҡҡа килтереүсе өс сәбәпте билдәләй. Уның беренсе төрөнә сир барлыҡҡа килтереүсе эске сәбәптәр инә. Улар "ете кәйеф" тип атала: саманан тыш шатлыҡ, ҡара ҡайғы, нәфрәт, ҡурҡыу, һары һағыш, мөхәббәт һәм ымһыныу. Ошо сәбәптәрҙе булдырмау йәки уларҙан башланған сирҙе еңелерәк үткәреү өсөн, күңел ялы алырлыҡ саралар бар ителгән дә инде Тәбиғәт тарафынан. Әммә шуныһы айырыуса иғтибарға лайыҡлы: был күңел ял иттергес сараларҙы кеше үҙ туған телендә ишетә, үҙ телендә тыңлай, үҙ телендә һоҡлана. Ә ҡайһы бер кешеләр ошо матурлыҡты күреп-һоҡланып, башҡаларға еткереү һәләтенә эйә. Улар – шағирҙар, яҙыусылар, композиторҙар, рәссамдар. Иң бөйөк ижад шедеврҙары, нигеҙҙә, туған телендә фекер йөрөткән, матурлыҡты туған тел аша ҡабул иткән таланттар ижад иткән һәм итә. (*Иғтибар итегеҙ: бөйөк илебеҙҙә аҙ һанлы халыҡтарҙы туған телдәрендә уҡыуҙан мәхрүм иткән осорҙарҙа һәләтле ижадсылар бермә-бер кәмене*).

Тәбиғәттең тағы бер үҙенсәлеге хаҡында әйтеп үтеү кәрәк булыр: ул үҙе бар иткән милли төрлөлөктө ҡурсалау өсөн, туған тел һәм традициялар менән бер рәттән халыҡҡа Ҡот тыуҙырып тора. Милләт Ҡото – ул Шәхестәр. Шәхестәргә бер кем дә бер ниндәй ҙә яуаплылыҡ йөкмәтмәй, уларға был яуаплылыҡ Тәбиғәттән һалына. Улар үҙҙәре яҡты донъяға тыуыу тәғәйенләнештәрен аңлайҙар һәм йүнәлеш билдәләйҙәр. Ә халыҡ үҙ йәшәйешенең Ҡото булған шул Шәхестәрҙе һаҡларға, тейешле баһаларға тейеш. Шәхесенең ҡәҙерен белгән халыҡ, милләт булараҡ, Ер йөҙөнән юғалмай, башҡа милләттәр тарафынан йотолмай. Шәхесен күтәрә белгән халыҡ – бөйөк халыҡ. Үҙ милләтенең вәкиле булған Шәхестәр – халыҡты, ә халыҡ –Шәхесте һаҡларға тейеш. Шәхестәр йыш тыумай. Улар –

Тәбиғәттең милләткә яһалған бүләге. Тәңре бындай бүләкте халыҡтың бәҫен күтәрер өсөн бирә. Халыҡ мәртәбәһен күтәрер өсөн ебәрелгән бындай таланттар үтә нескә күңелле, ғәмле, йөрәктәре яраланыусан, намыҫсан була, нахаҡҡа түҙмәй. Алданалар, барыбер ышаналар. Ышаныстары аҡланмаһа, күңел төшөнкөлөгөнә бирелә-ләр. Улар үҙҙәренә юл яра алмайҙар. Сөнки йүнһеҙҙәр бөтөн кешене лә үҙе кеүек, тип уйлай ҙа, шунан сығып эш итә һәм отолмай. Ә йүнлеләр бөтөн кешене лә үҙе кеүек күреп, намыҫ, әҙәп ҡалыбы менән эш итә һәм…отола. Талантларға ярҙам кәрәк. Уларҙың тәғәйенләнешен аңлаған һәм ярҙам ҡулы һуҙған халыҡ фәҡәт ота ғына. **Шәхесен күтәргән халыҡ үҙен күтәрә.** Шәхестәр киләсәкте алдан һиҙемләй белеү, заман һулышын тоя алыу һәләтенә эйә була. Милләтте нисек күтәреп, данын ниндәй юлдар менән ишәйтеп була, нисек һаҡлап була – Тәбиғәт тарафынан уларға шуларҙы алдан күҙаллау һәләте бирелә, тинек. Шәхес халҡы хаҡында борсолоуҙарын, киләсәге тураһындағы уй-фекерҙәрен төрлө юлдар менән еткерергә тырыша. Ижады аша ла, сығыштары аша ла, яҙмалары аша ла. Әммә Тәбиғәт тарафынан ни тиклем генә талантлы итеп тыуҙырылмаһын, туған халҡының телен, традицияларын белмәгән кеше тулы ҡанлы Шәхес була алмай. Туған телендә йырламаған, туған моңон аңламаған кеше уның киләсәген дә күҙаллай алмай.

Ошо урында хаҡлы һорау тыуыуы ла ихтимал. Йәһүдтәрҙең күбеһе туған телен белмәй. Ә үҙҙәрен һаҡлай ала. Төрлө милләттең үҙен һаҡлау сараһы – милли үҙаңы төрлө юлдар менән тәрбиәләнә. Йәһүдтәрҙең һәр балаһы тарихын иҫ китмәле яҡшы белә. Ә башҡортто моң берҙәмлеге, күңел берҙәмлеге, туғанлыҡ тойғоһо тота. Элек-электән бөтөн ырыуҙарҙы ла ҡурай моңо берләштерә килгән, аҡһаҡалдар туғанлыҡ ептәрен нығытыу маҡсатында ырыу-ара ҡоҙа булғандар.

Тимәк, милли концепцияның эшләнерен көтөп, балаларыбыҙҙа үҙаң тәрбиәләү мәсьәләһендә һуңлап ҡалыуыбыҙ ҙа ихтимал. "Башҡорт теленә дәүләт теле бирелһә, баламды башҡортса уҡытыр инем", – тип аҡылһыҙ фекер менән йөрөүселәрҙең балалары бөгөн ни Аллаға, ни муллаға тигән хәлдә тороп ҡалды. Быуаттар элек, халыҡтың бөтөнләй паспорты булмаған, теленә дәүләт статусы бирелмәгән саҡтарҙа ла, халыҡ үҙен һаҡлаған. Улар балаларында, киләсәк быуында, телгә, моңға, ижадҡа һәм тарихҡа, традицияларға һөйөү аша тәрән милли үҙаң тәрбиәләгән. Әммә шуныһы айырыуса иғтибарға лайыҡ: ҡатнаш ғаиләләрҙә милли үҙаң тәрбиәләү айырыуса ҡатмарлы. Ә бөгөнгө көндә, күреүебеҙсә, үҫеш тап шул милли үҙаң тәрбиәләнгән киләсәкле илдәрҙә бара. Ә милләт-

тебеҙ бергә тупланып, әлегәсә йәшәй икән, тимәк, милли концепциябыҙ ҙа булған. Уның нигеҙендә быуаттар буйы булдырылған рухи ҡиммәттәребеҙ һәм шул ҡиммәттәрҙе һаҡлау маҡсатын күҙ уңында тотҡан үҙаң ята.

Илһөйәрлек – ил ырыҫы

Донъяла ҡайһы ғына илде, ниндәй генә ҡоролошло йәмғиәтте алма, уның төп йөҙө, булмышы шул илдең халҡында сағыла. Ә ул халыҡты тәшкил иткән айырым-айырым һәр кешенең төп тәрбиәсеһе – ғаилә. Тимәк, һәр йәмғиәттең төп тәрбиәсеһе – ғаилә. Ә ғаиләлә бала күңеленә ниндәй орлоҡ һалынырға, ниндәй йүнәлеш бирелергә, ниндәй ҡиммәттәргә айырым иғтибар бүленергә, артабан йәшәү өсөн, тимәк, йәшәйеш сылбырын өҙмәй дауам итеү өсөн ниндәй АҠЫЛ һалынырға тейеш?

Бер нәмәгә инанғанмын: бала күңеленә илем, халҡым, телем, киләсәгем тигән тойғо һәм яуаплылыҡ һалынһа, тормошта була торған һәр төрлө тайпылыштарҙан сығыу юлын таба аласаҡ. Сөнки был изге төшөнсәләр – оло маҡсат, ихтыяр көсө, рухи ныҡлыҡ нигеҙе, аҡыл туплау сығанағы.

Ундай аҡылға туған телһеҙ юл табып булмай. Туған тел – быуындарҙы быуындарға бәйләп торор ҡөҙрәт, халыҡтың кинәйә менән әйтеп ҡалдырған аҡылын аңлауға – тылсымлы асҡыс.

Телебеҙҙә ғәжәп һүҙ бар – ТУП. Туп, тупланыу. Ҡоштар тубы. Йылы яҡтан туған яҡтарына ҡайтҡан ҡоштар туп булып килеп төшә лә һәр береһе айырым-айырым оя ҡороп йәшәй башлай. Әммә балаларын осорға өйрәткәндә, йылы яҡтарға киткәндә, тағы туплана. Улар ҙа бер-береһенә һыйына, мохтажлыҡ килеп сыҡҡанда БЕҘ тип аталған тубын таба. Балаһын туған теленән, моңонан, халҡынан айырған атай-әсәйҙәр уның киләсәктә ошо төшөнсәнән айырылып ҡалырын уйламаймы? Халҡыбыҙ ни өсөн меңәр йыл дауамында күсә килгән тәрбиә ҡанундарын етмеш йыл эсендәге алдаҡ идеологияға алмаштырҙы ла ҡуйҙы. Ни өсөн беҙ баланы ер йөҙөндә кеше булып йәшәүе, Урал батырыбыҙҙың, тимәк, халҡыбыҙҙың васыятынса, иң төп тәғәйенләнешен – ерҙә яҡшы ат – яҡшы исем ҡалдырыу тигән тәғәйенләнешен онотоп, кем булһа ла булһын, тик рус телен белһен дә юғары белем алһын, тип маҡсат ҡуя башланыҡ. Шуның өсөн дә беҙҙең юғары белемле тәрбиәһеҙҙәребеҙ артып китте, шуның өсөн маҡсатһыҙ йәшәүсе быуын үҫеп сыҡты, шуның өсөн

бөгөн тәрбиә проблемаһы йәки дөрөҫөрәге тәрбиәһеҙлек проблемаһы оло афәткә әйләнеп бара. Милләттәр үҫеренең тәрбиә ҡалыбынан ситләште, башҡаныҡы тап килмәй. Һөҙөмтәлә бала аптырауға ҡала.

Тимәк, баланың һутлы туған телдә аралашыуын, үҙ традицияһын, рухи байлығын, йола-ғәҙәттәрен, халыҡ мәҡәлдәренең әрәсәһенә төшөнөп үҫеүен, заманса талаптарҙы тамырыбыҙҙағы ҡимәттәр менән бәйләп алып барырға кәрәклеген аңлатыу мохтажлығынан тыуҙы ул "Тормош һабаҡтары". Өҫтәүенә, хәҙерге уҡыу программаһында уҡыусының туған телдә аралашырлыҡ мөмкинлеге бик сикле. Үкенес кенә түгел, ҙур юғалтыу булһа ла мәктәптәрҙә байтаҡ предметтар рус теленда алып барыла. Уҡыусыға дәрестә ауыҙ тултырып туған телдә һөйләргә, үҙ фекерен әйтергә мөмкинлек бик сикле. Туған телдә ярым-йорто ғына һөйләшеү камиллыҡ түгел. Туған телендең бар байлығына өлгәшергә ынтылып, һутын татыу, тәрәнлеген, наҙын тойоу аша күңелендәге мөлдөрәмә тулы хис-тойғоларыңды, уй-фекереңде сайпылтмай ғына аңлатырлыҡ кимәлдә белһәң, тәбиғәт тарафынан туған телгә һалынған бурысты үтәй алаһың тигән һүҙ.

Халыҡ тигән төшөнсә – ул бөгөнгө көндә йәшәгән кешеләр генә түгел. **Халыҡ – ул үткән быуын рухы, бөгөнгөнөң һынланышы, киләсәктең нурланышы. Теленән яҙмаған һәр кеше ХАЛЫҠ тигән ошо бөйөк көстән рухланып, илһам алып йәшәй.** Ә туған теленән айырылған кеше халҡынан да айырыла, тамырһыҙ ҡамғаҡҡа әйләнә, сөнки ул, туған телен белмәгәнлектән, өлкәндәр – олатайҙары, өләсәйҙәре, аҡһаҡаллы аҡыл эйәләре, ағинәйҙәр менән аралаша алмай, быуындар бәйләнеше өҙөлә, шәжәрәңдә нәҫел ботаҡтары ҡорой башлай. Аралашыу ярым-ярты ғына көйө атаһы менән әсәһе быуынынан ары китә алмай. Ә үткәндәрҙән көс-ҡеүәт ала алмағас, артабанғы быуынында ла дауам итә алмай. Үҙ тамырыңдан айырылыу – йәшәйеш нигеҙен ҡаҡшата, рухи һут алыу сығанағын юҡҡа сығара, иҫ китмәле аҡылдан мәхрүм итә.

"Урал батыр" эпосындағы тәрбиә ҡанундарына бер аҙ ғына тукталып, байҡау яһап китәйек.

"Урал батыр" эпосы ижад ителгән осор менән беҙҙең заман араһында тиҫтәләгән быуат ята. Әммә шуныһы ғәжәп: кешенең күңел донъяһы әллә ни үҙгәреш кисермәй икән. Яратыу-яратмау, киң күңеллелек-көнсөллөк, яҡшылыҡ-яуызлыҡ, ихласлыҡ-ике

йөҙләләк, асыҡлыҡ-аҫтыртынлыҡ һәм башҡа бик күп тойғо-хистәрҙән торған эске донъя, күңел донъяһы шул уҡ. Иғтибар менән ентекләп өйрәнһәң, эпостың һәр һүҙе, кинәйә менән әйтелгән һәр фекере тәрән мәғәнәгә эйә һәм бөгөнгө көнгә тап килә, уны аҙ ғына үҙгәртеү йәки яңылыш һөйләү, хатта интонациялағы яңылышлыҡ та – был халыҡ әҫәренә, уның баһалап бөткөһөҙ ҡиммәтле фекеренә хилафлыҡ килтерә. Халыҡ быны алдан күрә алған һәм, хилафлыҡҡа юл ҡуймау маҡсатында, әҫәрҙе шифри юлдар менән ижад иткән. Был бөйөк әҫәрҙең йөкмәткеһенә ныҡлап инеп китмәй, бер нисә генә һабағына тукталып китәйек.

Баланы тыйыу. Эпос икеһе ике төрлө холоҡло баланың: Шүлгән менән Уралдың бәхәсе менән башлана. Атай менән әсәй "ҡанды һыуһын" яһаһа ла улдарын ҡан эсеүҙән тыйғандар. Урал атаһын тыңлай, ҡабырсаҡтағы ҡанға теймәй. Шүлгән ҡанды тәмләп ҡарай. Ни өсөн Урал атаһын тыңлай, ә Шүлгән тыңламай, үҙенсә эшләй? Күреүебеҙсә, Йәнбирҙе ҡарт уландарын ҡан эсеүҙән тыя, ләкин ни өсөн ҡан эсергә ярамағанлығын аңлатмай. Шүлгән ун ике йәштә. Ул бығӑса атаһын тыңлап, тыйылып килгән, хәҙер инде үҙенсә эшләй башлар, үҙенсә һығымта яһап, хәл итер йәшкә еткән. Уға аңлатып та, уны ҡурҡытып тыйып та булмаясаҡ. Тимәк, баланың ун ике йәше тулғанға тиклем донъяуи серҙәрҙе төшөндөрөп, аңлатып, бер ниндәй шик-шөбһә, икеле-микеле фекер, сер ҡалдырмай зиһененә аҡыл һалып өйрәтергә кәрәк. Йәнбирҙе ҡарт ошо юҫыҡта тәрбиәүи хата ебәрә. Шуның өсөн дә Шүлгән яманлыҡ, еңел тормош, үс алыу, яуыз йән эйәләре менән дуҫлашыу юлынан китә. Уралға ун йәш, ул иһә өлкәндәрҙе тыңлау йәшенән үтмәгән. Әммә донъяны аңлап-белергә ынтылып тора. Үҙенсә һығымта яһау йәшенә барып етмәгән, әммә белергә теләү йәшенән үтмәгән. Тимәк, баланың донъяға үҙ ҡарашы ҡалыплашҡанға тиклем үк, ун йәшкә саҡлы, үҙаллы һығымталарға урын ҡалдырмай, бала аңы кимәлендә фәҡәт дөрөҫлөктө аңлатып тыйырға кәрәк баланы. Балаға ҡат-ҡат әйтеү генә етмәй – ни өсөн икәнлеген аңлатыу мөһим.

Атай рухында тәрбиәләү. Шүлгән менән Уралды тәрбиәләүҙә Әсәй йоғонтоһо тойолмай. Йәнбикә фәҡәт ире менән бергә ризыҡ табыу хәстәрлеге күрә. Балалар тулыһынса үҙаллы. Үҙаллылыҡтың төрлө һөҙөмтәләргә килтереүе көн кеүек асыҡ. Артабанғы ваҡиғаларҙа иһә Уралдың улдарын: Иҙелде, Яйыҡты, Нөгөштө Әсәйҙәре: Һомай, Гөлөстан, Ҡатил батшаның ҡыҙы үҙҙәре тәрбиәләй. Улар атаһы юлына – Яҡшылыҡ юлына баҫалар. Сөнки әсәйҙәр уларҙы Атай рухында – Урал батыр өлгөһөндә тәрбиәләгән. Атай күренмә-

һә лә, уның рухы, өлгөһө һәр саҡ әсә телендә булған:

Ҡатил батша ҡыҙынан
Һинән тыуған улыңмын…
Тип килеп етә Йыҡ һәм:
Билем биштән быуҙым мин,
Һинең юлды ҡыуҙым мин, – ти атаһына.

Икенсеһенә әсәһе Гөлөстан былай тигән:

Атаң – Урал батырым,
Унан тыуған Нөгөшөм,
Батыр булып тыуганһың,
Атаңа ҡулдаш булганһың,
Мен толпарға һин, балам,
Атаңа юлдаш бул, балам.

Иҙелгә һомай былай ти:

Батырҙан батыр тыуганһың,
Атаңдай батыр булганһың,
……
Атаң яңғыҙ тилмерә,
Ауыр көндәр кисерә,
Атаң яңғыҙ булмаһын,
Дошман яуы еңмәһен,
Бар, атаңа, юлдаш бул.

Хатта Айһылыу ҙа, улының үҙ атаһы Шүлгән өлгө алырлыҡ зат булмағанлыктан, Урал батырҙы өлгө итеп ҡуйып, уның рухында тәрбиәләй.

Кейәүгә тигән бүләгем –
Һары толпар бирәйем,
Балам, атҡа мен, тине,
Иҙел менән кит, тине,
Урал атаң юлынан.

Бына ни өсөн башҡорт шәжәрә төҙөп, ундағы затлы нәҫелдәрен айырым атап, балаларына өлгө итеп ҡуйған. Ҡайһылай ғына булмаһын, бала атай рухында тәрбиәләнһә, ыңғай һөҙөмтә була. Үҙ

атаһы, Шүлгән кеүек өлгө алырлыҡ булмаһа, шәжәрәнән атай нәҫеленән затлы кешене табып, шуны өлгө итеп ҡуйырға кәрәк. Айһылыуҙың улы Һаҡмарҙың Урал батырға әйткән һүҙҙәре ошоға ишара.

Йәшәү рәүеше. Шүлгән менән Урал үҙ көндәрен үҙҙәре күргән, әммә уйын менән көн үткәрмәгән. Артабанғы тормошҡа әҙерләнгәндәр. Атай менән әсәй ҡан эсеүҙән тыйған. Йәшегеҙ етмәгән, тешекмәгәнһегеҙ, быуынығыҙ нығынмаған, тип кенә аңлаталар. Әммә был һүҙҙәрҙән ошондай һабаҡ алып була – тимәк, ҡайһы бер аҙыҡ менән туҡланыу өсөн билдәле бер йәшкә етергә кәрәклеге һыҙыҡ өҫтөнә алына. Рухи һәм физик сәләмәтлек күҙҙә тотолған булһа кәрәк. Эпоста тағы бер фекергә иғтибар итергә кәрәк:

Йәнлек иркәк булдыниһә,
Ирле-бисәле икәүһе
Башын сәйнәп ашаған.
.....
Йәнлек оргасы булһа,
Ирле-бисәле икәүһе
Йөрәгене һайлаған.

Оргасы йән эйәһенең йөрәген генә ашағандар, ә иркәк йәғни ата йән эйәһенең башын сәйнәп ташлағандар. Батырлыҡ, ҡурҡмау күҙәнәктәре – баш мейеһендә, ә нескә күңеллелек, күркәм хис инә йөрәге аша киләлер. Бәлки, ысынлап та, иркәк малдың йөрәген ашарға ярамайҙыр, ә бәлки был йыртҡыс йән эйәһенә генә ҡағылалыр. Ошо йәһәттән тикшеренеү эшенә тотонорлоҡ кеше табылһа, бәлки быға са кешелек донъяһы ғилемендә билдәле булмаған асыш яһалыр ине берәй башҡорт ғалимы тарафынан.

Эпоста **Йәшәү маҡсатына** төп иғтибар бүленә. Йәшәү маҡсаты билдәләү – тәрбиә йүнәлеше билдәләү ул.

Намыҫ тапар ир булһа,
Өмөтө булмаҫ көнөнән.

Йәки:

Батырҙан тыуған ир-егет
Аптырауҙа ҡалырмы?

Ниндәй генә хәл-ваҡиға килеп сыҡһа ла ир-егет аптыранып

ҡалырға түгел, хәл итеү сараһын күрергә тейеш. Әммә намыҫ тапау, намыҫ юғалтыу артабан мәғәнәле йәшәүеңде – яҡты көндәреңде юҡҡа сығарыу тигән һүҙ.

Илде талап йөрөмәҫкә,
Кеше ҡанын ҡоймаҫҡа,
Ил ынйыһын йәшереп,
Ергә күмеп ҡуймаҫҡа.

Был ҡанунды тотмағандар илдән ҡыуыла. Ундай кеше:

Үҙе йәшәй тарлыҡта,
Ғүмере үтә зарлыҡта.

Тимәк, ил байлығын талап, халыҡтан йәшереп ҡуйыу – ауыр язаға дусар итерлек енәйәт. Ә башҡорт өсөн иң ауыр яза – илдән ҡыуылыу һанала.

Кеше ни тиклем генә көслө, ғәйрәтле булмаһын, бер саҡ бары даны ғына ҡала. Ә быуын-быуын йәшәү дауам итһен өсөн, батырҙан батыр тыуып ҡалырға тейеш.

Һинең даның ҡалһа ла,
Ҡулда ғәйрәт бөтөр ул.
Ир бөтһә лә ил бөтмәҫ,
Ил батыры – батырҙан,
Батыр ирҙән тыуыр ул.
Атанан күреп үк юнып,
Өлкәндән күреп, яу ҡыуып,
Ил эсендә үҫер ул.

Тимәк, бала ил эсендә үҫергә, атайҙан ғына түгел, өлкәндәрҙән дә фәһем алырға тейеш. Ә батыр үҙенең эшен дауам итерлек батыр ҡалдырыу хәстәре күрергә тейеш.

Һиңә тиңдәш ҡыҙ,
Батырға әсә булыр ҡыҙ.

Тимәк, халыҡ кем менән ғаилә ҡороуға айырым иғтибар бүлгән. Үҙеңдән һуң яҡшы нәҫел – батыр ҡалдырам тиһәң, үҙеңә тиңдәш ҡатын алырға тейешһең.

Урал Шүлгәнгә былай ти:

Яҡшынан эскәне – һыу булыр,
Ямандан эскәне – ыу булыр.

"Ыу" тигәне иҫерткес эсемлек, ағыу. Шул саҡта уҡ иҫерткес эсемлек эсеүҙең яманлыҡ икәнлеген аңлаған халыҡ һәм киләсәк быуынға васыят итеп ҡалдырған.

Урал батырҙың ерҙәге тормошо һәр ваҡыт һомайға билдәле булып тора. Тимәк, эпосты ижад иткән халыҡҡа Йыһан менән Ер тормошоноң бер бөтөн икәнлеге күптән билдәле булған. Ерҙәге үҙгәрештәр Ҡояш, Йыһан үҙгәрештәре менән тығыҙ бәйле. Кеше үҙ йәшәйешендә Тәбиғәт ҡанундарынан тайпылырға тейеш түгел. Тәбиғәт ҡанундарынан тайпылыу афәткә килтерә. Быны Урал батыр бала сағынан уҡ яҡшы аңлай (*ул Үлем тураһында һорашыу өсөн урман йәнлектәрен, ҡоштарын йыя*) һәм ағаһына аңлатырға тырыша. Әммә Шүлгәндең ҡаны ҡарайып өлгөргән. Тәрбиәләү һуңлаған. Уны фәҡәт Шүлгән үҙе генә, үҙтәрбиә менән генә төҙәтә ала.

Ҡарайып бөткән ҡаныңды, –
Үткәнеңде уйлатып,
Йөрәгеңде һыҙлатып,
Тәнең һыҙлап ҡаҡайһын,
Йәнең һыҡтап агарһын;
Йөрәгеңдәге ҡара ҡан
Кибеп, ҡабат ҡыҙарһын,
Шунда кеше булырһың,
Илдә бергә ҡалырһың,
Яуҙа батыр булырһың.

Һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтеп китергә кәрәк:

Донъяны матур төҙөгән,
Бағты мәңге биҙәгән –
Ул да булһа яҡшылыҡ,
Һыуҙа ла батмаҫ яҡшылыҡ,
Утҡа ла янмаҫ яҡшылыҡ,
Телдән дә төшмәҫ яҡшылыҡ,
Бары эшкә баш булыр,
Үҙеңә лә, кешегә лә
Мәңге йәшәр аш булыр, –

тиелә эпоста. Бер ни ҙә мәңгелек түгел. Тәбиғәт барыһын да белеп яратҡан. Хатта иң яуыз көс – Үлем дә кәрәк икән. Ә бына ЯҠШЫЛЫҠ мәңгелек. Кешенең йәшәү маҡсаты – Яҡшылыҡ, Яҡшы исем ҡалдырырға тырышыу, ер йөҙөндәге баҡсаға матурлыҡ өҫтәй барырға тейеш.

Яҡшылыҡты кеше аңламай хәҙер, тигән фекер әйтеүсәндәр. Ә кешенең аңлауы бик кәрәкме? Һин үҙең аңла. Үҙ күңеленде сафландыр. Ә Юғары көс – Тәбиғәт, Хоҙай кешенең күңел сафлығын аңлай, сафлыҡҡа сафлыҡ менән яуап ҡайтара. Был тормошта бер ниндәй хилафлыҡтан да ҡурҡмай, саф күңел менән йәшәүҙән дә оло бәхет юҡ. Әлеге заманда ғына түгел, кешелек донъяһы күпме йәшәй, шул тиклем Яҡшылыҡ менән Яуызлыҡ араһында алыш бара. Урал да Шүлгәнде тотош юҡ итә алмай. Аҙаҡ һомай:

Шүлгәнгә яу асһаң да,
Уны тар-мар итһәң дә,
Күленән ил мандымаҫ, – ти уландарына.
Батыр исеме күтәреп,
Һыу таба алмай тилмереп
Тороу ирлек булырмы? –

тип, Иҙел туғандарын эйәртеп һыу эҙләргә сығып китә. Тимәк, яуызлыҡ йәшәгән, йәшәйәсәк, ә яҡшылыҡ ҡылыу – һәр быуындың мөҡәддәс бурысы һәм һинең ҡылған яҡшылығың, изгелегең үҙеңә ҡайта.

Урал батыр ҡара көстәрҙе ҡырып батыр исеме яулаһа, икенсе батырлығы – үҙ хатаһын таныуы. Үҙ хатаңды таныу, ошо хатаны ҡабатламағыҙ, тип, башҡаларға васыят ҡалдырыу – ҙур батырлыҡ.

Менһәм, Буҙ ат бар ине,
Ҡулда булат бар ине.
Яу тупларлыҡ еремдә
Талай илем бар ине.
Ҡулдаш булыр илемдә
Батыр ирҙәр бар ине.
Шулар ҡәҙерен белмәнем,
Батырлыҡҡа маһайып,
Кәңәш ҡороп торманым,
Яңғыҙ башым уйланым,
Уңмаҫ юлды һайланым.
.....

Олоно оло итегеҙ,
Кәңәш алып йөрөгөҙ,
Кесене кесе итегеҙ, –
Кәңәш биреп йөрөгөҙ.
Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,
Кеше булһын затығыҙ,
Яманға юл ҡуймағыҙ,
Яҡшынан баш тартмағыҙ.

Халҡыбыҙ ниндәй ауырлыҡтарҙы, ҡырылыуҙарҙы еңеп, үҙен милләт булараҡ һаҡлап ҡалған икән, Урал батыр васыятына тоғролоҡ менән еңгән һәр төрлө ҡыйралыштарҙы. Тимәк, Яҡшылыҡ ҡылыуға ынтылған халҡыбыҙға Тәңре, Хоҙай һәр саҡ ярҙамға килгән. Ошо ҡанундарҙан тайпылмаһаҡ, милләт булып һаҡланырбыҙ, үҙ телебеҙҙә уҡырбыҙ, йырларбыҙ, үҙ сәнғәтебеҙҙе үҫтерербеҙ, тарихыбыҙҙы өйрәнербеҙ, шәжәрәләребеҙҙе тамырыбыҙға хилаф килтермәй дауам итербеҙ. Рухи байлығыбыҙға эйә булып, донъя кимәленә танытырбыҙ. Йәмғиәткә, халыҡҡа файҙалы кеше булып, эпоста әйтелгәнсә, онотолмаҫ зат булып, үҙебеҙҙе үҙебеҙ һаҡлап йәшәргә кәрәк. Уның өсөн **Урал батыр васыятын үтәйек: ыуҙан ҡотолайыҡ, ил ташлап, сит яҡтарға олағып башҡаларға олтан булмайыҡ, яҡшылыҡҡа ынтылайыҡ. Саф күңел менән йәшәү, таҙа намыҫлы булыу балалар тәрбиәләүҙә – иң мөһим шарт.**

Атай-олатайҙарыбыҙҙың мәшһүр "Урал батыр" эпосы аша әйткән, зирәк зиһенле уҙамандарыбыҙҙың беҙҙең көнгәсә еткергән АҠЫЛына тоғро булайыҡ.



ҠОТ

Бөгөнгө көндә баҙар иҡтисадына яраҡлаша алмау һәм яраҡлашырға теләмәү ҡайһы берәүҙәрҙе күңел төшөнкөлөгөнә килтерә. Йәмғиәт ҡоролошонда ҡырҡа үҙгәрештәрҙе илебеҙ байтаҡ үткәргән, әммә халҡыбыҙ йәшәүгә лә, үҫешкә лә, ишәйеүгә лә, үҙен һаҡлауға ла яйын тапҡан. Бынан да ауырыраҡ, ҡатмарлыраҡ осорҙар аша үҙен һаҡлап килгән халҡыбыҙҙы заманға яраҡлаша алмау аркаһында ғына, милләт булараҡ, юғалтһаҡ, Тәбиғәт һәм Кешелек донъяһы алдында бер ни менән аҡлана алмаҫлыҡ ҡаза эшләйәсәкбеҙ.

Һәр айырым кеше – халыҡ вәкиле, ә тотош халыҡ – айырым кешеләр тупланмаһы. Беҙҙең һәр беребеҙҙә булған яҡшы сифат тотош халыҡтыҡы булған кеүек, кире сифаттарыбыҙ ҙа үҙебеҙҙеке генә түгел. Беҙ бөгөнгө көн дошмандарынан: моңһоҙлоҡтан, тыуған төйәккә, халҡыбыҙ киләсәгенә, телебеҙгә битарафлыҡтан, вайымһыҙлыҡтан, булдыҡһыҙлыҡтан, рухи ҡиммәттәребеҙ иҫәбенә тупланған матди байлыҡ ҡоло булыуҙан, эскелектән, ассимиляциянан, йотолоуҙан арыныу юлдары табырға һәм, иң мөһиме, киләһе быуынды бындай яман ғәҙәттәрһеҙ тәрбиәләргә тейешбеҙ. Юғиһә, юғалыу хәүефенең афәткә әйләнеүе көн кеүек асыҡ. Аҙ һанлы халыҡтар афәттән ҡотолоу юлын төрлөсә тапҡан. Йәһүдтәр, ундай афәт янай башлағас, үҙҙәрен Алла тарафынан бар ителгән һайланма халыҡ итеп күрһәтеп, боронғо динде кире ҡайтарыу, йәки шул дин нигеҙендә яңыһын ҡабул итеү юлдары аша донъяла иң белемле, иң бай халыҡ булырға һәм шул юл менән юғалмаҫҡа тигән маҡсат ҡуя. Башҡа халыҡтар ҙа үҙе өсөн ҡулайлы юл эҙләй. Нисек кенә булмаһын, тотош халыҡ һәм һәр айырым кеше үҙенең эске рухын — йәшәү ҡотон һаҡлаһа, бер ниндәй тайпылыштарға ла бирешмәҫ. Эске рухты һаҡлау һәм булдырыуҙың төп юлдары хаҡында әйтелде. Кеше үҙтәрбиә менән ҡылыҡ-фиғелен үҙгәртә ала тинек. Әммә һәр кеше булмышында тыуғандан алып ҠОТ һаҡла-

нырға тейеш. Ҡот тигән төшөнсә һалынмаһа, бәхеттең таты ла, байлыҡтың йоғошо ла, йәшәүҙең мәғәнәһе лә булмаясаҡ.

Әйтеп үтеүебеҙсә, айырым кешегә хас сифаттар тотош халыҡҡа ла тап килә. Шуның өсөн дөйөм халыҡ тураһында һүҙ алып барыр алда айырым кешеләргә тукталабыҙ.

Нимә ул ҡот? Ҡот һүҙенә һүҙлектә ошондай аңлатмалар бирелгән.

1. Тереклек, именлек бирер нәмә. **2.** Күңелгә кинәнес, рәхәтлек биргән сифат; йәм, нур. **3.** Уңыш, бәхет килтергән нәмәгә ҡарата әйтелә. **4.** Ҡурҡҡан кешене имләр өсөн ҡурғаштан ҡойоп, муйынға, түшкә таҡҡан нәмә.

Тереклек, именлек бирер нәмә.

Тимәк, ҡот кешенең эске донъяһы, күңел тыныслығы менән бәйле. Берәй нәмәнән ныҡ ҡурҡыу, даими көнләшеү, үҙеңде кәмһетеү, оялыу тойғоһо, хәүефләнеү, икеләнеү, шикләнеү, берәй нәмәгә ныҡ ымһыныу, яуапһыҙ мөхәббәт, оло юғалтыу кисереү, өмөт һүнеү, илағы килгән саҡта илауҙан тыйылыу һәм башҡа шундай кире хистәр күңел ҡотон осора. Кеше күңел тыныслығын юғалта, йәшәүҙән йәм тапмай башлай. Күҙҙәренең нуры, йөҙөнөң алһыулығы юғала, бойоҡ, өндәшмәҫ кешегә әйләнә. Йәшәүенән йәм тапмаһа, күңел бушлығы барлыҡҡа килһә, сиргә һабыша.

Тынысһыҙ бала тәрбиәләгән, иренән кәмһетелеү күргән, ҡайны-ҡәйнә менән уртаҡ тел тапмаған, эшендә даими уңышһыҙлыҡҡа осраған йәки хеҙмәттәштәре менән уртаҡ тел тапмаған; тәбиғи һәләтен үҫтерә алмай, икенсе йүнәлеш менән хеҙмәт юлы башлап, күңел ҡәнәғәтлеге алмаған; балаһының тәрбиәһеҙлеге өсөн көйгән һәм башҡа шундай тормоштоң бихисап ығы-зығыһына бирешкән кешеләр йән тыныслығын юғалта — йәшәү ҡото китә.

Ошондай осраҡта боронғолар кешегә ҡот ҡойған. Кеше тыныс-ланған. "Ҡото кире ҡайтты", — тигәндәр. Кешене ҡото ҡайтыу ти-гән ырым менән тыныслandырғандар, эске рухын нығытҡандар, үҙ көсөнә ышанысын ҡайтарғандар. Һәм ул яңынан сәләмәт тормош менән йәшәп алып киткән, тормош юлында осраған ауырлыҡтарға бирешмәй, унан сығыу юлы эҙләй башлаған.

Өйҙә тыныслыҡ юғалһа, үҙ-ара ызғыш-талаш башланһа, өлкән-дәр "өйөгөҙҙөң ҡото киткән" тиҙәр. Йорт хужалары ҡарттарҙы йы-йып, ризалыҡ алып, "Көрьән" сүрәләре уҡыталар ҙа өйҙөң ҡотон ҡайтаралар. Йорт хужаларына йән тыныслығы ҡайта.

Яуапһыҙ мөхәббәт, өмөтһөҙ ғашиҡ булыу ҙа эске тыныслыҡ китеүенә — ҡот юғалтыуға килтерә. Ғашиҡ булыу ғазаптары ябай

ғына нәмә түгел. "Йософ менән Зөләйха" дастанында бик оҫта һүрәтләнгән. Зөләйха үҙенең мөхәббәтен аңлатыу өсөн, Йософтоң ҡамсыһын алып, шуға тыны менән өрөп кире бирә. Йософ, ҡамсыны ҡулына алғас, уның ҡайнарлығына ғәжәпкә ҡала һәм Зөләйханың ысын һөйөүенә ышана. Йәки "баҫҡан ерҙә үлән көйә, эсемдәге ялҡынға" тип йыр сығарылған икән, уның да нигеҙһеҙ, ҡоро һүҙ тип уйларға ярамай. Тойғо кешенең тотош булмышына, сәләмәтлегенә тәьҫир итә.

Кәмһетелеү, кәмһенеү, үҙеңде башҡаларҙан түбән тойоу, оялыу кеүек тойғо ла сәләмәтлек юғалтыуға килтерә.

Халҡыбыҙ ҠОТ тигән төшөнсәне аңлаған һәм һәр саҡ ярҙам итергә тырышҡан. Бөгөнгө көндәге психологик ярҙам ул.

Кешенең эске кисерештәренең тотош булмышына тәьҫир иткәнлеген яҡшы белгән халыҡ күңел йыуатыу, албырғатыу-әүрәтеү, ҡайғы еңеләйтеүөсөн төрлө йолалар уйлап тапҡан.

Мәҫәлән, элек ошондай йолалар булған. Ҡыҙ бала кейәүгә сығып, ят тупраҡҡа аяҡ баҫыр, тыуып-үҫкән төйәгенән айырылыр алда уның эске донъяһында ниндәй үҙгәрештәр булырын, уның ниндәй кисерештәр үткәрәсәген яҡшы аңлағандар һәм, ауыр хистойғоларын еңеләйтеү өсөн, сеңләү йолаһы башҡарғандар. Күңел донъяһындағы киҫкен үҙгәреште үткәреп ебәреү өсөн йырлауҙың, илауҙың әһәмиәте ҙур. Ҡыҙ бала әхирәттәренә, еңгәләренә ҡушылып сеңләгән, илаған һәм уның көсөргәнешле уй-тойғолары еңеләйгән, халыҡ һүҙҙәре менән әйткәндә, "тамырҙарында ҡан яҙылып киткән".

Өлкәндәрҙең һөйләүенә ҡарағанда, ҡайғынан һарыға һабышҡан кешене көслəп һөрәнләткәндәр. Әсәйемдән дә, уның апаһы Әсҡәпъямал Ҡолмөхәмәтованан да ошо йола тураһында һорашҡаным булды. "Ҡайғынан һөйләшмәҫ, ҡуҙғалмаҫ булып ҡатып ҡалған саҡтары йыш ине кешеләрҙең. 1921 йылғы аслыҡта ғаиләһе-ғаиләһе менән ҡырылдылар. Граждандар һуғышы ваҡытында ҡыҙылдар башҡорт ауылдарында аяуһыҙлыҡ күрһәтәләр: күҙ алдында туғандарын ғазаплап үлтерәләр. Ошо ҡайғыларҙы кисерә алмай быуынһыҙланып һығылып төшә лә, күҙҙәре ҙур булып асылып, хәрәкәтһеҙ ҡата ла ҡала торғайнылар. Йә ат егә һалып, йә икенсе әмәл менән тау битенә алып сығып китер инек тә һөрәнләтергә тырышыр инек. Үҙебеҙ һөрәнләйбеҙ, ауырыуҙы ла көслəп һөрәнләтәбеҙ. Аҙ ғына тауышы сыға башлаһа, ҡыуанабыҙ. Ҡайһы берәүҙәрҙең ике-өс һөрәнләүҙән ҡаны яҙылып, хәрәктәләнеп, күҙ керпектәре һелкенә башлай торғайны. Ҡайһыларын етешəр һөрәнләтə инек".

Күп кенә халыҡтарҙа махсус илатыу йолаһы бар.

Һуғыштан ҡайтҡан яугирҙәрҙе ҡаршы алғанда ла махсус йола күҙәтелгән. Оҙаҡ ваҡыт һуғыш тураһында һорашмаҫҡа, яуҙа ятып ҡалған дуҫтарын хәтергә төшөрмәҫкә тырышҡандар; тыныс тормош йәшәйешенә тиҙерәк күсереү, икенсе хәл-ваҡиғалар менән албырғатыу сараһы күргәндәр. Ҡунаҡ саҡырып алғандар, өйҙән-өйгә йөрөтөп ҡунаҡ иткәндәр, ҡыҙыҡ-мәҙәк һөйләүгә маһир йор һүҙле кеше саҡырғандар, ул көләмәстәр һөйләп күңел күтәрер булған. Был йола ла онотолоп бара. (*Киҫкен ваҡиғалар әҙләүсе, шул юл менән үҙҙәренә танылыу табырға ынтылыусы журналистар, фажиғәгә, оло ҡайғыға дусар булыусының ай-вайына ҡуймай, ауыр ваҡиға тураһында һөйләтһендәрме, телевидение аша күрһәтһендәрме, кешегә тыныс ҡына ҡайғырырыға, иларға ла форсат бирмәй, интервью алһындармы...*).

Ә борон, ғөмүмән, кеше күңелендә ҡот — йән тыныслығы һаҡлауға ныҡ иғтибар ителгән. Бигерәк тә бала күңеле хаҡында ныҡ хәстәрләгәндәр. Баланың үтә ныҡ тынысһыҙланыуы, ҡурҡыуы, төндәрен йоҡлай алмауы шунда уҡ борсоуға һалған һәм оҙаҡҡа һуҙмай ҡот ҡойҙортоп алғандар. Бынан тыш бала бәләкәйҙән таянныслы, ышаныслы, маҡсатлы үҫһен өсөн дә һәр төрлө саралар күргәндәр. Баланы нимәнәндер, кемдәндер ҡурҡытыу, уны ҡурҡытыу өсөн үҙең дә ҡурҡып маташыуҙан да насар нәмә юҡ. Бала һинең "бабай килә, милиция килә, бапаҡ килә" тип ҡурҡытыуыңа ҡарағанда үҙеңдең ҡурҡып маташыуыңа нығыраҡ борсола башлай. "Атайым йәки әсәйем дә мине ул ҡурҡыныстан һаҡлай алмағас, үҙҙәре лә ҡурҡҡас, мин кемгә таянайым?" тигән ҡот оскос тойғолар биләп ала уның бәләкәй генә йөрәген. Ул тыныслығын юғалта. Ҡот фәҡәт тыныс күңелдә генә ныҡ һаҡлана. Бала үҫкәс, төрлө тайпылыштар менән көрәшеү өсөн көс туплай ала. Ике ҡулы ике етәктә булған, атаһы ла, әсәһе лә бер һүҙле, бер маҡсатлы татыу ғаиләләрҙә үҫкән балалар ниндәй тайпылыштарға дусар булһа ла, үҙҙәрен дөрөҫ юлға баҫтырыу, үҙтәрбиә менән шөғөлләнеү өсөн көс табыуға һәләтлерәк була. "Атайлының арҡаһы ныҡ, әсәйленең күңеле аҡ", — тигәндәр боронғолар. Тормош булғас, төрлө хәлдәр була. Дөрөҫ юлдан тайпылып алыу ҙа, атай-әсәй һүҙенән ысҡыныу ҙа, башҡа фажиғәләргә дусар булыу ҙа, осраҡлы ҡайғы-хәсрәттәр ҙә "ағас башынан йөрөмәй, әҙәм башынан йөрөй". Бәләкәйҙән таянныс тойоп, ҡурҡмай, ышаныслы үҫкән, ҡото ныҡ кешеләр бындай хәл-ваҡиғаларҙан сығыу юлын тиҙ табалар, хатта башҡаларға ла ярҙам итә алалар.

Һуңғы ваҡытта тулы булмаған ғаиләләр ишәйә бара. Бала

атайлы көйө атайһыҙ үҫә. Һыңар ҡанаты ҡайырыла. Атаһының айырым йәшәүен, атаһы үлеп, етем ҡалыуға ҡарағанда ла нығыраҡ кисерә бала.

Бала күңелендә ҡот һаҡлау өсөн бындай осраҡта ни эшләргә?

Атай — арҡа һөйәге

Ниндәй сәбәптәр менән айырым йәшәргә тура килһә лә, балаға уның атаһы — таянысы барлығын белгертергә, атаһын танытырға кәрәк. Бала үҙ атаһы менән барыбер ҡыҙыҡһына, күргеһе, һөйләшкеһе килә. Бала менән атай күҙгә күренмәҫ нурҙар менән бәйле. Ошо нур аша күңел күңелгә тартыла. Атай кешегә лә үҙенең ҡаны, үҙенең йәне бүленгән баланан баш тартмаҫҡа кәрәк. Бала әрнеһә, атай йәне лә әрней; бала ҡыуанһа, ата йәне лә шатлана. Был тәбиғи тойғоно, айырым йәшәгән атай кеше, бәлки, һиҙмәйҙер, кимне-кимне эс бошоп китеүҙәренең, күңел болоҡһоуының сәбәбен аңламай ҙа ҡалалыр... Әммә уны белергә кәрәк. Бала әрнеүе атайға уңыш килтермәй.

Атайға ла, әсәйгә лә баланың күңел ризалығын алып йәшәү фәҡәт яҡшыға ғына була.

Ике ғаилә араһында аңлашыу булған осраҡта был хәлдең яңы барлыҡҡа килгән ғаиләләр өсөн зыяны юҡ.

Диҡҡәттең беренсе ҡатынынан тыуған ҡыҙы — Айгөл Бураҡаева, үҙе әсәй булғас, балаһы ла ҡәҙимге үҫкәс, ҡырҡ йәштәр тирәһендә ваҡытта, балаларым алдында миңә рәхмәтле булыуын белдерҙе. "Һеҙ бит минең иң яҡын кешеләрем булдығыҙ. Мин һәр ваҡыт һеҙҙе янымда тоям. Әле иҫкә төшөрөп уйлап ҡарайым да, бала сағымда уҡ матур, йылы итеп ҡабул итә, минең киреләнеүемде кисерә, бала күңелен аңлай инегеҙ. Атайым менән бергә йәшәмәһәк тә, мин һеҙҙең арҡала уның менән аралаштым, һәр ваҡыт янымда тойҙом. Ә янында "атай" тигән таяныс тойоу кеше өсөн бик кәрәк," – тине.

Ысынлап та, мин Айгөл менән яҡшы мөнәсәбәттә булдым. Бәләкәй сағында барып ала, оҙатып ҡуя торғайным. Аңлашылмаусанлыҡтар килеп сыҡһа, ипле генә аңлатыр инем.

Атай эргәлә булмаһа ла уның арҡа һөйәге, яҡлаусы, таяныс икәнлеген тойоу бала күңелендә сикһеҙ ышаныс уята, һәм ошо ышаныс рухи ныҡлыҡҡа нигеҙ һала.

Әйтеп китеүемсә, атайым, ауылдағы бөтөн ирҙәр кеүек, туҡтауһыҙ эш менән мәшғүл булды. Иртә таңдан китер, беҙ йоҡларға яткас

ҡына тигәндәй ҡайтыр ине. Шуға күрә тәрбиә эшендә төп мисәү аты әсәйем булды. Әммә атайым донъяла иң көслө кеше, бөтә яуыз көстәрҙән дә ҡотҡара аласаҡ, тигән фекер миндә нығынып ҡалғайны, һәм ошо тойго ниндәйҙер көс, ышаныс өҫтәй ине.

Атайым үгеҙҙән дә көслө

Ауыл ерҙәрендә ҡыш буйына етерлек еләк-емеш йыйып алып ҡалыу һәр ғаиләнең ғәҙәтенә ингән. Мәрфуға апайым йыл һайын Ибрай ауылына муйыл йыйырға бара ине. "Ибрай муйылы итле була. Иҫәнгол муйылы ҡоро һөйәк. Киптереп тартып алайым тиһәң, ап-аҡ, тәме юҡ", – тип, әсәйем апайымды Ибрайға ебәрә ине. Ә беҙ Нәсимә һылыуым менән Иҫәнгол тугайҙарын тапаныҡ. Ҡолтай тугайы баланга, бөрлөгәнгә, ҡарағатҡа, ҡомалаҡҡа, әлморонга бай булды. Атайым ошо тугайға яҡын заготскот тигән хужалыҡтың малын көтә ине. Беҙ иртәнсәк торабыҙ ҙа, үҙебеҙгә ашарлыҡ икмәк алып, тугайға китәбеҙ. Дүрт-биш саҡырымдай юлды күпме ваҡыт эсендә үткәнбеҙҙер – белмәйем. Әммә көн һайын йөрөп, ҡышҡылыҡҡа гына түгел, ә дарыуханаға тапшырып, аҡса эшләү өсөн дә йыйҙыҡ беҙ емеште. Бер көнө шулай, әлморон тирәп йөрөһәк, һыйырҙарҙан айырылып ҡалған үгеҙҙең үкерә-үкерә беҙҙең яҡҡа килгәнен күреп, ҡотобоҙ осто. Күнәктәребеҙҙе ырғыттыҡ та ҡаса башланыҡ. Беҙ йүгерәбеҙ, үгеҙ килә башын болғап үкереп. Тугай сырмалсыҡтары аша үтә алмай яфалана, шуға беҙҙе ҡыуып етә алмай. Мал биклән ҡуя торған ялан кәртәгә барып етергә ашығабыҙ. Һайғауҙар беркетелгән йыуан имән ағасына менергә тип йүгерәбеҙ. Ағас янына килеп еттек. Һайғауҙарға баҫып бер аҙ күтәрелдек. Әммә үгеҙ буйы етерлек ине әле. Һылыуым ҡалтырана. Үрмәләп менеп китергә тотонор ботаҡтар әләктерә алмай ҙа ҡуя. Мин аҫтан этәм. Тырмаша-тырмаша, тыһылдаша-тыһылдаша саҡ үрмәләнек. Уғаса үгеҙ ҙә килеп етте. Ағасты ураттып, үкерә-үкерә йөрөй, мөгөҙө менән ағас төбөн иҙә. Мин һылыуымды тынысландырам:

— Ҡурҡма, ағас тамыры тәрән ул. Йыға алмай, — тием. Үҙем дә ҡурҡам. Был уҫал үгеҙҙе бер кем дә еңә алмаҫ, ни эшләрбеҙ икән, тип уйлайым. Шул саҡ атайым килеп сыҡты. Ағаста ботаҡ араһында ултырған беҙҙе абайламаны ла. Оҙон сыбырткыһын дуғаландырып килтереп бер шартлатҡайны, шажлап үкереп йөрөгән үгеҙ йыуашланды ла ҡуйҙы. Яңы гына беҙгә язалы үлем янаған үгеҙҙе атайым сыбырткыһын бер шартлатып ҡына алды ла китте. Ул һылыуым менән икебеҙҙе үлемдән ҡотҡарҙы. Атайым ҡотҡарҙы!

Беҙ аҙыраҡ тыныслангас, ағас башынан төштөк. Бик ныҡ

асыҡкайныҡ. Ырғытып киткән күнәктә икмәгебеҙ, йыйған емешебеҙ ҡалғайны. Шырлыҡҡа кире барырлыҡ түгел, көн кисләй башлаған. Ҡурҡҡанбыҙ ҙа. Иҫәнголға ҡайтып етерлек көс булһын өсөн аҙ ғына ашап алырға кәрәк. Эргәлә генә Әҡембәт ауылы. Ағас башынан күргәйнем. Был ауылда бер тапҡыр ҙа булғаным юҡ. Шулай ҙа Һоп Сәғәҙей тиған олатайыбыҙ йәшәгәнлеген беләм. Ул Иҫәнголға килгән сағында һәр ваҡыт беҙгә инеп сәй эсеп сыға торғайны. Тик, ни өсөндөр, бөтөнөһөн дә аптыратып гел эсеп йөрөнө. Хәҙерге заманда бындай хәлгә иғтибар итеүсе лә юҡ. Ә ул ваҡытта урамда эсеп йөрөгән кеше юҡ ине. Олатай иҫереп ала ла, үҙен үҙе ҡеүәтләп: "Һоп-һоп, һоп Сәғәҙей!" — тип, Әҡембәтенә ҡайтып китә торғайны. Уның шулай эсә башлауына ололарҙың аптырағандарын хәтерләйем. Үҙ заманы өсөн бик уҡымышлы кеше булған, кешеләргә хаттар, гаризалар яҙып биргән, шәжәрә төҙөгән, ярҙамсыл булған. "Әйҙә, һылыу, һоп Сәғәҙей олатайҙарға барып сәй эсәйек", – тинем. Барҙыҡ. Матур ғына, йәшел үләнле урам. Ауыл бәләкәй генә. Урамдағы бер кешенән: "Сәғәҙей олатайым ҡайҙа йәшәй икән?" — тип һорайым. Әллә ысын, әллә юрый: "Ҡайһы Сәғәҙей! Бында Сәғәҙейҙәр күп ул!" – ти теге ағай. Әле уйлап ҡараһам, ун-ун ике өйлөк Әҡембәттә ҡайҙан Сәғәҙейҙәр күп булһын инде. Шаяртҡандыр. Урам тултырып шаулап йөрөгәне өсөн шулай тиғәндер, моғайын. "Араҡы эскән Сәғәҙей, тип әйтәйемме икән?" – тип уйлап торҙом да, олатайҙың оло ғәйебен асҡан һымаҡ булыр, тип: "Һоп Сәғәҙей олатай," – тинем.

— Һоп Сәғәҙей олатайың урамдың һул ягында номер беренсе өйҙә йәшәй, — тине ағай.

Баҡһаң, урамдың һул ягында уларҙың ғына өйө булған икән. Теге мут ағай тағы шаяртҡан беҙҙе. Һоп Сәғәҙей олатай өйҙә юҡ ине. Өйҙә йөрөгән бер апай, уның ҡыҙы булған, ҡаймаҡ һалып тороп ҡатыҡ тугып, ҡабарып бешкән икмәк ашатты. Йоҡлап ҡайтырға димләне. "Ҡурҡмайһығыҙмы һуң, көн дә кисләне", – тип хәүефләнде. Мин: "Әсәйем борсолор шул", – тигәс: "Нисә йәш һуң һеҙгә?" – тип ҡыҙыҡһынды. "Мин өсөнсө класты бөттөм инде, һылыуым быйыл беренсе класҡа бара. Үҙенә аҡ алъяпҡыс һатып алырға аҡса эшләй," — тинем. Шунан апай:

— Уптым эшкингән икәнһегеҙ, — тип арҡабыҙҙан һөйҙө лә, байтаҡ оҙатып килде. Эйек күпере күренгәс, — был ягына ҡайтып етә алаһығыҙмы? Ҡурҡмайһығыҙмы? — тип һораны. Мин:

— Апай, яфаланып йөрөмәгеҙ. Рәхмәт. Беҙ бер нәмәнән дә ҡурҡмайбыҙ. Атайым үгеҙҙән дә көслө бит ул, — тинем. Быны апай аҙаҡ әсәйемә һөйләгән.

"Үгеҙҙән дә көслө атайым" булыуы минең күңелемә ҙур таяныс ине.

Юлда ҡайтып барғанда, атайым эргәлә булмаһа ла беҙҙең күңелдәребеҙ тыныс булды. Беҙ бер ниҙән дә ҡурҡмай ҡайтып еттек.

"Мине ҡурсалаусы атайым бар!"

Бала күңелендә "Атай" тигән таяныс тойғоһо һаҡланырға тейеш. Ошо тойғо – үҙе үк ҡот ул.

Ҡайһы бер ҡатындар, бигерәк тә ижади йүнәлештә эшләгәндәре, яңғыҙ йәшәүҙе өҫтөн күрә. Йәки хатта гражданлыҡ никахы менән генә бала табалар. Ундайҙар ҙа ишәйҙе. Һәр кем тормошон үҙенсә ҡора. Әммә үҙенә иптәш өсөн тип тапҡан баланың тышҡы күңелен уйлаған әсәйҙәр ҙә, атайҙар ҙа, күп осраҡта, баланың эске күңел донъяһы, уның рухи ныҡлығы, күңел ҡото тураһында уйлап та бирмәйҙәр. Атайҙың да, әсәйҙең дә нисек йәшәүҙе өҫтөн күреүҙәре балаға зыян килтерергә тейеш түгел. Юғиһә, үҙ-ара мөнәсәбәттәрен бала йөрәге аша үткәреп, ғорурлыҡтарын бала аша һиҙҙереп, фәҡәт үҙ мәнфәғәттәрен генә күҙәткән яңғыҙ әсәйҙәрҙең балалары бәләкәйҙән үк күңел ҡотон юғалта. Уларҙы, кәм-хур булмаһын өсөн, нисек кенә кейендермә, ни генә алып бирмә – күңел таянысы тоймағас, былҡы, рухи яҡтан йомшағыраҡ булып үҫә. Әгәр атаһы менән аралаштырыу мөмкинлеге булмаһа, әсәһе, туғандары, олатаһы, ҡартатаһы, өләсәһе, уҡытыусыһы ла рухи таяныс була ала. Әммә күңел таянысы булыу – әпәүләп, етәкләп йөрөтөү тигән һүҙ түгел. Кәрәк саҡта тауҙай ҡалҡып сығырлыҡ, ҡалҡандай ҡаплап торорлоҡ яҡлаусың барлығын тойоу – шул була оло таяныс.

Бала үҫтереүҙе шәхси эш тип кенә түгел, ә милләтебеҙ киләсәге тип ҡарап, хәстәрлекте арттырырыға бурыслыбыҙ.

Бала үҙен башҡаларҙан кәм тойһа ла рухы ҡаҡшай. Үҙеңде даими кәм тойоуҙың ауырыуға әйләнеп китеү осраҡтары ла бар. Йәшәүҙән төңөлөү, башты эскегә һалыу, үҙеңә ҡул һалыу осраҡтары ла бәләкәйҙән үҙен кәм тойоп үҫкәндәр араһында йыш осрай. Бындай саҡта, бала күңеленә һиҙгер әсәй уның башҡаларҙан өҫтөнлөгөн табып, күңелен үҫтереү сараһы тапһа, әлбиттә, рухи ныҡлыҡҡа баһалап бөткөһөҙ тос өлөш һала.

Атайым ат ҡараусы йә көтөүсе, әсәйем колхозсы булып эшләгәнлектән, әлбиттә, аҡса яғы наҡыҫ һәм кейем яғы ла хөрт булды. Район үҙәгендәге түрә балалары бик матур итеп кейенеп йөрөрҙәр, үҙҙәре генә айырым уйнарҙар, беҙҙең менән аралашмаҫҡа тырышырҙар ине. Был хәлде әсәйем һиҙгәндер:

— Кейем туҙа торған нәмә ул. Арзанлы булһа ла таҙа йөрөгөҙ, йылы кейенегеҙ. Яҡшы уҡығыҙ. Мәктәптең Почет таҡтаһына кейем өсөн ҡуймайҙар. Уҡыуығыҙ менән алдырығыҙ. Уҡып сыҡҡас, ҙур кеше булырһығыҙ, матур кейенерһегеҙ. Түрә балалары үҙҙәре баш

эйеп килерҙәр. Әле улар атайҙарының түрәлеге арҡаһында ғына әллә кем булып йөрөйҙәр. Атай малы оҙаҡҡа бармай ул, — тип өйрәтә лә, йыуата ла, беҙҙең башҡаларҙан өҫтөн яғыбыҙҙы күрһәтеп алдаштыра ла ине.

Иҫәнғол ауылында беренсе тапҡыр асылған башҡорт кластарын ҡурсалауҙа, беҙҙе кәмһеттермәүҙә әсәйемдең өлөшө тос булды. "Башҡорт кеше түгелме ни?! Башҡорт булһа, ни еребеҙ һеҙҙән кәм!" – тип әрләшкәндәре лә, "барыбер кеше итәм балаларымды" тип тырышыуҙары ла беҙҙең күңелгә сәм һалғандыр. Бер ваҡыт мине эйәртеп магазинға барҙы. Ниҙер алды. Һатыусының ҡайтарып бирергә ваҡ аҡсаһы булманымы, аҙ булһа ла кәсеп барһын тигән маҡсаты инеме, аҡса урынына төймә бирҙе. Әсәйем төймәне алмағайны, теге һатыусы:

— Ой, ошо башҡорттар томана ла инде, — тине. Әсәйем сиратта тороусыларға боролоп ҡарап:

— Әйтегеҙ әле, үҙ аҡсамды һораған мин томанамы, аҡса урынына төймә тотторған ул томанамы? — тигәйне, һатыусы йәһәт кенә аҡса ҡайтарып бирҙе.

Атайым менән әсәйем өлкәнәйгәс кенә Өфөгә күсеп килделәр. Әсәйем менән урамдан китеп барабыҙ ҙа, ҡаршыға килгән бер ҡатын менән әсәйем бәрелеште. Кеме ғәйепле булғандыр — абайламай ҡалдым. Үҙәк баҙар эргәһе, халыҡ күп. Әсәйемә килеп төртөлгән ҡатын ҡысҡырып тороп:

— Надоели эти националы, приезжают из деревни, не знают как ходить! – тип әрләшә башлағайны, әсәйем тыныс ҡына итеп:

— Своя Башкирия, как хочу — так хожу! — тип кенә яуап бирҙе.

Балалары өсөн дә, үҙ намыҫын һаҡлап та, милләтен ҡурсалап та инә бөркөттәй ташланыр әсәйем минең өсөн ғорур, сәмсел, тапҡыр һүҙле, үҙен дә, беҙҙе лә йәберләтмәҫ кеше булып йөрәктә урын алды, һәм икеләнеүле уйҙар килгән саҡта, уны күҙ алдына килтереп, һәр саҡ һабаҡ алып торор кәңәшсемә әйләнде. Уның үҙен тотошо ла, бирешмәҫ холҡо ла минең ҡотомдо нығыта барғандыр.

Башҡорт халҡының милли үҙенсәлектәренең береһе – туған йәнле булыу. Халыҡта туғанлыҡ тойғоһон бәләкәйҙән тәрбиәләү ҡанына һалынған. Был тәрбиә – туғанлыҡ атамалары менән өндәшеүҙән башланған. Сабыйҙы ҡулға алған Кендек инәһенең тәүге теләктәре лә шулай:

Атайыңа "атай" тип,
Әсәйеңә "әсәй" тип,
Апайыңа "апай" тип,

Абзыйыңа "абзый" тип,
Йомшаҡ ҡына телле бул,
Ипле генә һүҙле бул,
Туғаныңа арҡа терә,
Үҙең дә таяныс бул.

Туғанлыҡтың ҙур таяныс булыуы ҡанға һалынған. Быуаттар, меңәр йыллыҡтар буйы йәшәп килгәнбеҙ икән, туғанлыҡ тойғоһоноң ныҡлығы ҙур әһәмиәткә эйә булған. Был хаҡта ла атайым да, әсәйем дә һәр саҡ иҫкәртә килә ине. Уларҙың үҙҙәренә лә атай-әсәйҙәренән күскән һабаҡ, әлбиттә. Атайым әллә нисә быуын айырылған туғандарҙы ла яҡын итеп, һеҙгә яҡын ғына олатай йәки ағай ул, тип таныштыра ла, ҡайһы берҙәренең ҡайһы яҡтан, нисек туған икәнлеген дә аңлата алмаған осраҡтар ҙа була торғайны. Шунан: "Уныһы һеҙгә нимәгә? Яҡын туған икәнлеген белһәгеҙ – шул булды. Беҙ өйҙә юҡта килһәләр, сәй эсереп ебәрегеҙ!" – тип ҡуя торғайны. Әсәйем туғанлыҡ тураһында төрлө риүәйәттәр һөйләй торғайны. Әлбиттә, туғандар төрлө була. Һәр кемдең үҙ холҡо, үҙ ҡылығы, үҙ ғәҙәте. Туғанды һайлап алмайҙар. Туғанды нисек бар шулай ҡабул итергә кәрәк. Ҡабул итә алмаған ваҡытта ла күңел әрнетер һүҙ әйтмәҫкә, хәтерен ҡалдырмаҫҡа, әйтмәй түҙмәһәң, иң яҡшыһы – өндәшмәҫкә. Тик туған хәтерен ҡалдырырлыҡ, күңелендә төйөр булырлыҡ һүҙ әйтеүҙән тыйылырға кәрәк. Иң ауыр саҡта барыбер туғаның ярҙам ҡулы һуҙа, йән тартмаһа ла ҡан тарта, тип өйрәтә ине ул. Был – әсәйемдең һабағы. Илгизәр улым, өләсәһенең риүәйәтенә таянып, "Башҡорт көсө" тигән хикәйә яҙҙы.

Халҡыбыҙҙа туғанлыҡтан ҡала дуҫлыҡ тойғоһо юғары баһаланған һәм һаҡланған. Һуңғы йылдарҙа ошо ҡиммәтле сифат ҡаҡшаны. Дуҫлыҡты алыш-бирештә файҙаланыу өсөн генә ҡора башланылар. Шул уҡ ваҡытта "башҡорт тарҡау, башҡорт үҙ-ара ыҙғышлы" тигән уйҙырма хәбәрҙәр ҙә таратыла. Шул арҡала үҙ-ара мөнәсәбәт ҡото китә. Әлбиттә, бар ундай күренештәр. Әммә был дөйөм башҡортҡа хас ғәҙәт түгел. Батшалар сәйәсәте арҡаһында аҡрынлап һеңдерелгән ул. Миҫал өсөн бер факт килтереп китеү урынлы булыр:

1735-1740 йылдарҙағы Ҡараһаҡал ихтилалы башланыр алда, 1734 йылда Сенаттың обер-секретары И. К. Кириллов, Башҡортостанда колониаль сәйәсәтте әүҙемләштереү планы эшләй. Ошо планда башҡорттар араһында эске тарҡаулыҡ башларға, феодалдарын һатып алып, урыҫ властарының терәгенә әйләндерергә,

тигән тәкдимдәр була. Императрица Анна Иоановна был планды раçлай, уны бойомға ашырыу өсөн, "Ырымбур экспедицияһы" тигән атама менән махсус экспедиция ойоштороpға ҡарар ителә. Башҡортто тарҡатыу буйынса эшләнгән махсус сараларҙан һуң да халҡыбыҙ, милләт булараҡ, үҙен һаҡлап алып ҡалған икән, тимәк, уның йәненә ҡот бирерлек, эске рухын берләштереп тороpлоҡ көс булған. Был көс — туғанлыҡ, татыулыҡ, дуҫлыҡ тойғоһо. Тимәк, халҡыбыҙ ҡанында был тойғо бик көслө булған, уның ҡеүәтен тергеҙергә генә кәрәк беҙгә. Үҙ-ара ызғыш, низағ, әсе телләнеү, бер-береңдән көнләшеү, һәләтлеләрҙе һанға һуҡмау, кәмһетергә тырышыу, үс алыу, милләтең тураһында насар хәбәрҙәрҙе хуплау һәм башҡа шундай татыулыҡты ҡаҡшатыусы ғәҙәттәр халыҡтың ҡотон ебәрә. Тимәк, ундай кешеләр, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, Анна Иоановнаның планын тормошҡа ашыра. Халыҡтың күңел ҡотон ҡаҡшата.

Был ҡотто һаҡлауҙы үҙеңдән, ғаиләнән башларға кәрәк.

Һуңғы йылдарҙа ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәренең ирҙәр менән тиң хоҡуҡлы булыуҙарын төрлөсә аңлатып маташалр. Әммә эштәге тиңлек ғаилә тормошона ҡайтып ҡалырға тейеш түгел. Ғаиләлә ирҙең дә, ҡатындың да урыны тәбиғи бүленешенсә барһа, ғаиләлә тыныслыҡ һаҡлана. Ҡатын-ҡыҙҙың ғаилә усағы йылыһын һаҡлаусы, ғаилә ҡотон үҙендә йөрөтөүсе булыуын бер ваҡытта ла оноторға ярамай. Ғаилә ҡото һаҡлау — ҡатын-әсәнең төп бурысы. Ҡот булған ғаиләлә балалар рухи яҡтан ныҡлы булып үçә. Заман тайпылыштарына бирешеп бармай. Тирә-яҡ мөхит ниндәй генә тәьçир итеп маташһа ла, бала үҙен һаҡлап алып ҡала ала.

Ғаилә ҡотон һаҡлау, башлыса, әсә ҡулында.

Үҙ өйөмдә ҡот тапманым

Илшат ҡала мәктәптәренең береһендә туғызынсы класта уҡыған саҡта, йыл уртаһында тип әйтерлек өләсәһе янына китә.

...Илшаттың атаһы менән әсәһе республикала күренекле кешеләр. Илшатҡа йорт алды балалары менән аралашмаçҡа, фәҡәт мәктәптәштәре, класташтары менән генә дуçлашырға, тиҙәр. Илшат шулай эшләй ҙә. Мәктәптән һуң төрлө спорт күнекмәләренә лә, музыкаға ла йөрөй. Буш ваҡыты бик аҙ ҡала. Әммә бер ваҡыт уны "ишек алды малайҙары" эләктереп ала. Үҙҙәрен төрмә тормошона әҙерләп, тоткон булыуҙан ниндәйҙер романтика эҙләп, төрмәлә ултырыусы тоткондар хаҡында йырҙар йырлап, хатта төндә-

рен урамдарға суҡмарҙар, кастет, сылбыр, арматура киҫәктәре, бысаҡ, мунчак тотоп сығып, кеше талап, туҡмап, әйбер урлап йөрөгән был малайҙарға өлкәнерәктәре "ул-был була ҡалһа, ҡотҡарыусы кеше" кәрәклеге тураһында иҫкәрткәндәр һәм хатта ул "ҡотҡарыусының" ниндәйерәк кеше булырлығын да өйрәткәндәр. "Ҡотҡарыусы кеше республикала билдәле йәки аҡсалы кеше булырға тейеш. Ә бындай кешене үҙҙәренең "яҡын дуҫы" итеп алыу өсөн балаһын үҙ компанияңа йәлеп итергә кәрәк," — тип өйрәткәндәр. Һәм малайҙар бындай үҫмерҙе табалар. Уларҙың ҡармағына Илшат эләгә. Иң тәүҙә был малайҙар, һыныҡтан һылтау табып, Илшатты биргеҫләп алалар. Ул көнө Илшат беренсе тапҡыр бер ҡыҙҙы оҙата бара, малайҙар уны күҙәтә килеп, ҡатығына янап, ул ҡыҙҙы тағы бер тапҡыр оҙата ҡалһа, үлтереп китәсәктәрен дә әйтеп ҡуялар. Үҙҙәренең төрмәнән дә, милициянан да ҡурҡмауҙарын, хәҙерҙән үк тотҡон тормошона әҙерләнеүҙәрен дә әйтәләр. Был турала кемгә булһа ла берәй һүҙ ысҡындырыуҙан да ҡәтғи тыялар. Улар күмәк була. Ошо көндән башлап Илшаттың һәүетемсә тыныс ҡына барған тормошо ғазапҡа әйләнә. Илшат мәктәптән ҡайтҡан юлда, ҡара сәүкәләр һымаҡ теҙелешеп, ҡаршы сығып торалар. Илшат иртән мәктәпкә барған саҡта, кисен улар яныңа сығырға тейешлеген иҫкәртеп, уратып алалар ҙа, һүҙен алғас ҡына дәрескә индереп ебәрәләр. Бер аҙҙан "үлем" менән ҡурҡытып аҡса талап итә башлайҙар. Илшат милиция бүлегенә бара. "Улар бөтәһе лә беҙҙә иҫәптә. Әммә уларҙы ҡулға алырға беҙҙең хаҡыбыҙ юҡ. Улар бер ниндәй ҙә эш боҙмағандар әле", — тиҙәр. "Берәй нәмә булһа, һуң була бит! Иҫәпкә алыуығыҙҙан ни файҙа?" — ти Илшат, өҙәләнеп.

— Ни эшләп файҙа булмаһын? Берәй хәл була ҡалһа, уларҙың барыһын да ҡулға алабыҙ. Эҙләп-нитеп тораһы юҡ, — тиҙәр уға. Илшат был хаҡта атаһына әйтә. "Ҡурҡма, беҙ бит криминаль илдә йәшәмәйбеҙ. Аралашма улар менән. Ә инде бик бәйләнә башлаһалар, сараһын күрербеҙ," — тип "тыныслandырыуҙан" ары китмәй. Был хаҡта әсәһе белһә: "Мин һиңә әйттем бит, бәйләнмә, тинем, әсәйҙе тыңламаһаң, шулай була ул!" – тигән оло ғауғанан башҡа бер ниндәй ҙә фәтеүә булмаясағын белеп, әсәһенә өндәшмәй. Өҫтәүенә, әсәһе ғилми дәрәжә өсөн диссертация өҫтөндә эшләй, уға ҡамасауларға, кәйефен боҙорға ярамай. Эштән бик һуң ҡайта, бик иртә китә.

Илшат атаһының бер туған ағаһына бара. Ул шофер һәм алыҫ рейстарға йөрөй. Олатаһының машина кабинаһына, янына ултырып барыһын да һөйләй. "Олатай, үҙең менән бергә йөрөт мине.

Мин йыл аҙағында имтихан бирергә килермен. Уҡытыусылар менән һөйләшермен," — тип үтенә. Олатаһы: "Юҡты ҡуйыртып йөрөмә. Яҡшы уҡыуыңды бел. Һин китһәң, атайың менән әсәйең тураһында ни тип әйтерҙәр? Бер балаһын да ҡарай алманылар," — тиерҙәр бит, тип кенә ҡуя. Ҡалала шундай малайҙарҙан төрлө төркөмдәр ойошторолоуын, Илшатҡа, ысынлап та, ҙур хәүеф янауын уйлап та бирмәй олатаһы. Ҡустыһы менән киленең исеменә "тап төшөүҙә" үҙенең ғәйепле булып ҡалғыһы килмәй.

Бер көн кис Илшатты өйгә ҡайтармайҙар малайҙар. Ике ҡатлы йорттоң ҡыйыҡ аҫтына алып барып, үҙҙәренең "һөжүмгә" әҙерләнеүҙәре хаҡында әйтәләр.

— Һин ҡарауылда торасаҡһың. Беҙ туҡмаған саҡта милиция килерен алдан иҫкәртә алмаһаң, беҙҙе тотһалар, яҡты донъя менән хушлашаһың. Ә хәҙер — взнос!

— Минең ҡулда аҡсам юҡ.

— Иртәгә табаһың. Беҙ мәктәптән сығыуыңды көтөп торасаҡбыҙ. Һин беҙҙең шартты беләһең. Йәки... Йәки... — тиҙәр.

Илшат мәктәптән атаһына шылтырата.

— Атай, мине килеп ал. Мин бөтөнөһөн дә һөйләйем.

— Миңә һөйләнеләр инде. Бына яңы ғына класс етәксең шылтыратты. Был сиректә бер генә лә ыңғай билдәң юҡ. Бөтөн предметтарҙан да "икеле"ң бар. Көн һайын дәрескә һуңлайһың, хатта килмәгән осраҡтарың да бар икән.

— Атай, ни өсөн икәнлеген һөйләйем. Машинаң менән килеп ал.

— Бөгөн ваҡытым юҡ. Ҡайтҡас, һөйләшербеҙ.

Илшат әсәһенә шылтырата. Әсәһенең эш буйынса ҡайҙалыр киткән сағы була.

Илшат беренсе тапҡыр малайҙар һораған аҡсаны бирә һәм "башланды" тип уйлай. Бының аҙағы ни менән тамамланырын ул белә. Төрмә "романтикаһы" менән йәшәгән малайҙар: "Беҙгә кемде туҡмаһаҡ та, кемде үлтерһәк тә барыбер", — тиҙәр.

Илшат өйөнә ҡайтмай. Төнгө поезд менән ауылға, өләсәһенә китә. Ауылға барып еткәс тә, атаһы менән әсәһе борсолмаһын өсөн, телефондан шылтыратып иҫкәртеп куя һәм башҡаса өйгә ҡайтмаясағын әйтә:

— Тик, зинһар, минең ҡайҙа икәнлегемде бер кем дә белмәһен. Мәктәпкә лә әйтмәгеҙ. Документтарымды ғына алып ебәрегеҙ. Был минең һуңғы үтенесем булыуын теләмәһәгеҙ, әйтмәгеҙ, — ти.

Атаһы менән әсәһе Илшаттың бындай ҡарарына шатланалар ғына. Сөнки әсәһенә диссертацияһын тамамлау өсөн тыныслыҡ

кәрәк, ә атаһы командировкаларға уйһыҙ-борсолоуһыҙ сығып китер. Шуның өсөн Илшаттың ҡарарына риза булыуҙарын әйтәләр. Тик улар Илшаттың ғаиләне, үҙҙәрен бөтөнләйгә ташлап китеүен һәм шуның менән өйҙәрендә ҡот юғала барыуын баштарына ла килтермәй.

Илшат урта мәктәпте тамамлай, үҙе теләп армияға китә. Ике йылдан һуң хеҙмәтен тамамлауы, ҡайтырға әҙерләнеүе тураһында атаһы менән әсәһенә хәбәр итә. Ул армияла ваҡытта ҡарыуы ҡайтҡан өләсәһен ҡарттар йортона тапшыралар. Уны бағырға береһенең дә ваҡыты булмай. Илшатҡа, өләсәйеңде үҙебеҙгә күсереп алдыҡ, тип кенә яҙалар. Илшат армиянан ҡайтып инеү менән: "Өләсәйем ҡайҙа?" — тип һорай. Атаһы менән әсәһе уны ваҡытлыса ғына Октябрьский ҡалаһына ҡарттар йортона алып барып ҡуйыуҙары, әсәһе диссертацияһын яҡлағас та барып аласаҡтары хаҡында әйтәләр. Әммә Илшат шул уҡ көндә өләсәһе янына китә, һәм уны алып, туп-тура ауылға ҡайта. Иң ауыр ваҡытта уны аңлаған, бәләкәй бала һымаҡ башынан һыйпап яратҡан, йыуатҡан, мәктәп уҡытыусылары менән барып һөйләшеп, класынан түбәнәйтмәй дауам итергә ярҙам иткән өләсәһе йортона, үҙ итеп ҡабул иткән мәктәбенә, ауылдаштарына ҡайта ул.

Был хаҡта ишеткәс, мин инәйҙе күреп ҡайтырға булдым. Шәжәрә буйынса нисәнселер быуын тоташҡан, сыбыҡ осондай туғанлығы ла булған был инәй тураһында һораштырғылай инем. Уның Октябрьский ҡалаһынан ауылдаштарына шифри хаттар яҙҙырып ятыуы һәм ейәненең килеп алып ҡайтыуы хаҡындағы ваҡиғаны ишеткәйнем.

Йорт бик матурлап һипләтелгән, иркен ишек алды йәм-йәшел үлән. Машина килеп туҡтағанын ишетеп, Илшат килеп сыҡты. Уның артынса уҡ инәй күренде. Оҙон буйлы, матур йөҙлө ейәне яныңа бәләкәсләнеп кенә киткән инәй килеп баҫты.

Беҙ килеүгә ҡыуанып, йөҙө көндәй балҡып китте, туҡтауһыҙ кеткелдәп көлгән булды.

— Эшкә киткән саҡта, ташлап китеүҙәре ҡыйыныраҡтыр инде, — тип һораным.

— Киленең һәйбәт, апай. Өләсәйемде мин нисек яратам, ул да шулай уҡ. Өләсәйем дә уны шулай яҡын күрә. Әле ул өйҙә булмағанға миңә һыйынып тора.

— Әле килен ҡайҙа?

— Балалар менән һыу инергә китте.

— Балаларың нисәү?

— Әлегә өсәү, — тип көлөп ҡуйҙы ул. — Армияла ваҡытта артабанғы тормош юлы хаҡында күп уйлана торғайным. Балаларҙы ишле итергә, ауылдан китмәҫкә, тигән һығымта яһаным. Ауылдан башҡа бер ҡайҙа ла толҡа тапмаҫ һымаҡмын. Йән тартылып тик торҙо ошонда.

Сәйгә инеп, яйлап һөйләшергә ваҡытым наҡыҫ ине. Хушлаштым. Һомғол буйлы Илшатҡа эргәһендә торған бәләкәй генә өләсәһенән нур, ҡот һирпелеп торған кеүек ине. Улар икеһе лә ҡояштай балҡып, йылмайып оҙатып ҡалды.

Илшат атаһы менән әсәһе тураһында бер ни ҙә өндәшмәне. Мин дә төпсөнөп һорашып торманым. "Ғаилә тарҡалған. Әсәһе ғилми етәксеһенә кейәүгә сыҡҡан да йәшәй алмай, тағы өсөнсө тапҡыр никахҡа ингән. Атаһы яңғыҙы йәшәй. Ауылға, улы менән әсәһе янына килгеләп китә икән", — тип сала-сарпы ғына ишетеп ҡалғайным.

Ғаилә ҡото — ҡатын-әсәйҙә

Университетта бер йылдарҙа уҡыған төҫкә бик һылыу бер ҡыҙ үҙенә тиң матур, һомғол буйлы бер егеткә кейәүгә сығып татыу ғаилә ҡороп ебәрҙе. Әммә балалары үҫеп бөткәс кенә ғаилә тарҡалыу сигенә килеп етте. Теге ҡатын әле бер, әле икенсе ҡатындарҙан ирен көнләшеп, ғауғалап, тауыш күтәреп йөрөй башланы. Бер саҡ был ир урамда мине осратып, арҡамдан ҡағып:

— Тәки кеше итеп алып бараһың балаларыңды. Биш бала әйтеүгә генә еңел бит, — тип, дуҫтарса ихлас маҡтап китте. Был осрашыу уның ҡатынына ишетелгән. Бер аҙҙан бик ҡалын хат алдым, тәүге юлдарын ғына уҡып ҡараным да хатын кире һалырға булдым. Шунан тағы, бер юлы хат яҙайым, бәлки ҡолаҡ һалыр, тип уйланым, сөнки уны мин ихлас йәлләнем. Матур, илгәҙәк, ихлас ҡыҙ ине уҡыған саҡтарҙа. Ире лә һәйбәт кеше, ғаиләләре лә татыу ине. Ҡасан, ни өсөн ғаиләһенән ҡот китеүен: бәлки аңлап та етмәйҙер. Уның үҙенә үҙен күрһәтергә кәрәк. Көҙгө бушҡа уйлап табылмаған. Кеше көҙгөнән ҡарай ҙа тышҡы ҡиәфәтен рәткә килтерә. Шуның кеүек үк кеше фекеренә ҡолаҡ һалыу – үҙеңде көҙгө аша күреүгә тиң.

"Һаумы, Көнһылыу!

Хатыңды алһам да яуап яҙмай йөрөй инем. Сөнки ул хатты уҡып та бөтмәгәйнем, аңламаным да, аңларға ла теләмәнем. Икенсенән, үҙеңде күреп һөйләшергә теләгәйнем – юл да төшмәне, ва-

ҡыт та тапманым. Әле бына нисә йылдарҙан һуң осраттым да – таныманым. Ысынлап та, таныманым. Бер йылдарҙа уҡыған ҡыҙҙар араһында матурҙарҙың матуры инең бит. Танымайыраҡ торғас, һирпелеп ҡарап алдың да: "Мине танымаһаң да иремде бик таныйһың әле", – тинең...

Бына ни өсөн шулай тиҙ үҙгәргәнһең, йәмһеҙләнгәнһең икән... Көнсөллөк кешенең йөрәген ашай, һаулығын бөтөрә бит ул. Тәбиғәт матурлыҡты кеше һоҡланһын өсөн ярата. Ә һин тәбиғәттең шундай гүзәл бүләген һаҡлай алмағанһың. Яһиллығың, телеңдәге әшәке һүҙҙәр – хатыңа ҡарап әйтәм – йөҙөңдәге нурҙы ҡаплаған, иман юғалған, һөйкөм киткән. Кешенең йөҙөнән һөйкөм китһә, бер ниндәй биҙәк тә уны ҡайтара алмай. Хатта ҡатындарҙың иң ҙур матурлығы булған әсәйлек наҙы ла, томан артында ҡалғандай, тойолмай. Көнләшеү – бик алама сир. Ҡара нур ул. Кешене солғап алған аҡ нурҙар урынына ҡара нур тарала. Ул йөҙөңә сыға, йәшәү дәртен, тормош ҡотон ала. Ә ҡотһоҙ бәхеттең мәғәнәһе юҡ. Бәхет ҡотон көнсөллөк туты ҡаплай бара. Бөтөн ғаиләң өсөн фажиғә. Ирҙе ҡайғы баҫа, ара һыуына, балалар ике ут араһында ҡала. Әсәй ҙә йәл, ул да хаҡлы һымаҡ, сөнки атайҙың ғаиләгә күңеле һүрелгән – әсәй был хаҡта минут һайын тыҡып, балаларының "күҙен асып" тора. Балалар ышана, сөнки атайҙың ғаиләгә мөнәсәбәте күҙ алдында. Сәбәбенә төшөнөп етмәй. Әсәй йәл. Уның бар хәстәрлеге атайҙы ғаиләгә кире ҡайтарыу. Кире ҡайтарыуҙың ысулы – ирҙе туҡтауһыҙ битәрләү, эҙәрлекләү, һүгеү, кеше алдында, балалар алдында йөҙөнән алыу, тип уйлай улар ҙа...

Үҙеңде таныйһыңмы, Көнһылыу? Был бит һин. Ә ниндәй көләкәс һылыу инең. Шул сағыңа ҡайт. Иреңдең үлеп ғашиҡ булған сағыңа ҡайт. Уны күргән саҡта элеккесә йөҙөң яҡтырып, күҙҙәрең осконланып, керпек остарыңдан нур һирпелеп китһен. Ашарына бешергән саҡта, йырлай-йырлай йөрө. Күңелендәге ихласлыҡ, йөҙөңдәге иман усыңдағы йылылыҡ аша аш-һыуыңа күсһен. "Бисмиллалы аш" тиҙәр өлкәндәр уны. Телгә таты, тәнгә шифаһы, йәнгә сихәте йоғоп тора ундай аштың. Күңел һалып эшләгән һәр эштән нур бөркөлөп тора. Күҙгә күренмәһә лә һиҙелеп тора уның тартыу көсө. Сағыштырып ҡара әле: ихлас әҙерләнгән һөтлө сәйең ресторандарҙа ашаған әллә ниндәй затлы аҙыҡтарҙан татлыраҡ. Ресторандарҙағы аш туйҙырған һымаҡ булһа ла йоғошо юҡ. Дөйөм бешерелгән ашҡа күңел нуры һалынмай. Ошо хатты уҡығас, бер быуа миңә асыуланып йөрөп ал да – яңы Көнһылыуға әйлән. Шул көндә үк күңел нурыңды һалып бәлеш бешер. Балаларыңды, ейәнейәнсәрҙәреңде өҫтәл уратып ултырт. Ҙур, боҫрап торған бәлешең-

де өҫтәл уртаһына ҡуйып, өлөштәргә бүл, иң элек иреңә, шунан үҙеңә өлөш сығар, шунан ымһынып ултырған, сыҙамлылыҡ ҡунып өлгөрмәгән иң бәләкәйеңә, артабан инде йә ололата, йә ултырған урындарына ҡарап сиратлап, башҡаларына бүлеп сыҡ. Йылы, яғымлы һүҙҙәр әйт. Тәбиғи килеп сыҡмаҫтай икән – өндәшмә. Ашаған саҡта әйтелгән рәхмәтле һүҙҙәр ҙә, рәнйеү һүҙҙәре лә башҡаларға ғына түгел, үҙеңә лә кире ҡайта. Йә аҡ нурлы ҡот булып, йә ҡара нурлы бәхетһеҙлек булып.

"Ҡыҙғанам был ғүмеремде, тын алған һайын кәмей" тигән йырҙы беләһең бит. Бергәләшеп йырлай инек. Башҡорт төркөмө йырҙы күп белә, тип, беҙҙең янға йүгереп килә инең. Ошо йырҙы онотторҙомо ни? Ни эшләп ғүмереңдең һәр минутының ҡәҙерен белеп йәшәмәйһең? Миңә: "Диҡҡәт менән ун биш кенә йыл йәшәп ҡалдығыҙмы? Бигерәк аҙ ғына шул", – тиҙәр. Аҙ, әлбиттә. Әммә беҙ уның һәр минутының, бергә булыуыбыҙҙың һәр мәленең ҡәҙерен белеп йәшәнек, һәм әле лә шул саҡтарҙың йылыһы, наҙы, ҡото менән йәшәйем. "Ни эшләп шулай рәнйеттем икән?!" – тип үкенерлек хилаф аҙым эшләмәнем. Ғүмерҙең һанап ҡына бирелгән ҡәҙерле минуттарын бушҡа үткәрәһең. Ирең һине ташлай алмағандан, һинән ҡурҡҡандан китмәй тип уйлама. Уның ярты ғүмере, йәшлеге, ҡайнар мөхәббәте, балалары менән ҡуша йөрәге тороп ҡала бит. Бүлгеләнеү еңел буламы ир кешегә? Олоғайған көндә сөкөрләшеп һөйләшеп, береңдең ҡәҙерен берең белеп, үткәндәрҙең матур мәлдәрен иҫкә алып йәшәүҙән дә олораҡ бәхет бармы ни? Үҙ холҡоң арҡаһында сиргә һалышып бөтһәгеҙ, ҡарт көнөгөҙ сир дауалауға ғына бағышланыр бит. Башҡаларға күҙ һал. Хәҙер һин башҡаны күҙәтеп, үҙеңде төҙәтеп фәһем алыр йәштәһең. Ир ҡәҙерен белмәгән ҡатындар бала хөрмәтен күрә алмай, ҡатын ҡәҙерен белмәгән ирҙәрҙең йә ҡатыны иртә үлеп кеше ҡулына ҡарап ҡала – ҡәҙерһеҙ йәнгә әйләнә, йә ҡатын күҙенә ҡарап әсенеп ятырлыҡ итеп оҙайлы ауырыуға дусар була, йә ҡатыны ҡаты сиргә дусар булып, йәш сағында күрһәтә алмаған хәстәрлекте ҡартайған көндә ҡайтарырға мәжбүр була ир. Тәңребеҙ көҙрәте менән донъялыҡтағы донъялыҡта ҡайта.

Бәхетле бул, бәхетеңдең, һәр атҡан таңыңдың ҡәҙерен бел, Көнһылыу! Иртәнсәк иртә менән тор, йылмай, матур кейемеңде кей, сәсеңде элеккесә матур итеп төйнәп ҡуй, тәмле итеп ашарға әҙерлә лә яғымлы тауыш менән ғаиләңде уят. Сәйҙе үҙең яһап эсер. Киске ашҡа бәлеш һал.

Өйөңә нур ҡайтар, ҡот ҡайтар. Йома көн бер нисә әбейҙе, бабайҙары булһа, бабайҙарын да саҡырып ал. Ият уҡыт, хәйер бир.

Йортоңа изге теләктәр теләп, ҡот сәсеп китһендәр.

Ҡыуаныстың ҡәҙерен белгән һайын ишәйә. Бөтөрөнгән һайын булғаны юҡҡа сыға. Тәңре ҡыуанысты ла, ҡайғыны ла тәүҙә һынамаҡ өсөн бирә, тиҙәр.

Хатыңды үҙеңә кире һалам.

Иреңдең эшкә һәләтлелеген, балаларыңдың тыныслығын, киләсәккә өмөтөн, үҙеңдең сәләмәтлегеңде һәм һылыулығыңды кире ҡайтар. Ул һинең ҡулда. Ғаилә бәхетенең ҡотон ебәрмә".

Йылдар үткәс, беҙ Ейәнсура районынан Өфөгә кире ҡайтҡас, Көнһылыуҙың улы, мине осратып: "Минең әсәйем һеҙҙе ныҡ ихтирам итә. Ғаиләм именлеген һаҡлап ҡалыуҙа ярҙам итте миңә, ти", – тине. Мин тағы бер ғаиләнең сәләмәт тормош менән йәшәп китеүе өсөн шат булдым. Үҙен бик дорфа, тәкәббер тота башлаған Көнһылыуға был хат ярҙам иткән икән, бәлки, башҡаларға ла фәһеме тейер тип, тәҡдим итеүем.

Тыуған көн

Ғаилә ҡото булмауҙың күҙгә күренмәгән тағы бер сәбәбе тураһында.

Бер абруйлы ғына дуҫтың тыуған көнөнә барҙыҡ. Өҫтәл бик мул итеп әҙерләнгән. Тик ҡатыны, мин ауырып торам, һеҙ үҙегеҙсә һөйләшегеҙ, мин барыбер һеҙҙеңсә аңламайым, тип, бүлмәһенә инеп китте. Был һүҙҙәрҙе ул асыуланып та, үпкәләп тә әйтмәне, ихлас әйтте. Мәжлес өсөн был хәл күңелһеҙерәк тойолһа ла, бер аҙҙан ҡыҙмасараҡ булып алғас, осо-ҡырыйы булмаған һөйләшеүҙәр, бәхәстәр башланды. Мәжлестә хужабикәнең юҡлығы ла һиҙелмәне. Хужа-юбиляр баянда оҫта уйнай һәм "Сибай" йырын яратып йырлай торғайны. Мәжлестәгеләр уның йырлап-уйнауын һорағас, ул ҡулына баянын алып, һуҙып ҡына ебәргәйне, тағы бер бүлмәнән улы килеп сығып: "Началось..." – тип, тәрән көрһөндө лә, ишекте ябып ҡуйҙы. Был юлы инде йырҙың да, артабанғы уйын-көлкөнөң дә ҡото китте. Мәжлес оҙаҡ дауам итмәне, өҫтәлдәге һый тороп ҡалды, табын тәрбиәләргә тип ашхананан саҡырылған ҡатындың: "Так у нас ведь первое есть, второе... Куда торопитесь?" — тип аптыраулы һорауы аҫтында ҡунаҡтар таралышты.

Әйтергә кәрәк, байтаҡ йылдар үткәс, был ир, үҙ ғаиләһендә үҙен, уның моңон аңлаған рухи дауам ҡалдыра алмағанлыҡтың сәбәбен төшөнгәс, халыҡ араһында сығыш яһаған саҡта, ҡатнаш ғаилә ҡороуҙың һәләкәт икәнлеген телгә алып: "Милләттең һаныңа

ла, ҡотона ла зыян килтерә торған оло хата был", — ти ине сығыштарында.

Ә уға был хаҡта күпме аңғартһаҡ та тыңламағайны. Ни эшләп кеше башҡалар хатаһынан һабаҡ алмай, мотлаҡ үзе хаталанырға тейеш икән? Халыҡтың "кешегә күҙ һал, үҙеңә фәһем ал" тигән ҡанатлы һүҙҙәре лә юҡҡа ғына әйтелмәгән дә бит...

Йәшәйеш ҡото

"Йәшәйеш ҡото ҡатын-ҡыҙҙар ҡулында. Беҙҙең журналыбыҙ әсәйҙәр тәрбиәләргә тейеш", — тине шағир Рәми Ғарипов, "Башҡортостан ҡыҙы" журналы ойоштороп, яуаплы сәркәтибе булып эшләй башлағас.

Журналдың йүнәлешен, маҡсатын билдәләүҙә беҙ фекерҙәш инек. Тәүге осрашыуҙа уҡ беҙҙең мөнәсәбәттәр йылы төҫ алғайны һәм шағир, бәлки, үҙе лә һиҙмәҫтән, миңә ижад ҡото һалғайны.

Рәми Ғарипов менән тәүге тапҡыр күҙмә-күҙ 1964 йылда, ул "Совет Башҡортостаны" гәзитендә әҙәби бүлектә эшләгән саҡта осраштыҡ. Мин Башҡорт дәүләт университетында дүртенсе курста уҡыған саҡта үҙ хикәйәмде тәү тапҡыр Ейәнсура районы гәзитенә тәҡдим иткәйнем. Баҫылып сыҡҡас, курсташым Рәшит Шәкүр уҡыны ла "Совет Башҡортостаны" гәзитенә алып барырға кәңәш бирҙе. Редакцияға бер тапҡыр ҙа барғаным юҡ ине.

— Унда кемгә барайым? — тигәс, Рәшит Шәкүр:

— Рәми Ғариповҡа бар. Ул әҙәби бүлектә эшләй, — тине.

Талантлы шағир Рәми Ғарипов тураһында беҙ хәбәрҙар инек инде. Уны хатта ауылдан килеп, университет залында шиғырҙарын уҡып киткән сағында яҙа-йоҙа күреп тә ҡалғайным. Ишек янына бөтөнләй үтеп булмай, махсус рәүештә нышып тултырып ҡуйған кеүек, шығырым тулы халыҡ ине. Уны шып-шым тыңлағайнылар. Әле тыуған районында эшләп, яңынан Өфөгә ҡайтҡайны. "Йүрүҙән", "Таш сәскә", "Һабантурғай йырҙары" исемле шиғырҙар йыйынтығын бик яратып уҡый инек. Мин уға барырға уңайһыҙланыуым хаҡында әйткәс, Рәшит Шәкүр шағирҙың йәштәргә бик иғтибарлы, әммә тура һүҙле булыуы хаҡында ла әйтте. Редакцияға барҙым. Хикәйәмде бирҙем дә коридорға сығып көтөп торҙом. Имтихан биреүгә тиң ине был көтөү. Бер аҙ ваҡыт үткәс, шағир мине бүлмәгә саҡырҙы һәм:

— Бер генә өтөр ҙә өҫтәмәйем. Алдағы аҙнала уҡ номерға бирәм, — тине. Мин университетҡа нисек ҡайтып етеүемде лә белмәйем.

Осканмындыр... Иң элек Рәшиткә әйттем ҡыуаныслы хәбәремде.

Рәшит Шәкүр: "Рәми Ғариповтың улай тип әйтеүе бик ҙур баһа!" — тине.

"Ағиҙел" журналында 1965 йылда "Тәүге дәрес" тигән хикәйәм фото менән баҫылып сыҡҡас, Рәми Ғариповтың яҡын дуҫы, интернатташы Диҡҡәт минең менән ҡыҙыҡһынған, һорашҡан. (*Бер йылдарҙа Мәскәү вуздарында уҡыған егеттәр һәм ҡыҙҙар Өфөлә лә яҡындан аралашалар ине. Илшат Йомаголов, Гөлли Мөбәрәкова, Зинира Атнабаева, Рафаэль Сафин, Рәми Ғарипов, геологтар Басир Мәһәҙиев, Мираҫ Исмәғилев, Ая Тимергазиналар татыу бер гаилә кеүек йәшәнеләр*). Рәми Ғарипов мине күреүе, белеүе хаҡында әйткән һәм, әгәр Диҡҡәттең теләге булһа, таныштырырға ла әҙер икәнлеген белдергән. Әммә танышыу осраҡлы ғына, Сафуан Әлибаевтарҙа килеп сыҡты. Рәми ағай аҙаҡ ҡына белде.

Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн журнал сығарыу мәсьәләһе хәл ителеп, Рәми Ғарипов яуаплы сәркәтип итеп билдәләнгәс, уның иң элек беҙгә килеүе, кәңәшләшеүе һәм тәүге һанын әҙерләшеүҙә, журналға яҙылыу ойоштороуҙа ярҙам һорауы бер ҙә ғәжәп түгел ине. Мин ул саҡта Илгизәр улым менән декрет отпускыһында инем. Улым 1967 йылдың июль айында тыуҙы, декабрҙә журналдың беренсе һанын әҙерләй башланыҡ. Журналға эш хаҡы, бүлмә мәсьәләһе хәл ителмәгән, ә ғинуар айында беренсе һаны нәшер ителергә тейеш. Редактор — шағирә Кәтибә Кинйәбулатова, үҙенең ижадын ситкәрәк ҡуйып, журналға бина эҙләү менән мәшғүл булды. Ә беҙ, Рәми Ғарипов, Диҡҡәт журналдың йөкмәткеһе хаҡында баш ватабыҙ. Эш хаҡы йәки башҡа төрлө түләү тураһында ла, минең артабан журнал редакцияһында эшләүем-эшләмәүем хаҡында уйлаған да юҡ. Беҙҙең өсөн иң ҙур ҡыуаныс – ҡатын-ҡыҙҙар өсөн башҡортса журнал сыға башлауы. Журнал юллап ҡултамғалар йыйыуҙа әүҙем генә ҡатнашҡайным.

Рәми Ғарипов:

— Һеҙ был журналдың әһәмиәтен нисек күҙ алдына килтерәһегеҙҙер, минеңсә, ул халҡыбыҙ яҙмышында бик ҙур үҙгәреш индерергә тейеш. Милләттең киләсәген әсәләр тәрбиәләй. Ә беҙҙең журнал башҡорт әсәйҙәре тәрбиәләргә тейеш. Илле-алтмыш йыл эсендә беҙ башҡортто сифат яғынан да, һан яғынан да йылдам рәүештә күтәрергә, халҡыбыҙ ҡаҙаныштарын донъя кимәленә сығарырлыҡ йәштәр үҫтерергә тейешбеҙ. Журналдың теле шул тиклем бай һәм һутлы булырға тейеш, уны уҡыған рус телле башҡорттар үҙ телдәренә ғашиҡ булып, өйрәнә башлаһындар, ә әсәйҙәр үҙ балаларын туған телдән яҙҙырмау өсөн бөтөн сараларҙы

күрһендәр. Быны фәкәт журнал ғына эшләй ала. Матбуғаттың аңға тәьҫир итеү көсө иҫ китмәле бит ул! — тине.

Журнал тураһында Жәлил Кейекбаев менән дә, Баязит Бикбай менән дә фекер алыша ине. Берәйһе менән һөйләшкән, яңы фекер туплаған һайын, ул беҙгә килер һәм беҙ журналдың йөкмәткеһе, йүнәлеше тураһында хыяллана башлай торғайныҡ. Журналдың штат берәмектәре раҫланып, эш хаҡы билдәләнгәс, рәссамы һәм техник редакторы булып Ғиндулла Хәйретдинов, Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамлап, Күмертауҙа эшләп йөрөгән Әнисә Таһирова, шағирә Фәүзиә Рәхимғолова эшкә килде, һәм мин дә журнал редакцияһына күстем.

Рәми Ғарипов беҙҙең алға бындай бурыс ҡуйҙы:

— Журналдың һәр номерында ҡулдан ҡулға йөрөтөп уҡырлыҡ бер материал бирелергә тейеш. Мәҡәлә исеме лә, рубрика исеме лә, хатта бәләкәй генә һүрәт тә тәрбиәүи әһәмиәтле булһын. Беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарҙа зауыҡ тәрбиәләһен, — ти ине.

Журналдың һәр һанында башҡорт халыҡ аштары бирергә булдыҡ. Иң тәүгеһендә бишбармаҡ әҙерләү ысулын яҙҙыҡ. Тәүге һан әҙерләнгән саҡта, ҡунаҡҡа ҡазандан билдәле татар журналисткаһы Дилара Зөбәйерова килде. Редакция өсөн бина юҡ ине әле. Мин өйҙә бишбармаҡ бешерҙем, буҙа ҡойҙом һәм редакция хеҙмәткәрҙәре менән Дилараны ҡунаҡ иттек.

— "Азат хатын" редакцияһында беҙҙең журнал сыға башлауға нисек ҡаранылар? — тип һораным.

— Яҙылыу башланып, тиражығыҙҙың ике меңгә етеүен ишеткәс, "Азат хатын"дың Башҡортостандағы тиражы кәмеүе хәүефләндерә башланы. "Ике мең башҡорт бармы ни?!" — тип аптыраусылар ҙа табылды хатта, — тине Дилара. Рәми Ғарипов, ғәҙәтенсә, бер аҙ тын ғына ултырғас, "һе!" — тине лә:

— Аптырамаһындар. Журнал тиражына ҡарап милләт һаны билдәләнә икән, беҙ уны ике меңгә түгел, ике миллионға еткерәсәкбеҙ! — тип өҫтәне һәм үҙ-ара һөйләшеүҙә, — журналды өй һайын алдырыу кимәленә еткерергә кәрәк. Подписка кампанияһын көтмәйек, журнал йөкмәткеһе менән үҙен үҙе таратырға тейеш, — тигән бурыс ҡуйҙы ла бер аҙ уйланып торғандан һуң, — беҙҙең журнал һәр башҡорт өйөнә ҡот булып инергә тейеш, — тине. Шуның өсөн журналдың беренсе һанындағы баш һүҙ урынына яҙылған мәҡәләһен "Ҡотло булһын!" тип атамаҡсы булғайны ла, тағы ни өсөндөр үҙе үк "Һөйөнсө!" тип төҙәтеп ҡуйҙы.

Шағир журнал аша һәр башҡорт өйөнә ҡот ҡундырырға хыялланды.

Ҡот – айырым кешенең дә, милләттең дә, кешелек донъяһының да йәшәүендә төп шарт. Шуға ла халыҡ ҡотто ағастың һуты менән сағыштырған. "Ағасты – һут, халыҡты ҡот йәшәтә" тигән әйтем бар.

* * *

Айырым кешенең генә түгел, тотош халыҡтың да йәшәү ҡото китә ҡалһа, бер кем дә түгел, фәҡәт үҙебеҙ генә ғәйепле булырбыҙ. Әгәр беҙ элекке тәрбиә ҡанундарына, йәшәү традицияларына заманса яраҡлашып кире ҡайтабыҙ икән, үҙ ҡотобоҙҙо үҙебеҙ ҡайтарырбыҙ. Тик милләтебеҙҙең боғаҙынан алған хәүефтәргә күҙ йомоп ҡарамай, уны юҡ итеү сараһы күрергә кәрәк.

Һуңғы йылдарҙа халҡыбыҙ бәкәленә һуғыусы тағы бер хәүеф янай башланы.

Беҙ, төп дошманыбыҙ — эскелек йәки көндән-көн киңерәк ҡолас ала башлаған наркомания икән тип, милләт тамырына унан да ҡурҡынысыраҡ балта сабыусы, әммә йәмәғәтселек тарафынан ыңғай баһа алыусы күренешкә иғтибар итмәйбеҙ. Был – аҡсаға табыныу сире. Был да заманыбыҙ, бер ҡоролоштан икенсеһенә күскән осор тыуҙырған сир.

Әлбиттә, аҡса туплау, мул йәшәргә ынтылыу — ыңғай күренеш. Йәмғиәтебеҙ менән бергә капитализмға яраҡлашыу, яңыса йәшәргә һәм аҡса эшләргә өйрәнеү, үҙ яҙмышың, үҙ ғаиләң өсөн иң элек үҙең яуаплы икәнлеген аңлау ул. Матди байлыҡ туплап ҡына ла ҡәнәғәтлек, йәшәү йәме тапҡандар бар. Ләкин аҙ һанлы милләттәр һанына ингән башҡорт халҡы вәкилдәре матди байлыҡ туплауҙы рухи ҡиммәттәр иҫәбенә алып бара икән, ул аҡса ҡолона әйләнеү генә түгел, ысынлап та, милләт тамырына балта сабыусы була. Сөнки милләтте рухи байлыҡ, рухи ҡаҙаныш, рухи үҫеш һаҡлай. Һуңғы йылдарҙағы үҙгәрештәргә күҙ һалғанда, халҡыбыҙҙың бер өлөшөнөң рухи байлыҡтың бөтә ҡиммәттәрен аҡсаға хеҙмәт итеүгә алмаштыра башлауы хәүефләндерә.

Был күренештең, әлбиттә, объектив сәбәптәре бар. Башҡорттар аҙаҡҡы ике быуат самаһы ваҡыт һуҙымында үҙ хәләл көсөнөң емешен үҙе файҙалана алмаған. Ниһайәт, ундай мөмкинлек тыуҙы, һәм халҡыбыҙ аҡса эшләүгә тотондо. Ләкин, күп осраҡта был ыңғай күренеш аҡсаға табыныу, урлашыу, алдау, хатта иң яҡындарыңды ла оторға тырышыу һәм ошо сифаттарҙы мәртәбәгә, ниндәйҙер ҡаҙанышҡа — йәшәй белеүгә һанау кеүек милли үҙенсәлегебеҙгә ят булған күренешкә – аҡса сиренә килтерә. Һәм был сиргә дусар булыусыларҙың артҡандан-арта барыуы хәүефкә һала,

сөнки ул сир йоҡҡан кешеләр үҙҙәренең булмыштары менән милли холҡобоҙға ла үҙгәрештәр индерә, нәҫелен дә боҙа.

Халҡыбыҙ үҙенең йәшәү дауамында һәр саҡ рухи байлыҡты, рухи азатлыҡты матди байлыҡтан юғары ҡуйған. Быны беҙ халыҡ ижадынан ғына түгел, ә реаль тарихыбыҙҙан да күрәбеҙ. Башҡорт ихтилалдарында төп етәкселәр бай һәм дәрәжәле әһелдәр булған. Ә тыныс йәшәү мәлендә шул уҡ ҡатлам кешеләре аҡсаның бер өлөшөн тотош халыҡ мәнфәғәтен күҙҙә тотҡан юғары маҡсат өсөн файҙаланған. Мәҫәлән, билдәле тау промышленнигы Исмәғил Тасимов үҙ милләттәштәрен техник белемгә ылыҡтырып, үҙ еренең ҡаҙылма байлыҡтарынан үҙҙәре файҙа күрһен өсөн тырышҡан. Дворян династияһынан булған Ҡыуатовтар башҡорт егеттәрен уҡытыу, белем биреү өсөн үҙ аҡсаларын йәлләмәгән. Бындай миҫалдар бик күп.

Бөгөнгө көндә иһә, киреһенсә, матди байлыҡ туплау ынтылышы рухи байлыҡты ҡыҫырыҡлап сығара бара. Күп кенә әһелдәребеҙ "Халыҡ мәнфәғәте өсөн!" тигән лозунг астында үҙ мәнфәғәттәрен генә хәстәрләйҙәр. Ҡайһы бер осраҡта хатта башҡорт халҡы өсөн иң изге булған милли тойғоларын ҡуҙғытып ебәрерлек лозунгыларҙың да, яҡшы ниәт менән бүленгән сығымдарҙың да аҡсаға табыныу сире йоҡҡан айырым кешеләрҙең, хатта халыҡ, тип ауыҙ һыуын ҡоротоп ҡысҡырып йөрөгән ҡайһы берәүҙәрҙең шәхси мәнфәғәте өсөн хеҙмәт иткәнлеге асыҡлана. Һөҙөмтәлә, бер-береңә ышанмаусанлыҡ, шикләнеү барлыҡҡа килә, был этнопсихологияға кире йоғонто яһай.

Ә бер-береңә ышаныс юғалтыу, шик тигән төшөнсәнең башланыуы – милләтте ҡаҡшатыусы, тарҡатыусы, юҡҡа сығарыусы, рухты ҡаҡшатыусы төп сәбәптәрҙең береһе.

Яу, ихтилал, һуғыш, аслыҡ кеүек бик күп афәттәргә бирешмәгән, берҙәмлеген, рухи юғарылығын һәм кеше булыу бәҫен юғалтмаған башҡорттоң аҡсаға табыныу сиренән арына алыуына, бының ваҡытлыса ғына шашыныу осоро булыуына ышанғы килә. Сөнки рухи донъябыҙ нигеҙләнгән ғәйәт бай традицияларыбыҙҙа бындай кире күренешкә тамыр йәйергә мөмкинлек бирмәү үҙебеҙҙең ҡулда. Быуаттар буйы бер ниндәй ят күренештәргә лә бирешмәй милләт булып һаҡланып килерлек көс-кеүәт тапҡанбыҙ икән, башҡаларҙан артта ҡалмай яңыса йәшәрлек, яңыса эшләрлек, халыҡ мәнфәғәтен күҙҙә тотҡан юғары маҡсатҡа хеҙмәт итте-рерлек балалар тәрбиәләүгә ихтыярыбыҙ етер, тигән өмөт бар.

Бөгөнгө көндә иң мөһиме – рухи яҡтан һынмау һәм атай-олатайҙарыбыҙҙың рухи ныҡлығын, ихтыяр көсөн ҡайтарыу.

Ҡайтарыу өсөн нигеҙ бар, ул беҙҙең ҡаныбыҙҙа, тик йоҡомһорап ятҡан ҡиммәттәрҙең береһе. Халыҡтың рухи донъяһын мәғрифәте, фәне, мәҙәниәте, әҙәбиәте, традициялары, философияһы, фольклоры, дине, сәнғәте билдәләй.

Башҡорт халҡының һуңғы йылдарҙағы рухи ҡаҙаныштарына күҙ йомоп ҡарарға ярамай, әлбиттә. Аҙ ғына мөмкинлек булыу менән ҡанат ҡағып юғары осорға ғына тора ул. Әле лә байтаҡ ҡаҙаныштарға өлгәште: үҙ телендә белем ала, үҙ сәнғәтен донъя кимәленә үҙ телендә алып сыға, профессиональ музыка, кино, театр сәнғәтен булдырҙы, бөтөн донъя ҡаҙанышына ла туған теле аша эйә була бара. Ғалимдарыбыҙ тырышлығы менән халыҡ ижады томдарының донъя күреүе лә, тарихыбыҙҙың ныҡлап тикшерелеүе лә, Зәки Вәлиди хеҙмәттәренең ҡайтарылыуы ла, Башҡорт энциклопедияһының нәшер ителеүе лә, археология өлкәһендәге яңы асыштар ҙа, бына тигән опералар яҙылыуы, том-том романдар сығыуы, бейеү сәнғәтенең бөтөн донъяға билдәле булыуы һәм донъя сәхнәләрендә сығыш яһау кимәленә күтәрелгән сәнғәт әһелдәребеҙҙең булыуы – барыһы ла һанап һәм баһалап бөткөһөҙ оло ҡаҙаныш. (*Матбуғат баҫмаларының һаны ишәйеүе лә ҡыуаныслы хәл. Тик үрҙә әйтелгән фекерҙе раҫлау өсөн һүҙ ыңғайы әйтеп китергә кәрәк — матди яҡтан мохтажлыҡ кисермәгән "яңы башҡорт" милләттәштәребеҙҙең почта йәшниктәрендә башҡорт телендәге матбуғат баҫмаларына урын юҡ*).

Төрлө ырыуҙарҙан бер бөтөн булып ойошҡан башҡорт халҡының рухи ҡеүәтен тарҡатмай тороусы ҡурайыбыҙҙың республика символына әйләнеүе лә халҡыбыҙҙың киләсәгенең өмөтлө булыуын күрһәтә.

Халыҡтың рухи донъяһы ниндәй – уның бәҫе лә шундай. Беҙҙең бәҫебеҙ йөҙ ҡыҙарырлыҡ түгел, атай-олатайҙарҙың васыятын үтәйбеҙ тип хаҡлы әйтә алабыҙ.

* * *

Кеше булмышы менән яңғыҙ. Эргәһендә серҙәше, дуҫы, йән яратҡан кешеһе булһа ла, асылда кеше күңеле менән яңғыҙ. Ул барыбер үҙ күңелендәге бөтөн серҙәрен хатта иң яҡын әхирәтенә лә һөйләмәй, һөйләгән саҡта ла нисек булғанын асып һалмай, үҙе нисек итергә теләгән, ниндәй булырға теләгән — шулай ғына һөйләй. Нисек кенә булмаһын, кешенең күңел донъяһы яңғыҙ. Шуның өсөн кеше тәбиғәте яңғыҙлыҡтан ҡурҡа. Бергә серләшер, бергә йәшәр, дуҫлашыр, яҡынайыр кеше эҙләй башлай. Тәбиғәт

Кешене ҡайһылай булһа ла яңғыҙ ҡалдырмау сараһы уйлап табырға маташҡан. Милләт, дин, ғөрөф-ғәҙәт уртаҡлығы, ил, йәмғиәт, ғаилә һәм башҡа төрлө ойошма-берләшмәләр яңғыҙлыҡтан ҡотолоу мохтажлығынан барлыҡҡа килгән. Ошондай берләшмәләргә тупланыу сараһын да бар иткән Тәбиғәт. Тел берлеге, ғөрөф-ғәҙәт уртаҡлығы, географик урын, һөйөү тойғоһо. Бынан тыш, кешенең эске донъяһын нурландырып ебәреү сараһы ла бар: кеше йөрәгендә, хәтерендә, иҫендә һаҡланған күңел йылыткыс иҫтәлектәр, йән йылытҡыс ҡот. Был — кешенең мейеһен арыуҙан, тайпылыуҙарҙан ҡурсалау сараһы.

Диҡҡәттең вафатынан һуң, ауыр саҡтарҙа беренсе осрашыу иҫтәлектәре менән йыуандым.

Минең "В мире мудрых мыслей" тигән китабым бар ине. Уның тышында уйҙарға батҡан таш кеше һыны төшөрөлгәйне. "Ошондай аҡыллы кеше буламы икән? Булһа, шундай кеше менән берике сәғәт кенә һөйләшеп ултырырға ине", — тип хыяллана торғайным уҡыған саҡтарҙа. Башҡорт дәүләт университетына уҡырға ингәс, ундай аҡыллы кешеләрҙе осраттым. Уҡытыусыларыбыҙҙан Жәлил Кейекбаев, Марат Минһажетдинов, Фәрит Ғүмәровтар...

Унан һуң Диҡҡәт. Диҡҡәтте беренсе тапҡыр Сафуан Әлибаевтың бүлмәһендә (*Әлибаевтар дөйөм ятаҡта йәшәй ине*) осраттым. Бығаса уны гәзиттәге мәҡәләләре аша ғына белә инем. Радио дикторы Наилә Ғәләүетдинова — ул саҡта Фазылова менән эштән ҡайтып килешләй (*мин Күмертауҙа бер йыл уҡытҡандан һуң радиокомитетта тәржемәсе булып эшләй инем*), Сафуандың ҡатыны Фәрҙиә янына инеп сығырға йомош төштө. Барһаҡ, Фәрҙиә ауылға ҡайтып киткән, ә Сафуан Диҡҡәт менән сәй эсеп ултыра. Сафуан ихласлап тороп әйҙәләй башланы. "Фәрҙиә булмағас, инмәйбеҙ", — тибеҙ. Юҡ, өгөтләй. Индек.

Минең алда таш һындағы аҡыл эйәһе пәйҙә булды... Уның менән осрашыу беренсе тапҡыр "Буранбай"ҙы тыңлаған саҡтағы кеүек үк тәьҫир итте. Алдымда таш һындың "йән инеп, тере кешегә әйләнеүен" күргәс, йөрәгемдең һәр күҙәнәген тетрәндереп үтерлек тулҡынланыу кисерҙем.

Диҡҡәт менән Сафуан беҙҙең килеүгә сикһеҙ шат булдылар һәм хатта ғәжәп иттеләр (*Аҙаҡ әйтеүҙәренсә, һүҙ минең менән нисек осрашыу тураһында барған икән*).

Билдәле булыуынса, Сафуан шағир булыуҙан тыш, оҫта йырсы булыуы менән дә билдәле. Уның моңло тауышын, наҙлы тенор менән йырлауын беҙ, талиптар, бик ярата инек. Әле ул бик ихлас

итеп йырлап ебәрҙе. Йырланы ла "атты Диҡкәткә туғарҙы". Диҡкәт бик тә үҙенсәлекле оҫталыҡ менән "Ғәйниямалым"ды һәм, беҙ һорағас, "Бөйрәкәй"ҙе башҡарҙы. Сират миңә етте. Мин тәүҙә баш тартып ҡараным. Бик ай-вайға ҡуймағас, яңы ғына отоп алған, әле бер кем дә башҡармаған "Хан ҡыҙы" тигән әйтеште һамаҡланым. Был әйтеш хәҙер киң таралды, әммә көйө лә, һүҙҙәре лә мин белгәнсә түгел. Мин белгән эпостың көйө талғыныраҡ, моңға күберәк баҫым яһала. Күрәһең, вариантары барҙыр.

Уңайҙан файҙаланып, эпостың үҙем белгән вариантының һүҙҙәрен килтерәм. Әйтергә кәрәк, ул йылдарҙа Өфө йәштәре араһында мин белгән "Хан ҡыҙы" ныҡ таралып киткәйне. Рәми Ғарипов та, Рауил Бикбаев та, Сафуан Әлибаев та, Тимер Йосопов та уны бик яратып тыңлар һәм башҡарыр булдылар. Башҡарыу үҙенсәлеге лә ҡыҙыҡ ине. Уларҙың береһе башына яулыҡ бөркәй ҙә хан ҡыҙы булып йырлай торғайны.

Хан ҡыҙы

Көтөүсе егет.
Хан ҡыҙы, ас ишегең, мин керәйем,
Һинең ҡашың ҡыйғас, тиҙәр, мин күрәйем.

Хан ҡыҙы.
Минең ҡашым күреп һиңә ниҙәр файҙа?
Ҡарлуғастың ҡой(о)роғон күрмәнеңме?

Көтөүсе егет.
Хан ҡыҙы, ас ишегең, мин керәйем,
Һинең тешең ап-аҡ тиҙәр, мин күрәйем.

Хан ҡыҙы.
Минең тешем күреп һиңә ниҙәр файҙа?
Баҙарҙарҙа ап-аҡ ынйы күрмәнеңме?

Көтөүсе егет.
Хан ҡыҙы, ас ишегең, мин керәйем,
Һинең буйың зифа тиҙәр, мин күрәйем.

Хан ҡыҙы.
Минең буйым күреп һиңә ниҙәр файҙа?
Күл буйында зифа ҡамыш күрмәнеңме?

Көтөүсе егет.
Хан ҡыҙы, ас ишегең, мин керәйем,
Һинең йөҙөң нурлы тиҙәр, мин күрәйем.

Хан ҡыҙы.
Минең йөҙөм күреп һиңә ниҙәр файҙа?
Ҡара төндә тулған айҙы күрмәнеңме?

Йөрөмә, егет, йөрөмә, егет, килмә, егет,
Минең атам бигерәк уҫал. Белер, белһә – әрләр.

Көтөүсе егет.
Атайыңа алып бирәм алтын таяҡ
Йөрөп ятыр баҡсаларҙа уйҙар уйлап.
Хан ҡыҙы.
Йөрөмә, егет, йөрөмә, егет, килмә, егет.
Минең әсәм бигерәк уяу. Һиҙер, һиҙһә – әрләр.

Көтөүсе егет.
Әсәйеңә алып бирәм алтын тараҡ,
Ул ултырыр мунсаларҙа сәсен тарап.

Хан ҡыҙы.
Йөрөмә, егет, йөрөмә, егет, килмә, егет,
Минең ағам бигерәк үткер. Күрер, күрһә – әрләр.

Көтөүсе егет.
Ағайыңа алып бирермен ҡара юрға,
Иртә таңдан сығып китер алыҫ юлға.

Хан ҡыҙы.
Йөрөмә, егет, йөрөмә, егет, килмә, егет,
Минең еңгәм бигерәк зирәк. Ишетер, ишетһә – әрләр.

Көтөүсе егет.
Еңгәйеңә алып бирәм пар биҙ(е)рә,
Ул йүгерер таң һыуына – шишмәләргә.

Хан ҡыҙы.
Йөрөмә егет, йөрөмә егет, килмә, егет.
Ҡыҙ намыҫым мөхәббәткә бирмәҫ ирек.

Көтөүсе егет.
Үҙем киләм яндарыңа бүләк булып,
Зирәклегең һөйөүемә ҡанат ҡуйҙы.

— Бына бит ниндәй булған беҙҙең өләсәй-олатайҙар заманы! – тип, тубығына һуғып шатланды Диҡҡәт, был әйтеште ишеткәс. Сафуан шунда уҡ отоп алды. Ҡабатланыҡ та, ҡабатланыҡ, йырланыҡ та йырланыҡ. Ҡайтырға сыҡһаҡ, ҡала транспорты туҡтаған. Өфө буйлап йәйәүләп ҡайтып киттек. Хәҙерге "Фирма Мир" туҡталышында Наиләне оҙатып ҡуйҙыҡ. Шунан мине оҙатырға киттек. "Спорт" туҡталышында Миңнегөл Хисмәтуллиналарҙа йәшәй инем. Сафуан менән Диҡҡәт мине оҙатып ҡайтып киткән саҡта, таң һыҙылғайны инде.

Ошолай башланған танышлығыбыҙҙың, бергә йәшәгән ғүмерҙең һәр көнө күңелгә онотолмаҫ моң һалды. Күңелгә ҡыйын булып киткән саҡтарҙа шул көндәрҙең нурына, йылыһына һыйынам.

Халҡына йөрәге менән инанған, уны күңеле менән тойған, зиһен-аҡылын уның мәнфәғәтенә йүнәлткән Кеше менән йәшәү, фекерҙәш, серҙәш, дуҫ булыу, әлбиттә, ырыҫ-бәхет, ысын ҡот булды минең өсөн.

Диҡҡәттең, ниндәй уңай менәндер, миңә арнап яҙған шиғыры ла бар.

Урал итәгенән агып сыҡҡан
Ҡарағайлы йылға ситенә.
Йәшел сатыр һиңә ҡорормон мин
Хуш сәскәләр теҙеп эсенә.

Айҡап сығып Урал ҡаяларын
Яңы-яңы таштар табырмын.
Шул таштарҙың иң-иң аҫылына
Һинең исемеңде тағырмын.

Ижад һәм халыҡ өсөн йәшәү ҡомарын талантлы, әммә таланты тулыһынса асылып бөтмәй мәрхүм булған Рәшит Әхтәров һәм тормош юлымда осраған рухташ, фекерҙәш дуҫтарым һалды.

1957 йылда илебеҙҙә Ер юлдашы осоролдо. Мин етенсе класта уҡый инем. Ул саҡтағы халыҡтың аптырауы, ҡыуаныуы! "Беҙҙең илдә генә, тик Совет иленда генә шундай ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшергә мөмкин!" – тиҙәр. Радионан тантаналы телмәрҙәр яңғырай, мәктәптә уҡытыусылар илһамланып һөйләй. Минең күңелемдә лә шиғыр тыуҙы.

Халык хыялы

Айга менеү уйы һүҙҙә түгел,
Хатта йырҙарҙа ла йырланган.
Тик ул хыял ҡоро хыял булып,
Йыр һәм һүҙҙәр менән югалган.

Ошо хыял Совет осоронда
Әйләнде лә ысынбарлыҡҡа —
Ер юлдашы булып һауаларга осто,
Һәм күренде бөтөн халыҡҡа.

Һис бер шикһеҙ Айга осасаҡбыҙ,
Асасаҡбыҙ күпме серҙәрҙе.
Айга менеп, айҙан түбән ҡарап,
Сәләмләрбеҙ тыуган илдәрҙе.

Шиғырымды "Пионер" журналына һалып ебәрҙем. Бер аҙҙан Рәшит Әхтәров тигән шағирҙан хат килде. Ул шиғырҙың тиҙ арала баҫылырға тейешлеге, ә журналдың айына бер тапҡыр ғына нәшер ителеүе, шуның өсөн "Ленинсы" гәзитенә алып инеп биреүе тураһында яҙған да, миңә, һис шикһеҙ, яҙышырға һәм яҙмаларымды үҙенә ебәреп торорға кәңәш иткән. Рәшит Әхтәров, баҡһаң, студент сағында редакцияла ла эшләгән икән. Мин урта мәктәпте тамамлағансы, ул хаттар яҙып торҙо, мине филология факультетына барырға өгөтләне. Ә мине мәктәптән математика бүлегенә тип ебәрҙеләр. Университеттан мәктәптәргә таратылған бер контроль эште бик һәйбәт эшләгәнмен дә, математика уҡытыусыбыҙ Зөфәр Әҙеһәмов алдан уҡ мине унда ебәрәсәген әйтеп ҡуйған икән. Университетҡа уҡырға килгәс, Рәшит Әхтәров ағай мине табып алды ла, документтарымды филология факультетының башҡорт-рус бүлегенә тапшыртты.

— Мин математиканы бик яратам. Математик булғым килә.

— Ә унан һуң?

— Математика уҡытыусыһы. Мин мәктәптә бөтөн балаларға ла математиканан аңлата торғайным. Улар дәрестә аңламаһалар ҙа, мине аңлайҙар ине. Сөнки математика рус телендә алып барылды, ә балалар тирә-яҡ ауылдарҙа башҡортса уҡып килгәндәр. Беҙҙең класта башҡорт теле менән әҙәбиәте генә башҡортса булды.

— Ә математиканан көслө уҡыусылар күп инеме?

— Юҡ. Беҙҙең класта Маһинур Мозаффарова. Ул Стәрлетамаҡ

педагогия институтына китте. Мансур Ҡаһарманов тигән егет бар ине, туғызынсы кластан уҡ китте лә өйләнде. Йәше үткәйне. Беҙҙән һуң уҡығандарҙан Миңнегөл Таңһыҡҡужина яҡшы белә. Шул ғына.

— Ғөмүмән, математика шундай фән ул, уға бөтөн кешенең дә теше үтмәй. Класта бер-ике бала яҡшы уҡыһа, бик һәйбәт. Ә беҙҙең илдә көслө балаларҙы айырып уҡытыу, айырым фәндәр буйынса йүнәлешле белем биреү системаһы эшләнмәгән. Һин, математика уҡытыусыһы булып, ғүмереңдә класта көслө бер-ике бала өсөн арнамаҡсы булаһыңмы? Ә һин яҙыуың менән, йөрәгеңә һалынған аңың менән халыҡҡа сағыштырғыһыҙ күберәк файҙа килтерә алаһың. Ә математиканы белеүең, яратыуың яҙған саҡта ла кәрәк булыр. Математика кешенең логик фекерләүен көсәйтә, – тип, ул саҡтағы аңыма һеңерлек итеп аңлатты, өгөтләне Рәшит ағай Әхтәров, һәм мин документтарымды башҡорт-рус бүлегенә тапшырҙым.

Башҡорт бүлегенә булғас, ғаризаны башҡортса яҙырға икән, тип уйлап, башҡортса яҙҙым. Аҙаҡ профессор Ғәли Ғәли улы Сәйетбатталов:

— Быйыл башҡорт-рус бүлегенә бер генә башҡорт инде. Ул – Биктимерова, – тигәс, аптырап киттем. Әллә берәй хата ебәрҙемме икән, тип хәүефләндем. Ғәли Ғәли улы фекерен дауам итте. — Мең туғыҙ йөҙ илле өсөнсө йылдан башлап ошо уҡыу йортонда эшләйем. Шул ваҡыт эсендә ғаризаны башҡортса яҙған бер кеше лә булманы. Быйыл бына Биктимерова башҡортсалап тороп яҙған. Шулай кәрәк. Башҡорт бүлегенә инә бит, — тине.

Тормош юлымда Ҡот һалыр кешеләр күп осраны.

Башҡорт дәүләт университетының башҡорт-рус бүлегендә осраттым халҡыбыҙ мәнфәғәте өсөн ҡалҡан булыр егеттәрҙе һәм ҡыҙҙарҙы. Аҙаҡ та улар менән бергә эшләнек. Биш йыл һайын осрашып торҙоҡ.

Беҙҙең төркөмдө "алтын төркөм" тип йөрөттөләр. Университетта татар драма түңәрәге эшләп килһә лә, башҡорт драма түңәрәге юҡ ине. Беҙҙең төркөм талиптары был түңәрәкте башлап ебәрҙе. Етәксеһе Вил Бәхтейәров булды. Аҙаҡ ул мәктәп директоры, директор урынбаҫары вазифаларын башҡарҙы. Ул йылдарҙа университет күләмендә иң оҫта баянсы беҙҙең төркөмдән Тимербай Исхаҡов булды. Педагогия фәндәре кандидаты. Бөрө педагогия институтында уҡытыусы булды. Марсель Ҡотлоғәлләмов — республика кимәлендә күрнекле журналист, дәүләт эшмәкәре, "Известия Башҡортостана" гәзитенең тәүге мөхәррире, Рәшит Шәкүр – фән докторы, яҙыусы, билдәле шағир, йәмәғәт эшмәкәре, Урал Нәҙер-

ғолов — фән кандидаты, Сәбилә Сөләймәнова — фән кандидаты, мәғариф министры вазифаһында булды, Миҙхәт Мәмбәтов — фән кандидаты, дәүләт эшмәкәре, Вәли Байморатов — Күгәрсен районы гәзитенең алмаштырғыһыҙ мөхәррире булды, Хәбир Кәҙерғолов — ғүмеренең бик күп йылдарында мәктәп директоры вазифаһында булды, Риф Зарипов — Салауат районында РОНО мөдире булды, уҡытыусы-журналист Исмәғил Аҡъюлов, арабыҙҙан бик иртә китеп барған талантлы шағир Ишьегет Хәсәнов, Лира Романова, Камил Сиразетдинов, Нәҙер Һағынбаев, Сания Әхмәтова, Сибәр Дәүләтшина, Жеүәйрә Зарипова, Мәрйәм Мәжитова, Һәҙиә Яҡупова, Фәнүзә Түрйәнова, Фирүзә Мырҙагилдина, Рәшиҙә Баязитова, Гөлнур Аҡкилдина, Фәриҙә Мотаева, Фәхрәзи Кужин, Заһир Дәүләтбаев, Шәрифйән Карабаев, Рәфил Халиҡовтар һәр береһе үҙҙәренең эш урындарында фиҙәкәр хеҙмәт иттеләр, атҡаҙанған исемдәренә лайыҡ булдылар. Ул ғына ла түгел, университетты тамамлағандан һуң, бергә йыйылышып һөйләшеп, алған йөкләмәләребеҙгә тоғро ҡалдылар. Уларҙың күбеһе арабыҙҙа юҡ. Әммә һәр береһенең исемен телгә алыу йәки күҙ алдына килтереү генә лә күңелде нурландырып ебәрә. Уларҙың һәр береһе халҡым ти янып йөрөгән, ни ҙә булһа эшләргә тырышкан кеше. Уларҙың һәр береһенән миңә ниндәй ҙә булһа ҡот һибелгән. Мин ғүмерем буйы курсташтарыма сикһеҙ рәхмәтлемен.

Университетты тамамлау тураһында диплом алғас, ҙур һөйләшеү өсөн бергә йыйылып, ошондай бурыстар билдәләгәйнек: эшләгән урындарыбыҙҙа башҡорт мәктәптәре астырыу буйынса эшләү, башҡорт телендә баҫылған матбуғатҡа мөтлаҡ үҙеңә яҙылыу һәм башҡаларҙы яҙҙырыу, үҙ балаларыңды башҡортса һөйләштерерлек ғаилә ҡороу, Өфөлә ҡалыу һәм артабан үҫеү өсөн тырышыу, биш йыл һайын осрашып, башҡарылған эштәр хаҡында һөйләшеп алыу, һәр беребеҙ үҙебеҙ эшләгән урында өлгө булыу.

Бындай бурыс һәм биш йыл һайын йыйылып, үҙебеҙ башҡарған эштәр хаҡында һөйләшергә тигән һүҙ ҡуйыу беҙгә ҙур яуаплылыҡ өҫтәне. Был яуаплы бурысҡа беҙ бик етди ҡараныҡ.

Халҡыбыҙ мәнфәғәте өсөн ҡалҡан булыр кешеләр менән аралашып, артабан ни эшләргә, халыҡты бөтөүҙән нисек ҡурсалап алып ҡалырға, тигән һорауҙарға яуап эҙләгән саҡта, Үрген ауылы урманында Иншар ағай Солтанбаевтың йырын тыңлағандан һуң, бер олатайҙың тәрән көрһөнөп:

— Балаларҙың туған телен белмәүе ошо моңдан яҙҙырыр микән беҙҙе? – тип әйтеүе һәр саҡ минән яуап көткән һымаҡ булды. Шуның өсөн зыялыларыбыҙҙың тел, туған телдә уҡытыу, балаларҙы

туған телдә һөйләштереү тип янып йөрөүҙәре миңә бик яҡын һәм аңлайышлы хәстәрлек кеүек тойолдо, сөнки тап улар олатайҙың һорауына ыңғай яуап, хәүефтән ҡотҡарыу юлы эҙләгән һымаҡ ине. Мин был хәстәрлекте урман яңғыратып, ҡош һайрауҙарын туҡтатып, йондоҙҙар тирелеп төшөрлөк итеп яңғыраған башҡорт моңон һаҡлау, милләт ҡотон һаҡлау тип ҡабул иттем. Рәшит Шәкүрҙең "бөтә башҡорт халҡы" тип һөйләмәгеҙ әле, "барлыҡ, бөтөн" тигән ниндәй матур һүҙҙәребеҙ бар, "бөтә" һүҙе икенсе мәғәнә бирә, тип иҫкәртеп тороуынан башлап "миллиметрлап булһа ла алға барайыҡ" тип хәстәрлек күреүе лә, "Совет Башҡортостаны" гәзитенә ябылыу хәүефе килеп тыуғас, ең һыҙғанып алышҡа ташланыуы, Булат Рафиҡовтың "ырыу" тигән һүҙҙе индереп, беҙ халыҡты ҡуҙғытасаҡбыҙ, тип янып йөрөүе һәм Аҡһаҡалдар ҡоро ойоштороп ебәреүе, башҡорт ирҙәре араһынан лайыҡлы улдарыбыҙҙы депутатлыҡҡа үткәрәйек, тип, ижад эшен арттараҡ ҡалдырып, ең һыҙғанып өгөт-нәсихәт эшенә тотонған яҙыусыларыбыҙ Таңсулпан Ғарипова, Сулпан Иманғоловтарҙың ныҡышмалылығы ла, Александр Матросовтың асылда башҡорт егете булыуын иҫбат итергә көсөн-ялын йәлләмәгән Рәүеф Насыровтың фиҙәкәрлеге лә, Башҡорт театрында тел таҙалығы өсөн көрәш асып ебәргән Илшат Йомағолов, үлән ҡурайҙарға ҡытлыҡ була башлағас, ағас ҡурай яһау серен уйлап тапҡан Вәкил Шөғәйепов та, Өфө сәнғәт училищеһында ҡурай бүлеге астырыу хәстәрлеге менән янған Ғата Сөләймәнов та, республикабыҙҙың тәбиғәт байлығын һаҡлауҙа үҙен аямаған егерь Мөхәррәм Үтәғәнов, өлкәнәйгән көнөндә атай нигеҙен һаҡлау, боронғо башҡорт ауылын ер йөҙөнән юҡ ителеүҙән йолоп алып ҡалыу өсөн, Үрге Мотал ауылына ҡайтып йорт тергеҙгән Ғәйнетдин Бураҡаев, балаларға туған телен өйрәтеүҙең ысулдарын ябайлаштырам тип, тырышып йөрөгән Лилиә Ғәбдрәхимова — апайымдың ҡыҙы, "Рух" ансамбле төҙөп, халҡыбыҙҙың рухын күтәреүҙе маҡсаты итеп ҡуйған Ғәзинур Биктимеров та – абзыйымдың улы, башҡорт халҡының ғилемен донъя кимәленә сығарам, тип, әле башмағын, әле һыйырын һатып, үҙ иҫәбенә халыҡ-ара конференцияларға барып, немец, француз телдәрендә лекциялар менән сығыш яһап ҡайтҡан Гәүһәр Сәғитова ла, үҙе йәшәгән төбәк халҡының тормош-көнкүрешен яҡшыртыуға мөкиббән китеп тотонған Гөлсәсәк Толомбаева (*Ейәнсура районы Байдәүләт ауыл Совете рәйесе*), бөтә күңелен һалып "Тормош һабаҡтары" уҡытыуға сат йәбешкән һәм халыҡты тергеҙеү программаһы тип ҡабул иткән Резеда Нәжип ҡыҙы (Әбйәлил), Миңзәлә Юлмөхәмәтова, Гөлсирә Тайсина, Гөлмизан Таштимерова,

Аҡһылыу Ильясова, Ғәтифә Ғөбәйҙуллина, Рәйсә Дәүләтбаева, Тәнзилә Бикбаева, Хәлисә Багаевалар һәм "Тормош һабаҡтары"н яратып, аңлап, беренселәрҙән булып юл ярып йөрөгән Мәрфуға Ғәлина ла, Мәрүә Ғилметдинова ла, "беҙ татар телле башҡортарбыҙ" тип, үҙе һымаҡтарҙы үҙ асылына ҡайтарырға тырышҡан Дамира Ҡазыхановалар ҙа (*Саҡмағош районы хакимиәт башлығы урынбаҫары*), дорфа етәкселәрҙең таланттарҙың юлын быуыуҙарына йәне әсеп, таланттарға мөмкин тиклем ярҙам итергә тырышҡан яҙыусы Гөлсирә Ғиззәтуллина ла, тиҫтәләрсә йәш журналистар өсөн маяҡ булған һәләтле шағирә ЗөһрәҠотлогилдина ла, талантлы балаларҙы халыҡ-ара конкурстарҙа ҡатнашыу кимәленә сығарырға ине, тип, "Салауат күпере" ойошмаһы аҫҡан Роза Зиннәтшина ла һәм башҡа, һәм башҡа — мин телгә алмаған ҡайнар йөрәкле шәхестәребеҙ, йөҙҙәрсә патриоттарыбыҙҙың үҙҙәрен аямай янып-көйөүҙәре ошо моңдо, ошо ҡотто һаҡлап алып ҡалыуға булышлыҡ итә. Диҡҡәттең балаларға фән нигеҙҙәрен өйрәтергә кәрәк, тип һәр ваҡыт ҡыҙыҡлы материалдар йыя һәм матбуғатта баҫтыра барыуы ла, балалар өсөн фәнни-популяр әҫәрҙәр яҙыуы ла, "Башҡортостан пионеры" гәзитендә "Фән доньяһы" тигән рубрика индертеп ебәреүе лә халҡыбыҙ киләсәген хәстәрләү булды. Үҙе лә ялҡынлы йөрәкле шағирә Эльмира Сәсәнбаева билдәләүенсә, ундайҙарҙы ут шәхестәр тип тә атап булалыр. Йөрәгендә халҡын йөрөткән барлыҡ ил улдары һәм ҡыҙҙарына киләсәк быуын рәхмәтле булырға тейеш. Рәшит Ниғмәти, Баязит Бикбай, Зәйнәб Биишева, Ғайса Хөсәйенов, Рәми Ғарипов, Рауил Бикбаев, Ғәзим Шафиҡов, Рәшит Шәкүр, Рауил Ниғмәтуллин, Вил Ғүмәров, Рәшит Назаров, Ҡәҙим Аралбаев, Риф Тойғон, Тамара Ғәниева, Хәсән Назар, Факиһа Туғыҙбаева, Ринат Камал, Динә Талхина, Әхмәр Үтәбай һәм улар кеүек халҡыбыҙға ҡалҡан булырҙай башҡа шағир һәм шағирәләребеҙҙең туған тел, тыуған ил, халыҡ тураһындағы шиғырҙары ла ошондай хәстәрлектән килеп тыуған. Күңелдән сыҡҡан был шиғырҙарҙың халыҡ күңеленә майҙай яғылып тороуы тиктәҫтән түгел. Ул шиғырҙар тышҡы күңелдән генә яҙылмаған. Күңелдәрҙе аҡтарып сығарып, уйландырып, тулғандырып алғандан һуң яҙылған был шиғырҙар. "Телһеҙ ҡалһаҡ, моңһоҙ ҡалырбыҙ бит. Иншар мәрйә эйәртеп ҡайтһа, моңон кем дауам итер", — тип һөйләшеп ултырған ирҙәрҙең фекерҙәре менән ауаздаш. Был ирҙәрҙең халҡыбыҙҙың киләсәге тураһында уйлап, шул тиклем тәрән мәғәнәле фекерҙәр әйтеп ултырыуы ғәжәп ине. Атайымдың ғорурлыҡ менән: "Мәрхәбә ул яҡтан ныҡ тота", — тип әйтеүе иҫемдә. Өндәшмәй генә, беҙҙең уҡыуыбыҙға ла әллә ни иғтибар

итмәй генә йөрөүе, баҡһаң, ғәмһеҙлектән түгел, ә әсәйемә ныҡ ышаныуҙан булған икән. Ә әсәйем, ысынлап та, атайым әйтмешләй, ныҡ булды. Әсәйем бер саҡ Фарзыя инәйгә тәрән әсенеү менән:

— Ай, апай, балаларыңды үҙ моңобоҙҙан айырмаҫҡа кәрәк ине. Күрәғараулыҡ бит был. Йәшәүҙәренең ҡото булмаҫ бит, — тине. Был инәй хаҡында "Аң" тигән өлөштә һүҙ булғайны. Ул, балаларын русса өйрәтәм тип, гел генә күрше урыҫ балалары менән аралаштырҙы, өйҙәрендә патефондан гел генә русса йырҙар яңғыраны. Рус теленә өйрәтеүҙе туған тел иҫәбенә алып барыу ҙур хатаға, хатта юғалтыуҙарға килтерҙе.

— Үҙем русса белмәй күп аптырандым. Шуға балаларымды наҙан итмәйем, тип уйлауым, һылыу, — тине Фарзыя инәй.

— Урыҫын да белһен, үҙеңдекенән дә айырма. Атыу үҙеңде лә һанға һуҡмай башларҙар. Кемгә өйләнерен, кемгә кейәүгә сығырын да уйларға кәрәк бит. Ҡыҙың башҡортса белмәгәс, балаһына сәңгелдәк йырын нисек йырлар икән?

Милләт ҡотон һаҡлау өсөн сабый саҡтан сәңгелдәк йыры менән туған моң һеңдереүҙең әһәмиәте тураһында барған һүҙ.

Күңеленә үҙ туған телендә халҡы моңо, халҡының тел һуты йоғоу зарурлығы, моңға төрөп наҙ һалынырға тейешлеге хаҡында фекер әйтелгән.

Әсә моңо, әсә йыры аша күңелгә тел наҙы һалына, күңел йылылығы тәрбиәләнә. Күңел йылылылығының, йән йылыһының әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Хатта Кешелек донъяһының бар булыуы шул йән йылыһы булыуға ҡайтып ҡалалыр.

Хәҙерге заман фән ҡаҙаныштары тәбиғәттең байтаҡ серҙәрен асты, көнкүрештә лә, халыҡ хужалығында ла ҙур еңеллек яһаны. Шундай ҡаҙаныштарҙың береһе – бөтәбеҙгә лә билдәле – инкубатор. Меңәрләгән йомортҡанан бер юлы себештәр сығарыла. Быға фән ҡаҙаныштары нигеҙендә тауыҡ биргән йылылыҡты булдырыуҙан өлгәшкәндәр. Әммә инкубатор тауыҡтары үҙҙәре себеш баҫып сығарыуға һәләтһеҙ. Фән уға өлгәшә алмай. Яһалма йылылыҡ менән нәҫел дауам иттерерлек йән йылылығы биреп булмай.

Йән йылылығы ала алмаған йән эйәһе үҙе лә ҡот бирә алмай.

Кешелек донъяһында ла тәбиғилекте яһалмалылыҡ менән алмаштырыу ошондай уҡ күҙгә күренмәгән "йән йылыһынан" — ҡоттан мәхрүм итмәйме икән беҙҙе? Тәбиғилектән ситләшеү беҙҙе юҡҡа сығарыуға табан алып бармаймы? Бөтә халыҡтарҙың да күңел моңона бер ҡалып яһарға, бер телдә һөйләштерергә ынтылыусы ҡайһы бер "әһелдәр" тәбиғәт ҡанундарына ҡырҡа ҡаршы килә. Ә тәбиғи ҡанундарға ҡаршы килеүҙең эҙемтәләрен — күҙгә күренгән-

дәрен белеп торабыҙ. "Гендар инженерияһы" ысулы менән клонлаштырылған Долли һарығының йырткыс булып сыҡҡанлығын, үләнде лә, ваҡ хайуандарҙы ла ашағанын бөтә донъя белә.

Йән йылылығын, тимәк, йәшәү ҡотон үҙебеҙ һаҡларға тейешбеҙ.

Күңелемә тыныслыҡ ҡото етмәй

Йәшәү ҡотоноң булмауы йән тыныслығын ала. Йәшәү ҡотон юғалтҡандарҙың ҡайһы берҙәре яҡты донъя менән үҙ ихтыярҙары менән китергә ашыға. Әммә уларҙың тынысһыҙ, рәнйетелгән, кәмһетелгән йәндәре йәшәүен дауам итә, тыуасаҡ яңы йән эйәһенә сәләмәт йән күсмәй. Кеше яҡты донъя менән хушлашҡан саҡта, тыныс йән менән китергә тейеш. Был хаҡта миңә яҙыусы Зәйнәб Биишева әйтте.

Башҡорт халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева, ире Ғәзиз Әминев ағайҙы ерләгәндән һуң, үлем хаҡында йыш ҡына уйлана башланы. Мине үҙенә саҡырып алып, васыяттар ҙа әйтте, хаттарының, яҙыла башлаған әҫәрҙәренең ниндәй тәртиптә ятыуын, ҡайһылайыраҡ итеп иҫтәлектәр китабы сығарырға кәрәклеген, музейын нисек төҙөтөргә кәрәклеген дә әйтә торғайны. Йорт-музей тураһында һөйләшеү өсөн Күгәрсен районына ла барып килгеләнек. Урын да һайлап йөрөнөк.

Ә бер тапҡыр бөтөнләй икенсе маҡсат менән командировкаға саҡырҙы:

— Минең бер үкенесем ҡалды. Әйләнгән һайын шул үкенесем, күңел бурысым зиһенемде быраулап тик тора. Үлгәс, йән тыныслығы булһын өсөн, шул ҡотто ҡайтарырға кәрәк ине, — тине бер саҡ Зәйнәб Биишева.

Ғәзиз ағай мәрхүм булып, бер аҙ ваҡыт үткәс, Зәйнәб апай беҙгә килде. Үҙем көн һайын барып хәлен белә торғайным. Аҙ ғына бармай торһам, редакцияға ла, Диҡҡәткә лә шылтыратып эҙләтә башлай торғайны. Зәйнәб апайҙың апаһы Хафаса инәй ҙә һағынып көтөп ала ине. Әле оло яҙыусының үҙенең килеүенә аптырап киттем. Лифт эшләмәгәнлектән, алтынсы ҡатҡа күтәрелеү ауыр — ул ишек алдыбыҙҙағы эскәмйәгә ултырған да бер баланы мине саҡыртырға ебәргән.

— Һеҙҙе яҙыусы Зәйнәб Биишева саҡыра. Ул анауында эскәмйәлә ултыра, тигәс, — аптырап киттем. Диҡҡәт менән бергәләшеп сыҡтыҡ.

Зәйнәб Биишева башта шаяртып алды:

— Был яҡҡа ни юл төшкәне юҡ ине. Өфөнөң был яҡтары ла бар икән, тип, ҡарап килһәм, Зеленая роща тирәһе икән. Килгәндә, такси менән килдем дә ул, лифтығыҙ эшләмәй. Унда такси күтәрелмәне, — тип көлә. Шунан, — мин Диҡҡәт ҡустыма ағаһын ерләшкәндә ярҙамы өсөн рәхмәт әйтәйем тип тә, шунан бик ҙур йомош менән дә килдем әле, — тигәс, баҡсаһында ярҙам итергәлер, тип уйлап алдым. Өйгә сәй эсергә саҡырҙыҡ — инмәне. — Ошонда ғына йомошлайым да, такси саҡыртып ҡына ултыртып ебәрерһегеҙ, — тине.

— Диҡҡәт ҡустым, мин хәҙер өлкәнәйгәнмен. Тыуған яҡтарымды яҙыусы Биишева булып ҡайтып күп күрҙем, үлер алдынан Зәйнәб булып ҡына ҡайтып киләйем әле. Берәй өс көнгә Мәрйәмде биреп тораһыңмы әллә? — тине. Беҙҙең балаларҙы кемгәлер ҡалдырып бер ҡайҙа ла барғаныбыҙ юҡ ине. Шуға ҡапылғара яуап бирә алмай ҡалдыҡ. Диҡҡәт был хаҡта тураһын әйтте:

— Зәйнәб апай, һеҙҙең үтенесте мин кире ҡаҡмайым. Тик балаларҙы ҡайҙа, кемгә ҡалдырыу хаҡында уйлашырбыҙ ҙа, иртәгә үк инеп әйтермен. Бынығы — минең яҡтан... Ә редакция?

— Абдулла Ғиниәтович менән һөйләштем. Өс көнгә генә. Унан арыға ебәрә алмайым. Тәржемәселәргә ҡытлыҡ миндә, тине. Мәрйәм һылыуым менән рәхәтләнеп йөрөп килермен. Башҡа бер кем менән дә һүҙем килешеп иркенләп йөрөй алмам.

Мәрйәм һылыу баш тартмаҫ тип ышанам. Ул ҡатын кеше, үҙе лә нескә күңелле, етмеш ике йәшлек апаһын, моғайын, аңлар, барыр минең менән, тип, эгоистарса хәл иттем дә ҡуйҙым, — тине яҙыусы.

Беҙ Диҡҡәт менән кәңәшләштек тә, шундай ҡарарға килдек: Илгизәр улымды үҙем менән алып китәм, өс ҡыҙыҡайҙы әсәйемдәргә ҡалдырып торабыҙ. Әсәйемдәр менән ишегаллаш ҡына Мәрфуға апайым йәшәй, эштән ҡайтҡан арала ул да ҡарашыр, тип хәл иттек.

Күгәрсен районына, Туйымбәткә киттек.

Күгәрсен районының ул саҡтағы етәкселәре үҙҙәренең күренекле яҡташтарына, ижади кешеләргә ҡарата ихтирамлы һәм иғтибарлы булыуҙары менән һәр саҡ айырылып торҙо. Хатта күрше райондарҙан да аңлау тапмаған музыканттар, йырсылар, бейеүселәр Күгәрсен районына төйәк эҙләп күсеп китә торғайны. Оло яҙыусыбыҙҙы ла шул тиклем матур ҡаршы алдылар. Идеология буйынса секретарь Сулпан Абдулхаҡ улы Ғайсин, икенсе секретарь Винер Ғәлимйән улы Аҙнағолов, дөйөм бүлек мөдире Алик Ишмө-

хәмәт улы Сәйетҡоловтар осрашыуҙар үткәреү буйынса план төҙөп, Зәйнәб апайҙың ризалығын һорарға көтөп торғандар. Зәйнәб апай:

— Ҡустылар, һеҙ мине гел генә һәйбәт ҡаршылайһығыҙ, ҡунаҡ итәһегеҙ. Тик был юлы мин рәсми осрашыуҙар өсөн килмәнем. Бына Мәрйәм һылыуым менән бергәләшеп Эйек буйҙарынан ялан аяҡлап атлап үтәйем, Эйек һыуҙары менән битемде йыуайым, трилогиям геройҙары менән осрашайым, урамдарҙа күреп һөйләшәйем, урындыҡтарында ултырып сәй эсәйем, тип килдем. Яҙыусы кеше тыуған ауылына ҡайтып, ауылдаштары менән президиум өҫтәле артында ғына ултырып һөйләшеп китергә тейеш түгелдер ул. Мәрйәм һылыуым үҙе лә Эйек ҡыҙы, беҙ бер-беребеҙҙең күңелдәребеҙҙе аңлашабыҙ. Шуның өсөн береһен дә борсомайыҡ, береһе лә белмәһен, үҙ яйыбыҙ менән генә йөрөп киләйек, — тине.

Беҙҙең менән бергә Алик Ишмөхәмәт улы йөрөнө. Мораҙым мәмерйәһенә лә барҙыҡ, Мораҙым ауылында ла, Исемдә лә, Айһай-Мөрсәләйҙә лә булдыҡ, Туйымбәт урамдарын да урап сыҡтыҡ. Трилогия геройы Тимербайҙың боронғо башҡорт йырҙарын тыңлаған Оло Эйек буйҙарында, үле Эйек туғайҙарында, Олоғул тирәһендә, Исемгә илткән юлдар, Хәбир тирәге... Ысынлап та, ялан аяҡлап үлән кисеп, устарыбыҙға әрем ыуалап еҫкәп, йылғаға төшөп бит йыуып, яр башында ултырып фотоға төшөп, романда һүрәтләнгән байтаҡ урындарҙа булып, ауылдаштары менән осрашып, хатта сәй эсергә саҡырғандарына инеп, урындыҡта аяҡ бөкләп ултырып сәй, ҡаймаҡ туғылған ҡатыҡ эсеп йөрөнөк.

Бер көнө эңер ваҡытында икәүләшеп кенә Эйек буйлап киттек. Шул саҡта Зәйнәб апай "Сәлимәкәй"ҙе йырлап ебәрҙе. Етмеш ике йәшлек яҙыусының күкрәктән талғын ғына ағылып сыҡҡан моңо башта сәйерерәк тойолдо. Һәр саҡ етди йөҙлө, етди мәсьәләләр хаҡында ғына һөйләшкән әҙибә көтмәгәндә моңло итеп оҙон көйгә йырлап ебәрһенсе! Нескә күңелле, наҙлы тауышлы, тыуған яғын өҙөлөп һөйгән Зәйнәб апай ултыра ине Эйек буйында. Ҡулына әрем тоҡҡан, күпереп ятҡан үлән наҙын тойоу өсөн ялан аяҡланып алған...

Был сәйәхәтебеҙҙең тағы бер маҡсаты — Байрастың прототибының хәлен белешеү ине. Хисмәтулла исемле кеше булған ул. Зәйнәб апайҙың хәтерләүҙәренә ҡарағанда, ул буласаҡ яҙыусыны ҡыйырһытыуҙарҙан, хатта ҡайһы берәүҙәрҙең мыҫҡыллауынан һәр саҡ ҡурсалап йөрөгән. Зәйнәб апай Хисмәтулла ағай тураһында ошоларҙы һөйләне:

—...Кешенең булмышы тотош хәтерҙә ҡалмай. Уның йә

хәрәкәте, йә йылмайыуы, йә йыры, йә берәй әйткән һүҙе үҙәк өҙҙөрөп тик тора. Йөрәктә моң нисек һаҡлана — ҡайһы бер хәтерләүҙәр ҙә шулай. Күк йөҙөн ҡап-ҡара болот ҡаплап алған саҡта, аралаш-аралаш ҡына асыҡ һауа күренеп ҡала ла, болоттарҙың бына-бына үтеп китеренә, көндөң аяҙырына өмөт осҡоно һала. Шуның һымаҡ ҡара етемлектә ҡыйырһытылып, балаларҙың йәберһетеүҙәренә түҙгеһеҙ булып киткән саҡтарымда Хисмәтулла минең киләсәгем яҡты булырына өмөт осҡоно һалды.

Кәүҙәгә бәләкәй генә, сибек кенәмен. Күҙҙәрем ҙур. Йәмһеҙ ҙә күрендем микән. Бер саҡ урамдағы балалар ҡайтармай, өйөбөҙ яғына ебәрмәй: "Аҡайған, ҡатҡан кәзә бәрәсе", — тип үсекләйҙәр. Бер алдыма, бер артыма сығып ҡыскыралар. Мин иламһырап тора инем, Хисмәтулла етәкләп алды ла өйгә тиклем оҙатып ҡуйҙы. Шунан: "Зәйнәб, һин бәләкәй булһаң да үҫкәс, бик ҙур булырһың. Өләсәйем шулай тине", — тип йыуатҡан булды.

Ырымбур педагогия техникумын тамамлағас, егерме бер йәшемдә Баймаҡ районына уҡытыусы булып эшкә киттем. Матур йырлай инем. Йырларға яратты мин. Бик ныҡ эсем бошоп киткән саҡта, йырлап ебәрә лә рәхәт булып китә торғайны. Йырлағанымды ишетеп ҡалғандармы, мәктәптә балаларға йыр өйрәтә торғайным – шуны белгәндәрме — "Ғәлиәбаныу" спектаклендә Ғәлиәбаныу роленә ҡуйҙылар. Хәлил булып Ғәзиз уйнаны. Сәхнәлә уйнаған саҡта Ғәзиз-Хәлил Зәйнәб-Ғәлиәбаныуҙы ысынлап үпте лә алды. Мин, сәхнәлә егет менән үбешкәндән һуң, уҡытырға нисек бармаҡ кәрәк, тип оялып, быға са баш тартып килһәм дә, Ғәзизгә кейәүгә сығырға риза булдым да ҡуйҙым. Кейәүгә сығыу башҡа ла инеп сыҡмай ине. Артабан уҡырға, Өфөгә ҡайтырға, яҙырға, яҙыусы булырға, үҫергә, тигән иҫәп менән йәшәй инем. Ғәзизгә сыҡҡаныма аҙ ғына ла үкенмәнем. Бик матур йәшәнек. Тик минең болотло көндәремде ҡояш булып балҡытып ебәргән, йөрәгемдә өмөт осҡоно ҡабыҙған, ышаныс өҫтәгән Хисмәтулланың ғына яҙмышы әлегәсә борсой. Минең Ғәзиз менән ғаилә ҡороуым тураһында ишеткәс, егеттәр Хисмәтулланы түпәләп тә алғандар. "Һин өйләнә тип кенә Зәйнәбтең ситкә китеүенә риза булғайныҡ. Асығауыҙ икәнлегеңде белгәндә, бер ҡайҙа ла ебәрмәй, ауылда ҡалдыра инек уны, уға өйләнергә теләүселәр бер һин генә түгел инең," — тип, бәйләнә башлағас, Хисмәтулла ауылды ташлап сыҡҡан да киткән.

Мин Өфөгә килдем. Ҡәләм тибрәтә башланым. Утыҙынсы йылдарҙан башлап хикәйәләрем баҫыла торҙо. "Партизан малай" тигән китабым донъя күреп, яҙыусы, тигән исемем тарала башлағайны, Хисмәтулланың: "Һин үҫкәс, ҙур булырһың", — тип йы-

уатыуын иҫкә төшөрөп көлөп алдым. Мине ҡыйырһытҡан саҡтарҙа Хисмәтулла ныҡ ҡайғырған икән. Шунан өләсәһе: "Зәйнәб өсөн ҡайғырма, улым. Ул хәҙерҙән үк Ғабдулла Туҡай шиғырҙарын ятҡа биклəп ултыра. Зиһене яҡты уның. Бик тырыш та. Үҫкәс, бик ҙур кеше булыр ул", — тигән. Хисмәтулла өләсәһенең һүҙҙәре менән йыуатмаҡсы булған, күрәһең. Тик әйләндереп килтереп әйтеп еткермәгән. Ғөмүмән, туған һымаҡ яҡын был кешене һәр шатлығым, һәр китабым сыҡҡан һайын, минең хаҡта маҡтау һүҙҙәре әйтелгән һайын иҫкә төшөрә торҙом. Һағышлы ғына моң йөрәк ҡылдарын сыңлатып-сыңлатып үтеп киткән кеүек ул хәтерләүҙәр. Мин ни эшләптер үҙемдең әлеге Зәйнәб кимәленә күтәрелеүем менән уға бурыслымын да шул бурысымды үтәй алмаған һымаҡмын. Ә бит, ысынлап та, ышаныс, өмөт осконон ул башлап һалған миңә.

Һуғыш башланғас, Ғәзизде оҙатып ҡалғанда, минең өс улым бар ине инде. Бер аҙҙан Ғәзиздең һәләк булыуы хаҡында ҡағыҙ килде. Тик ни эшләптер күңел ышанманы ул ҡағыҙға. Шулай ҙа минең ауыр ҡайғым, юғалтыуым хаҡында һүҙ таралып өлгөргәндер. Күп тә үтмәй, Ленинград госпиталенән: "Һеҙҙең иреген Әминов ауыр хәлдә. Контузияланды. Килеп алығыҙ", – тигән саҡырыу ҡағыҙы алһам да, ҡайғымды уртаҡлашып хаттар килә ине әле. Ғәзизде барып алып ҡайттым. Ниндәй генә хәлдә булһа ла иҫән булыуына шатлыҡтың сиге юҡ ине. Контузияһы ныҡ. Һуңғы көндәренә тиклем тынысландырғыс дарыу менән генә тоттом уны. Ленинградтан алып ҡайттым, күҙ ҡараштары менән генә аңлашабыҙ. Бер көнө сәй эсеп ултырғанда, (*ул саҡта Коммунистик урамда агас йортта йәшәй инек*), көтмәгәндә Хисмәтулла килеп инде. Беҙ өсөбөҙ ҙә һүҙһеҙ аңлаштыҡ. Ғәзиз уны бер тапҡыр ҙа күрмәһә лә минең һөйләүем буйынса белә ине. Уға ни тип аңлатырға ла белмәнем. Әйтерһең дә, мин Ғәзизде тереләй юҡ кешегә һанағанмын, әйтерһең, Хисмәтулланы мин саҡырып килтергәнмен. Ғәзиздең аптыраулы ҡарашы шуны аңлата ине. Ул ярым кеше булып ҡайтҡан. Ә Хисмәтулла һомғол кәүҙәле, үткер ҡарашлы, олпат матур бер ир булып килеп инде өйөбөҙгә. Сәй эсерҙем дә оҙата сыҡтым. Оҙатып сыҡтым да ҡапҡаға һөйәлеп тороп ҡалдым. Ә ул, мөһәбәт кәүҙәле ир, меҫкен генә булып бөршәйеп ҡалғандай булды. Китте. Шул китеүенән уның хаҡында бер хәбәр ҙә ишетә алманым. Ауылдан килгәндәрҙән һорап ҡарайым — белмәйҙәр, ауылда уның бер кеме лә ҡалманы, ҡайтҡаны юҡ, ти ҙә ҡуялар ине. Һылыу, әгәр ул иҫән икән, ярҙамға мохтаж булһа, мин ярҙам итер инем. Аҡсалатамы, тел ярҙамымы... Ул – минең күңелемдә мәңге онотолмаҫ бер һағышлы моң ул. Ошо

моң алдында бурысым бик ҙур минең. Уның: "Зәйнәб, һин үҫкәс, ҙур булаһың ул",— тигән һүҙҙәре бәләкәй сағымда, ысынлап та, шулай булырына ышаныс тыуҙырып, күңелемде йыуатһа, артабан ижад итә башлағас, был һүҙҙәр сәм уятты. "Миңә бәләкәйҙән ҙурлыҡ юрағандар. Мин был ышаныҫты аҡларға тейешмен. Халҡымдың матур күңелен донъя кимәленә күтәрергә, башҡаларға ла күрһәтергә тейешмен", — тигән маҡсат ҡуйҙым...

Беҙ трилогия геройҙары прототиптарының яҙмыштары менән ҡыҙыҡһындыҡ. Сыуаҡай әбей беҙҙең менән бергә сәй эсеп йөрөнө. Күптәр Өфөлә йәшәй ине. Хисмәтулла ағай тураһында һораштыҡ. Һораша торғас, уның ҡайҙалыр Ырымбур яғында йәшәгәнен, яңыраҡ ҡына үлеп киткәнен, үлгәнсе буйҙаҡ йәшәгәнлеген ишеттек. Дөрөҫ инеме, әллә Зәйнәб апайҙың бик өҙәләнеп һорашыуын яуапһыҙ ҡалдырмаҫ, күңелен тыныҫландырыр өсөн әйттеләрме, һәр хәлдә Хисмәтулла ағай хаҡында шул хәбәрҙе ишеттек.

Зәйнәб апай күңел йыуатырлыҡ хәбәр ишетмәһә лә, бер аҙ тыныҫланды:

— Ни эшләйһең инде... Был хәбәрҙе ишетеү ҙә күңелде аҙыраҡ тыныҫландырҙы. Юғиһә, ныҡ мохтажлыҡта йәшәйҙер, минең хаҡта ишетәлер, ә мин уны уйлап та бирмәйемдер, тигән уй һәр саҡ бор-сой ине. Ауыр тупрағы еңел булһын изге кешенең, — тине һәм өлкәнәйеп бөткән әхирәттәрен сәй менән һыйланы. Табында ваҡытта бала саҡ иҫтәлектәренә төштөләр, Хисмәтулла ағайҙы матур итеп иҫкә алдылар. Зәйнәб апай был сәйәхәттән ҡәнәғәт ҡайтты:

— Ихлас, ҡотло сәйәхәт булды был. Һиңә лә, Диҡҡәт ҡустыға ла рәхмәтем ҙур, — тине өлкән яҙыусы.

Бәхетең булһа, ҡото булһын

(*Нимә ул бәхет? Бәхет үҙе ҡот түгелме?*)

Рәйес, Ғәҙел, Әминә, Йәмилә бергә уҡыйҙар, үҙ-ара бик татыу булдылар. Ҡабул итеү имтиханы тапшырғандан алып дүртәүләшеп бергә әҙерләнделәр, бәхеткә күрә бөтәһе лә ҙур конкурста еңеп, уҡырға инделәр һәм бик һәйбәт уҡый башланылар. Дүртенсе курста өйләнешеп, ике йәш ғаилә бер бүлмәлә йәшәй башланы. Бишенсе курсты тамамлағас, Рәйесте ВЛКСМ-дың өлкә Комитетына эшкә алып ҡалдылар, ә Ғәҙел аспирантураға инде. Тик яңғыҙ ҡалған әсәһе аяҡтарынан ҡуҙғала алмай, ятып ауырый башлағас, ғаиләһен алып ауылға эшкә ҡайтып китте. Дуҫтар бер-береһе менән хәбәрләшеп, тура килгәндә аралашып торҙо, утыҙ туғыҙ йәш-

тәренә мотлаҡ сақырышырға һүҙ ҡуйыштылар. Ғәҙел менән Әминәнең тыуған көндәре йәйҙең иң емешле, матур айы – июль айында. Ғәҙел менән Әминә матур итеп әҙерләнделәр. Алдан уҡ йәй һуйырға эре мал да тәғәйенләп ҡуйҙылар, ҡыштан ҡаҙылыҡ та алып ҡалдылар. Ҡаҡлаған ҡаҙ ите лә һаҡланы. "Балаларҙы таныштырайыҡ. Йәйҙең урыны иркен, оҙаҡ итеп ҡунаҡ булып ҡайтырҙар. Нәкиә апай ҙа тыуған яҡтарын һағыналыр. Әсәйем менән көңгөрҡаңғыр һөйләшеп ултырырҙар", — тип һөйләштеләр Әминә менән. Балаларға ҡыҙыҡ булһын өсөн, лапаҫ башына яңы бесән килтереп ауҙарып, йоҡлар урынды шунда әҙерләне Ғәҙел. "Үҙем барып сақырайым Рәйесте. Вазифаһы ҙур, хат аша сақырыу уңайһыҙ булыр, тип уйланы. Юл яҡшы, бынау торған Өфөгә ни – барҙым-ҡайттым. Ҡулда машина. Элек кенә ул каникулға икешәр көн ҡайтыла ине," – тип, ике кәңәште бер итеп хәл ҡылдылар ҙа — Ғәҙел Өфөгә юл тотто.

Рәйес дуҫының эшенә барҙы. Кем белә – бәлки, өйөнә барыу килешеп етмәҫ. Вазифа кешене үҙгәртә бит ул, тип уйланы. Аҡ йорт янына килеп туҡтаны. Министрҙар Кабинетының ҡабул итеү бүлмәһенән дуҫының телефоны буйынса шылтыратты. Сәркәтип ҡыҙ алды:

— Тыңлайым. Һеҙ ниндәй йомош менән?

— Мин Рәйес Рәшитовичҡа килгәйнем. Йомошом шәхси ине.

— Рәйес Рәшитович шәхси йомош менән кесаҙна көндәре ҡабул итә. Алдан яҙылырға кәрәк.

— Мин райондан килдем. Һеҙгә Ғәҙел Ғафарович килгән тип кенә әйтегеҙ әле.

— Ваҡытлы-ваҡытһыҙ борсорға минең хаҡым юҡ. Ул бөгөн командировкаға йыйына. Ваҡыты юҡ. Хәҙер сығып китә.

— Йомошом бик мөһим. Үҙен күрергә кәрәк ине. Зинһар, әйтегеҙ. Мин — уның яҡын дуҫы, курсташы. — Ғәҙел улай тиҙ генә баш биреп бара торғандарҙан түгел. Тиҙ генә хәйләһен уйлап тапты. — Мин Рәйес Рәшитовичтың үҙенең йомошо менәнмен. "Йомошоғоҙ үтәлде. Ғәҙел Ғафарович", – тип кенә яҙып индерегеҙ. Был хаҡта уға тиҙ арала хәбәр итергә кәрәк, — тине.

— Ярай. Ике минуттан шылтыратығыҙ.

— Хәйләһеҙ донъя файҙаһыҙ, тигәндәре ошо инде. Анау тиклем ерҙән килеп кире боролоп ҡайтып китергә түгел, — тип уйланы ла Ғәҙел, инергә ҡушһалар, тип, яурындарын яҙып, кәүҙәһен турайтып баҫып, костюмын, галстугын рәтләп, кеҫәһендәге паспортын ҡапшай бирep, әҙерләнде. Шылтыратты.

— Ғәҙел Ғафарович, — тине сәркәтип ҡыҙ. — Рәйес Рәшитович

ғәфү үтенде. Бөгөн кискә ҡайтырмын, беҙгә барһын, тине. Уны машинала кешеләр көтөп тора, шуға бик ашыға, — тине һәм Рәйес Рәшитовичтың өй телефонын, адресын әйтте.

Рәйес Рәшитович адрес яҙып алды ла машинаһына ултырып дуҫының өйөнә китте. Йәмиләне лә, уның әсәһен дә бик күргеһе килә ине уның. Күрше ауылдан Ғәҙелдәр ауылына йөрөп уҡыған класташы ул Йәмилә. Мәктәптә һуңлабыраҡ ҡалһалар, Ғәҙел уны ауылдарына тиклем оҙатып та ҡуя ине. Хәҙер ауылға ҡайтмайҙар, Йәмиләнең әсәһен күсереп алдылар. Мәсьәләнең былай хәл ителешенә ул ҡыуанды ғына, тик Рәйестең үҙен күреп, саҡырып, бара аламы-юҡмы икәнлеген бер юлы белеп китеү яҡшы булыр ине, кискә саҡлы көтөп булмаҫ, уттай эш ваҡытында ауылдан бер көнгә сығып китһәң дә әллә ни саҡлы эш ҡала, тип уйланы.

Сәркәтип ҡыҙ өйгә лә шылтыратҡан, ахыры. Рәйес Рәшитович ҡушҡандыр. Йәмилә ишек алдына уҡ сығып көтөп тора ине. Йәмилә ғенәме ни, ике балаһы ла йүгерешеп сыҡҡан, Нәҡиә апай ҙа тәҙрәнән ҡарап йылмайып тора.

— Кемде күрәм! Кем килгән беҙгә! Һаумы, Ғәҙел? — Йәмиләнең күҙҙәрендә йәш тә мөлдөрәп ҡалды. — Әминә ни хәлдә? Балаларығыҙ үҫәме? Әсәйең ни хәлле? —Өйгә инмәҫ элек башланған һорауҙар, яуап та көтөп тормайынса, әле Йәмиләнән, әле Нәҡиә апайҙан яуҙы ла яуҙы. Ҡайҙа ултыртып, ҡайҙа һөйләтеп, нимә ашатып ҡәҙерләргә белмәнеләр. Ғәҙел, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, бындай ҡаршылауҙы көтмәгәйне. Ҡаушап ҡалды. Йылы ҡаршыларҙар, ихлас булырҙар, тип уйланы-уйлауын, әммә бындай уҡ танһығлаған ҡунаҡ булырмын, тип ымһынмағайны.

— Рәйес шылтыратҡас уҡ көтә башланыҡ. Үҙе ни тағы ашығыс командировкаға китте.

Йәмилә, ире өсөн ғәфү үтенгәндәй, үкенесле ҡараш ташланы.

— Эше шулай булғас... Ярай, ауылға килгәс, рәхәтләнеп һөйләшербеҙ әле, — тине Ғәҙел, уны тынысландырып.

Сәй янында уҡыған саҡтарҙы иҫкә алдылар, бер көлөп, бер моңһоуланып дуҫтарҙы берәм-берәм барлап сыҡтылар... Йәмилә туҡтаған арала Нәҡиә апай ауыл яҡтарын, уртаҡ таныштарҙы һорашып ала, иген, еләк-емеш, ямғыр хаҡында белешә:

— Быйыл йыл арыу килә, ахыры. Баҙарҙан ауыл йоморттҡалары алғайным. Эре генәләр. Тупраҡ уңдырышлы булыр, тип уйлап ҡуйҙым, — тип, күҙәтеүҙәре менән уртаҡлашты.

Өлкәндәрҙең бер быуа һөйләшеүҙәрен көтөп торған балалар, берәм-берәм әсәйҙәренең ҡолағына ниҙер шыбырлап алды. Әминә йылмая-йылмая баш ҡаҡты. Шунан Ғәҙелгә:

— Ҡыҙым һәләтле балалар лагерында булып ҡайтты, музыка буйынса беренсе урынды алған, үҙе сығарған көйҙө уйнаған. Шуны тыңлатам, ти. Форсатың булһа, тыңлайыҡ әле.

— Әлбиттә, әлбиттә, — тине Ғәҙел.

Ҡыҙыҡайҙың күҙҙәре нурланып китте, күбәләктәй осоп йөрөп урын әҙерләне, пианино янындағы ҡара түңәрәк ултырғысының бейеклеген рәтләне, нотаһын алып ҡуйҙы. Нота дәфтәренә үҙе ижад иткән көйөн яҙған, ахыры. Иң өҫкә үҙ исемен яҙып ҡуйған.

Иркен залда күмәкләшеп ултырып, баланың уйнағанын тыңланылар. Ихлас ҡул саптылар. Ғүмере буйы балалар менән эшләгән һәм яҡшы педагогтар иҫәбендә телгә алынған Ғәҙел ҡыҙҙың ҡарашынан тағы уйнағыһы килеү, танһығы ҡанмауҙы тойҙо.

— Уйының бик оҡшаны, ҡыҙым. Көйөң матур. Яҙған көйҙәрең тағы бармы? Әйҙә, тағы берәйһен уйна әле, — тине Ғәҙел. Ҡыҙ, ҡыуанысынан ни эшләргә белмәй, сәбәкәйләп алды. Әҙер ятҡан нотаһын ала һалды ла:

—Ғәҙел ағай, мин атайымдың яратҡан көйөн уйнайыммы? — тип һораны.

— Уйна, балам, уйна.

Апаһының бындай ҡыуанысы эргәһендә торған ҡустыһына ла күсте, ахыры. Уның да йөҙөндә шатлыҡ нурҙары уйнаны.

Ҡыҙыҡай дәртләнеп уйнаны. Тағы ҡул саптылар. Тағы маҡтанылар. Ҡыҙыҡай, ысынлап та, яҡшы уйнай ине. Ул уйнап бөтөүгә малай әле әсәһенә, әле өләсәһенә ҡарап алды ла нимәнелер хәл итеүҙе көттө. Ғәҙел уның да ниндәйҙер һөнәрен күрһәтеүгә ниәте барлығын аңлап ҡалды.

— Әллә һин дә уйнап өйрәнә башланыңмы? — тип һораны, шаяртып.

— Беләм, — тигән булды ла малай мут йылмайып әсәһенә ҡараны. Әсәһе уның ҡыҙығын һөйләп алды:

— Ҡыҙыбыҙ музыкаға йөрөй башлағас, тәүге тапҡыр бас ноталарын ҡушып уйнарға өйрәнеп ҡайтты. Атаһын һөйөнсөләнем:

— Ҡыҙыбыҙ бас менән уйнай башланы, — тигәйнем, улыбыҙ йүгереп килде лә:

— Мин дә бас менән уйнай беләм, – тине. Беҙ апаһы менән аптырап киттек. Пианиноға саҡ буйы етә, әле бер нота ла белмәй, нисек бас менән уйнай белә икән, тибеҙ.

Атаһы:

— Уйнап күрһәт, — тигәйне, пианино янына килде лә маңлайы менән дыңҡылдығы сыға башланы. Бас тигәнде "баш" тип аңлаған да, ҡыҙыбыҙҙы маҡтағанға үҙенең дә һөнәрен күрһәтергә уйлаған.

— Ҙурайғас, баш менән уйнаусы пианист булаһыңмы инде былай булғас? — тип, Ғәҙел малайҙың башынан һыйпап яратып алды.

— Ә мин өй төҙөүсе булам. Мин өй төҙөй беләм. Матур-матур өй төҙөйөм. Шунан атай булам. Гел-гел улымдың эшләгән өйөн ҡарайым, — тине малай.

— Ҡайҙа, әллә өй төҙөп ҡуйҙыңмы? — тип шаяртты Ғәҙел.

— Эйе. Әсәй, күрһәтәйемме?

— Әлбиттә. Хәҙер һинең һөнәреңде ҡарайбыҙ. Әйҙә, Ғәҙел, минең буласаҡ архитекторымдың өйөн ҡарайыҡ.

Улар малайҙың бүлмәһенә инделәр. Изәндә ҙур-ҙур шаҡмаҡтарҙан өй төҙөп ҡуйылғайны.

— Был – гараж, был эт йоҡлай торған бүлмә, бының һында сәй эсәбеҙ, бының – өләсәйемдең бүлмәһе, – тип үҙ өйөнөң бүленешен аңлата башланы.

— Атаһы тыуған көнөнә алып биргәйне төҙөүсе уйынсыҡтарын. Төҙөп ултыртып ҡуйҙы ла изән дә йыуҙыртмай, атаһына күрһәтергә тип көтә. Уның һының ваҡыты юҡ. Балаларҙың йоҡоһонда ҡайта, уларҙың йоҡоһонда китә.

Ғәҙел малай менән дә бик тиҙ уртаҡ тел тапты. Уның һы әллә ниндәй машиналар, гараждар тураһында һөйләп ташлаған булды.

Ғәҙел китергә йыйынғайны, барының да күңеле төштө лә ҡуйҙы. Быны һиҙгән Ғәҙел:

— Мин бит һеҙҙе йәйгелеккә ҡунаҡҡа саҡырырға килдем. Бөтөнөгөҙ ҙә килегеҙ. Өләсәйеңде лә ҡалдырмағыҙ. Ауылда иркен, рәхәт. Оҙа-а-а-аҡ ҡунаҡ булып ҡайтырһығыҙ. Нәкиә апай, әсәйем дә саҡырып ҡайтырға ҡушты. "Ауыл яғын да һағыналыр, барыр кешебеҙ юҡ, тип тормаһындар, үҙебеҙгә ҡайтһындар", — тине. Йәмилә, балалар менән килегеҙ. Рәйесте көтөп ала алмам, моғайын. Уға ныҡ итеп әйт, беҙҙе мәхрүм итмәгеҙ, оҙаҡҡа килегеҙ, — тине.

Хушлашыу сәйе эскән саҡта, Ғәҙел ауылдаш апаһына:

— Ҡартайған көнөңдә бәхет күрҙең, апай. Күнәк менән һыу ташып мал бағыуҙар, фермала эшләгән саҡта юрғанға урап быҙау күтәреп ташыуҙар иҫеңә төшөп ҡалтыранып-ҡалтыранып ҡуяһыңдыр әле. Әсәйем шул ауырлыҡтар арҡаһында аяҡһыҙ бит. Хәҙер рәхәткә сыҡтың. Китәм тиһәң – машина, киләм тиһәң – машина. Кранынды борҙоң – һыу, кнопкаға баҫтың – мейес. Бәхетегеҙ оҙайлы булһын, апай. Ҡыҙың бәхетле булды, – тине.

— Шулай, уның шулай. Ил күргәнде күрҙек инде. Рәхәткә сыҡтым. Ожмахта йәшәйем. Ошондай рәхәтлек өсөн һаулығыбыҙҙы юғалттыҡ бит. Кейәүгә рәхмәт. Бәхете булды баламдың... Тик бәхеттәренең ҡото юҡ, Ғәҙел. Икәүләшеп сөкөрләшеп ултырып сәй эсер-

гә лә ваҡыты ҡалмай кейәүҙең. Көн һайын хөкүмәт ҡунаҡтарын ҡаршылау ҙа ҡунаҡ оҙатыу, көн һайын байрам. Үҙ байрамы ғына юҡ. Гел кеше байрамы. Кеше байрамын байрам итеүҙән башы сыҡмай. Хатта тыуған көндәр ҙә лә өйҙә була алмай. Үпкәләп әйтеүем түгел, эше шундай. Һәр нәмәнең самаһы булыу яҡшы инде. Ғаилә булғас, теүәл генә йәшәгеһе килә ҡыҙымдың. Ауылдан бер генә лә киткем килмәй ине лә, ҡыҙымдың тормошон күргәс, түҙмәнем. Ауырыуға һалышмаҫ элек киләйем, тинем. Кешенең сәләмәтлеге ҡот менән бәйле бит ул. Йәшәү ҡото булһа, тауҙай йөктө лә күтәреп була.

— ..? —Ғәҙел, аптырап, һораулы ҡараш ташлап ҡуйҙы.

— Туҡтауһыҙ өмөт өҙөлөү, ымһыныу кешене ауырыуға һала. Кейәүҙең эше ҡатмарлы. Ҡайтам ти ҙә, ҡайта алмай. Бөгөн ял итәм, ти ҙә — ял итә алмай. Йәмилә көтә, бешеренә, өмөтләнә, ымһына. Борон ололар ымһынған эшең барып сыҡмаһа, йөрәккә ауырыу булып һарыла, үтә ныҡ өмөтләнмәгеҙ, аҙыраҡ икеләнеүгә лә урын ҡалдырығыҙ, тигән булалар ине. Шуларҙы уйланым да, киләйем, баламды әрәм итмәйем, зарығып көтөүгә ваҡыты наҡыҫ ҡалһын, бошоноп киткән саҡтарында эргәһендә булайым, тип килдем... Бәхет булһа, ҡото булһын. Ҡотһоҙ бәхеттең бер генә лә рәте юҡ уның, Ғәҙел. Әсәйем: "Йәшәүегеҙҙең ҡотон ебәрмәгеҙ. Ҡото китһә, ҡайтара һалыу сараһын күрегеҙ. Ҡотһоҙлоҡ оҙаҡ һаҡланһа, йә ауырыуға, йә үскә-нәфрәткә, йә яуызлыҡҡа әйләнә ул. Әкиәттәрҙә лә шулай бит: оҙаҡ йәшәгән йылан аждаһаға әүерелә. Шуның һымаҡ", — ти торғайны. Ысыны шул, Ғәҙел. Ҡотһоҙ бәхет тышҡы бәхет кенә. Кеше күрһен өсөн, — тине Нәҡиә апай.

Ғәҙел ҡайтыр юлда дуҫтарына килгәндән алып хушлашҡанға тиклем булған ваҡиғаларҙы тотош күҙ алдынан үткәрҙе лә үҙенең килеүенең ни өсөн шул тиклем ҙур кинәнес тыуҙырыуын аңланы.

"Әйтәм, әсәйем: "Ҡуҙғала алмай ятһам да күңелем бөтөн минең, балам. Йәшәү ҡотонан айырмауығыҙ өсөн рәхмәттән башҡа бер һүҙем дә юҡ," — тип ҡабатлай, тип, уйлап, әсәһе өсөн ҡыуанып ҡуйҙы.

* * *

Республикабыҙҙан ситтә йәшәгән башҡорттар янында булған саҡта ла, насар йәшәмәйбеҙ, тик йәшәүебеҙҙең ҡото юҡ шул, апай. Йылына бер тапҡыр ҙа үҙ теленҙә радио тыңламағас, телевизорҙан концерт ҡарамағас, күңел ял итә алмай, ти торғайнылар. Хәҙер был йәһәттән эштәр байтаҡ яйға һалынды. Тик бер быуын балалар

тамырһыҙ, тимәк, йәшәү ҡотонан мәхрүм ҡалды. Башҡорттарҙың Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында сит республикаларҙан килгән башҡорттарҙың йәшәү ҡото булмауы хаҡында әсенеп һөйләүҙәре минең: **матди байлыҡ – бәхет нигеҙе булһа, рухи байлыҡ – йәшәү ҡото,** тигән фекеремде нығытты.

Йәшәү мәғәнәһе бәхетеңдең ҡотло булыуында. Ҡотһоҙ бәхет ысын бәхет түгел. Мәңге йәшәр йәнебеҙ матди байлыҡтан түгел, ҡоттан көс-ҡеүәт, нур ала.

* * *

Ейәнсура башҡорт гимназияһы директоры булған саҡта, Беренсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты итеп һайланғайным. Ҡоролтайҙа заманында "Урал" үҙәгенә йыйылған ғәмләләр хыялланған, үтәлеүен маҡсат итеп ҡуйған мәсьәләләр күтәрелде һәм мөрәжәғәттәр ҡабул ителде. Рәсәй Федерацияһы өлкәләренең хакимиәт башлыҡтарына ла сит өлкәләрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙҙе ҡурсалап мөрәжәғәт ҡабул ителде. "...Беҙ башҡорт халҡының рухи ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү, юғалған мәҙәни байлыҡтарын аяҡҡа баҫтырыу кеүек изге эштә һеҙҙең булышлыҡ итеүегеҙҙе һорайбыҙ. Был – тыуған телдә аралашыу, милли мәктәптәр һәм кластар асыу, уларҙы уҡыусылар менән тәьмин итеү һәм уҡытыу, был – театр, концерттарға йөрөү, был – башҡортса телевидение һәм радио тапшырыуҙары, был, ахырҙа, – башҡортса өлкә һәм район гәзиттәре булдырыу...

Беҙ һеҙҙән өлкә радио һәм телевидение тапшырыуҙарында башҡорт телендә махсус каналдарҙы булдырыуҙы, әгәр мөмкин булмаһа, радио һәм телевидениела башҡортса тапшырыуҙарға ваҡыт бүлеүегеҙҙе һорайбыҙ...

Беҙ Ырымбурҙағы башҡорт халҡының милли йорто Каруанһарайҙы башҡорт халҡына ҡайтарып бирергә кәрәк тип иҫәпләйбеҙ..."

Мөрәжәғәтте тотош яҙып тормайым, әммә күрше өлкәләрҙә боронғо үҙ ерҙәрендә йәшәп, башҡалар кеүек үк матди байлыҡ булдырыуҙа тос өлөш индергән башҡорт халҡының рухи ихтыяжы аҙ ғына ла ҡәнәғәтләндерелмәгәнлектән, ҡоролтай исеменән Мөрәжәғәт ҡабул ителде. Әммә уға иғтибар итәләрме? Юҡ. Итмәйәсәктәр ҙә. Әлбиттә, Башҡортостандан ҡоролтай башҡарма комитеты әленән-әле иҫтәренә төшөрөп, ниндәйҙер кимәлдә талап итеп тә маташыр... Сөнки әле Башҡортостан бар. Әгәр һәр кем халҡыбыҙ яҙмышына ғына түгел, хатта үҙ ғаиләһе, үҙ нәҫеле дауамына ла

битараф ҡалһа, халҡыбыҙ һаны кәмегәндән-кәмей барһа, беҙҙең мәнфәғәттәребеҙҙе ҡурсаларлыҡ дәүләтселегебеҙҙең дә хәүеф алдында тороуын һәр беребеҙ аңлаһаҡ ине. Әле яңыраҡ ҡына халыҡ иҫәбен алған саҡта милләт булып иҫәпләнгән бик күп халыҡтарҙың юғалыуы асыҡланды, шул иҫәптән, мишәрҙәр үҙҙәре лә юҡ, уларҙы ҡурсаларлыҡ дәүләтселеге лә юҡ. Ә өлкәгә әйләндеңме – һин унда эшсе көс: профессормы, ауыл эшсәнеме – хеҙмәтләндереүсе халыҡ вәкиле булып ҡалаһың һәм шул кимәлдә генә кәрәкһең. Һинең ҡулдарың бар иткән матди байлыҡ үҙеңә рухи байлыҡ сығанағы ла булып хеҙмәт итмәй икән, тимәк, һин башҡалар өсөн рухи байлыҡ булдыраһың. Ә был – рухи ҡоллоҡ.

Башҡортостандан ситтә йәшәгән милләтәштәрҙең әсенеп-әсенеп сығыш яһағандарын тыңлаған саҡта, һайлау сәйәсәте ваҡытындағы бер ваҡиға иҫкә төштө. Әйтеп үтеүемсә, Ейәнсурала йәшәгән саҡта, мине Өфөгә бер төркөм башҡорт егеттәре саҡырып алды ла, башҡорт районынан башҡорт депутаты һайларға кәрәк, юғиһә, парламентта башҡорт егеттәре бик аҙ буласаҡ, Ейәнсура кеүек башҡорттар күпселек тәшкил иткән райондарҙан да башҡорт егетен үткәрмәһәк, башҡорттар аҙсылыҡ тәшкил иткән башҡа райондарға ниндәй ышаныс, тинеләр. Миңә билдәле хәл. "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгендә эшләгән саҡта, үҙебеҙ янып йөрөгән проблема.

Ейәнсура районы буйынса депутатлыҡҡа дәғүә итеүсе күренекле ғалим-тарихсы, халыҡ араһында "икенсе Зәки Вәлиди" тип йөрөтөлгән Марат Ҡолшәриповтың ышаныслыһы булдым. Район етәкселеге аппарат кешеһен үткәрмәксе. Шуның өсөн ҡаршылыҡ ҙур булды. Район буйлап йөрөгән саҡта, бер нисә машина алмаштырырға тура килде. Йә бензинға тоҙ һалдылар, йә тәгәрмәсен юҡҡа сығарып ултырттылар, йә булмаһа, водителен ҡурҡытып ҡайтара торҙолар. Беҙгә ҡаршы яҙылған мәҡәләләр, беҙҙе, бигерәк тә мине башҡорт кешеһенең ышаныслыһы булғаным өсөн, милләтселектә ғәйепләүҙәр... Барыһы ла етәкселектә ултырған вазифалы, әммә йөрәктәрендә бер генә лә ғәм тойғоһо булмаған башҡорт ирҙәренең күрһәтмәһе буйынса эшләнелде. Ә халыҡ Ҡолшәриповты һайлау яғында булды. Төрлө райондарҙан ғәмле башҡорт егеттәре үҙ ярҙамдарын тәҡдим итеп шылтыратып торҙолар. Был аңлашыла ине: парламентҡа башҡорттарҙан вәкилдәр күберәк булыуына, бигерәк тә "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе, республикабыҙ суверенлыҡ яулаған саҡта иҫ китмәле тос өлөш индереүсе, милләт ҡото һаҡлаусыларҙың береһе Ҡолшәриповтың үтеү-үтмәүенә бер кем дә битараф түгел ине. Бер машина юҡҡа сығарылыуға икенсеһе әҙер булды. Өфөнән дә егеттәр килеп етте, күрше Күгәр-

сен районынан да, хатта Салауат районынан да ярҙам тәҡдим итеп шылтыраттылар. (*Әйтергә кәрәк, бөгөнгө үҙгәрештәр, яңы президент килгәс булған алмаштырыуҙар, тыңкәрелештәр кемдең хаҡлы булыуын асыҡлағандыр*).

Баймаҡ районынан килгән машина менән юлға сыҡтыҡ. Халыҡ менән осрашыуҙан төндә ҡайтып киләбеҙ. Арығанбыҙ. Юлда йоҡомһорап киткәнмен. Күҙҙе асып ебәрһәм, бик оҙон күперҙе сығып барабыҙ. "Ҡалай матур күпер һалғандар. Һайлау алдынан ғына өлгөрҙөләрме икән ни? Күргәнем юҡ ине", — тип уйланым да тағы күҙҙе йомдом. Бер ауылға килеп еттек. Халыҡ һырып алды. Осрашыу үткәрегеҙ, тип нығыша башланылар. Аптырайбыҙ. Халыҡ осрашыуға берҙәм килһә лә клуб бикле йә электр уты һүнек, йә мөдир юғала торғайны. Әле клуб асыҡ, баянист бар, гармун биклəнмəгəн, клуб стенаһына обой һымаҡ итеп альтернатив кандидатураның һүрәттәре йәбештерелмәгән, беҙҙең машинаға етә яҙып "ҡарауылсы" машина килмәй, беҙҙең ҡайһы ауылға барырҙы белеп ҡалғас та, колхоз идараһына инә һалып телефондан шылтыратыусы ерән башлы шофер ҙа күренмәй. Хакимиәт башлығының ҡуштан урынбаҫары ла юҡ. Ул йөрөй торғайны, беҙ тәҡдим иткән кандидат һеҙгә юл һаласаҡ, мәктәп төҙөйәсәк, әллә нисә каналдан күрһәтерлек телебашня төҙөйәсәк, тип. Был ни хәл? Әллә төн булғанға арып ҡайтып киттеләрме икән? Улай тиһәң, төн урталарында үткәрелгән йыйылыштарға ла битараф ҡалмай торғайнылар. Беҙ тыныс ҡына сығыш яһап, бөтөн төҙөлөш эштәрен финанслау депутаттан тормағанлығын, ә дәүләт программаһы буйынса барғанлығын, депутаттарҙың ил йүнәлеше, республиканың үҫеш йүнәлеше буйынса закон ҡабул итеүҙә ҡатнашҡанлығын, дөйөм бюджеттың бер кеҫәһенән икенсе кеҫәһенә фәкәт депутат теләге буйынса ғына аҡса күсереп булмағанлығын аңлатабыҙ. Халыҡ аңлай, әммә район хакимиәте шул тиклем ҡурҡыуға һалған уларҙы – ни эшләргә белмәй. Беҙ әйткән кандидатҡа тауыш бирмәһәгеҙ, мәктәп төҙөмәйбеҙ, газ үткәрмәйбеҙ, сабынлыҡ бүлмәйбеҙ, хатта бер күнәк мал аҙығы ла ала алмаясаҡһығыҙ, тип янайҙар. Ошондай телмәрҙәр менән беҙҙең үксәгә баҫҡандай йөрөп яттылар. Клубтарҙы биклəнеләр. Әле иһә бер ниндәй ҡаршылыҡ юҡ. Әкиәт йәки төш һымаҡ. Клубҡа индек. Беҙ килгәнгә ҡыуанышып тораларҙар. Иң баштан уҡ йырсы Мәғфирә Ғәлиеваның йырлауын үтенделəр. Ул бер нисә йыр йырлағас, Диас Йәнтүрин башҡорт халҡының яҙмышы тураһында сығыш яһаны. Ихлас ҡаршыланылар. Оҙаҡ-оҙаҡ ҡул саптылар. Мин сығып һөйләнем. Минең сығышым туранан-тура һайлауҙарға һәм депутатлыҡҡа кандидат Ҡолшәриповтың һайлау алды прог-

раммаһына арналды. Сығышымды, ғәҙәттәгесә, беҙ тәкдим иткән кандидатура өсөн тауыш биреүҙәрен теләп, Шәйехзада Бабичтың шифыры менән тамамланым. Үҙем залға күҙ ташлайым. Дүрт мөйөштә дүрт кеше ашыға-ашыға беҙҙең сығыштарҙы яҙып ултыра торғайны – ундайҙар ҙа күренмәй. Мәғфирә Ғәлиева менән һөйләшәбеҙ – был яҡҡа боролғанды һиҙмәгәндәр ахыры, тибеҙ. Ниһайәт, беҙҙең сығыштарҙан һуң бер кеше ҡул күтәрҙе. Әммә ни өсөндөр уның ҡулында ҡағыҙ юҡ. Башҡа ерҙәрҙә осрашыу ваҡытында беренсе булып сығыш яһаусының ҡулында әҙер телмәр була һәм унда ошо һүҙҙәр яҙыла торғайны:

— Хөрмәтле, ҡәҙерле райондаштар! Ҡатын-ҡыҙҙы усаҡ һаҡлаусы, тиҙәр. Әгәр ул ябай кирбес усаҡ түгел, ә газ янып торған усаҡты һаҡлаусы булһа, тағы ла күңеллерәк булыр ине. Утын алып инмәҫкә, көл түкмәҫкә, өйҙә көл борҡотмаҫҡа. Әйҙәгеҙ, райондаштар, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы бәхетле итәйек, беҙгә газ килтереүсе кеше өсөн тауыш бирәйек. Фәҡәт ул кеше генә беҙҙе газлы итәсәк, фәҡәт ул ғына беҙҙе юллы итәсәк, фәҡәт ул ғына беҙҙе мәктәпле һәм телевидение өсөн бейек вышкалы итәсәк. Беҙгә Алла тарафынан мәрхәмәтлек күрһәтелеп, был кешене депутат итеп һайларға мөмкинлек бирелгән икән, киләсәгебеҙ бәхете өсөн тик уны ғына һайлайыҡ. Алмашҡа кейергә салбары ла булмаған ғалимдар, яҙыусылар беҙҙең район өсөн ни эшләй ала? Беҙгә ни бирһен улар? Уларҙың ҡулында ҡәләм менән ҡағыҙҙан башҡа бер ни ҙә юҡ бит. Ҡулдарында байлыҡ булған кешене һайларға кәрәк!

Ә бындағы сығыш яһаусы телмәрен улай тип башламаны. Өлкән генә ағай ине ул:

— Беҙ Марат Мәхмүт улын бик яҡшы беләбеҙ. Халыҡ тип, уның киләсәге тип, янғанын ишетеп торабыҙ. Уны беҙ, бөтә ауылыбыҙ менән бик ихлас һайлар инек депутатлыҡҡа. Әммә ауылыбыҙ, бик боронғо башҡорт ауылы булһа ла, Ырымбур өлкәһенә инә. (*Мәғфирә Ғәлиева менән бер-беребеҙгә ҡараштыҡ та, иларға ла, көлөргә лә белмәйбеҙ*). Хөрмәтле туғандар! Беҙгә килеп үҙ телебеҙҙә телмәр һөйләп, Мәғфирәне йырлатып китеүегеҙгә ҙур рәхмәт. Беҙ насар йәшәмәйбеҙ. Газыбыҙ бар, юлдар һәйбәт. Ә бына рухи яҡтан ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Күңелдәребеҙ китек беҙҙең, ярты кеше кеүек тоябыҙ үҙебеҙҙе. Үҙ егеттәребеҙҙе күберәк һайлағыҙ парламентҡа, Башҡортостандың дәүләтселеген яҡлап һүҙ әйтерлек кешеләр үтһен депутатлыҡҡа. Башҡортостан кешеләренә шундай сәләм әйтегеҙ. Тағы бер нәмәне аңлаһын улар, дәүләт программаһында ҡаралмай икән, депутат белдеге менән генә бер кем дә арҡырыны буй ҙа һалмаясаҡ. Рәхимовты һаҡлағыҙ. Уны һаҡлау өсөн йөрәкле егеттәр депутат

булырға тейеш. Иҡтисад мәсьәләһен айырым кеше хәл итмәй бит. Рәхимов эшләтә барыһын да. Нисә быуаттар элек барлыҡҡа килгән һәм иң ауыр заманда рҙа атай-олатайҙарыбыҙ ҡурсалай килгән дәүләтселегебеҙҙе, милләтебеҙҙе юғалтыу бер кемде лә әсендермәçме икән? Шулай тип һораулы сәләм әйтегеҙ милләттәштәргә. Милләтһеҙ ҡалыу – йөрәкгәге ҡотто юғалтыу бит. Шуны аңлаһындар, — тип тамамланы сығышын бил ир аçылы.

Аҙаҡ белеүемсә, хаҡлы ялға сыҡҡан уҡытыусы икән сығыш яһаусы ағай. Уның сығышы мине уйға һалды. Аҙаша-аҙаша күрше өлкәнән ҡайтып еткәнсе таң атҡайны. Ошо ваҡыт эсендә күпме уйҙар кисерелде. Юлдан яҙлыҡҡанбыҙ – юл таптыҡ. Ә сәйәсәттә аҙашып ҡалһаҡ, ни эшләрбеҙ? Кемдер власҡа, кемдер абруйға, кемдер матди байлыҡҡа ынтылып, депутатлыҡҡа дәғүә итә. Ә кемдер тарих һабағынан аҡыл алып, халҡыбыҙҙы ниндәйерәк юлдан алып барырға кәрәклеген аңлап, ил етәкселәренә тел кәңәше бирергә ынтыла...

Ошондай мәсьәләләһе яңылышыуҙар арҡаһында йөҙ йыл эсендә йөҙ меңгә генә артманыҡмы икән? Ошондай яңылышыуҙар арҡаһында республикабыҙҙың эс яғынан да, тыш яғынан да кимермәйҙәрме икән?

Ә беҙҙең ҡайһы берҙәребеҙ алдыбыҙға бәләкәй генә маҡсат ҡуйған булып, уға ирешә алмаһаң, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп, ихтыяр көсөн юғалтып, башты йә эскелеккә, йә миңрәүлеккә һалып, балаларыбыҙҙы үҙ милләтебеҙҙән биҙҙереп, заманында өсәр ғаилә баҡҡан башҡорт ирҙәренең нәçеле булған бөгөнгө егеттәребеҙ бер ҡатын да ала алмай, буйҙаҡ көйө ҡартайып йөрөү Птолемей һүрәтләгән башҡорттарға тап киләме? Башҡортлоҡмо? Бер-ике бөртөк баланды ла милләтенән яҙҙырыу йәки итәк тултырып бала табып та береһенә генә лә башҡорт ғаиләһе ҡорорлоҡ тойғо һалмау башҡортлоҡмо? Ундайҙар мин башҡорт тип әйтеүҙән оялырға һәм милләт исеменә тап төшөрөүҙән тартынырға тейеш.

Ҡотһоҙ ҡалдырыу юғарынан да, "эстән" дә барҙы. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында "Тарих һабаҡтары. Иçән ҡалыу һәм хеҙмәттәшлек тәжрибәһе. Демографик мәсьәләләр" секцияһында РФА ағза-корреспонденты, академик, тарих фәндәре докторы, профессор Р. Ғ. Кузеевтың докладынан бер генә өҙөктө алған осраҡта ла беҙ "юғары"нан ниндәй сәйәсәт алып барғанлығын төшөнөрбөҙ.

"...Революцияға тиклемге һәм XX быуаттағы историография Башҡортостан һәм башҡорттар үтә идеологиялаштырылған. Айырым осраҡтарҙан башҡа, XIX быуаттағы ватан тарихы фәне халыҡтар тарихын, шул иçәптән башҡорттарыҡын да, Рәсәй цен-

тризмы күҙлегенән һәм колониаль идеологиянан сығып ҡараған. Ул идеологияға һәр саҡ рус мәҙәниәтенең, христианлыҡтың өҫтөнлөгөн, "инородец" тип аталған башҡа халыҡтарҙың, шул иҫәптән башҡорттарҙың да, "түбән мәҙәниәтле" икәнен һыҙыҡ өҫтөнә алып ҡарау характерлы булған. "Ҡырағай башҡорттар", "башҡорт болалары, бунттары", "ул халыҡтың бөтөүгә дусар ителгән булыуы" кеүек тезистар шунан таралған да инде.

XIX быуат историографияһындағы күп ҡараштар XX быуатҡа ла үҙгәрешһеҙ күсә. Әммә совет тарихи фәнендә ул ҡараштар тоталитар дәүләт идеологияһына тап килгән яңыса яңғыраш алды. Башҡорттар Рәсәй дәүләтенә "үҙ ирке менән ҡушылған" тигән ҡарашты үтә ҡабартып күрһәтеү, башҡорт ихтилалдарын реакцион хәрәкәт тип раҫлау, революция, граждандар һуғышы осорондағы ваҡиғаларҙы боҙоп аңлатыу һәм башҡалар – барыһы ла шул тоталитар идеологиянан башланды.

Һөҙөмтәлә ни килеп сыҡты?

Ун туғызынсы быуат аҙағында башҡорттар бер миллион өс йөҙ мең кеше булһа, егерме быуат аҙағында бер миллион дүрт йөҙ мең иҫәпләнә. Сағыштырып ҡарайыҡ. Ошо ваҡыт эсендә элекке СССР территорияһында рустар 55 миллиондан 145 миллионға етә, украиндар 22 миллиондан — 44 миллион, ҡаҙаҡтар 4 миллиондан — 8 миллион, татарҙар 3,8 миллиондан 6,6 миллионға етә."

Совет власының етмеш йылы эсендә беҙ үҙ республикабыҙҙа туҡтауһыҙ кәмейбеҙ.

Милләтебеҙ һаны кәмеүендә, әлбиттә, төп сәбәпсеһе – беҙ үҙебеҙ. Һинең өйөңдә башҡортса һөйләшкән, башҡортлоғон юғалтмаған бала үҫә икән – уны бер кем дә тыймай. Һин үҙ ейәнеңдең башҡорт булыуын теләйһең һәм балаңа шул бурысты маҡсат итеп ҡуяһың икән – бер кем дә ҡаршы тормай, милләт-селектә ғәйепләмәй һәм эҙәрләмәй.

Байтаҡ ғүмер йәшәлде. Ошо ваҡыт арауығында әллә күпме китап уҡылды, байтаҡ кешеләрҙең тормоштары күҙ алдынан үтте. Бөйөк аҡыл эйәләренең, донъяға танылған мәшһүр педагогтарҙың, исемдәре мәңгелеккә кешелек донъяһы тарихына яҙылған классик яҙыусыларҙың халыҡ, милләт һәм туған тел тураһындағы фекерҙәре менән танышҡан һайын, әсәйем һәм уның кеүек ябай ғына кешеләрҙең ошо юҫыҡтағы ҡараштарының ауаздаш булыуына аптырайым. Джек Лондон, Лев Толстой, Ф. Достоевский, А. Пушкин, Иоахим Дю Белле, К. Ушинский һәм башҡа, һәм башҡа бөйөк әһелдәр үҙ телдәренең ысын патриоттары булған, үҙ милләтен сикһеҙ яратҡан һәм тел белмәү арҡаһында халыҡтан, уның тради-

цияларынан айырылыуҙы оло фажиғәгә һанаған. Вильям Шекспир "Король Лир" әҫәрендә былай тигән:

...Природа, что пренебрегает
корнем,
Сама себя в границах уж
не сдержит.
Ствола живящего, тот лишь
как хворост
Годится для сожженья.

Был яҡты донъяға тыуыуҙың һәм йәшәүҙең иң беренсе маҡсаты һәм иң ҙур бәхете – үҙ рухыңды дауам итеүсе балалар ҡалдырыуҙа икәнлеген үҙебеҙ аңларға тейешбеҙ. Ошо була ла инде йәшәү ҡото.

Беҙгә бөгөнгө йәшәү рәүешенең ниндәй үҙгәрештәр кисереүен һәм этнопсихологияға ниндәй йоғонто яһағанлығын асыҡлау, төплө анализ эшләү бик мөһим, сөнки был үҙгәрештәрҙең һәм йоғонтоноң милләт булмышына тәьҫире ҙур. Милләт тамырына балта сабыусы һәр сәбәптең асылын аңларға кәрәк.

Беҙҙең быуын вәкилдәре үҙ бурысын хәленән килгән тиклем үтәне. Беҙ артабанғыһы хаҡында уйланырға тейешбеҙ. Киләсәк быуынға таяныс булырҙай туғанлыҡ, дуҫлыҡ, халыҡ тойғоһо ҡалдырҙыҡмы? Рухи аҙыҡ алыр традицияларыбыҙҙы, телебеҙҙе өйрәтекме? Халыҡты берләштереп торорлоҡ уртаҡ рухи символдарыбыҙҙы юғалтманыҡмы? Халҡыбыҙҙы милләт итеп тотҡан һәм төп тәрбиә йүнәлешенә һалынған, әхлаҡи норма нигеҙен тәшкил иткән рухи байлыҡҡа ынтылыш тәрбиәләй алдыҡмы?

Донъя тарихынан матди байлыҡтың күҙ асып йомған арала юҡҡа сыға торған нәмә икәнлеген күрәбеҙ. Һуңғы йылдарҙағы фажиғәле ваҡиғалар аңы булған кешегә төшөндөрөрлөк дәлил. Миҫал эҙләп тарих төпкөлдәрен аҡтарырға ла түгел хатта. Ошондай мәлдә үҙтәрбиә менән шөғөлләнгән, тормоштоң һәр төрлө осраҡтарына ла үҙен әҙерләгән, ҙур маҡсаттар менән йәшәргә ынтылған, фәҡәт ихтыяр көсө ныҡ булғандар ғына еңеп сыға ала. Ә ихтыяр көсө ныҡ булғандар, шул уҡ ваҡытта халҡының киләсәген алдан күреүселәр, дөрөҫ йүнәлеш биреүселәр — милләт ҡотон һаҡлаусылар йәки милләт ҡотон кире ҡайтарыусылар улар. Ундай шәхестәрҙе беҙ ҙә һаҡларға тейешбеҙ. Шундай шәхестәрен һаҡлай белгән милләт йәшәй, ә халҡының ҡото булған Шәхестәренең ҡәҙерен белмәүсе, бәҫен төшөрөүсе, юҡҡа сығарыусы халыҡ үҙе лә

юҡҡа сыға. Шундай бер хәҡиҡәт бар: **Шәхес күтәрелә башлаһа, бөтөн булдыҡһыҙҙар берләшеп, уға ҡаршы күтәрелә.** Тимәк, милләт ҡотона ҡаршы күтәреләләр, уны юҡҡа сығарырға тырышалар. Ошо ҡот оскос хәл килеп сыҡмаһын өсөн, һәр беребеҙгә АРҒЫМАҠЛЫ булырға кәрәк.

АРҒЫМАҠЛЫ, тимәк,
Аңлы,
Рухлы,
Ғәмле,
Ырыҫлы,
Моңло,
Аҡыллы,
Ҡотло

булһын, күңел донъяһы балҡып торһон, үҙ ҡәҙерен дә, милләт ҡотон йөрөтөүсе Шәхестәренең дә ҡәҙерен белһен, халыҡ бәҫен төшөрмәһен, халҡыбыҙ ғүмере ҡояш ғүмере менән тиң булһын, тигән теләк менән ошо яҙмаларымды тамамлайым.



ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Баш һүҙ урынына 5
АҢ 9
РУХ 103
ҒӘМ 193
ЫРЫҪ 247
МОҢ 280
АҠЫЛ 321
ҠОТ 362

В соответствии с Федеральным законом
от 29 декабря 2010 г. №436-ФЗ 16+

Литературно-художественное издание

БУРАКАЕВА Марьям Сабирьяновна

АРГАМАК

(*на башкирском языке*)

Мөхәррир Мәрйәм Бураҡаева
Рәссамы һәм биҙәлеш мөхәррире Таңсулпан Бураҡаева
Техник мөхәррире Азат Көмөшбаев
Корректорҙары Мәрйәм Бураҡаева, Азат Көмөшбаев

Технический редактор
Барышева Е. Ю.

Подписано в печать 10.04.2015 г. Формат 62 x 92 $^{1}/_{16}$. Печать офсетная.
Гарнитура Timbashk. Бумага для высокохудожественных изданий, пл. 65 г/м^2.
Усл. п. л. — 26. Заказ № 856. Тираж 1500 экз.

МАГНИТОГОРСКИЙ ДОМ ПЕЧАТИ

РФ, 455023, Челябинская область, г. Магнитогорск, пр. Карла Маркса, 69.
Тел. 8 (3519) 26-14-95. Факс 8 (3519) 26-15-01.
E-mail: po@mdp.mgn.ru • www.print.mgn.ru

ПРОСЛУШАНО
07 НОЯ 2016
Подпись